# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫ

## ЭПОС

82.3(Башҡ)
Б 29 ХИ

*РЕДАКЦИЯ КОЛЛЕГИЯҺЫ:*
*ЛЕВ БАРАГ, САЛАУАТ ГАЛИН, НУР ЗАРИПОВ, КИРӘЙ МӘРГӘН,*
*ӘХНӘФ ХАРИСОВ, ҒАЙСА ХӨСӘЙЕНОВ.*

Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы
Н. Т. ЗАРИПОВ

Яуаплы редакторы
Ғ. Б. ХӨСӘЙЕНОВ

*Редакционная коллегия:*
*ЛЕВ БАРАГ, САЛАВАТ ГАЛИН, НУР ЗАРИПОВ,*
*КИРЕЙ МЭРГЭН, АХНАФ ХАРИСОВ, ГАЙСА ХУСАИНОВ.*

Составитель, автор вступительной статьи и комментариев
Н. Т. ЗАРИПОВ.

Ответственный редактор
Г. Б. ХУСАИНОВ

Б 29ХИ Башҡорт халыҡ ижады. Эпос, өсөнсө китап. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. — 344 бит.

Б $\frac{70700-480}{М\ 121(03)-82}$ 117—82 82.3(Башк)

## Төҙөүсенән

Башҡорт халыҡ эпосының был өсөнсө китабына башлыса феодализм осорон сағылдырған ҡобайырҙар һәм хикәйәттәр тупланды. Әҫәрҙәр, идея-эстетик йөкмәтке һәм форма үҙенсәлектәренә ҡарап, айырым бүлектәргә төркөмләнде. Беренсе бүлектә тулы сюжетлы һәм, нигеҙҙә, эпик йөкмәткеле ҡобайырҙар һәм хикәйәттәр урынлаштырылды. Айырым батырҙарға бағышланған «сюжетһеҙ» (йәки сюжеты тулы көйгә һаҡланмаған) ҡобайырҙар ҙа ошо бүлектә мөмкин тиклем хронологик тәртиптә бирелде. Икенсе бүлекте — әйтештәр, өсөнсө бүлекте Тыуған ил тураһындағы ҡобайырҙар, дидактик ҡобайырҙар (әйтемдәр) тәшкил итә. Дүртенсе бүлеккә яҙма әҙәбиәттән китаптар аша ингән сюжеттар — телдә йөрөлгән ҡиссалар индерелде.

Һәр әҫәрҙең варианттары иҫәпкә алынып, әһәмиәтле тип табылғаны китапҡа индерелде; ҡалғандары хаҡында аңлатмалар бүлегендә әйтелде. Текстар хәҙерге орфография принциптәрендә эшләнде, диалекттәргә бәйләнешле фонетик күп төрлөлөк бөтөрөлөп, лексик һәм стилистик үҙенсәлектәр тулы көйгә һаҡланды.

Текстарҙа *ман*, *мән* формаһында йыш осраған «менән» бәйләүесе, ҡобайыр үлсәменә ярашлы рәүештә, ике төрлө алынды: ижек артҡанда, ҡулъяҙмалағыса, диалекталь формаһында ҡалдырылды; ижек етмәгәндә, әҙәби тел нормаһында *менән* тип, тулы әйтелешендә бирелде. Күпмелер үҙгәртеү (редакторлау) яһалған хәлдә, аңлатмалар бүлегендә тейешле иҫкәрмәләр бирелде. Уларға ҡарап, текстологтар теге йәки был әҫәрҙең тел үҙенсәлеген күҙ алдына баҫтырып, кәрәклеһен үҙ эшендә файҙалана аласаҡ. Хәҙерге уҡыусыға аңлашылмаған һүҙҙәр текста йондоҙ менән тамғаланып, мәғәнәләре китаптың аҙағында, алфавит тәртибендә төҙөлгән һүҙлектә, асылды.

# БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЭПОСЫНА БЕР ҠАРАШ

## 1. ЭПИК ФОРМА ҺӘМ ТЕРМИНДӘР МӘСЬӘЛӘҺЕ

Башҡорт халыҡ ижадында эпос жанрын ныҡлап өйрәнеү асылда беҙҙең быуаттың 50-се йылдарында ғына башланды. Был тәңгәлдә өс томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығының 1-се томында (Өфө, 1954) Ә. И. Харисовтың «Башҡорт халыҡ поэзияһы» тигән инеш мәҡәләһе һәм «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуаттар» тигән китабы, Кирәй Мәргәндең «Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары» тигән махсус хеҙмәте ҙур баһаға эйә. Әлбиттә, был китаптарҙа башҡорт халыҡ эпосына ҡараған барлыҡ әҫәрҙәр һәр яҡтан ентекләп өйрәнелгән, бәхәсле мәсьәләләр хәл ителеп бөткән тип булмай.

Һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә ошо томды әҙерләү процесендә, күп бәхәс тыуҙырған проблема — эпосҡа ҡараған әҫәрҙәрҙе төркөмләү, һәр төркөмгә үҙ исемен табыу мәсьәләһе. Был, бөтәһенән элек, шуға бәйләнгән. Әҙәбиәт теорияһында төр («вид») төшөнсәһендә ҡулланылған *эпос* атамаһы фольклористика фәнендә күпселектә *жанр* мәғәнәһендә йөрөй. Башҡа халыҡтарҙа эпос, айырым жанр булараҡ, бер генә формала йәшәй һәм уның шул милли ерлектә тыуған үҙ исеме бар: рустарҙа *былина*, украиндарҙа *дума*, Урта Азия халыҡтарында *дастан*, бүрәттәрҙә *улигер*, якуттарҙа *олонхо*, карел һәм финдәрҙә *руно*, ҡаҙаҡтарҙа *жыр*... Француз, немец һәм көнбайыш славян халыҡтарында шулай уҡ *йыр* («песнь») тип атала: «Роланд тураһында йыр», «Нибелунгтар тураһында йыр», «Юнактар йыры» һ. б. Быларға ҡарата эпос халыҡ-ара термин ролендә ҡулланыла һәм башлыса героик йөкмәткеле шиғри әҫәрҙәрҙе (яҙма әҙәбиәт термине менән әйткәндә, поэмаларҙы) аңлата. Был жанр формаһын, әкиәт эпосынан айы-

рып, конкрет атарға кәрәк булғанда, *героик эпос* йәки *эпическое сказание* (эпик хикәйәт) тигән исем менән алмаштырыла.

Башҡорт халыҡ эпосына килһәк, ул, Кирәй Мәргәндең дөрөҫ билдәләүенсә, «сағыштырмаса күп төрлөлөк һәм күп сюжетлелек менән айырыла». Бында башҡа халыҡтарҙағы һымаҡ «сюжет берҙәмлеге лә, форма берлеге лә юҡ»[1]. Күп төрлөлөк бигерәк тә был томда күҙгә ташлана. Бында, тәүге ике китаптағы һымаҡ, үҙҙәренә башҡа анығ сюжетҡа ҡоролған эпик әҫәрҙәр ҙә, халыҡтың тыуған илгә мөнәсәбәтен, уй-тойғоларын аңлатҡан, асылда, лирик йөкмәткеле шиғри формалар ҙа, әхлаҡ нормаларын алға ҡуйған фәлсәфәүи-дидактик йөкмәткеле әйтемдәр ҙә урын ала. Өҫтәүенә, әйтештәр килеп инә, әммә шуларҙың береһенә ҡарата ла халыҡтың йәнле һөйләү телендә үҙ исеме тотороҡло һаҡланмаған, ғилми әҙәбиәттә лә уларҙың идея-эстетик тәбиғәте һәм художество үҙенсәлектәре етерлек асыҡланмаған, бер төрлө генә милли атамалары табылмаған.

Ә. И. Харисов хеҙмәттәрендә, мәҫәлән, эпик әҫәрҙәр ике төркөмгә айырылып, «ҡобайырҙар» һәм «эпик поэмалар» исемендә алына. Ҡобайырҙар төркөмөн «Ай Уралым, Уралым», «Бөйек тауҙың үлгәне», «Салауат батыр», «Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем», «Яҡшы аҙамат менән кире аҙамат» ише шиғри әҫәрҙәр һәм әйтештәр тәшкил итһә, эпик поэмаларға сюжетле әҫәрҙәр — «Аҡбуҙат», «Күҫәк бей», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» — индерелә [2]. Авторҙың «Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы» тигән китабының русса баҫмаһында, икенсе төркөм «героик поэмалар һәм хикәйәттәр» («героические поэмы и сказания») исемендә алынып, «Урал батыр», «Заятүләк менән Һыуһылыу», «Алпамыша менән Барсынһылыу», «Зөһрә менән Алдар» әҫәрҙәрен индереү иҫәбенә шаҡтай киңәйтелһә лә, бүленеш асылда элеккесә ҡала [3].

Башҡорт халҡының үҙенең ижад ерлегендә тыуған эпик әҫәрҙәрҙе Ә. Н. Кирәев (Кирәй Мәргән) шулай уҡ икегә бүлә: ҡобайырҙар бүлегенә тыуған ил һәм айырым батырҙар тураһында сюжете тулы көйгә һаҡланмаған шиғри әҫәрҙәрҙе индерһә, сюжете тулы һаҡланып, шиғыр аралаш сәсмә телдә һөйләнгәндәрен «иртәктәр» тип атай һәм бөтәһен бергә тематик бүленештә тикшерә [4].

Фольклор әҫәрҙәрен фәнни нигеҙҙә күп томлыҡ йыйынтыҡта баҫтырып сығарыу маҡсат итеп ҡуйылғас, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында фольклорсыларҙың әҙәбиәтселәр һәм телселәр менән берлектә махсус кәңәшмәһе уҙғарылып, башҡорт эпик әҫәрҙәрен йәшәү формалары буйынса ике төркөмгә айырыу кәрәкле табылды. Шиғырҙан торған йәки шиғыр өҫтөнлөк алған әҫәрҙәр (мәҫәлән,

---

[1] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961, 93-сө бит.

[2] Әхнәф Харисов. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы. XVIII—XIX быуаттар. Өфө, 1965, 72—110-сы биттәр.

[3] А. И. Харисов. Литературное наследие башкирского народа (XVIII—XIX века). Уфа, 1973, стр. 67—109.

[4] Кирәй Мәргән. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. Өфө, 1961; русса баҫмаһы: А. Н. Киреев. Башкирский народный героический эпос. Уфа, 1970.

«Урал батыр») *ҡобайыр* тип, ә прозанан ғибарәт йәиһә сәсмә форма күпселек өлөшөн тәшкил иткәндәре (мәсәлән, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу») *хикәйәт* тип аталды. Шулай итеп, бығаса «Бейек тауҙың үлгәне», «Ай Уралым, Уралым» йәки «Аҡшам батыр», «Көбәк батыр», «Салауат батыр» кеүек сюжете аныҡ булмаған әҫәрҙәргә ҡарата ғына ҡулланылып килгән «ҡобайыр» термине «Урал батыр», «Аҡбуҙат» һымаҡ тулы сюжетле эпик әҫәрҙәргә лә күсерелде. Мәктәптәрҙә лә, юғары уҡыу йорттарында ла башҡорт халыҡ эпосы хәҙер, асылда, ошо бүленештә өйрәнелә. Тик шиғыр менән проза аралаш һөйләнгәндәренә ҡарата һаман ике исем — хикәйәт (мәктәп дәреслектәрендә) һәм иртәк (БДУ һәм Стәрлетамаҡ педагогия институтында) ҡулланыла.

Хикәйәттәр (иртәктәр) һөйләнеү формалары буйынса барыһы ла бер төрлө. Кәрәк икән, уларҙы тематик төркөмдәргә генә айырырға мөмкин, ә ҡобайырҙар улай түгел. Әйтәйек, «Ай Уралым, Уралым» тибындағы йәки «Яҡшы аҙамат менән кире аҙамат», «Ил тигәндең кеме юҡ» ишендәге әҫәрҙәрҙе беренсе китаптағы «Урал батыр» кеүек тулы эпик сюжетле әҫәрҙәр менән генә түгел, хатта был китаптағы «Баязит батыр», «Салауат батыр» һымаҡ сюжете тулы көйгә һаҡланмаған йәки үҙенә башҡа бер сюжетҡа ойошоп етә алмаған ҡобайырҙар менән дә йәнәш ҡуйып булмай. Уларҙың йөкмәткеһе лә, эске төҙөлөшө лә, тәғәйенләнеше лә башҡа. Шуға таянып, ҡобайырҙарҙың үҙенсәлекле формаларын айырыу, жанр исемдәрен асыҡлау кәрәклеге тыуа.

Эште атамаларҙың этимологияһын асыҡлауҙан башларға тура килә.

Билдәле булыуынса, *ҡобайыр* атамаһы ике һүҙҙән — *ҡоба* (яҡшы, дана, йәғни ҡабатланмай, берҙән-бер) һәм *йыр* һүҙҙәренән яһалған. Тимәк, *дан* (йәки *данлау*) *йыры* тигәнде аңлата. Ҡобайырҙың төп маҡсаты, эстетик тәғәйенләнеше — данлау, дан йырлау. Уның поэтик хосусиәте лә шул маҡсатҡа бәйләнгән.

Әммә бөтә ҡобайырҙарҙа ла данлау объекты бер түгел. Шуға ҡарап, уларҙы өс төркөмгә — батырҙар (мәшһүр шәхестәр) тураһындағы ҡобайырҙарға, тыуған ил тураһындағы ҡобайырҙарға һәм фәлсәфәүи-дидактик йөкмәткеле ҡобайырҙарға айырырға мөмкин. Әгәр ҡобайыр стилендә һөйләнгән әҫәрҙәрҙе йөкмәтке һәм форма үҙенсәлектәре яғынан байҡап сыҡһаҡ, уларҙың идея-эстетик айышы, эске төҙөлөшө, һүрәтләү алымдары һәм саралары буйынса ла бер-береһенән ныҡ айырылыуҙарын күрергә була. Шул үҙенсәлектәр нигеҙендә һәр төркөмдө үҙенә башҡа жанр формаһы тип билдәләргә мөмкинлек тыуа. Ул айырмалар ҡыҫҡаса түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала.

Батырҙар тураһындағы ҡобайырҙар билдәле бер сюжетҡа ҡорола, сюжет үҙәгендә герой тора, уның ил-халыҡ өсөн башҡарған ҙур эштәре, ҡаһарман характеры данлана. Яуызлыҡҡа ҡаршы көрәш — сюжет динамикаһын, ҡаһарманлыҡ эстетик айышын тәшкил итә. Художество тәбиғәте менән был инде *героик эпос* төшөнсәһенә тура килә. Шуға күрә был төркөмдө уның тематик исеме менән генә түгел, ә жанр тәбиғәтенә лә тап килгән исем

менән *эпик ҡобайырҙар* тип атарға мөмкин. «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Алпамыша» — шундай ҡобайырҙарҙың классик өлгөләре.

Шул уҡ принципҡа таянып, ҡобайырҙарҙың икенсе төркөмөн — *лирик ҡобайырҙар*, ә өсөнсөһөн *дидактик ҡобайырҙар* йәки, халыҡ телендә йөрөтөлгәнсә, *әйтемдәр* тип атарға була, сөнки тыуған ер күркәмлеген, ил берҙәмлеген данлаған ҡобайырҙарҙа, ғәҙәттә, фабула ла, герой характеренә бәйле сюжет тә юҡ. Күбеһенсә тыуған ергә, ил-халыҡ ихтыяждарына мөнәсәбәт һүрәтләнә, юғары граждандлыҡ тойғолары яҡтыртыла. Әҫәрҙең нигеҙендә йыш ҡына эпик башланғыс, уҙған тормошҡа бәйле тарихи легенда ятһа ла, йөкмәткелә, асылда, лирик мотивтәр — һоҡланыу, намыҫланыу, ғорурланыу хистәре өҫтөнлөк ала, һәм улар, ғәҙәттә, тыуған ерҙе изгеләштереү, илдең азатлығын һәм берҙәмлеген һаҡлау идеялары, батырлыҡ һәм ҡаһармандлыҡ идеалдары менән килеп тоташа.

Әйтемдәр иһә — халыҡтың социаль көрәш һәм тормош-көнкүреш тәжрибәһен, донъяға ҡараштарын, әхлаҡ принциптарын дөйөмләштергән, асылда, фәлсәфәүи-дидактик йөкмәткеле әҫәрҙәр. Икенсе төрлө әйткәндә, бында конкрет батыр түгел, туранан-тура тыуған ил дә түгел, ә билдәле ҡараштар, этик нормалар нигеҙендә кешенең кешелек сифаттары данлана, кире һыҙаттары яманлана.

Бындай төркөмләнеүҙең зарурлығы һүрәтләү алымдарының башҡалығында ла бик асыҡ күренә.

Теге йәки был эпик ҡобайыр нисек кенә төҙөк шиғри формала булмаһын, ул, асылда, «борон-борон заманда булған» хәл-ваҡиғаларҙы бәйнә-бәйнә теҙеп хикәйәләүҙән тора. Уны тотошо менән йәки айырым өлөштәрен ғәҙәти (сәсмә) телдә лә һөйләргә мөмкин. Шулай иткәндә лә әҫәрҙең идея-эстетик йөкмәткеһенә һис зыян килмәйәсәк. Героик эпоста сәсмә телдә хикәйәләүҙең урын алыуы, хатта «Урал батыр» кеүек шиғыр ҡалыбына ныҡ һуғылған ҡобайырҙың да икенсе осраҡта шау прозаик формала һөйләнеүе шуның менән аңлатыла ла инде.

«Ай Уралым, Уралым», «Уралып ятҡан Уралда» йәки башҡа берәй лирик ҡобайырҙы алһаҡ, быларын ғәҙәти телгә күсереп һөйләп булмай. Ҡобайырҙың идея-эстетик йөкмәткеһен боҙмайым, тиһәң, уларҙы үҙҙәренең шиғри стилендә ятлап ҡына һөйләргә мөмкин. Дидактик ҡобайырҙарға ҡарата ла шул уҡ әйтергә тура килә.

Икенсе мөһим айырма. Эпик ҡобайырҙа геройҙың характере уның эш-ҡылыҡтарын арттырып һөйләү нигеҙендә кәүҙәләндерелә. Шуның менән бында төп һүрәтләү сараһы — гипербола, ә лирик ҡобайырҙарҙа — троптар, йәғни объектты үҙенең тәбиғи биҙәктәре менән тасуирлау. Ҡыҫҡаһы, эпик ҡобайыр геройҙың батырлыҡтарын гипербола ярҙамында күпкә арттырып һөйләүҙән торһа, лирик ҡобайыр кеше күңелендә эстетик тойғо уятырлыҡ аҫыл буяуҙар менән тыуған илде нисек тә күркәмерәк итеп тасуирлауға ҡорола. Дидактик ҡобайыр иһә халыҡтың тормош-көнкүреш тәжрибәһен, ҡараштарын сағылдырған тапҡыр һүҙҙәрҙән, метафораға ҡоролған әйтемдәрҙән теҙелә. Шул яҡтан уларҙы афорис-

тик жанрҙарҙың бер төрө тип ҡарарға ла мөмкин. Ләкин, мәҡәл һәм башҡа тапҡыр һүҙҙәрҙән айырмалы булараҡ, улар күпселектә үҙаллы әҫәрҙәр булып йәшәй, башҡарыусы сәсәндәр ижадында билдәле тәрбиәүи маҡсатты күҙ уңында тотҡан дидактик репертуарҙы тәшкил итә; уңайлы шартына, аудитория составына ҡарап, йә бер цикл, йә айырым-айырым рәүештә һөйләнә.

Тыуған ил тураһындағы ҡобайыр баштан уҡ үҙаллы тематик форма, эпик поэзияның үҙенә башҡа бер жанры булып тыуғанмы-юҡмы —уныһын киләсәктәге тикшеренеүҙәр асыҡлар. Хәҙергә был хаҡта шуны ғына әйтергә мөмкин: башта нисек барлыҡҡа килеп, һуңынан ниндәй хәлдәрҙә (айырым рәүештәме, башҡа әҫәрҙәр составындамы) йәшәмәһендәр, лирик ҡобайырҙарҙа тыуған илгә һәм уның аҫыл ир-егеттәренә мөхәббәт тойғолары сағыла. Үҙаллы йөрөгән хәлдә лә, героик йөкмәткеле эпик сюжеттәр составында ла улар иҙеүсе хандарға, сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәш ораны, илең, халҡын яҡлап яуға күтәрелгән батырҙар анты булып яңғырай.

Хикәйәт (иртәк) формаһына килһәк, быныһы хаҡында шуны әйтергә мөмкин. Эпик ҡобайыр менән хикәйәт араһында ҡәтғи сик юҡ. Шулай ҙа уларҙың идея-эстетик йөкмәткеләрендә, сюжет ҡоролошо һәм һүрәтләү алымдарында ҡайһы бер үҙенсәлектәрҙе шәйләргә була.

Ғәрәп теленән ингән «хикәйәт» атамаһы һөйләп биреү, хикәйә итеү тигәнде аңлата. Уның үҙәгендә фабула тора, һүрәтләү, башлыса, сәсмә телдә һөйләү, әҙмә-әҙлекле хикәйәләү алымына ҡорола. Ләкин был ғына хикәйәтте эпик ҡобайырҙан айырыу өсөн етерлек нигеҙ була алмай, сөнки ҡайһы бер эпик сюжеттәр (мәҫәлән, «Урал батыр», «Алпамыша») бер осраҡта, башлыса, теҙмә формала, икенсе осраҡта тотош йә күпселек өлөшө сәсмә телдә һөйләнә. Ә күпселек сюжеттәрҙә шиғыр менән проза аралаш килә.

Эпик ҡобайыр, әйтеп үтелгәнсә, ил-халыҡ өсөн ғәҙәттән тыш ҡаһарманлыҡ күрһәткән батырға дан йырлай, ә хикәйәт теге йәки был геройҙың характеренә йә ҡайһы бер осраҡта, бигерәк тә һуңғыраҡ дәүерҙәргә ҡараған әҫәрҙәрҙә, тарихҡа бәйле ваҡиғаны иҫкә төшөрә, уны ғибрәт, фәһем алыр өсөн һөйләй. Ҡайһы берҙә уның хатта «конкрет датаһы» һәм «урыны» ла әйтелә. (Мәҫәлән, «Ҡарас менән Аҡша».) Бынан, әлбиттә, хикәйәт фабулаһы тарихи ысынбарлыҡты документаль дөрөҫлөгөндә сағылдыра икән, тип уйларға ярамай. «Булғанды» һөйләү, художестволы фантазия менән байыҡтырылып, күп осраҡта конкрет датаһын ғына түгел, ысынбарлыҡ деталдәрен дә юғалта, халыҡтың билдәле замандағы тормош-көнкүреш йолаларын, ғәҙәттәрен һәм ҡараштарын, ынтылыштарын һәм идеалдарын дөйөмләштереп сағылдырған художество әҫәренә әйләнә. Мәҫәлән, «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Зөһрә менән Алдар» сюжеттәрен боронғо иҫтәлектәрҙең, әле әйтелгәнсә, халыҡтың эстетик аңы аша үткәрелеүе, художество яғынан ныҡ эшкәртелеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән классик хикәйәттәр тип ҡарарға кәрәк.

Әммә фантастика элементтәре ни ҡәҙәр күп булмаһын, ваҡиға, ғәҙәттә, тарихи-этнографик йәки тормош-көнкүреш планында хикәйә ителә, хатта хыял тыуҙырған ситуациялар ҙа билдәле замандағы тарихи-этник һәм социаль шарттарға ишара яһай, шул замандағы халыҡтың тормошҡа мөнәсәбәтен, ҡараштарын сағылдыра. Беренсе китапта бирелгән классификацияла күпселек хикәйәттәрҙең «социаль-көнкүреш эпосы» тип билдәләнеүе, ҡаҙаҡ фольклористикаһында «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу» тибындағы әҫәрҙәрҙең «лиро-эпос» тип аталыуы әле әйтелгән һыҙаттарға бәйләнгән дә инде. Ошоға ярашлы рәүештә, геройҙар ҙа бында башҡасараҡ һүрәтләнә. Улар, ғәҙәттә, үҙҙәренең билдәле бер холҡо, социаль ҡылыҡтары йә, киңерәк әйткәндә, әүәлдән килгән йола һәм ғөрөф-ғәҙәттәрҙе ҡыуыуҙары йә, киреһенсә, шуға ҡаршы сығыуҙары, еңеп сыға алмаҫлыҡ социаль ҡаршылыҡтарға осрап, ғүмерҙәре ҡотолғоһоҙ рәүештә фажиғәле тамамланыуы менән үҙ иштәренән айырылып торалар. Ҡыҫҡаһы, фажиғәлелек күп осраҡта хикәйәт жанрының эстетик доминанты булып тора. Быны бигерәк тә «Аҡһаҡ ҡола», «Мамай хан хикәйәте», «Тарғын менән Ҡужаҡ», «Ек Мәргән» әҫәрҙәрендә асыҡ күрергә була. «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Зөһрә менән Алдар» эпосында ла, асылда, фажиғәле яҙмыштар һүрәтләнә. Шуға ла, күрәһең, йыш ҡына ғәҙәттән тыш көслө ихтыярлы, баһадир һынлы кәүҙәләндерелһәләр ҙә, геройҙарҙы идеаллаштырыу, күккә күтәреп маҡтау һәм данлау хикәйәт өсөн һис мотлаҡ түгел. Мәҫәлән, «Мамай хан хикәйәте»ндә Мамай хандың башҡа илдәрҙе баҫып алыу, талау кеүек «батырлыҡтары» маҡталмай ғына түгел, киреһенсә — шул яуызлыҡтары өсөн ҡаты ҡаһәрләнә; «Ек Мәргән» хикәйәтендә Туғыҙаҡ әбейҙең күршеләр малын яулап дан тотҡан ире һәм улдары аҙаҡ сиктә үҙҙәре лә дошман яуынан ҡырылалар. Барымта йолаһын ҡыуған Аҡша батыр ни тиклем генә ҡыйыу һәм ғәйрәтле күренмәһен, Ҡарас батырҙың уғынан үлеп ҡала («Ҡарас менән Аҡша»)...

Башҡорт халыҡ ижадында эпос жанры, әлбиттә, бында һаналған формалар менән генә сикләнмәй. Әйтештәр, бәйеттәр, тарихи йырҙар — шулай уҡ эпик жанрҙар. Быларҙан тыш яҙма сығанаҡтар аша иңгән «Йософ—Зөләйха», «Таһир—Зөһрә» һәм «Буҙйегет» кеүек үҙенсәлекле эпик сюжеттәр — ҡиссалар йәки ғибрәтле хикәйәттәр халыҡ телендә бөгөнгө көнгә саҡлы йәшәп ята.

Шулай итеп, эпик әҫәрҙәрҙе тематик яҡтан ғына түгел, ә жанр формаларының төрлөлөгө яғынан классификациялау башҡорт халыҡ эпосының байлығын, күп төрлө формала йәшәүен күрһәтә.

## 2. ЭПОСТЫҢ ТАРИХҠА МӨНӘСӘБӘТЕ

Теге йәки был эпик сюжеттең ҡасан барлыҡҡа килеүен, әлбиттә, оҙон кеңә әйтеп булмай, сөнки фольклор әҫәре — күп быуындарҙың ижад емеше. Унда төрлө заман ҡатламдары булырға, йәғни боронҡан килгән сюжетҡа һуңғыраҡ дәүер эпизодтары, яңы мотивтәр өҫтәлергә мөмкин. Ләкин нисек кенә булмаһын, йөкмәт-

килә һаҡланған төп тематик мотивтәргә һәм заман билдәләренә ҡарап, әҫәрҙең башлыса ҡайһы дәүергә ҡарауын, ҡасанғы тормошто сағылдырыуын белеп була. Шул билдәләргә таянғанда, был китапҡа ингән әҫәрҙәрҙең нигеҙҙә феодализмдең ике тарихи дәүеренә ҡарауын әйтергә мөмкин.

Беренсеһе — XIII быуат уртаһынан, йәғни илгә монголдар ябырылыуынан башлап XVI быуаттың уртаһына саҡлы булған дәүер. Был дәүерҙә сит ил баҫҡынсыларына, беренсе сиратта Алтын Урҙа дәүләтенә, унан һуң Нуғай, Ҡазан ханлыҡтарына ҡаршы көрәш төп тема булып тора («Мамай хан», «Тарғын менән Ҡужаҡ», «Ек Мәргән» һәм батырҙар тураһындағы ҡайһы бер ҡобайырҙар).

Икенсеһе — XVI быуат уртаһынан, йәғни башҡорттарҙың Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуңғы дәүер. Бынығында иһә үҙәк тема башҡорттарҙың башлыса «үҙ» феодалдарына һәм самодержавиенең социаль-милли иҙеүенә ҡаршы көрәш төҫөн ала. Октябрь революцияһына саҡлы дүрт быуатҡа һуҙылған был дәүер тарихи ваҡиғаларға бик бай булыуға ҡарамаҫтан, халыҡ ижадында ҙур күләмле эпик әҫәрҙәр инде барлыҡҡа килмәй тип әйтерлек. Эпос тарҡала, ваға́я, ә формаһы төрләнә. Әммә ике яҡҡа көрәш ҡайһы бер әҫәрҙәрҙә ифрат ҡатмарлы идея бәйләнештәрен тыуҙыра; йәмғиәттә синфи бүленеш тәрәнәйә барған һайын, фольклорҙа ла ҡапма-ҡаршы тенденцияларҙың көсәйеүе нығыраҡ һиҙелә.

Тарихселәрҙең раҫлауынса, X—XI быуаттарҙа башҡорттар араһында ырыусылыҡ мөнәсәбәттәре тарҡалып, феодаль мөнәсәбәттәр тыуа һәм, патриархаль йомоҡлоҡтан сығып, ваҡ ырыуҙарҙың үҙ-ара берләшеүенә табан ынтылыштар һиҙелә башлай. XII—XIII быуаттарҙа Башҡортостан территорияһында башында хандар торған хәлдә эре ырыу берекмәләре барлыҡҡа килә. Шуның конкрет миҫалы итеп, көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда Ете ырыу берекмәһен, көнбайыш Башҡортостанда легендар Ялыҡ ханға буйһонған ҡәбиләләр берекмәһен күрһәтәләр [1].

«X—XIII быуаттарҙа башҡорттарҙың эре ырыу берекмәләренә ойошоуын дәүләтселек формаларының башланғысы тип ҡарарға кәрәк. Башҡорт ырыуҙарының берләшеү тенденцияһы тәбиғи рәүештә үҫкән булһа, ул феодаль өтештереү мөнәсәбәттәренең тәрәнәйеүе менән бергә башҡорт халҡының ойошоуын тамамлап, үҙаллы дәүләт төҙөлөүгә килтерер ине, әммә башҡорт ырыуҙарына политик яҡтан үҙәкләшеүгә һәм халыҡ булып ойошоуға XII—XIII быуаттарҙа насип булманы. Был процесс монгол илбаҫарҙары тарафынан өҙөлөп, күп тиҫтә йылдарға һүндерелеп ҡуйҙы. Монгол ябырылыуы башҡорт халҡына ғәҙәттән тыш ауыр эҙемтәләр ҡалдырҙы» [2].

Башҡорттарҙың монгол баҫҡынсыларына ҡаршы көрәше хаҡында халыҡ күңелендә байтаҡ иҫтәлектәр ҡалған, телдән һөйлән-

---

[1] Очерки по истории Башкирской АССР, том 1, часть первая. Уфа, 1956, стр. 41.

[2] Р. Кузеев, Б. Юлдашбаев. 400 лет вместе с русским народом. Уфа, 1957, стр. 14.

гән тарих булып беҙҙең быуынғаса килеп еткән («Бошман-Ҡыпсаҡ батыр», «Аҡман-Тоҡман» [1] һ. б.). 1924 йылда Хәйбулла районы Смак ауылында 106 йәшлек Мөхәммәҙи бабай, мәҫәлән, шундай бер «тарихте» һөйләгән: «Бынан ете йөҙ йылдар элек башҡорттар үҙҙәренең дошманына ойошҡан рәүештә ҡаршы торғандар. Башҡорт ҡәбиләләре һуғышҡа ғәйрәтле халыҡ булған. Һуғыш бит, еңелгән ваҡыттары ла булмау мөмкин түгел, башҡорт ҡәбиләләрен Алтын Урҙа ханлығы һуғышып еңгән. [Был ҡобайыр] шул саҡтағы ваҡиғаны күрһәтә:

Алтын Урҙа ханлығы
Арыҫлан илгә яу асты.
Үҙән, Яйыҡ буйҙарын
Ҡыҙыл солға ҡан итте.
Бик күп эштәр башланы,
Күркле илде таптаны»[2].

«Күркле ил» өс йөҙ йыл буйына баҫҡынсылар аяғы аҫтында тапалып, тағы күпме ҡан һәм күҙ йәштәрен үҙенә һеңдермәһен, «ғәйрәтле халыҡ» Алтын Урҙаға ҡол булырға теләмәгән; Урал ҡаяларына һырышып, азатлыҡ даулаған, яйы сыҡҡан һайын, арыҫлан йөрәкле ҡаһарман улдарын изге яуға күтәргән, әммә көстәр тигеҙ булмағас, былары ла фажиғәле тамамланған. Шундай фажиғәләрҙең береһе тураһында тетрәткес бер иҫтәлек — «Һуңғы һартай» тигән легенда һаҡланған [3].

Халыҡтың ниндәй ауыр шарттарҙа ла ҡаҡшамаҫ рухын, социаль ынтылыштарын һәм азат тормош идеалдарын сағылдырған тарихи легендалар һәм иҫтәлектәр менән бер рәттән, халыҡсан сәсәндәр тарафынан ил батырҙары тураһында ҡобайырҙар һәм хикәйәттәр ҙә ижад ителгән. Был томдағы «Иҙел йорт» һәм «Бейек тауҙың үлгәне» исемле ҡобайырҙарҙың, асылда, ана шул ҡәһәрле Алтын Урҙа заманына ҡарауын шәйләргә мөмкин.

«Бейек тауҙың үлгәне» быуаттар буйына хандарҙан таланып йәшәгән халыҡтың тормош тәжрибәһен дөйөмләштерһә, «Иҙел йорт» «ойошоп ятҡан» илдең хандар тарафынан тарҡатылыуын, бүленеп алыныуын кәүҙәләндерә. Алтын Урҙа дәүләте емерелгәндән һуң, XV—XVI быуаттарҙа башҡорттарҙың Ноғай, Себер һәм Ҡазан ханлыҡтары ҡул аҫтында иҙелеп йәшәүҙәрен иҫкә төшөрһәк, был ҡобайырҙың зарлы юлдар менән осланыуы тарихи дөрөҫлөктө раҫлай.

Шуныһы характерле, был ике ҡобайырҙа сағылған уртаҡ мотивтәр (килмешәк хандарға нәфрәт, тыуған ил ерҙәмлеген һаҡлау һәм азатлыҡ идеалдары), бер яҡтан, юғарыла исемләнгән легенда-

---

[1] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө, 1980, 157—160-сы биттәр.

[2] Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының 1967 йылда уҙғарылған фольклор экспедицияһы материалдары.— СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Ғилми архиве (артабан «Ғилми архив» тип ҡыҫҡартып әйтелә), ф. 3. оп. 65/2, 273—274-се биттәр.

[3] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө, 1980, 364—369-сы биттәр.

иҫтәлектәргә барып тоташһа, икенсе яктан, томдағы күп әҫәрҙә ҡабатлана, яңы тарихи ваҡиғаларға бәйләп киңәйтелә, үҫтерелә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, бынан боронғораҡ заман мотивтәрен дә һаҡлаған «Иҙел йорт» Алтын Урҙа дәүләте тыуҙырған фажиғәләрҙе һүрәтләүе менән хандарға ҡаршы көрәш идеяларын дәлилләгән иң тәүге әҫәр һымаҡ ҡабул ителә.

XV—XVI быуаттар, Башҡортостан тарихендә ифрат ҡатмарлы был осор, берҙән, баҫҡынсы хандарҙың, икенсенән, урындағы феодалдарҙың һәм ырыу башлыҡтарының (бейҙәрҙең) өҙлөкһөҙ ыҙғыштары, ҡанлы һуғыштары менән характерлана. Фольклорҙа башлыса ошо дәүергә ҡарата яңы эпик сюжеттәр барлыҡҡа килә («Ғайса улы Әмәт» һ. б.). «Мамай хан хикәйәте», «Ек Мәргән», «Тарғын менән Ҡужаҡ» тигән хикәйәттәр һәм «Мәргән менән Маянһылыу» ҡобайыры — башҡорт халҡының әле әйтелгән ханлыҡтарға ҡаршы көрәшен үҙенсәлекле сағылдырған әҫәрҙәр.

Гуманистик ҡараштарҙы алға һөргән сәсәндәр башҡорттарҙың ырыу-ара тартҡылаштарын, үҙ-ара ыҙғыштарын хуп күрмәй, хандарҙың, бейҙәрҙең башҡаларға ҡаршы юнәлтелгән яуыз эштәрен ҡәһәрләп һөйләй. «Мамай хан хикәйәте», — асылда, нуғай хандарының башҡаларҙы талау, баҫып алыу яуҙарын ҡәһәрләгән хикәйәт.

Мамай тарихта Ших-Мамай исемендә билдәле. Ул — XVI быуаттың беренсе яртыһында, йәғни Нуғай урҙаһында ваҡ ханлыҡтарҙың үҙ-ара ыҙғыштары көсәйгән мәлдә, үҙәк власкә вассал хәлендә йәшәгән нуғай ханы. Хикәйәттә ул Көньяҡ Уралды биләгән Муса хандың ун ике улынан береһе, ағай-энеләрен һуйып, башҡа халыҡтарҙы ла талаусы, баҫҡынсы хан итеп һүрәтләнә.

Был сюжеттең ҡаҙаҡ, нуғай халыҡтары араһында ла таралыуы һәм күптән яҙып алыныуы билдәле. Мөхәммәт Османовтың «Ногайская хрестоматия»һына (Спб., 1883) ул, мәҫәлән, «Мирза Мамайдың хикайәте» исемендә инган. Ҡаҙаҡтарҙа «Ураҡ менән Мамай» исемендә бер кисә варианты яҙып алынған.

М. Османов хрестоматияһында баҫылған «Мирза Мамайдың хикайәте» Мусаның ике ҡатынынан тыуған ун ике улын исемдәре менән һанап сығыуҙан башланып китә. Артабан ун ике туғандың хакимлек өсөн үҙ-ара ыҙғыш-һуғыштары тасуирлана.

Башҡорт вариантында халыҡҡа дошман Муса улдарының береһе генә һүрәтләнә. Шул уҡ ваҡытта хикәйәтсе Мамайҙың бөтә эш-ҡылыҡтарын, уй-тойғоларын тәфсилләп тормай, ә «яу сабырға яратыр, һәммәһен ҡырып-ҡыйратыр, барсаһын баш эйҙереп үҙенә ҡаратыр иманһыҙ бер яу батыр» булыуын һөйләп, уның илбаҫар характерен алға баҫтыра. Хәҙисә Кусабаева һөйләүендә Мамай — Мусаның фәләнсә ҡатынынан тыуған фәләнсә улы ғына түгел, ә «иманһыҙ» кеше, «ир яманы», яуыз хан. Шулай дөйөмләштереп хикәйәләү арҡаһында Мамай, тарихи Ших-Мамайҙы ғына иҫкә төшөрөүҙән бигерәк, бөтә Алтын Урҙа хандарының яуызлыҡтарын бергә йыйып сағылдырған типик образ дәрәжәһенә күтәрелә. Хикәйәт залим хандарға халыҡтың әсе нәфрәте, уларҙан үс алыу тойғоһо менән һуғарылған.

Халык эпосын, уның тарихи эволюцияһын өйрәнеүҙә «Ек Мәргән» хикәйәте тикшеренеүселәрҙең етди карашын, тәрәнерәк төпсөнөүҙәрен көтә. Унда, бөтәһенән элек, сюжеттең боронғо һәм яңы мотивтәр менән нык катлаулаңыуы, идея йөкмәткеһенең каршылыклы факттарға «йәшеренгән» булыуы күҙгә ташлана.

Был сюжетте шартлы рәүештә өс өлөшкә бүлергә мөмкин: 1) Туғыҙак әбей ғаиләһенең кырылыуы; 2) Исән калған Ектең тәбиғәт косағында үсеп, батыр корона инеүе; көнбайыш башкорттарына килеп уларҙы Казан ханлығына каршы яуға күтәреүе; 3) Һуңғы яуҙа еңелеп, Ектең Казан ханына үҙ ирке менән бирелеүе; Казан ханлығында тиңһеҙ мәргәнлеген күрһәтеп, ярлыкаланыуы.

Хикәйәттең беренсе өлөшө ғәҙәттән тыш фажиғә менән тамамлана, әммә әле бында Казан ханлығы тураһында бер һүҙ ҙә юк, ә уға саклы күп замандар элек булған хәлдәр һүрәтләнә.

Сәсәндәр башкорттарҙың ни сәбәпле сит хандар кул аҫтында калыуына яуап эҙләгәндәр. Сәбәпте улар башкорт ырыуҙарының таркаулығында, ырыу башлыктары бейҙәрҙең үҙ-ара ыҙғышып, малмөлкәттәрен урлашып һәм шул нигеҙҙә карымталашып йәшәүҙәрендә күргәндәр. Иң әһәмиәтлеһе шул: «Ек Мәргән» хикәйәте был сәбәпте, тап һүҙ сәнғәте талап иткәнсә, конкрет образдар аркылы һынландырып күрһәтә; тыштан бик мөләйем, ғәйепһеҙ күренгән Туғыҙак әбей тормошон аҫтын-өҫкә килтертеп, барлык ырыуын кырҙыртып бөтөрөп, «яу сапкан — яу кылысынан үлер» тигән карашты үткәрә. Ошо идея йөкмәткеһе менән хикәйәттең башланғыс өлөшө «Мамай хан хикәйәте» менән «Күсәк бей» эпосына якын тора, ғибрәтле мәғәнә һалынған художестволы дөрөҫлөк юғарылығына күтәрелә.

Хикәйәттең икенсе, төп сюжет өлөшө башкорт халкының эпик традициялары ерлегендә үҫтерелә. Бында идея йөкмәткеһен аңлауҙы ауырлаштырған мотивтәр күренмәй. Тик ике деталгә тукталып үтергә кәрәк. Береһе — эпик геройҙың исеме, икенсеһе — Ек Мәргәндең үҙ ирке менән Казан ханлығына бирелеүе.

Әҫәрҙән аңлашылыуынса, герой, тәбиғәт косағында кейектәр менән генә аралашып, ун йәшенә саклы яңғыҙ һәм исемһеҙ үҫә. Исемде уға төшөндә атаһы куша: «Исемең Ек булһын, йәйәң нык булһын!» — ти ул. Боронғо төрки телендә *ег* һүҙе якшы тигәнде аңлата. Эпик геройҙың Ег (әйтелештә — Ек) тип исемләнеүе осраклы түгел, әлбиттә. Исемдең үҙендә үк сәсәндәр халыкты хандар золомонан коткарыр якшы батырҙы күреү теләген сағылдырғандар. Исемдең боронғолоғо — батыр образының да боронғолоғона ишара.

Көнбайыш башкорттарын үҙ етәкселегендә Казан ханлығына каршы ойоштороп, ханға яһак түләүҙе туктаткан Ек Мәргәндең һуңғы һуғышта үҙ ирке менән дошманға бирелеүенә килһәк, бының эпоста каршылыклы деталь булыуына тәү башлап Кирәй Мәргән иғтибар иткәйне [1].

[1] Кирәй Мәргән. Башкорт халкының эпик комарткылары, 260-сы бит.

Һыңғай геройҙың үҙ ирке менән дошманға бирелеүе, Кирәй Мәргән дөрөҫ әйткәнсә, эпоска хас күренеш түгел. Шулай ҙа быны осраҡлы хәл йәки «материалды әҙәбиләштергән кеше» тарафынан индерелгән ят нәмә тип ҡарау дөрөҫ булмаҫ кеүек, сөнки был деталь хикәйәттең үҙендә булмаһа, сюжеттең өсөнсө өлөшө булмаҫ ине. Күрәһең, хикәйәтселәр халыҡтың өмөтө бағлаған батыр һыңлы батырҙың дошманға баш һалыуы кеүек хурлыҡлы факт менән фабуланы осларға теләмәгәндәр, өсөнсө өлөшөн ижад иткәндәр. Ошонда хикәйәттең бөтә «сере» йәшерелгән. Иғтибар итегеҙ: тотҡонда ятҡан батыр үҙенең ғәҙәти бер эше — мәргәнлеге менән ханға хеҙмәт күрһәтеп, азат ителә, хатта иленә ҡайтарып ебәрелә.

Быны көрәшеп-көрәшеп тә, үҙенә азатлыҡ яулай алмаған халыҡтың ханға хеҙмәт итеп иреккә сығыу өмөтө, унан мәрхәмәт көтөү, рәхимлелегенә ышаныу кеүек, асылда, дини аристократия тарафынан тағылған идеалистик ҡараштарға бәйле рәүештә тыуған бөтөм тип кенә аңлатырға мөмкин. Тимәк, «Ек Мәргән» хикәйәтен өйрәнгәндә, «унда башҡорттарҙың Ҡазан ханлығына ҡаршы көрәше сағыла» тип әйтеү генә аҙ, ә ул көрәштең сикләнгән ҡараштар менән осланыуын асырға кәрәк.

Дөйөм алғанда, тема уртаҡлығы, төп геройҙарҙы характерлаған ҡайһы бер мотивтәрҙең оҡшашлығы яғынан «Мәргән менән Маянһылыу» һәм «Тарғын батыр» йәки «Тарғын менән Ҡужаҡ» — бер кәштәлә торған әҫәрҙәр. Уларҙың икеһендә лә башҡорттарҙың Нуғай ханлығына ҡаршы көрәше сағыла. Азатлыҡ көрәше мөхәббәт темаһы менән үрелеп, романтик планда үҫтерелә һәм ыңғай хәл ителә. Ошо күҙлектән ҡарағанда, «Мәргән менән Маянһылыу»— поэтик төҙөклөгө яғынан да, идеяһының асыҡлығы менән дә еңел аңлайышлы ҡобайыр. Халыҡтың эстетик идеалы тыуҙыра алған бөтә гүзәллекте үҙендә туплаған Маянһылыу ҙа, уны һөйгән йәш батыр Мәргән дә тыуған илгә һәм мөхәббәткә тоғролоҡтары, аҙаҡ сиктә хыялда ғына булһа ла, нуғай ханының башын киҫеп, илгә азатлыҡ, дөйөм шатлыҡ килтереүҙәре менән хәтерҙә ҡала. Сюжет һәм образдар эпик традициялар ерлегендә эшкәртелә.

«Тарғын менән Ҡужаҡ» хикәйәте иһә ҡатмарлыраҡ әҫәр. Ул ҡайһы бер төрки халыҡтар өсөн уртаҡ сюжетҡа ҡоролған. Ҡаҙаҡ һәм нуғайҙарҙа уның «Ир Тарғын» (ҡаҙаҡса яҙылышында — «Ер Тарғын») исемендә күбеһенсә шиғри формала йәшәүе, Октябрь революцияһына тиклем үк яҙып алыныуы һәм бер нисә тапҡыр баҫтырып сығарылыуы билдәле [1]. «Ҡаҙаҡ әҙәбиәтенең тарихе»ндә (I том, беренсе китап, Алматы, 1960) килтерелгән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ҡаҙаҡса варианттар, башлыса, хәҙерге Ҡустанай, Ырымбур өлкәләрендә йәшәгән ҡаҙаҡтарҙан яҙып алынған.

---

[1] Н. Ильминский. Ер Тарғын. Ҡазан университете баҫмаһы, 1862. (Табын ырыуы Марабай аҡындан яҙып алынған. Һуңғы баҫмалары: Ер Тарғын, ҡаҙаҡ эпосы, 2-се китап, Алматы, 1957; «Батырлар жыры», Алматы, 1959); В. В. Радлов. Ер Тарғын. — В сб.: Образцы народной литературы тюркских племен, живущих в Южной Сибири и Джунгарской степи. Часть III, Спб., 1870; Д. Н. Саркин. Ер Тарғын. Оренбург, 1904.

Башкортса варианттар ҙа шул тирәлә: беренсе тапкыр («Тарғын батыр») 1938 йылда Баймаҡ районында, икенсе тапкыр («Тарғын менән Ҡужаҡ») 1959 йылда Ялан-Ҡатай башкорттарынан (Курган өлкәһендә) яҙып алынған. Нуғайса варианттар хәҙерге Әстрхан өлкәһендә, Төньяҡ Кавказда һәм Ҡырымда табылған [1].

Әҫәр, әлбиттә, һәр халыктың эпик репертуарында үҙенсәлекле тоҫ алған, уның үҙ рухи ихтыяждары, поэтик традициялары ерлегендә формалашкан. Н. Ильминский тарафынан баҫтырып сығарылған ҡаҙаҡ варианты, мәҫәлән, Тарғындың хәрби батырлыктарын күрһәтеүгә ҡоролған. Бында ул ил-халык бойондороҡһоҙлоғон һәм шул уҡ ваҡытта шәхес азатлығын яклаусы батыр булып алға баҫа. Шуныһы характерле, шәхси ирек һөйөүсе батыр ҡайҙа ғына килмәһен, һәр урында был хандыктың үҙаллығы өсөн дошман яуына ҡаршы сыға, ғәҙәттән тыш батырлыктар күрһәтеп, еңеү килтерә, әммә, шуға ҡарамаҫтан, бер генә хан да уны үҙеneke итмәй, ҡыйырһыта, кәмһетә. Аҙаҡ, бер һуғышта батыр имгәнгәс, уны бик ауыр хәлендә ташлап китәләр. Шулай итеп, бер яктан, ил-халык бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәш, икенсе яктан, хан менән батыр араһындағы социаль ҡаршылыҡ ҡаҙаҡ аҡыны Марабай һөйләгән сюжеттең төп конфликт һыҙығын тәшкил итә; герой характерендәге психологик ҡаршылыктарҙы ғына түгел, ваҡ хандыктарға бүленгән феодаль йәмғиәттең ижтимағи ҡаршылыктарын да аса.

Башкорт варианттарының нигеҙендә лә, асылда, ошо уҡ конфликт ята, әммә бында Тарғындың яугирлегең киң һүрәтләү юҡ. Үҙәккә батырҙың үҙенә тейешле ҡыҙҙы юллау сюжете (традицион сюжет!) алынып, конфликт шәхес азатлығын яклау, ирекле мөхәббәтте хуплау йүнәлешендә хәл ителә. Әҫәр, «Мамай хан хикәйәте» кеүек үк, яуыз хандарҙан үс алыу тойғоһо менән ослана.

Хикәйәттә традицион сюжеттең яңы тарихи шарттарҙа халыктың рухи ихтыяждарына яҡынайтылыуы, персонаждарҙың яңы мотивтәр менән ҡылыкһырланыуы иғтибарҙы тарта.

Батырҙың «үҙенә яраҡлы ҡыҙ» эҙләп сығып китеүе — эпоста борондан килгән мотив, ләкин бында уның үтәлеше, егет менән ҡыҙҙың осрашыуы һәм танышыуы үҙенсәлекле. Батыр үҙенә тейешле ҡыҙҙы ғәҙәти тормош шарттарында таба, юлда һис ниндәй ҡаршылыктарға осрамай. Ҡыҙ ҙа — өйрәк, аҡкош йәки башка төрлө ҡош ҡиәфәтендә түгел, ә ғәҙәти ҡыҙ. Варианттарҙың береһендә лә, мәҫәлән «Аҡбуҙат» йәки «Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙағы шикелле тарткылашыу ҙа, «Алпамыша»лағы кеүек кос һынашыу-көрәшеү ҙә, ғәҙәттән тыш ауыр шарттар ҡуйып, егетте алдырғатыу ҙа юҡ. Шул уҡ ваҡытта бында «Ләйлә менән Мәжнүн», «Буҙйегет» сюжеттәрендәгесә үтә ҡыҙыу мөхәббәт ялкыны ла дөрләмәй. Танышыу, бигерәк тә, Ғ. Хисамов вариантында, үҙенең тәбиғилеге, ике йәш йөрәктең эскерһеҙлеге, үҙ-ара тиҙ

[1] Ҡарағыҙ: Ашим Сикалиев. История собирания и публикации ногайского фольклора.— Карачаево-Черкесский научно-исследовательский институт экономики, истории, языка и литературы. Труды, серия филологическая, выпуск VI, Черкесск, 1970.

аңлашыуы менән диккәтте тарта. Кыҙ менән егеттең танышыуын ғәҙәти һүрәтләү яғынан «Тарғын батыр» берҙән-бер әҫәр түгел. «Кыпсак егете менән башкорт кыҙы» исемендә һөйләнгән диалогта ла, асылда, шуны уҡ күрергә мөмкин.

«Тарғын менән Кужак» исемендә Кирәй Мәргән яҙып алған варианттарҙа ла осрашыу-танышыу тәбиғи шарттарҙа һүрәтләнә. Йыйын ойоштороп осрашыу-көрәшеү, табышыу-танышыу боронғо милли көнкүреш йолаһы булған кеүек, көрәштә еңеп сыккан батырға кыҙ биреү — фольклорҙа киң таралған традиция. «Алпамыша» сюжетендә, мәҫәлән, был шартты Барсынһылыу хатта үҙе куя, батырҙар менән үҙе көрәшә. «Тарғын менән Кужак»та иһә был мотив, үҙенең боронғо эпик һыҙаттарын ташлап, геройҙарҙың реаль тойғолары менән үрелә: көрәштә еңеп сыккан батырҙы кыҙ үҙе һайлай, бер ниндәй шарт куймайынса, уға бисә булырға ризалығын белдерә. Тимәк, мөхәббәт тойғоһо өҫтөн куйыла.

Марабай акын һөйләгән каҙак вариантында ла эш шулай тора.

Варианттарҙың барыһында ла егет менән кыҙҙың кауышыу теләге (ирекле мөхәббәт) ата каршылығына осрай. Ни өсөн Аксахан кыҙын Тарғынға бирмәй?

Каҙак вариантында Аксахан, кыҙы Тарғын менән касып киткәс, халкын йыйып, бына нәмә ти: «Мин был кыҙымдың ул кырғыҙ менән киткәненә риза түгелмен, ул кара кеше ине. Кыҙым китһә кәрәк ине хан балаһы менән, ... кара кеше менән китте...» [1]

Башкорт вариантында ла Аксахан менән Тарғын араһында гәмәлдә шул уҡ социаль тигеҙһеҙлек ята.

Тимәк, сюжеттә социаль мотив төйнәлә. Икенсе төрлө әйткәндә, Аксахан «кара кеше» (йәғни түбән катлам кешеһе) менән туғанлашырға хурлана.

«Заятүләк менән Һыуһылыу», «Кара юрға» һәм «Алпамыша»ның кайһы бер варианттары егеттең кыҙҙы алып үҙ иленә кайтыуы, ғаилә короуы менән тамамлана. «Куҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙың бер варианты, «Таһир менән Зөһрә», «Буҙйегет» киссалары ғашиктәрҙең фажиғәле үлеме менән ослана. «Тарғын менән Кужак» хикәйәтендә иһә батырҙың кыҙҙы үҙенә алыуы менән сюжет башлана ғына. Бөтә каршылык, кыҙ өсөн көрәш алда тора.

Сюжеттең был өлөшөндә хәл-вакиғаларҙың шактай катмарлы психологик төҫ алыуы, варианттарҙың мәсьәләне төрлөсә хәл итеүе күҙгә ташлана. Тарғын менән Кужактың бәрелешен һүрәтләгән эпизодтарҙа, әлбиттә, ике идеологик тенденция, атап әйткәндә, ғаилә короу мәсьәләһендә реакцион йолаларҙы яклаған патриархаль-феодаль караш һәм шәхес азатлығын, йәштәрҙең мөхәббәт тойғоларын хуплаған прогрессив-демократик караш сағыла, әммә бер-береһенә капма-каршы булған был ике тенденцияның бәрелешен эстетик баһалауҙа варианттар араһында берҙәмлек юк. Әгәр өс вариант мәсьәләне өс төрлө хәл итә икән, был уларҙың төрлө шарттарҙа барлыкка килеүен йәки бер үк хикәйәт-

[1] Батырлар жыры, Алматы, 1959, 275-се бит.

тең төрлө мөхиттә төрлөсә һөйләнеп йөрөүен, тимәк, сәсәндәрҙең әле идея яғынан бер төптән булмауын күрһәтә.

«Тарғын батыр» тигән вариантта Ҡужаҡты билдәле дәрәжәлә «халыҡтың аҡын үҙендә туплаған ҡарт батыр» тип баһаларға мөмкин, ә тегеләрендә иһә ул — бары Аҡсахандың ихтыярын үтәүсе, патриархаль-феодаль көнкүреш йолаларына йәбешкән яуыз көс. Шуға күрә лә ул М. Бәширов вариантында йәштәр ҡулынан хаҡлы яҙаһын ала.

Хикәйәттең үҙәк геройы Тарғынға килһәк, варианттарҙың бөтәһендә лә уны азатлыҡ һөйөүсе, ғаилә мәсьәләһендә ҡарата гуманистик мөнәсәбәттәрҙе талап итеүсе һәм, аҙаҡ килеп, яуыз хандарҙан барыбер үс алыусы йәш батыр, халыҡтың прогрессив ҡараштарын сағылдырыусы ыңғай образ тип баһаларға тейешбеҙ.

Әҫәрҙә Аҡйондоҙ ҙа (Аҡъюныс) үҙ мөхәббәте өсөн актив хәрәкәт итеүсе персонаж булыуы менән әһәмиәтле.

Шулай итеп, азатлыҡ өсөн көрәш мотивтәре әҫәрҙәрҙең берәһендә хандарҙы ҡәһәрләү планында асылһа («Мамай хан хикәйәте»), икенселәрендә батырҙарҙың иҙеүселәргә ҡаршы яуға күтәрелеүҙәрендә асыҡ күренә («Мәргән менән Маянһылыу»). Шул уҡ ваҡытта хикәйәттәрҙең ҡайһы берҙәрендә («Ек Мәргән») хандарҙың үҙҙәренән изгелек көтөү, аяу өмөт итеү кеүек сикләнгән ҡараштар ҙа сағылып үтә. «Тарғын менән Ҡужаҡ» сюжетендә иһә азатлыҡ мотивтәре халыҡтың яңы рухи ихтыяждары менән тығыҙ бәйләнешкә инеп, тарихи-милли үҫештәге ҡаршылыҡлы процестәрҙе һәм ҡапма-ҡаршы идеялар бәрелешен көүҙәләндерә.

Тарихи ысынбарлыҡҡа, халыҡ тормошона яҡынайған һайын, сюжет төҙөлөшөндә һәм образдар системаһында мифологик буяуҙар кәмей йәки бөтә бара, реалистик һыҙаттар асығыраҡ һыҙатлана килә. Был иһә эпик традицияларҙың ниндәйҙер бер кимәлдә ҡатып ҡалмауын, ә халыҡтың эстетик аңы һаман киңәйә һәм асыҡлана барыуына бәйле рәүештә үҙгәреүен, яңырыуын раҫлай.

* * *

Башҡорт ырыуҙарының үҙ иректәре менән Рус дәүләтенә ҡушылыуы башҡорт халҡының тарихи үҫешендә принципиаль боролошто билдәләгән ҙур ваҡиға булды.

«Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы Нуғай, Себер, Ҡазан феодалдарының аяуһыҙ хакимлегенә сик ҡуйҙы, феодаль тарҡаулыҡты, улар араһында оҙлокһоҙ булып торған сабыуылдарҙы бөтөрҙө... Бер дәүләт эсендә берләшеү башҡорттарҙың халыҡ булып ойоша алмау ҡурҡынысын юҡҡа сығарҙы... Башҡортостандың Россияға ҡушылыуы башҡорт һәм рус халыҡтарының өҙлөкһөҙ дуҫлығына юл асты»[1].

Үҙәк рус дәүләтенә ҡушылыуҙың башҡорт халҡының артабанғы экономик, политик һәм рухи тормошонда прогрессив әһәмиәт-

---

[1] Р. Кузеев, Б. Юлдашбаев. 400 лет вместе с русским народом, стр. 64—65.

ле тарихи боролош булыуын дөрөҫ билдәләү менән бергә Башҡортостанға ҡарата батша самодержавиеһе, асылда, колониаль политика тотоуын да әйтмәй мөмкин түгел бында. «Алпауыттарҙың, дворяндәрҙең, ә һуңынан эре буржуазияның мәнфәғәттәрен күҙәтеп, царизмдең политикаһы милли-колониаль һәм социаль иҙеүҙе тәрәнәйтеүгә йүнәлдерелгәйне. Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң башҡорттар азат халыҡ булманылар әле. Улар рус алпауыттары дәүләтенең һәм башҡорт феодалдарының иҙеүе — икеләтә иҙеү аҫтында ҡалдылар»[1].

Әммә бында шуныһын дөрөҫ аңлау мөһим: милли һәм социаль иҙеү тәрәнәйгән һайын, самодержавиенең реакцион политикаһына һәм урындағы феодалдарҙың синфи теләктәренә ҡапма-ҡаршы рәүештә, хеҙмәтсән башҡорт халҡының күңелендә бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән ике тойғо көсәйҙе. Уның береһе социаль азатлыҡ һәм милли тиңлек, ғәҙеллек өсөн көрәште нығышмалыраҡ дауам итеү булһа, икенсеһе — бөйөк рус халҡына тәрән ихтирам һәм дуҫлыҡ тойғоһо, уртаҡ Ватан Россияны «халыҡтар төрмәһе» иткән батшалыҡҡа ҡаршы көрәштә рус халҡы тирәһенә тупланыу, берләшеү тойғоһо ине.

XVI быуаттың уртаһынан Октябрь революцияһына саҡлы дүрт йөҙ йылға яҡын был ара фольклорҙа төрлө жанрҙа ифрат күп әҫәрҙәр тыуҙырған, ҡатмарлы сағылыш алған. Ҡатмарлылыҡ бөтәһенән элек ижтимағи процестең үҙенә, әле әйтелгән ике тойғо — ике яҡлы тарихи ынтылышҡа бәйле булып, ижадта ҡаршылыҡлы, ваҡыты-ваҡыты менән хатта ҡапма-ҡаршы идеялар бәрелешенә йәки үтә косөргәнешле кисерештәргә юлыҡтырған. Был боронғо эпик традицияларҙы яңыса дауам иткән «Байыҡ Айҙар сәсән» тигән үҙенсәлекле әҫәрҙә лә, тыуған ил һәм батырҙар тураһындағы ҡобайырҙарҙа ла, әхлаҡ һәм тормош-көнкүреш философияһын сағылдырған әйтемдәрҙә лә асыҡ күрергә була.

«Старшина Мәсәғүт» ҡобайыры, мәҫәлән, «ҡурғаусылыҡ», айырым йәшәү фекерен алға һөргән феодалдар, улар йырын йырлаусылар менән, гүйә, бәхәскә инеп, уларға ҡаршы әйтелгән аҡыллы һүҙ кеүек ҡабул ителә. Халыҡҡа мөрәжәғәт итеүсе аҡһаҡал «ҡазыйлы» (йәғни бер хужалы, бер хөкөмлө) илдең бөтөнлөгөң, өҫтөнлөгөн яҡлай, шундай илгә ҙур өмөт бағлай.

Мәшһүр Ғәбит ҡурайсынан 1907 йылда яҙып алынған «Ай Уралтау, Уралтау» исемле ҡобайыр ҡайһы бер мотивтәре һәм шиғри һүрәтләү саралары менән Урал тауына арналған лирик ҡобайырҙар циклына яҡын торһа ла, азатлыҡ өсөн көрәш идеяларын асыҡ һыҙатландырыуы яғынан уларҙан ныҡ ҡына айырыла. Әгәр «Уралтау», «Ай Уралым, Уралым», «Урал тигән илем бар» һәм «Уралып ятҡан Уралда» исемендә киң билдәле ҡобайырҙарҙа бай шиғри тасуирләүҙәр, үҙенсәлекле поэтик троптар аркылы халыҡтың үҙ иленә тәрән мөхәббәте, ата-бабаларҙан рухи аманат булып ҡала килгән мөҡәддәс ҡараштары сағылдырылһа, «Ай Уралтау, Урал-

[1] Шунда уҡ, 86-сы бит.

тау» ҡобайырында тыуған ер төшөнсәһе ил-халыҡ азатлығы идеялары менән үрелә.

Үҙәкләшкән һәм һаман нығый, көсәйә барған Рус дәүләтенә ҡушылыу башҡорт ырыуҙарының этник яҡтан ойошоуын тиҙләтте. Фольклорҙа ошо тарихи процестең дә асыҡ сағылыуын күрергә мөмкин. «Ете ырыу» легендаһына ингән, уның төп идея-эстетик йөкмәткеһен тәшкил иткән ҡобайырҙар, мәҫәлән, тау сәсәндәре менән ялан сәсәндәренең юҡтан ғына һүҙ көрәштереүе йә булмаһа хатта, әйтештәр жанрындағы һымаҡ, сәсәндәрҙең йорлоғон, һүҙгә оҫталығын һынау ғына түгел. Бында берләшеүгә юл тотҡан ырыуҙарҙың ил-йорт өсөн урын «һайлауҙары» тураһында, тимәк, этник берлектең төп нигеҙе тураһында етди һүҙ бара. Шул ынтылыштарҙың тәүге тарихи емеше булып, Көньяҡ Уралда монгол ябырылыуына саҡлы уҡ Ете ырыу берекмәһенең йәшәгәнлеге билдәле. Ҡобайырҙа Уралтау ошо этник берекмәнең территорияһы тип танылא, һис ни менән алмаштырылмаҫ Тыуған ил образы булып кәүҙәләнә.

«Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Зөһрә менән Алдар» кеүек ҙур күләмле хикәйәттәрҙә лә беҙ, асылда, ошо тарихи процестең — башҡорт ырыуҙарының берләшеүгә ынтылыштарының үҙенсәлекле сағылышын күрәбеҙ. Монгол ябырылыуы был процесте өс быуатҡа туҡтатып торған, аҙаҡ сиктә халыҡты төрлө ханлыҡтарға бүлгеләп бөтөргән кәртә булды, әммә башҡорт ырыуҙарының аңында Урал ил-йорт төшөнсәһе, яуыз хандарға ҡаршы көрәшкә әйҙәүсе символ булып ҡала килде. Алтын Урҙа һәм Нуғай, Ҡазан ханлыҡтары дәүеренә ҡараған хикәйәттәрҙә ил азатлығы өсөн көрәш идеяларының сағылышы — был, әлбиттә, халыҡтың үҙаңында милли тойғоноң тыуыуына, әҙлекле рәүештә көсәйә килеүенә бәйләнгән әһәмиәтле күренеш.

Ошо күҙлектән лирик ҡобайырҙарҙа Тыуған ил образының үҫтерелешен күҙәтеү әһәмиәтле. Боронғораҡ дәүерҙәргә ҡараған «Уралтау» («Ете ырыу» көйөн аңлатҡан легендала килтерелгән ҡобайырҙарҙы шул исемдә йөрөтөргә мөмкин), «Ай Уралым, Уралым», «Урал тигән илем бар» тигән ҡобайырҙарҙа Урал боронғо ата-бабалар тарафынан үҙҙәренә йәшәү тобәге итеп һайланған йәки, «Урал батыр» эпосындағыса, яуыз мифик көстәрҙән яулап алынған изге ер итеп күрһәтелә, уның ҡош-ҡортҡа, ер-һыуға — һәр нәмәгә байлығы, матурлығы тасуирлана. Был әҫәрҙәрҙә, «Иҙел йорт» ҡобайырындағы кеүек үк, образдың нигеҙендә, башлыса, ике нәмә ята. Береһе — йәнлектәргә һәм төрлө ризыҡтарға бай Урал тәбиғәте кешеләргә муллыҡта йәшәү, «ҡайғыһыҙ» тормош көтөү сығанағы булһа, икенсеһе — Уралдың үҙе үк, «илгә дошман килгәндә, ышыҡ», илде ҡурсыған «ҡорал» хеҙмәтен үтәүе («Ай Уралым, Уралым»). Урал-ил образы халыҡтың эстетик идеалында шул саҡлы күркәм, шул саҡлы хөр булып тоҫмөрләнә, унда хатта кешеләр менән йәнлектәр араһында ла тигеҙлек һәм дуҫлыҡ хакимлек итә.

Тәбиғи тигеҙлек, хөрлөк донъяһын боҙған мотивтар «Уралып ятҡан Уралда» тигән ҡобайырҙа осрай:

Уралтауҙың буйында
Байы ла, фәҡир ҙә бар,
Байығам, тип тир түккән
[Һис мандымаҫ] бахыр ҙа бар.

Йәки:

Уралтауҙың аҫтында
Тимер ҙә, көмөш тә бар;
Уралтауҙың өҫтөндә
Һуғыш та, үлеш тә бар.

«Ил тигәндең кеме юҡ» тигән ҡобайырҙа ла ошондай уҡ мотивтәр сағыла. Халыҡтың ил берҙәмлеге тураһындағы хыялдарына социаль тигеҙһеҙлек һәм яуызлыҡ мотивтәренең килеп инеүе был ҡобайырҙарҙың синфи йәмғиәт шарттарында ижад ителеүе, халыҡ аңының юғарыраҡ стадияға күтәрелеүе хаҡында һөйләй. «Перовский йәйләүе» социаль тигеҙһеҙлек һәм милли иҙелеү мотивтәрен юморлаштырып һүрәтләү менән ҡыҙыҡлы.

Антагонизмға ҡоролған йәмғиәт халыҡ аңында синфи айырымлыҡтарҙы тыуҙыра. Тормошто танып белеүҙә халыҡ барған һайын үҙенең социаль көрәш тәжрибәһенә таяна, үҙенең күҙәтеүҙәренән тәрән мәғәнәле һығымталар яһай. «Бейек тауҙың үлгәне...» исемендә йөрөгән ҡобайыр — ана шундай әҫәр. Уның һәр строфаһында, һәр юлында синфи йәмғиәттә күп тапҡыр һынalған тарихи дөрөҫлөк, кире ҡағылмаҫ хәҡиҡәт ята.

Бороңғо эпоста мифик заттар һүрәтендә төҫмөрләнгән яуызлыҡҡа ҡаршы көрәш һуңынан яуыз хандарға ҡаршы көрәш формаһында тарихи тоҫ ала килә. Шуға бәйле рәүештә, халыҡ аңында батырлыҡ төшөнсәһе лә үҙгәрә, ил-халыҡ азатлығы идеялары менән үрелеп конкретлаша, социаль йөкмәткеһе асыҡлана.

Илдең нурлы булғаны—
Илдә батыр тыуғаны;
Илдең моңло булғаны—
Дошман килеп тулғаны,—

тигәндәр ил азатлығын һөйәр сәсәндәр. Һәр быуындың үҙ тәжрибәһе менән нығытыла килгән ошо һығымтаға таянып, ил ҡарттары:

Айбарланған батырҙар
Яуға барыр яу булып,
Тигеҙ ерҙә тау булып;
Сергеһенән ҡан үтмәй,
Батыр булып дан тотмай,
Аттан эйәр алмаҫтар,
Ҡынға ҡылыс һалмаҫтар, ау,
Ҡынға ҡылыс һалмаҫтар,—

тип ил батырҙарының ҡаһармалыҡ һыҙаттарын күрһәткәндәр, быны ир-егеттәрҙең ил алдындағы бурысы һәм намыҫы, төп әхлаҡ принцибе итеп танытҡандар. Шуға ла илде дошман баҫҡанда, былдай ҡобайырҙар халыҡты ил өсөн яуға күтәрер оран булып яңғыраған.

XVII—XVIII быуаттарҙа башҡорттар, социаль ғәҙеллек, милли тиңлек даулап, күп тапҡырҙар баш күтәргәндәр, әммә һәр сак

еңелеп, ауыл-йәйләүҙәре үртәлеп, малдары һәм ер-һыуҙары таланып, элеккенән дә ауырыраҡ хәлдә ҡалғандар. Сәсәндәр шуның сәбәптәрен эҙләгәндәр һәм «Ай Уралтау, Уралтау» ҡобайырында уны, бер яҡтан, араға дошман инеү, илде яттарға һатыу, ә, икенсе яҡтан, яуға күтәрелгән егеттәрҙең дә әле бер төптән булмауы, берҙәмлектең етешмәүе менән аңлатҡандар.

Шулай итеп, лирик ҡобайырҙарҙа, берҙән, башҡорт ырыуҙарының Рус дәүләтенә ҡушылыу мәлендә халыҡ күңелендә тыуған ҡаршылыҡлы кисерештәр сағылыуын күрһәк, икенсенән, самодержавиеның колониаль политикаһына ҡаршы көрәш процесендә ил һәм батырлыҡ төшөнсәләренең социаль-эстетик яҡтан конкретләшә, аныҡлана килеүен абайлап була. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер ҡобайырҙарҙа ил эсендәге синфи тигеҙһеҙлек һәм шуға бәйле милли үҙаңдағы ҡаршылыҡтар ҙа һиҙелә биреп ҡуя.

Рус дәүләте составында йәшәү аҙаҡ сиктә башҡорт ырыуҙарының берләшеүен, халыҡ булып формалашыуын тамамлаһа ла, антагонизмға ҡоролған батшалыҡ ил эсендәге синфи айырымлыҡтарҙы көсәйтте. Шуға бәйле рәүештә милли йәшәйештә, милли культурала ҡапма-ҡаршы ике тенденция һаман ҡала килде. Бының береһе феодалдарҙың ханзамандан бирле килгән тормош укладын, экономик мөнәсәбәттәрҙе, тәртип-йолаларҙы һаҡлауға юнәлтелгән ынтылыштары, Рус дәүләтенән айырылып, Башҡортостанда үҙ ханлыҡтарын төҙөү, йә, һис юғында, рус батшаһына вассал хан булып ҡалыу тураһындағы хыялдары, халыҡтың милли-социаль иҙелеүгә ҡаршы күтәрелештәрен үҙҙәренең шул синфи мәнфәғәттәре өсөн файҙаланырға тырышыуҙары булһа, икенсеһе быға ҡапма-ҡаршы тенденция ине. Ул киң ҡатлам хеҙмәтсәндәрҙең бөйөк рус халҡы менән яҡынайырға, дуҫлашырға теләүҙәрендә, берҙәм дәүләт эсендә үҙҙәренә тиң хоҡуҡ, милли тигеҙлек, социаль ғәҙеллек даулауҙарында күренде. Һуңғы быуаттарға ҡараған эпик әҫәрҙәр, атап әйткәндә, «Ерәнсә сәсән», «Байыҡ Айҙар сәсән» һәм «Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне» шул тенденцияларҙы үҙенсәлекле сағылдырыуы менән әһәмиәтле.

Боронғораҡ эпик ҡобайырҙарҙан айырмалы буларак, быларҙа ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле хикәйәләгән традицион сюжет формаһы ла, геройҙарҙың батырлығын, ғәйрәтле көстәрен кәүҙәләндергән күренештәр ҙә юҡ. Батырҙы бында — сәсән, көстө аҡыл алмаштыра. Сюжет үҙәгенә халыҡ тормошона бәйле мөһим мәсьәлә ҡуйылып, шуға ҡарата тыуған фекерҙәр, төрлө ҡараштар баян ителә; хикәйәләү, нигеҙҙә, әңгәмә-диалог, иң киҫкен мәлендә әйтеш формаһын ала.

«Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне»ндә һәм «Ерәнсә сәсән» ҡобайырында халыҡсан сәсәндәрҙең бейҙәр, феодалдар йәки улар йырын йырлаған сәсәндәр менән бәрелеше сағыла, бәрелештә һәр ике яҡтың синфи йөҙө асыла. Ерәнсә, мәҫәлән, Абулхайыр менән Аҡмәмбәттең халыҡ мәнфәғәтенә ҡаршы мәкерле ниәттәрен фаш итә. Аҡмырҙа менән Ҡобағоштоң әйтешендә лә, асылда, шундай уҡ синфи бәрелеш кәүҙәләнә. Был әҫәрҙәрҙә Абулхайыр менән Аҡмәмбәт, Ҡарағоломбәт менән Бикбау

бей һәм феодалдарға хеҙмәт иткән Аҡмырҙа сәсән йөҙөндә хан-бейҙәрҙең халыҡҡа ҡаршы политикаһы бик асыҡ һыҙатланһа, Ерәнсә менән Ҡобағош сәсәндәрҙең әйткәнендә «ил теле» асыла, уларҙың халыҡ менән берҙәмлеге беленә:

Күп эсендә кем сүп түгел,
Күп һүҙен һәм шул әйтә.
Күп тигәнем халыҡ булыр,
Тотҡан юлы хаҡ булыр,
Әй, һүҙе һөттән аҡ булыр,
Яҡшыға ышыҡтай тау булыр,
Яуызға ҡаршы яу булыр.

Абулхайыр хан менән Аҡмәмбәт тарханды киҫәтеп әйтелгән был һүҙҙәрҙең «авторы» Ерәнсә сәсән үҙе лә, Ҡобағош та һәр ваҡыт аңа шулай «күп һүҙен» һөйләүсе, хеҙмәтсән халыҡтың һәр төрлө яуызлыҡҡа ҡаршы торорлоҡ ижтимағи көс булыуын дөрөҫ аңлаусы тәрән аҡыллы сәсән булып алға баҫа.

Поэтик төҙөлөшө һәм үҙәк образдың киңерәк бирелеше менән «Байыҡ Айҙар сәсән» ҡобайыры шаҡтай айырылып тора. Әҫәр Байыҡ сәсәндең тормошона, уның сәсәнлек эшмәкәрлегенә бәйле бер нисә эпизодты һүрәтләй. Тәү ҡараштa эпизодтарҙың һәр береһе үҙаллы әҫәр һымаҡ. Уларҙа тематик яҡтан ғына түгел, жанр һәм поэтик стиль үҙенсәлектәре яғынан да байтаҡ айырымлыҡтар һиҙелә: беренсе эпизод әйтеш формаһында булһа, икенсе һәм өсөнсө эпизод халыҡ азатлығын, илдең бойондороҡһоҙлоғон һәм бөтөнлөгөн данлаған ҡобайырҙар стилендә; дүртенсе эпизод иһә тарихи йырҙар жанрына инә. Дүртенсе эпизодта сағылған ваҡиға һәм йырҙарҙың «Икенсе әрме» тигән тарихи йырҙа ҡабатланыуы үҙе үк һуңғыһының тәүгеләренә бик үк йәбешеп етмәүен иҫкәртеп торған тоҫло. Ләкин быны ябай бер контаминация тип ҡарарға ярамай, ә бүтән әҫәрҙәрҙә лә (мәҫәлән, «Урал батыр», «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңырбуға» һ. б.) күҙгә ныҡ ташланған һәм, ғомумән, фольклор өсөн ғәҙәти булған синкретизм күренеше тип баһаларға кәрәк. Шуны иҫәпкә алһаҡ, идея бөтөнлөгө яғынан был әҫәрҙе тәрән һәм бай йөкмәткеле эпик ҡобайыр тип классификацияларға нигеҙ бар. Беренсенән, һәр эпизод бер үк теманы — халыҡ азатлығы һәм тыуған ил бойондороҡһоҙлоғо темаһын үҫтерә; икенсенән, теманы бергә ойоштороусы, эпизодтарҙы бер-береһенә бәйләүсе үҙәк геройы бар. Ул — күләмле эпос традицияһында һынландырылған Байыҡ сәсән образы.

Тема бүлектән-бүлеккә әҙмә-әҙлекле тәрәнәйә, сәнғәтсә үҫтерелә килә. «Байыҡ сәсәндең ҡаҙаҡ аҡыны Бохар менән әйтешкәне» тигән эпизодта тыуған ил темаһы шәхес азатлығы мәсьәләһе менән үрелә. Икенсе эпизодта ул «ярылып ятҡан» социаль төҫ ала. Байыҡ сәсәндең Салауат батырға әйткәндәрендә үҙ илендә тыныс йәшәргә урын тапмаған бер аҡһаҡалдың зары ғына түгел, ә хакимдәрҙән иҙелгән халыҡ зары сағыла. «Тороp йорто юйылғанға, балалары һуйылғанға, батырҙары ҡыуылғанға» ҡаңғырып йөрөгән ил сәсәне, һуңынан Пугачевҡа ҡушылып, Рәсәй батшалығын дер һелкетер Салауат батырға ил-халыҡ азатлығы өсөн яу

сапкан батырҙар данын, залим хандар ямаиатын һөйләп, уның был тигеҙһеҙ донъяға күҙен аса, милли һәм социаль азатлык өсөн оло яуға дәртләндерә.

«Байыҡ сәсәндең ҡайтанан килеп сыҡҡаны, халыҡҡа туғанлыҡты аңлатҡаны» тип аталған өсөнсө эпизод — сюжеттең үҙенсәлекле кульминацияһы. Үҙендә асыҡтан-асыҡ әйтелмәһә лә, бында ифрат ҡатмарлы киҫеренштәрҙе һиҙмәү мөмкин түгел. Батшаның француз яуына ҡаршы ярҙам һорауын ишеткәс, йыйындағыларҙың күбеһе, үткәндәрҙе иҫкә төшөрөп: «Әйҙә, дөмөгөп китһен батшаһы! Бармайыҡ, ағай-эне»,— тип тартышалар тоҫлө. Һәр хәлдә йыйындың йөҙ йәшәр үҙ сәсәнен сәләм дә бирмәй ҡаршы алыуынан һәм Байыҡтың «Ниңәлер, һүлпән туйығыҙ — үлек сығыр өй һымаҡ!» тигән һүҙҙәренән атмосфераның ауыр, үтә көсөргәнешле булыуы аңлашыла.

Шуныһы характерле, йыйынға Байыҡ сәсән килеп ҡушылғандан һуң ауыр мәсьәләне хәл итеү көтөлмәгәнсә философик төҫ ала. Байыҡ сәсән бөтә ил — Россия яҙмышы хәл ителгән саҡта, мәсьәләгә башҡалар шикелле батшанан күргән яуызлыҡтар өсөн йөрәк әрнеү тойғоһона бирелеп түгел, ә айыҡ аҡылға таянып, юғары идеалдар яҡтылығынан ҡарай: олатайҙарҙың, Мәскәүгә үҙҙәре барып, Аҡ батшаға ант итеүҙәрен иҫкә төшөрә; туғандашлыҡты ырыу-ҡан ҡәрҙәшлеге менән генә түгел, ереккән ер, эскән һыу берлеге, ант биргән ил берлеге, йәғни ватандашлыҡ төшөнсәһе менән аңлата. Ошоноң менән дә инде Байыҡ сәсәндең халыҡсанлығы, зирәклеге билдәләнә. Ул башҡорт халҡының тарихи ынтылыштарын, уның милли үҙаңында борондан туплана килгән демократик һыҙаттарын бик аныҡ кәүҙәләндергән эпик герой булып алға баҫа.

Дүртенсе эпизодтың әһәмиәте шулай уҡ ҙур. Унда Байыҡ сәсән биргән аҡылдың халыҡ теләгенә тап килеүе, үҙ антына халыҡтың тоғролоғо, ил һаҡлауҙа патриотик берҙәмлеге сағыла.

Бында берҙәм тойғоларҙың йыр формаһында бирелеүе һуңғы дәүерҙәрҙә эпик сюжеттәргә лирик мотивтәрҙең килеп инеүе, барған һайын киңерәк урын алыуы, батырҙарҙы — сәсәндәр, ғәйрәтле көстө зирәк аҡыл алмаштырыуы кеүек үк, эпик традицияларҙың яңы эстетик зауыҡтар ерлегендә үҙгәреүен раҫлаусы факт булып тора.

Яңы тарихи шарттарға бәйләнешле бындай үҙгәрештәрҙе, эпик поэзияның икенсерәк йүнәлеш алыуын айырым батырҙар тураһындағы ҡобайырҙарҙа шулай уҡ асыҡ күрергә мөмкин.

Ул ҡобайырҙарҙа композицион бөтөнлөк тә, әҙлекле сюжет тә юҡ. Улар — тулы көйгә беҙҙең көндәргәсә килеп етә алмаған эпик сюжеттәрҙең айырым ярсыҡтары, халыҡ күңелендә һаҡланып ҡалған өҙөктәр генә. Ҡайһы берҙәре (мәҫәлән, «Салауат батыр», «Сүкем батыр», «Буранғол ҡапҡа») батырға трафарет характеристиканан ғына торһа, икенселәре йә герой тормошонан айырым эпизодтарҙы, йә уның ниндәйҙер шарттарҙағы кисерештәрен генә сағылдыра.

«Сукем батыр» ҡобайыры, мәҫәлән, аңлатмаларҙа килтерелгән мәғлүмәттәрҙе иҫәпкә алһаҡ (307—308-се биттәрҙе ҡарағыҙ), Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында йәшәгән Һалйот ырыуы башҡорттарының Себер ханлығына ҡаршы көрәшен сағылдырған героик йөкмәткеле ҙур әҫәр булғандыр, моғайын. Һәр хәлдә ҡобайырҙың икенсе строфаһы эпик сюжет башланғысын хәтерләтә:

Ошбу Һалйот ерендә
Киң өйөрҙәр йөр(ө)гәндә,
Шул малдарҙы таларға
Күсем хан яуы килгәндә,
Ҡамсат бүркен ҡыңғартып,
Уҡ-һаҙаҡтарын тағып,
Сукем сыҡҡан яу һалып,
Арғымаҡҡа атланып.

Ә артабан сюжет үҫтерелеше, күрәһең, һуңынан ҡыҫҡарған: нисә быуат элек булып үткән ҡанлы бәрелештәрҙең теүәллеге кәмей килеп, халыҡ хәтерендә тик төп геройҙың ҡаһарманлығы тураһында поэтик информация ғына һаҡланып ҡалған:

Дөлдөл кеүек осҡан ул
Буҙъюрға ман сапҡанда,
Таш-ҡаяны ватҡан ул
Һаҙағынан атҡанда...

Иғтибар итегеҙ, информацияла оло эпос һәм әкиәт батырҙарына хас ғәйрәтлелек сифаттары һанала. Әммә артабан гиперболик характеристика тыуған-үҫкән ер тойғоһо менән «кәметелеп», эпик батырлыҡ ил-халыҡ азатлығы хаҡына ҡаһарманлыҡ күрһәтеү булып конкретләштерелә, поэтик информацияла тарихи реаллек һәм милли патриотизм тойғоһо өҫтөнлөк ала:

Сукем батыр бирмәне
Тыуған-үҫкән ерҙәрен,
Ҡурпылы тибендәрен,
Йылҡылы өйөрҙәрен...

Тулы сюжете онотолоп, ҡобайыр тексы геройға ана шулай поэтик характеристикаға ғына тороп ҡалһа ла, эпик хикәйәләүҙә боронғо традицияларҙың яңы мотивтәр, реалистик тойғолар менән үрелеүен асыҡ шәйләргә мөмкин. Халыҡ тормошонан бер иҫтәлек булыуы өҫтөнә, әҫәр шул яғы менән дә әһәмиәтле инде.

Ҡаҙаҡ һәм нуғай халыҡтарында «Чура батыр» исемендә ҙур эпик сюжет таралғанлығы билдәле [1]. «Сура батыр» ҡобайыры был сюжеттең борон башҡорттарға ла таныш булыуын иҫбатлай.

«Баязит батыр» ҡобайыры Баязит батырҙың «ҡарттар оран биргәндә» бик ғәйрәтләнеп атҡа менеүе, әммә «Нуғай мырҙа ғәскәрен ҡуй-һарыҡтай тураҡлап, ҡан ҡалтыратып, онтаҡлап иленә ҡайтыр ир» булһа ла, шул яуҙа ятып ҡалыуын әсенеү-үкенеү той-

---

[1] Батырлар жырларының жыйнағы. Икенче жыйнаҡ. Алматы, 1934.

ғоһо менән һүрәтләһә, «Аҡшам батыр» иле өсөн дошманға ҡаршы сыҡҡан батырҙың антын, һуғыш алдынан тыуған ғәйрәтле кисерештәрен генә аңлата. «Түлгән батыр» — малды ҡыуып алып киткән дошман артынан сапҡан батырҙың монологы. Шулай уҡ монолог формаһында һөйләнгән «Ялп-йолп иткән яңғыҙ ябалаҡ...» ҡобайырында, ғәскәре ҡыйралып, яңғыҙ тороп ҡалған батырҙың кисерештәре, ил эсендә үҙенә тоғро иштәр табып, дошмандан үс аласағына ышанысы сағыла.

«Көбәк батыр» ғәҙәттән тыш бер психологик ситуацияны күҙ алдына баҫтырыуы менән айырыла: кәләш әйттереп, туй үткәрергә йыйынған мәлдә һуғышҡа киткән батыр, дошманды ҡыйратҡас, әйләнеп ҡайтһа — йәрәшкән кәләше уға хыянат иткән. Намыҫын һаҡлай алмаған хыянатсыл кәләштең үҙ ире алдында бик еңел генә «аҡланыуы» был ҡобайырҙың юмористик йөкмәткеһен тәшкил итә һәм шул яғы менән ул көләмәстәр темаһына яҡын тора.

«Тәүеш Мәргән» һәм «Мораҙым менән Буһҡын» ниндәйҙер ҙур эпик сюжеттәрҙең ҡыҫҡарып ҡалған варианттарына оҡшайҙар. Һуңғыһында тормош-көнкүреш формалары (малсылыҡ һәм игенселек) араһында булған ҡаршылыҡтарҙың сағылыуы был әҫәрҙең тарихи әһәмиәтен арттыра.

Әле ҡаралған әҫәрҙәр араһында «Юлай менән Салауат» ҡобайыры поэтик төҙөлөшө һәм образдар системаһы менән айырылыбыраҡ тора. Бында инде геройҙар тормошонан айырым эпизодтар ғына түгел, ә эҙмә-эҙлекле рәүештә уларҙың «биографияһы» һүрәтләнә. Әлбиттә, был «биографиянан» шау тарихи дөрөҫлөктө эҙләргә ярамай. Унда күп эпизод һәм деталдәрҙең әүәлдән килгән эпик традициялар нигеҙендә легендар төҫкә манылыуын, эпикләштерелеүен күрмәү мөмкин түгел. Мәҫәлән, ун биш йәшлек Салауаттың айыуҙар менән һуғышыуы, геройҙарҙың дидактик әйтемдәргә, бигерәк тә көтмәгәндә килеп сыҡҡан ҡарт (ул традицион әүлиә образын иҫкә төшөрә) аҡылына таяныпэш итеүҙәре һ. б. Шул уҡ ваҡытта бында геройҙарҙың эске кисерештәрен, тормошҡа һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәрен һүрәтләүҙә тарихи йыр традициялары һәм яҙма әҙәбиәт йоғонтоһо ла һиҙелеп тора (мәҫәлән: Салауат — Гөлбәзир дуэты, Салауаттың урман киҫеүсе заводсылар менән һуғышы һәм синфи яҡтан үтә ҡырҡыу эшләнгән башҡа эпизодтар). Һуңғыһы, әлбиттә, был әҫәрҙең сағыштырмаса яҡын ара булған тарихи ваҡиғаны (йәғни 1773—1775 йылдарҙа Пугачев етәкселегендәге крәҫтиәндәр һуғышын) сағылдырыуы һәм поэтик яҡтан, башлыса, беҙҙең быуатта ғына ойошоуы менән аңлатыла.

Идея-тематик йөкмәткеһе менән дә, үҙәк геройҙары менән дә «Юлай менән Салауат» «Байыҡ Айҙар сәсән» ҡобайырына яҡын тора, хатта уның дауамы һымаҡ күренә.

Батырҙар тураһындағы ҡобайырҙарҙа уларҙың бөтәһе өсөн уртаҡ булған бер үҙенсәлекте күҙәтергә мөмкин. Беренсенән, геройҙарҙың Салауат батырҙан башҡалары ғәмәлдә ерле әһәмиәткә эйә булған шәхестәрҙе кәүҙәләндерәләр. Уларҙың бары бер вариант-

та, бер ауылда ғына яҙып алыныуы — халыҡтың ултыраҡ тормошҡа күсеүенә бәйле күренеш: һәр төбәк үҙ батырын тыуҙыра, ҡобайыр уның хаҡындағы иҫтәлек булып шул тирәлә генә йәшәй. Был инде ҙур эпос геройының ваҡланыуы, конкрет шәхестәргә тарҡалыуы тигән һүҙ, ләкин шул уҡ ваҡытта урындағы сәсәндәргә «таныш» булған был геройҙың «биографияһы», уның батырлыҡтары бер ҙә ентекләп, конкретләштерелеп һөйләнмәй, ә шаблонға әйләнгән поэтик деталдәр менән генә ҡылыҡһырлана. Һөҙөмтәлә образ — исеме ерле халыҡ хәтерендә һаҡланған батырҙың үҙ йөҙөн, индивидуаль һыҙаттарын түгел, ә ил менән батыр араһындағы идеаль мөнәсәбәттәрҙе дөйөмләштерә. Баязит тә, Аҡшам да, Тәүеш тә, башҡалары ла, асылда, ил өсөн ҡорбан булған батырҙар булып алға баҫа.

Икенсенән, геройҙар ни саҡлы ғына ғәйрәтле батырҙар һүрәтендә характерләнмәһен, оло эпос геройҙарынан айырмалы булараҡ, һәр ҡайһыһында әйтелеп бөтмәгән ниндәйҙер һағыш, үкенес, ауыр яҙмыш сағыла. «Салауат батыр», «Сүкем батыр», «Буранғол ҡашҡа» ҡобайырҙарында бынн «фәлән батыр ир ине» рәүешендә үткән заманды һағышлы һүрәтләү формаһы һиҙҙереп торһа, ҡалғандарында геройҙарҙың фажиғәле яҙмышын йә туранан-тура хәбәр итеү, йә шуға ишара яһау ауыр тойғо ҡалдыра. Башлыса, ҡаһарманлыҡты данлаған, халыҡ батырҙарын, ғәҙәттә, яҡты буяуҙарҙа һүрәтләгән эпос жанрына пессимизмға яҡын тойғо һәм кисерештәрҙең килеп инеүе осраҡлы хәл түгел, әлбиттә. Донъяла ғәҙеллекте таба алмай яфаланыу, Рус батшаһын «аҡ батша» тип ҡабул итеп, ғәмәлдә унан да алданыу, әленән-әле азатлыҡ даулап та, һәр күтәрелештең фажиғәле тамамланыуы — былар бөтәһе лә халыҡ күңелендә ауыр тойғоларҙы, ҡотолғоһоҙлоҡ ҡараштарын тыуҙырған, әммә шул уҡ ваҡытта ҡобайырсылар ҡәһәрле замап тыуҙырған әрнеүҙәргә күмелеп кенә лә йәшәмәгән, уның сәбәпселәрен дә эҙләгәндәр. «Тәүеш Мәргән» ҡобайыры, мәҫәлән, ғәҙәттә, бер цикл формаһында һөйләнгән әйтемдәрҙе ослап ҡуйған традицион юлдар менән тамамлана:

> Һай, бер әҙәмде бай итер,
> Бер әҙәмде юҡ итер;
> Байҙарҙың кейгәнен
> Ҡамҡа менән сук итер,
> Ашағанын-эскәнен
> Ҡаҙы менән ял итер!
> «Йә, бер аллам, йә, бер ҡаҙир!» — тигән саҡта,
> Берәүҙең яңғыҙ ҙа яңғыҙ башын
> Юҡ итер, ау, юҡ итер.

Был инде донъяның шундай тигеҙһеҙлеге өсөн аллаға тел тейҙереү, ризаһыҙлыҡ белдереү булып тора.

XVI—XVIII быуаттарҙа башҡорт-ҡаҙаҡ бәйләнештәре ҡатмарлы төҫ ала. Бер яҡтан, ике халыҡтың хеҙмәтсән ҡатламы, ҡан ҡәрҙәшлеккә таяныр, үҙ-ара татыулыҡҡа, дуҫлыҡҡа ынтыла. Үҙенең бөтә рухи байлығы менән уртаҡлашып йәшәй. Башҡорт һәм ҡаҙаҡ халыҡтарының ауыҙ-тел әҙәбиәтендә шул нигеҙҙә барлыҡҡа килгән

уртаҡ әҫәрҙәр күп («Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Тарғын менән Ҡужаҡ» һ. б.). Ерәнсә сәсән шикелле уртаҡ сәсәндәре булған. Бисәнбай тигән бер ҡаҙаҡ аҡынының башҡорт сәсәне Ҡобағоштоң сәсәнлегенә һоҡланып сығарған бер өләңе XX быуат башында Алсынбай аҡын арҡылы Мөхәммәтша Буранғоловҡа килеп юлыҡҡан (тексы Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешенә ҡарата бирелгән аңлатмаларҙа килтерелә). XVIII быуатта йәшәгән Бохар аҡындың дидактик йөкмәткеле ҡайһы бер өләңдәре башҡорттар тарафынан үҙҙәренә ҡабул ителеп, беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. (Аңлатмалар бүлегендә 76-сы иҫкәртмәне ҡарағыҙ). «Ялп-йолп иткән яңғыҙ ябалаҡ», «Бейек тауҙың үлгәне» һәм ҡайһы бер дидактик ҡобайырҙарҙа, бигерәк тә «Ир-егеттең ғүмере тураһында» һөйләнгән әйтемдәрҙә, ентекләберәк тикшерә китһәң, күп кенә поэтик образ һәм эстетик мотивтәрҙең ҡаҙаҡ аҡындарының ижадтары менән уртаҡ булыуын асырға мөмкин. Ҡыҫҡаһы, башҡорт-ҡаҙаҡ фольклор бәйләнештәре — башҡорттарҙа ла, ҡаҙаҡтарҙа ла төплө тикшеренеүҙәрҙе көтөп ятҡан актуаль проблема ул [1].

Икенсе яҡтан, феодаль ҡатламдар, байлыҡ артынан ҡыуып, үҙ күршеләренә сабыуыл яһау, малдарын ҡыуып алып китеү (барымта) һәм шуға яуап рәүешендә ҡарымтаға килеү кеүек алама ғәҙәттәрҙе дауам итәләр, ҡәрҙәш халыҡтарҙы ҡанлы бәрелештәргә юлыҡтырып, үҙ-ара үсләшеү тойғоһон тыуҙыралар. Хеҙмәтсән массаларҙың дуҫлыҡ, туғанлыҡ ынтылыштарына зыян иткән бындай феодаль көрәштәр халыҡ ижадынан шулай уҡ ситтә ҡалмаған, яңы тарихи шарттарҙа эпик поэзияның үҙенсәлекле бер темаһына әйләнгән. «Ҡарас менән Аҡша», «Билал менән Дүсән» — шуның миҫалдары.

Башҡарған эштәренә ҡарағанда, бында геройҙар ил өсөн ҡорбан булған батырҙарҙан күпкә ҡайтыш: хикәйәт 1750 йылдарҙа Башҡортостандың хәҙерге Учалы районы Науруз ауылы башҡорттары менән күрше йәшәгән ҡаҙаҡтар араһында мал өсөн бер бәрелеште генә тасуир итә, әммә, шуға ҡарамаҫтан, һоҡландыра, әҫәрләндерә. Был инде сюжеттең художество бөтөнлөгө, уның гуманистик йөкмәткеһе, образдарҙың сәнғәтсә камил эшләнеше менән аңлатыла.

Батырҙар тураһындағы теге ҡобайырҙарҙан айырмалы буларaҡ, Ҡарас батыр образында беҙ штампыға әйләнгән уртаҡ һыҙаттарҙы ғына түгел, ә уның үҙ йөҙөн, үҙ батырлығын күрәбеҙ, ләкин уның индивидуаллеге, барымтасыларға ҡаршы сығып, үҙ малы өсөн көрәшеүсе бер батыр шәхесенә генә лә ҡайтып ҡалмай. Хикәйәт Ҡарас батырҙы тап борондан килгән традицион алымдар

---

[1] Ошо йәһәттән беренсе эш булараҡ, ҡаҙаҡ әҙибе Бөркөт Исҡаҡовтың «Ҡаҙаҡ-башҡорт әҙәбиәттәре бәйләнеше тарихенән» тигән хеҙмәте ҡыҙыҡлы.— «Казахская литература и ее интернациональные связи», Алма-Ата, 1973, стр. 78—126.

менән ҡаһарманлыҡ идеалдары яҡтылығында һүрәтләй. Һөҙөмтәлә индивидуаллаштерелгән эпик герой һәм уның сәнғәтсә дөйөмләштерелгән образы алға баҫа. Шуныһы ла бик мөһим: бында батырҙар ҡылығы шау реалистик шарттарҙа реалистик деталдәр ярҙамында асыла. Ошо йәһәттән батырҙарҙың үҙ-ара әйтеше һәм атышы ҡыҙыҡлы.

Әйтештә, мәҫәлән, Ҡарастың да, Аҡшаның да үҙҙәренә үҙҙәре биргән характеристика иғтибарҙы тарта. Уны, әлбиттә, батырҙарҙың үҙ-ара маҡтанышыуҙары тип ҡарарға ярамай, ә эпик геройҙың үҙ таныҡмаһы, эпоста ғәҙәткә ингән күренеш тип аңларға кәрәк. Бындай традицион таныҡмаларҙа, ғәҙәттә, геройҙың нәҫел ебе асыла, быға саҡлы эшләгән батырлыҡтары һанала, алда торған маҡсаты әйтелә. Бында ла шулай, әммә Ҡарас менән Аҡшаның әйтеше геройҙарҙың үҙ таныҡмаларынан ғына тормай. Дошманлашыу хәленә еткән батырҙар, Тарғын менән Ҡуҙаҡ шикелле, үҙ-ара мыҫҡыллашыу юлына ла баҫмайҙар, ә тәүге осрашыуҙа уҡ бер-береһен үҙенә тиң батыр итеп күрәләр, үҙ-ара ихтирам белдерәләр. Ошо тойғоға бәйле рәүештә, хикәйәткә гуманизм идеяһы килеп инә.

Ҡарас батыр мәсьәләне һәүетемсә хәл итеү яғында:

> Ҡан түкмәй, илеңде һин күрер булһаң,
> Күк, ала — күп йылҡыны ташла тимен!

Ләкин барымтасылар башлығы, үҙ яғында көстөң күплегенә таянып, ғәҙел тәҡдимде кире ҡаға.

Аҡшаның үлеме — ике батыр көрәшендә береһенең ғәҙәти еңелеүе генә түгел, ә барымтасылыҡ юлына баҫҡан батырҙың енәйәтенә күрә яза алыуы ул. Хикәйәт иҫке ғәҙәтте хөкөм итә, ысын батырлыҡты ғәҙеллек, кешелеклелек тойғолары менән бәйләй. Аҙаҡ Ҡарастың Аҡшаны үҙе үк тәрбиәләп ерләүе һәм баш осона һаҙағын ҡаҙап китеүе — был инде «үҙ илендә тиң таба алмай йөрөгән» Аҡшаның батырлығына батырҙарса хөрмәт күрһәтеү, үҙенсәлекле апофеоз булып тора. Ике халыҡ батырҙарына үҙ-ара үсләшергә, ҡарымталашырға урын ҡалдырмай. Беҙҙең өсөн был поэтик әҫәр шундай гуманистик йөкмәткеһе менән, айырым бер фактты юғары сәнғәтсәнлек ҡалыбына һуғып, оло мәғәнә аңлатыуы менән ҡиммәт.

Шулай итеп, тәү ҡарашта өҙөк-ярҡа ғына күренһәләр ҙә, айырым батырҙар тураһындағы ҡобайырҙар башҡорт халыҡ эпосын өйрәнеүҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Уларҙа геройҙың драматик ситуацияларҙағы кисерештәре һүрәтләнеү, образдарҙа һағыш, трагик яҙмыш тойғоларының сағылышы — һис тә осраҡлы түгел, ә яңы тарихи шарттарҙа эпос үҫешендәге мөһим үҙгәрештәргә, атап әйткәндә, эпик поэзияның тормошҡа яҡынайыуына, реалистик деталдәр менән бергә лирик мотивтәрҙең дә күберәк урын ала килеүенә бәйләнгән законлы күренеш. Беҙҙең быуатҡа яҡын тарихи шарттарҙа халыҡтың милли йәшәйеш үҙенсәлектәрен, социаль һәм рухи ынтылыштарын башлыса тормошсан һүрәттәрҙә сағыл-

дырыуы менән «Ҡарас менән Аҡша» ла, «Юлай менән Салауат» та ошо һығымтаны нығыта.

* * *

Борон кешенең сәсәнлеген, сәсәндәрҙең йорлоғон, тапҡырлығын һынау ерлегендә формалашҡан үҙаллы жанр — әйтештәр булғаны билдәле, ләкин үҙ ваҡытында яҙып алынмау арҡаһында, улар үҙҙәренең саф формаларында беҙҙең быуынға килеп етә алмаған йәки бик аҙы ғына һаҡланып ҡалған. Уларының да телдән-телгә күсеп йөрөү процесында йә авторҙары (әйтешеүселәре) онотолған, йә легендалар менән үрелгән, ҡайһы бер урындары шиғри яҡтан боҙолған, идея ҡаршылыҡтары килеп кергән.

Әйтеш — сәсәндәр эше. Уның башланғыс тамырҙары йомаҡ жанрына барып тоташһа, үҙаллы үҫешкә юл ярыуы әкиәттәрҙә батырҙарҙың зирәклеген киңәйәле һүҙ менән һынау традицияһынан килә. Был китапҡа алынған әйтештәрҙең күбеһе шул хаҡта һөйләй. Шул уҡ ваҡытта жанрҙың тап үҙ формаһында ҡайһы бер эпик әҫәрҙәргә килеп инеүе үҙ сиратында эпос традицияларына һиҙелерлек йоғонто яһай, яңылыҡ тыуҙыра.

Һәр әйтештең идея йөкмәткеһе һәм шиғри үтәлеше әйтешеүсе сәсәндәрҙең импровизаторлыҡ һәләтенә, синфи позицияһына һәм, әлбиттә, конкрет тарихи шарттарға бәйләнгән. Мәҫәлән, «Мәхмүт сәсәндең йомағы, уға үҙенең яуабы» исемендә алынған әҫәр махсус ойошторолған йыйында Мәхмүт менән ярышырлыҡ сәсәндең табылмауын ғына түгел, ә Мәхмүт сәсәндең халыҡсан характерен, тормошҡа хеҙмәтсән масса күҙлегенән ҡарауын күрһәтә.

Байыҡ сәсән менән Бохар аҡындың, Ҡобағош менән Аҡмырҙаның әйтеше бөтән шарттарҙа бара. Был әйтештәрҙе ике сәсәндең үҙ-ара шиғри ярышы тип кенә лә булмай. Бында көсөргәнешле психологик ситуацияла антагонистик синыф вәкилдәре, ҡапма-ҡаршы синфи ҡараштар бәрелешә. Бохар аҡын менән Аҡмырҙа сәсән артында власть тора. Улар икеһе лә, хандар йомошон үтәп, алдан әҙерләнгән йомаҡтары менән хандарға баш бирмәгән сәсәндәрҙе хур итмәксе, әммә әйтештә улар үҙҙәре мәсхәрәгә ҡала. Байыҡ менән Ҡобағош сәсәндең яуаптарында дөрөҫлөк, халыҡ идеалдарына тоғролоҡ сағылһа, тегеләрҙең йомаҡтарында — миңминлек һәм кәпәренеү, үҙ хакимдәрен ололарға тырышыу һәм ялағайланыу.

Яманлыҡты яҡламаҫ, дошман хәтерен һаҡламаҫ, яҡшылыҡты һөйөр һәм илдең зарын һөйләр сәсәндәрҙе генә халыҡ үҙ сәсәне итеп танығаң, исемдәрен, хаҡ һүҙҙәрен ололап, хәтер һандығына бикләгән, яңы быуындарға мираҫ итеп ҡалдыра килгән. Күп быуындар телендә Ҡобағош сәсән менән Байыҡ сәсән, Ерәнсә сәсән кеүек үк, легендар образға әйләнгән.

Китапҡа ингән әйтештәрҙең күбеһе киңәйәле һорауҙарға, йомаҡтарға ҡоролған. Был, күрәһең, жанрҙың борондан килгән төп формаһы. Уның үҙ ҡағиҙәһе бар. Беренсенән, һорау — һәр осраҡта сәсәндең үҙе тарафынан төҙөлгән оригиналь йомаҡ булыр-

ға тейеш. Шул уҡ ваҡытта ул ғәҙәти йомаҡтар шикелле аллегориянан тоҙолә. Икенсенән, яуап һорауҙа әйтелгән аллегорик образ менән башлана, һөҙөмтәлә үҙенсәлекле рефрен барлыҡҡа килә.

Ҡайһы бер осраҡта, бигерәк тә социаль темаларға ҡағылған әйтештәрҙә, аллегория бик абстракт, үтә ситләтелгән характерҙә булырға мөмкин. Мәхмүт сәсәндең йомаҡтары, мәҫәлән, шундай характерҙә. Ундай йомаҡтарға һәр кемдең тиҙ генә яуап таба алмауы тәбиғи. Уларға Мәхмүт сәсәндең үҙ яуабы уның ғәҙәттән тыш зирәклеген, демократик рухын сағылдырыу менән бергә был әйтештең социаль яңғырашын, эстетик балҡышын бермә-бер арттыра.

Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең, Байыҡ сәсән менән Бохар аҡындың әйтештәре кинәйәле һүҙгә ҡоролоуҙары менән ҡатмарлы. Бында айырата шуныһы ҡыҙыҡ: кинәйәле һорауға яуап — аллегорияға ҡоролған әйтештәрҙәге һымаҡ бер төгәл, ә ике төрлө булырға һәм билдәле позициянан икеһе лә дөрөҫ булырға мөмкин, әммә мәғәнәүи яҡтан береһе икенсеһенә ҡаршы килә йәки хатта юҡҡа сығара. Яуаптарҙың дөрөҫөрәге, көслөрәге позицияның нисклығы, нигеҙлерәк булыуы менән билдәләнә, әйтеш ярылып ятҡан социаль бәрелеш тоҫоп ала. Шуға ҡарап сәсәндәрҙең характере, донъяға ҡараш позициялары асыла.

«Бер тигәс тә ни яман?» тигән әйтеш өң оҡшашлығына ҡоролоуы менән үҙенсәлекле: һорау ниндәй өн менән башланһа, яуап та шул уҡ өн менән башлана. Был — мотлаҡ шарт. Ошо нигеҙҙә яуап биреүсенең (сәсән булмаҫҡа ла мөмкин) зирәклеге, аҡыл егәрлелеге, тапҡырлығы һыналған.

Әйтештең был формаһында яуаптың төрлөсә булыуына киң мөмкинлек бар: һәр кеше, үҙ ҡараштарына таянып, үҙе аңлағанса яуап бирергә ирекле, тик әйтештең төп шартын ғына боҙмаһын. Һөҙөмтәлә яуап биреүсенең зирәклеге менән бергә уның ниндәй идеологияға таянғанлығы ла асыҡ сағыла.

«Һары балды кем эсер?» йәки «Ни нәмәлә нимә юҡ?» иһе «ябай» һорауҙарға ҡоролған әйтештәр ҡатнашыусыларҙан мәғәнәле яуап талап итә.

Дидактик ҡобайырҙар (әйтемдәр) әҙәбиәт ғилемендә һәм фольклористика фәнендә ярайһы уҡ яҡтыртылған.

Бүлектәге тәүҙә бирелгән миҫалдар йыш ҡына бер традицион инеш һүҙ аҫтында айырым әйтемдәрҙән тора. Күрәһең, улар бер башҡарыусынан шул тәртиптә яҙып алынғандар, ләкин быны тематик яҡтан да, идея берлеге яғынан да ныҡлы композиция тип булмай. Ул — шартлы бер теҙмә генә. Традицион инеш һүҙ үҙе үк шуға юл ҡуя: башҡарыусы сәсән уйына ни килһә, башта шуныһын әйтә, аҙаҡ — икенсеһен, өсөнсөһөн... Әйтемдәрҙең һаны башҡарыусы сәсәндең репертуар байлығына, ә йөкмәткеһе, берҙән, башҡарыусының үҙенең характер үҙенсәлегенә һәм идеологик платформаһына, икенсенән, аудиторияның социаль составына бәйләнгән. Шуға ла бер башҡарыусы репертуарындағы әйтемдәрҙең ҡайһы берҙәре икенсе башҡарыусының репертуарында ла ҡабатланырға

ә башкалары йә төшөп ҡалырға, йә бөтөнләй икенсе идеологик төҫ алырға мөмкин.

Дидактик ҡобайырҙар башлыса халыҡтың быуаттар буйына туплаңа килгән тормош тәжрибәһен, идеалдарын, юғары граждан-лыҡ тойғоларын һәм әхлаҡ принциптәрен камил эшләнгән шиғри юлдарға, поэтик образдарға төрөп аңлата, донъяға ҡараштарын сағылдыра.

Дидактик ҡобайыр-әйтемдәрҙә ҡараштар төрлөлөгөн сағыл-дырған миҫалдар күп. Улар араһында байҙарға һәм дин әһелдә-ренә ҡарата хеҙмәтсән массаның кире мөнәсәбәтен, көлөү-хурлау тойғоларын һиҙҙереп торғандары ла бар. «Байҙың күрке» һәм «Мулла тураһында» тигән әйтемдәр, асылда, шундай сатирик бу-яуҙарҙан тора.

Уҙған быуаттарҙа халыҡтың диндар булыуы тәбиғи, әлбиттә, ләкин шул ваҡытта ул ортодоксаль динсе лә түгел. Фольклор әҫәрҙәрендә динилек бүтән ҡараштар менән бергә ҡушылып, йә ҡаршылыҡлы төҫ ала (мәҫәлән, «Мал ни өсөн кәрәк?»), йә был донъяла социаль тигеҙлек, ғәҙеллек булмағаны өсөн хатта алланың үҙенә тел тейҙереү һымаҡ яңғырай (мәҫәлән, «Алланың ҡөҙрәтә шундайҙыр...»). Шуға күрә теге йәки был әҫәрҙә дини ҡараштар-ҙың да сағылып үтеүе ул әҫәрҙәрҙең халыҡсанлығын инкар итмәй, бәлки уҙған замандың тәбиғи бер һыҙаты булып тора.

## 3. МӨХӘББӘТ ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТТӘР, ҠИССАЛАР

Көнсығыш классик поэзияһында ҙур урын алған романик (мө-хәббәт) дастандар йоғонтоһонда тыуып, төрки телле халыҡтар араһында киң таралған уртаҡ сюжеттәр бар. «Йософ менән Зө-ләйха», «Таһир менән Зөһрә», «Буҙйегет» һәм «Сәйфелмөлөк» — шундай әҫәрҙәр.

Быларҙың йәшәү тарихе үҙенсәлекле. «Йософ—Зөләйха», «Та-һир—Зөһрә», «Буҙйегет» сюжеттәре башта халыҡ ижадында тыуған-дар. Аҙаҡ айырым шағирҙәр тарафынан эшкәртелеп, ҡиссалар баҫы-лып сыҡҡан, яңынан-яңы әҫәрҙәр — романтик поэмалар, драмалар, хатта романдар яҙылған. Яҙма ҡиссалар баҫма китап формаһында ла, ҡулдан күсермәләрендә лә киң таралып, халыҡ телендә йә-шәүҙең яңы дәүерен, яңы баҫҡысын үткәндәр, байтаҡ үҙгәрештәр кисергәндәр.

Мәҫәлән, «Йософ—Зөләйха» сюжетенең тәү башлап миф-леген-да формаһында ассиро-вавилондар тарафынан ижад ителеүе бил-дәле. Артабан беҙҙең эраға саҡлы 8—5-се быуаттарҙа ул боронғо йәһүд (еврей) телендә Библияның «Ветхий завет» тигән беренсе киҫәгенә «Иосифтең һатылыуы» исемендә ингән. Беҙҙең эраның VII быуатында «Йосыф сүрәсе» исемендә Ҡөрьәндә урын алған. Төрки халыҡтары араһында ул ислам дине менән бергә аңа шул Ҡөрьәндәге «Йосыф сүрәсе», бигерәк тә уның тәфсирҙәре аша тарал-ған булырға тейеш.

Библияға ингән «Иосифте һатыу» хикәйәтенә донъя әҙәбиәтен-дә күп яҙыусылар әленән-әле әйләнеп ҡайтҡандар, прогрессив не-

мең яҙыусыһы Томас Манн хатта «Иосиф һәм уның ағалары» тигән бер роман яҙған. Мосолман донъяһында ла ул күп яҙыусыларҙы әүәл-әүәлдән ҡыҙыҡтыра килгән. Беренселәрҙән булараҡ, уға мәшһүр «Шаһнамә» эпопеяһының авторы Фирдәүси иғтибар иткән һәм X быуатта «Йосыф вә Зөләйха» поэмаһын яҙған.

Төрки телендә «Йосыф вә Зөләйха» ҡиссаһы тәү башлап Ҡол Ғәли тарафынан XIII быуатта яҙылған һәм 1839 йылда баҫылып сыҡҡанға тиклем ҡулъяҙма формаһында киң таралған. Ҡулъяҙма күсермәләре беҙҙең көндәрҙә лә табылғылап тора. СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалында ғына, мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа башҡорт ауылдарында табылған ете ҡулъяҙма китап һаҡлана.

«Таһир менән Зөһрә» һәм «Буҙйегет» сюжеттәренең үҫеш тарихе ул ҡәҙәр оҙон түгел. Тәүгеһе Сайяди тарафынан яҙылған «Дастан Бабахан» («Бабахан дастаны») тигән поэмала бик тулы һүрәтләнә. Ләкин үҙ ваҡытында бер тапҡыр ҙа баҫылмаған был дастандың ҡасан яҙылыуы хаҡында асыҡ ҡына әйтеп булмай. Татар әҙәбиәтселәре уны XIV быуат ахырында, XV быуат башында ижад ителгән тип иҫәпләйҙәр [1]. Әммә башҡа ғалимдәр (мәҫәлән, X. Ҡороғлы) Сайядиҙе XVII—XVIII быуаттарҙа йәшәгән үзбәк шағире тип раҫлайҙар. Энциклопедияларға ла ул шулай инеп киткән.

«Таһир—Зөһрә» сюжетенең XIX быуатта Әхмәт Уразаев-Ҡормаши тарафынан әҙәбиләштерелеүе йәки, үҙе әйткәнсә, «ғосманлы тәуарихларыннан күреп, еңелерәк нуғай һәм ҡаҙаҡ теленә ирекле рәүештә тәржемә ителеүе», был тәржемәнең 1876 йылдан алып, Октябрь революцияһына саҡлы бер нисә тапҡыр баҫылып сыҡҡанлығы билдәле. Ҡормашиҙан дүрт йылға элегерәк В. В. Радлов Тобол татарҙарынан яҙып алған бер вариантын төрки халыҡтарынан үҙе йыйған әҫәрҙәр йыйынтығында баҫтырған [2]. Шул уҡ темаға XIX быуатта төрөкмән шағире Молланепестең дә «Зөһрә менән Таһир» исемле бер поэма яҙғанлығы, был уртаҡ сюжеттең шулай уҡ азербайжан, ҡарағалпаҡ, нуғай халыҡтарында ла киң таралғанлығы мәғлүм.

«Буҙйегет» — шулай уҡ күп кенә төрки халыҡтары араһында ҡулъяҙма формала таралған әҫәр. «Бос жигит» исемле бер ҡулъяҙмаһы В. В. Радловтың баяғы йыйынтығының өсөнсө киҫәгендә [3] ҡаҙаҡсаға әйләндереп баҫылған. Сағыштырыу был варианттың беҙҙең ошо китапта бирелгән ҡулъяҙма менән бер булыуын күрһәтте.

Татар әҙәбиәте тарихендә Әхмәт Уразаев-Ҡормаши авторлығына бәйләп йөрөтөлгән икенсе бер ҡулъяҙма текст 1874 йылда Ҡазан университеты типографияһында «Киссаи Буз йикет» исемендә айырым китап булып сыҡҡан, Октябрь революцияһына

---

[1] Борынгы татар әдәбияты, Казан, 1963, 250-се бит.

[2] В. В. Радлов. Образцы народной литературы тюркских племен, живущих в Южной Сибири и Джунгарской степи. Часть IV, Спб., 1872.

[3] В. В. Радлов. Образцы народной литературы тюркских племен... Часть III, Спб., 1870. Ошо уҡ текст, бер аҙ ҡыҫҡартылып, 1976 йылда Алма-Атала сыҡҡан «Ғашыҡ-наме» китабында баҫылған.

тиклем 13 тапкыр баҫылған. Әхмәт Уразаев «Таһир илә Зөһрә» китабының ахырында әйтеп үткән мәғлүмәттәрҙән «Буҙйегет» ҡиссаһын да «ғосманлы тәуарихларыннан күреп», уны еңелерәк нуғай һәм ҡаҙаҡ теленә ирекле рәүештә тәржемә иткәнлеген аңларға мөмкин.

«Буҙйегет» ҡиссаһының йәнә дүрт баҫма тексы билдәле [1].

Беҙҙең китапҡа алынған вариант (ҡулъяҙмаһында ул **«Әл-ҡисса Бус йекет»** тип атала) 1842 йылда Өфөлә яҙылған. Яҙыусыһы — әҫәргә инеш һүҙҙән һәм сюжет ағышына ҡарата әйтелгән «ғибрәт һүҙҙәре»нән (текста ундай һүҙҙәр алты урында осрай) күренеүенсә, Баһауи (ҡулъяҙмала — Баһави) фамилиялы кеше [2]. Береһе (Радлов баҫтырған текст) тотош ҡаҙаҡсалаштырып баҫылған, икенсеһе (ошо китапҡа алынған текст) төрлөсә яҙылып («Аңлатмалар» бүлегендә ҡулъяҙмаға характеристиканы ҡарағыҙ), төрлөсә аңлатырға юл ҡалдырған ҡулъяҙмаға таянып ҡына авторҙың милләтен билдәләү мөмкин түгел. Шулай ҙа ҡулъяҙманың ҡайһы бер тел үҙенсәлектәренә, башҡортса яҙылышлы һүҙҙәр һәм грамматик формалар күп осрауына ҡарағанда, Баһауи көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда ҡаҙаҡтар менән аралашып йәшәгән кеше булһа кәрәк. Һәр хәлдә уның Өфө менән тығыҙ бәйләнеш тотҡан, шул уҡ ваҡытта бөтә төрки һәм Көнсығыш культураһынан мәғлүмәте булған, үҙ заманының эстетик зауыҡтарын яҡшы аңлаған, сәсән телле, ңескә күңелле кеше булыуы бәхәсһеҙ.

Беҙ эш иткән ҡулъяҙма ниндәй (топ йәки күсермә) нөсхә булыуына ҡарамаҫтан, уның Радлов баҫмаһы менән берҙәйлеге ҡиссаның ниндәй сәбәптәндер авторҙың үҙе тарафынан яҙылып бөтмәүен, тамамланмаған хәлдә лә ҡулдан-ҡулға киң таралыуын раҫлай.

Ҡиссаларҙа матурлыҡ идеалына бәйле хыялдарҙа тыуған саф мөхәббәт сағыла, сүлдәр, диңгеҙҙәр аша бер-береһенә тартылған ғашиҡтәрҙең фажиғәле яҙмышы хикәйә ителә. Асылда, был— урта быуат Көнсығыш поэзияһында киң таралған романик дастандар (поэмалар) темаһы, күп әҫәрҙәрҙә ҡабатланған традицион сюжет. Әммә беҙҙең өсөн бында айырата шуныһы ҡыҙыҡлы: геройҙарҙың эш-ҡылыҡтары, сюжетте хәрәкәткә килтергән мотивтәр башлыса фольклорҙан, атап әйткәндә, героик эпос һәм батырҙар тураһындағы әкиәт жанрынан алынғандар. Буҙйегет менән Ҡарасәс, мәҫәлән, бер-береһен тоштәрендә, ә Сәйфелмөлөк Бәҙиғолъямалдың һүрәтен күреп ғашиҡ булалар, Таһир менән Зөһрә — тыумаҫ борон уҡ йәрәштерелгән балалар, Йософто көнсөл ағалары ҡойоға

[1] Б у з у ғ л а н. Әхмәтбик һәм Юсыфбик, Ҡазан, 1896, икенсе баҫмаһы — Ҡазан, «Хөсәенов», 1910; Ҡ и с с а и  Б у з ж и г е т. Нуғайсанан ҡаҙаҡсаға мулла Аҡылбик бине Сабал тәржемәһе, Ҡазан, «Матбуғаи Кәримиә», 1911. Б о з у ғ л а н. Ҡарағалпаҡтың халыҡ дастаны (Хәйретдинов Кияс жрауҙап Ҡ. Мамбетназаров яҙып алған), Нокис, 1961; Б о з  й и г и т (телдән Б. А. Ҡарасов яҙып алган).— «Ноғай халыҡ йырлары», М., «Наука», 1969.

[2] Был хаҡта тулыраҡ мәғлүмәттәрҙе түбәндәге мәҡәләнән алырға мөмкин: Н у р  З а р и п о в. «Буҙйегет» ҡиссаһының Өфө варианты.— «Ағиҙел», 1979, 12; «Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре», Н. Т. Зарипов менән Ғ. Б. Хөсәйенов редакцияһында, Өфө, 1979.

һалып китәләр; Буҙйегет үҙенең йән дуҫы менән икәүҙән-икәү Зәйтүн ғәскәренә ҡаршы тороп, уның йөҙәрләгән һалдатын ҡыра; Буҙйегеттең үҙен иһә уның итек табанына алтыға боклап һалған алмас ҡылысы ғына киҫә ала һ. б. һ. б.

Ҡиссаларҙың хикәйәләү стилендә фольклор саралары, фольклор формалары шулай уҡ ҙур урын ала. «Йософ менән Зөләйха» ҡиссаһы, мәҫәлән, халыҡ телендә йөрөй торғас, ҡисса формаһын бөтөнләй юғалтып, баштан-аяҡ әкиәт формаһына күскән. «Әл-ҡисса Буҙйегет» әҫәрендә ҡобайыр һәм бәйет формалары, сәсәндәр ижадына хас һүрәтләү саралары (бигерәк тә әйтемдәр, тапҡыр һүҙәр) ҙур урын ала. Ҡары ахундың йыры — шау дидактик ҡобайырҙар стилендә. Ҡыҫҡаһы, шул: романик ҡисса-хикәйәттәрҙә фольклор һәм яҙма поэзия традициялары бергә үрелеп, тема ике арала торған формала яңы идея-эстетик кәүҙәләнеш ала. Гуманистик идеалдар яҡтылығында мөхәббәт ирке яҡлана, ғашиҡтәрҙе фажиғәле яҙмышҡа дусар иткән социаль тигеҙһеҙлеккә һәм ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы, үҙһүҙле тирандарға ҡаршы әсе нәфрәт белдерелә.

Социаль мотивтәр «Таһир менән Зөһрә» һәм «Буҙйегет» поэмаларында көслөрәк бирелгән. Күп төрлө ҡаршылыҡтарҙы еңеп, тауҙар-диңгеҙҙәр аша бер-береһенә ашҡынған саф йөрәкле Буҙйегет менән Ҡарасәс йәки Сәхибьямалдың һәләкәте — был инде үкенесле яҙмыш ҡына түгел, ә шул уҡ социаль тигеҙһеҙлектең ғибрәтле бер фажиғәһе. Шуға бында тирандарға, кешенең үҙ рухын, уның юғары тойғоларын һәм гуманистик ынтылыштарын иҫәпкә алмаған феодаль тәртип-йолаларға ҡарата асыу сағыла.

Йәштәрҙең иркен сикләгән феодаль мөнәсәбәттәр, реакцион йола һәм дини ҡанундар мөхәббәт трагедияһын тыуҙыра. «Фажиғәле ҡапма-ҡаршылыҡтың бындай тибы феодаль йәмғиәттә генә барлыҡҡа килә» [1].

Таһир менән Зөһрә, Буҙйегет менән Ҡарасәс һәм, өҫтәргә кәрәк, Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу, Тарғын менән Аҡйондоҙ (Аҡъюныс) трагедияһы ла, асылда, шул фекерҙе ҡеүәтләй.

Беҙҙең өсөн бында йәнә шуныһы әһәмиәтле: мөхәббәт темаһына бәйле рәүештә халыҡ ижадында яңы эстетик мотивтәр, яңы төшөнсәләр тыуа. Был, бөтәһенән бигерәк, матурлыҡ төшөнсәһе.

Дөрөҫ, халыҡ ижадында матурлыҡтың үҙен тасуирләп күрһәтеү, һынландырыу юҡ дәрәжәһендә. Егет йәки ҡыҙҙың матурлығы, ғәҙәттә, «бик һылыу», «бик матур», «сибәр» кеүек дөйөм эпитеттәр йәки «айҙай һылыу», «ай кеүек нурлы йөҙлө» ише традицион сағыштырыуҙар менән генә һыҙатлана. Әгәр фольклорҙа геройҙың портретен һүрәтләү, ғөмүмән, булмауын иҫәпкә алһаҡ, быға аптырарға урын ҡалмай, әммә был «кәмселек» мөхәббәт хикәйәттәрендә икенсе яҡ менән ҡаплатыла: ғашиҡтәрҙең матурлығы уларҙың сафлыҡтарын, бер-береһенә тоғролоҡтарын, юғары тойғоларын хикәйәләү аша тултырыла. Мөхәббәт тойғоларын һүрәтләүҙә инде сәнғәтсә һүҙ оҫталары һис ниндәй наҡыҫлыҡ күрһәтмәгән-

---

[1] Ю. Б. Борев. Основные эстетические категории. «Высшая школа», М., 1960, стр. 154.

дәр, һәр кемдең күңелен елкендерерлек иң сағыу романтик буяуҙар менән эш иткәндәр. Быныһы инде, асылда, геройҙарҙың характер үҙенсәлектәрен һүрәтләү тигән һүҙ. Тап бына ошо тәңгәлдә «Буҙйегет» һәм «Таһир менән Зөһрә» поэмалары «Йософ менән Зөләйха» хикәйәтенән өҫтөнөрәк тора.

Ҡөрьәндәге «Йософ» сүрәһенән айырмалы буларак, хикәйәттә геройҙарҙың икеһе лә бик матур. Йософтоң нурлы йөҙөнә шаҡ ҡатып, бисәләр ит йәки әфлисун урынына үҙҙәренең бармаҡтарын турап ултырыуҙарын да һиҙмәйҙәр хатта. Был инде идеаль матурлыҡтың да иң юғарыһы, әлбиттә. Әммә ғишыҡ уты бары Зөләйха күңелендә дөрләй, уны ғына көйҙөрә. Ә Йософ иһә — үтә пассив; ул бөтә яҙмышын тәҡдиргә тапшырған. Бында, әлбиттә, Ҡөрьән йоғонтоһо ла һиҙелеп ҡала.

Таһир менән Буҙйегеткә килһәк, былар инде үҙҙәре лә, һөйгән ҡыҙҙары ла — мөхәббәт ҡорбандары, һис ниндәй ҡаршылыҡ алдында тыйылып ҡалмаған актив характерҙәр. Батша (йәки хан) ғәскәренә ҡаршы торғанда, егеттәргә эпос геройҙарына хас ғәҙәттән тыш батырлыҡ һыҙаттарының йәбештерелеүе образдарҙың эстетик әһәмиәтен арттыра. Ғорур йәштәрҙең фажиғәле үлеме — феодаль тормошҡа протест һымаҡ ҡабул ителһә, Таһир менән Зөһрәнең ҡәберҙәрендә шытып сыҡҡан гөлдәрҙең (йәки тирәктәрҙең) бергә үрелеп үҫеүе тәрән мәғәнәлә поэтик символ булып тора. Ул, ислам идеологияһына ҡапма-ҡаршы рәүештә, мөхәббәттең үлемдән көслөрәк булыуын сағылдыра. Был әҫәрҙәрҙең халыҡ араһында киң таралыуы һәм бөгөнгө көнгә тиклем йәшәүе ана шул гуманистик идеяһы менән аңлатыла ла инде.

Инде бөтә һөйләгәндәрҙән шундай һығымта яһарға мөмкин.

Феодализм осоронда халыҡ ижады тарихи ваҡиғаларға нисек кенә тығыҙ бәйләнгән булмаһын, эпоста туранан-тура ул ваҡиғаларҙың эҙмә-эҙлекле ағышын, бөтә ҡатмарлы бәйләнештәре менән тулы һәм теүәл һөйләнеүен күреп булмай, уны эҙләргә лә ярамай, сөнки тарихи ваҡиғаларҙы һәм тарихи шәхестәрҙең эшмәкәрлеген халыҡ үҙенең ынтылыштары, үҙенең идеалдары яҡтылығында эстетик аңы аша үткәрә. Һөҙөмтәлә маҡсатҡа яраҡлы поэтик традициялар ерлегендә халыҡтың үҙ фантазияһы менән тултырылған һәм тарихҡа үҙ мөнәсәбәтен, үҙ ҡараштарын сағылдырған эпик әҫәр барлыҡҡа килә; халыҡтың тарихи-милли зауыҡтарына яуап биргәндәре киң таралыуға хоҡуҡ ала, телдән-телгә, быуындан-быуынға тапшырылып, уҙған тормоштоң әҫәрләндергес бер иҫтәлеге булып йәшәй.

Эпос үҙ эволюцияһында халыҡ тормошона яҡынайған һайын, унда мифик заттар һәм фантастик образдар ғына түгел, хыялда тыуған башҡа эпик мотивтәр ҙә кәмей, йәки бөтөнләй юғала; улар урынын тормошсан ваҡиғалар, кешесел образдар, социаль көрәш мотивтәре ала; фабула йәки сюжет ҡоролошонда иң әһәмиәтле моменттәр (йәки эпизодтар) ғына бирелеп, улары ла башлыса тормошсан шарттарҙа йәки ысынбарлыҡ формаларында күбеһенсә реалистик буяу һәм деталдәр менән һүрәтләнә. Шуға бәйлә-

кешле рәүештә һуңғы заман ҡобайырҙарында һәм хикәйәттәрҙә лирик мотивтәр, кисерештәр — ҡыҫҡаһы, кешесел мөнәсәбәттәр күберәк урын ала.

Феодаль йәмғиәт үҫешендә, бер яҡтан, синфи айырымлыҡтарҙың көсәйеүе, икенсе яҡтан, ырыуҙарҙы берләштереү, үҙаллы халыҡ булып ойошоу тенденцияһы — был ҡатмарлы тарихи процесс эпоста шулай уҡ ҡатмарлы идея бәйләнештәрен тыуҙыра. Был бәйләнештәр Рус дәүләтенә ҡушылған мәлдә һәм унан һуң ижад ителгән әҫәрҙәрҙә бигерәк тә асыҡ күренә, әммә шуныһы мөһим: уларҙа самодержавиенең милли иҙеүенә ҡаршы көрәш бөйөк Рус дәүләтенән бүленеп сығыу идеялары менән дә, милли сикләнгәнлек тойғолары менән дә берекмәй. Киреһенсә, рус һәм башҡа халыҡтар менән батшалыҡҡа ҡаршы көрәштә берләшеү, уртаҡ Ватан — Россия яҙмышы хәл ителгән ауыр йылдарҙа, батшалыҡ тарафынан күргән кәмһетелеү һәм йәберләнеүҙәрҙе «онотоп», рус халҡы менән бер төптән изге яуға күтәрелеү һәм ҡаһарманлыҡ күрһәтеү — йыйып әйткәндә, юғары патриотизм идеялары һәм дуҫлыҡ-туғандашлыҡ тойғолары был дәүерҙәге эпик поэзияның иң күркәм идея-эстетик һыҙаттары ул.

Һуңғы быуаттарҙа халыҡ ижадына Көнсығыш поэзияһының йоғонтоһо фольклорҙа яңы күренештәр тыуҙыра. Башлыса эпос традициялары ерлегендә ижад ителгән фажиғәле мөхәббәт ҡиссалары ике формала — ҡулдан-ҡулға күсерелеп һәм телдәнтелгә һөйләнеп — киң тарала. Халыҡ телендә улар ҡыҙыҡлы үҙгәрештәр кисерә; фольклор традициялары көсәйтелә, ҡайһы берҙәре хатта тулыһынса тип әйтерлек әкиәт стиленә күсә.

Тиҫтәләгән йылдар буйына күп кешеләр — фольклорсылар һәм крайҙы өйрәнеүселәр, сәсәндәр һәм, ғөмүмән, халыҡ ижадын һөйөр һәүәҫкәрҙәр ҡатнашлығында тупланған материалдарҙан һайлап алып, ошо китапта бирелгән башҡорт халыҡ эпосы — быуаттар төпкөлөнән хәҙерге заманғаса килтереп еткерелгән изге аманат, ата-бабаларҙың беҙҙең быуынға тапшырған рухи мираҫы ул. Был мираҫта башҡорт халҡының оҙайлы тарихи тормош юлы, быуаттарға һуҙылған социаль ынтылыштары, әхлаҡи әҙләнеүҙәре, эстетик ҡараштары, рухи йөҙө сағыла.

# Батырҙар
# һәм мәшһүр
# шәхестәр
# тураһында
# кобайырҙар,
# хикәйәттәр

## ИҘЕЛ ЙОРТ

[1]

Әй Иҙел йорт, Иҙел йорт,
Әй Иҙел йорт, Иҙел йорт;
Атам кейәү булған йорт,
Атам кейәү булған йорт;
Әсәм килен булған йорт,
Әсәм килен булған йорт,
Ас тамағым туйған йорт,
Ас тамағым туйған йорт;
Күстән ҡалһам, ҡурған йорт [1],
Күстән ҡалһам, ҡурған йорт.
Балтырғаны беләктәй,
Балтырғаны беләктәй;
Һарағиһе* ҡонандау*,
Һарағиһе ҡонандау,
Сыбар үгеҙ йөрәктәй,
Сыбар үгеҙ йөрәктәй,
Йөрәктәй, ау, йөрәктәй.
Һайрай ҙа ҡоштары, һандуғастары!

[2]

Иҙелде алыр, Димде алыр,
Иҙелде алыр, Димде алыр,
Был кәүерҙән * ни ҡалыр?
Был кәүерҙән ни ҡалыр?
Ҡыу ағастай ҡыуарған,
Ҡарҙай башы ағарған,
Ҡарҙай башы ағарған,
Ҡарт һанына кем кергән,
Ҡарт һанына кем кергән —
Был кәүерҙән шул ҡалыр,
Шул ҡалыр, ау, шул ҡалыр.

[3] [2]

— Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Торһана ла, ҡыҙым, торһана,

Кешәнле аттар кешнәшә,
Кешәнле аттар кешнәшә.
— Кешәнле аттар кешнәшһә,
Уғрыларға юлыкһын!
— Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Күрше-күләң геүләшә,
Күрше-күләң геүләшә.
— Күрше-күләң геүләшһә,
Ике күҙе тиң сыкһын!
— Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Ҡотанда ҡуйҙар нырҙаша *,
Ҡотанда ҡуйҙар нырҙаша [3].
— Ҡотанда ҡуйҙар нырҙашһа,
Ас бүрегә юлыкһын!
— Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Торһана ла, ҡыҙым, торһана,
Күс ярағын * күрһәнә,
Күс ярағын күрһәнә.
Монаятты * йыйһана,
Монаятты йыйһана.
Яуға улъя булмайык,
Яуға улъя булмайык;
Күс ярағын булъяйык *,
Күс ярағын булъяйык.
Күлек * ҡулда булһайы,
Күлек ҡулда булһайы,
Һаҙак-һауыт ҡулдайы,
Һаҙак-һауыт ҡулдайы.
— Күс ярағын күрмәһә,
Абышкалар ҡороһон!
Монаятын алдырһа,
Һәмтерәп * яуға ҡол булһын.
Булъямаһа ярағын,
Кәүер * алһын йыйырын!*
Күлек ҡулда булмаһа,
Бактансылар ҡороһон!
Һаҙак-һауыт булмаһа,
Ирмен тигән ирҙәрҙең
Бүре тартһын йоронон [4],
Йоронон, ау, йоронон!

[4]

Әй юртайык, юртайык,
Әй юртайык, юртайык [5],
Тирәү ҙә һалып [6] юртайык,
Тирәү ҙә һалып юртайык.

Иҙелгә кире ҡайтайыҡ,
Иҙелгә кире ҡайтайыҡ;
Иҙелде сығып ятайыҡ,
Иҙелде сығып ятайыҡ [7].
Алдыбыҙҙы ағартҡан,
Алдыбыҙҙы ағартҡан —
Аяҙ микән, таң микән?
Аяҙ микән, таң микән?
Артыбыҙҙы ҡарайтҡан,
Артыбыҙҙы ҡарайтҡан —
Болот микән, саң микән?
Болот микән, саң микән?
Саң микән, ау, саң микән?..

[5]

Әй төш күрҙем, төш күрҙем,
Әй төш күрҙем, төш күрҙем,
Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем,
Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем,
Ут яғалай шеш күрҙем,
Ут яғалай шеш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Йыйырылған ҡойҡаһы,
Йыйырылған ҡойҡаһы,
Ҡарайып көйгән суңҡаһы,
Ҡарайып көйгән суңҡаһы,
Имәнесле баш күрҙем,
Имәнесле баш күрҙем,
Баш күрҙем, ау, баш күрҙем [8].
— Әй төш күрһәң, төш күрһәң,
Әй төш күрһәң, төш күрһәң,
Төшөңдә ҡыҙыл ут күрһәң,
Төшөңдә ҡыҙыл ут күрһәң,
Ут яғалай шеш күрһәң,
Ут яғалай шеш күрһәң,
Шеш башында ит күрһәң,
Шеш башында ит күрһәң,
Йыйырылған ҡойҡаһы,
Йыйырылған ҡойҡаһы,
Ҡарайып көйгән суңҡаһы,
Ҡарайып көйгән суңҡаһы,
Имәнесле баш күрһәң,
Имәнесле баш күрһәң,
Үҙ башыңа ҡарт убыр!
Үҙ башыңа ҡарт убыр! [9]

Торомтай * тигән тойғон ҡош,
Торомтай тигән тойғон ҡош
Ауанан * килеп төштө, ти,
Ауанан килеп төштө, ти;
Бармаҡ баштай бал ҡорто,
Бармаҡ баштай бал ҡорто
Бауырын өҙөп сыҡты, ти,
Бауырын өҙөп сыҡты, ти;
Әлемтәй менән Ҡоломтай [10],
Әлемтәй менән Ҡоломтай
Ҡыуа килеп етте, ти,
Ҡыуа килеп етте, ти;
Бүлтеректәй бүреләй,
Бүлтеректәй бүреләй,
Илде бүлеп бөттө, ти,
Илде бүлеп бөттө, ти.
Бөттө, ти, ау, бөттө, ти.

## МАМАЙ ХАН ХИКӘЙӘТЕ

Иҙел буйында Сыңғыҙ хандың уландары яу менән үткән һуң, йәнә бик күп заман киткән һуң, Мамай хан ил биләгән. Мамайҙың атаһы Муса хандың [11] ике ҡатыны булып, беренсе ҡатынынан ете ул, икенсе ҡатынынан биш ул тыуған. Мамай икенсе ҡатындан тыуған бишенсе ул, кинйә ул булған.

Мамай яу сабырға яратыр, һәммәһен ҡырып-ҡыйратыр, барсаһын баш әйҙереп үҙенә ҡаратыр имансыҙ бер яу батыр булған. Мамай үткән бер ерҙә халайыҡ ҡырылған, ауыл үртәлгән, ҡаланың көлө күккә осҡан.

Ураҡ [12] атлы бер ғәскәр башы Мамайҙың тоғро юлдашы булған. Улар икәүләп донъяның аҫтын өҫкә килтереп йөрөгәндәр.

Мамай менән Ураҡ, донъяны шулай иңләп тә буйлап ҡыйратып йөрөй торғас, Ҡаф иленә [13] барып сығалар. Халҡын ҡыралар. Ҡаф ханын үлтерәләр. Ошо Ҡаф илендә Мамайҙың үҙенә лә донъя менән хушлашырға тура килә. Уның ғәскәрен тамам тар-мар итәләр. Үҙен тотоп үлем язаһына хөкөм итәләр. «Күпме илде, күпме халайыҡты нахаҡҡа ҡанға батырып, мөлкәтен талап, торлағын үртәп үттең һин, яуыз Мамай!— тиҙәр.— Халыҡ ҡаны, үкһеҙ балалар күҙ йәше, ҡарт-ҡоролар ҡарғышы ебәрмәй ул. Хәҙер үҙеңдең башыңды ҡырҡыр мәл етте. Ни әйтерең бар? Әйтер һүҙеңде әйтеп ҡал!»— тиҙәр.

Шунан һуң Мамай үҙенең һуңғы һүҙен ошо рәүешле һамаҡлап әйткән, ти:

Иҙел башы Ирәмәл тау —
Минең атам Мусаның
Иле ҡунған ере ине;
Яйыҡ башы ҡара урман —
Минең атам Мусаның
Йәй йәйләгән ере ине;
Ҡыҙыл, Өйсүк, Биштамаҡ[14] —
Минең атам Мусаның
Ҡыш ҡышлаған ере ине[15].
Табаны яҫы тарлан буҙ —
Минең атам Муса хан
Менеп йөрөр аты ине.
Даусы менән даулашыр,
Даулашыр ҙа яу асыр —
Минең атам Муса хан
Шундай дана зат ине.

Иле илегеп ҡунған ер,
Ҡышын ҡышлап торған ер,
Йәйҙәрен йәйләгән ер,
Бейәләр бәйләгән ер,
Билгә ҡылыс таҡҡан ер,
Киреп уғын атҡан ер,
Күп ғәскәргә баш булып,
Алыҫтарға сапҡан ер,—
Бары ла ҡалған ата-бабайҙан,
Бары ла ҡала хәҙер Мамайҙан...

Быңа ошо һуңғы һүҙҙәрен әйткәс, ир яманы Мамайҙың башын өҙә сапҡандар, ти.

## МӘРГӘН МЕНӘН МАЯҢҺЫЛЫУ

Уралдың һылыу ҡыҙҙарын,
Ҡарағусҡыл сейәләй
Янып торған йөҙҙәрен,
Шәлкемләгән ебәктәй
Шоморт ҡара сәстәрен,
Сал бөркөттәй кәпәйеп,
Ҡалҡып торған түштәрен,
Атта уйнап сыныҡҡан,
Бал ҡортондай билдәрен,
Ҡырсынташҡа һибелгән
Көмөштәй сыҡҡан моңдарын,
Айҙай ҡыйғас ҡаш аҫты

Ҡыуғалы һылыу күлдәрҙәй,
Керпек үтә һөҙөлөп,
Йылмайыусан күҙҙәрен
Һылыуҙарҙың белгән һуң,
Айҙай Урал һылыуы —
Маянды бер күргән һуң,
Нуғай хан [16] уй туплаған,
Маянды алайым тип,
Атаһынан һораған.

Йәндәй күргән балаһын
Берәү тотоп бирерме?
Уралдың күҙ ҡараһы
Маян тигән һылыуын
Уралдың үҙ буйында
Һөймәгән ир булырмы?
Хан, алам тип, яу асҡан, —
Маянһылыу, бирелмәй,
Шырлыҡ урманға ҡасҡан.
Маян атаһы Нәҙершә
Йәштән батыр булһа ла,
Күп яуҙарҙы күрһә лә,
Дошман уғы тейгән һуң,
Сулаҡ булып бер ҡулы,
Һуҡыр булып бер күҙе,
Ярты батыр ҡалған һуң,
Инде ҡорбаш * булырлыҡ
Көсө юғын һиҙгән һуң,
Зар илаған халҡына,
Йыйып, былай тигән ул:
— Уралда тыуҙым ир булып,
Йәштән үҫтем хур булып,
Барын күреп беләһең,
Күрмәгәндәр — ишетеп.
Ҡанлы яуҙың башында
Данлы батыр һаналып,
Килмешәк хан яуынан
Ҡан илаған илемде
Ҡурсып, яуҙа күп сапҡан
Мине барың беләһең.
Аҙаматтар, хәҙер ҙә
Һис йөрәгем ҡайтмаған,
Һаҙаҡ тотоп атырҙай
Уң ҡулым тик һынған һуң,
Үлем билдәһе булып,
Башыма сал ҡунған һуң,
Бер быуындың бөтөнө —
Йәшем йөҙгә еткән һуң,
Яуға сабыр батырҙар

Иҫәбенән сыккан һуң,
Уралдың йәш үҫмере,
Типһә тимер өҙөрҙәй
Ирҙәр үҫеп еткән һуң,
Корбашын * мин бирәүгә
Тапшырайым, кустылар.

Халык шунда һөйләшеп,
Ыласын үтмәҫ уғынан,
Айыу китмәҫ кулынан,
Мәргәнлектә дан тотоп,
Үҙ исемен юғалтып,
Бөтә тирә илдәрҙә
Мәргән тигән дан тоткан
Йәш батырҙы билдәләп,
Кор башы тип, ҙур һанап,
Яуға сыкмак булғандар.

Мәргән корбаш булған һуң,
Оран һалған Уралға:
«Атка менеп, барыһы
Ирәмәлгә [17] килергә!»
Маян күргәс Мәргәндең
Яуға батыр йыйғанын,
Яу сабырға йыйынып
Һаҙак кайрап йөрөгәнен,
Югереп йортона кайткан,
Атаһына һүҙ аскан:
— Серең йәшереп балаңдан,
Бойоғоп торма, атакай;
Сәсем оҙон булһа ла,
Йөрәкһеҙ, тимә, атакай;
Ярты олөшлө булһам да,
Йөрәгем куш, атакай;
Кыҙ ир-егет булмаҫ, тип
Кәмһетмәсе, атакай.
Илде яуҙар баҫканда,
Барыһы атка менгәндә,
Мин дә атка менәйем,
Яу сабайым, атакай.

Быны ишеткәс Нәҙерша
Әйткән кыҙы Маянға:
— Илдең күрке, балакай,
Атка менгән ир булыр,
Яуға сапкан ир булыр,
Ил һаклаған ир булыр.
Илдең ыуы *, балакай,
Илде һаткан ир булыр,

Серҙе һаткан ир булыр,
Яуҙан ҡаскан ир булыр.

Ай, балаҡай, ҡыҙ бала,
Ҡуш йөрәкле булһаң да,
Ҡулға һаҙаҡ алырҙай,
Дошман яуын ҡырырҙай,
Үнгән * менән дошмандың
Яуын кире ҡағырҙай,
Атың уйнап барғанда,
Дошман таңға ҡалырҙай,
Шүлгән менән Мәсемде
Ҡыйралдырған Һәүбәндәй [18],
Ҡая ярып һыу биргән
Иҙел менән Яйыҡтай [19],
Бабсаҡ ҡанын эҙләгән
Күсәк бейҙәй [20] түгелһең.
Яуға барам, тиһәң дә,
Дошманыңа яу асып,
Илдең ҡонон алырҙай,
Яуға батыр түгелһең.

Маян әйткән атаға:
— Ирлек тигән атама —
Батырға тамға түгел ул.
Оҙон сәсле ҡыҙ булыу —
Хурлыҡҡа тамға түгел ул.
Алпамышаны [21] ҡойонан
Барсын [22] алған түгелме?
Нәркәс [23] һылыу көрәштә
Яйыҡты йыҡҡан түгелме?
Данлы аҡбуҙ толпарын
Нәркәс алған түгелме?

Иҙел — минең һыулауым,
Яйыҡ — минең йәйләүем,
Урал — минең төйәгем,
Мине бәпләп * үстергән;
Биттәрендә уйнатып,
Кәпәс өсөн төлкөһөн,
Йыл аша бер түлләтеп,
Тун итергә бүреһен,
Йәйенә өс түлләтеп,
Ит итергә ҡуянын,
Моң өйрәткән ҡоштарын
Урманында үстергән;
Сәскә менән биҙәлгән
Туғайында йыуаһын,
Быуат-быуат ил моңон

Моңлай торған ҡурайын
Тағы һаҡлап үҫтергән,
Шул Уралды яу баҫҡас,
Яу сабыуҙан тайшанып,
Ятып ҡалған булырмы?
Яуға сапмай, дошмандан
Өркөп ҡалған булырмы?

Аҡбуҙ атың бир, атай,
Үҙем яуға сабайым.
Көнөм бөтһә, атаҡай,
Төшәгеңдә үлгәнсе,
Батырҙар мән китәйем,
Бер табандан торайым,
Илем өсөн үләйем.
Ата әйткән шул ерҙә:
— Улай булһа, балаҡай,
Серем һөйләп бирәйем,
Асып һиңә йөрәгем.
Урал буйы был яҡҡа,
Тамъян, Бөрйән, Ҡыпсаҡҡа,
Ашҡаҙар, Дим, Йайыҡҡа
Указ килгән Нуғайҙан:
Бары миңә баш эйһен,
Һылыу ҡыҙҙан бер нөгәр *,
Айыры тояҡ биш көтөү [24],
Йылҡыһынан ун өйөр
Бирегеҙ, тип, яһаҡҡа.

Йортомдан берәү ат менеп,
Яуға ҡаршы сыҡмаһа,
Миңә хурлыҡ, балаҡай;
Ҡорал тотҡан ир күреп,
Ҡолаҡтарың ҡайсылап,
Ашауҙан ҡалып буҙ толпар
Йөрәкһеп тора, балаҡай.
Ярар, ҡыҙым, мен атҡа,
Ҡул ҡаушырып тормағыҙ.
Аяҡҡа баҫҡан ир, ҡатын,—
Барың атҡа менегеҙ.

Рөхсәт алғас атанан,
Маян шунда ат менгән,
Мәргәнде эҙләп табып,
Батырҙар менән бергә
Яуға бараһын әйткән.
Мәргән һөйгән Маянын
Күргәс тағы шатланған,
Шунда төйәк туплаған;

Ҡорал кейеп, ат менеп,
Илдән батыр йыям тип,
Маянды шунда ҡалдырып,
Ил аралап киткән, ти.

Мәргән илдә йөрөгән һуң,
Күп ерҙәрҙе үткән һуң,
Бөтә батырҙы йыйып,
Былай оран һалған, ти:
— Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ һеҙ, аҙамат,
Минең әйткән һүҙҙәрем —
Нәҙершәнән аманат.
Указ килгән был яҡҡа,
Урал буйы халыҡҡа,
Тамъян, Бөрйән, Ҡыпсаҡҡа,
Мал-тыуарҙан күп төрлө
Бирегеҙ, тип, яһаҡҡа.
Мал-тыуарҙан яһағын,
Һорағанын түләпек,
Шулай ҙа ул ҡуймаһы,
Яуын асты был яҡҡа.

Аҙаматтар, белегеҙ:
Уралып ятҡан Уралтау —
Беҙҙең һөйгән илебеҙ,
Ай Уралтау, Уралтау.
Уралып ятҡан Уралтау.
Һаҡланған ил яуында,
Яуға сабыр батырҙар
Ат өйрәткән буйында,
Ай Уралтау, Уралтау.
Атабыҙ кейәү булған ер,
Әсәбеҙ килеп булған ер,
Кендегебеҙ киҫкән ер;
Балтырғаны beләктәй,
Һарынаһы еләктәй,
Йылғалары көмөштәй,
Тәмле һыуын эскән ер.

Ялбыр ҡойроҡ, утлы күҙ
Бүреһе күп Уралтау.
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау.
Майлап ҡуйған ҡайыштай
Йыланы күп Уралтау.
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Уралтау.
Ҡыҙ балалай биҙәнгән

Төлкөһө күп Уралтау.
Ояларға урыны мул
Ҡоштары күп Уралтау.
Балығы аттай уйнаған
Йылғаһы күп Уралтау.
Баҡаһы ҡуйҙай һыулаған
Күлдәре күп Уралтау.
Сырҡыратып буйында
Йылҡы көткән Уралтау.
Мөңрәтеп буйында
Һыйыр көткән Уралтау.
Ай Уралтау, Уралтау.
Һине һөйməҫ йән булмаҫ,
Байлығы күп Уралтау.

Уға ынтылған халыҡтарҙың
Уйы төрлө, аҙаматтар:
Ҡаланан сыҡҡан сауҙагәр
Малың талар — бур булмаҫ;
Маңлай тирен һыпырып
Эш эшләгән, мал эҙләп,
Тамаҡ аҫырар, — ҡол булмаҫ;
Ногәр * йыйып үҙенә, —
Яу асмаған дошманға,
Малын йыйып ятһа ла,
Үҙ малына бей булмаҫ;
Ил һаҡларға яу асҡан,
Гүргә башы инһә лә,
Ҡурайҙарҙа уйналып,
Ил телендә маҡталып,
Йырҙарында йырланып,
Йөрәгендә миң булып,
Исеме мәңге һаҡланып,
Быуаттар буйы юғалмаҫ.
Ай, Уралым буйында,
Һыуын эскән йән булып,
Атын менгән ир булып,
Ҡыҙын ҡосҡан йәр булып,
Уралға яу килгәндә,
Дошман ҡулын һуҙғанда,
Яуҙан ҡурҡып тормаһын.
Илар күҙ ҙә бер саҡта,
Йәше кибеп, көлөр ул;
Яуға сапҡан батыр ҙа,
Дошман киткәс иленән,
Аттан төшөп, Уралдың
Биттәрендә уйнар ул.
Ғүмер һанап, йылың да
Алты айын ҡыш итә,

Алты айын йәй итә;
Урмандағы ҡоштар ҙа
Тырышып, айҙар ултырып,
Ап-аҡ ҡына йоморткаһын
Һауала һайрар ҡош итә.

Алтай, Урал типһәнен,
Сыңғыҙ хан да яу асып,
Үҙ ҡулында ҡол итеп,
Бөтә улын бей иткән,
Кейемен ебәк ҡамҡа * иткән,
Атын арғымаҡ иткән.
Бәҫле була ҡама тун,
Һылай-һыйпай кейгән һуң;
Өҫтәге бәҫле ҡама тун
Сепрәк була туҙған һуң.
Түрҙә ултырған Сыңғыҙҙың
Талап илде бей булған
Балаһының күбеһе,
Илһеҙ ҡалып, хур булған.
Бейлек киткәс өйөнән,
Халҡы киткәс ҡулынан,
Түше аршын бикәһе
Түшәк йәймәҫ йәр булған.
Алтын Урҙа биләгән
Туҡтамыш [25] тигән балаһы
Иленә таянып ат менгән.

Инде һеҙгә аҙаҡ һүҙ:
Аңлағандар һүҙемде,
Уҡ-һаҙаҡтарын алып,
Яуға ҡаршы ат менер;
Атҡа менмәй ҡалыусы
Уралымда ят булыр.

Ай Уралым, Уралым,
Ҡая башың үлгәне —
Башың моңар алғаны.
Ай менән көндөң үлгәне —
Тонйорап барып батҡаны.
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны.
Уралымдың үлгәне —
Буйын дошман алғаны.
Ир-егеттең үлгәне —
Илен дошман алғаны.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Халыҡ, күҙенә ҡан һауып,

Бары атҡа менгән, ти;
Ҡулына уҡ-һаҙаҡ алып,
Мәргән менән киткән, ти.

Мәргән илдән килгәнсе,
Илде туплап бөткәнсе,
Нуғай ханы, яу йыйып,
Нәҙершәнең йәйләүен
Ҡапыл килеп баҫҡан, ти;
Һылыу ҡыҙҙарҙы сүпләп,
Маянды ла бергә алып,
Мал-тыуарҙы әләктереп,
Алып ҡайтып киткән, ти.

Мәргән быға түҙмәгән,
Бар батырын туплаған,
Нуғай хандың өҫтөнә
Яуы менән ыҡлаған.
Мәргән үҙе юл сабып,
Батырҙарын эйәртеп,
Хандың көсөн белергә,
Яйыҡ аша кисеүҙең
Ҡайҙалығын күрергә
Яйыҡ буйына барған, ти.
Бар кисеүен билдәләп,
Нуғай илен аралап,
Күп халыҡты күргән, ти;
Хан ҡулында зарыҡҡан,
Яһаҡ түләп интеккән
Күптәр барын белгән, ти.
Мәргән батырҙы күргәс,
Халыҡ унан һорашып,
Ҡатын-ҡыҙы — барыһы
Зарын һөйләп илашҡан.

Мәргән барының зарын
Инде асыҡ белгән һуң,
Бынау һүҙҙәрен әйткән:
— Илем бынан йыраҡта,
Урал тигән данлы ил,
Беләләрҙер был яҡта.
Мин үҙем бер йырсымын,
Ханға барам ҡунаҡҡа.
Һеҙгә тағы шуны әйтәм:
Был хан барып Уралға,
Илде талап ҡайтҡан, ти,
Ҡатын-ҡыҙын, малдарын,
Талап алып киткән, ти.
Мәргән тигән бер батыр

Уралдан килә яу менән,
Илен баҫҡан был ханға,
Батыр йыйып дау менән.
Һеҙ ҙә бергә ойошоп,
Ул Мәргәнде көтөгөҙ;
Бергә ҡушылып, яу асып,
Яуыз ханды ҡолатып,
Рәхәт ғүмер итегеҙ.

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс,
Бары бергә һөйләшкән,
Ат саптырып һәр яҡҡа,
Мәргән менән бер төптән
Яу асырға ойошҡан.

Мәргән барған сағында,
Нуғай хандың туйы икән;
Тирә-яҡтан бай йыйып,
Алып ҡайтҡан ҡыҙҙарын
Һата торған көнө икән.

Хан һарайы алдында,
Ауыҙлыҡ сәйнәп, сапсынып,
Аҡбуҙаттың торғанын
Маян күргәс, шунда уҡ
Мәргән килгәнен белгән.
Унан ханға асыуҙан:
«Яйыҡ башы елле ул,
Терәкһеҙ тирмә ҡорҙормаҫ;
Иҙел башы шаулы ул,
Толпарһыҙ аша кистермәҫ;
Урал тауы даулы ул,
Ҡанһыҙ ханлыҡ йәйҙермәҫ.
Уралда яу күп булған,
Ил өҫтөнә ут тулған,
Батый хан [26] да ҡул һуҙған,
Барыбер аҙаҡ юҡ булған»,—
Тигән һүҙен әйткән һуң,
«Бөгәсә бер төш күрҙем,
Тыңла, ханым, юрарһың»,—
Тип, ханға белдермәйсә,
Мәргәнгә сер аңлатып,
Төш күрҙем, тип һөйләгән:

— Бейек ҡая башынан,
Ҡара урман эсенән
Берәү килә икән, тим.
Көлөп барҙым янына,
Күрешергә уйлаһам,
Ҡулып һуҙмай икән, тим.

Менгән аты талыҡҡан,
Атын күргәс егеттең,
Үҙен күргәндәй булдым;
Мин күргәндәге түгел,
Өҫтө-башы алышҡан,
Төҫө лә бик асыулы
Ҡомһорап тора икән, тим.
Һунарсы тиһәм, ҡулында
Һис бер һуҡҡы күренмәй;
Яусы тиһәм, тағы ла
Юлдаштары күренмәй.
Шишмәгә барып һыу һоҫтом,
Атына барып һыу бөрктөм,—
Аты һалҡын алманы;
Тәгәс менән һыу бирһәм,
Аты тағы эсмәне.
Ни булыр икән, ханым?
Был төшөмдө юраһаң,
Килгән ҡунаҡтарыңдың
Күңелдәрен табырһың,—
Тигәс, хан да һүҙ асып,
Ҡунаҡтарға күҙ һалып,
Юрауҙарын һораған.

Хандың һүҙен ишеткәс,
Маян, төш тигән булып,
Һүҙҙе үҙенә терәгәс,
Мәргән, хандан һүҙ һорап,
Төш юрарға керешеп,
Бынау һүҙҙәрҙе әйткән:
— Мин үҙем, оло ханым,
Төш юраусы түгелмен,—
Уралда ҙур дан тотҡан
Ишмҳи тигән йырсымын.
Ҡыҙҙың төшөн юраусы
Бүтән берәү күренмәй,
Уртаға һалып һөйләгәс,
Юрамай тура килмәй.
Бейек ҡая, шыр урман —
Ил арҡалау, һылыуҡай.
Ҡаянан килгән ул егет —
Күҙе йәшкә мансылған
Ҡулы бәйле берәүҙең
Өмөтө ул, һылыуҡай.
Ҡулың һуҙып барһаң да,
Ҡулын бирмәй тороуы —
Сер һаҡлау ул, һылыуҡай.
Атына һыу бөркһәң дә,
Тире ҡатмау атының —

Яу көтөү ул, һылыуҡай.
Ҡулында һуҡҡы булмауы,
Үҙе ҡомһорап тороуы —
Асыуланған илепең
Яу асырға килеүен
Көтөүелер, һылыуҡай,—

тигәс, хан Мәргәнде һөйләүҙән туҡтатҡан, ти.

Был һүҙҙе ишеткәс, бөтә ҡунаҡтар Мәргәнде ҙур йырсы тип, уның туйҙа бер йыр йырлауын һорағандар. Ҡунаҡтар һорағас, Мәргән дә күнгән. Йырҙы аҙаҡ йырлармын, хуп күрһәгеҙ, мин һеҙгә бер егеттең бер ҡыҙҙы яратҡанын һөйләп бирәйем тип, үҙ уйын икенсе бер егеттең башынан кискән нәмә итеп һөйләргә керешкән, ти:

— Ул ҡыҙ үҙе һылыу булған, бөтә илдә данлы булған. Һөйгән егете батыр булған, үҙе йырсы булған, ирек, һөйөү йыры йырлап йөрөгән. Ҡыҙҙың һөйөүе күктә иҫкән йылғыр елдәрҙән дә көслөрәк, ҡанатлы ҡоштарҙан да ирекләрәк булған. Шул һылыуҙы бер хан килеп тотҡон иткән. Һөйгән егете, быға түҙмәй, бөтә илде йөрөп, батырҙар йыйып, ханға ҡаршы яу күтәрергә ант иткән, ти.— Шунан Мәргән был һүҙенә өҫтәп:

Әсәһе килен булған,
Атаһы кейәү булған,
Үҙен данлы батыр итеп
Тәрбиәләп үҫтергән,
Көләс йөҙлө һылыуын
Иркәләп тә үҫтергән
Тыуған илен, һөйгән ҡыҙын
Бирерме батыр егет,
Ҡара гүрҙә ятмаһа?!
Тапатырмы ерен дошмандан,
Таянған да иле һау булһа?!

Мәргәндең был һүҙҙәрен ишеткәс, хан асыуланып:

— Мин хан тапарлыҡ батыр ҙа, дап алырлыҡ батыр ҙа күргәнем юҡ был яҡта. Йырсы, әйткән һүҙҙәрең экиәттер ул, булмаһа,— тигән икән, Мәргән шул ерҙә, артта ҡалған халҡының килеп еткәнен күргән дә:

Урал ашып, яу асып,
Юшап ятҡан йылҡының,
Моңрап йөрогән һыйырҙың
Барып алып пол * ҡылған,
Яуға сапҡан батырын
Һуйып, ҡатынын тол ҡылған,
Гөлдәй һылыу ҡыҙҙарын,
Барын алып, ҡол ҡылған
Ноғай илдең ирҙәрен,
Кәпәс кейгән улдарын,
Көләс йөҙлө ҡыҙҙарын,

Барын ҡоллап *, хан булған.
Илаған халыҡтың күҙ йәшен
Яҡлай торған һәр саҡта,
Йырсы түгел — батырмын.
Уралымды талаған
Яуыз хандан ҡономдо
Ала торған батырмын.
Халыҡтың аҡҡан күҙ йәшен
Ҡаның менән йыуырһың,
Талап алған малдарың
Йәнең менән түләрһең.
Ҡуйың көткән ярлыға
Тәхетең бирен үлерһең.
Шул күҙ йәше хаҡына,
Ата-баба ҡонона,
Илемә биргән һүҙемә
Ҡара ҡаны был хандың
Яуап булһын антыма,—
Тиеп ханға ынтылған,
Башын сабып осорған.

Бөтә бәйле ҡолдарҙы,
Таланған бар малдарҙы,—
Барын биреп ҡолдарға,
Илдәренә оҙатҡан.
Нуғай хандың ханлығын
Мәргән шулай ҡолатҡан.

## ТАРҒЫН БАТЫР

Борон башҡорт араһында Тарғын исемле батыр булған. Үсеп егет булғас, үҙенә яраҡлы ҡыҙ эҙләп киткән был бер заман. Мингәне — толпар, уҡ-һаҙағы муйынында, ти, бының.

Был шулай китеп барғанда, бер далала Аҡсахан халҡы күсеп бара икән. Егет арттарынан ҡыуып етә. Иң алда Аҡсахандың Аҡъюныс исемле ҡыҙы бара. Янында ҡырҡ кәнизәк ҡыҙы бар, ти. Улар үҙҙәре бер төркөм. Тарғын үтеп барғанда, ҡыҙҙар «Ай, бынау егетте!» тип ҡыҙығып ҡалалар, ти. Тарғын әйләнеп иң алдағы ҡыҙға ҡараһа, ҡыҙға күҙе төшә. Ҡыҙ:

— Һин кем булаһың, егет, ҡайҙа китеп бараһың?— тип һорай.

Егет:

— Мин Тарғынмын, үҙемә лайыҡ ҡыҙ эҙләйем,— тип яуап бирә.

— Ә мин — Аҡсахандың ҡыҙы Аҡъюнысмын. Мин лайыҡ булһам, миңә һин лайыҡһың,— тигән ҡыҙ.

Тарғын тағы әйләнеп килгәндә, былар тирмәләрен ҡороп ултыралар, ти. Тарғын килә лә ханға һүҙ ҡуша:

— Ҡыҙың Аҡъюнысты миңә бирһәң, мин ҡабул итер инем,— ти.

— Юҡ, мин андай аҙғын кешегә бирмәйем,— ти хан, ҡыҫҡа ҡуя.

Тарғын Аҡъюнысҡа барып әйтә. Шунан, ҡасайыҡ, тип кәңәш итәләр былар. Аҡъюнысты толпарға мендерә лә алып ҡаса Тарғын. Кәнизәк ҡыҙҙар ханға барып хәбәр итәләр. Хан: «Кем дә кем [арттарынан] етеп алып ҡайтһа, шуға ҡыҙымды бирәм»,—тип, халҡына иғлан тарата.

Бөтә халҡы ҡыуа сыға.

Толпарҙар күккә аралашып килгән саң күрәләр.

— Ах, ҡыуғын килә, толпар менгән кеше икән, — ти Тарғын.

Ҡыҙ:

— Беҙҙә ҡарт Ҡужаҡ тигән кеше бар. Шунан башҡа толпар менгән кеше юҡ, шул булыр,— ти.— Әммә шәпле кеше, ете йәштән яу алып килгән кеше. Хәҙер йәше алтмыш биштә, һиңә торошлоҡ итә алмаç,— ти.

Теге яҡынлап килгәс, Тарғын ҡыҙҙы ҡалдырып, далаға ҡайыла ла уҡ атымы ерҙән ҡарап тора. Ҡарт Ҡужаҡ ҡыҙға килеп етә.

— Ә, Аҡъюныс, килдем бит. Тәнеңдә бер генә миңең булһа ла, алмайым,— ти. (Үҙенең миңдә эше юҡ, боҙолғанмы икәнен ҡарағы килә инде ҡартластың.)

Ҡарт Тарғынға килә лә:

— Әүәлге киҙәк * минеке, һуңғы киҙәк һинеке,— ти. Атышырға теләй.

Тарғын аттан төшөп, ҡартҡа нәүбәт бирә. Ҡарт Ҡужаҡ атып ебәрә. Тарғындың яурынында егерме биш уҡ һалынған һаҙаҡ булған икән, барыһын да сылтырата атып ебәрә. Тарғын атына менә лә ҡарт Ҡужаҡҡа сабып килә:

— Һиңә уғымды атаһың, хәҙер тотоп һине мин ватам,— ти. Ҡарт:

— Тороп тор әле, тағы минең ике ата торғаным бар. Тауҙай атың менән тауҙай үҙеңде күрмәй атҡаным юҡ, ти. Бер атҡанда уғыңды аттым, икенсе атҡанда атыңды, өсөнсө атҡанда үҙеңде атамын,— ти.

Тарғын китә лә бара. Ҡыҙға килә. «Әйҙә, киттек», ти.

Ҡыҙ ҡартҡа әйтә:

Әй ҡарт Ҡужаҡ, ҡарт Ҡужаҡ,
Атың башын тарт, Ҡужаҡ,
Һаҡал шыртың ҡыуарып,
Буйға бөткән тамырҙың
Бары берҙәй сыуалып,
Алайым тип тормошоң,
Мине күреп ҡыуанып.

Үлтерһәң дә теймәймен,
Тиңдек бирһәң һөймәймен,
Борон Ҡужаҡ булһаң да,
Инде ятҡан ҡыу тиҙәк.

Шул ерҙә ҡарт Ҡужаҡ асыуланып, баш бармағын тығып, танауын айырып ебәрә.

— Аҡъюныс, һин атайыңа бер бүләк бир. Һинең өсөн һуғышып, танауымды йырттым, тиермен. Мин һине һөйгәнеңә ҡушып китәмен, — ти.

Ҡыҙ һул ҡул бармағындағы исемле[27] алтын йөҙөгөн алып, ҡарт Ҡужаҡҡа бирә. Ҡарт Ҡужаҡ, Тарғынды саҡырып алып, ҡыҙҙы уға биреп ебәрә лә ҡайтып китә. Ҡайтып етһә, хан янында һис кем юҡ, бер үҙе ҡалған булған.

— Йә, ҡыуып еттеңме?

— Еттем, — ти. — Мин алтмыш бишкә еткәс, ҡыҙ миңә киләме ни, ҡушып киттем үҙҙәрен, — ти. — Бына бүләге, — тип йөҙөктө бирә. — Һуғышып танауымды йырттым, — ти.

Тарғын Аҡъюныс менән иленә ҡайтып бара. Шул ваҡытта бер татар ханын ҡалмыҡ ханы яулап килә икән. Тарғындар татар ханына тап булған. Татар ханы бик үтенә, беҙгә ярҙам ит, ти.

Шул ерҙә Аҡъюнысты ҡалдырып, Тарғын ҡалмыҡ ханына атышҡа китә. Ҡалмыҡ ханына ҡарап уҡ ебәрә. Бер йыуан тирәккә үтәләй батып керә уҡ. Ҡалмыҡ кешеләре атып ҡарай ҙа, тирәктең яртыһына ла үткәҙә алмайҙар. «Ай, беҙҙән дә шәп кеше бар икән», — тип кире ҡасалар. Тарғын ҡырҡ кеше менән генә ҡыуалап киткән тегеләрҙе. Ҡыуалап, Болғар тауы тигән бер тауға менгәндәр. Ҡалмыҡтар күренмәгәс, Тарғын бер тирәккә менеп ҡараған. Унан да күренмәгәс, йығылып төшөп, имгәнгән [28]. Ҡырҡ кеше алып ҡайтабыҙ тиһәләр ҙә, күтәреп торғоҙа алмағандар. Шунан татар ханына килеп әйткәндәр. Татар ханы:

— Ҡайталмаçлыҡ булғас, үлһә үлһен. Ҡатыны бик һәйбәт әле, — тигән.

Аҡъюныс, үҙем алып ҡайтам тип, Тарғын эргәһенә килгән. Килһә, Толпар сапсынып тора, ҡошо ла, эте һәпәләй ҙә ас, һаҡлап торалар. Ҡыҙ килеп быға өләң * әйтә башлаған:

Болгар, Болгар, Болғар тау,
Молдорап ятҡан ҡорғор тау,
Ҡандай ирҙән йығылмай,
Бер тирәктән йығылып... [29]

Тарғын, шул һүҙгә ғәрлеге килеп [30], ҡапыл һикереп тора. Биле тайған икән. [Һикереп торған ыңғайға] биле урынына ултырған, кеше булған да киткән. Шунан икәү күрешеп, ҡыуанышып, татар ханына киләләр.

Атаңа нәләт, эт нуғай!
Аялымды *, үҙемде,
Ялтыратып күҙеңде,
Ташлап киттең йортоңа.

Мин һиңә изгелек итһәм, һин миңә яуызлык уйланың, ти, инде мин һине әнә менән тунайым, ти. Хан үтенә:

— Мин ханлығымды ла, бөтөн булған малымды, еремде бирәмен, ҡабул ит,— ти.

Шул ергә Тарғын хан булған. Үҙе бер яуға китеп, Тарғын үлеп ҡалған.

Аҡъюныс шул илдә үлгән. Бер кәшәнә эшләп, Аҡъюнысты шул кәшәнәгә ҡуйғандар. Ул кәшәнә хәҙерге көндә лә Масы эргәһендә [31].

## ТАРҒЫН МЕНӘН ҠУЖАҠ

Башкорт илендә Аҡсахан [32] тигән хан булған. Был бер көн йыйын ҡорған. Йыйынға батырҙар килгән. Нуғайҙарҙан Тарғын тигән йәш батыр килгән. Батырҙар көрәш тотҡандар. Шунда Тарғын өҫтөн сыҡкан.

Аҡсахандың Аҡйондоҙ тигән ҡыҙы була. Ҡыҙ быны күргән дә атаһына әйткән:

— Атай, вәғәҙәңде үтә, Тарғын батыр еңеп сыҡты, мине шуға бир,— тигән.

Аҡсахан:

— Мин килмешәккә биреү өсөн ҡыҙ үҫтермәнем,— тигән.

Шунан Тарғын батыр Аҡйондоҙ менән икәү һөйләшеп ҡасып китергә булғандар. Уңай ваҡыт тап килтереп, икеһе ике арғымаҡты алып, былар ҡасып киткән.

Шунан Аҡсахан халыкты йыйып:

— Тарғын, яуыз нуғай, минең хөрмәтемде бысратты, ҡыҙымды урлап ҡасты. Барып ҡыуып етегеҙ ҙә икеһен дә алып килегеҙ. Кем дә кем икеһен дә тотоп килтерә, ҡыҙым шуға булыр,— тигән.

Баҙнат итеп барыусы батыр булмағас, бер алтмыш биш йәштәге ҡарт Ҡужаҡ батыр бармаҡ булған. Үҙе кеүек ҡарт арғымаҡҡа менгән дә ҡоралын тағып киткән был. Әй киткән, әй киткән, тегеләрҙең артынан барып еткән. Етһә — тегеләр бер ағастың төбөндә ял итергә ултырғандар, ти:

Ҡужаҡ әйтә:

Әй, Тарғын, һин — килмешәк,
Ат янында һин — ишәк,
Ҡунаҡ ҡәҙерен белмәгән,
Намыҫ атын менмәгән,
Аҡсаханды кәмһеткән,
Аҡйондоҙҙо хур иткән,
Илгә ҡайғы килтергән,
Көнгә ҡара төшөргән,

Яуыз уйҙа булғанһың,
Ҡара ҡулың һуҙғанһың,
Тороп баҫ һин ҡаршыма,
Мин етермен башыңа.

Тарғын, шул саҡ һикереп тороп, Ҡужаҡҡа былай тигән:

Әй ҡарт Ҡужаҡ, ҡарт Ҡужаҡ,
Атың башын тарт, Ҡужаҡ,
Һаҡал шыртың ҡабартып,
Сал сәсеңде ағартып,
Ҡыҙ артынан килдеңме?
Әй ҡарт Ҡужаҡ, ҡарт Ҡужаҡ,
Атың башын тарт, Ҡужаҡ,
Ҡалтыратып йөҙөңдө,
Бүрбайҙағы биҙеңде,
Алышыр өсөн килдеңме?
Ҡыҙ артынан килдеңме?
Алышыр өсөн килдеңме?

Ҡ у ж а ҡ:

Әй, Тарғын, һин — килмешәк,
Батыр түгел, һин — ишәк,
Мин башыңа етермен,
Ҡыҙҙы алып китермен,
Сыҡ ҡаршыма, күрәйем,
Башың ҡырҡып бирәйем!

Шунан Аҡйондоҙ, былар араһына килеп инеп, Тарғын яҡлы булып, Ҡужаҡҡа ҡарап әйтте, ти:

Әй ҡарт Ҡужаҡ, ҡарт Ҡужаҡ,
Атың башын тарт, Ҡужаҡ,
Алтмыш бишкә еткәндә,
Дәртең-ушың бөткәндә,
Ҡыҙҙы алмаҡ булаһың,
Ҡыҙға тоҙаҡ ҡораһың.
Аҡйондоҙҙоң аҡ тәне
Һиңә булмаҫ, ҡарт Ҡужаҡ,
Һиңә булмаҫ, ҡарт Ҡужаҡ,
Борон Ҡужаҡ булһаң да,
Инде ятҡан ҡыу тиҙәк [33].

Инде нишләргә? Ҡарт Ҡужаҡ уғын ала:

— Әйҙә, көс һынашайыҡ,— ти.

Тарғын:

— Мин һинең кеүек тиҙәк менән көс алышып та тормайым,— ти.

Ҡужаҡ әйтә:

— Мин һинең кеүек маңҡаға уғымды әрәм итеп тә тормаҫ инем, Аҡсахандың үтенесе бар, шуны атҡарырға кәрәк,— ти.— Әйҙә, көслө булһаң, тәүҙә һин атып ҡара,— ти.

Тарғын әйтә:

— Юк, һин ат, барыбер һинеке теймәç,— ти.

Шулай оҙаҡ ҡына һатыулашып, бер-береһен кәмһетеп торғандан һуң, былар уҡтарын икеһе лә бер юлы атырға булалар.

Бына ике яҡтан бер-береһенә ҡаршы уҡ атылып китә. Тарғындың уғы Ҡужаҡ янына яҡын да килмәй, әллә ҡайҙа ситкә китә. Ҡужаҡтың уғы Тарғындың ҡолаҡ япрағын ғына өҙҙөрөп китә. Тағы аталар былар, тағы шул уҡ хәл: Тарғын уғы теймәй, Ҡужаҡтыҡы Тарғындың икенсе яҡ ҡолаҡ япрағын өҙҙөрөп китә. Тарғын быға бик хурлана, ғәрлеге килә. Шул хәлдә Аҡйондоҙҙоң күҙенә күренергә оялып, арғымағын-иһен ташлап, Тарғын ҡасып китә [34].

Ҡарт Ҡужаҡ Аҡйондоҙҙо атаһы ҡулына алып ҡайтып тапшыра. Аҡсахан вәғәҙәһе буйынса ҡыҙҙы Ҡужаҡҡа биреп, туй үткәрә. Мәжлес бик шәп була. Ҡарт Ҡужаҡ шулай итеп йәш кәләш менән әле булһа йәшәп ята, ти [35].

Инде Тарғын хәленә килгәндә, ул шул китеүҙән ҡабат был яҡҡа әйләнеп ҡайтмай. Нуғай ханына килеп, ғәскәренә баш булып, һуғышҡа китә. Шулай ҡыҙыу һуғыш барған саҡта, Тарғын батырҙың биле һынып китә лә йығылып ҡала. Ғәскәре ҡасып таралып бөтә. Тарғын яланда япа-яңғыҙ ҡырҡ көн, ҡырҡ төн ята. Инде үләм, инде үләм тигән саҡта ғына шундағы бер тирәк башына ҡарға килеп ҡуна. Ҡарғаның тауышына күҙен асып ебәрә был. Ҡарға быға:

> Әй Тарғын һин, Тарғын һин,
> Батырлығың һалдың һин,
> Илдән тороп ҡалдың һин,
> Ҡыҙҙан ҡолаҡ ҡаҡтың һин,
> Ялап тырмап яттың һин,
> Намыҫыңды һаттың һин,—

ти.

Тарғын, быны ишеткәс, намыҫланып һикереп тора ла билен үҙ ҡулы менән тотоп урынына ултырта. Ҡарғаны атып алып, итен бешереп ашай ҙа, бер аҙ хәл алғас, Аҡйондоҙҙо эҙләп китә. Килә был элекке урынына, килһә — Аҡсахан йортоноң эҙе лә юҡ, бөтә иле менән был урындан күтәрелеп күсеп киткән. Ары бара Тарғын, бирә бара, Аҡсахан илен таба алмай, кире ҡибла табан юнәлә. Нуғай ханын эҙләп китә был хәҙер. Шунан бер диңгеҙ буйына килеп, Нуғай ханды таба. Таба ла: «Йәнеңме, малыңмы?» — ти.

Тарғын батыр шул ерҙә үҙен ташлап киткән өсөн Нуғай ханының тиреһен эпә менән туҡап, яҙалап үлтерә лә уның урынына үҙе хан булып ултыра. Шунан был билһеҙ хан күпме йәшәгәндер, уныһын белмәйем, атайымдан һорап ҡалмағанмын, үҙе белеп әйтмәгән. Үҙе белеп әйтмәгәс, миңә барып етмәгән.

Иртәк бөттө, үҙем ҡалдым, ҡолағымды һеҙҙең яҡҡа һалдым [36].

## ЕК МӘРГӘН

Ҡасандыр Ағиҙелдең кинәт боролош яһаған аҡ ярына ҡаршы йәшел туғайҙа Туғыҙаҡ әбей үҙенең балалары берлә йәйләргә уйланы.

Ағиҙел үҙенең бөтә сафлығы берлә ялтырап күренерҙәй һырт ергә биҙәкле аҡ тирмәне ҡорҙолар. Туғыҙаҡ әбей тирмә ишегенән ҡарағанда, Ағиҙел аҡ уҡа кеүек йылҡылдай, уның тыныс өҫтөндә уйнап йөрөгән шаян сабаҡтарҙың яһаған түңәрәктәре, бер-бер артлы яһалып, юғалып тора ине. Был хәтле асыҡ урындан Туғыҙаҡ әбей шомланып: «Ай-һай, балалар, тирмәне бигерәк яуҙың күҙенә тектек, һуңы яҡшы булһа ярар ине»,— тиһә лә, балалар: «Әй әнием, беҙ бар саҡта, яуҙың күҙе һуҡыр»,— тинеләр. Һиҙгер күңелдең шомо был һүҙ менән ботмаһә лә, үҙенең батыр балаларына ышаныуы әбейҙе йөрәкләндерҙе.

Тирмә ҡоролдо, урын ҡотланды. Туғыҙаҡ әбей туғыҙ улына туғыҙ юкә ҡыҙау * биреп урманға ебәрҙе.

Туғыҙаҡ әбей бер атаҡлы яу башының бикәһе ине. Ул саҡта Иҙел буйы батырҙарының көстәрен һынай торған майҙан Яйыҡ буйы берлә Сулман [37] аръяғы ине. Туғыҙаҡ әбейҙең бейе лә, яу саба торған атаҡлы батырҙарын йыйып, Ағиҙел менән Сулман буйына йыраҡ яуға киткәйне. Яу башы шул китеүҙән ҡайтманы. Туғыҙаҡ әбей шул ваҡыттан һуң туғыҙ улын ҡанат аҫтына йыйып, Ҡорос тигән туғайға күсеп килде. Был туғайҙағы ағасына һыя алмай торған шоморт, ҡарағат, миләш һәм тырыш бал ҡорттарының йәш юкә сәскәһенән генә йыйған саф балдары уларҙы туйҙыра, таштан-ташҡа һикереп шылтыраған һалҡын шишмә уларҙы һуғара ине. Ағиҙел һыуы кеүек тыныс аҡҡан ҡайғыһыҙ тормош үҙ көйөнсә аҡты. Туғыҙаҡ әбей ҙә туғыҙ улының майҙан күрергә ваҡыттары еткәнен һиҙеп, уларҙы өйләндерҙе. Шул көндән һуң йәш батырҙар аталары юлынан яуға йөрөй башланылар. Йәш көстәрҙең һәр бер тәжрибәһе уңа ине. Тутыҙ арғымаҡ берлә китеп, туҡһан ат яу малы алып ҡайтҡан саҡтары аҙ булманы. Ул ваҡыттарҙа бөтә Ағиҙел буйында телдән-телгә туғыҙ батыр әкиәттәре һөйләнә, улар тураһында маҡтау йырҙары шаулай ине. Бөтә Сулман буйында туғыҙ батыр яуынан ҡоттары осмаған, таң атҡанда йәндәренән имен булған бер өй ҡалмағайны.

Замандар үтте. Туғыҙаҡ әбейҙең кескәй генә өйөндә туҡһан йәнле бер ғаилә булды. Ҡәҙерле нәнә * үҙенең шаян торондарының * уҡ-йәйә берлә уйнағандарын рәхәтләнеп ҡарап тора, уларҙың тура атыуҙарына һөйөнә ине.

Бына бер көндө туғыҙ батыр Сулман буйҙарынан хисапһыҙ күп яу малы берлә ҡайттылар. Был олуғ шатлыҡ көнөнөң хәтере өсөн батырҙар туй яһанылар.

Йәйге төн ине. Киң болон, ҡуйы ҡара урман, тыныс Ағиҙел үлем йоҡоһо берлә йоҡлайҙар; урман артынан яңы уянған ярты айҙың шыйыҡ яҡтыһы һыу өҫтөндә шомло рәүештә емелдәй. Бейек юкә ағасының әллә ҡайһы бер ерендә шомло ябалаҡ һирәк-һирәк кенә ҡысҡырып ҡуя ине.

Туғыҙаҡ әбейҙең йөрәге тиҙ шомланды. Ләкин батырҙар туй хәтере өсөн әселгән ҡолмаҡлы * балдан бер ни һиҙмәҫлек рәүештә арып йоҡлағайнылар. Туғыҙаҡ әбейҙең һиҙгер ҡолағына һыу өҫтөндә шап-шоп иткән бер тауыш ишетелде. Шул арала уҡ: «Әй тәңрем! Тиҙ балаларым, ишкәк тауышы ишетелә — яу бар, тиҙ тороғоҙ!»— тип ҡысҡырһа ла, батырҙар ятҡан аҡ тирмәне көнсө яу солғап алды. Туғыҙаҡ әбейҙең ҡәҙерле эргәһе * йығылды. Күптән түгел бөтә Сулман буйына йоҡо бирмәй торған, Урал буйҙарында маҡтау йырҙары йырлана торған туғыҙ батыр хәҙер урындарынан юғалдылар. Уларҙың алтын-көмөштәре, уҡ-йәйәләре — барыһы ла дошман кәмәләре өҫтөнә тейәлеп йөҙөп китте. Күптән түгел Туғыҙаҡ әбейҙең тура атыуҙарына һөйөнөп торған шуҡ торондарының өҫтөндә хәҙер йыртҡыс ала ҡарғалар, төйлөгәндәр осоп йөрөйҙәр ине.

Ләкин аңҡау дошман ҡәҙерле эргәне тамырынан һеперә алманы. Яу килгәнде һиҙгән туғыҙынсы килеп, үҙенең ике йәшлек балаһын алып, ҡасып өлгөрә алды. Ул да, туғайҙың бер ситенә барып, үҙенең батыры һағышынан һарғайып үлде. Тик уның күкрәк һөтөн имә торған бала ғына иҫән ҡалды. Ул үҙенең ейегән * анаһының ҡоро имсәген һурып ята ине.

Кем белә, әллә тәҡдир уны хурлыҡ менән бөткән ҡәҙерле эргәнең үсен алыр өсөн иҫән ҡалдырғандыр. Әллә туғыҙ батыр фажиғәһен шатланып һөйләгәндәрҙең башына һау ҡалдырғандыр. Нисек кенә булһа ла, ул иҫән ине. Уға мәрхәмәтле ҡыр ҡуяндары туҡлыҡлы үләндәр өҙөп килтерәләр, йомшаҡ күңелле, йыуаш ҡоштар төрлө емештәр бирәләр ине. Ул үҙенең иптәш ҡоштары, януарҙары араһында үҫте, үҙенең ни өсөн былай яңғыҙ икәнен белмәйсә үҫте. Уны тәбиғәт үҙе аҫырап үҫтерҙе.

Ул ун йәшенә еткән саҡта теләһә ниндәй айыуҙарҙы бер ҡулы берлә күтәреп ырғыта ине. Ҡара урман халҡы уның көләгәһенән ҡурҡа ине. Була ине шундай саҡтар, ул бейек яр өҫтөнә үҫкән шыма ҡарағайҙарҙың башына менеп ҡарай: сикһеҙ-ҡырыйһыҙ ҡара урман бөтә ҡараңғылығы менән уның алдында ята; әллә ҡайҙарҙан көмөш таҫма кеүек һуҙылып килгән Ағиҙел борғоланып-һырғаланып ялтырай; йыраҡта йәшел ашъяулыҡ кеүек аландар, туғайҙар күренә, көн сығышында томан араһынан ғына бейек тауҙар ағарып тора. Бына уның сыҙамһыҙ ярһыу күңеле шул ерҙәрҙе лә күргеһе килә, унда ниҙәр барын белгеһе килә, ләкин ҡоро ҡул берлә генә барыу ҡурҡыныс төҫлө тойола ине.

Көндәр үтте. Бер көндө ул үҙенең туған тирмәһенең харабаһына барып сыҡты. Унда әллә ниндәй уҡ, йәйә һыныҡтары, ватыҡ өҙәңгеләр, ярылған ҡаҙандар, шулар араһында ялтырап ятҡан аҡ һөйәктәр күрҙе. Уның күңеленә был минең туғандарым, аталарым торған урын түгелме икән тигән уй килде. Аяҡтарын

һуҙып шул урынға ултырҙы ла, ҡара урманға төшөп барған ҡара ҡыҙыл ҡояшҡа ҡарап, әллә ниҙәр уйлана башланы. Уның тирәһендәге юҡә ағастарында мең төрлө йырсы ҡоштар, мең төрлө көйгә һалып, үҙҙәренең моңло йырҙарын йырлайҙар; ҡояштың һуңғы нурҙары тоноҡ һыу өҫтөндә һары алтын кеүек емелдәйҙәр; сикһеҙ ҡара урман ҡурҡыныс бер ололоҡ берлә тына, ҡабара ине. Үкһеҙ батыр үҙенең тыуған эргәһе өҫтөндә, ата-аналарының һөйәктәре янында батырҙарса ҡаты бер йоҡоға китте.

Төшөндә уға шәп арғымаҡҡа атланған, ҡорос уҡ берлә ҡаты йәйәһен иңенә аҫҡан бер ҡарт батыр күренде.

Ҡарт батыр үкһеҙҙең янына килеп: «Эй Ағиҙел буйының көслө ҡулы, атаҡлы батыры! Һин ҡайҙа ятырға белгәнһең, балам. Сурлы * яуының башына тыуған батыр балам, мин — һинең атаң. Тор урыныңдан, бына бынау юҡә ағасының аҫтында һиңә атаңдан ҡалған уҡ-йәйә бар. Ана, анау туғайҙа эйәһен юғалтҡан атаңдың арғымағы бар. Ал һин шул уҡты, атлап шул атҡа, кит көнбатышына. Шунда һин үҙеңдең даныңды, малыңды табырһың. Тик шуны онотма: был урын һинең тыуған урының, бында һинең ҡәҙерле нәнәң, батыр аталарың, һөйөклө аналарың, иркә туғандарың йәшәгәндәр. Улар үҙҙәренең дандарын ата-бабанан ала килгәндәр. Шул нәҫелдең атағын юғалтма, балам, һиңә шул бөтә туғандарыңдан сәләм. Иҫән бул, батыр балам Ек. Һинең исемең Ек булһын, йәйәң ныҡ булһын!»— тине лә күҙҙән юғалды.

Ек, уянғас, атаһы ҡушҡан уҡ-йәйәне ҡаҙып алып, туғайҙа йөрөгән арғымаҡты тотоп менде лә көнбатышҡа юнәлде. Ул ваҡыттарҙа көнбатышындағы башҡорттар Ҡазан ханына дан [38] түләйҙәр ине. Ек шул башҡорттарҙы ҡул аҫтына йыйҙы ла Ҡазан ханына дан түләүҙән туҡтатты. Ул, үҙенең ҡул аҫтындағы егеттәр берлән яу сабып, Ҡазан хандарын бик аҙ аптыратманы. Ектең уғы бушҡа осмай ине. Ул әгәр ҙә дошмандың күҙенә атып һуҡыр ҡалдырырға теләһә, ул эш булмай ҡалмай. Инде дошмандың алғы тештәрен һындырырға уйлаһа, һындырмай ҡалмай ине. Булалыр ине шундай ваҡыттар, ул, һунарға сығып, осоп барған ҡыр ҡаҙҙарының бер генә ҡауырыйын оҙоп төшөрөргә уйлай һәм эшләй, ҡасып барған толкөнөң бер ҡолағынан атып икенсеһенән сығара ине. Уның шул тура атыусылығы өсөн уны Мәргән тип атанылар.

Ек Мәргәндең исеме тиҙ арала йырҙарға ҡушылып әйтелә башланы. Ектең исемен ишетеү күп батырҙарҙың эсен ҡайната, уның үҙен күреү уларҙы ҡурҡыта. Урал тауы аръяғында булған ҡырғыҙ [39] батырҙары, Яйыҡ буйының атаҡлы бейҙәре, Ҡазан ханының атамандары уның уғына осрауҙан ҡурҡалар ине.

Заман үтте, һыуҙар аҡты. Бер ваҡыт Ҡазан ханы, иң көслө ғәскәрен йыйып, Ек Мәргән өҫтөнә һуғыш асты. Ек Мәргән дә үҙенең тоғро, ышаныслы иптәштәре берлән ҡаршы сыҡты. Ҡурҡыныслы һуғыш башланды. Ек үҙенең алдындағы ғәскәрҙең берәм-берәм йығыла барғанын күреп, һуғышҡа ҡыҙыға, ул үҙен-үҙе белмәҫтән алға бара. Хандың ғәскәрҙәре лә ҙур оҫталыҡ берлән аталар, ләкин Ек уларҙың уҡтарын һиҙмәй ине. Күп һуғышҡас, Ек үҙенең иптәштәрен ҡарайым тип артына боролһа, иптәштә-

ренең барыһы ла ерҙә ятҡанын күрҙе. Уның батыр юлдаштары үлеп бөткәйне. Шунан һуң Ек хан ғәскәренә үҙ ирке менән бирелде. Екте ғәскәр Ҡазан ҡалаһына алып китте. Ҡазанға барғас, уны хан ҙур таш һарайға ябып ҡуйҙы.

Берҙән-бер көндө Ҡазан ханының һунарға бара торған күленә яңғыҙ аҡҡош төшкән тип хәбәр иттеләр. Һунарға һәүәле хан тиҙ арала үҙенең мәргәндәрен йыйҙырҙы ла, шул аҡҡошто үлтермәйенсә генә атып алып, һарай күленә ебәрергә ҡушты. Хан барлыҡ мәргәндәре менән күл буйына килде, ләкин һис бер атыусы уғының яңылыш китеүенән имен түгел ине. Хан ни хәтле әйтеп ҡараһа ла, ҡулына ышанып эшкә барыусы булманы. Бары ла хандың ҡаты асыуынан ҡурҡа ине.

Шул ваҡыт мәргәндәр араһынан берәһе сыҡты ла: «Падишаһым, солтаным. Бындай нескә эште эшләр кеше Ҡазан илендә әле етешмәгәндер. Бында Ағиҙел буйынан килгән атаҡлы бер мәргән бар. Ул осоп барған ҡарсығаны атып, бер генә ҡауырыйын һындырырға уйлаһа, шуны эшләй. Уның уғы бушҡа ла китмәй һәм яңылышмай. Һеҙҙең был олуғ эшегеҙҙе ул ғына башҡарһа башҡара алыр!»— тип ханға Екте ғарыз * итте. Хан шундуҡ Екте саҡыртып алды ла үҙенең йомошон һөйләне.

Ек Ҡазан ханлығы ҡул аҫтында шундай еңел эшкә лә батырлығы еткән кешеләр юҡлыҡты күреп көлдө. Унан һуң ҡорос уҡлы көмөш йәйәне ҡулына алды ла: «Батыр хан, мин күл өҫтөндә тик торған ҡошто атыуҙы мәргәнлегемә кәмселек һанаймын. Һеҙ әлек ул ҡошто ҡурҡытырға ҡушығыҙ. Ул осҡан ваҡытта ҡай еренә атырға ҡушһағыҙ, башымды алдығыҙға ҡуйып, йомошоғоҙҙо үтәйем!»— тине.

Хан йәш батырҙың был һүҙенә рәхмәт әйтеп, унан һуң аҡҡоштоң йыуан ҡауырыйынан өсөһөн оҙҙорорға ҡушты.

Аҡҡошто ҡурҡыттылар. Ҡурҡаҡ ҡош, үҙенең тотҡонлоҡҡа эләгәсәген һиҙенеп, бар көсө менән һауаға күтәрелә башланы. Ул арала Ек Мәргән дә көмөш йәйәнең ебен сиртте. Күп тә үтмәй, аҡҡоштоң өс ҡауырыйы һауала йылғыйлап * осоп күлгә төштө. Бисара ҡош та, күлдең бер ситенә төшөп, йөҙә башланы.

Хан Ектең был оҫталығы, батырлығы өсөн уға ирек бағышлап, Ағиҙел буйына ҡайтарып ебәрҙе. Ек, Ҡоросҡа ҡайтып, үҙенең батырлығын йыраҡ илдәргә хәтле белдергәс, аталары янына ҡайтып китте [40].

## ҠЫПСАҠ ЕГЕТЕ МЕНӘН БАШҠОРТ ҠЫҘЫ

Бик борон замандарҙа Ҡыпсаҡ тигән бер ҙур иләү булған, тиҙәр. Ул боронғо бер башҡорт иләүе икән. Шул иләү — илде, һәр яҡлап яу килеп, маҙаһыҙлап торған, ти.

Берҙән-бер көндө Танып тигән һыу [41] буйында һылыу бер башҡорт ҡыҙы керҙәр сайҡап торғанда, эргәһенән йылҡылдап торған

аҡбуҙ атҡа атланған бер ҡыпсаҡ егете үтеп бара икән. Ул атын һуғарырға булып, һылыуға былай тигән:

Таныш буйы һылыуҙарын күҙләп китәм,
Бирсе, һылыу, күнәгеңде, толпарыма һыу эсертәм;
Сәфәремдән имен-аман урап ҡайтһам,
Таныш буйы бер һылыуын бисәм итәм.

Быға ҡаршы ҡыҙ шулай яуап биргән:

Ҡыпсаҡ иләү егетенең
Арҡаһында думбары бар бүҙәнәләй,
Салбарына зәр һалдырған,
Йөҙ ҡуйы, мең тәүәһе * бар нәмәләй!

Егет:

Арҡамда ризыҡлыҡ думбарым бар,
Яуға ҡаршы барырлыҡ дарманым бар,
Тирә-яҡҡа, халайыҡҡа киң таралған
Батыр тигән исем алған ҙур даным бар.

Ҡыҙ:

Йән аямай яуға барған батыр егет,
Минән һиңә шулдыр теләк:
Алыштарҙа еңеп сығып, аман ҡайтһаң,
Һинең менән ҡауышырға минең теләк.
Вәғәҙәгә төҫөм итеп минән һиңә ошо бүләк,—

тип сиккән ҡулъяулыҡҡа торған көмөш йөҙөк бүләк иткән, ти.

Яу ҡырында ҡалҡан булыр һинең бүләк,
Иҫән-аман ҡайтһын, тиеп телә теләк,
Хуш, һылыуым, вәғәҙәле йәрем минең,
Юлдарымда, яҙмышымда бул һин терәк,—

тип, егет һамаҡлап әйткән дә, һылыуын ҡаты ҡыҫып үпкәс, атына атланып яуға сапҡан, ти.

## МОРАҘЫН МЕНӘН БУҺҠЫН

Мораҙын менән Буһҡын бер ата, бер әсә балалары булғандар. Икеһе лә бай булған. Мораҙын — Буһҡындың ҡустыһы, батыр ҙа булған. Быларҙың Мораҙыны Бөрйәндә, Ирәндек һыртында, торған. Буһҡыны, иген сәсеүгә зауыҡ итеп, Дим буйында йәшәгән.

Мораҙын, ағаһы Буһҡынға кеше ебәреп: «Бәхетеңде тупраҡҡа болғама! Донъяла мал сару даһинан нәрҫә [42] бармы? Илгә ҡайт!»— тип әйтһә лә, Буһҡын ер игеүен ташлап ҡайтмаған.

Мораҙын йылҡыһының хисабын үҙе лә белмәгән, йылҡысылары ла белмәгән. Йылҡысылары йылҡы теүәлләгәндә, Ҡәҙермәт уяһына өйөрөп ҡуйып, йылҡыһының теүәллеген белгән, ти...[43]

Мораҙын тураһында халыҡ телендә түбәндәге ҡобайыр йөрөй:

[Б у һ ҡ ы н:]

Биләнсәк башы биш ҡыуаҡ,
Биләнсәк башы биш ҡыуаҡ
Билге төйҙөң, Мораҙын,
Билге төйҙөң, Мораҙын;
Астаналы ҡаҙандан [44],
Астаналы ҡаҙандан
Маһайыуҙы уйланың,
Маһайыуҙы уйланың.
Биш бейәгә бер ҡолон,
Биш бейәгә бер ҡолон
Һин тиленең, Мораҙын,
Һин тиленең [45], Мораҙын;
Ҡарт әсәңде, йәш итеп,
Ҡарт әсәңде, йәш итеп,
Иргә бирҙең, Мораҙын.
Ҡаптырғаңа — ҡалтаңа,
Ҡаптырғаңа — ҡалтаңа
Көмөш сабып, Мораҙын,
Көмөш сабып [46], Мораҙын,
Алтын-көмөш тултырып,
Алтын-көмөш тултырып
Арҡаландың, Мораҙын,
Арҡаландың, Мораҙын.
Ҡара ыласын ҡау иттең,
Ҡара ыласын ҡау иттең [47],
Ҡошто ҡайҙан сөйөрһөң?
Ҡошто ҡайҙан сөйөрһөң?
Ҡара арғымаҡ ҡатырҙың,
Ҡара арғымаҡ ҡатырҙың,
Атты ҡайҙан менерһең?
Атты ҡайҙан менерһең?
Менерһең, ау, менерһең?

[М о р а ҙ ы н:]

Биләнсәк башы биш ҡыуаҡ,
Биләнсәк башы биш ҡыуаҡ
Билге төйһәм — ил өсөн!
Астаналы ҡаҙандан,
Астаналы ҡаҙандан
Маһайыуҙы уйлаһам,
Маһайыуҙы уйлаһам,—
Донъя яптыҡ [48], көн өсөн.
Биш бейәгә бер ҡолон,

Биш бейәгә бер ҡолон
Мин тилеһәм,— йорт өсөн!
Ҡарт әсәмде, йәш итеп,
Ҡарт әсәмде, йәш итеп,
Иргә бирһәм,— дан өсөн!
Ҡаптырғама — ҡалтама,
Ҡаптырғама — ҡалтама
Көмөш сапһам,— күрк өсөн!
Алтын-көмөш тултырып,
Алтын-көмөш тултырып
Арҡаланһам,— өлт өсөн!
Ҡара ыласын ҡау итһәм,
Ҡара ыласын ҡау итһәм,
Шоңкар һайлап сөйөрмөн.
Ҡара арғымаҡ ҡатырһам,
Ҡара арғымаҡ ҡатырһам,
Толпар һайлап менермен,
Менермен, ау, менермен!

## СУРА БАТЫР

Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын,
Ҡазанға китеп барамын.
Мин Ҡазанға барғансы,
Ҡар яумағай, ҡан яуғай;
Мин Ҡазанға барған һуң,
Ҡан яумағай, ҡар яуғай.

Ҡанатбайҙың алаты,
Ҡултығында ҡанаты,
Яуҙы күрһә, сәйнәй, ти,
Ҡуй-һарыҡтай әйҙәй, ти.
Анауыл менән мынауыл,
Ике уртаһы ҡарауыл.
Буҙса турғай булайым,
Ҡапҡаһына ҡунайым,
Тулып ятҡан дошмандың
Ҡайһы берһенә булайым.

Өйҙә бармы ир заты,
Йортта бармы ир заты?
Ир-ат — батыр ҡанаты,
Ир-ат — яуҙың ҡанаты.

Өйҙә ята ҡыҙ-ҡортҡа,
Түрҙә ята — ҡыҙ-ҡортҡа;
Ҡатын булһа сара юҡ,
Әгәр иркәк булғанда,
Булыр ҙа ине бер тотҡа!
Яуға китеп барамын,
Ҡазан илен аламын,
Ҡазан илен алған һуң
Ҡайтып ҡылысым һаламын.

## СҮКЕМ БАТЫР

Сүкем батыр ир ине,
Сүкем батыр ир ине,
Дошмандарға күкрәк киреп,
Ҡаршы сығыр ир ине.
Сикәһенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тир ине,
Елкәһенә уҡ тейһә,
Ямғыр яуа, тир ине.

Ошбу һалйот ерендә
Киң өйөрҙәр йөр(ө)гәндә,
Шул малдарҙы таларға
Күсем хан яуы килгәндә,
Ҡамсат бүркен ҡыңғартып,
Уҡ-һаҙаҡтарын тағып,
Сүкем сыҡҡан яу һалып,
Арғымаҡҡа атланып.

Өлдөл кеүек осҡан ул
Буҙъюрға ман сапҡанда,
Таш-ҡаяны ватҡан ул
Һаҙағынан атҡанда.

Гәүерҙәр * уйланылар
Башҡорт ерен таларға,
Сүкем кеүек батырҙарҙы
Хәнйәр менән ҡаҙарға.
Сүкем батыр бирмәне
Тыуған-үҫкән ерҙәрен,
Ҡурпылы тибендәрен,
Йылҡылы өйөрҙәрен.
Юлдаштары бөтһә лә,
Миәс һыуын кискән ул,

Унда булған дошмандарҙың
Муйындарын киҫкән ул.

Күкрәк кереп ҡаршы сыҡҡан,
Бер ҡурҡыуҙы белмәгән,
Шуға уны туған халҡы
Тәкбир * әйтеп ерләгән.

Сүкем батыр ир ине,
Бик яныуар ир ине,
Башҡорттарҙың араһында
Таң йондоҙо шикелле
Һүнмәй торған ир ине.
Ҡарсығалай йылғырлыҡта
Ил эсендә бер ине.

## БАЯЗИТ БАТЫР

Илдәрҙә күп батырҙар:
Кейек аулар батыр бар,
Дошманды яулар батыр бар,
Илен һаҡлар батыр бар.
Илен һөйгән батыр йән
Дошманын еңмәй ҡайтырмы?
Иленә дошман килгәндә,
Тирмәгә инеп ятырмы?
Баязит тигән сор * мәргән,
Мәргәнлек үтмәй кемдәрҙән.
Үкенесе ҡалыр бәндәнең
Үтеп киткән көндәрҙән.
Дошман яуы килгәндә,
Ҡарттар оран биргәндә,
Уҡ-һаҙағын ҡулға алып,
Батырҙар атҡа менгәндә,
Баязит батыр килгән дә,
Һикереп атҡа менгән дә,
Юртып, елеп үткән дә,
Сәмләнеп яуға киткән.

Илдәрҙә күп батырҙар:
Кейек аулар батыр бар,
Илен һаҡлар батыр бар.
Баязит батыр ир ине,
Батырҙан батыр Баязиттәй,

Арыçлан һынлы батыр бар.
Баязит батыр ир ине,
Күкрәгенән ҡан сыкһа,
Тирем сыға тиер ине.
Баязит батыр ир ине,
Яу ҡайтарыр ир ине,
Нуғай мырҙа ғәскәрен
Ҡуй-һарыҡтай тураҡлап,
Ҡан ҡалтыратып, онтаҡлап
Иленә ҡайтыр ир ине.
Баязит батыр ир ине, ау,
Баязит батыр ир ине.

## АҠШАМ БАТЫР

Бер йәшемә килгәндә,
Бүре кеүек елкендем;
Ике йәшкә еткәндә,
Игәүҙән уҡ һайланым;
Өс йәшемә еткәндә,
Осҡан ҡоштай талпындым;
Биш йәшемә еткәндә,
Билем быуып бәйләнем —
Билдәле булдым илемә;
Алты йәшкә еткәндә,
Аҡ балтырым төрөлгән,
Уймаҡтай ауыҙым [49] бөролгән,
Көрәшкә тоштом бер үҙем;
Ете йәшкә еткәндә,
Егет булдым етлегеп;
Һигеҙ йәшкә еткәндә,
Һикереп сыҡтым атлығып;
Туғыҙ йәшем тулғанда,
Турат менеп елдем мин;
Ун йәшемә сыҡҡанда,
Уң билемдә һаҙағым,
Һул билемдә ҡылысым,
Ҡаршы барҙым дошманға,
Затым өсөн, ил өсөн.
Атым булды Аҡшам батыр,
Яуға киттем ил өсөн,
Яуҙан илемә даным ҡайтыр,
Елеп мескән атым ҡайтыр.
Дошмандарым боçоп ятыр,
Атым минең Аҡшам батыр.

## КӨБӘК БАТЫР

Борон заманда беҙҙең илгә ҡалмыҡ яуы сыҡҡан. Көбәк батыр, кәләш әйттереп, туй яһайым, тип ятҡанда, шул айҡан кәләшен кейәүләй алмай яуға ҡаршы киткән.

Ҡалмыҡ яуын ҡайтарып илгә ҡайтҡас, кәләшен кейәүләргә барған. Кәләшенә ҡауышҡас, Көбәк батырҙың күңеле булып етмәгән. Кәләше, шуның күңелен тултырам тип, ҡобайыр менән һөйләп, хәлен аңлатҡан:

Көбәк — батыр тинеләр,
Көбәк — батыр тинеләр;
Ир арыҫланы тинеләр,
Ир арыҫланы тинеләр;
Тиҙ үк килә тинеләр,
Тиҙ үк килә тинеләр;
Илен-йортон тыныслап,
Илен-йортон тыныслап,
Яуҙан килә тинеләр,
Яуҙан килә тинеләр,
Тинеләр, ау, тинеләр.
Көбәк батыр — бик батыр,
Көбәк батыр — бик батыр.
Үнәре * менән күренгәс,
Үнәре менән күренгәс,
Булат ҡылыс, һайманы,
Булат ҡылыс, һайманы.
Ялтырап күҙгә эленгәс,
Ялтырап күҙгә эленгәс,
Югерҙем дә йығылдым,
Югерҙем дә йығылдым;
Эйелдем дә бөгөлдөм,
Эйелдем дә бөгөлдөм;
Кейемемде тапманым,
Кейемемде тапманым;
Йотом ҡымыҙ татманым,
Йотом ҡымыҙ татманым.
Имән ағас — ҡаты ағас,
Имән ағас — ҡаты ағас
Инеп китеп . . . . . .[50]
Шунда өҙөлдө, ау.

## ТУЛГӘН БАТЫР

Ҡарсаҡ * юртмаҫ ҡалындан
Ҡарғып үтеп барамын;
Төлкө юртмаҫ төләйҙән
Төндә үтеп барамын;
Ябалаҡ осмаҫ яландан
Яңғыҙ үтеп барамын;
Асы күл менән сөсө күл,
Унан да үтеп барамын.
Ай, күлдәр бар, күлдәр бар,—
Ат саптырып еткеһеҙ;
Яғалай бөткән екән тал —
Ырғыһа, ҡуян үткеһеҙ,
Унан да үтеп барамын.
Балҡан тауҙың башынан,
Асылы күлдең ҡашынан,
Унан да үтеп барамын.

Ййыҡ ҡайҙа, яй ҡайҙа,
Йәйелеп ятҡан мал ҡайҙа?
Сүккән тойә күренмәй,—
Дошман яуы алып киткән,
Шуны ла юллап барамын.
Шуны юллап барамын, ау,
Дошмандан үс аламын.

## СТАРШИНА МӘСӘҒҮТ

Старшина Мәсәғүт,
Старшина Мәсәғүт,
Ары ла тороп әйтте, ти,
Бирс лә тороп әйтте, ти:
Указ килгән беҙҙәргә,
Указ килгән беҙҙәргә
Атанан тоҙ алырға,
Батшалыҡҡа һалырға [51].
Ошбу иғлан таралһын
Урал буйы халыҡҡа;
Тамъян, бөрйән, ҡыпсаҡҡа,
Күршс ятҡан аппаҡҡа,

Яр юлдашым һупакка.
Өндәй ҙә өндәйҙер,
Өндәй ҙә өндәйҙер
Был кәүре * кем
Аҡ ҡалпаҡҡау,
Аҡ ҡалпаҡҡау!
Кемһәләй һәллеүәләй! [52]

Айдын да нуғай ерендә,
Уайҙын да нуғай ерендә,
Тамъяндарҙың илендә,
Данлы ҡыпсаҡ ерендә,
Йй тапкан бөрйән илендә
Урал тауҙай тау булмаç,
Урал тауҙай тау булмаç;

Хеҙмәт иткән хур булмаç [53],
Ҡазыйлы * илдәй ил булмаç [54].
Ҡасмайыҡ, уландар, ҡасмайыҡ,
Ҡасмайыҡ, уландар, ҡасмайыҡ.
Кемһәләй һәллеүәләй.

## ҠАРАС МЕНӘН АҠША

Борон Яйыҡ буйында, хәҙерге Науруз ауылы ултырған ерҙә, Ҡарас [55] тигән бер мәргән уксы булған. Бер ваҡыт бер төркөм ҡаҙаҡтың туғайҙағы йылҡы көтөүен ҡыуып алып китеүен күргәндәр. Быны ишетеү менән Ҡарас, тиҙ генә үҙенең буҙ ҡашҡаһын менә һалып, утыҙлап һыбайлы эйәртеп, ҡаҙаҡтар артынан баçтыра сапкан. Ҡыуып еткәс, Ҡарас барымтасыларҙың башлығы алдына сығып туҡтаған да ҡобайыр менән былай тип әйткән, ти:

Балаһы Ҡушкилденең, Ҡарасымын,
Яу килһә, алға сапкан барасымын [56],
Атҡыстар йыйылышып майҙан тотһа,
Һәр ваҡыт беренсегә талашсымын.
Йөрөмәгән ҡырҙан ҡырға атҡан уғым,
Ҡалъяным ике яҡта әле лә туғын [57],
Һырт биреп, ҡурҡаҡтарса ҡаса бирмә,
Ҡотолмаç ҡасҡан менән ни бар тубың,
Ҡарасҡа ҡул күтәргән ниндәй ирһең?
Атаң кем, ырыуың кем, ҡайһы ерһең?
Ҡараһам тал буйына,— батырҙарса,
Күргәс ук, ялт әйләнеп, туҡтай бирҙең.
Атыңды әйт, был донъянан юйырмын мин,
Уғымды ҡыҙыл ҡанға буярмын мин.
Илеңдә аша тыуған батыр булһаң,
Хур итмәй, тәрбиәләп ҡуйырмын мин.

Менгәнем — аҫтымдағы ҡашҡа, тимен,
Ҡан түкмәй, иленде һин күрер булһаң,
Күк, ала — күп йылҡыны ташла, тимен.
Ҡаҙағым, батыр булһаң, бирсе киҙәк *,
Уғымды мин атырмын һиңә төҙәп;
Теләгән урыныңды һайла, батыр,
Ҡыуғыға [58] — боронғонан әүүәл киҙәк.

Йылҡыларҙы ҡыуып алып китеп барыусы барымтасылар башлығы ла, Ҡарасҡа яуап итеп, һис ҡурҡыуһыҙ-ниһеҙ, шулай тип әйткән, ти:

Күп йөрәктәр шыулаған
Аҡша тигән атымдан;
Батырлыҡ ман түрәлек
Шәжәрә килгән затымдан.
Ай-һай һалып йырланың,
Килә һалып яҡындан;
Батырмын тип маҡтандың,
Һынашмай тороп, ҡапылдан.
Аҡша батыр тигәндә,
Күп батыры ҡалмыҡтың
Яҙа ине аҡылдан.
Саяндай саға һөйләнең,
Һиҫкәнмәйсә, таҡылдап;
Аҡша һынлы батырҙан
Ҡулдағы малды ҡайтарып
Алһаң,— алған сығырһың
Аҡ яулыҡлы ҡатындан.
Алты аластың * эсендә
«Аҡша батыр...» тигәндә,
Аблай [59] хандың батыры
Йығыла ине атынан.
Үҙең бер йәш балаһың,
Уттай геүләп янаһың;
Килә һала айҡаштың,
Байҡамай батыр самаһын.
Киҙәгеңде ал, балам,
Бер киҙәктән юйылһаң [60],
Һерәйеп ҡатып ҡалаһың.
Күгәреп яткан күк арҡа,—
Торған ерҙән күрһәтәм
Атышыр ерҙең самаһын.
Ҡан түкмәй, балам, тарта бир
Ҡыҙыулап килгән юлыңдан,
Татымай үлем язаһын.
Батырға кергән күп малды
Һаҙаҡлы йөҙ ҡаҙаҡтан
Яңғыҙың ҡалай алаһың?

Ҡарас быны ишетеү менән, Аҡша самалап күрһәткән арҡаға сабып барып етә һалып, атышыуға яһана башлай. Ат өҫтөндә көйө янын ҡороп, ҡулына һаҙағын алып уйға ҡала. «Тәүҙә мин уның ҡалъянындағы һаҙаҡтарын ҡыра атайым: мәргәнлегемде күреп, бәлки, ҡан түкмәйенсә, малды именлек менән генә ҡалдырып китерҙәр» тип уйлай. Ҡулындағы һаҙағын ҡалъянына кире һалып, «ҡуҙы яурын» тигән икенсе бер һаҙағын ала. Шунан, атырға уҡталып, «ҡуҙы яурын» менән ҡороулы янына ҡарап, былай тип әйтемсәген әйтә:

Йылан башлы киң яным, тарткап саҡта,
Шытырлап һынып китһәң — һиңә хурлыҡ [61].
Ҡуҙы яурын — ҡорос башаҡ бәлдегәндә *,
Тайшайып, ҡырын китһәң — һиңә хурлыҡ.
Туғыҙ толом аҡ ебәк, туғыҙ үрем
Сиралып, серкеп [62] китһәң — һиңә хурлыҡ.
Серәцеп тартып та мин алалмаһам,
Билдәле, ул ваҡытта миңә хурлыҡ.
Ҡуҙы яурын — ҡорос башаҡ тейгән саҡта,
Ҡаҡлығып, өҙалмаһаң — һиңә хурлыҡ.
Ҡалъянды өҙгәнсе аталмаһам,
Билдәле, ул ваҡытта миңә хурлыҡ [63].

Ҡарас шулай ти ҙә, өҙәңгегә баҫыңҡырап бәлдәй биреп, янын тартып ебәрә. Аҡшаның уң яҡлап аҫылған ҡалъянындағы һаҙаҡтары пара-пара * туҙып, сыра-сыра юлып, ян-яҡҡа осоп барып төшәләр. Аҡша быға гәжәпһенеп: «Күрҙегеҙме был баланы, атышыуына ҡарағанда, бик яман күренә. Ҡалмыҡтың Ванишлихай батыры менән осрашҡанда ҡыймылдамаған йөрәгем һулҡ-һулҡ итеп ҡалды ғуй», ти. Шунан һуң, үҙенең киҙәге буйынса, Ҡарасҡа атырға йыйына. Аҡша атыр алдынан яны менән һаҙағына былай ти:

Ҡуҙы яурын—ҡыу йәйә,
Тарта алмаһам, миңә хурлыҡ;
Тарткап саҡта, сатнаһаң,
Ул ваҡытта һиңә хурлыҡ;
Тоҫҡаған ергә тейгеҙмәй,
Яҙа тартһам, миңә хурлыҡ.

Ашыу-ашыу бил икән,
Аша бер һуҡкап ел икән;
Ҡашҡайып торған убала
Һынаша торған ир икән.
Ҡаҡ эйәрҙең ҡашы, тип,
Ҡаҡ йөрәктең төҫө, тип,
Үлер ерең ошо, тип,
Тоҫҡаны батыр һаҙағын.

Аҡша батыр бәлдәп атып ебәргән. Һаҙаҡ Ҡарастың өҫтөндәге [тимер] һауытын* үтеп ҡаҙалырға өлгөрмәй ҡалған, Ҡарас уны йәһәт кенә тотоп алып, ҡалъянына һалып ҡуйған, ти.

Хәҙер киҙәк Ҡараста. Ул әҙ генә уйланып торғандан һуң, һаҙағының башағын бәке менән моцап һындырып ала, сөнки башаҡ һаҙаҡҡа [тимер] һауыттың дүңгәләге аша эскә үтеп инергә ҡамасаулай. Шунан Ҡарас башаҡһыҙ һаҙағының осон бишкә телә лә, Аҡшаға тоҫҡап ата. Һаҙаҡ һауыттың биш дүңгәләгенән биш нәҙек уҡ булып үтеп, Аҡшаның күкрәген селтәр һымаҡ итеп үтәләй тишеп сыға. Аҡша батыр, уй-бай тип, ергә атынан йөҙтүбән ҡолап төшә. Аҡшаның юлдаштары Ҡарасҡа ташланырға өлгөрә алмайҙар: шуны ғына көтөп торған ҡыуғынсылар уларға ата башлайҙар.

Аҙаҡ килеп, үҙҙәренең башлыҡтарын һәм бер нисә кешеһен юғалтҡан барымтасылар йылҡы көтөүен ҡалдырып ҡайтып китергә мәжбүр булалар.

Аҡшаны, йығылған урынында ҡәбер ҡаҙып, күмеп ҡуялар. Ҡәбере өҫтөнә таштан ҡурған өйәләр. Батырҙың баш осона билдә итеп бер һаҙаҡ ҡаҙап ҡуйғандан һуң, Ҡарас шулай тигән, ти:

Заманында күп тартыш күргәнһең һин,
Донъянан күп батырҙы һорғәнһең һин;
Башҡорттоң аҡкыстарын тиңгә алмай,
Тарпандан алты аласта йөрөгәнһең һин.
Һауытты йырта атыр ир икәнһең,
Батырҙың ашып тыуған бере икәнһең;
Ил һүтеп, үҙеңә тиң таба алмай,
Сыҙамай йорәгеңә йөрөгәнһең.
Ҡашҡайып киҙәк бирҙең ҡаршы тороп,
Көрәштең батырҙарса түште киреп;
Һауытты серегән боҙҙай итә яҙҙың,
Китмәне әҙ-әҙ генә өҫтән туҙып.
Бынан һуң һинән батыр күрмәҫ күҙем,
Урынлы, маҡтанһаң да, әйткән һүҙең;
Ут йөрәк арыҫландай Аҡша батыр,
Ҡуяйым тәрбиәләп мин дә үҙем.
Таш менән ҡурған итеп ҡаҙҙым гүрең,
Аталыр исемең менән ятҡан урын;
Бер һаҙаҡ баш осоңа ҡаҙап ҡуйҙым,
Әйтһендәр: «Батыр үткән беҙҙән борон» [64].

## [БИЛАЛ МЕНӘН ДҮСӘН]

Борон башҡорттар менән ҡаҙаҡтар араһында бер-береһенә яу һалыуҙар булған. Бер ваҡыт ҡаҙаҡтар яу һалып, Туңғатар йортондағы башҡорттарҙың 1500 йылҡыларын әйҙәп алып киткәндәр. Шунан һуң башҡорттар үҙҙәре ҡарымтаға барғандар. Бик нык

яу булған. Шунда бер башҡорт ҡартының бер улы, бер кейәүе ҡаҙаҡтарға болон төшөп ҡалған. Был яуҙа башҡорттар ҡаҙаҡтарҙы Күксәтауға ҡәҙәр ҡыуғандар. Айҙарбәк тигән ҡаҙаҡ байының бер мең биш йөҙ йылҡыһын алып ҡайтып бүлешкәс, ҡарымтаға барыусыларға ун бишәр баш йылҡы тейгән. Шул яу ыңғайы менән улы, кейәүе ҡаҙаҡтарҙа болон ҡалған башҡорт ҡарты ҡобайыр әйткән:

Югереп мендем ел тирмәнгә, яным ай,
Ҡуласала дегет юҡ, яным ай!
Ята торғас, иҫемә алдым, яным ай,
Билал менән Дүсән юҡ, яным ай!

Межа ҡыуаҡ һигеҙ талын, яным ай,
Ҡырҡып алдым уҡ-һаҙаҡҡа, яным ай,
Быңа тигән егеттәрем, яным ай,
Тотолоп ҡалды ҡаҙаҡта, яным ай.

Абылай хандың аҡ дөйәһе, яным ай,
Ята торғас ҡойшәнде, яным ай.
Ята торғас, иҫемә алдым, яным ай,
Билал менән Дүсәнде, яным ай.

Алыҫтин ҡарай күренгән, яным ай,—
Йопар тауҙың сауылы, яным ай.
Һағыш менән һарғайған, яным ай,
Бай Туңғатар ауылы, яным ай.

Алыҫтин ҡарай күренгән, яным ай,—
Күксәтауҙың мешәлеге, яным ай.
Күп халайыҡ эстәрендә, яным ай,—
Батыр туған иҫтәлеге, яным ай.

Теҙелеп төшөп һыу эсә, яным ай,
Күксә тауҙың кейеге, яным ай.
Күҙҙәремде һарғайтты, яным ай,
Билал менән Дүсәндең көйөгө, яным ай.

Илле йәшкә еткәнемдә, яным ай,
Иңкелдәтте туғаным, яным ай.
Күкрәк тулған күҙ йәшем, яным ай,
Инде ҡалды ҡыу башым, яным ай.

## ЕРӘНСӘ СӘСӘН

Бер көн ҡаҙаҡ байҙары менән Абулхайыр [65] хан башҡорт тарханы Аҡмәмбәткә [66] ҡунаҡҡа килгән. Килгәс, Аҡмәмбәткә:

— Һинең атаң менән беҙҙең аталар һәр ваҡыт татыу йәшәгән. Һин был Яйыҡ буйынан, беҙҙең һыулауҙан кит, үҙеңә тыныс булыр; ҡыш тибенлеккә кәрәк тиһәң, Ирәндектә, Әтәстә [67] малың ҡышлатырһың. Мин бүтән халыҡты нисек өркөтөргә белермен. Улар үҙҙәре лә ҡасыр, — тигән.

Аҡмәмбәт, малын ҡурсып, Уралға китмәк булған. Айырым байҙарҙы үҙе менән алып китеүҙе аңлатыу өсөн, «ҡунаҡ күрергә» Абулхайыр хандар янына саҡырған. Ерәнсә сәсән был хәлде белгән дә саҡырмаһалар ҙа килгән. Шунда байҙар менән хан: «Халыҡты ыҙғытаһың», — тип, Ерәнсәгә үҙ шелтәләрен әйтә башлағандар икән, Ерәнсә Абулхайыр ханға былай тигән:

Мин әйтмәйем, күп әйтә, әү,
Күп — сүп түгел, шул әйтә, әү,
Әй, күп — сүп түгел, шул әйтә.
Күп эсендә кем сүп түгел, әү,
Күп һүҙен һәм [68] шул әйтә.
Күп тигәнем халыҡ булыр, әү,
Тотҡан юлы хаҡ булыр, әү,
Әй, һүҙе һөттән аҡ булыр,
Яҡшыға ышыҡтай тау булыр, әү,
Яуызға ҡаршы яу булыр.

Күп эсендә баламын, әү,
Һеҙҙең күҙгә ҡарамын [69], әү,
Әй, һеҙҙең күҙгә ҡарамын.
Күп һүҙен әйтер баламын, әү,
Үлгәнсе күптә ҡаламын.
Хоҙайым һеҙҙе яратҡан,
Күптеме һеҙгә ҡаратҡан,
Әй, күпте һеҙҙән талатҡан.
Күптең дә барыр ере гүр,
Аҙҙың да барыр ере шул.

Хан булып та белмәһәң, әү,
Шәжәрәү асып күрмәһәң, әү.
Әй, күреп тә аңлар булмаһаң,
Һөйләйем, ауырға алмаһаң, әү,
Илемә ҡәһәр һалмаһаң.

Хандар ҙа тыуған, хан булған, ти,
Берәү ҙә түгел, күп булған, ти,
Әй, берәү ҙә түгел, күп булған.

Яманлығын әйтмәйем, әү,
Яҡшыһы булырын көтмәйем.
Абулхайыр тигән хан булған,
Һин түгел, борон хан булған [70].
Әй, бүлгеләнмәҫ ҙур булған.
Тоҡомонан Ибраҡ [71] бар булған,
Себергә килеп хан булған.
Атаһы ерен тарлатҡан, ти,
Тота алмайса тарҡатҡан, ти,
Әй, тота алмай тарҡатҡан.
Себерҙә үҙен һайлатҡан, ти,
Ханлығын киңәйтмәй тарайтҡан.

Күсеп тә килгән күсендә [72], ти,
Күсеме [73] тыуған күсендә, ти,
Әй, ҡар ҡаплаған ҡыуышында.
Кеслегә ҡаршы көрәшкәндә, ти,
Кесем дә ҡалған күсемгә, ти.

Себерҙән туҙып ҡасҡанда, ти,
Арбаһы һаҙға батҡанда, ти,
Әй, аптырап һаҙҙа ятҡанда,
Муйынына боғалаҡ таҡҡан да, ти,
Йәне сыҡҡан, ти, арҡанда.

Аблай [74] тигән дә ул ине, ти,
Төйә лә көткән ҡол ине, ти,
Әй, ҡаты ла тотҡан ҡул ине.
Мин, мин, тигән, мин, тигән, ти,
Аҡ шоңҡарҙай ир, тигән, ти,
Әй, донъяла мин — бер, тигән.
Дошмандан өркмәй, кил, тигән,
Йәнегеҙ алам, бир, тигән.

Бармы берәйһе күренгән, әү,
Ҡамҡа * тунға төрөнгән, әү,
Әй, ҡамҡа тунға төрөнгән.
Бары ла гүргә һөрөлгән, әү,
Кәфенгә сырмап төрөлгән!

Күптән сүптәй үк алынған, әү,
Башына ташы ҡағылған, әү,
Әй, битенә ҡара яғылған!
Уларҙан һуң да табылған, әү,
Ханға шулай яҙылған.
Мин әйтмәйем, быны күп әйтә,
Миңә түгел, әү, һиңә әйтә,
Әй, миңә түгел, һиңә әйтә:
Ханмы беҙҙән, ти, мал котә,
Ханмы беҙҙән, ти, ҡан көтә?

Ҡайғыһыҙ йоҡо йоҡлаған, ти,
Ҡарыуһыҙ мал туплаған, ти,
Әй, ҡарыуһыҙ мал туплаған.
Күп — күҫәген һутлаған, ти,
Табынына ҡарай ыҡлаған.

Аҡмәмбәт тә аш һалған, ти,
Аш һалмаған, баш һалған, ти,
Әй, халыҡ та уға таш яҙған.
Хан да кире сыға алмаҫ, әү,
Кисеүенә халыҡ таш һалған.

## БАЙЫҠ АЙҘАР СӘСӘН

### 1. БАЙЫҠ СӘСӘНДЕҢ ҠАҘАҠ АҠЫНЫ БОХАР МЕНӘН ӘЙТЕШКӘНЕ

Байыҡ Салауаттың атаһы Юлай, уның атаһы Аҙналы менән Әй [75] буйын биләгән Байназар тархандың улы булған. Байназар тархандың биш улы: өлкәне Байыҡ, икенсеһе Таныш, өсөнсөһө Тайып, дүртенсеһе Ҡайып, бишенсеһе Танһыҡ булған.

Үҙе сәсән булып, Байыҡ атаһынан йәшләй айырылған, ил гиҙгән; үҙалдына көн иткән Тайыбы Аҙналы тархандың ҡыҙын урлаған да был диярҙа * тормаған, ҡаҙаҡ араһына тайған. Таныш менән Ҡайыбы бер яуҙа ғәйеп булған. Байназар — төпсөк улы Танһыҡ менән көн күргән.

Таныш менән Ҡайып ғәйеп булған яуҙа Байыҡ та, Юлай ҙа булған. Яуҙан һуң, алай итеп, былай итеп, атаһы Юлайҙы аҡлатҡан. Байыҡ, морон төртөр ер тапмай, ҡаҙаҡ араһына ыҡлаған.

Шунда йөрөгәндә, Байыҡтан ҡаҙаҡ сәсәндәре [76] көлөп, мыҫҡыл итергә уйлап, былай тигән:

Истәк * булдың, бар булдың,
Киң далала зар булдың.
Үҙеңә йомаҡ әйтәйем,
Тапһаң, улым итәйем,
Тапмаһаң, ҡолом итәйем;
Көндөҙ ҡуйым көтөрһөң,
Кисең йөнөн тетерһең,
Йоҡом ҡалды тимәҫһең,—
Көндөҙ сырым итерһең.

Киң далала ҡуш ағас,
Ҡуш ағастың ҡуш башы —

Бер ҡаҙанға һыймаҫтай
Ҡуш ҡусҡарҙың ҡуш башы
Бар икән ил ҡашҡаһы *.
Ат башындай ҡаҡ ерҙән
Яра төшкән аҡ түгел,
Ай менән көндәй икәүһе,
Яңғыҙланған таҡ түгел.

Байыҡ:

— Киң далам тип әйткәнең —
Иленән ҡасҡан был истәк,
Маҡтаһын тип көткәнең,—
Мин дә күргән ер икән,
Һин дә белгән ер икән.
Ағас-таштан ҡыу булғас,
Өҫтөн япҡан пар * ҡылған;
Сағыл тауҙан ҡыу булғас,
Шараҡ ҡыҙҙай һын булғас,
Ҡомдан сөйәлдәй тау ҡылған;
Һум елендән һөт аҡмаҫ,
Һыуһаған йотом һыу тапмаҫ —
Дала тигәнең шул икән.
Турһыктай бурһыҡ үҫтергән,
Ҡарһаҡтан барын буҫтырған *,
Бутаһын юйған нары мал
Ишәктән моңло ҡысҡырған,
Бүтән моңо булмаған,
Һип-һил торған сүл икән.
Ҡаяла талпынған бөркөтөн,
Толпарҙа елкенгән егетен
Алмаштырған бер бөтөн,
Алмаштырған бер бөтөн,—
Төйә өҫтөндә ялпаңлап,
Ҡолаҡсыны һәлпәңләп,
Ҡаҙаҡ тигән ир икән.

Ҡуш ағасым тигәнең —
Киң далала ҡуш ылаш;
Ҡаҙағыңды киптергән
Киң далала Ҡуш Алаш [77].
Ҡуш ағастың ҡуш башы,
Тап Алаштың ҡашҡаһы * —
Бер ҡаҙанға ҡуш алтын
Һалып бергә ҡайнатҡан,
Туҡалдай кейәү һайлатҡан
Абылай солтан хан икән.

Шунан һуң ҡаҙаҡ бейҙәре Байыҡты тоторға әҙләй башлаған. «Илгә айҙар, йөрәккә хәнйәр булырға итә икән»,— тип юҡ итергә уйлағандар. Байыҡ ҡасҡан, кире Уралға ҡайтҡан.

## 2. БАЙЫҠ СӘСӘНДЕҢ САЛАУАТ БАТЫРҒА ӘЙТКӘНЕ

Күп һыуҙар аҡҡан, күп йыл үткән. Байыҡ сәсән айҙар булып, Аҙналы улы Юлай старшина булып дан тотҡан. Берҙән-бер көн Байыҡ мәмерйәнән сығып, Ҡылыс тауҙың башына менеп уйлап ултырған да, Юлайға бармаҡ булып, юлға сыҡҡан. Китеп барғанда, һунарға сыҡҡан Салауатҡа тап булған. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡан. Салауат үҙен танытып, Байыҡтың кемлеген һорағас, Байыҡ былай тигән, ти:

Һөйләһәм, һүҙ оҙайыр,
Тыңлаһаң, һинең тағы ла
Ҡолағың шәмдәй төҙәйер;
Кем булһа ла булайым,
Шуны әйтеп уҙайым:
Ил тигәндең кеме юҡ,
Бейе лә бар [78] был илдең,
Ире лә бар был илдең,
Ике арала йөрөүсе
Теле лә бар был илдең.
Ҡыҙы ла бар был илдең,
Наҙы ла бар был илдең,
Ҡыҙ алам тип, туҡмалған
Таҙы ла бар был илдең.
Күсе * лә бар был илдең,
Көсө лә бар был илдең;
Күсен ситтәр талағас,
Үсе лә бар был илдең.

Илдең ире тиһеңме,
Таланған күстән айырылған —
Шуларҙың бере тиһеңме?
Туҡмалып та таҙ ҡалған,
Ҡаны ағып һаҙ булған,
Яуызды күрһә, ҡарйыған,
Йөрәгенән матҡыған,
Асыуҙа ҡайнап сыныҡҡан,
Уралда аунап ереккән,
Ҡанһыраған арыҫландай
Ҡаңғырып йөрөгән ҡартымын!
Аты юҡҡа — атымын,
Яуызға һаман ятымын.
Торор йорто юйылған,
Балалары һуйылған,
Батырҙары ҡыуылған
Ил сәсәне, ҡартымын.
Атҡа менеп сабырҙай
Юлдаш эҙләп юлыма,
Ҡаяла башаҡ ҡайрашыр

Ҡорҙаш эҙләп ҡонома,
Ҡаңғырып йөрөгән ҡартымын.
Айҙар тигән атым бар,
Ҡулымдан ҡорал һалмаҫҡа
Илгә биргән антым бар.
Салауат тигән исемең
Ишетеп беләм ҡолаҡтан,
Исемеңде ишетеү —
Белеү түгел йөрәктән.
Юлыма тап килгән һуң,
Әйтә торған һүҙем бар.
Уралда үҫкән күп батыр,
Бары буйын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған,
Ҡаяла башаҡ ҡайраған,
Егет булып бары ла
Һылыу ҡыҙын һайлаған,—
Бары ла үткән, ҡалмаған.
Батырын тапҡан ил ҡалған,
Батырҙар сапҡан юл ҡалған.
Батырҙар сапҡан — ил тигән,
Хандар сапҡан — ҡол тигән,
Йөҙ егерме ауылды
Ҡыуҙай үртәп көйҙөргән,
Ил өҫтөнә яу ҡылған,
Ил таларға дау һалған,
Илде ҡанға йөҙҙөргән,
Тәфкиләү [79] ҙә сапҡан, дан тигән.
Ат йөҙҙөрөп күҙ йәшкә,
Ошаҡ тейәп тиктәҫкә,
Олатайың Шәғәле [80],
Уның улы Аҙналы,—
Улар ҙа сапҡан, мал тигән.
Ҡол теләгән ҡол алған,
Мал теләгән мал алған,
Яу теләгән яу һалған,—
Бары ла үткән, ҡалмаған.
Хан башын да ер йотҡан,
Тәфкиләүҙе лә ер упҡан,
Шәғәлене лә ҡуймаған,
Уның башына ил еткән,
Аҙналыны ла аҙаҡтан
Янаралы эт иткән.
Бары бөткән, ҡалмаған,—
Ҡаяға тамған ҡан ҡалған,
Батырҙар сапҡан юл ҡалған,
Дошманға бысаҡ ҡайраған
Бөтмәй торған ил ҡалған.
Аҙналының балаһы

Инде Юлай ни көтә?
Яумы көтә, дан көтә?
Атаһы юлын эҙләйме?
Батырҙар юлын күҙләйме?
Өйөнә төбәп барайым,
Йөҙөнә күҙ һалайым,
Йөрәге нисек һуҡҡанын
Тел төбөнән беләйем.

«Батырҙар юлы ереккән,
Саң баҫҡан, эҙләп тапманым,
Ҡылысым үтмәҫ, тутыҡҡан,
Ҡаяла ҡайраҡ тапманым»,—
Тиһә: «Бына — мин! — тирем,—
Батыр юлын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған
Алдыңа килгән ҡарт,— тирем,—
Ат өҫтөндә сапҡанда,
Алдыма дошман баҫҡанда,
Елем менән дошманды
Ҡолата килгән ҡарт!»— тирем.

Байыҡтың һүҙен ишеткәс, Салауат та аңлаған. Байыҡ ҡартты үҙе менән бергә алып ҡайтып киткән.

Юлай менән өсәүһе һөйләшеп, һүҙ үткәндәрен саҡырып, бергә кәңәш төйнәшеп, яу башларға булғандар.

Һуғышта былар еңелгән. Башлыҡтары Пугачев та, Салауат менән Юлай ҙа— бары ла ҡулға алынған. Әлеге Байыҡ ҡарт, меҫкен, тағы ла ҡасҡы булып йөрөргә генә ҡалған. Артынан эҙәрләү төшкәс кемгә генә барһа ла, бары ла ҡурҡҡас ҡурсыуҙан, Байыҡ бөтөнләй күҙ йырған. Берәү күрмәгән, белмәгән — ғәйеп булып юғалған.

## 3. БАЙЫҠ СӘСӘНДЕҢ ҠАЙТАНАН КИЛЕП СЫҠҠАНЫ, ХАЛЫҠҠА ТУҒАНЛЫҠТЫ АҢЛАТҠАНЫ

Күп йылдар үткән, күп һыуҙар аҡҡан. Яуҙа ғәйепләнгәндәрҙең аҫылдары аҫылған. Һөргөнгә ебәрелгәндәрҙең ҡайһылары ҡайтышып, тыныс торам тигәндә, тағы ла бер ғауға ҡупҡан. «Французлар яу асҡан, Мәскәүҙе килеп баҫҡан. Батша ҡасҡан» тигән хәбәр таралған. Ил ҡарттары йыйылып, түрә-һәрә һөйләшеп, атхат еткән ерҙән саҡырып, илде йыйғандар. Батша фарманын уҡып, кәңәш-тоңәш иткән сакта, ҡәбер төбөнән сыҡҡан кешеләй, башынкүҙен йон баҫҡан, аҡ һаҡалы биленән ашкан Байыҡ та йыйынға килгән. Танығандар булғандыр. Берәү бер һүҙ әйтмәгәс, барыһы ла аптырап, Байыҡҡа ҡапланып ҡарағас, Байыҡ былай тигән, ти:

Алыҫтан ҡарайып күренгән
Тулҡын да тулҡын тигәнем —

Көтөүселәр өйөргән
Йылҡы микән? — тигәнем —
Тулҡын түгел, ил икән,
Ил йыйылған ер икән.
Ат саптырып йыйҙырған
Туй тигәне — шул микән?
Сәләм бирһәм, алмаҫтай,
Һүҙемә ҡолаҡ һалмаҫтай
Күҙгә сағылған күбегеҙ
Ябай түгел, бей һымаҡ;
Араға һалған һүҙегеҙ
Балалай түгел, ир һымаҡ [81].
Ниңәлер һулпән туйығыҙ —
Үлек сығыр өй һымаҡ!

Мин дә әйтһәм берәй һүҙ,
Туйға килгән ир һымаҡ,
Һүҙем ҡырын ҡаҡмаҫһыҙ,
Ҡағырҙай ир юҡ һымаҡ.

Арағыҙҙа кем булһын:
Тарханмы, кәрәк бей булһын,
Миңә тимәһә, тау ярыр
Ҡылыс тотҡан ир булһын,—
«Мин уҙаман», тиерҙәй,
Һунарым алып, ҡарт булып,
Ҡанъяғаһын төйөрҙәй,
Түргә ултырып, баш тотоп,
Баш ҡойҡаһын ейерҙәй [82],
Барыбер берәү табылмаҫ!
Булһа ла, күҙемә сағылмаҫ,
Аҙамат булып танылмаҫ!
Күп йәшәгән ни белгән,
Күпте күргән шул белгән!
Шулай ҙа йөҙгә еткәндә
Белгәнем әйтеп үтмәһәм,
Хатам күҙгә төрткәнде
Тағы ла әйтеп үлмәһәм,
Үле тәнем, йыуылып,
Һыу менән генә аҡланмаҫ!
Ямanаттан бүтәнем [83]
Ил телендә һаҡланмаҫ.
Ҡәберем күргән — уба,— тир,
Иҫкә лә алмаҫ, һоҡланмаҫ!

Йөҙ йыл буйы уйлаған,
Халыҡҡа шулай һөйләгән,
Ҡанға аунап әҙләгән,
Бер уйым бар тапмаған,

Һыуға ла төшөп аҡмаған,
Һаҙға ла төшөп батмаған,
Мин генә түгел эҙләгән,
Күптәр сапҡан, тапмаған.
Ул уйымдың эсендә —
Көңләшеү түгел тарлыҡтан,
Зарлыҡ та түгел ҡартлыҡтан,—
Өнө сыҡмай ҡапланған
Ил теләге ҡарлыҡҡан;
Өҫтө ҡанға тапланған
Ил теләге тарлыҡтан.
Хан, хан,— тигән күп ирҙәр,
Алып килә дан,— тигән,
Ҡаны башҡаға ҡан,— тигән,
Беҙ алырбыҙ дан,— тигән.
Сыңғыҙ [84] килгән: — Мин!— тигән,—
Мин ҡунаҡмын,— тимәгән.
Ил өҫтөнә ҡул йәйгән,—
Мин китәмен,— тимәгән,
Улын, бейен үҫтергән,
Ҡара ҡошон тотторған,
Барынан ант иттергән,
Илдең ҡанын эс,— тигән,
Сергенән ҡанда кис,— тигән;
Ҡанын, динен һорама,
Бары беҙгә ҡол,— тигән;
Эт һаңындай хан үҫһен,
Яуызлыҡта дан үҫһен,
Беҙгә терәк шул,— тигән.

Быуын-быуын үткәндә,
Хандар килеп киткәндә,
Хандан илгә ни ҡалды?
Эркелеп ҡандан һаҙ ҡалды,
Ил таланып таҙ ҡалды [85],
Өҫтөндә бөтмәҫ зар ҡалды.
Олатайҙар дихайға *
Мәскәүгә баш эймәгән,
Яҡла тип, Аҡ батшаға
Бушҡа тик ант бирмәгән!
Ай, ант, тигән, ант, тигән,
Антың йотма, тот, тигән,
Ярлыҡамаҫ ят, тигән,
Ятка анттан ҡайт, тигән.
Туғанға биргән аҡ антың
Менер аттай көт, тигән.
Ай, ят, тигән, ят, тигән,
Ят тигәнде бел, тигән,
Ул ят тигән «кем?»— тигән.

Һыйлашҡанда дуҫ яҡшы,
Һөйөшкәндә ҡыҙ яҡшы,
Китапҡа оҙон һүҙ яҡшы,
Яуға менһәң, буҙ яҡшы;
Башыңа бәлә килгәндә,
Яман булһа ла күргәндә,—
Үҙ туғаның шул яҡшы:
Ике туған талашыр,
Атҡа менһә, ярашыр!

Туған, туған, тигәс тә,
«Ул туған — кем?» — тигәс тә,
«Ата, әсә бер булған
Ҡарындашмы?» — тигәс тә,
Берәүҙең яңғыҙ балаһы
Кемде ҡарындаш тир икән?
Әсә лә һөттәш булмаһа,
Кеме һыуҙаш — шуны әйтер,
Йылғала һыуҙаш булмаһа,
Кеме ерҙәш — шуны әйтер.
Бер әсәнән тыуған
Ҡыҙҙан бажа булмаһа,
Бер тупраҡты еҫкәгән
Ҡыҙҙан бажа — шуны әйтер.
Бер йылғанан һыулаған,
Бер тупраҡта аунаған,
Әсәләй күреп шул ерҙе,
Ырыҫын шуға төйнәгән,
Төйәкләнеп, туҡланып,
Йәндәй күреп, һоҡланып,
Йыр йырлаған, көйләгән,
Моңон-зарын үҙ-ара
Бер-беренә һөйләгән,—
Ирме булһын, ҡыҙ булһын,
Батшамы ул, кем булһын,
Шул тупраҡта тыуһа,
Илде ҡурсып үрләһен,—
Бер туғаның шул булыр.

Мәскәүҙә ҡупҡан шау, тиҙәр,
Килеп баҫҡан яу, тиҙәр.
Француз булһын, кем булһын,—
Ситтән килгән ят булыр.
Унан илгә ҡот булмаҫ,
Баҫҡан ере ут булыр,
Үҙе Сыңғыҙҙай эт булыр.
Ил сигенә ят баҫҡан,
Ҡунаҡ түгел, яу асҡан.
Мәскәү бит оран һалған:

«Аҡ батшаға ант биргән
Ирҙәр менһең ат!»— тигән.
Батша бит һөрән һалған:
«Илде баҫты ят!»— тигән.
Минең дә һүҙем шул булыр:
Ант боҙғанға ни булыр? —
Таяныр терәге юҡ булыр,
Ҡаңғырып йөрөр Байыҡтай,
Тынлыҡ тапмай хур булыр.

Байыҡты танып, һүҙен дә ишеткәс, бөтә халыҡ умарта ҡортондай гөжләшеп күтәрелеп киткән.

## 4. ХАЛЫҠТЫҢ ИР-ЕГЕТТӘРҘЕ ФРАНЦУЗДАРҒА ҠАРШЫ ЯУҒА ОҘАТҠАНЫ

Йөҙ йәшәр Байыҡ сәсәндең һүҙен ишеткәс, кантон башлыҡтары ат-хат еткән ергә сабарҙар саптырып, сер алышып, Иҙел терһәге Көнгәккә йыйылырға булып һүҙ ҡуйышҡандар, ти. Һәр ерҙә йәштәр, ат һайлап, нукта һуғылмаған аҫауҙарҙы тотоп өйрәткән. Урманда ук юнып, аласыҡта ҡыҙаштар һаҙаҡ һуғып, танатурпы һуйып, ит ҡаҡлап, эркет ҡайнатып, ҡорот йәйеп, ҡаймаҡ яҙып, май таскып, тире ыҫлап, турһыҡ тегеп, көн-төн ағытмай бейә һауып, ҡымыҙ йыйып, кейем-һалым тайярлап, яуға әҙерләнгәндәр. Байыҡ та, үҙенең атын эйәрләп, ҡулына ҡылысын тотторол, улы Әхмәтте яуға кейендергән.

Кантон башлыҡтарын — ҡор башы * , ҡош семәрен тотторол, батырҙарын — мең башы *, ырыу ағасы семәрен тотторол, ырыу уҙаманын — йөҙ башы *, яу япрағы менән берәүҙе алдап сабар итеп, яуға ат меңгәндәр. Бөтә ҡарт-ҡоро, бисә-сәсә, әбей-һәбей, ҡыҙ-ҡырҡын, бишектән төшкән, түшләп шыуған, аяҡҡа баҫҡан бала-сағаның бере ҡалмай, оҙатырға килгәндәр.

Әбей-һәбейҙәр, яуға китеүселәрҙең юлы ҡыҫҡа булһын тип, тегәр еп биргәндәр. Бисә-сәсәләр, күкрәктәрегеҙгә уҡ-һөңгө теймәһен тип, ирҙәренең түштәренә тәңкә теккәндәр. Ҡыҙ-ҡырҡындар, сер һаҡлаусы булығыҙ, тип, егеттәргә нағышлы янсыҡтар биргәндәр. Бары ла уңышлы юл теләп, аҙаҡ шулай йырлағандар.

Ә б е й ҙ ә р:

— Әрмеләргә китә, ай, башығыҙ,
Буҙ балалар, инде хушығыҙ.
Йылдарығыҙ айҙан тиҙ үк үтеп,
Иҫән йөрөп ҡайтһын башығыҙ.

Ҡ ы ҙ ҙ а р:

— Атҡайҙарға менеп, беҙҙе ташлап,
Урал ашып яуға китерһеҙ,
Һай, йәнкәйем, ҡалдырып шул нәҙек билкәйең;

Киткән юлығыҙға ҡарай-ҡарай,
Күҙкәйҙәрҙе талдырып көтөрбөҙ,
Һай, йәнкәйем, онотмағыҙ нәҙекәй билкәйең.

Яу йөрөгәндә, сабып тирләгәндә,
Шыбаҡшыған тирең һөртөгөҙ,
Һай, йәнкәйем, хәтерләрһең нәҙек билкәйең;
Биргән урамалды ҡомартҡы итеп,
Ҡалтағыҙҙа бергә тотоғоҙ,
Һай, йәнкәйем, хәтерләрһеҙ нәҙекәй билкәйең.
Урал армыттарын семәрләгән
Нағышлы ла янсыҡ бирәбеҙ,
Һай, йәнкәйем, еҫкәгәндә, аңҡыр илкәйем;
Ил намыҫы бергә шул янсыҡ та
Йөрәгегеҙҙә торһон, тиәбеҙ,
Һай, йәнкәйем, айбарығыҙ көтә илкәйем.

Яуға ат менгән ир-егеттәр шулай йырлап яуап ҡайтарғандар:

Ата-бабаларҙың ҡанын һыулап
Үҫкән сауҡаларҙан уҡ юндыҡ,
Һай, илкәйем, йәмле еркәйем;
Дошмандарҙы сыр-сыу, ай, айҡарбыҙ,
Буҙ толпарҙан һайлап ат мендек,
Һай, илкәйем, йәмле еркәйем.
Яуҡайҙарға китәбеҙ, ант бирәбеҙ,
Намыҫыбыҙ яуҙа һаҡларбыҙ,
Һай, илкәйем, тыуған еркәйем;
Батырҙарҙан ҡалған йолаларҙы
Ҡанлы яуҙа беҙ ҙә аҡларбыҙ,
Һай, илкәйем, тыуған илкәйем.

Иң аҙаҡ олатайҙар шулай йырлаған:

Атҡайҙарға менеп яуға китегеҙ,
Аҡлағыҙ ҙа иткән антығыҙ,
Һай, илкәйем, илкәйемдең батыр иркәйе;
Тәңкәләр ҙә төҫлө сылтырашып,
Шат көлөшөп, еңеп ҡайтығыҙ,
Һай, иркәйем, һағынып көтөр һеҙҙе илкәйең,
Ҡош юлдары ҡалҡһа күк йөҙөндә,
Кейек ҡоштар осор төньяҡтан,
Һай, илкәйем батырҙарын көтөр шул саҡта;
Ҡоштар үтһә, һеҙҙән беҙ көтөрбөҙ,
Сәләм килә тип үк йыраҡтан,
Һай, иркәйем, хатың уҡыр илең шул саҡта.

Наполеонды еңеп, һуғыш бөткәс, уландары ҡайтҡанда, Байыҡ йөҙ ҙә ике йәштә булған, ҡурайҙа «Байыҡ» көйөн уйнап, батырҙарҙы ҡаршы алған.

## ЮЛАЙ МЕНӘН САЛАУАТ

...Аҙналының ҡыҙҙары
Берәү түгел, күп булған.
Балаһының кинйәһе
Юлай тигән ул булған.
Юлай атҡа менгәс тә
Тирә-яҡта ҙур данлы,
Иң атаҡлы ир булған.
Аҙналы баш булһа ла,
Юлай егет булған һуң
Атаһының юлына
Ҡаршы төшә башлаған.
Быны белгәс, түрәләр,
Атаһының дуҫтары,
Завод тотҡан байҙары,—
Бара торғас, Аҙналдан
Барыһы ла эс тартҡан.
Төрлө яҡтан һөйләшеп,
Баяр-түрә берләшеп,
Юлай өсөн Аҙналыға
Ошаҡ-маҙар итешеп,
Аҙналының аҙаҡтан
Түрәлеген алғандар.

Түрәлектән ҡалған һуң,
Аҙналы бар эштәрен
Юлайына тапшырған.
Юлай ҙа сер бирмәгән:
Ҡабат ерҙе һатмаҫҡа,
Заводсыға бирмәҫкә,
Алыш-биреш итмәҫкә
Тигән уйын туплаған.

Заводсылар сер бирмәй,
Бүтән түрәләр менән
Алыш-биреш яһашып,
Ҡунаҡ булып һыйлашып,
Үҙ эштәрен бар иткән.
Ерен алып халыҡтың,
Заводтарын ҙурайтып,
Һаман ҡулдарын һуҙған.
Заводсылар мал түгеп,
Күп түрәне ҡулға алып,
Юлайҙы сит күрһәтеп,

Кеше үтә һүҙ биреп,
Унан халыҡты өркөткән.
Заводсылар ҡулға алған
Түрә-һәрә бей булғас,
Заводсылар халыҡ ереп
Буштан-бушҡа талағас,
Бара-тора ил халҡы
Бөтә эште аңлаған:
«Былай булһа, эш харап,
Ерҙе алалар талап,
Ҡул ҡаушырып тормайыҡ,
Әйҙә барып Юлайға
Кәңәш-төңәш итәйек»,—
Тип йыйылып, күмәкләп,
Ат саптырып килгәндәр.
«Урманды буш ҡырҡалар,
Һунарсының йәплеген
Заводсыға ҡунаҡҡа
Килеп йөрөгән түрәләр
Бушҡа тартып алалар»,—
Тиеп, Юлай алдына
Бары килеп илаған.

Юлай тәүҙә шашмаған;
Янаралға, батшаға
Барына ла хат яҙып,
Хатҡа ҡаршы батшанан,
Янаралдан — барынан
Юнле яуап алмағас,
Юлай йыйған ҙур йыйын,
Йәшен, ҡартын, олоһон,
Һис берәүҙән тайшанмай
Һөйләп биргән дөрөҫөн:

— Йәшенеп-боҫонон барығыҙ
Һөйләйһегеҙ зарығыҙ.
Тыңланым мин барын да,
Аңланым миң барын да,
Йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡорҙоң
Йөрәктәге уйын да.
Бына хәҙер мин һеҙгә
Һис берәүҙән тайшанмай,
Заводсыға һатылған
Түрәләрҙән ҡаушамай
Һөйләп бирәм барыһын:

Күлдән көшөл типтем тип,
Әтәлге ҡош маҡтанып,
Мәңге ҡыйғыр була алмаҫ;

Ырҙан сысҡан типтем тип,
Көйгәнәк ҡош маҡтаныл,
Мәңге йәтсә була алмаç;
Шырҙа ҡуян типтем тип,
Ҡара бөркөт маҡтаныл,
Һунарҙа һис яҙлыҡмаç,
Кәттә мәргән була алмаç.

Заводсыға һатылып,
Илдең ерен һатыусы,
Ауырлыҡты күрмәүсе,
Алдында һине ағартып,
Артта ҡара яғыусы,
Битендә ике йөҙ булып,
Ике телле булыусы,
Ил ғәйебен ҡаплаған
Уҡа сапан кейеүсе
Яман түрә һис саҡта
Илгә таяныс булмаç;
Һәр саҡ халҡым тиеүсе,
Халыҡтың ғәмен йыйыусы,
Халыҡ ғәмен йыям тип,
Урманда уҡ юныусы,
Илде дошман баçҡанда,
Уҡ-һаҙағын ҡайраусы
Батыр менән тиң булмаç.

Ил батыры шул булыр:
Һүҙе уның бер булыр,
Күкрәгендә ул ирҙең
Һәр сағында иле өсөн
Бары яҡшы уй булыр.
Ул егеттең эсендә
Эйәрләгән ат ятыр,
Ундай аға ил тотһа,
Илгә дуға тултырыр,
Яман аға ил тотһа,
Илгә дошман тултырыр.

Илгә аға булырҙай,
Атанаң алтау тыуһа ине.
Атам бей тип маһаймай
Юлын һайлай белһә ине.
Илдең аҡкан күҙ йәшен
Үҙ йәшендәй күрһә ине;
Ҡорман быуып биленә,
Һаҙаҡ тоçҡап дошманға,
Һуҙған ҡулын дошмандың
Кире ҡағып торһа ине;

Битенә килгән оятты
Үҙе белеп йыуһа ине.
Алты яман тыуғансы,
Яҡшы берәү тыуһа ине,
Илгә аға булһа ине,
Ил башында торһа ине;
Иле уға иркәләп,
Бәхет табып торһа ине.

Беҙҙә хәҙер ил тотҡан,
Илгә аға булырҙай,
Бер батыр ҙа юҡ һымаҡ.
Ил аралап йөрөһәң,
Халыҡ күренә тағы ла,
Аптыраған ил һымаҡ.
Илгә аға булғандар
Ил күкрәгендә уйпайҙар,
Илһеҙ үҫкән ир һымаҡ.
Ил серенә һыймайҙар,
Өлгөһөҙ бескән тун һымаҡ.

Илдең күп яуҙар менән
Ҡаҡшағанын беләһеҙ.
Баярҙарҙан таланып
Йонсоғанын беләһеҙ.
Һикһән йәшенә еткәндә,
Талған күҙен секрәйтеп,
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Һыу ташыған әсәләй,
Ил ҡалғанын күрәһеҙ.
Туҡһан йәшенә еткәндә,
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Туҡ(ы)рандай туҡылдап,
Ябалаҡтай уһылдап,
Утын ҡыр(ы)ҡҡан аталай
Буласағын беләһеҙ.

Киске йылғыр еле лә,
Таңғы еләҫ еле лә
Иҫмәй туҡтап ҡалғанда,
Тымыҡ айлы төндәрҙә,
Тал төбөнән йылмылдап,
Шылтырап аҡҡан шишмәләй,
Батырына йылмайып,
Серен әйтеп моңлапған
Һылыуҙарҙың тол ҡалып,
Батырҙары ситлектә,
Балалары бишектә
Хур булырын беләһеҙ.

Яу-ни булһа, ат менеп,
Ат һөрөнөп, йығылып,
Битегеҙ ҡанға буялып,
Яуҙа үлеүҙән ҡурҡаһыҙ.
Илен һөйөп әйләнгән,
Ҡаялы шыр урмандан
Мәңге ерекмәҫ юл һалған
Ҡуңыр буға быҙауҙың
Тоҡомо [86] булған һыйырҙан
Һөт эсерлек берегеҙ
Илгә батыр түгелһеҙ.
Ил ҡаплаған диңгеҙҙең
Батшаһына яу асып,
Торор ерен батшаның
Ат күҙендәй күл иткән,
Урал тауын бар иткән
Урал тигән батырҙы
Барығыҙ ҙа беләһеҙ.

Ирәмәл ярып Иҙелдә,
Уйташ уйып Яйыҡта
Йылға ағыҙған улдарҙы —
Иҙел, Яйыҡ батырҙы
Тағы ишетеп беләһеҙ.
Барымтаһын эҙләгән
Атаһының ҡаны өсөн,
Ҡан илаған илепең
Етем-еҫер хаҡы өсөн,
Мәсем ханды тураған
Сура улы Һәүбәнде,
Ете ырыуға баш булған
Юрматы, Ҡыпсаҡ, Табынды,
Ҡыуаҡан, Әйҙе, Ҡатайҙы
Һәм дә Тамъян батырҙы
Тағы ишетеп беләһеҙ...

Ул батырҙар бары ла
Яланғас тыуған әсәнән,
Имсәк һорап илаған,
Бишегендә тирбәлеп,
Бәпләү күргән әсәнән.
Береһе лә кәм түгел,
Ҡыҙ һөймәҫлек ир түгел,
Бары беҙҙәй һөйөлгән
Уралдағы һылыуҙан.
Шулай ҙа улар ятмаған,
Илгә дошман килгәндә,
Ҡул ҡаушырып тормаған;
Ҡолонсаҡтай уйнаған

Балаларын йыуатып,
Иркә серен һөйләгән;
Һөйгән йәрен илатып,
Туғыҙ айҙай күтәреп,
Татлы йоҡо ҡалдырып,
Һөт имеҙгән әсәһен,
Маңлай тирен һыпырып,
Буй үҫтерткән атаһын,
Йөрәктәрен һыктатып,—
Барын ташлап ат менгән.

[Юлай һүҙен бөткәстән]
Бөтә халыҡ уйлашып,
Үҙ араһы һөйләшеп,
Яу асырға тупланған.
Юлай Урал буйлағас,
Иҙеленән һыу эскән,
Уралда ат уйнатып,
Толкө кәпәс кейгәндең,
Өйөр йылҡы көткәндең,
Үҙендәй күп ирҙәрҙең
Уйы бер тип ышанып,
Заводсыға яу асҡан.
Старшина, түрәләр
Һаман илдә бей булған,
Халыҡты батша яғына,
Төрлө яҡтан арбаған.
Юлай яуҙы асһа ла,
Күп тырышлыҡ итһә лә,
Яуға ҡаршы торһа ла,
Аҙаҡ түҙмәй еңелгән;
Йәш бисәһен бергә алып,
Ҡая ташҡа һырылған;
Ҡая, урман эсендә,
Ете йылдың ҡышында
Күп ауырлыктар күреп,
Ике балалы булып
Һаман ҡасып йөрөгән.

Мәскәүҙең ҙур батшаһы, бөтә боласыларҙы ярлыҡайым, тип илгә хәбәр ташлағас, был хәбәргә ышанып, бары йыйылып бергә ҡайтырға булғандар. Юлай иленә ҡайтҡас, тирә-яҡтан халыҡ килгән, бик ҙур шатлыҡ, туй булған. Юлай ҡайҙа ғына барһа ла, түрә-һәрә уны бик нык күҙәтеп торған.

Бер аҙ торғас, Юлайҙың өсөнсөгә тағы ла йәш бисәһенән ул тыуған. Халыҡты йыйып туйлаған, Салауат тип исем ҡуштырған. Шул туй барған сағында ғәскәр менән янарал *, яҡын-тирә түрәләр сабып килеп төшкәндәр.

«Батша һеҙгә ебәрҙе, беҙҙең илгә сит илдән яу килә бит,— тигәндәр.— Һалдаттарға ат кәрәк, яуға барыр ир кәрәк, батша

халыктың һорауын һис аямай бирәсәк»,— тигән һүҙҙе бөтә халыҡ янаралдан ишеткәс, үҙ-араһы һөйләшеп, бирергә булғандар. Атаһы менән әсәһе лә, ҡайны менән ҡәйнәһе лә, «яуға бар» тип димләгәс, Юлай ҡарыулашмаған. Йылҡы өйөрөн туплатып, яҡшы атын һайлаған. Бөтә халыҡ йыйылып, Юлай менән башҡаларҙы яуға оҙатҡан.

Бер йылдан артыҡ йөрөп, Юлайҙар ҡайтҡандар. Юлай менән киткәндәрҙең күп кенәһе үлеп ҡалған. Юлай ҡайтҡас, тирә-яҡ халыҡ һорашырға килгән. Юлай килгән халыҡҡа үҙенең күргәндәрен әнәһенән ебенә теҙеп һөйләгән. Юлайҙың ҡайтыуын атаһы бейә һуйып туйлаған.

Юлай яуҙа дан алған,
Батшанан миҙал алған,
Былай данлы булған һуң
Үҙ йортонда халҡынан
Түрә булып һайланған [87].

Юлай яуҙан ҡайтҡанда,
Салауат та атлаған;
Ярым-ярты һаҡаулап
Һөйләшә лә башлаған [88].
Салауаттың буй-һыны,
Йәше үҫкән, көн һанап,
Батырлығы, йыл һанап,
Һаман ҙурая барған...

Иң бәләкәй сағында,
Үҙһүҙле бала булған;
Әсәһе урын һалһа,
Бер әкиәт һөйләтмәй,
Урынына ятмаған.
Әсәһе менән эйәреп
Һыуға ғына барһа ла,
Бар нәмәне тикшергән.
Айғыр, әтәс талашын,
Тәкә, үгеҙ һөҙөшөн,
Күктә ҡоштар тибешен,
Аҙаҡ сиккә саҡлы ул
Бер яғының еңгәнен,
Күрмәйенсә аҙағын,
Китмәй ҡарап торған ул.
Ҡарап ҡына ҡуймаған,
Аҙағынан тағы ла
Еңеү менән еңмәүҙең,
Көслө менән көсһөҙҙөң
Сәбәбенең барын да
Төпсөп һорап белгән ул.

Ете йәшкә еткәндә,
Бәйгеләргә барғанда,
Ниндәй ҡырыҫ атты ла
Ҡур(ы)ҡмай менеп сапҡан ул.
Менгән аты бәйгелә
Уҙмай килһә арт булып,
Килмәйенсә майҙанға,
Кире ҡайтып киткән ул.
Бер бәйгегә барһа ул,
Алдын килгән аттарҙы,
Алдып сапҡан батырҙы
Шунда күреп ҡайтһа ул,
Әбей-һәбей, бер ҡартмы,—
Кемде генә күрһә лә,
Яҡшы аттар, батырҙар
Тураһында әкиәт
Һөйләтергә уларҙы
Өйгә алып ҡайтҡан ул.

Ун йәшенә еткәндә,
Йәш-елкенсәктәр менән
Уйын-маҙар булғанда,
Үҙенә нөгөр * йыйып,
Үҙенән йәшкә өлкәнде
Үҙ артынан эйәрткән.
Берәй аулаҡ ой булһа,
Унда уйын ҡоролһа,
Уйын ашы йыйырға
Арала һүҙ ҡуҙғалһа,
Бөтә эштә баш булып,
Бик ярлыға йомортҡа,
Ҡошо барға бер тауыҡ,
Бай булғанға бер һарыҡ —
Уйын ашы билдәләп,
Үҙе башлап йөргән ул,
Үҙе лә алып килгән ул.

Салауат йәштән үҙһүҙле,
Үҙе һөймәҫ кешегә
Күңеле ҡаты булһа ла,
Бынау ярлы, был бай, тип,
Һис айырып тормаған.
Көтөүсене, ялсыны
Һис ваҡытта һүкмәгән,
Тырнаҡ менән сиртмәгән.
Быҙау имһә ҡушылып,
Бейә имеҙһә ҡушлатып,
Ата-әсәһе ялсыға
Екерергә башлаһа,

Нисек итеп булһа ла
Ялсы аралар ир булған.

Ун биш йәшкә еткәндә,
Һис йыйындан ҡалмаған,
Йыйындағы батырҙар
Ниндәй данлы булһа ла,
Көрәшергә ҡурҡмаған.
Ун биш йәшкә еткәндә,
Тирә-яҡта Салауат
Данлы батыр-ир булған.
Салауаттың һөйгәне
Йәш саҡтан уҡ ат булған;
Нуҡта төймәç аçауҙы
Үҙе тотоп өйрәткән.
Һунарға сыҡһа тағы,
Ҡуян-маҙар атмайсы,
Бүре, айыуҙы ғына
Тап итергә тырышҡан.

Йыйындарҙа булғанда,
Йырсы, сәсән, ҡурайсы
Ҡайһы алдын булдиһә,
Алдынлыҡҡа сығыуҙың
Бар сәбәбен һөйләткән.
Һыу буйына барҙиһә,
Һыу инғәндә сумышып,
Ҡош атҡанда осороп,
Осҡан ҡошҡа атышып,
Мәргәнлекте һынашҡан;
Ат өçтөндә уйында,
Ерҙә ятҡан һумлыҡты
Сабып килеп алып ул,
Һәләтлектә уҙышҡан;
Йырсы менән йырлашып,
Сәсән менән әйтешеп,
Һамаҡ әйтеп сайҡашып,
Моңло йырҙа, йор һүҙҙә
Алдынлыҡты үлсәшкән.

Шулай итеп ул үҙен,
Төрлө яҡтан һынаған;
Үҙенә ул иптәште
Шул юл менән һайлаған.

Уның иң йәш саҡтан уҡ
Бергә йөрөгән иптәше,
Берәү түгел, дүрт булған.
Уларҙан һис ҡыҙғанмай,

Атһыҙына ат биреп,
Тунһыҙына тун биреп,
Ятһа, торһа — бергәләп,
Бер табаҡтан аш ейгән.
Салауат йәйен шулайтып,
Бәйге-йыйында йөрөп,
Көрәштә ҙур дан алып,
Яҙлы-көҙлө ҡош сөйгән;
Ҡырпаҡ һунар төшкәс тә,
Бүре, айыуға йөрөп,
Йылдың ҡалған айында
Салауат уҡыуҙа булған.
Татарса ла уҡыған,
Урыҫса ла уҡыған,
Аҙналдан ҡала Уралда
Ике ҡәләм белеүҙә
Ул икенсе ир булған.

Салауаттың атаһы
Элек яуҙа булғанда,
Ямантауҙың буйында
Ике балаһы тыуып,
Мәмерйәлә үҫкәндәр.
Яҡты донъя күрмәйсә,
Үҙҙәрендәй ауылда
Бала барын белмәйсә,
Айыу балаһы һымаҡ,
Таш тәгәрәтеп уйнаған;
Ата-әсәһе күмәкләп,
Шунда ҡасып ҡышлаған.

Салауат ауға сыҡҡанда
Ошо ергә тап булған.
Ҡая ташына баҫып,
Салауат уйға талған;
Иптәштәре оранын,
Яғалай үткән айыуҙың
Ужарын да тоймаған.
Тәрән итеп көрһөнөп,
Ҡая ташҡа ултырып,
Ата-әсәһе күргәнен
Күҙ алдына килтереп,
Күҙ йәштәрен йөрәктән
Керпегенә сығармай,
Иптәштәре алдында
Батырлығын юғалтмай,
Эсендәге серҙәрен
Һис берәүгә аңлатмай,
Йәйәһенең керешен

Талыҡһа ла бушатмай,
Киң күкрәк ташҡанын
Шунда йырлап ебәргән:

Уралҡайым, һинең буйың йәмле,
Ҡаяларың ниңә уйҡыллы?
Балаларын ҡурсып ҡосаҡлаған
Әсәйҙәрҙең ҡуйыны шикелле.

Ағиҙелкәй аға тау аралап,
Ул тирәлә һыуы һалҡындыр;
Уралымдан йыраҡ киткән һайын,
Буйҙары ла ут та ялҡындыр.
Уралҡайым, һайрай ҡошҡайҙарың,
Тыңлаһам да, телен белмәйем.
Тәсбих әйтә микән үлгәндәргә,
Тип эсемдән генә уйлайым.

Туғайыңды сом-сом күлдәр уйған,
Ҡыуға менән керпек ҡыйылған;
Һыуҡайҙарың күктән, әллә ерҙән,
Әллә күҙ йәшенән йыйылған.

Ҡаяларҙан төшһәм, һаҙға батам,
Ҡара талдар үҫкән үҙендә;
Төҫтәре лә йәмһеҙ, еҫе тәмһеҙ
Ҡан һөҙөгө сыға ла йөҙөндә.

Һаҙҙарыңда талдар бейек үҫмәй,
Күк ҡояшын ҡая ҡаплаймы?
Әллә үҙәгенә, ысынлап та,
Ҡара ҡандар ҡатып ҡалғанмы?

Күлдәреңде һинең ниңә улай
Һылыу ҡыуғаларың ураткан?
Оҙон керпектәрен йәшләндереп,
Әллә һылыуың берәү илаткан?

Һандуғасҡайҙарың ниңә һәр саҡ
Һаҙлыҡтарға ҡунып һайраусан?
Батыр ҡанын ҡойған яуыз фарман
Шунда килгән мәллә һарайҙан?..

Шул саҡ быныҡ янына
Уйламаған, көтмәгән,
Был тирәлә күренмәгән
Бер ҡарт килеп һүҙ ҡушкан.
Сәләм биреп һаулашып,
Ата-әсә, тоҡомон

Салауаттан һорашкан.
Салауат тәү эс тарткан,
Баштан-аяҡ был ҡартҡа
Күҙен югертеп сыҡкан.

«Маңлайында йөйө бар,
Уң ҡулында — өс бармаҡ,
Ҡалғандары ҡырҡылып,
Яралары ит үреп,
Әллә ҡасан уңалған.
Сәс, һаҡалы ағарған,
Йөҙө кипкән, һап-һары,
Өҫтө-башы таушалған,
Әллә күпме ямаулы.
Аусы тиһәң,— ҡорал юҡ,
Котоусе тиһәң,— тағы ла
Һис бер яҡын-тирәлә
Мал-тыуарҙың оно юҡ.
Ҡарап торған күҙҙәре —
Ҡаҙалырҙай уҡ төҫлө;
Һүҙ ҡушҡанда һүҙҙәре —
Күпте күргән ир төҫлө»,—
Тип Салауат уйлаған.
Иптәштәре йыйылғас,
Ҡарт, һорашып барын да,
Үҙе белгәнсә һынағас,
Ошолай тип һүҙ асҡан:
— Салауат тигән исемең,
Ишетеп беләм ҡолаҡтан.
Йәшең бала булһа ла,
Ишетеләһең йыраҡтан.
Исемеңде ишетеү
Белеү түгел йөрәктән.
Тоҡомоңдо аҡтарһаң,
Һайлап алып теҙгәндәй,
Бары — тархан, бары — бей.
Һиңә тоҫкап килеүем —
Һине күреү, тик бер уй[89].

Йырың тыңлап торғайным,
Уйың йөрөй йыраҡта.
Урал тауын ҡараһаң,
Тарбаҡ-тарбаҡ таралған.
Һәр тарбаҡтың ҡуйынында
Бер батыры яралған;
Унан аҡкан һыуҙарҙың
Барында батыр ҡойонған.
Урал тауы буйында
Талай юлдар күрерһең.

Ҙур һыуының буйында,
Ҡырлас сағыл яғалай,
Тархандарҙа мал көткән
Көтөүселәр моңлаған,
Өҙөк-өҙөк берләм юл,
[Уны ла һин күрерһең.]
Урал аша үҙәктән
Туғай ярып һуҙылған,
Яуға сапҡан батырҙы,
Ҡул-аяғын бығаулап,
Ситкә туҡмап оҙатҡан,
Илде ҡанға буярға,
Малын хаҡһыҙ таларға,
Батырҙарын һуйырға,
Балаларын аҫырға,
Йорт-ерҙәрен үртәргә
Яуыз хакимдәр килгән
Бик борондо иҫке юл,
Уны ла һин күрәһең.
Батый хан да уҙған юл,
Олатайың Шәғәле
Ажырайып йөрөгән юл;
Ат йөҙҙөрөп күҙ йәшкә,
Ошаҡ төйәп артмаҡҡа,
Олатайың Аҙналы —
Ул да йөрөгән оло юл;
Серегенән ҡап йөҙөп,
Ужар сәсеп дан алған,
Тәфкиләү ҙә йөрөгән юл;
Ғазраилдәй Сәргәйев [90], —
Күҙенә ҡан һауҙырып,
Бары шунан үткән юл,
Әле булһа, ул юл бар.
Ҡая бите ҡаҡланда,
Шыр урмандар эсендә,
Ҡыйғас ҡаштай һыҙылған,
Тар булһа ла, һис саҡта
Үлән үҫеп етекмәҫ,
Юшҡын төшөп ерекмәҫ,
Илен һөйгән батырҙар
[Ил-кон тиеп, ҡан ҡойоп,
Яуға сапҡан юл да бар] [91].

[Ул юл, белһәң, Салауат,]
Батырҙарҙың атының
Тояғы менән ҡаҙылған;
Күп батырҙар һөйәге
Маяҡ итеп ҡаҙалған.
Сәйет [92], Күсем [93], Аҡайҙар [94],

Ҡараһаҡал [95], Батырша [96] —
Бары шунан буйлаған;
Иле өсөн азатлыҡ
Шул юл буйлап даулаған.

Бына мин дә шул юлдан
Буйлаған бер ҡарт инем;
Ат өҫтөндә сапҡанда
Елем менән дошманды
Йыға торған ир инем.
Утын киҫеп урманда
Бармағымды сапманым;
Уртаҡ һөйөп һылыуҙы
Көндәш менән һуғышып,
Тамағыма аш эҙләп,
Айыу менән һуғышып,
Маңлайымды ярманым.
Илем һаҡлап яу сабып,
Дошман уғын һиҙмәҫтәй,
Ҡылысынан айбанмай
Яуға сабыр ир инем.

Был ҡарт оҙаҡ һөйләшкән,
Бергә ултырып уйлашҡан,
Тик әйтмәгән кемлеген;
Салауатҡа ҡул биреп
Белдергән ул берлеген.
Салауат, картты ҡыҙғанып,
Үҙе менгән толпарын
Ҡартҡа биргәс килтереп,
Ҡарт ҡулына алмаған.

Ҡ а р т:

— Ҡустым, атың кәрәкмәй,
Һинең атың менмәйем.
Атаң үҙем күрмәйсе,
Унын серен белмәйсе,
Ҡул тамырын тотмайсы,
Атың менеп, икеңдең
Арағыҙға шомло уй
Бер күреүҙә һалмайым,— тигән.

Ҡарт хушлашып айырылғас,
Атаһының өйөндә
Барын күрергә булғас,
Ҡарттан ҡалғас, Салауат
Оҙаҡ итеп уйлаған,
Ҡарттың әйткән һүҙенең
Төп-тамырын аңлаған,

Күҙ югертеп Уралдың
Бөтә буйын ҡарағас,
Тауыш-тынһыҙ баш баҫып,
Тәрән уйҙарға талып,
Өнһөҙ-инһеҙ ултырған.
[Иптәштәре алдында
Салауат һүҙ башлаған:] [97]

— Урман-ара алпанлап,
Умарта ватып йөрөгән —
Беҙ айыу тип һанаған —
Айыу түгел икән дә!
Урмандағы мәсе күҙ,
Һарыҡ быуып йөрөгән,
Тупаҡ ҡойроҡ, күк һыртлы —
Бүре түгел икән дә!
Беҙ дошман тип таныған,
Таң йоҡоһон ҡалдырып,
Төнөн йөрөгән ҡасҡылар
Дошман түгел икән дә!..

[Шул сағында урманда]
Балта тауышы шаңҡыған.
Бер һүҙ әйтмәй Салауат,
Эйәк ҡағып барына,
Асыу менән ымлаған;
Атҡа менгән һикереп,
Китәр яғын белдереп,
Һүҙһеҙ ҡамсы һелтәгән.
Ҡая буйын яғалап,
Шыр урманды аралап,
Тауыш сыҡҡан урынға
Барып сыҡҡан туралап.

Барһа,— баяр кешеләре
Сом [98] буйының урманын
Турап-ҡырҡып яталар!
Салауат тыйғас уларҙы,
Әйтешкәндәр һүҙҙәрҙе,
Һуғыш киткән арала,
Ярышҡандар баштарҙы!

Ҡырҡыусылар ҡасҡандар,
Ҡайтып оран һалғандар,
Атҡа атланып барыһы
Юлға ҡаршы сыҡҡандар.
Салауаттар ҡуймаған,
Барын ҡырып һалғандар...

Баярҙың бер кешеһе Салауатты танығаи. Салауат өйгә ҡайтыуға, баярҙар Юлайға килеп еткәндәр. «Һинең улың яу менән утар баҫты. Хәҙер Өфөгә, янаралға барабыҙ»,— тип ғауға күтәргәндәр. Шул саҡ ат һөрөмөн осороп, күҙенә ҡан һауҙырып, Салауаттар ҡайтып төшкән. Олатаһы менән атаһы Салауатты саҡырып алып, һис бер һүҙ әйтмәҫтән, уңлы-һуңлы сикәләп тә алғандар. Олатаһына ла, атаһына ла Салауат һис һүҙ ҡатмаған. Тирмәнән сығып, тегеләрҙе көткән. Баярҙар сығып атҡа менгәс, ошо һүҙен әйтеп ҡалған:

Атамдан мине һуҡтырып,
Ярҙай халыҡ алдында
Намыҫымды таптатып,
Күңелегеҙ булмаһын.
Атам мине һуҡһа ла,
Мин атымдан төшмәмен;
Урманда уҡ юнғанда,
Айыуға тип юнмамын.
Урал буйы урманда,
Ат уйнатҡан баярҙың
Бер ҡараһын күрһәм дә,
Аҫтын-өҫкә килтермәй
Ҡул ҡаушырып ҡалмамын!

Баярҙар Салауатты юҡ итергә теләһәләр ҙә, уны урманда аңдып атып үлтерһәң, илдә ҙур ғауға ҡубыр, бөтә башҡорт ат менеп, өҫкә тағы яу булып ташланыр, тип уйлағандар. Аҙаҡ сиктә мал биреп, уны үлтерергә кеше яллағандар. Баяр ҡушҡан кешеләр Салауатты юҡ итергә яйын эҙләгәндәр. Салауат быларға яңғыҙы тап булмаған.

Илгә сыҡҡан сағында был кешеләрҙең береһе Салауатҡа тап булған. Салауат менән һаулашҡас, һунарға сыҡҡайным, тип һөйләгән. «Анауҙа яңғыҙ айыу ята»,— тип алдап, Салауатты тау битләүендә бала уйнатҡан ата-инәле айыуға тоҫҡаған.

Салауат, яңғыҙы уҡталып, бер айыуҙы һуҡҡанда, икенсеһен күрмәгән. Икенсе айыу Салауаттың һул беләген матҡыған. Ҡанға батһа батҡан батыр, әммә айыуҙарҙы ебәрмәгән: шул урында икеһенең дә иҙмәһен иҙгән. Ә теге кеше, инде Салауат үлер тип, баярҙан һөйөнсө алырға утарға сапҡан.

Салауат батыр үлмәгәс,
Зәғифләнеп ҡалмағас,
Һаман заводсыларға
Ҡыҫымын яһап торғас,
Заводсыға дуҫ булған
Күп тархандар берләшеп,
Салауатҡа ҡаршы
Кәңәш туплай башлаған.

Салауатҡа йәш саҡта
Һағынбай тигән тархан,

Гөлбәзир тигән ҡыҙын
Бирмәк булып туй яһап,
Ҡолағыны тешләтеп,
Юлай менән икәүһе
Ҡоҙалашып йөрөгән.
Баяр менән Юлайҙың
Аралары һыуынғас,
«Баяр ҡуймаҫ, Юлайҙы
Түрәлектән төшөртөр,
Яҡшы булһам баярға,
Баяр мине түрә итеп,
Янаралдан һайлатыр», —
Тип уйлаған Һағынбай.
Саҡырһа ла ҡунаҡҡа,
Бармаҫ өсөн Юлайға:
«Оло улың үлгән һуң,
Көндәш итеп ҡыҙыма,
Салауатка ҡатынға
Киленеңде [99] алған һуң,
Салауатка ҡыҙымды
Кире ҡайтам биреүҙән», —
Тип, ҡунаҡҡа бармаҫҡа,
Салауат, Юлайҙар менән
Аралашып йөрөмәҫкә
Һылтау тапкан Һағынбай.
Салауат сер бирмәгәс
Заводсыға бөтөнләй,
Башҡорттарҙың ерендә
Һунарға ла йөрөргә,
Мал-тыуарын көтөргә,
Ағас ҡырҡып алырға
Ирек бирмәй башлағас,
Заводсылар йыйылып
Кәңәш-төңәш иткәндәр;
«Ҡапыл яуға бармайсы,
Һағынбайҙы димләшеп,
Салауатка кәләшкә
Гөлбәзирҙе бирҙереп,
Ҡоҙа-аҙна яһашып,
Ҡулға алайыҡ», — тигәндәр.
Һағынбай күнгән был эшкә —
Гөлбәзирҙе бирергә
Салауатка кәләшкә.

Еңгәһе үтә кәңәште
Гөлбәзир ҙә ишеткән,
Салауатка илсе итеп
Бер егетте ебәргән.
Һағынбай ҙа Юлайға

Ҡоҙа булыу уйыны
Үҙе барып һөйләгән.

Йылҡы елегә төшөп,
Һыйыр-һарыҡ яланға
Әллә ҡасан ҡыуылып,
Ҡояш һөңгө буйындай
Күтәрелгән сағында,
Атҡа атланып Салауат
Килеп төшкән елдереп
Һағынбай аймағына.
Туғай аша үткәндә,
Сыр-сыу килеп, гөрләшеп,
Еләк йыйған ҡыҙҙарҙы
Күреп ҡалған Салауат.
Күмәк ҡыҙҙар араһында
Бер ҡыҙ менән Гөлбәзир
Ҡуш мунсаҡтай икәүләп
Килеүҙәрен танығас,
Аттан төшөп Салауат,
Ҡуш теҙгенен атының
Эйәр ҡашына шаҡарып,
Атын сылбырҙан тотоп,
Ҡырын ятып үләнгә,
Ҡыҙҙар килеүен көткән.

Бер ҡыуаҡҡа еткәс тә,
Ҡыҙҙар шунда туҡтағас,
Араһынан берәү ҙә
Салауатты күрмәгәс,
Ҡыҙҙар күҙҙән юғалғас,
Салауат та түҙмәгән,
Оран биреп ҡыҙҙарға,
Ошо йырын йырлаған:

«Урал буйҡайының, ай, туғайы
Яңғыҙ егеттәргә йәм бирмәҫ;
Ике лә генә һөйгән бергә уйнаһа,
Һыуҙар ҡороп, ҡая ярылмаҫ».

Салауат йырын ишеткәс,
Бөтә ҡыҙҙар шул саҡта,
Яуап биргәндәй итеп,
Йырлағандар ҡыуаҡта.
Урал буйлап шаңҡыған
Салауаттың тауышын
Таный һалып Гөлбәзир
Килеп сыҡҡан был яҡҡа;
Салауатты күргәс тә,

Иркәләпме баласа,
Наҙланыпмы ҡыҙҙарса,
Әллә ҡурҡып, әллә өркөп,
Салауаттың янына
Килмәй торған оҙаҡлап.
Юл буйында килгәндә,
Салауаттың күңелендә
Тыуған хисе-хыялы —
«Осрашһаҡ аулаҡта,
Гөлбәзирем, күргәс тә,
Ҡосағыма ташланыр,
Бөтә серҙәрен һөйләп,
Күҙҙәрен йәшләндерер»
Тигән тәмле уйҙары —
Бары юҡҡа сыҡҡандай
Булған төҫлө тойолған.

Салауат та һүҙ ҡушмай,
Гөлбәзир ҙә һаулашмай,
Күҙгә күҙҙәр ҡарашып,
Оҙаҡ ваҡыт торғандар.
Аҙаҡ килеп Салауат,
Үпкәләгән төҫлө итеп,
Ошо йырын йырлаған:
— Ағымдарға ҡаршы тулҡып төҫлө,
Түшкәйҙәрең ниңә тулҡына?
Ысынлап та, әллә үҙе шулай,
Әллә ҡурҡыуҙарың тойола?
Бешеп кенә килгән алмаларға
Алһыу типкән төҫлө йөҙҙәрең;
Аллапыуы — әллә һылыу тоҫө,
Әллә асыу тотҡан уйҙарың?

Ҡыуғаларҙан аша күлгә төшкән
Ай нурындай күҙең тойолдо;
Ай битендә типкән миңдәр төҫлө,
Әллә күңелең шулай уйылды?

Яҙғы ҡоштарға ҡыҙған тауҙың
Һағымындай буйың елпенде;
Әллә елдәй күреп килеүемде,
Йөрәк гөлоң шуға һелкенде?..

Һандуғасты яҫҡыр ҡарсығаға
Килеүемде, һылыуым, ошатма;
Уҫал уйҙар менән килгәндер, тип,
Йөрәгеңде, һылыуым, һыуытма.

Ҡошҡа сөйгән йылғыр ҡарсыға ла
Өстән артыҡ ҡошто яҫҡымай.

Ата-әсәңдән мин дә өс һораным,
Күп ҡабатлау миңә оҡшамай.

Гөлбәзир:

— Туғайҙарҙы баҫҡан көн томраһын,
Көтәм, елдәр иҫеп баҫһын тип;
Тынысльіҡтар һаҡлап һүҙ ҡушманым,
Талпынған да йөрәген баҫһын тип.

Урал тауҡайҙарын аша сығыу
Батырҙарға кәртә юлмы ни?
Ҡафтауындай ата бейлектәрен,
Ҡыҙға еңеү анһат эшме ни?..

Ҡыҙ баланың наҙы, батырҡайым, —
Сәскәләрҙең наҙы, тиңдәше;
Ҡырау тейгән сәскә төҫлө була,
Көнөн бүлһә уның көндәше.

Кәкүк ҡоштары ла миҙгел һайлай,
Сәскә бөтһә, теле талыға;
Һинең сәскәң дә бит егетен һынай,
Ниңә унан күңелең ялыға?

Кейек ҡаҙҙар ҙа бит кире ҡайта,
Тыуған еркәйҙәрен һағынып;
Һөйгән ҡыҙың мин үк түгелме ни?! —
Ата-әсәмдән һора ҡағынып.

Салауат:

— Бала саҡтарымда әсәң һинең
Ҡулдарыңдан тотоп үптерҙе;
Уҡа таҡыя алып баштарыма,
Кейәүкәйем, тип үк кейҙерҙе.

Мин үпкәндә йөҙөң алланманы,
Ни әйтергә телең белмәне;
Һин дә бала инең, мин дә — бала,
Йөрәгебеҙ бер ни һиҙмәне.

Ҡыҙыл таңдар төҫлө һыҙылып атты,
Бала эңере бөткәс, уйҙарым;
Урал аша ҡал(ы)ҡҡан ҡояш төҫлө,
Күҙ алдыма килде буйҙарың.

Ата-әсәң уйым кире ҡаҡҡас,
Күңел сөйҙөм Урал буйына;
Йырҙарымды көсләп күп йырланым,
Берәүһенә түгел, йөҙөнә.

Күҙҙәремде һирпеп күп югерттем
Урал ҡыҙҙарының йөҙөнә.
Ҡыйғыр ҡоштай күңелем кире ҡайтты,
Мөлхәтһенмәй кире өйөмә.

Уралымда ҡыҙҙар күп булһа ла,
Йөрәгемдең сәбе һин генә.
Мин дә һиңә шулай булам икән,
Ҡафтау булыр тигеҙ юл ғына.

Гөлбәзир:

— Ҡошҡайҙар ҙа һайрай, йөрәге ташһа,
Моңон сәсә, тормай көн һайлап;
Егеттәр ҙә һылыуын ысын һөйһә,
Атҡа менә, тормай юҡты уйлап.

Ҡара бауыр төлкө, ташҡан йөҙө
Түл сәсергә ҡырлас тауҙарҙа;
Батыр егеттәр ҙә ҡанға йөҙә
Һылыуы өсөн кәрәк саҡтарҙа.

Урал тауҙа үҫкән һылыу ҡыҙҙар
Үҙ батырын һөймәй булырмы?
Ҡыҙ күңелен алғас батыр егет,
Ҡыҙ буйһонмай тороп ҡалырмы?

[Салауат менән Гөлбәзир,
Икәү-ара йырлашып,
Уй-хистәрен аңлашып,] [100]
Ҡыҙҙар менән йыйылып,
Бергә уйнап-бейешеп,
Көндө лә кис иткәндәр.
Гөлбәзирҙәр ҡайтҡан һуң,
Киске һыйыр һауғанда,
Салауат та кисләтеп,
Гөлбәзирҙең атаһы
Һағынбайҙың йортона
Килеп төшкән [ат менеп.

Салауат килгән] сағында,
Һағынбайҙың йортонда
Баяр, тархан, түрәләр
Ултырғандар һөйләшеп;
Юлай улы Салауатҡа
Гөлбәзирҙе бирергә
Бөткәндәр, ти, килешеп.
Салауат быға күнмәһә,
Баярҙарға ҡаршы

Көрәшеүен ҡуймаһа,
Янаралдан көс алып,
Салауатты тотороп,
Илдәғ ситкә ҡыуҙырып
Ҡотолорға, тынырға,
Ҡуйғандар, ти, нығытып.
Салауат инғәс тирмәгә,
Бүренән ҡур(ы)ҡкан һарыктай,
Бары тынған, шым булған;
Заводсылар кисекмәй,
Атын ектерә һалып,
Китеү яғын ҡараған.

Һағынбай ҙа таң менән
Тирә-күрше йәйләүгә
Ат саптырып, халыҡ йыйып,
Тыу бейәләр һуйҙырып,
Салауаттың килеүен
Данлы итеп туйлаған.
Ике-өс көн буйына
Бөтә тирә йәйләүҙә
Уйын-көлкө шау булған.
Салауат ҡайтыр саҡ еткәс,
Йәш-елкенсәк, ҡарт-ҡоро,
Бисә-сәсә, ҡатын-ҡыҙ,
Бөтә тирә йәйләүҙән
Бала-саға — барыһы,
Берәү ҡалмай, йыйылғас,
Салауат атына менгәс,
Бөтәһе мән һаулашып,
Ошо һүҙҙәрен әйткән:

— Атамдан ҡарт-ҡороһо,
Әсәмдән ҡарт барыһы,
Яҡты йөҙ мән ҡаршы алып,
Йылы һүҙ мән аш биреп,
Мине ҡунаҡ иттегеҙ.
Салауат, Салауат тигәне,
Баяр, байҙың ҡурҡышып,
Юлбаҫар ул тигәне,—
Мин инде шул Салауат!
Урал — илем тигәндең,
Урал — атам тигәндең,
Урал — әсәм тигәндең,
Заводсылар күкрәкте
Тапай хәҙер тигәндең,
Яуыз түрә, тархандар
Илде һата тигәндең,
Салауаттың айбары

Баярҙарҙы өркөтөп
Яҡшы булды тигәндең,
Мораҙым менән Күсемдәй,
Ҡараһаҡал, Аҡайҙай
Булыр әле тигәндең
Мин — Салауат тигәне.

Олатайҙар, әсәйҙәр!
Ағай, ҡусты, һылыуҙар!
Бейә һауып, һабанан
Ҡымыҙ ҡойоп һыйлаусы,
Йәшлек дәртен иҫкә алып,
Уйнап, көлөп йырлаусы,
Көләс йөҙлө еңгәләр.
[Ишетегеҙ, белегеҙ:]
Илде талар баярға,
Бесәй усы миҙалға
Илде һатҡан түрәгә,
Иҙеленән һыу эсеп,
Уралында ҡыҙ ҡосоп,
Мал-тыуарын үрсетеп,
Йылҡыларын эркелтеп,
Ил ҡайғыһын онотоп,
Рәхәт ятҡан байҙарға,
Бай тупһаһын ялаған,
Яҡшатланып яраған,
Улар йырын йырлаған,
Ил хәсрәтен белмәгән,
Ғәмһеҙ ятҡан ирҙәргә,—
Ҡара ҡанға батһам да,
Уларға юл ҡуймаҫҡа,
Илде һатҡан яуыздарҙы
Түшәгендә һуйырға;
Йәшенеп-боҫоп иленең
Ауыр көнөн белмәүсе,
Ил йөҙөнән көлөүсе,
Ике телле [101] ирҙәрҙең
Яуыз телен ҡырҡырға
Илем өсөн ант иткән
Салауат батыр мин булам,
Салауат батыр мин булам! [102]

Шулай тигән дә Салауат, бары менән хушлашып, ҡайтып киткән...[103]

Салауат ҡайтып төшһә, атаһына ер һатыуҙы һорап, заводсынан илсе килгән икән. Юлай ил халҡын йыйған, кәңәш бара, ти. Берәүҙәр: «Һатайыҡ. Барыбер баяр урманды баҫып ала, ҡырҡып бөтөрә, туғайға малын ебәрә бит»,— ти, ә икенселәре: «Юҡ, һатмайыҡ!»— тип тартҡылаша икән. Салауат ер һатыуға ҡырҡа

ҡаршы һүҙен әйткән. Халыҡтың күбеһе Салауаттың һүҙен хуплағас, «былай булғас, булмаҫ инде», — тип, Юлай баяр илсеһен буш ҡайтарып ебәргән.

Заводсылар тик ятмаған, һаман босоҡ эшләгән. Ике арала ҡанлы һуғыштар булып торған. Заводсылар һалдаттар килтертеп, көс туплағас, Салауат та һиҙенеп, бар һунарсыны йыйған, атһыҙына ат биреп, үҙенә беркетеп ҡуйған.

Салауаттың уйҙарын аталары ла һиҙеп ҡалған. Бер көн шулай иртә таң менән Салауаттың ат эйәрләп йөрөгәнен әсәһе күреп ҡалған да атаһына әйткән. Юлай кәңәш биреү уйы менән Салауатҡа шулай тип һүҙ асҡан: [104]

—Ошо осорҙа бик, балам,
Тының һалҡып һиҙелә,
Атҡа менгән кондәрең
Бары ҡанлы күренә.
Баярға балта сабыу —
Батшаға ҡаршы барыу;
Уның килер бүләге —
Ҡанға батып юғалыу.
Баяр ҡылһа насарлыҡ,
Аҙыраҡ сабыр итәйек,
Яҙған ғаризаларҙың
Яуабыны көтәйек.
Һин йәшһең әле, мин иһә
Илдә күп яу булғанды,
Ил күмергә әйләнеп,
Урал ҡанға буялып,
Батырҙары туралып,
Апау көнгә ҡарт тоҫлө,
Күбе ҡулһыҙ, аяҡһыҙ,
Танау, күҙһеҙ, ҡолаҡһыҙ
Булып зәғиф ҡалғанды
Ишетеп түгел, күргәнмен.
Ете йыл йөрөнөм мин,
Немец яуында булып;
Шунда алған дан менән
Ғәйебемде юйған һуң
Илдә түрә булдым мин [105].
[Һиҙеп торам уйыңды:]
Атты һайлап алғанһың,
[Эйәрләп тә ҡуйғанһың.]
Янаралдың алдында
Миҙал биргән батшама
Минең биргән антымды
Инде боҙмаҡ буламһың?!
Ҡайт һин, улым, ул уйҙан [106].

Салауат:

—Атай, күп йыл серәштем
Ҡаршы төшмәй һүҙеңә,
Атай, инде юл ҡуйҙым
Үҙем тапҡан уйыма.
Атай, анау бармаҡһыҙ,
Йөйлө маңлай ҡарт саҡлы
Күп яу күреп, ил гиҙгән,
Байлыҡ менән дан тотҡан
Ҡарт булһаң да белмәйһең.
Мин йәш булып ат менеп,
Батыр булып көрәшеп,
Айыу һуғып дан алып,
Урал буйы йәйләүҙе,
Аҡ тирмәләрҙе һайлап,
Атым елгән сағында,
Оло юлдар буйында
Күтәрелгән саңдарҙың
Нindәй саңдар икәнен;
Ул юлдарҙан ил талап,
Нindәй бейҙәр елгәнен —
Ике ятып, бер уйлап,
Башыма ла алманым.
Инде һайлап көтөүҙән
Күк бүртәне менгәнгә,
Атайым, һин шомланма.
Бер атыма атлапып,
Урал аша артылып,
Йөрөп ҡайтам әйләнеп.
Атаҡайым, тел тобөң
Миҙалыңды һаҡлауҙа,
Илгә талау килһә лә,
Миҙалыңды яҡлауҙа.
Атам — түрә, тархан, тип,
Баяр, батша дуҫы, тип,
Ил талаусыны күрһәм,
Ҡул ҡаушырып тормамын,
Тота килеп түрәгә
Ҡулым бәйләп бирмәмен.
Бөтә халыҡ ут йотоп,
Ере-һыуы таланып,
Зар илашып торғанда,
Яйрап ятып тирмәмдә
Ҡаҙы-ял мин иммәмен.
Илем кисһә ҡан йылға,
Мин дә бергә кисермен;
Илем янһа утында,
Мин дә бергә янырмын;

Илем итһә ҙур туйын,
Саҡырылған ҡунаҡтай,
Мин дә бергә туйлармын.

Салауат киткән Уралға,
Иҙел ашып Яйыҡҡа,
Ил аралап һәр ерҙә
Осраған күп иргә.
Баяр ҡолдарын күргән,
Уларҙың хәлен белгән,
Хур ителеп яуҙарҙа,
Танау, теле ҡырҡылып,
Ҡолаҡһыҙ, телһеҙ ҡалған
Тәү осраған сал ҡарттай
Ирҙәрҙең барын күргән.
Баяр, тархан, батшанан,
Зар илаған халыҡтарҙың,
Асыулы йөрәктәрҙең
Күп икәнен дә белгән.
Бер-ике йыл йөрөгән,
Барын күреп аңлаған,
Әсе-сөсө барыһын,
Шунда бергә татыған.
Илгә кире ҡайтҡанда,
Типһә тимер өҙорҙәй
Ун ете йәшлек ир булған;
Дуҫы менән дошманды
Айырырҙай сос булған.

Юлай алған шул заман
Батшанан бер ҙур фарман.
Шул фарманды тотоп,
Был хаҡта кәңәш ҡороп,
Кесе булһа ла, аҡыллы
Салауатҡа килгән, ти,
Ошо һүҙен әйткән, ти:
— Янаралдың хаты бар:
«Әбей батшаға ҡаршы
Йәмәлкә [107] тигән берәү
Батша булып сыҡҡан, ти.
Илдән батырҙар йыйып,
Йәмәлкәгә ҡаршы яуға
Кеше ебәр һин», — тигән.
Улым, бар һин шул яуға,
Бөтә ғәйебең юйырһың,
Миндәй миҙал алырһың,
Үҙеңә дошман булғандың
Өҫтөнән бей булырһың.

[Атаһын тыңлапмылыр,
Башҡаһын уйлапмылыр,
Салауат киткән дауға тип,
Дауға ҡаршы яуға тип.
Атама — дан типмелер,
Уйым — башҡа типмелер,
Тағып алған түшенә
Атаһының миҙалын.][108]
Батша яуына барып
Салауат та ҡушылған.
Салауаттың миҙалын
Бары күреп аптырап,
Янаралдар һөйләшеп,
Ғәскәргә меңбаш * итеп,
Билдәләп үк ҡуйғандар.
Уны шунда тотмайсы,
Бүгәс яуына ҡаршы
Яу асырға ҡушҡандар.

Юшатырҙың [109] башына
Салауат барып еткәндә,
Ҡояш байып, кис булған;
Ҡунарға, тип барыһы
Шунда атынан төшкән.
Шунда ятҡан сағында,
Баҫмалатып артынан,
Йөйлө маңлай, теге ҡарт —
Тупыс бармаҡ аҡ сал ҡарт —
Ҡыуып килеп етешкән.
Салауаттан барыһын
Шунда һорап белешкән.

Ҡ а р т:

— Ауға сыҡҡан һунарсы,
Барыр ерен белмәйсе,
Ниндәй йәнлек түлләүен
Айыра асыҡ күрмәйсе,
Атҡа менеп сыҡмаҫ ул.
Яуға сапҡан батыр ҙа,
Маңлай ҡуяр дошмандың
Тотҡан уйын белмәйсе,
Уҡ-һаҙағын атмаҫ ул.
Әсәнән тыуған шәр бала
Кейем кейеп биҙәлә;
Табаҡ-һауыт башҡанан
Ашауҙары төрләнә;
Кейем кейемде танып,
Бер табаҡтан ейҙереп,
Сер һөйләшеп дуҫлаша.

Атаның алтын табағы
Мираҫ булған балаға
Таш табаҡтан ейгән ир
Һис тә серҙәш булмаҫ ул.

[Дошманым тип, һаҙағыңды
Һин тоҫҡаған батыр ир]—
Таш табаҡтан ейгән ир!
Үҙе менән табаҡташ
Ҡан илаған урыҫты,
Татар, башҡорт, сыуашты,
Алтын табаҡтан ейгән
Әбей батша ҡулынан,
Уға табаҡташ булған
Баяр, тархан, бейенән
Азат итәм барын тип,
Уҙаҡ йыйып ат менгән.
Алып килдем артыңдан
Бына уның яҙғанын,
«Азат булһын бары!»— тип
Илгә оран һалғанын.

Ҡарттың һүҙен ишеткәс,
Бүгәс хатын уҡығас,
Түшендәге миҙалын
Атып бәргән Салауат.
Таң аттырған ҡарт менән,
Атҡа менгән таң менән,
Яу асмайсы Бүгәскә
Тура барған нан * менән.
Бүгәсәүгә ҡушылғас,
Ботә эште аңлашҡан.
«Беҙҙең теләк бер»,— тиеп
Уның яҡҡа ауышҡан.

Шулай көн артынан көн үтеп, Салауат Бүгәсәүҙең һәр халыҡҡа азатлыҡ, оло ғәҙеллек юллаған гәйрәтле батыр булыуына тамам ышанғас, тағы ғәскәр тупларға тип, атаһына кәңәшкә ҡайтып киткән. Ул ҡайтҡанда, бында йәпә бик күп ирҙәрҙе атҡа атландырып, яуға оҙатырға торалар икән. Шул саҡ Салауат килеп сыҡҡан да, барыһына оран һалып, ошо һүҙен һөйләгән [110]:

— Уҙамандар, ҡустылар.
Оләсәйҙәр, еңгәләр...
Батшаға яу асҡан ир —
Бүгәс тигән ир икән,
Ҡараһаҡал, Косомдәр,
Аҡай, Батырша, Килмәт,
Тағы башҡа батырҙар,

Быуат-быуат яу асып,
Уралда коштай һайрарға,
Һыуҙа балыктай йөҙөргә,
Ирек эҙләп, кан кисеп
Сапкан юлдан бара икән;
Батша һөйгән байҙарҙы,
Янаралды, һанатты,—
Бөтәһен дә юк итеп,
Кан илаған байғошто:
Татар, мишәр, сыуашты,
Башкорт, урыҫ — барыһын,
Динен, канын айырмай
Азат итәм, ти икән.
Үҙем күреп һөйләштем,
Бөтә Урал буйында,
Ете ырыу эсенә
Фармандарын өләштем.
Бөтә ырыу аңланы,
Ук-һаҙағын кайраны,
Илен һөйгән берәү ҙә
Бармайым, тип торманы.

Илем тигән ир батыр,
Атын менеп, теҙгенен
Һулаҡайға тартһын ул;
Ил эсендә түш йәйгән
Бөтә баяр, тарханды
Дошманым, тип белһен ул;
Суска көткән урыҫты,
Йылкы көткән башкортто,
Һыйыр көткән татарҙы.
Йөн тетеүсе сыуашты —
Барыһын да бер тигеҙ,
Үҙенә дуҫ итһен ул.
Быуат-быуат түгелгән
Кандан тыуған батыр, тип,
Үҙен якшы белһен ул!
Ташка һалып баштарын,
Кан эсендә йоклаған,
Төшөн күреп уянып,
Ағыу сәскән убырҙың
Үңәсенән сал бөркөт
Кымтып алды тигән төш —
Ошо икән, тиһен ул;
Илдең янған күмерен
Кулға алып, ат менеп,
Батша, тархан кәһәре —
Ошо күмер, тиһен ул.

Юлай:

— Миҙал алып ант биргәс,
Аҡ батшаға яу асып,
Дошман булмам, балаҡай;
Һүҙем ташлап яу асһаң,
Ата булмам, балаҡай!

Салауат:

— Һин батшанан дап алып,
Миҙалыңа ант иткән,
Батша яҡлы түрә һин.
Ил күкрәген талаусы,
Ил батырын һуйыусы,
Биш атанан бей булып,
Илдә байлыҡ йыйыусы
Тархандар тоҡомо һин.
Әгәр илде яҡлаһаң,
Илгә аға булырһың;
Әгәр илдән айырылһаң,
Илгә дошман булырһың.
Илгә дошман кешегә
Мин дә дошман булырмын.
Йортон-ерен үртәрмен,
Ҡан йөҙҙәрөп барыһын,
Илдең ҡопоп алырмын.

Ботәһе лә шау килеп, айбар сәсеп, Салауатҡа эйәргәс, Юлай ҙа ҡарыулашмаған, бергә атҡа менгән. [111]

Салауат киткән яу менән,
Заводсыға дау менән.
Бүгәс килеп еткәнсе,
Батша яҡлы тарханды,
Баярҙарҙы өркөтөп,
Яҡын тирә заводтың
Хужаларын ҡыйратып,
Барын ҡулға алған ул.
Бүгәс менән ҡушылғас,
Бүгәс уны маҡтаған,
Күп ғәскәргә баш итеп,
Уны тағы һайлаған.

Бик күп яуҙа ҡатышып,
Ҡаршы килгән дошманды
Ыласындай типкән ул.
Күкрәгенә уҡ тейеп,
Аттан ҡолап ауһа ла,

Йәйәү тороп ҡалһа ла,
Ҡаршы килгән дошманды
Ҡуй-һарыҡтай ҡырған ул.
Күп яуҙарҙа булған һуң,
Күп яралы булған һуң,
Хәлдән тайып ятҡан һуң,
Көстән тороп ҡалған һуң,
Дошман тамырын ҡоротмай,
Иртә яуҙан сыҡҡанға
Тәрән итеп көрһөнөп,
Йөрәге ташып, ярһынып,
Бынау йырҙы йырлаған:

«Һауаларҙа осҡан, ай, ағылбай
Ҡыялап та оса, ҡош күрһә.
Яуҙарынан ҡалған батыр егет
Ҡыуана ла икән, төш күрһә.

Өйөр ҙә генә йылҡы араһында
Һөйөп менгән атым бүртә ине;
Дошман яуҙарына, ай, сапҡанда
Ҡайғыларым бары бөтә ине.

Ыласын да оса, күсте ҡыя,
Ҡанаттары талғас, бер төшә;
Ыласындай төҫлө батырҙар ҙа
Бер төшмәһә, аттан бер төшә».
Күп еренән яралы
Салауат башын күтәреп,
Атҡа ҡабат менә алмай,
Яуға ҡаршы саба алмай,
Өйҙә ятҡан зарланып.
Араға дошман тулған һуң,
Яуға барған ирҙәрҙең
Теләге сыбар булған һуң,
Баярҙың бар ҡолдары,
Баяр киткәс етәр, тип,
Башҡорттары, баярҙы
Үҙ еремдән ҡыуғас, тип,—
Бер табандан тормайсы,
Бары йортон ҡайғыртҡас,
Юлай ҙа ары бармайсы
Иленә кире ҡайтҡан һуң,
Көс таралған Бүгәстең,
Көсө бөткән Бүгәстең.

Балтаға һап ҡушылмай,
Яңғыҙ урман киҫмәҫ ул;

Ят ҡолаҡһыҙ өй сере
Ситкә оран булмаҫ ул;
Юлға сыҡҡан юлдашың
Бер табаҡтан аш ейеп,
Ысын серҙәш булмаһа,
Яуҙа ҡулдаш булмаҫ ул.
Бүгәстең дә юлдашы,
Алтын алып дошмандан,
Бүгәсте лә хур иткән.
Бүгәс бөткәс, Салауат
Яңғыҙ оран һалһа ла,
Бер миктәлгән иленән
Батыр йыйып алһа ла,
Ялмап килгән ялҡынға
Һаман ҡаршы торһа ла,—
Яңғыҙ батыр яу ҡаҡмаҫ.
Салауат Салауат булһа ла,
Яңғыҙ батыр дошмандың
Яуына ҡаршы көс булмаҫ.

Күскән йылға буйҙарын,
Ямантауҙың уйҙарын
Батша яуы ҡаплаған;
Ат менәлмәҫ Салауат,
Биш йөҙ һыбай килһә лә,
Уны уратып алһа ла,
Ҡул ҡаушырып тормаған,—
Һаҙаҡтары бөткәнсе,
Ҡылыстары һынғансы,
Күкрәгендә яраһы
Егермегә тулғансы,
Йығылып иҫтән тайғансы,
Өс йөҙ кешене ҡырған!
Шунан һуң ғына батыр
Салауат ҡулға алынған,
Ҡулы-аяҡтарына
Тимер бығау һалынған.

Йөҙө ҡанға батһа ла,
Түрә-һәрә тыйһа ла,
Башына һуғып торһа ла,
Батырлығын юймаған,
Халыҡ менән Салауат
Былай тиеп хушлашҡан:

— Ер күкрәген ҡар ҡаплап,
Үләнен ҡауҙан яһаһа,
Ҡояшлы яҙҙың ямғыры
Тағы сәскә аттырыр.

Илдән Салауат китһә лә,
Дошман ҡойған был ҡандар,
Илде яуҙан һаҡларҙай,
Дошмандан ҡон алырҙай
Тағы батыр арттырыр!

## САЛАУАТ БАТЫР

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яуға саҡырып өндәгәндә
Тауыштары көр ине;
Ҡаршы килгән яуҙарға
Ҡаршы сығыр ир ине,
Ҡаршы сығыр ир ине.

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Дошман менән алышҡанда
Ил эсендә бер ине;
Халҡы өсөн көн ине,
Дошман өсөн төн ине,
Дошман өсөн төн ине.

Салауат батыр ир ине,
Менгән аты кир ине,
Яурынына уҡ тейһә,
Себен тешләй, тир ине;
Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тир ине, ау,
Тирем сыға, тир ине.

## ТӘҮЕШ МӘРГӘН

Һай тием, субар тием, субар,
Һай тием, субар тием, субар.
Тибенгән аттан тир сығыр;
Аҡ мамыҡтан буҙ сығыр;
Аҡыллы ирҙән һүҙ сығыр.
Ай, аҙамат һәм бейҙәр!
Йәшлектә тәүбә ҡылығыҙ,
Тәүбәгеҙ һеҙҙең таш киҫер;

Тура ла биреп тәүбә итәйек тигәнсе,
Йөрөк * аттай дулай ҙа дулай,
Донъя үтер, ай, донъя үтер.

Бер-бер генә тауҙар бейек булыр,
Бер-бер генә тауҙар бейек булыр;
Арҙа * ғына менән ҡолъя * тигән кейек булыр,
Арҙа ғына менән ҡолъя тигән кейек булыр;
Төркөстанға киткән Тәүеш мәргән,
Төркөстанға киткән Тәүеш мәргән
Һағынған саҡта көйөк булыр, ау,
Һағынған саҡта көйөк булыр!

Мин артымды ҡараһам,
Мин артымды ҡараһам,
Сағым ҡалҡҡан саң булды;
Һибәлтәмде ҡараһам,
Гел гөлйөгән мал булды.
— Бер айҙанып сапһана, Тәүеш мәргән,
Ҡоралайҙы туҙҙырсы,
Ҡоба сүлдәр саң булһын,
Питербур менән Мәскәүгә
Хатҡа ла ғынай яҙған дан булһын,
Дан булһын, ау, дан булһын!

Һай, бер әҙәмде бай итер,
Бер әҙәмде юҡ итер;
Байҙарҙың кейенгәнен-кейгәнен
Ҡамҡа * менән суҡ итер,
Ашағанын-эскәнен
Ҡаҙы менән ял итер;
«Йә, бер аллам, йә, бер ҡаҙир!» тигән саҡта,
Берәүҙең яңғыҙ ҙа яңғыҙ башын
Юҡ итер, ау, юҡ итер!

## БУРАНҒОЛ ҠАШҠА*

Буранғол ҡашҡа ир ине,
Буранғол ҡашҡа ир ине,
Илгә килһә ауырлыҡ,
Ил ҡайғыһын йыйыр ине.

Буранғол ҡашҡа ир ине,
Буранғол ҡашҡа ир ине,

Яурынына уҡ тейһә,
Ямғыр яуа, тир ине.

Буранғол ҡашҡа ир ине,
Буранғол ҡашҡа ир ине.
Күкрәгенән ҡан сыҡһа,
Тирем сыға, тир ине.

Буранғол ҡашҡа ир ине,
Буранғол ҡашҡа ир ине,
Илгә килгән яуҙарға
Ҡаршы сығар ир ине.

## ӘСӘНӘН ТЫУҒАН ИР-ЕГЕТ

Әсәнән тыуған ир-егет
Ҡайҙа көрәш тотмаған?
Атанаң тыуған ир-егет
Ҡайҙа яуға сыҡмаған?

Ялп-йолп иткән ябалаҡ
Кемгә юлдаш булмаған?
Ҡырҙа үҫкән төҙ ҡурай
Кемгә моңдаш булмаған?

Бүтәгәле буҙ туғай
Кемгә түшәк булмаған?
Ҡарағайлы ҡара урман
Кемгә ышыҡ булмаған?

Ташы булған текә тау
Кемгә тоҙаҡ һалмаған?
Ҡамышы булған тәрән күл
Кемде тартып алмаған?

Ир-егеттең ғәзиз башы
Ҡайҙа ятып ҡалмаған?
Яғаһына ҡош оялап,
Яңағына себен-серәкәй балалап,
Ир-егеттең башҡынаһы
Ҡайҙа ятып ҡалмаған?

## ЯЛП-ЙОЛП ИТКӘН ЯҢҒЫҘ ЯБАЛАҠ

Ялп-йолп иткән яңғыҙ ябалаҡ
Яҙмышта кемгә юлдаш булмаған?
Бүтәгә(ле) аулаҡ буҙ ялан
Кемгә генә түшәк булмаған?
Арғымаҡ менгән ҡанһыҙ хан
Кемде генә йәйәү ҡылмаған?
Яңағына ҡош оялап,
Мыйығына себен-серәкәй балалап,
Ир башҡорттоң башы ҡайҙа ятып ҡалмаған?

Яуы ҡыйратылған батырмын,
Яланда яңғыҙ ятырмын.
Яңынан яу туплармын,
Яҙған булһа, еңеп ҡайтырмын.

Юлдашты юлдан эҙләрмен,
Юлыҡҡанын үтәләй күҙләрмен.
Барыр юлым ят булһа,
Иш булыр ир тап булһа,—
Дошманым күп, дуҫ юҡ тимәмен,
Теҙем сүкмәм, башым эймәмен.
Ҡалҡан ҡаплап һуғышҡан,
Айбарланып алышҡан
Алдын бирмәҫ батырмын.
Берәүҙән икәү уңай тип,
Аҡ юл бирһен беҙгә хоҙай тип,
Яу баҫтыра барырмын,
Уңға-һулға ярырмын,
Ил-йорт ҡонон алырмын!

## ПЕРОВСКИЙ ЙӘЙЛӘҮЕ

Перовскийҙең йәйләүе —
Был донъяның ожмахы,
Был донъяның ожмахы.
Аҡ мәсеттәй йорт һалдырған,
Янарал шул хужаһы, ау,
Һис ниҙә юҡ нужаһы.

Аҡ сарлаҡлы йорто тора
Бейек тауҙың башында.
Бейек тауҙың башында.
Офицерҙәр, полковниктәр —
Перовский ҡашында, ау,
Перовский ҡашында.
Перовский йөрөп ята,

Төрөпкәһен борлатып,
Төрөпкәһен борлатып.
Ярандары күцел аса,
Юртаҡ аттар уйнатып, ау.
Юртаҡ аттар уйнатып.

Үҙ хөкөмө — үҙ ҡулында,
Бигерәк ғәййәр түрә икән,
Бигерәк ғәййәр түрә икән.
Бер екереп ебәрһә лә,
Үҙәккә үткәрә икән, ау,
Үҙәккә үткәрә икән.

Йәйләүенә бик ереккән,
Кәйефтәре хуш икән,
Кәйефтәре хуш икән.
Ырымбурҙан хат ташырға
Булһасы бер ҡош икән, ау,
Булһасы бер ҡош икән!
Ҡанатлы ҡошҡа — фарман юҡ,
Хыялдары буш икән,
Хыялдары буш икән.
Уйлай торғас, тапты түрә,
Һай, үҙендә баш икән, ау,
Һай, үҙендә баш икән.

Ниңә юҡҡа ялынырға
Һауалағы ҡош-ҡортҡа,
Һауалағы ҡош-ҡортҡа.
Ниең етһен, эт әрһеҙе,
Далалағы башҡортҡа, ау,
Далалағы башҡортҡа.

Ырымбур — йәйләү араһы
Йөҙ егерме саҡырым,
Йөҙ егерме саҡырым.
Саҡырым һайын атлы башҡорт
Хаттар илтә саптырып, ау,
Хаттар илтә саптырып.
Ҡулдан-ҡулға күсә-күсә,
Ырымбур етә хаттар,
Әйләнеп килә хаттар.
Һай, япарал ҡыуана һуң;
«Молодец,— ти,— башҡорттар, ау,
Молодец,— ти,— башҡорттар!»
Башҡорт ҡабат атын ҡыуа
Манма тиргә батырып,
Манма тиргә батырып.
Ҡыумаç ине, әмер — ҡаты,
Ник ҡыумаһын, бахырың, ау,
Ник ҡыумаһын, бахырың...

# Әйтештәр

## АҠМЫРҘА СӘСӘН МЕНӘН ҠОБАҒОШ СӘСӘНДЕҢ ӘЙТЕШКӘНЕ

Борон Дим буйында йәйләгән, Торатауҙа[120] ҡышлаған Ҡарағөлөмбәт[121] тигән хан булған. Уға саҡлы ул ерҙе — Дим буйын — биләгән, мең башы* булып танылған Ҡобағош тигән бей булған. Ҡарағөлөмбәт хан булып, Дим буйын алғанға, Ҡобағош уға баш һалмай, ике араһы яулашҡандар. Ҡобағош ҡаршы тора алмай, Ҡарағөлөмбәттән еңелгәс, Ҡатай яғына[122] ҡасҡан. Ҡобағош үҙе сәсән булған. Ҡасып йөрөгәндә, ҡатындар кейеме кейеп, йәйләү аралап йөрөгән. Халыҡты ҡотортоп, Ҡарағөлөмбәт яҡлы бейҙәрҙе йә төшөрткән, йә үлтерткән. Шунан тирә-яҡтағы бейҙәр үҙ-ара һөйләшеп, Ҡобағошто тоторға булғандар. Ләкин былай ғына тота алмағандар. Ҡайҙа ятҡанын халыҡ әйтмәгән. Шунан яу туплап, яу менән Ҡатай урмандарын ҡамап һөҙөргә булғандар. Быны халыҡ Ҡобағошҡа белдергән. Ул Бөрйән яғында бер тауҙы ҡаҙып торғаҡ яһаған. Бей яуы килә башлағас, ауыҙын бер таш менән ҡаплаған. Унлап кеше тартып ҡараһа ла, аса алмаған. Уңдан артыҡ кеше торорға урыны булмаған. Шулай итеп, Ҡобағошто тота алмағандар.

Ҡобағоштоң Айбағош менән Конбағош тигән улдары үҫеп, Үҫәргән ырыуын ҡыйрата башлағас, Бикбау бей[123] илсе ебәреп, килешергә һораған.

Ҡобағош әйткән: «Мин риза, тик бер шартым бар. Бикбау бейгә әйт, йыйында кем һөйләһә лә ирек булһын. Халыҡ кемде ғәйепле тапһа, уға үлем булһын. Шуға риза булһа, мин барам»,—тигән.

Бикбау бей, аҡыл эйәләрен йыйып, кәңәш-төңәш иткән. Ханға ла әйткән. Былар уйлашҡан-уйлашҡан да, нисек тә Ҡобағош сәсәнде һөйләтмәҫкә юл эҙләгәндәр. Хан кәңәш биргән:

— Һин,—тигән,— сәсәндәреңде йый, йомаҡ әҙерләһендәр. Ҡобағош уны-быны уйламай, әҙерләнмәй килер. «Шул йомаҡҡа яуап

бирә алмаһаң, һүҙ ҙә асмай, буй бирәһең», тип әйт,— тигән, ти.

Шулай итеп, һүҙ төйнәп, Ҡобағошто саҡырғандар.

Ҡобағош килгәс Бикбау бейгә:

— Халыҡ һинән дә, минән дә ҡурҡмаһын, ғәйепләне үлем көткәнде белһен. Минең улымдың берәһе һинең күкрәккә, һинең улың минең күкрәккә хәнйәрҙәрен терәп торһон,— тигән.

Бикбау бей риза булған да:

— Йә, кем һүҙ аса, һинме, минме? — тигән.

Ҡобағош:

— Мин һөйләһәм, һиңә һүҙ ҡалмаҫ! Әйтеренде әйтеп ул, һин башла,— тигән.

Бикбау:

— Минең шартым бар: бер сәсәнемә ҡушам, йомаҡ әйтһен. Шуға яуап бирә алмаһаң, һинең телең киҫелһен. Башың киҫһәм дә мин хаҡлы, ни эшләтһәм дә мин хаҡлы булайым,— тигән.

Ҡобағош:

— Ярай, тапһам, үҙеңә лә шул шартмы?

Бикбау бей риза булған.

Бикбау бей, алдан әйтеп ҡуйған сәсәне Аҡмырҙаны саҡырып:

— Йомағың булһа, йомаҡ әйт, бүтәнең булһа, бүтәнде әйт! Ҡобағошто еңһәң, һиңә дан! — тигән.

Шунан ике сәсән һүҙгә керешкән.

А ҡ м ы р ҙ а:

Ҡобағош — сәсән, тинеләр,
Ҡобағош — сәсән, тинеләр.
Илен-йортон үртәткән,
Үҫәргәнде йоҙәткән,
Ҡобағош килә, тинеләр,
Ҡобағош килә, тинеләр.

Ирәндеккә үрелгәс,
Ирәндеккә үрелгәс,
Улдары мән күренгәс,
Улдары мән күренгәс,
Булат ҡылыс һелтәрме,
Һүҙен әйтеп китәрме? —
Әйт, Аҡмырҙа, тинеләр, ау,
Әйт, Аҡмырҙа, тинеләр.

Уға әйтерем шул булыр,
Йомарланған һүҙ булыр,
Ул әйтерме, кем әйтер,
Ул әйтмәһә, бей әйтер,
Бейгә өҫтәп ил әйтер, ау,
Бейгә өҫтәп ил әйтер.

Бер һунарсы булған, ти,
Бер ҡош атып алған, ти.

Күҙен карға суҡыған,
Йөҙәп йөнө екегән,
Ҡанаты һынык, башы юк —
Тал турғайы булған, ти, ау,
Тал турғайы булған, ти.
Ябалактан йөн алып,
Ҡошто уға биргән, ти,
Әҙернәһен киргән, ти,
Төн юшауын абайлап,
Ҡара төндә ай-һайлап,
Игәрҙәрен өҫкөтөп,
Бер арыҫланды тотҡан, ти, ау,
Тотҡан да иң кирткән, ти.

Ул һунарсы кем икән,
Ҡобағош сәсән шул микән?
Ҡош, арыҫланы ни икән,
Үҫәргән менән бей микән?
Игәрҙәй улдар эйәрткән,
Игәрҙәй улдар эйәрткән, ау,
Ҡобағош булмай, кем икән?

Ҡобағош:

Сәсән дә, сәсән икәнһең,
Аңлар сәсән икәнһең.
Йомарланған һүҙенде
Белмәй һөйләй икәнһең, ау,
Белмәй һөйләй икәнһең.

Бер һунарсы тигәнең,
Бер һунарсы тигәнең,
Күҙен карға суҡыған,
Йөнө ҡалмай екегән,
Ҡанаты һынык, башы юк,
Тал турғайҙай кәре юк
Ҡошто ауланы тигәнең —
Хандан илен тапатҡан,
Мал-тыуарын талатҡан
Бейең булмай, кем булһын, ау,
Бейең булмай, кем булһын!

Ябалаҡтай ҙур ханға,
Йөндәй осор юк данға
Илен ҡоштай бәйләгән,
Тотоп ханға һыйлаған —
Илендәге бей булһа,
Төндәй илде ҡаплатҡан,
Тирбәтеп илде йоҡлатҡан,
Ант итеп ханға бирелгән,

Теле яндай кирелгән
Аҡмырҙа булмай, кем булһын, ау,
Аҡмырҙа булмай, кем булһын!

Игәрҙәре тигәнең,
Һунар алыр тигәнең —
Хан табағын ялаған,
Илде аямай талаған
Яһаҡсы булмай, кем булыр, ау,
Яһаҡсы булмай, кем булыр!

Төн юшаған арыҫланың,
Төн юшаған арыҫланың —
Намыҫы бейҙән киртелгән,
Асыуы ташып тертелгән,
Ҡобағошто ла килтергән,
Күп яуызды үлтергән
Илдән бүтән кем булыр, ау,
Илдән бүтән кем булыр!

Аҡмырҙа[124]:

— Ямаңға ҡаршы тулҡынған,
Яҡшыға ҡарап урғылған,
Диңгеҙҙән дә ятыулы,
Уралдан да артыулы
Нимә булыр? — Әйт шуны,
Сәсән булһаң, тап шуны.[125]

Булаттан үткер, яу ҡыйыр,
Ҡан сығармай, яу һуйыр,
«Мин-мин» тигән, «мин» тигән,
Бауыры бөтөн хоҙайҙай,
«Мин, үҙем мин — хан» тигән,
«Бар фарманым дан» тигән,
Хандан ҡурҡмаҫ бар микән, ау,
Бейҙән өркмәҫ бар микән?[126]

Ағыр һыуҙы аҡтырмаҫ,
Ағыр һыуҙы аҡтырмаҫ,
Юлына туҙан яткырмаҫ,
Төнләгән ҡурҡып яптырмаҫ,
Атанан күреп уҡ юнған,
Иркә үҫеп ир булған,
Толпар менеп ил күргән
Хандан ғәййәр кем булыр, ау,
Бейҙән тайяр кем булыр?[127]

Ҡ о б а ғ о ш:

Донъяла иң тулҡынлы,
Ҡайнап ағыр упҡынлы,
Юл да бирмәҫ артыулы,
Диңгеҙҙән дә ятыулы —
Туңмай ятҡан ил зары, ау,
Тынмай аҡҡан ил зары.
Булаттай үткер, яу ҡыйыр,
Ҡан сығармай яу һуйыр,
[Ил сигендә дан алған,
Ил тышында һан алған,
Ханға ҡаршы уҡ булған,
Бейгә ҡаршы ут булған] —
Сәсән булмай, кем булһын,
Сәсәнгә тиң кем булһын:
[Яманлыҡты яҡламаҫ,
Дошман хәтерен һаҡламаҫ,
Яҡшылыҡты һөйәр ул,
Илдең зарын һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул,
Дауға саҡырып өндәр ул.] [128]

Атанан күреп уҡ юнған
Яуҙа үҫкән ир булыр,
Таянғаны ил булыр,
Ханға ҡаршы яу булыр, ау,
Ханға унан ҡан булыр.

Тау ярған да халыҡ булыр,
Таш ярған да халыҡ булыр,
Мәңге юлы ерекмәҫ,
Өҫтөнә туҙан яҡтырмаҫ
Батыр сапҡан юл булыр, ау,
Данды таҡҡан шул булыр [129].
Һыуҙар ҡайнап аҡмаҫтай,
Тулҡынын да ҡаҡмаҫтай
Тынған сағы бер булыр, ау,
Ул сағы ла шул булыр:
Илен яҡлап яу сапҡан,
Ереп һаҡлап дан тапҡан,
Ҡанһыраған батырҙың
Ҡанын йыуған саҡ булыр, ау.
Ҡанын йыуған саҡ булыр.

Ҡобағош яуап биргән һуң Бикбау бей ҙә, Аҡмырҙа сәсән дә һүҙһеҙ ҡатып ҡалған, ти.

Ҡобағош улына:

— Ал хәнйәрең, тыҡ ҡынығa! — тигән.

Бикбауҙың улы ла, Ҡобағоштоң улы ла хәнйәрен ҡынға тыҡҡас, Ҡобағош, Бикбау бейгә яҡын килеп, тағы ла өҫтәп әйткән, ти:

— Ҡобағош килә, тинегеҙ,
Ҡобағош килә, тинегеҙ,
Килгәнемде күрҙегеҙ, ау,
Әйткәнемде белдегеҙ!
Түрә түгел, ҡарамын [130],
Түрә түгел, ҡарамын,
Толпар менгән хандарға
Яуға ҡаршы барамын, ау,
Яуға ҡаршы барамын.

Әйткәнемде тыңлаһаң,
Тел төбөмдө аңлаһаң,
Үҙеңде бей ҡуйырмын, ау,
Ҡарышһаң, тотоп һуйырмын.
Ил ҡаныны ялаған,
Илдең сүбен тараған,
Дошманды әйтеп һанаған
Телем әйтер, ялыҡмаҫ,
Яҡшыны һөйөр, ҡапыҡмаҫ;
Ил зарыны һөйләр ул,
Яуға саҡырып өндәр ул,
Дошманын юҡ итмәйсе,
Теләгенә етмәйсе,
Уф та тимәҫ, ялыҡмаҫ, ау,
Уф та тимәҫ, ялыҡмаҫ!

Әсә һөтөн тапламаҫ,
Дошман хәтерен һаҡламаҫ,
Ыласындай ҡуш улым,
Ыласындай ҡуш улым —
Алдымда, Бикбау, әйт һүҙең,
Алдымда, Бикбау, әйт һүҙең:
Аманлыҡмы теләйһең,
Ямаңлыҡмы теләйһең, ау,
Хаң һүҙенме һөйләйһең?

Ямаңлығың ҡуймаһаң,
Хандан күңелең уймаһаң,
Һаман ҡандан туймаһаң,
Һаман ҡандан туймаһаң,
Толпарға менгән улдарым,
Атанан күргән юлдарын
Ташлап ситкә тайпанмаҫ,
Һыныңа ҡарап аңшаймаҫ,
Сергеһенән ҡан кисмәй,
Арыҫландай айҡап ҡан эсмәй,

Аттан әйәр алмаҫтар, ау,
Ҡыпға ҡылыс һалмаҫтар!

Бикбау бей, һүҙ бирен, үлемдән ҡалһа ла, аҙаҡ һүҙен боҙған. Хандан көс алып, ул да етмәгәс, ҡаҙаҡ бейҙәренә мал биреп, яу сакырып, күп йыл буйы һуғышкан.

Бара-бара халыҡ, Бикбау менән ханды берәм-берәм ташлап, Ҡобағошка ыҡлаған. Хан түҙмәгән, ҡасҡан. Бикбау ҡалған. Ҡобағошка буй биргән.

Ҡарағөлөмбәт, бүтән хандарҙан көс алып, ил өҫтөнә килерҙе ишеткәс, Ҡобағош, ат саптырып, ил йыйған.

— Был хандан ҡотолоп булмаҫ, аҡ батшанан ярҙам һорайыҡ, беҙгә ярҙам бирһен. Арала ыҙғыш бөтһөн, ырыу-ырыуға ерҙе бүлеп бирһен,— тип, үҫәргәндән Бикбау бейҙең үҙен, бөрйәндән Иҫке бейҙе, ҡыпсаҡтан Ҡара Ҡужаҡты, тамъяндан Шаҡманды аҡ батшаға ебәргән, ти.

## МӘХМҮТ СӘСӘНДЕҢ ЙОМАҒЫ, УҒА ҮҘЕНЕҢ ЯУАБЫ

Бер байҙың ике ҡыҙы, Мәхмүт исемле бер улы булған. Әүеш күле йәйләүендә тыуған, Яу күле йәйләүендә үҫкән. Атаһы, бай булһа ла, бик һаран булған. Хатта малына көтөүсе ялларға мал ҡыҙғанып, йылҡыһын улынан, һыйыр, һарығын ҡыҙҙарынан көттөргән. Башҡорттарҙы батша хөкүмәтенә ҡаршы баш күтәрергә ат йыйыу, батырҙарҙы туплау башланғас, ат биреүҙән ҡасып, малын ҡыуып, ҡаҙаҡ араһына сығып киткән. Йәш-елкенсәк, бергә көтөү көткән көтөүселәрҙең ҡотортоуы буйынса Мәхмүт атаһына эйәрмәй ҡасып ҡалған.

Бола баҫылғас, атаһы кире ҡайтҡан. Болаға ҡатышмаған кеше һаналып, старшина итеп ҡуйылған.

Мәхмүт, бай балаһы булһа ла, йәштән ук көтөүселәр менән аралашып, ҡурайға, әкиәт һөйләүгә, йор һүҙгә оҫта булған. Ул һис бер саҡта ла һүҙен тура мәғәнәһе менән һөйләмәгән, гел ситләтеп әйткән, йомаҡсы булған. Мәхмүт болаға ҡатнашһа ла, һуңынан атаһы арҡаһында ҡотолған. Атаһы старшина булып, старшиналығын ҡотлаған бер йыйын-туйҙа ҡурайсылар, йырсылар, сәсәндәр ярышҡанда, Мәхмүт былай тип йомаҡ әйткән:

—Ҡурғаштан да тосораҡ
Ауыр-һәлмәк бар микән?
Ҡараңғы төндән дөмөрәк,
Ҡара төҫтән сөмөрәк
Тағы ла бүтән бар микән?
Йылан аяғы бар, тиҙәр,—
Аяғын күргән бар микән?

«Ауырыу баҫты, уф!»— тимәҫ,
«Кил, үлем, һин! Кит!»— тимәҫ,
Бауыры бөтөн бар микән?
Аяғын ҡыҫҡанға — итектән дә,
Бикләнгәнгә — ситлектән дә
Бүтән тарлыҡ бар микән?

Һылыу ҙа, һылыу тимәгән,
Бер саҡта ла һүнмәгән,
Ҡуш булмайса, өс булған,
Бар тормошҡа көс булған
Һөйөү тигән бар микән?

Мәхмүттең был йомағына күптәр яуап тапмаған. Тапҡандары ла ҡурҡып әйтмәгән. Шунан Мәхмүттең үҙенән һорағандар. Мәхмүт, тәүҙә ҡурайын алып, ҡыҫҡа көй уйнаған да былай тип яуабын әйткән:

— Мәхмүт эшһеҙ, ти кеше,
Йомаҡ оймаҡ, ти, эше.
Шулай булырын белеп,
Икелүк сыҡҡан, ти, теше.
Йомаҡ, йомаҡ, тигәс тә,
Йомаҡ оймаҡ, тигәс тә,
Һөткә туғып, табаға
Ҡоймаҡ ҡойоу түгел ул;
Майға манып, йомарлап,
Ҡоймаҡ ейеү * түгел ул.

Йомаҡ ойған һүҙ йыйыр,
Йөп йомғаҡтай йомарлап,
Һүҙ эсендә уй йомор.
Йомағым өйҙөм, ятмаңы,
Яуабын бирәү әйтмәне.
Инде үҙем әйтәйем,
Тыңлағандар ни тиер?

Ҡурғаштан да тосораҡ,
Ҡараңғы төндән дөмөрәк,
Ҡара төҫтән сөмөрәк —
Ил өҫтөндә бей булыр,
Аяҡлы йылан шул булыр;
Тау-таш күрмәҫ аяғын,
Өҫтөндә йөргәс, ил күрер.

Ауырыу баҫһа ил өҫтөн,
Һис моңаймаҫ, уф тимәҫ,
«Кил, тир, үлем! Кит!»— тимәҫ,
Көрәҙә булмай, кем булыр?!

Аяғын ҡыҫҡан итектән,
Бикләнеп ятҡан ситлектән,
Күрәҙә баҫҡан аймаҡтан,
Һаран байҙа тормаҡтан,
Көнсөгә замандаш булмаҡтан
Бүтән тарлыҡ ни булыр?!

Һөйгәнен дә ҡуш ҡылған,
Тап булғаның иш ҡылған,
Тормош ҡорор көс булған,
Бала булмай кем булыр?!
Ата-әсәһе балаһын,
Бала әсә, атаһын —
Бере лә һылыуын һайламаҫ,
Һөйөр, һүнмәҫ, ташламаҫ —
Ҡуш булмайса, өс булған,
Шунан бүтән кем булыр?!

Мәхмүт сәсәндең атаһы ла шунда булған, ти. Быны ишеткәс, атаһы:

— Минән көләһең, күҙемә күренмә! — тип ҡыуған.

Шунан халыҡ:

— Йомағың тап булманы!.. Атаңың мөхәббәте баланан һүнмәй тигәйнең, атаң ҡыуҙы бит! — тип көлгәндәр.

— Минең йомағым кәкүк менән атайыма ҡарап түгел, — тигән дә шул көндән һуң атаһынан айырылған. Шунан уны үҙ атаһы тотоп Себер ебәргән, ти.

## ҠОБАЙЫР МЕНӘН ЙОМАҠ ӘЙТЕШЕҮ

— Екән төбө ете айыры,
Ул ни булыр, Баҡшан таҙ?
Ҡамыш төбө ике айыры,
Ул ни булыр, Баҡшан таҙ?
Түңәрәк күлдә эт өрә,
Ул ни булыр, Баҡшан таҙ?
Ҡойроҡлолар — сибрандамаҫ,
Ул ни булыр, Баҡшан таҙ?
Ҡолаҡлылар — тыңламаҫ,
Ул ни булыр, Баҡшан таҙ?
Арҡалылар — аунамаҫ,
Ул ни булыр, Баҡшан таҙ?
Эйәклеләр — көйшәмәҫ,
Ул ни булыр, Баҡшан таҙ?
Арҡаларҙа ун ята,
Ул ни булыр, Баҡшан таҙ?

— Екән төбө ете айыры —
Ете ағайың булмаçмы?
Ҡамыш төбө ике айыры —
Атаң, инәң булмаçмы?
Түңәрәк күлдә эт өрә —
Күлдә баҡа булмаçмы?
Ҡойроҡлолар — сибрандамаç —
Ижау һабы булмаçмы?
Ҡолаҡлылар — тыңламаç —
Һыйыр тигән булмаçмы?
Арҡалылар — аунамаç,
Ул да һыйыр булмаçмы?
Эйәклеләр — көйшәмәç,
Унһы йылкы булмаçмы?
Арҡаларҙа ун яткан —
Бүре күҙе булмаçмы?!

## ИКЕ СӘСӘН

Беренсе сәсән:

Үҙеңә йомаҡ әйтәйем,
Тапһаң, улым итәйем,
Тапмаһаң, ҡолом итәйем:
Көндөҙ ҡуйым көтөрһөң,
Кисен йөнөн тетерһең,
Йоҡом ҡалды тимәçһең —
Көндөç серем итерһең.

Тимер, ҡорос булатты
Ҡамыр иткән бар микән?
Оҙон-оҙон, оҙон юл
Осона сыҡкан бар микән?

Арҡауылдың утынан
Ат утлаткан бар микән?
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан бар микән?

Ҡопан ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ ейгән бар микән?
Иҙел менән Яйыктың
Билен быуған бар микән?

Ҡош тырнағы теймәгән,
Күк ыласын типмәгән
Ҡош та бүтән бар микән?
Затынан ер ерәнгән,
Атынан ил ерәнгән
Ил эсендә бар микән?

Икенсе сәсән:

Һөйләһәң һүҙ оҙайыр,
Ҡолағың шәмдәй төҙәйер.
Кем булһа ла булайым,
Яуап биреп уҙайым:

Тимер, ҡорос булатты
Ҡамыр иткән — оҫталар.
Оҙон-оҙон, оҙон юл
Осона сыҡҡан — сауҙагәр.
Арҡауылдың утынан
Ат утлатҡан — каруансы.
Тибенгеһен тирләтеп,
Төндә юртҡан — юлаусы.

Ҡонан ҡуйҙың ҡойроғон
Яңғыҙ ейгән — һунарсы.
Иҙел менән Яйыҡтың
Билен быуған — балыҡсы.

Ҡош тырнағы теймәгән,
Күк ыласын типмәгән
Торомтай тигән бер ҡош бар.
Затынан ер ерәнгән,
Атынан ил ерәнгән
Хаин тигән йолҡош бар.

## ӘЙТЕШ ЙОМАҠТАР

1

— Ни нәмәлә ни нәмә юҡ?
— Атта мөгөҙ юҡ,
Һыйырҙа ял юҡ,
Ҡошта һөт юҡ,
Йомортҡала йөй юҡ.

2

— Оҙон-оҙон сауылдың
Осоңа-башына кем сығыр?
Сыбар ала көйгәнәк
Йомортҡаһын кем йыйыр?
Морал-морал моралған,
Тауға барып тәрәлгән;
Тау аҫтында татлы таш
Татлыһына кинәнгән,—
Ни икәнен кем белгән?

— Оҙон-оҙон сауылың
Юл була түгелме һуң?
Сыбар ала көйгәнәк
Күбәләк түгелме һуң?
Морал-морал моралып,
Төтөн урғылмаймы һуң?
Тау аҫтында татлы таш —
Ул мунса булмаймы һуң?

## БЕР ТИГӘС ТӘ НИ ЯМАН?

*I вариант*

— Бер тигәс тә ни яман?
— Беҙҙең өсөн бей яман [131].
— Ике тигәс, ни яман?
— Илһеҙ ҡалған ир яман.
— Өс тигәс тә ни яман?
— Өлгөһөҙ бескән тун яман.
— Дүрт тигәс тә ни яман?
— Түрәһеҙ үҫкән ил яман [132].
— Биш тигәс тә ни яман?
— Бишектәге йәш балаң
Илап ҡалһа,— шул яман.
— Алты тигәс, ни яман?
— Алты ағай-эне булып,
Берен дошманға бирһә,— шул яман [133].
— Ете тигәс, ни яман?
— Ете йәшкә еткәндә
Етем ҡалһаң,— шул яман [134].

— Һигеҙ тигәс, ни яман?
— Һикһән йәшлек ҡарт әсәң,
Талған күҙен секрәйтеп,
Ҡатҡан билен бөкрәйтеп,
Һыу ташыһа,— шул яман.
— Туғыҙ тигәс, ни яман?
— Туҡһан йәшлек ҡарт атаң,
Тумыртҡалай туҡылдап,
Ябалаҡтай ухылдап,
Утын киҫһә,— шул яман.
— Ун тигәс тә ни яман?
— Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,
Бер бите айҙай балҡыған,
Бер бите көндәй балҡыған,
Томбойоҡтай күкрәге
Күперен үҫеп ҡалҡыған —
Һайлап алған һылыуың
Илап ҡалһа,— шул яман.
— Ун бер тигәс, ни яман?
— Уҡ-һаҙаҡлы батыр ир,
Уҡталған аттан йығылып,
Аяҡ-ҡулы ҡаймығып,
Яуҙан ҡалһа,— шул яман.
— Ун ике тигәс, ни яман?
— Ут-һыуҙан ҡурҡыр ир яман.
— Ун өс тигәс, ни яман?
— Урынһыҙ әйткән һүҙ яман [135].
— Ун дүрт тигәс, ни яман?
— Ун дүрт йәшлек һылыуынды
Яттар һөйһә,— шул яман [136].

*II вариант*

— Бер тигәс тә ни яман?
— Беҙҙең өсөп бей яман.
— Ике тигәс, ни яман?
— Илһеҙ үҫкән ир яман.
— Өс тигәс тә ни яман?
— Өлгөһөҙ киҫкән тун яман...
— Алты тигәс, ни яман?
— Алтмыштағы атайың
Бөкөрәйеп утын киҫһә,— шул яман.
— Ете тигәс, ни яман?
— Еҫерҙе һукһәң,— шул яман.
— Һигеҙ тигәс, ни яман?
— Һомғолһоҙ үҫкән ил яман.
— Туғыҙ тигәс, ни яман?
— Тулғаҡ тотһа,— шул яман.

— Ун тигәс тә ни яман?
— Үлемдән ҡурҡҡан ир яман.
— Ун бер тигәс, ни яман?
— Ун бер тигәнең уйлап әйт,
Барыһын бергә йыйнап әйт:
Албаҫтылы ой яман,
Унан да бигерәк бей яман —
Ирҙе лә илдән биҙҙергән,
Өлгөһөҙ тун кейҙергән,
Атаңы ла тирләткән,
Етемде лә тиргәткән,
Илде тулғаҡ тотторған,
Күптән малын көттөргән
Яман да яман бей яман.

*III вариант*

— Бер тигәс тә ни яман?
— Бер тигәс, шул яман:
Берәүҙәрҙең берҙән-бер балаһы
Үлеп китһә,— шул яман да шул яман, ай.
— Ике тигәс, ни яман?
— Ике тигәс, шул яман:
Икенде намаҙы ҡазаға ҡалһа,—
Шул яман да шул яман, ай.
— Өс тигәс тә ни яман?
— Өс тигәс, шул яман:
Осар ҡоштоң балаһы
Бик талпынып оса алмаһа,—
Шул яман да шул яман, ай.
— Дүрт тигәс тә ни яман?
— Дүрт тигәс, шул яман:
Дүртойлөгә барғанда,
Ярыштауҙың буйында
Атың тайып йығылһа,—
Шул яман да шул яман, ай.
— Биш тигәс тә ни яман?
— Биш тигәс, шул яман:
Бишектәге йәш бала
Бик талпынып илаһа,—
Шул яман да шул яман, ай.
— Алты тигәс, ни яман?
— Алты тигәс, шул яман:
Алтай тауҙың буйында
Атың ятып ҡалһа,—
Шул яман да шул яман, ай.
— Ете тигәс, ни яман?
— Ете тигәс, шул яман:
Етәр ергә атың етә алмаһа,—
Шул яман да шул яман.

— Һигеҙ тигәс, ни яман?
— Һигеҙ тигәс, шул яман:
Һикһән йәшкә еткәс,
Һикереп атка менә алмаһаң,—
Шул яман, ай, шул яман.
— Туғыҙ тигәс, ни яман?
— Туғыҙ тигәс, шул яман:
Туҡһан йәшкә еткәс,
Туңҡайып ятһаң,—
Шул яман да шул яман.
— Йөҙ тигәс тә ни яман?
— Йөҙ тигәс ни, шул яман:
Йөҙгә етһәң, йөҙөң түбән әйләнер,
Башың гүргә бәйләнер.
Бына шул бигерәк тә яманы!

## ҺАРЫ БАЛДЫ КЕМ ЭСЕР?

— Ай һары бал, һары бал,
Һары балды кем эсер?
Ыҙғыштырыр кемдәрҙе,
Таныштырыр кемдәрҙе,
Күҙләндерер кемдәрҙе?
Һыны менән кем эсер,
Даны менән кем эсер?
— Ай һары бал, һары бал,
Ике яман бергә эсһә,
Ыҙғыштырыр һары бал;
Ике яҡшы бергә эсһә,
Таныштырыр һары бал;
Ике һуҡыр бергә эсһә,
Күҙләштерер һары бал.
Һыны менән бей эсер,
Даны менән ир эсер.

## ҺАРЫ БАЛ

— Әй һары бал, һары бал,
Һары балды кем эсер?
— Һанда-һаяҡ бей эсер,
Түрҙә ултырған түрә эсер [137].

— Ике татыу бергә килһә,
Һайраштырған һары бал;
Ике асыулы бергә килһә,
Ярапітырған һары бал;
Ике сәсән бергә килһә,
Ярыштырған һары бал;
Ике батыр бергә килһә,
Алыштырған һары бал;
Ике тиңтәк бергә килһә,
Һуғыштырған һары бал;
Ике һылыу бергә килһә,
Ҡауыштырған һары бал;
Ике һуҡыр бергә килһә,
Күҙләштергән һары бал;
Ике һүҙһеҙ бергә килһә,
Һөйләштергән һары бал [138].

— Эй һары бал, һары бал,
Һары балды кем эсер?
— Бал эсерлек хәле булһа,
Һары балды шул эсер [139].

## ҺАРЫ БАЛ

*Икенсе вариант*

— Эй һары бал, һары бал,
Һары балды кем эсер?
— Һанда-һаяҡ бей эсер,
Урманда сүрек һайлаған,
Боғау, бороз ҡайраған —
Шул эсер, зәү, шул эсер.
Түмәндә ағас ҡараған,
Баҫып боғау, бороз ҡайраған —
Һары балдың иң иркенен,
Шул эсер, ау, шул эсер!

— Ике яҡшы бергә эсһә,
Таныштырған һары бал.
Ике яман бергә эсһә,
Һуғыштырған һары бал.
Ике һуҡыр бергә эсһә,
Күҙләндергән һары бал.
Ирештергән һары бал;
Һуғыштырған һары бал,
Таныштырған һары бал.

# Тыуған ил тураһындағы ҡобайырҙар. Дидактик ҡобайырҙар. Әйтемдәр

# ТЫУҒАН ИЛ ТУРАҺЫНДАҒЫ ҠОБАЙЫРҘАР

## ЕТЕ ЫРЫУ

Борон заманда, иген сәсмәгән, бесән сапмаған, олатайҙар малдарына гел сәскә утлатып, үреш, ҡышлыҡ тибен әҙләп, ырыу-ырыу эркелешеп, ерһыу өсөн бер-бере менән талашып, Уралды төйәк, Ирәндекте тибен итеү өсөн, бер ырыу икенсе ырыуға көйөҫ-көйөҫ яу асып, бер-беренең йәйләүен баҫып, мал-тыуарын, бала-саға, ҡатын-ҡыҙын талап йәшәгән саҡта, аранан аҡыллылар сығып, яусылар араһында һүҙ асҡандар: «Аҙаматтар, ырыу башҡа булһа ла, бауыр бер бит. Ошо янъяллашып яулашыуҙы туҡтатҡанда ла арыу булмаҫмы икән?» — тигәндәр, ти.

Яусылар һөңгөһөн ергә сәнсеп, һөйләүсене ауыҙы менән йоторҙай булып, керпек ҡаҡмай тыңлап торғандар. Ҡайһылары ауыҙына үлән ҡабып, башын түбән эйеп, уйлап ултырғандар, ти. Һөйләүсенән һүҙ сыҡҡан, һүҙгә эйәреп һүҙ киткән. Бары ла аҡыллы һүҙен хуп күреп, яулашыуҙы ташларға булғас, үҙе баш, үҙе түш булып йөрөгән аҡһаҡалдар араһында шау-шыу киткән; үҙ-ара даулашып, һәр ҡайһы аҡһаҡал үҙе морон төрткән ханына барып кәңәш-төңәш иткән, ярҙам һораған, ти. Хандар ашыҡмаған, элеккесә йәшәй биргән. Аҡһаҡалдарҙың эше был яҡ менән дә сыҡмағас, аптырағандар. Һаман көслө ырыу көсһөҙ ырыуҙы талап, былай тороу ярамаҫ, бер ҙә булмаһа Мәскәү батшаһына барып ҡарайыҡ, тип һүҙ берләштергәндәр, ти.

Ерле ерендә кәңәш итеп, тағы ла ырыу аҡһаҡалдары бер ергә йыйылып һөйләшкәндәр. Аҙаҡ сиктә бөтә ырыу аҡһаҡалдары араһынан бөрйәндең Иҫке бей, ҡыпсаҡтың Ҡужаҡ, тамъяндың Шәғәле тигән кешеләрен батшаға ебәрергә булғандар, ти.

Был кешеләр Мәскәүгә барғас, батша, бик ҙур ҡунаҡтар килгән, тип ҡаршы алған, ти. Бөтә һанат, янаралдарын йыйған, аш-

һыу әҙерләп, ҡунаҡ иткән. Бары ла быларҙан һорашҡан, былар илдең әйткән йомоштарын әнәһенән-ебенә саҡлы һөйләгәс, батша:

— Берүтала миңә баш һалығыҙ, һеҙҙең ер-һыуығыҙҙы үҙ арағыҙға бүлеп бирҙерермен; тирә-яҡ хандар һеҙҙең ергә килеп аяҡ баҫа алмаҫ,— тигәс, аҡһаҡалдар үҙ-ара аҡыллашҡандар, ти. «Тимә бер * ханға тырым-тыраҡай яһаҡ-маҙар ташып йөрөгәнсе, бер ерҙә булыр. Илке-һалкы уйлап тормайыҡ, баш һалайыҡ»,— тип һөйләшкәндәр ҙә, батшаға инеп, үҙ теләктәрен әйткәндәр. Батша былар ҙың үҙҙәрен ант иттереп, бөтә илде баш һалдырырға һүҙ бирҙереп, ҙур туй яһаған; бөтә һарайҙарын күрһәткән, бер нисә көн ҡунаҡ итеп, барына ла ҙур бүләк, тарханлыҡ биргән. Ер-һыу сиктәрен билдәләп, ырыу ыҙғыштарын бөтөрөргә кеше ебәрмәк булған. Шунан илселәр ҡайтып киткән.

Илселәр ҡайтып, ип-һап итеп, халыҡ менән һөйләшеп бөтөүгә, батша кешеләре лә килеп еткән, ти. Батша ебәргән нәсәлниктәр килгәс, ат-хат еткән ерҙән ете ырыу халҡын Тарауыл аҡланына [140] йыйғандар, ҙур туй яһағандар. Туйҙа ырыу-ырыу яҡлашып, батырҙар көрәшкән, сәсәндәр әйтем әйтешеп, ҡурайсылар ҡурай уйнаған, йырсылар йырлаған. Аҡһаҡалдар, байҙар ат саптырған, һунарсылар ат өҫтөндә уйнап, сәпкә атышҡан. Бөтәһе белгәненсә уйын-көлкө яһап, көн уҙғарғандар, ти. Йыйынға килгән ете ырыу эсендә быға саҡлы Уралды күрмәгән, буйына аяҡ баҫмаған ырыуҙар ҙа булған. Уларҙың йырсы, ҡурайсылары, сәсәндәре Уралды кәмһетеп, Урал өсөн ыҙғышып йөрөгән ырыуҙарҙан көлөп йырлағандар:

Урал да ғына Урал, тип әйтәһегеҙ,
Уралығыҙ ҡыҙырым сауҡа икән.
Күрмәгән дә саҡта ла, ай, зауҡы икән,
Күрҙең иһә күңел дә ҡайта икән.

Урал да ғына Урал, тип әйтәһегеҙ,
Уралығыҙ ҡаялы тау икән.
Батшаларға етеп, ай, даулашҡан,
Ҡан-яу һалған Урал да шул микән?

Был ялан яҡ йырсыларына ҡаршы, тау башҡорттары гөжләтеп ҡурай уйнап, йырсылары ҡушлап йырлаған:

Урал ғына буйы ла бик үк йәмле
Аҡ тирмәләр ҡороп та йәйләргә.
Биттәренә ултырып та ҡурай юндым
Уралымды маҡтап та көйләргә.

Урал буйҡайҙары ла сауҡа-сауҡа,
Япраҡ яра яҙын бер саҡта.
Һандуғастар килә, моңһоу тула,
Ҡайғыларың бөтә лә шул саҡта.

Урал буйҡайҙары ла армыт-армыт,
Бар йылғаға әсә лә булған ул.

Шылтырап аҡҡан һыуы буйҙарына
Ырыуҙарын туплап йыйған ул.

Бынан һуң инде сәсәндәр һүҙ башлаған.
Ялан сәсәндәре, Уралды яманлап, шулай әйткәндәр:

Урал тигән данлы тау —
Биш ырыуҙы ыҙғытып [141],
Яу астырған шаулы тау.
Йылына ике түлләгән,
Аҡҡоштай һылыу ағартып,
Йөнө менән ой теккән; [142]
Хоҙанан шәрә тәнеңдә
Йылытырға түл йәйеп,
Тиреһенән туп теккән;
Табын-табын туйында
Ҡунағыңды һыйларға
Тәкәләрен ит иткән;
Берәүгә ҡарыу итмәгән,
Йыуашлыкта бер байғош—
Ҡуй-һарыҡты быуыусы
Бүрегә ышыҡ булған тау.
Бер туғандай йоп булып,
Күкрәген һыҡтатып,
Сәскә үбеп, бал йыйып,
Илен балға туйҙырып,
Донъя көткән бал ҡортон
Ҡырым-сиреү ҡылыусы
Айыуға тойәк булған тау.
Ат өҫтөндә уйнарҙай
Батырына түтә юл,
Битенән һукмаҡ һуҙҙырмай,
Ҡырҡыу тояҡ аҡ кейек —
Ҡоралай тигән йылғырҙы
Батырынан көлдөрөп,
Ҡая үрсетеп, маһайып,
Бөтә ҡош-ҡорт, йыртҡыска
Тойәк булған Уралтау.
Яҙҙың һөйөнсө оранын,
Ҡар һыуында сәскә атҡан,
Яҙҙың төҫөн балҡытҡан,
Һары ҡуҙәнәк, күк ҡайпыу,
Умырзая сәскәһен
Йылы ҡояшҡа ҡотайтмай,
Ҡыҙарып сыҡҡан ҡояшын
Ышыҡлатып ҡаянан,
Үрсетмәгән һалҡын тау.
Дөйәгә йәндәй аш булған
Юшаны юҡ Уралтау.

Әсеһерәгән малына
Татыры юҡ Уралтау.
Ҡош ҡустәре төшөрлөк
Мөлдөрәп торған алдырҙай,
Өҫтөндә сыр-сыу йөҙөшөп,
Ҡарасай ҡаҙҙар түл йәйгән,
Тирә-яғы тәңкәләй
Ҡырсын менән биҙәлгән,
Һаҙмыттарын һылыулап,
Екәп, ҡуға ураған,
Заятүләккә йәр булған
Һыуһылыуын[143] үҫтергән,
Сыҫҡан һыртлы ҡола мал
Батырына ат итеп,
Өйөр-өйөр түлләткән
Аслы күлдәй[144] күле юҡ,
Шып-шыр урман Уралтау.
Таңдың еләҫ елеҙән
Сәскәһен ҡурсыр Уралтау.

Тау сәсәндәре, үҙҙәренең йырсыларын ҡеүәтләп, Уралды маҡтаған:

Илде туфандай ҡаплаған,
Ҡара һыуҙан әрсегән;
Дейеү-пәрей үҫтереп,
Ерҙең сәскә, ағасын,
Ялан, Урал буйҙарын
Һыу аҫтында тынсытып,
Зар илаткан Шүлгәнгә,
Аҡбуҙ толпарын менеп,
Диңгеҙ йөҙөп, яу асып
Килгән Урал батырҙың
Буйлап үткән һуҡмағы —
Беҙҙең данлы Уралтау.
Ете ырыуҙың атаһы
Шунда ырыу йәйҙереп,
Барына ата булған тау.
Иҙел, Нөгөш, Яйыкты,
Үҙәп, Әйек, Ҡаҫмартты —
Һауыны еткән елендәй,
Барын берҙәй ағыҙып,
Балаһын күреп һыҡыранған
Әсәләй һуғарып ил иткән —
Барына әсә булған тау.
Урал—илгә әсә ул,
Урал—илгә ата ул.
Уралға тел тейҙергән,
Ата-әсәһен кәмһеткән
Тыума бала булыр ул.

Ата ата булмаһа,
Батырға өлгө булырмы?
Әсә әсә булмаһа,
Һылыуға әсә булырмы?
Атаһыҙҙы ул итеп,
Илдең ҡонон белерме?
Әсәһеҙҙе ҡыҙ итеп,
Батырға әсә булырмы?
Атаһыҙ үҫкән ук юнмаҫ,
Илен ҡан-яу баҫҡанда,
Әсәһеҙ үҫкән йөй текмәҫ,
Иле яуға киткәндә.

Ана шулай ҡара-ҡаршы йырлашҡан, әйтешкәндән һуң, бөтә ете ырыу ҙа Урал буйын төйәк, ялан ерҙе йәйләү итергә һүҙ ҡуйышып таралышҡан. Ете ырыуҙы татыулаштырған туйҙа ҡурайсылар уйнаған, йырсылар йырлаған көйҙө «Ете ырыу — семьрод» көйө тип йөрөтөр булғандар.

## АЙ УРАЛЫМ, УРАЛЫМ

Ай Уралым, Уралым,
Уралып ятҡан Уралым,
Илгә дошман килгәндә,
Ышыҡ булған Уралым,
Ил һаҡлаған ҡоралым.

Ҡайнар-ҡайнар ҡабарып,
Ҡалҡып килгән болоттай,
Күҙ күремдән күренеп,
Ҙур япраҡлы ағастай,
Күгәреп ятҡан Уралтау.

Ботағы алтын алҡалай,
Япрағы көмөш тәңкәләй,
Һыны һылыу егеттәй,
Тамыры ташҡа ереккән,
Ҡарағай, имән, ҡайыны —
Бары ла һөйгән Уралтау.

Сылтырап аҡҡан шишмәнән
Һирпеп һыуың алғанда,
Бөтә ғәмен онотоп,
Һыңыңа күҙ һалғанда,
Таң сулпаны ҡалҡҡанда,
Һылыуың маҡтап йырлаған,

Таң һыҙылып атҡанда,
Ҡошо маҡтап һайраған,
Ҡыҙы ла һөйгән Уралтау,
Ҡошо ла һөйгән Уралтау.
Ҡүбәләген, бал ҡортон
Үҙ буйына арбаған,
Сал бөркөтө, ҡыйғыры
Ҡаянда төйәк һайлаған,—
Хоҙай бирер йәннәттән
Туғайы һылыу Уралтау.

Ай Уралым, Уралым,
Ҡуш имсәктәй ҡабарып,
Ҡалҡып торған Уралым;
Бөтә данды үҙеңә
Йыйып торған Уралым.
Дүрт аяҡлы януарға
Төйәк булған Уралым;
Яусыл булған атама
Ата булған Уралым;
Юнсел булған әсәмә
Әсә булған Уралым;
Икеһен дә йоп ҡылып,
Тул йәйҙергән Уралым;
Аҫыл ағас үҫтереп,
Ҡош үрсеткән Уралым;
Һылыу ҡыҙҙай биҙәнеп,
Дошман күҙен ҡыҙҙырып,
Яу астырған Уралым;
Атамды яу саптырып,
Әсәмде тол ҡалдырып,
Ике күҙен йәшләтеп,
Ҡәйнә булған Уралым!
Сыңғыр-сыңғыр сыңраған
Йылҡыһы күп Уралтау,
Мөңөр-мөңөр мөңрәгән
Һыйыры күп Уралтау;
Кәкере ҡойроҡ, йылтыр күҙ
Бүреһе күп Уралтау,
Ҡыҫҡа ҡойроҡ, шеш ҡолаҡ
Ҡуяны күп Уралтау;
Майлап ҡуйған ҡайыштай,
Йыланы күп Уралтау,
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Уралтау,
Ҡыҙ балалай биҙәнгән,
Төлкөһө күп Уралтау,
Ояларға урыны мул,
Ҡоштары күп Уралтау;

Балығы аттай дулаған,
Бакаһы ҡуйҙай һулаған,
Һыуы ярына һыймаған
Йылғаһы күп Уралтау.

Балтырғаны беләктәй,
Һарынаһы ҡурай еләктәй,
Туғайҙары түшәктәй,
Талы, муйылы ҡурсаҡтай,
Сәскәләре мең төҫлө,
Иҫертерлек хуш еҫле;
Йылҡылары сыңғырап,
Һыйырҙары мөң(ө)рәп,
Ҡуй-һарығы ҡуҙырап,
Көтөү-көтөү йөрөр ер;
Ятып ҡалған бер бәрәс
Йоҙ ҡуй булып үҫер ер,
Тороп ҡалған яңғыҙ тай
Өйөр булып йөрөр ер;
Атам кейәү булған ер,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер!
Ай Уралым, Уралым,
Барыһа ата Уралым,
Ай Уралым, Уралым,
Барына инә Уралым.

Болоттарға баш һуҙған
Армыт-армыт * Уралтау,
Ғәйебе бар януарға
Һунарсың күп Уралтау.
Һаба-һауыт тултырып,
Аҙаматтар ултырып,
Ҡыҙ-ҡырҡындар ҡотороп,
Уйнап көлгән Уралтау.
Ҡуйылығы ҡаймаҡтай,
Тәмлелеге һарҡыттай,
Һаба-һаба ҡымыҙы,
Ғыж-ғыж килгән ҡурайы,
Сың-сың килгән ҡумыҙы,
Йыр йырлатҡан Уралтау.
Ябырылып яу килгәндең
Һөйәге ҡалған Уралтау,
Айбарланған батырҙарҙың
Төйәге булған Уралтау.
Биленә баҫып ҡараһаң,
Бар еребеҙ күренә,

Башына баҫып ҡараһаң,
Бар илебеҙ күренә.
Ай Уралтау, Уралтау,
Ай Уралтау, Уралтау.

## ИҘЕЛ ЕР

Әй Иҙел ер, Иҙел ер,
Әй Иҙел ер, Иҙел ер —
Әсәм килен булған ер,
Атам кейәү булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Балдай һыуын эскән ер,
Ас тамағым туйған ер,
Шунда ғүмер һоргән ер.

Әй Иҙел ер, Иҙел ер,
Әй Иҙел ер, Иҙел ер.
Иҙел ҡайҙа, ил шунда,
Урал ҡайҙа, көн шунда,
Яйыҡ ҡайҙа, яй шунда,
Һаҡмар ҡайҙа, һан шунда —
Ата-бабам төйәге,
Шунда улар һөйәге,
Тереләр — ил терәге.

Әй Иҙел ер, Иҙел ер,
Әй Иҙел ер, Иҙел ер!
Иҙел ер ул — йорт-ил ул,
Йорт-илдәре — ҡот ер ул,
Йорт-илдәре — ҡот ер ул.
Иҙел — илгә әсә ул,
Урал — илгә ата ул,
Урал — илгә ата ул.
Ата-әсәһен һаҡлаған —
Йортон-илен һаҡлаған,
Дошман аяҡ баҫмаған,
Дошман аяҡ баҫҡанда,
Йөрор урын тапмаған.

Әй Иҙел ер, Иҙел ер,
Әй Иҙел ер, Иҙел ер.
Иҙел булһа, илең бар,
Илең булһа, көнөң бар,
Көнөң булһа, юнең бар,
Юнең булһа, ереҥ бар,

Ерең булһа, халкың бар,
Халкың булһа, даңкың бар.
Әй Иҙел ер, Иҙел ер,
Әй Иҙел ер, Иҙел ер.

## УРАЛ ТИГӘН ИЛЕМ БАР

Баллы умарта күрә алмай,
Аптырап йөрөр айыулы;
Төҫөн кояш ашаған
Аҡһыл-саптар төлкөлө;
Боҫор урын тапмаған,
Ең осона етмәгән
Ҡыҙыл сикә ҡуянлы;
Ҡуныр талға зарыккан
Анда-һанда ҡош-ҡортло;
Яңғыҙ һыуыры саңкылдап,
Типһененә саң биргән,
Ҡыҙарып яткан ком ерле —
Бындай түгел Уралым.

Шыр урманда маһайып,
Лап-лоп баҫыр айыулы;
Һылыу кыҙҙай биҙәнгән
Ҡара бауыр төлкөлө;
Кемуҙарҙан һайраған,
Сыр-сыу килгән ҡош-ҡортло;
Һарайҙағы хан һымаҡ,
Эре йәшәр бөркөтлө;
Алдынан ҡош уҙғармаҫ
Күк ҡарсыға, ҡыйғырлы;
Ҡарасай, өйрәк көлөшкән
Ҡамышлы күл, йылғалы;
Йырсы менән ярышып,
Моцон бөркөр ҡурайлы;
Тулы ҡойроҡ, ялбыр ял,
Өйөр һаҡлар айғырлы —
Бына шундай Уралым.

Урал тигән илем бар,
Илем барҙа көнөм бар.

## УРАЛЫП ЯТҠАН УРАЛДА

Уралып ятҡан Уралда
Болот кеүек тауҙар бар;
Айыу, төлкө, бүреһе...
Теләгән бер януар бар.
Сөйәм тиһәң, шоңҡар бар,
Менәм тиһәң, толпар бар.
Тәрән-тәрән күле бар,
Борма-борма юлы бар;
Ҡоштарына — ағасы,
Күбәләккә гөлө бар.
Һыуында балығы бар,
Дарыуға һөлөгө бар.
(Балығы ҡаба смһеҙ ҙә,
Ҡармаҡ һалһа юнһеҙ ҙә.)
Уралтауҙың ҡуйынында
Алтын да, баҡыр ҙа бар;
Уралтауҙың буйында
Байы ла, фәкир ҙә бар,
Байығам тип тир түккән
[Һис маңдымаç] бахыр ҙа бар.
Уралтауҙың аçтында
Тимер ҙә, көмөш тә бар;
Уралтауҙың өçтөндә
Һуғыш та, үлеш тә бар.
Уралып ятҡан Уралда,
Әле алай һөйләшеп,
Әле былай һөйләшеп,
Күгәрсендәй гөрләшеп,
Икәү-өсәү серләшеп,
Сыйырсыҡтай эркелешеп,
Ҡара ҡаҙҙай теҙелешеп,
Иртән ҡолон бәйләгән,
Кусә йөрөп йәйләгән
Һылыу-һылыу ҡыҙҙар бар.

Уралып ятҡан Уралда,
Көрәгәһен алға алып,
Ҡорҙаштарын янға алып,
Йырсынан йыр йырлатып,
Көйсөнән көй көйләтеп,
Сәсәндән һүҙ һөйләтеп,
Эсер сәйен һыуытып,

Бар донъяһын онотоп,
Йыйылып ултырыр ҡарттар бар.

Уралып ятҡан Уралда,
Аҡбуҙаттай ат менеп,
Ылаcындай тиҙ елеп,
Уҡ-һаҙағын ҡулға алып,
Кәрәк әйберен юлға алып,
Ил-йорт менән хушлашып,
Яуға ҡаршы яу сабар
Батыр-батыр ирҙәр бар.

## АЙ УРАЛТАУ, УРАЛТАУ

Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән данлы тау,
Беҙгә әсә булған тау.
Уралын биргән батырҙар
Уралға ул булырмы?
Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән бейек тау,
Беҙгә төйәк булған тау.
Битең монар баҫҡанда,
Һөтө булған Иҙелен
Улын һуйған дошманы
Йәйрәп эсеп ятҡанда;
Бөҙрә сәстәй урманын
Дошман ҡырҡып ятҡанда;
Еләҫ таңын йылытып,
Сығып килгән ҡояшта
Дошман йылынып ятҡанда;
Һылыу ҡыҙҙай түшенә
Дошман завод һалғанда,
Түҙеп торһа батырҙар,
Яуға сыҡмай тик ҡалһа,
Уға бала булырмы?
Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән данлы тау —
Тыуып-үҫкән илебеҙ.
Ил улының күкрәге
Һөттән дә аҡ булыр ул;
Йылғыр аҡҡан Иҙелдән,
Тиңәштерһәң, пактыр ул.
Ил дошманын күргәндә,
Күңеленә асыу тулыр,

Ҡаршы яуға сыҡҡанда,
Ҡурҡыу алмаҫ йөрәген,
Ҡоростан да ныҡ булыр.

Ай Уралтау, Уралтау,
Урал тигән данлы тау,
Илгә төйәк булған тау,
Күп яуҙарҙа ҡан менән
Битен йыуған Уралтау,
Күп батырҙар буйында
Ат уйнатҡан Уралтау,
Йырсыһын да үҫтергән,
Батырын да үҫтергән;
Батырға йәр булырҙай
Ҡыҙҙарын да үҫтергән;
Ҡурайын да уйнатҡан,
Ҡыҙҙарынан йырлатҡан;
Әсәләрҙән ҡарғатҡан,
Күҙ йәшенән етемдең
Мансып ҡарғыш яҙҙырған
Бик күптәнге Уралтау,—
Баяр заводын һалһа,
Тархан йәйләүен ҡорһа,
Бей бисәһе уйнаһа,
Беҙгә төйәк булмаҫ ул.
Күгәреп ятҡан киң Урал
Малыңа үреш булмаҫ ул,
Алпаҡлаған айыуы,
Бесәй күҙле бүреһе,
Тауҙа уйнаған төлкөһө,
Күлендәге шәшкеһе,
Урмандағы ҡош-ҡорто,
Һыуындағы балығы
Беҙгә һунар булмаҫ ул.
Бер ҡоластай ҡәберлек,
Ул да тыныс ҡалмаҫ ул.
Өҫтөн һөрөр ер ҡылыр,
Һиве эшләтеп ҡол ҡылыр.

Бығаса уңмаҫ яуҙарҙы [145]
Бер хоҙанан тимәгеҙ;
Яуҙы, илде муйырған —
Арага дошман ингәне,
Илде ятҡа биргәне;
Бер туғандай таҡ булып,
Яуға атын менгәндең
Йөрәген дошман бүлгәне;
Сер һөйләгән дуҫтарың,
Түшәктәге һөйгәнең,

Бер имсәктәш туғаның
Ситкә серең биргәне;
Илде дошман алыуы —
Мөлдөрәгән күҙ менән,
Алданылған иш менән,
Япраҡ ҡойған тирәктәй,
Гөлө төшкән һабаҡтай,
Батырҙың яңғыҙ ҡалғаны.

Алпанлаған айыулы,
Тупаҡ ҡойроҡ бүреле,
Сатаҡ мөгөҙ боланлы,
Ыласын, ҡыйғыр, бөркөтлө,
Ирәмәл, Айтас һөтөндәй,
Иҙел Яйыҡ, Һаҡмарлы,
Йылҡылары юшаған,
Һыйыр, һарыҡ көйшәгән,
Ырыу-ырыу эркелеп,
Йәйләүҙәре йәйелгән,
Батырҙары ил зарын
Ҡурайында уйнаған,
Һылыуҙары йырлаған,
Төрлө моңға мансылып,
Ҡошо-ние һайраған
Урал тигән ерем бар,
Урал тигән илем бар.

Батыр булып ат менһәм,
Һыу-сүл юлымды быумаç,
Юлыма үлән үçмәç,
Маяҡһыҙ ҙа яҙлыҡмаç —
Ҡуңыр буға юлы бар[146].
Атка мендем, алла тип,
Әҙер торам, яуға тип,
Ҡылысынан ҡан тамған,
Һайҙағынан ыу тамған,
Ҡатындарҙы тол иткән,
Балаларҙы ҡол иткән,
Йорт-ерҙәрҙе көл иткән
Дошманымда ҡоном бар.

Ай Уралым, Уралым,
Батырын да тыуҙырҙың,
Һылыуын да тыуҙырҙың.
Батыр батыр булыр ул
Яуға һаҙаҡ атҡанда,
Дошманына ил бирмәç,
Ҡыҙыл ҡанға батһа ла!

Һылыу һылыу булыр ул,
Батырға әсә булһа,
Яуға киткән улына
Аҡтыҡ атын бирһә ул!
Түрә булып ил һатһа,
Уралға ул булырмы?
Табын йыйып, аш ашап,
Ҡоҙа йыйып, туй яһап,
Яуҙан ҡасҡан батырҙы
Һөйгән һылыу булырмы?
Иҙеленән һыу эскән,
Уралында ҡыҙ ҡосҡан,
Бала үҫтереп, көн иткән,
Яуға үҙе бармаһа,
Барғанға уң бирмәһә,
Уп-туп * килеп арала,
Айбанһа дошман яуынан,
Ытырғанһа иленән,
Ил батыры булырмы?
Уралға ул булырмы?
Урал әсә булырмы?

## ИЛ ТИГӘНДЕҢ КЕМЕ ЮҠ

Ил тигәндең кеме юҡ,
Кеме юҡ та, ние юҡ:
Ҡарты ла бар был илдең,
Йәше лә бар был илдең;
Туғы ла бар был илдең,
Асы ла бар был илдең.
«Бир»ҙән бүтәнде белмәгән
Бейе лә бар был илдең;
Кешенең зарын ағыҙған
Йыры ла бар был илдең,
Көйө лә бар был илдең.
Ҡыҙы ла бар был илдең,
Наҙы ла бар был илдең;
Ҡыҙ алам тип, туҡмалған
Таҙы ла бар был илдең,
Көсө лә бар был илдең,
Күсе лә бар был илдең;
Барымтаға килеүсегә
Үсе лә бар был илдең.

Урманы күп, тауы күп,
Ере алтын был илдең;
Йылғаһы күп, күле күп,
Һыуы һалҡын был илдең.
Һылыуы бар был илдең,
Матуры бар был илдең;
Йылғаһынан һыулаған,
Тупрағында аунаған,
Урал буйын буйлаған,
Ат өҫтөндә уйнаған,
Ҡаяла башаҡ ҡайраған,
Ҡыҙҙың һылыуын һайлаған,
Тыуған ерен һаҡлаған,
Ир намыҫын һатмаған
Батыры бар был илдең.

# ДИДАКТИК ҠОБАЙЫРҘАР (ӘЙТЕМДӘР)

## ИШЕТ БЫНЫ ҠАРТЫҢДАН

Ишет быны ҡартыңдан,
Һүҙ булмаһын артымдан.
Белгәнемде әйтмәһәм,
Йортҡа әшкәр итмәһәм,
Илдең күңеле ҡалыр, тим,
Илдең хәтере ҡалыр, тим,
Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт,
Боронғоларҙан аманат,
Уға итһәгеҙ хыянат,
Һеҙгә булыр яманат.

## БЕЙЕК ТАУҘЫҢ ҮЛГӘНЕ...

Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем,
Тыңлағыҙ һеҙ, йәмәғәт.
Минең әйткән һүҙҙәрем
Боронғоларҙан аманат.
Итһәгеҙ уға хыянат,
Һеҙгә булыр яманат.

Бейек тауҙың үлгәне —
Башын моңар алғаны;
Ай менән көндөң үлгәне —
Тоңйорап байып барғаны;
Ҡара ерҙең үлгәне —
Ҡар аҫтында ҡалғаны;

Ир-егеттең үлгәне —
Илен дошман алғаны.

Яйыҡ китһә, юл китер,
Иҙел китһә, ил китер,
Илең китһә, ни ҡалыр?
Яңғыҙ яман бей ҡалыр,
Ике күҙеңә саң һалыр.
Ханға менер ат кәрәк тип,
Һайлап яҡшы атты алыр;
Унын менән туҡрамаҫ,
Үҙләштерәм ятты тип [147],
Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,
Бер бите айҙай балҡыған,
Бер бите көндәй яҡтырған,
Томбойоҡтай күкрәге
Күпереп үҫеп ҡалҡыған
Йәнең һөйгән йәрҙе алыр [148].

Ханға бирһәң ҡулыңды,
Ханға түшәк йәйерһең;
Төшһәң менгән атыңдан,
Ханға башың эйерһең;
Ҡылысың тыҡһаң ҡынына,
Хандың ҡоло булырһың;
Яу килгәндә өнһөҙ булһаң,
Хандың ҡоло булырһың.

Ойошоп ятҡан ҙур йортто
Өрккән ҡуйҙай итер хан;
Арыҫландай ирҙәрҙе
Йыуаш ҡуйҙай итер хан.
Илеңде алыр ҡулыңдан,
Ғәскәр алыр улыңдан;
Тартып алыр малыңды,
Иҫәпкә алыр барыңды;
Боғаҙламай эсер ҡаныңды,
Үлтермәй алыр йәнеңде, ау,
Үлтермәй алыр йәнеңде.

Шоңҡар һөйгән һунарсы
Ҡош сөйҙөрмәй сыҙармы?
Ирмен тигән ир-егет
Ат уйнатмай тынырмы?
Урал тигән ере бар,
Күҙ нурындай иле бар
Батыр башын эйерме?

Ирмен тигән ир кеше
Бурһыҡтай боҫоп ятмаҫ ул;
Күңгә күҙе сағылған
Ябалаҡтай ҡасмаҫ ул.
Яу килгәнен күргәндә,
Бәпкә йөнөн ҡалҡытып,
Еләҫ иҫкән елдә лә
Шаулап торған уҫаҡтай,
Йөрәктәре ҡалтырап,
Ништәргә лә аптырап,
Яуҙан тороп ҡалмаҫ ул,
Яуҙан ситтә ҡалмаҫ ул.

Илдең нурлы булғаны —
Илдә батыр тыуғаны;
Илдең моңло булғаны —
Дошман килеп тулғаны.
Айбарланған батырҙар
Яуға барыр яу булып,
Тигеҙ ерҙә тау булып;
Сергеһенән ҡан үтмәй,
Батыр булып дан тотмай,
Аттан эйәр алмаҫтар,
Ҡынға ҡылыс һалмаҫтар, ау,
Ҡынға ҡылыс һалмаҫтар.

## ИЛ ҠӘҘЕРЕ – ИР ҠӘҘЕРЕ

Күлдә йөрөгән аҡ өйрәк
Ҡыр ҡәҙерен белмәҫ.
Ҡырҙа йөрөгән дуғаҙаҡ
Һыу ҡәҙерен белмәҫ.

Тинтәк аҡыл — ямандыр:
Ил ҡәҙерен белмәҫ.
Тинтәк ҡатын — ямандыр:
Ир ҡәҙерен белмәҫ.
Күсеп-ҡунып йөрөмәгән
Ер ҡәҙерен белмәҫ;
Күсһә, ҡуна белмәгән,
Ҡунһа, күсә белмәгән,
Йорт ҡәҙерен белмәҫ.

* * *

Ир ҡәҙерен белгәндең
Башы ҡәҙерле булыр.
Ир ҡәҙерен белгәндең
Ашы ҡәҙерле булыр.
Мал ҡәҙерен белгәндең
Ҡото артыр,
Ата-инә ҡәҙерен белгәндең
Ырыҫы артыр.

* * *

Иле типкән — ир булмаҫ,
Ташлап киткән — ер булмаҫ.
Көтөү типкән — мал булмаҫ,
Күңел типкән — йәр булмаҫ.

## БЫЛ ДОНЪЯЛА ТИҢЛЕК ЮҠ

Йырла тиһәң, йырлайым,
Йырлаусың килде алдыңа,
Югерек аттай йөрәкһеп,
Ул ултыра алдында.
Йырла тиһәң, йырлайым,
Бер аҙырак йырым бар, ау,
Бер аҙырак йырым бар.

Аҫыл бөркөт сал булыр,
Мәжлес күрке бал булыр;
Өҫтө-башты бөтәйткән,
Аҙамат итеп ҡотайткан
Әҙәм күрке мал булыр,
Мал булыр, ау, мал булыр.

Күтәреп яткан күк арка,
Мал төбәге туғайың
Аҙыра * ҡалыр малдан һуң;
Биҙәрләнгән байбисәң
Ҡурайҙай ҡалыр һулған һуң;
Өҫтөңдәге ҡамҡа туның
Сепрәк булыр туҙған һуң;
Түше сыбар бала ҡош
Өндәүгә килмәҫ емдән һуң;

Иркәләнгән байбисәң
Түшәк һалмаç бөлгән һуң.

Ҡуралы буйы ҡыу татыр
Ҡурай булмаç тимәгеҙ;
Ҡыу сыбыкка таянғанға,
Әтлек менән туйынғанға
Дәүләт ҡунмаç тимәгеҙ;
Йыуан ҡорһаҡ байҙарҙан
Ырыç китмәç тимәгеҙ.
Етем, етем тимәгеҙ,
Етем хаҡын еймәгеҙ.
Етем хаҡын ейһәгеҙ,
Ҡараңғы гүр эсендә
Тик ятырбыҙ тимәгеҙ! [149]

Ярлы булыр егеткә
Ҡазалы мал тап булыр;
Яңғыҙ булыр егеткә
Ҡыçыр ҡатын тап булыр.
Мал ҡәҙерен белмәгәнгә
Ҡаза бирер язаһын,
Ауырыу алыр маҙаһын.
Яҙ кейерен ҡыш кейеп,
Бай алдында баш эйеп,
Ярлы нисек байыһын?
Рәхәт көндәр булмаçмы тип,
Беҙҙең эштәр уңмаçмы тип,
Баçып йөрөр ҡайғыһын, ау,
Баçып йөрөр ҡайғыһын [150].
Ярлылыҡ, һиңә ни әйтәйем,
Йәндәй дуçты ят иттең;
Ҡартлыҡ, һиңә ни әйтәйем,
Байбисәмде ят иттең,

Айҙың моңло булғаны —
Битен монар алғаны;
Көндөң моңло булғаны —
Битен болот алғаны;
Битең ҡара булғаны,
Өçтөңдөң ҡаралғаны —
Фәкирлектең билдәһе;
Ауыҙыңа абау * ингәне —
Ҡартлығыңдың билдәһе.
Барын әйт тә берен әйт,
Байман тапҡан түрәне әйт,

Толпар тапкан бейәне әйт,
Батыр тапкан инәне әйт.
Тик тиң өсөн, тиң өсөн,
Һыуға төштөм тал өсөн,
Тирәк киҫтем һал өсөн,
Диңгеҙ кистем мал өсөн.
Илгә сыкһам уйландым,
Йортка ҡайтһам хурландым,
Башҡаларҙан кәм өсөн, ау,
Башҡаларҙан кәм өсөн.

Бөҙрә, бөҙрә, бөҙрә тал
Яланғас ҡалыр, йәй үткәс;
Бай, бай ирҙәр, бай ирҙәр
Мөлдөрәп ҡалыр, мал бөткәс;
Бол-бол өйрәк, бол өйрәк
Болдорап осор күлдән һуң,
Күл яғаһы күк тирәк,
Күк тирәктең һыны юҡ,
Башындағы гөлдән һуң...
Байҙың күрке — байбисә,
Байбисәнең һыны юҡ,
Иренән дәүләт киткән һуң.
Бөтөн йорттоң һыны юҡ,
Илдә дәүләт бөткән һуң, ау,
Илдә дәүләт бөткән һуң.

Был донъяла киңлек юҡ,
Был хоҙайҙа тиңлек юҡ.

## ЙЫРАУ ҺҮҘЕ

Йырла тиһәң, йырлайым,
Йырау бер килде алдыңа,
Йөрөк аттай уңданып,
Ярылған моҙҙай *, көңрәнеп *;
Йырла тиһәң, йырлайым,
Бер аҙырак йырым бар,
Ҡорос һалып тыңла, ағалар.

***

Үҙән күрке тал булыр [151],
Айғыр күрке ял булыр.

Ышанмаһаң, талын киç —
Бер йылмағай [152] сай * булыр;
Ялын ҡырҡһаң айғырҙың,
Бер алама тай булыр.
Өҫтө-башты бөтәйткән,
Аҙамат итеп ҡотайткан
Әҙәм күрке мал булыр [153].
Батыр ҙа булған егеттең
Маңлайында баҡ булыр;
Сәсән дә булған егеттең
Күкрәгендә хат булыр [154].
Хан тәхеттән төшкән һуң,
Ҡулдан бейлек киткән һуң,
Һарауыслаған өй ҡороп,
Арыҫландай аҡырып,
Алтын тәхет өҫтөндә
Арҙаҡлаған аҡ тәне
Ҡара ерҙең аҫтында
Ҡорт-ҡуңыҙға ем булыр [155].

* * *

Атҡыҙай йөрөк уҡ булмаҫ,
Тейһә лә, күбә боҙалмаҫ;
Торомтайҙан йөрөк ҡош булмаҫ,
Турғай ҙа тибеп, ҡаҙ алмаҫ;
Бапһыҙ * булған аҡ толпар
Сапһа ла, бауырын яҙалмаҫ;
Тикһеҙҙән * тыуған тик * батыр
Яуға һөңгө һуҙалмаҫ;
Ҡарҡынлаған ҡашҡалар
Яу ситенә олашмай,
Арыҫландай алышмай,
Ҡыҙартмай күҙен, ҡыҙалмаҫ [156].

* * *

Өрөм-урпағын һорамай,
Тикһеҙҙең ҡыҙын алмағыҙ:
Ике талай тар көндә
Яуға ла сабар ул тыумаҫ;
Ял-ҡойроғо тулы тип,
Ябайҙан айғыр һалмағыҙ:
Ҡойон-дауыл уйнатып,
Урал һыртын саңлатып,
Яуға сабар ат тыумаҫ,
Ат тыумаҫ, ау, ат тыумаҫ [157].

* * *

Яҡшы аға ил көтһә,
Илгә дуға тултырыр;
Яман аға ил көтһә,
Илгә дошман тултырыр.
Атанан алтау тыуһа ине,
Ата ла юлын ҡыуһа ине,
Биленә ҡорман быуһа ине,
Һаҙаҡ атып, дошмандың
Алғасҡы табын боҙһа ине,
Битенә килер оятты
Үҙе белеп йыуһа ине.
Атанан алтау тыумаһа,
Ата ла юлын ҡыумаһа,
Биленә ҡорман быумаһа,
Һаҙаҡ атып, дошмандың
Алғасҡыһын боҙмаһа,
Битенә килер оятты
Үҙе белеп йыумаһа,
Атанан алтау тыуғансы
Берәү ҙә берәгәй тыуһа ине,
Тыуһа ине, ау, тыуһа ине [158].

* * *

Елберҙәге булмаһа,
Балыҡ та үргә йөҙалмаç.
Баçалҡаһы булмаһа,
Батыр ҙа яуға сабалмаç [159].
. . . . . . . . . . . . . .

* * *

Аҙыр * ҙа аҙыр алатау
Аҙыра * ла ҡалыр малдан һуң.
Ҡуш, ҡуш урҙа, ҡуш урҙа
Ҡушы ла ҡалыр ҡандан һуң.
Ҡуш айҙарлы мырҙалар
Ялсылай торор малдан һуң.
Алтын һарай эсендә
Һомғолланған байбисә,
Ҡуңалтаҡ кейеп күн итек,
Ҡара һыу эсеп кон итеп,
Тернәксел * тирен сығарыр,
Аҙыра ҡалғас хандан һуң.
Ҡуш кикелле корәң ат
Арҡаһын яуыр алдырып,
Утһыҙҙан билен ҡалдырып,

Ауыҙлыҡ менән һуғарып,
Күренгән берәү һыбайлап,
Яйҙаҡ та менер ирҙән һуң.
Алтын һаплы аҡ бысаҡ,
Ҡынында тороп, тут алып,
Тупаҫланыр ирҙән һуң [160].

Барын әйт тә, берен әйт,
Иң һуңында шуны әйт:
Арҙаҡлап көткән аҡ тәнең
Ҡара ерҙең аҫтында
Ҡорт-ҡуңыҙға ем булыр,
Егеттәр, ау! Ем булыр
Бер себендәй йәндән һуң,
Йәндән һуң, ау, йәндән һуң [161].

## УҘАМАНДАР, АҒАЛАР!

Уҙамандар, ағалар!
Аҫыл да тыуған мырҙалар!
Ҡолаҡлыға һүҙ әйтһәң,—
Ҡолағының эсенән;
Ҡолаҡһыҙға һүҙ әйтһәң,—
Ҡолағының тышынан.
Әйтеп-әйтмәй ни файҙа
Ҡолағын мамыҡ тыҡҡанға;
Аҙарыныр һүҙ ҡайҙа —
Яу килгәндә, ярҡырап,
Буй ҡасырып боҫҡанға;
Көләс йөҙөң яҡтырыр —
Ҡапыл килгән дошманды
Килтә * ҡайырып тоҫҡанға *[162].

* * *

Миңһеҙ ҡара ҡуйҙар бар,
Ялт-йолт иткән яуҙа бар,
Яҙ ебәреп, көҙ меңгән
Яҡшы ла ярау байҙа бар.
Ат тояғы теймәгән
Аҡ ҡабырсаҡ ҡомда бар.

* * *

Айҙы беленер көндән һуң,
Көндө беленер айҙан һуң.

Айҙың моңло булғаны —
Битен монар алғаны,
Көндөң моңло булғаны —
Битен болот алғаны.
Ау(ы)ҙыңа абау * ингәне —
Ҡарылыҡтың * билгеһе,
Туныңа ямау ингәне —
Ярлылыҡтың билгеһе,
Арҡаңа һабау тейгәне —
Яңғыҙлыҡтың билгеһе.

* * *

Туп [163] эсендә телмәрҙе
Яңғыҙ егет һөйләһә,
Уның һүҙе һүҙ булмаç.
Яңғыҙҙың яны табылмаç,
Күмәктең уғы ла юғалмаç.
Бай маҡтанһа,— табылыр,
Юҡ маҡтанһа,— сабылыр.
Ҡош тешләгән [164] егеттәр,
Юҡһыл көнө тар булһа,
Һыҡмыр байға ялыныр.

## ТОҒРО ҺҮҘ

Әйтем әйтәм, тыңлағыҙ,
Дөроç һүҙҙе аңлағыҙ,
Тоғро һүҙҙе аңлағыҙ!
Һөйәкһеҙ үçкән ул телде
Яманлыҡҡа бармағыҙ, ау,
Яманлыҡҡа алмағыҙ!

* * *

Әтәлге ҡош маҡтанһа,
Күлдән һуçар типтем, тир;
Көйгәнәк ҡош маҡтанһа,
Ярҙан сысҡан типтем, тир;
Ҡара бөркөт маҡтанһа,
Ҡаянан ҡуян типтем, тир;
Яман әҙәм маҡтанһа,
Ишектән ингән кешене
Эттән алып һүктем, тир.

Яҡшы кеше маҡтанмаҫ,
Һәр ваҡытта халҡым, тир,
Утын-һыуын үттем, тир [165].

* * *

Халыҡ ғәмен кем йыйыр?
Урмандан уҡ һайлаған,
Дошманға бороз ҡайраған —
Шул йыйыр, ау, шул йыйыр!
Һүҙе уның бер булыр.
Яманлыҡҡа түҙалмаҫ,
Яҡшылыҡ ҡылмай тоталмаҫ.

Яман әҙәм шул булыр,
Яманлыҡтың билдәһе —
Ауыҙында ике тел булыр:
Алдыңда һине ағартыр,
Артыңда һине ҡаралтыр;
Ауырлыҡты күтәрмәҫ,
Илгә изгелек күрһәтмәҫ.

Егетмен тигән егеттең
Күкрәге аҡ булыр,
Дошман уға ят булыр.
Ҡурҡаҡ булмаҫ ул батыр,
Әйткән һүҙендә ҡатыр.
Ул егеттең эсендә
Эйәрле-югәнле ат ятыр.

Яман әҙәм йән һатыр,
Мәңге рәхәт күралмаҫ,
Үҙ язаһын үҙ татыр [166].

## ЯҠШЫ АҘАМАТ МЕНӘН КИРЕ АҘАМАТ

Яҡшы аҙамат йорт көтһә,
Йорто имен көтөләр;
Кире аҙамат йорт көтһә,
Йортон-илен юнкетер [167],
Бәрәү тороп һүҙ әйтһә,
Ҡурҡытам, тип екерер;
Яҡшылыҡҡа тирҫ алып,
Яғанан алып һиңкетер;
Бәҫ ҡәҙерен белмәһә,
Ил дә үҙенә сәңкетер [168].

Киреләнеп, тирсләнеп,
Ил йөҙөнә [169] төкөрөр;
Иле-йорто намыҫланып,
Үҙен бәреп үлтерер [170].

* * *

Яңғыҙ иргә ял булмаҫ,
Яңғыҙ коңгә * мал тәтмәҫ,
Яңғыҙҙың ярым һүҙе йөрмәҫ,
Янашаға һүҙе үтмәҫ;
Яшык иттәй әшәрешләп,
Үҙ башынан сүп китмәҫ.

* * *

Ағай-энеле алтау
Аралығын алдырыр,
Теүәлдә торған дүртәү
Түбәлеген төшөрөр.
Болот та сыҡһа, ел ҡубыр,
Ямғыр ҙа яуһа, ер йыуыр.
Күк үләк — ерҙең тотолор,
Ҡороһа, утҡа өтөлөр, һәләй.

* * *

Эй Иҙел йорт, Иҙел йорт,
Иҙелдәй ҡайҙа имен йорт,
Атам кейәү булған йорт,
Әсәм килен булған йорт.
Аҡкан да һыуынан бал татыр,
Сабағынан май татыр.
Өйөндә ҡот башы булһын,
Йортоңа мал йыйылыр [171].
Аҙғындың аламаһы ҡойолор,
Һомғолдоң күҙе-ҡашы ҡыйылыр;
Шул аҙғын, ти, шул аҙғын
Салтанаттай иргә тап булһа,
Көйә лә яна йөртөп, хур ҡылыр, һәләй.

* * *

Ярлы ла ярлы тимәгеҙ,
Етем малын еймәгеҙ;
Ҡолонсаҡтай бай балаһы
Ярлы ла булмаҫ тимәгеҙ;
Ҡыу таяҡка таянған,

Ул мал көтмәҫ тимәгеҙ;
Ҡара ҡаҙандан һыу эскән,
Ул аш ейməҫ тимәгеҙ.

* * *

Ат ҡәҙере белмәгән
Юлда илай ултырыр.
Тун ҡәҙере белмәгән
Ҡыҙыл яланғас ултырыр,
Һүҙ юрығы белмәгән
Башына бәлә килтерер, һәләй.

## ЯҠШЫ ӘҘӘМ МЕНӘН ЯМАН ӘҘӘМ

Яҡшы әҙәм билдәһе —
Асыу менән үсе юҡ;
Яман әҙәм билдәһе —
Асыу менән үсе күп.
Яҡшы әҙәм билдәһе —
Күп тыңлар ҙа бер һөйләр;
Яман әҙәм билдәһе —
Бер тыңлар ҙа күп һөйләр.
Яҡшы әҙәм үткәндә,
Боҙ өҫтөндә ут яныр;
Яман әҙәм килгәндә,
Ҡоро өйҙән һыу тамыр.
Яҡшы атаның балаһы
Донъя әйҙәп аш табыр;
Яман әҙәм балаһы
Ғәйбәт һөйләп буш ҡалыр.

* * *

Ололарҙы ололау —
Яҡшылыҡтың билдәһе,
Кеселәрҙе кеселәү —
Кешелектең билдәһе.
Олоға ҡолаҡ һалмау —
Яманлыҡтың билдәһе,
Кесене һанға алмау —
Насарлыҡтың билдәһе.
Ололарға кесе бул,
Кеселәргә оло бул.

## БАТЫР ЕГЕТТӘРГӘ АТАЙ-ОЛАТАЙҘАР ҺҮҘЕ

Толпар менһәң, елеп ҡал,
Батыр булһаң, белеп ҡал;
Яман яуҙар ил баҫҡанда,
Батыр булып ҡырып һал.
Булат булһын билеңдә,
Һаҙаҡ булһын ҡулыңда;
Бирмә ереҥ дошманға,
Атып үлтер юлыңда.
Дошманың һау ҡалмаһын,
Һуғышып дан алмаһын,
Ат ярғаһсы йөрәген,
Батырлыҡ юғалмаһын.

* * *

Ирмен тигән ир-батыр
Тыуған илен һөйөр ул.
Ил ҡайғыһын ҡайғы итеп,
Иле өсөн көйөр ул.
Шундай ирҙәр ир булыр,
Ил эсендә бер булыр,
Ил ҡәҙерләп ҙур булыр,
Дошмандары хур булыр.
Ил батыры көрәштә
Нык күтәреп, нык һуғыр,
Батыр йыҡҡанды күреп,
Артынан күп ил уғыр.

## АРҒЫМАҠТЫҢ ЯҠШЫҺЫ

Арғымаҡтың яҡшыһы
Аҙ утлар ҙа күп юшар,
Ир-егеттең яҡшыһы
Аҙ һөйләр ҙә күп эшләр.

Аҙамат менән дуҫ булһаң,
Ҡәҙереҥ артыр;
Белемле менән дуҫ булһаң,
Аҡылың артыр;
Сибәр менән дуҫ булһаң,
Күркең артыр.

Малым бар, тип маҡтанма:
Бөгөн бар ҙа — иртән юҡ;
Түрәмен, тип маҡтанма:
Бөгөн бар ҙа — иртән юҡ;
Телем бар, тип маҡтанма:
Телең көрмәлеүе бар;
Көнөм бар, тип маҡтанма:
Юнең кирләнеүе бар.

## ЯМАН ЯҠШЫ БУЛАЛМАҪ

Ҡолаҡһыҙға һүҙ әйтһәң,—
Ҡолағының тышынан;
Ҡолаҡлыға һүҙ әйтһәң,—
Ҡолағының эсенән.
Дөрөҫ һүҙҙең яты юҡ,
Аҫыл һүҙҙең аты юҡ.
Күлдең күрке — ҡамыштыр,
Әҙәм күрке — намыҫтыр.

Бапһыҙ * булған аҡ толпар
Сапһа ла бауырын яҙалмаҫ;
Атанан тинтәк тыуған ир
Яуға һоңго һуҙалмаҫ.
Ял-ҡойроғо тулы тип,
Ябайҙан айғыр алмағыҙ:
Ҡойон-дауыл уйнатып,
Урал һыртын сыңлатып,
Яуға сабыр ат тыумаҫ;
Ата һүҙен тотмаған,
Әсә һүҙе йоҡмаған —
Яуға сабар ул булмаҫ.
Елберҙәге булмаһа,
Балыҡ һыуҙа йөҙә алмаҫ,
Ҡулда ғәйрәт булмаһа,
Батыр яуҙа түҙә алмаҫ.
Яман әҙәм шул булыр,
Ауыҙында ике тел булыр:
Алдыңда һине ағартыр,
Артыңда һине ҡаралтыр,
Үҙенә ауыр күтәрмәҫ,
Илгә игелек күрһәтмәҫ.

Ирмен тигән егеттең
Әйтер һүҙе хаҡ булыр;

Күңеле уның аҡ булыр,
Яман эштән һаҡ булыр.
Ҡурҡаҡ булмаç ир-батыр,
Өркәк булмаç ир-батыр;
Ир-егеттең эсендә
Эйәрле-юғәнле ат ятыр.
Яман яҡшы булалмаç,
Айыу ҡашҡа булалмаç;
Ир-егеттең ҡылғаны
Илдән башҡа булалмаç, ау,
Илдән башҡа булалмаç.

## ИР ДАНЫ — ИЛ ДАНЫ

Ҡояшты болот ҡаплаһа,
Көндөң йөҙө ҡаралыр;
Айҙы болот ҡаплаһа,
Төндөң йөҙө ҡаралыр.

Дошман килһә тупһаға,
Йортоң эсе таралыр.
Йорт-иленән туймаған —
Яуға сығып дан алыр.

## БЫЛ ДОНЪЯНАН КЕМ ҠАЛЫР?

Был донъянан кем ҡалыр?
Малы барҙан мал ҡалыр,
Улы барҙан ул ҡалыр,
Ҡатыны барҙан тол ҡалыр,
Оçталарҙан ҡул ҡалыр,
Йөрөмһәктән юл ҡалыр,
Сәсәндәрҙән тел ҡалыр,
Яҡшыларҙан зат ҡалыр,
Яҡшы затлы ат ҡалыр,
Батырҙарҙан дан ҡалыр,
Һөйләп халыҡ таң ҡалыр.

## ҠАРАСА ТЫУМАЙ КӨҘ БУЛМАÇ...

Ҡараса тыумай көҙ булмаç,
Ҡаҫтар тыумай боҙ булмаç.

Атанан тыумай ул булмаç,
Донъя күрмәй юл булмаç.
Яҡшы әҙәмдә ҡон булмаç,
Яман әҙәмдә моң булмаç.
Аҡтарылмаған тау булмаç,
Ҡайтарылмаған яу булмаç.

## ЙЫРСЫ ЛА БУЛҒАН ЙЫРСЫНЫҢ...

Йырсы ла булған йырсының
Теләндә һөйгән ил булыр,
Илен дә һөйгән сәсәндең
Һүҙендә илдең аһ булыр,
Илде йотҡан бейҙәрҙең
Теленең осо сөс * булыр,
Күкрәге уның ут булыр.
Бейҙе лә бей яһаған
Ауыҙы ябыҡ ил булыр,
Бейҙе түшәктә йоҡлатҡан
Һыны ла һылыу ҡыҙ булыр,
Бейҙе лә бейҙән ҡолатҡан
Ауыҙы асыҡ ил булыр,
Бейҙе лә түшәктән уятҡан
Күкрәге моңло ҡыҙ булыр.
Бей тәхеттән төшкән һуң,
Ҡолдан бейлек киткән һуң,
Һарауыслаған өй ҡарап,
Арыçландай аҡырып,
Алтын тәхет өçтөндә
Арҙаҡлаған аҡ тәне
Ҡара ерҙең аçтында
Ҡарт ҡуңыҙға ем булыр,
Ем булыр, ау, ем булыр.

## ТЫУҒАН-ҮÇКӘН ЕРҘӘР БУҘ БУЛЫР...

Тыуған-үçкән ерҙәр буҙ булыр,
Кейек елгән ерҙәр тоҙ булыр;
Арғымаҡ күрке ял булыр,
Әҙәм күрке мал булыр.
Арғымаҡ ялдан айырылһа,
Күрке бөтөр, буш ҡалыр;
Әҙәм малдан айырылһа,
Бүрке бөтөр, баш ҡалыр.

Баш һау булһа, бүрке табылыр,
Бүрекле башҡа күрке табылыр.

## ҠЫШТЫРҘАҠ ЯПРАҠ ҺАРЫ УҪАҠ...

Ҡыштырҙаҡ япраҡ һары уҫаҡ,
Ҡыштырҙағы уның елдәндер;
Ҡырпыуы ҡамсат бүрек кейеп,
Яғаһы ҡама шәп тун кейеп,
Ҡомһоҙҙоң ҡуҡырайыуы малдандыр.
Аҡ кейектең сабыр ере яландыр,
Эсер һыуҡайҙары уның ярҙандыр.
Ашайыҡ та, дуҫтар, эсәйек,
Уйнайыҡ та, дуҫтар, көләйек:
Хоҙай белһен, күпме ғүмер ҡалғандыр,
Хоҙай белһен, беҙҙең әжәл ҡайҙандыр!

## АРҒЫМАҠ АРЫҠ БУЛДЫ ТИП...

Арғымаҡ арыҡ булды тип,
Ййҙаҡ ябаға менмәгеҙ;
Ата улы ярлы булды тип,
Ата улын кәм-хур күрмәгеҙ.
Ял-ҡойроғо ялбыр, ҡупшы тип,
Тоҡомға айғыр ҡуймағыҙ.
Ашағыҙ ҙа эсегеҙ барында,
Кеше хаҡын әммә еймәгеҙ *,
Залим булып дәүләт йыймағыҙ.

## ЯЛ-ҠОЙРОҒО МАТУР ТИП...

Ял-ҡойроғо матур тип,
Ябыҡ айғыр алма,
Өйөрөңә алып барма;
Йөҙө-ҡашы матур тип,
Яман ҡатын алма,
Өйөңә алып барма.
Яман айғыр алһаң,
Өйөрөң таралыр;
Яман ҡатын алһаң,
Өйөң таралыр.

Яман айғыр алһаң,
Яуға менер ат тыумаç;
Яман ҡатын алһаң,
Утҡа инер ул тыумаç.
Ул да тыумаç,
Ҡыҙ ҙа тыумаç,
Тыуһа ла, тормаç,
Торһа ла, ырыç булмаç.

## АТЫҢ ЙӨРӨШЛӨ БУЛҺА...

Атың йөрөшлө булһа, –
Тояҡҡа кәс;
Ҡатының тауышлы булһа,
Ҡолаҡҡа кәс.
Көнөң аяҙ булһа,
Айға кәс;
Көнөң болотло булһа,
Көнгә кәс.
Илеңә йот килһә,
Малыңа кәс;
Илеңә үләт килһә,
Йәнеңә кәс.

## НИМӘНӘН НИМӘ АРТЫҠ?

Ваҡ һибелгән йондоҙҙан
Балҡып торған ай артыҡ;
Буш һимергән айғырҙан
Ярһып торған тай артыҡ.
Дөйә һуйған йыйындан
Тәкә һуйған туй артыҡ;
Тауыш тыуған туйыңдан
Тыныс торған ой артыҡ.
Ғүмерең үтһә әрәмгә,
Йоҡола күргән төш артыҡ;
Ырыç булған әҙәмгә
Хәйерһеҙ йәйҙән ҡыш артыҡ.
Ҡотһоҙ булған шоңҡарҙан
Торомтай тигән ҡош артыҡ;

Ҡот белмәгән дуҫыңдан
Ҡәҙерен белгән иш артыҡ.
Мүкләнеп ятҡан алтындан
Шымара төшкән таш артыҡ;
Тарығып биргән һыйыңдан
Тирләп тапҡан аш артыҡ.

## НИ МЕНӘН НИМӘ БУЛА?

Һыуҙар аға сай менән,
Сыра яна май менән,
Ике яҡшы баш ҡоҫһа,—
Көн ҡушыла ай менән.
Ике яман баш ҡоҫһа,—
Көнөң үтер уй менән.
Һал беркеттек тал менән,
Һал ебәрҙек мал менән,
Арғымаҡ ат ҡәҙерле
Үпкә-бауыр, ял менән.
Каруан күрке нар менән,
Егет күрке мал менән,
Маллы егет дан менән,
Малһыҙ егет зар менән —
Үпкә-бауыр ҡан менән.
Бәхетле егет шул була,
Үтһә ғүмере дан менән,
Каруан-каруан мал менән,
Йәне һөйгән йәр менән.

## МАЛ НИ ӨСӨН КӘРӘК?

Ағас күрке — япраҡ,
Әҙәм күрке — сепрәк,
Үлгәндә лә мал кәрәк,
Терелһәк тә мал кәрәк.
Баш ауырһа, йән кәрәк,
Баш һауыҡһа, мал кәрәк.
Малың булһа, дан кәрәк,
Ҡуйыныңа йәр кәрәк.

Малың барҙа, барың бар:
Шөһрәтең бар, даның бар.
Ғүмерең барҙа, мал кәрәк,
Дуҫ-иш кәрәк, аш кәрәк,
Эсер өсөн бал кәрәк.
Алтын-көмөш байлығың
Үҙең үлгәс ни кәрәк?
Байлығыңды артыңдан
Алып булмаҫ гүреңә;
Ҡәбереңә инеп ятҡан һуң,
Ҡайталмаҫһың түреңә.
Түреңдә саҡта белеп ҡал,
Малыңдың яйын күреп ҡал,
Малһыҙҙарға биреп ҡал.
Изгелекле булып ҡал,
Сауап-доға алып ҡал.
Гүр ҡуйынына мал һыймаҫ,
Сауаптарың алып бар.

## КЕМ ҠӘҘЕРЕН КЕМ БЕЛӘ?

Ҡара ерҙең ҡәҙерҙәрен
Сысҡан менән йомран белер;
Ҡарурмандың ҡәҙерҙәрен
Айыу менән бүре белер;
Ҡамышлыҡтың ҡәҙерҙәрен
Ҡама менән ҡондоҙ белер;
Дарайлыҡтың * ҡәҙерҙәрен
Баҡа менән йәйен белер;
Яҡшылыҡтың ҡәҙерҙәрен
Бер төйәктә ятҡан белер;
Яманлыҡтың ҡәҙерҙәрен
Дошман менән шайтан белер.

## ЯҢҒЫҘ ӘҘӘМ ҒӘРИП БУЛЫР...

Яңғыҙ әҙәм ғәрип булыр,
Ярлы әҙәм һарыҡ булыр,
Эсе-тышы ярыҡ булыр,
Ашҡа-һыуға зарыҡ булыр.

Ялған әйткән тотолоп ҡалыр,
Дөрөҫөн әйткән ҡотолоп ҡалыр.
Яҡшының эше хаҡ булыр,
Күңеле уның аҡ булыр,
Ялғансының ауыҙында
Ҡарғыш менән ант булыр.
Ҡаҙ ҡанаты ҡат булыр,
Ир ҡанаты ат булыр,
Малың китһә ҡулыңдан,
Ағай-энең ят булыр.

## ҠУРҠАҠ ИРҘӘН НИ СЫҒЫР?

Һай, тим, субар тим, субар,
Һай, тим, субар тим, субар.
Тибенгән аттан тир сығыр,
Аҡ мамыҡтан буҙ сығыр.
Аҡыллынан һүҙ сығыр,
Аҡылһыҙҙан күҙ сығыр, ау,
Аҡылһыҙҙан күҙ сығыр.
Тырыш әҙәм таш киҫер,
Аҡылы бар ил биҙәр;
Ике тиле — бер иҫәр,
Сәсмәһәң дә, ул үҫер, ау,
Сәсмәһәң дә, ул үҫер.

Уралтауҙай тау булмаҫ,
Уралтауҙай тау булмаҫ.
Ҡурҡып йөрөгән һау булмаҫ,
Һау булһа ла, дәү булмаҫ.
Ҡалаға ингән бур булмаҫ,
Бур булһа ла, ҙур булмаҫ;
Һөнәре бар хур булмаҫ,
Хур булһа ла, ҙур булмаҫ.

Һай, тим, субар тим, субар,
Һай, тим, субар тим, субар.
Ҡурайсынан көй сығыр,
Ҡурҡаҡ ирҙән ни сығыр?

## ҺӨНӘРЛЕ МЕНӘН ҺӨНӘРҺЕҘ

Сиңерткәләр игеп йыйыр,
Сиңерткәләр иген йыйыр;
Таҡыя башлы буҙ турғай
Сиңерткәнең үҙен йыйыр.
Һинең кеүек һөнәрле ирҙәр
Ҡәләменең осо менән табып йыйыр.
Минең кеүек һөнәрһеҙ егет,
Атаһынан ҡалған малы булһа,
Көнөн дә ятып, төнөн дә ятып,
Тиген йыйыр, тиген йыйыр, ау...

## ҮЛГӘН МЕНӘН БӨЛГӘН

Алыҫ менән яҡынды — юртҡан белер,
Асы менән татлыны — татыған белер,
Аш ҡәҙерен аҡа белер,
Һөт ҡәҙерен тана белер [172].

Болот та күсер, ел ҡыуыр,
Ямғыр ҙа яуһа, ер йыуыр [173].
Бер төкөргән ни ҡылыр?
Күп төкөрһә, күп ҡылыр [174].
Үлгән әҙәм кем булыр?
Илгә төкөргән — шул булыр.
Бөлгән әҙәм кем булыр?
Һөнәрлегән көлгән — шул булыр [175].
Торомтайҙан йылғыр ҡош булмаҫ,—
Осһа, турғай тибә алмаҫ;
Атҡыстан югерек уҡ булмаҫ,—
Атһаң, тейеп боҙалмаҫ.
Һөнәрһеҙ тырышты ҡуралмаҫ,—
Эшләп оҙаҡ түҙалмаҫ,
Ил ҡыҙырып йөрөү менән
Һөнәрлегән уҙалмаҫ [176].

## БУР БАЙЫҠМАҪ...

Бур байыҡмаҫ, бирән туймаҫ,
Яңғыҙ тирәк өй булмаҫ;
Бирәм тигән бей булмаҫ,
Ҡурҡаҡ әҙәм ир булмаҫ, ау,
Ҡурҡаҡ әҙәм ир булмаҫ.

Көтөү типкән мал булһа,
Уны сайҙа * бүре алыр;
Ил ташлаған ир булһа,
Көнө етмәй гүр алыр, ау,
Көнө етмәй гүр алыр.

Ата һүккән аш юйыр,
Әсә һүккән йәш ҡойор;
Дау сығарған ҡан ҡойор,
Яман әҙәм ил буяр, ау,
Яман ирҙән ил туйыр.

Айыу һуҡҡан тун кейер,
Уңған бала уҡ юныр;
Атҡа менгән ил гиҙәр,
Яҡшы кеше ил биҙәр, ау,
Яҡшы кеше ил биҙәр.

## ЯМАНЛЫҠҠА БОРМАҒЫҘ!

Ауаҙалы [177] ҡыҙҙың ауыҙы тар,
Күрәҙәле илдең күҙе тар,
Уңышлы йылдың ҡары аҙ,
Уңышһыҙ йылдың яҙы ҡар [178].
Әйтем әйтһәм, киң түшем
Иретер яуыз ҡарғышын [179].
Яуызға яҡын булмағыҙ,
Яуызлыҡты ҡылмағыҙ [180].
Тилмереп килгән еһерҙең
Наһырын * ергә ормағыҙ.
Һөйәкһеҙ үҫкән ҡыҙыл тел,
Яманлыҡҡа бормағыҙ.
Оло һүҙен тыңлағыҙ,
Тыңлағыҙ, ау, тыңлағыҙ [181].

## ӘСӘ ЙӨРӘГЕ

Борон-борон заманда
Булған, ти, бер ҙур йәйләү.
Яуызлыҡҡа яу асып,
Яҡшылыҡҡа юл асып,
Көн иткән, ти, был йәйләү,
Көн иткән, ти, был йәйләү.

Көндәр уҙған, йыл уҙған,
Заман алға ағылған.
Күңелгә шом ҡалдырып,
Йөрәккә һар һалдырып,
Илгә хәбәр таралған,
Илгә хәбәр таралған:

Күрше йәйләү матурын
Ошо йәйләү батыры,
Үҙенә тиң йәр итеп,
Күҙ алмаһын иретеп,
Һөйгән, ти, бар йөрәктән,
Һөйгән, ти, бар йөрәктән.

Арғымаҡҡа атлапып,
Сабый кеүек шатланып,
Батыр киткән йәренә,
Ҡыҙ ырыуы еренә.
Әйткән үҙенең теләген,
Асып биргән йөрәген.
Шунда әйткән ғорур ҡыҙ:
«Егетем, һиңә шартым бар,
Шартым булғас, антың бар:
Үҙ илеңә ҡайтырһың,
Әсәң күкрәген асырһың,
Йөрәген өҙөп алырһың,
Миңә шулдыр бүләгең.
Ишет шуны:
Тик шул ғына бүләгең!
Шунһыҙ ишем тимәмен,
Шунһыҙ һине һөймәмен».
Ҡара болот ҡабарған,
Күктә йәшен уйнаған,
Һыуҙар аҡҡан урғылып,
Донъя ҡалған төн булып,
Донъя ҡалған төн булып.

Быуындары биртенгән,
Ил батыры бөгөлгән.
Мөһабәт һыны һығылған,
Башын тотоп ултырған...
Уйлап алғас бер тына,
Күнгән ҡыҙҙың шартына.

Йөрәкте ҡулға алып,
Ҡыҙ тауына юл алып,
Егет уҡтай уҡталған,
Ҙур ҡаяға ынтылған.
Ҡабаланып ярһыуҙан,
Ҙур бер ташҡа абынған,
Текә ерҙә йығылған,
Текә ерҙә йығылған.
Йөрәктән осҡон осҡан,
Йөрәктән ялҡын сыҡҡан,
Шунда йөрәк һүҙ әйткән:
«Йығылып киттең, йәнем,
Ауыртманымы тәнең?..»

Быныһы бары әкиәт,
Быныһы бары хикәйәт.
Үҙ ғүмерен өҙҙөрөп,
Бала күңелен уйлаған,
Юҡ булдым, тип ҡуймаған,
Ауыртыуын тоймаған,
Балаһы өсөн һыҙланған
Әсәләргә беҙ бөгөн
Теләйек ҙур һаулыҡты,
Теләйек ҙур бәхетте.

Борон әйткән ололар:
«Әпә күңеле балала,
Бала күңеле далала».
Был һүҙ хәҙер иҫкерһен,
Тел осонан кителһен,
Әпә күңеле шат булһын,
Яҙмыш булһын еңелдән,
Әсәләрҙең сафлығы
Һис китмәһен күңелдән,
Һис китмәһен күңелдән.

## ЯҠШЫ ҠАТЫН МЕНӘН ЯМАН ҠАТЫН

1

Яҡшы ҡатын шул булыр:
Яҡшы ҡатын йыйынсаҡ.
Яман ҡатын шул булыр:
Яман ҡатын — түркенсәк *.
Яҡшы ҡатын тун текһә,
Сит-ситенән кимтелер;
Яман ҡатын тун текһә,
Йөй-йөйөнән һүтелер.
Яҡшы ҡатын йорондан
Элкеп ҡойтор сығарыр,
Яман ҡатын йорондан
Ҡынйыраҡ көскә сығарыр.
Һәлкәү ҡатын — һәперә,
Сулаҡ сәсмәү, тырмыс һауыр *.
Яҡшы ҡатын шул булыр:
Көрәгәһеп яңыртып,
Уҙғандарҙы ҡайғыртып,
Яҡты сырай, тәмле һүҙҙән
Һыуһын эсереп ултырыр.
Яман ҡатын шул булыр:
Һауып һаба тултырмаҫ,
Көрәгәһен астырмаҫ,
Уҙғанды ҡайғыртып саҡырмаҫ;
Ауыҙы, башы остандап,
Аҫау кирҙәй китаңдап,
Сәсмәүҙәре сустаңдап,
Ыҙғышып, һүгешеп ултырыр.

2

Пәйғәмбәрҙең доғаһы менән,
Пәйғәмбәрҙең доғаһы менән
Күктән төштө күк ҡусҡар.
Күк ҡусҡарҙың тиреһенән,
Ипле ҡатын ипләп текһә,
Бер уланға тун булыр;
Ипһеҙ ҡатын иләп текһә,
Ике еңе юҡ булыр.
Ипле ҡатын теккән тун
Итәгенән кимтелер.

Ипһеҙ ҡатын теккән тун,
Аҙна кейеүгә ярамай,
Буй-буйынан һүтелер.
Һүтелер ҙә ҡуйылыр.
Һылыуҙың күҙе-ҡашы ҡыйылыр.

## ҺӘ-ЛӘ-ЛӘЙ...

Әй, уй булыр, уй булыр,
Уй эсендә ҡуй булыр һә-лә-ләй!
Ул ҡуйҙы һуйһаң,
Ул ҡуйҙы һуйһаң,
Бер мәжлеслек һый булыр, һә-лә-ләй.

Шул ҡуйҙың тиреһен,
Шул ҡуйҙың тиреһен
Уңған ҡатын иләһә,
Уңған ҡатын иләһә,
Бер уланға тун булыр, һә-лә-ләй!

Аҙғын ҡатын иләһә,
Аҙғын ҡатын иләһә,
Тирә-яғы ҡаҡ булыр,
Тирә-яғы ҡаҡ булыр,
Һыңар бейәләй сак тулыр, һә-лә-ләй!

## БИҘӘРЛӘНГӘН БАЙ СӘСӘК...

Биҙәрләнгән бай сәсәк
Ҡурай ҙа булыр, һулған һуң;
Өҫтөндәге ҡамҡа тун
Сепрәк тә булыр, туҙған һуң;
Түрҙә ултырған бей атаң
Түрәлектән яҙыр, йәштән һуң;
Түше аралы [бай]бикә,
Түшәк тә йәймәй, ирҙән һуң;
Түше сыбар балағош
Өндәүгә килмәҫ, емдән һуң.

## ЗАМАНҒА ЗАМАН УРАЛҒАН...

Заманға заман уралған,
Берәү бәхетен бере алған.
Алалғандың йөҙө ағарған[182],
Ҡалғандың [183] йөҙө ҡаралған,
Ҡаралған, ау, ҡаралған.
Бармы дәүләт бөтмәгән,
Бәхет бер ҙә китмәгән?

Барын әйт тә, берен әйт,
Иң һуңында шуны әйт:
Ҡош һуғышһа, йөн ҡалыр,
Бей һуғышһа, аҡ тәне
Ҡорт-ҡуңыҙға ем булыр,
Ем булыр, ау, ем булыр [184].

## АЛЛАНЫҢ ҠӨҘРӘТЕ ШУНДАЙҘЫР...

Алланың ҡөҙрәте шундайҙыр,
Алланың ҡөҙрәте шундайҙыр;
Бер алты айҙы йәй иткән,
Бер алты айҙы ҡыш иткән;
Сыбар-ала көйгәнәк,
Сыбар-ала көйгәнәк
Сыбар-ала йомортҡаһын
Ауалап сырлар ҡош иткән;
Һине тапҡан әнекәң
Биләп-һөйөп кеше иткән.

Алланың ҡөҙрәте шундайҙыр,
Алланың ҡөҙрәте шундайҙыр;
Ураҙлының алты улын,
Алтыһын да бай иткән,
Менгәнен арғымаҡ менән юрға иткән,
Кейгәнен ебәк менән ҡамҡа * иткән;
Берәүҙең яңғыҙын «йә, хоҙайым!» тигәндә,
Яңғыҙ башын юҡ иткән,
Яңғыҙ башын юҡ иткән.
Кем һәләй һәллеүәләй.

## МУЛЛА ТУРАҺЫНДА

Был ауылдың муллаһы
Өлкән була сәлләһе.
Саҙаҡа һорай муллалар —
Бейҙәрҙең бер юлдашы.
Яҡындан үлһә бер килмәй,
Малы юҡ, тип бармайҙыр;
Алыҫтан үлһә бер бурҙай,
Йәйәү булһа ла ҡалмайҙыр.
Аттың бирһә менгәнен,
Дөйәнең бирһә теңгәнен,
Тәбәрәк *, тип йырлайҙыр.
Ҡанса әйтһә лә тәбәрәк,
Туҡалыңа тормайҙыр.
Шуның өсөн мулланы
Әүлиә тип булмайҙыр.

## БАЙ МЕНӘН ЯРЛЫ

Ауыҙы ҡыйыҡ булһа ла,
Бай балаһы һөйләһен;
Ауыҙы алап булһа ла,
Бай ҡыҙҙары йырлаһын.

Байҙар ҡаҙан аҫҡанда,
Ярлы ауыҙын сөйгә элһен;
Байҙар күҫәк күтәрһә,
Ярлы ҡулын ҡаушырһын.

Байҙың исеме дан менән,
Теләгең үтәр ҡан менән.
Мискә ҡырсалыр ҡоршау менән,
Бай ҡырсалыр фарман менән.

Эт өрһә, бүре килер,
Бай өрһә, мал килер;
Ярлы өрһә, түрә килер,
Аҙағынан яу килер.

Илде түрә йыртыр,
Ерҙе суҡа йыртыр;

Унан ярлы эш көтөр,
Бай аш көтөр.

Урмандағы айыу малға тейер,
Ауылдағы бай йәнгә тейер.
Күңеле бергә ҡулың һуҙ,
Күңеле ситтән ҡырын уҙ.

## ИР-ЕГЕТТЕҢ ҒҮМЕРЕ

I

Һанап беләм, әҙәм улы йөҙ йыл торһа,
Ун йыл һайын хәле үҙгәрә, имеш;
Ата-ана һау ваҡытта йәш баланың
Тәрбиәһе солтандарҙан артыҡ, имеш.

Ун йәшенә етһә, уғыл Гөлөстан ирер,
Һөйләр һүҙе, теле татлы дәстан ирер,
Аҡылы, фиғеле ата-анаға бостан ирер,
Әжәл килһә, ул бостанды ҡуймаç, имеш.

Егермелә ҡорал тотһа, яуҙы сәнсер,
Ҡасҡынды ҡыуып барып башын йәнсер,
Әгәр алһа ҡулына ҡылыс, хәнйәр,
Туҡһан егет ҡаршы килһә, таймаç, имеш.

Утыҙҙа, ут дик * булып, ел дик елер,
Барып дошман илдәренән малдар телер;
Шул ваҡытта ас арыçлан дик булып гиҙер,
Ҡайҙа барһа, алмайынса ҡалмаç, имеш.

Ҡырҡ йәшендә аҡылы инер, холҡо артыр,
Аҡылы менән халыҡтарҙы ҡулға тартыр;
Хикмәтле һүҙҙәр һөйләр, серҙәр отор,
Үлеп китһә, быңдай үкенес булмаç, имеш.

Иллелә аҡылы артмаç һәм кәмемәç,
Ни эшләһә, серҙәрен халыҡ белмәç;
Кеше әйткәнгә һис ваҡыт үҙе күнмәç,
Был ваҡытта аҡылы тулы булыр, имеш.

Алтмыш йәштә картлығы ҡаршы килер,
Ҡеүәт кәмер, һиммәте лә зәғиф булыр;
Егетлеген бик һағынып өмөт ҡылыр,
Йөҙ мең өмөт ҡылһа ла, егет булмаç, имеш.

Етмеш йәштә картлығы биленә китер,
Кеүәт кәмер, көндән-көнгә акылы китер;
Күҙенән йоко осор, аш аҙ үтер,
Ғүмеренең ләззәте һис калмаç, имеш.

Һикһән йәштә һөйләр тик коро теле,
Һөйәктәре какшар, булып биле бөкөрө;
Көнө-төнө үлем булыр уның фекере,
Терек булып, үҙен үлек һанар, имеш.

Туkһан йәштә түгелер уның күҙенән йәш,
Кұҙғала алмаç, тетрәр тәне, ауырыр баш;
Секерәйеп күҙе төшөр, бөтөр теше,
Торһа — ята, ятһа — тора алмаç, имеш.

Йөҙ йәшендә тамам китер һаулык кулдан,
Кұҙғала алмаç, ғажиз булыр уян-буян;
Малы булһа, кәҙер табыр үҙ улынан,
Мал булмаһа, ул да хөрмәт итмәç, имеш.

II

Утыҙ йәшкә еткәндә, айбулаттай ир инем,
Кырк йәшкә еткәндә, Кырым кыҙын һайлап алһам,
тир инем;

Илле йәшкә еткәндә, ир ағаһы булһам, тир инем,
Алтмыш йәшкә еткәндә, алғыр бүреләй булырмын;
Етмеш йәшкә еткәндә, ерән төлкөләй булырмын,
Һикһән йәшкә еткәндә, һикереп атка меналмам;
Туkһан йәшкә еткәндә, тункайып ятkан урынымдан
торалмам.

III

Ун йәштә тай өйрәтеп, мендем конан,
Алгыш алдым мал кайырып ата-анамдан.
Йомоштарын тел кайырмай, үтәнем сөп [185],
Әйттеләр «әҙәм булыр» ошо балам.

Егермелә атка менеп, кейҙем кейем [186],
Төшөрҙөм атын устап * килгән ирҙең.
Илдәге һылыуҙарҙы үҙемсенеп,
Кирелеп йөрөй инем егет коңом.

Утыҙҙа кайбер егет йөрөй буйҙак,
Бер ергә кәрәк инде күңел куймак,
Тәңренең биргән бик күп рәхмәте бар,
Ғәмһеҙ йөрөп, донъянан нигә туймак.

Килгәндә нәгеҙ ҡырҡҡа урта йәше,
Егеттең шунда үҫер дәрәжәһе.
Ғинайәт * ҡыл сабыйлыҡҡа яҡын булып,
Ҡайталыр егеттең тән ихласы.

Иллелә иҫкә төшә бер ишарәт,
Кәрәкмәй егет көнөң артыҡ хәжәт.
Күп ирҙәр алтмыш биштә була вафат,
Донъяла күрҙем, тиеп, күп ғәләмәт.

Алтмышҡа әгәр килһә һинең йәшең,
Ағарыр һаҡал-мыйыҡ, барлыҡ сәсең.
Ултырып күнегерһең өй түрендә,
Ҡорҙашың күбе булмаҫ, яңғыҙ башың.

Етмешкә әгәр барһаң арығыраҡ,
Төшә икән аяҡҡа чыдыр [187] тарығыраҡ.
Ижрәйеп әлеге әйткән ир булһаң да,
Телеңде алмаҫ [188] инде ҡатын, балаң.

Ҡыр икән һикһән тигән, әгәр барһаң,
Ғүмерең үткәрһәң, ғафил * ҡалһаң,
Донъяла изгелек ҡыл — булыр юлдаш,
Ваҡытың етеп, донъянан үтә ҡалһаң.

Туҡһанда иҫкә төшә былбыл көнөң,
Килмәй бит саҡырһаң да егет көпөң;
Һайраған һандуғастай, ҡыҙыл телем,
Һөйләп ҡал, белмәһәң дә артыҡ белем.

Ултырып түңәрәккә күҙем һалһам:
Донъяның әүәле шат, ахыры үлем.
Үлмәй бит йөҙгә етеп бөгөнгө ҙәм [189]
Һүҙемде тыңламай бит ҡайбер наҙан.

Лоҡмандай мең йәшәгән әҙәм бармы?
Ғүмерең шуның мән булһын тамам.

IV

Ун биштә булдым, ташта һикергән лаҡтай *,
Егермелә булдым, һыуҙа уйнаған сабаҡтай,
Егерме биштә — өйөрҙәге ҡураҡтай,
Утыҙҙа булдым, таштан ҡайтмаған булаттай,
Утыҙ биштә булдым, ағып ятҡан болаҡтай,
Ҡырҡ йәштә булдым, йылҡылағы ҡураттай.
Илле йәш — илгә өлгө әйтергә билге икән,
Алтмыш — йәйләүҙән ҡайта күскән ил икән.

Етмеш — дәүләтең булһа, ултырыуың яҡшы икән,
Һикһәнең ҡороһон! — һиркелдәгән шаҡшы икән!
Туҡһаның ҡаҙып ҡуйған гүр икән, ау, гүр икән!..

V

Ун биштә егет булып ҡуралаһың,
Егермелә тал сыбыҡтай буралаһың;
Утыҙҙа елбәҙлектән баҫылаһың,
Ҡырҡ йәштә ҡылдан ҡылыс асынырһың;
Иллелә иңрәйгән ир булырһың,
Алтмышта атҡа ҡарғып менә алмаҫһың;
Етмештә ер таянмай тора алмаҫһың,
Һикһәндә һиркелдәгән ҡарт булырһың;
Туҡһанда, егерме биш, егерме биш, тип «дал» булырһың.

VI

Биш йәштә бишектән төшкән сағың,
Ун йәштә уҡырға кергән сағың;
Ун биштә уйнап туймаҫ сағың,
Егермелә үҫеп буйға еткән сағың;
Утыҙ йәштә ут биреп торған сағың,
Ҡырҡ йәштә урта йәшәр булған сағың;
Илле йәштә ил ағаһы булыр сағың,
Алтмышта — алғыр бүреләй,
Етмештә — ерән төлкөләй,
Һикһәндә һикереп атҡа меналмай;
Туҡһанда туҡтамай баралмай,
Йөҙҙә йөҙмәйенсә торалмай,
Йөҙ ҙә биштә, йөҙ ҙә унда
Ер йөҙөндә булалмай.

VII

Ун алты йәш — ун алтын:
Менер өсөн тай бирҙең;
Ун ете йәш — йөҙ алтын:
Атыр өсөн уҡ бирҙең.
Ун һигеҙ йәш — һум алтын:
Яурыныма ҡош бирҙең;
Ун туғыҙ йәш — мең алтын:
Ҡуйыныма ҡыҙ бирҙең.
Егерме йәш — йөҙ алтын:
Билемә ҡылыс таҡтың;
Егерме биш — биш алтын:
Башыма аҡыл һалдың.
Утыҙ, һиҙә — ун алтын:
Маҡтанырға ул бирҙең;

Ҡырҡ, һиңә — ҡырҡ алтын:
Ҡырҡа ҡылыс яһаның.
Илле, һиңә — илле алтын:
Ил ағаһы яһаның;
Алтмыш, һиңә ни ҡылдым?
Аяғыма бау һалдың.
Етмеш, һиңә ни ҡылдым?
Яурындағы ҡошто алдың;
Һикһән, һиңә ни ҡылдым?
Уртымдағы теште алдың.
Туҡһан, һиңә ни ҡылдым?
Башымдағы һушты алдың;
Йөҙ йәш, һиңә ни ҡылдым?
Ауыҙҙағы һүҙҙе алдың.
Йөҙ биш, һиңә ни ҡылдым?
Маңлайҙағы күҙҙе алдың;
Йөҙ ун, һиңә ни ҡылдым?
Бурбайҙағы биҙҙе алдың.

VIII

Берҙә бер ни белмәçһең,
Унға етһәң, уйнарһың,
Егермелә еләрһең;
Утыҙға етһәң, өҙәрһең,
Ҡырҡҡа етһәң, ҡырағай булырһың;
Иллегә етһәң, ил ағаһы булырһың,
Алтмышҡа етһәң, алғыр бүреләй булырһың;
Етмешкә етһәң, ерән төлколәй булырһың,
Һикһәнгә етһәң, һикереп атҡа меналмаçһың;
Туҡһанға етһәң, дарманың ҡорор, туҡтарһың,
Йөҙгә етһәң, тар ләхеттә йөҙ түбән ҡолас ташлап
йөҙәрһең, туған.

IX

Егермелә утҡа килгән еңгәмдән ҡарғыш алдым,
Утыҙҙа һыуға барған апайымдан алғыш алдым,
Утыҙ биштә ҡынға ингән ҡылыс булдым,
Ҡырҡ биштә орһа һынмаç суҡмар булдым,
Илле биштә аръяң-көрйәң ағай булдым.
Алтмыш биштән ашҡан һуң,
Етмешкә аяҡ баçҡан һуң,
Тышау төшөр аяҡҡа,
Таяпырһың таяҡҡа.
Йәшең һикһәнгә ҡалдиһә,
Балаң телең алмайҙы,
Ҡатын түшәк һалмайҙы.
Егерме биш мәғ утыҙ биш йәшең
Иçкә төшөп, зарығың шунда ҡайнайҙы.

# Мөхәббәт
# тураһында
# хикәйәттәр,
# киссалар

## ӘЛ-ҠИССА БУҘЙЕГЕТ

3а Әл-ҡисса, Ҡарасәс һылыу бер шаһзадәнең ҡыҙы ине. Сәхиб * ямал * ине. Ун биш йәшендә Буҙйегетте төшөндә күрҙе, ғашиҡ булды, көндән-көнгә йөҙө һулды. Бер йыл ҡайғылы булып йөрөнө.

3б Һәм табиб * даркарҙар * ғилаж * тапманы [1]. Икенсе йыл тағы Буҙйегетте төшөндә күрҙе. Ҡыҙ егетте итәгенән тотоп яуап һораны:

Төндә илап, көндөҙ зар,
Мин йөҙөңә интизар;
Ни сәбәптән булдың йәр,
Мине бындай ҡылып зар?
Аслың әйтһәң кәрәкте.
Бер йыл булды, янармын,
Үткән көндө һанармын,
Һис ғаҡлымдан танармын,
Һүҙгә ни көн ҡанармын,
Атың әйтһәң кәрәкте.

Буҙйегеттең төшөндә, сабыр ҡыл, тип әйткәне:

Бән сәнең, сән бәнем,
Йәнемә тоштө йәнең,
Сытарма зарлап аның [2],
Сабыр ҡылһаң кәрәктер.

Ғашиҡтәр зарлап үтәр,
Тәңренән рәхмәт котәр,
Моратҡа бер көн етәр,
Сабыр ҡылһаң кәрәкте.
Сабыр ҡылмай эш бөтмәҫ,
Миҙгелһеҙ арзың * етмәҫ,
Зарлау мән ҡайғың китмәҫ.
Сабыр ҡылһаң кәрәкте...
4а Ағарып йөр йөҙөктәй,

Зөләйха мән Йосыфтай [3]
Сабыр ҡылһаң кәрәкте.
Булды ғишыҡ ҡайғылай,
Күркең йортҡа йәйелде.
Ләйлә берлә Мәжнүндәй [4]
Сабыр ҡылһаң кәрәкте.

Әл-кисса, ҡыҙ сабыр ҡылды. Ата-анаһы, йорто һис ғилаж тапманы. Өсөнсө йыл тағы төшөндә күрҙе...

4б Ҡыҙҙың төшөндә егеткә биргән яуабы:

Ғафилмс һин, уай, егет?
Егет буйтеп * ятырмы?
Атҡа менеп сыҡмайын,
Ир улъяға батырмы?

Мин юлыңда интизар,
Мәйлең булһа, эҙләй бар;
Беҙ — бер батша яңғыҙы,
Һеҙҙең өсөн булдыҡ зар.
Өс йыл булды, һыҡтаймын,
Киләме тип юҡтаймын;
Йөҙөңдө бер күрмәйем,
Ҡайтеп * сыҙап туҡтаймын?

Йәнең йәнгә ҡушылған,
Син хәҡиҡәт йәр булһаң,
Беҙҙең өсөн зар булһаң,
Шәһәре бостан Румдан [5]
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың.
Бостан шәһәренең былбылы,
Сирай [6] ерҙең бер голо.
Дарья кисеп, тауҙы үтһәң,
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың.
Беҙ — дарьяның гәүһәре,
Бер булырбыҙ йәүһәре.
Алтын-көмөш ҡулға алып,
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың.
Беҙ — алтындан тирәкбеҙ.
Эҙләгәнгә кәрәкбеҙ.
Юлдаштарың янға алып,
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың.
Нурҙан өлгө алғанмын,
Тутыйғоштай булғанмын.
Таяғыңды ҡулға алып,
Беҙҙе эҙләһәң, табырһың...

Төшөндә был ҡыҙ йырлап ғәйеп булды,
Егеттең күкрәгенә ҡайғы тулды.

Баксы * менән даркарҙан дарман тапмай,
Егеттең көндән-көнгә йөҙө һулды.

5а Бер йыл булды, был егет көлмәй йөрнө,
Дәрдемең * һис ғилажын белмәй йөрнө;
Ҡашында ҡорҙашы бар, юлдашы бар,
Һис ҡайһыһын күҙенә элмәй йөрнө.

Икенсе йыл төшөндә тағы күрҙе,
Ҡыҙ килеп, ҡәҙәм * баҫып, сәләм бирҙе;
Күҙенән йәш ағыҙып, ҡул ҡаушырып,
Ғарзын * әйтеп, егеткә яуап бирҙе:

— Дүрт йыл булды, һыҡтаймын,
Киләме тип юҡтаймын;
Хәбәрең юҡ, үҙең юҡ,
Сәләмнамә * һүҙең юҡ.

Мин йөҙөңә интизар,
Һыҡтай-һыҡтай булдым зар.
Беҙ — бер батша яңғыҙы,
Һеҙҙең осон булдыҡ зар.

Ата менән әсәһе
Рөхсәт бирмәҫ булырмы?
Төшөндә күргән был йәрен
Килеп күрмәҫ булырмы?

Егеттең ҡыҙға биргән яуабы:

Сән бер һүрәт надир * һин,
Кис ҡашымда хазир * һин,
Уяна килһәм, янда юҡ,
Ни хәсрәтле миҙә * һин?

Ни ерлек һин, ерең әйт,
Тыуған-үҫкән илең әйт,
Мине былдай зар ҡылма,
Аныҡ ҡылып юнең әйт.

Илең һинең белмәһәм,
Сәған тәҙәү йөрмәһәм [7],
Шәһәрең һинең белмәһәм,
Һине ҡайҙан табырмын?
5б Былтыр килдең ҡашыма,
Ҡайғы һалдың башыма,
Күренмәйһең күҙемә,
Һине ҡайҙан табырмын?

Е г е т к ә ҡ ы ҙ ҙ ы ң б и р г ә н я у а б ы:

Атка менеп сыкһаң һин,
Беҙҙе ҡабул күрһәң һин,
Ҡибла ҡарай торһаң һин,
Эҙләп беҙҙе табырһың...

Төшөндә был ҡыҙ йырлап ғәйеп булды,
Егеттең күкрәгенә ҡайғы тулды.
Бар ине бер дуҫы йәндән артыҡ,
Таң иртән барып уға ғарыз * ҡылды:

— Бер хуп һүрәт күрҙем мин,
Хайран булып йөрҙөм мин,
Маслихәтле йән дуҫым,
Ғаҡыл тапмай йөрҙөм мин!

Ҡайғы төштө башыма,
Ғаҡыл тапмай булдым зар,
Мәғкүл күрһәң, йән дуҫым,
Уны эҙләр уйым бар.

Китмәҫ ҡайғы төшкәндә,
Кәңәш тапҡан дуҫым һин.
Алыҫтан уй төшкәндә,
Ғаҡыл тапҡан дуҫым һин.

Бер йыл булды танғанмын,
Был ҡайғыға ҡалғанмын,
Эҙләүҙән былай уйым юҡ,
Күңелде уға һалғанмын.

Юлдашым юҡ китмәле [8],
Дарманым юҡ еткәле,
Йән юлдашым һин инең,
Батмай йөрнөм әйткәле.

Китмәҫ дәрткә юлыҡтым,
Дарманым юҡ, йән дуҫым;
Уны эҙләп үлһәмдәй,
Арманым * юҡ, йән дуҫым.

6а Д у ҫ т ы н ы ң я у а б ы:

Мәғкүл һүҙҙер, барырбыҙ,
Хаҡ яҙғанып күрербеҙ,
Беҙ юлында ҡорбанлыҡ,
Хеҙмәт итеп торорбоҙ...

Әжәл етһә, үлербеҙ,
Үлмәһәк, беҙ килербеҙ:

Ҡол сараһы булмаҫ, ти,
Хаҡ яҙғанын күрербеҙ.

Дуҫтым, һеҙҙән ҡалмаҫмын,
Ят йәрҙе эҙләп бармаҫмын.
Мин — юлыңда ҡорбанлыҡ,
Ялғансы дуҫ булмаҫмын.

Дуҫты мән был икеһе моңлашаҙы,
Уй уйлап, ғил * табып серләшәҙе.
Был икәүҙең ғаҡылын һис кем белмәҫ.
Юлаусының яптығын * уңдашаҙы.

Дуҫтына йән юлдашы һүҙ һалаҙы:
«Ялғандан үлмәй-үтмәй кем ҡалаҙы?
Үлһәк, йәрең юлында үләйек»,— тип,
Шәһәрҙән табып, былар ҡошсо алаҙы...

Шәһәрҙән былар серен һис кем белмәҫ.
Алтын менән көмөштән мул алаҙы.
Ике нарға аҙығын артып алып,
Ике ҡары, бер егет — башсы алаҙы.

Арғымаҡ аттан һайлап менеп алды,
Атаһы мән әсәһе теймай ҡалды.
6б Юлдашы мән ҡорҙашың ҡашына алып,
Тәүәккәл тип, барын да юлға һалды...

Биш кеше, көн-төн былар йөрҙө, тине,
Шәһәрҙән шәһәр сайыл * ҡорҙо, тине;
Һәр ерҙә шәһәр бар, ил күренһә,
Атының башын уған * борҙо, тине.

Замандан күп замандар үтте, тине,
Шәһәрҙән шәһәр һорай китте, тине;
Ҡырҙағы күп шәһәрҙән йәрен тапмай,
Дарья мән кәмә ҡылып [9] китте, тине.
Замандан күп замандар үтте, тине,
Дарья мән өс-дүрт айлыҡ китте, тине.
Бар икән бер ар алда мәймүн шәһәр,
Хоҙайым шуға дусар итте, тине.

Мәймүндең батырҙары һай-һай һалды,
Бәләгә бисаралар инде ҡалды.
Барын да бисараның тотоп алып,
Ерҙин ҡаҙған зинданға илтеп һалды.

Бисаралар зинданда тотҡон булды,
Зарланып бер хоҙайға йөҙө һулды.

7a Кафырҙарҙың һис беренән яҡшылыҡ юҡ,
Быларға зинданда өс йыл тулды.

Б ы л а р ҙ ы ң з и н д а н д а ә й т к ә н һ ү ҙ е:

Бейек тауға гиз булдыҡ,
Үтеү беҙгә ҡыйындыр.
Тимер өйгә ҡамалдыҡ,
Сығыу беҙгә ҡыйындыр.
Яман юлға гиз булдыҡ,
Китеү беҙгә ҡыйындыр.

Нидәй илгә гиз булдыҡ,—
Йөҙөң әҙәм күрмәҫтәй!
Нидәй ергә гиз булдыҡ,—
Моңло әҙәм йөрмәҫтәй!
Муйынға ҡороҡ төшөптө,
Йолҡонһаҡ та, сыҡмаҫ ул.
Һаңрау илгә гиз булдыҡ,
Ялынһаҡ та, уҡмаҫ * ул.
Рәхимһеҙ илгә гиз булдыҡ,
Илаһаң да, белмәҫ ул.
Янған утҡа гиз булдыҡ,
Ялынһаҡ та, һүнмәҫ ул.

Был бәләнән ҡотолоп,
Юл йөрөр көн булырмы?
Ата менән ананы
Бер күрер көн булырмы?

Был ни хәсрәт, ярандар?
Был ни михнәт ярандар?
Батша башың ҡол булып,
Был ни ҡайғы, ярандар?

Б ы л а р з и н д а н д а н ҡ о т о л ғ а н й ы р ы:

Бисаралар серләшеп моңлашаҙы,
Ҡасыуға яптыҡтарын уңдашаҙы.
«Был зиндандың эсендә үләбеҙ»,— тип,
Ҡасыуға әмәл тапмай илашаҙы.

Сыҡтылар был зиндандан хәйлә табып,
Ҡастылар шәһәренән аттай сабып;
Дошмандан ҡотолһаҡ тип, ҡан илашып,
Төштөләр дарья эсенә бер һал табып.
Һал менән бисаралар йөрҙө, тине,
Ҡасыр яҡҡа һалдарын борҙо, тине.
Юлдашының бары ла унда ҡалды,
Йән юлдашын бергә алып йөрҙө, тине.

Һал менән бисаралар йөҙә бирҙе,
Хоҙайҙан, аман ҡыл, тип, күп теләйҙе.
7б Һал менән бисаралар сығып ине,
Алдынан күп каруан осрайҙы.

Күп каруандан ике әҙәм килде, тине,
Беренән-бере һорап белде, тине.
Ҡараһа, үҙ иленең батшаһы икән,
Каруандың бары килеп күрҙе, тине.

Каруандың бары килеп күрешәҙе,
Беренән-бере һорап белешәҙе.
«Ханыбыҙҙың юғалған яңғыҙы»,— тип,
Каруандың бары инде илашаҙы.

— Яңғыҙы батшабыҙҙың, нәҡып * йөрөйһөң?
Һал бәйләп, дарья эсендә ағып йөрөйһөң.
Ата-анаң, һеҙ киткән һуң, зар иңрәйҙе;
Ни йомошҡа илеңдән сығып йөрөйһөң?
Китеп һин, ил-йортоңа сереҢ әйтмәй,
Тағында батшалыҡ урның көтмәй.
Ата-анаң күрмәгәле дүрт йыл булды,
Дарьяла нәҡып йөрөйһөң, иҫеңә алмай?

Бүҙйегеттең яуабы:

Күп каруан, һеҙ тыңлағыҙ, беҙ әйтәле,
Төштәге вәғәҙә ҡылған, йәрҙе әйтәле.
Йәр өсөн әкә-шәшә * уйҙан китте,
Яратҡан тәкдир итһә, беҙ ҡайтәле.

Төшөмдә йәрем йырлап, әҙлә, тине,
Өмөтөң, тапмаҫмын, тип өҙмә, тине.
Яратҡан алла беҙҙе ни ҡылһа лай,
Вәғәҙәңде, үлһәң дәй, боҙма, тине.

Шәһәрен эҙләй уның килмәк булдым,
Күрһәтһә тәңрем, йөҙөн күрмәк булдым.

Каруандарҙың егеткә әйткәне:

Батшабыҙҙың яңғыҙы, беҙ теләйбеҙ,
Аяғыңдай баш ороп, һүҙ һорайбыҙ.
Яңғыҙ йөрөп, йәреңде табалмаҫһың,
Ҡайтканың мәғкүл икән, бер йөрөйбөҙ.

8а Әкәңдең һеҙҙең өсөн йәне ҡорбан,
Чар * тарафта шәһәрең, йортоң аман.

Үҙегеҙ бер батшаның яңғыҙы һеҙ,
Яңғыҙ йөрөп йәр эҙләү заңға* яман.

Мең-мең ғәскәр һеҙгә юлдаш булыр,
Әкәгеҙ шәһәренә хәбәр һалыр;
Хоҙайың уны һеҙгә бой(о)роҡ ҡылһа,
Ер йөҙөндә бар булһа, табып алыр.

Егеттең яуабы:

Уай, каруан, был һүҙ мәғҡүл булмаç,— тимен,—
Был һүҙҙе ғашиҡ егет алмаç,— тимен; —
Үлһәм, йәрҙең юлында үләйем дә,
Ялғандан һис кем үлмәй ҡалмаç,— тимен.

Был серҙе дошманыма әйтмәң, каруан,
Үлһәм дәғ сертемдән * ҡайтмам, каруан;
Йәремә бер вәғ(ә)ҙәне ҡылғандан һуң,
Йәремдең йөҙөн күрмәй ҡайтмам, каруан.

Каруандың ҡайтҡан йыры:

Каруандың күп һүҙенә ҡай(ы)рылмайҙы,
Әүәлге үҙ һүҙенән ай(ы)рылмайҙы;
Ахыры күп каруандан юл айырылды,
Дам инде [10], бер-беренә бойормайҙы.
Буҙйегеткә каруан әйтеп ине,
Каруандың инде күңелен үҙе әйтәҙе:

— Бер эш башҡа төшөптө,
Йөр(ө)мәй күңелем тынмайҙы;
Ғашиҡ булған йәремде,
Күрмәй күңелем тынмайҙы.
Күп ғәриплек * күрһәм дә,
Зар сәргәрдан * йөр(ө)һәм дә,
Йәр юлында үлһәм дә,
Йөр(ө)мәй күңелем тынмайҙы.
Ҡайғы йотоп ҡапмаһым,
Был юлымдан танмаһым,
Боронғолай булмаһым,
Йөр(ө)мәй күңелем тынмайҙы.
Яңғыҙлыкта хаҡ — юлдаш,
Йәр юлында йән — юлдаш,
Дәрдемә дарман булмаһа,
Йөр(ө)мәй күңелем тынмайҙы.
Йәнем барҙа, барырмын,
Тере йөр(ө)һәм, ҡайтырмын,
Үлһәм, сәләм әйтермен,
Йөр(ө)мәй күңелем тынмайҙы.

Инде, каруан, йөрөйһөҙ,
8б Әкәм * беҙҙе күрмәһә,
Дәрдкә * дарман булмаһа,
Арманымды * әйтерһеҙ.
Рази булһын атабыҙ,
Һөтөн эскән анабыҙ,
Артыбыҙҙа әбнабыҙ *,
Сәләмемде әйтерһеҙ...
Быны укып күрһәгеҙ,
Хаҡ юлына йөрһәгеҙ,
Ҡолаҡ һалып торһағыҙ,
Яҡшы икән, тип әйтерһеҙ.
Күп каруан был йөрмәҫен белде, тине,
Алтын-көмөш кәрәген бирҙе, тине.
Батшаның балаһы инде китте,
Тауҙан, таштан, дарьянан йөрөп үтте.
Ҡашында хеҙмәткәре — йән юлдашы,
Бер заманда шәһәргә яҡын етте.
Бер ситенән шәһәрҙең керҙе, тине,
Алдында бер олкән өй күрҙе, тине.
Өй эсендә бер абыҙ * ултыра икән,
Кереп өйгә, сәләмен бирҙе, тине.

Абыҙ тороп сәләмен алды, тине,
Быларҙы күреп таңға ҡалды, тине.
«Алыҫтан килгән былар бисара икән,
Ултырың»,— тип, тикә * емет * һалды, тине.

— Уай, егеттәр, юлығыҙ булһын,— тине,—
Күп улъя алдығыҙға тулһын,— тине.—
Бисаралар, йөрөүегеҙ алыҫ икән,
Бынауың бер батшаның яңғыҙы икән.
Серегеҙ, хаҡ белдерһә, беләсәкмен,
Эҙләгәнең фәкир хан ҡыҙы икән.

Таң ҡалып, былар серен әйтте, тине:
— Кем килеп, хәбәр биреп ҡайтты?— тине.—
Юлыбыҙҙа һис әҙәм күренмәне,
Был хәбәрҙе кем һеҙгә әйтте? — тине.

— Хоҙайым белдергән һуң, белдем һеҙҙе,
Өс көн борон төшөмдә күрҙем һеҙҙе.
9а Ҡарынығыҙ инде һеҙҙең асҡан сығыр,
Йыуынығыҙ инде, тамам ҡуйып һүҙҙе.

Шәһәрҙән йәрегеҙҙе эҙләп ҡарай,
Ҡай ерҙә ғәрип булһа, шунан һорай,
Йәрегеҙ был шәһәрҙән табылмаһа,
Берәүегеҙ беҙҙең өйгә ҡайтып урай.

Шәһәргә бисаралар керҙе, тине,
Алланың ярлығына күнде, тине.
Бер күшәнең * эсендә йөрөп иңе.
Ҡырҡ ҡыҙ бара ятыр, күрҙе, тине.

Егеттән ҡыҙҙар борон күргән икән,
Күшәлә ике ғәрип йөргән икән.
Батшаның ҡыҙының күҙе төшөп,
Артынан бер аҙ ҡарап торған икән:

— Уай, ҡыҙҙар, ул ғәрип кем булаҙы?
Һәр ергә ҡарап тороп әйләнәҙе.
Һөйөнсө, йәрем булһа, бирер инем,
Ул ғәрипте күргәле кем бараҙы?

### Хан ҡыҙының ҡыҙҙарға йырлап әйткәне:

Батыр ирҙәй — йөрөшө,
Батша улындай — торошо,
Күргән төштоң тураһы
Бөгөн килгән булмаһын.
Ҡылдап пәрҙә башында,
Юлдашы бар ҡашындай,
Ҡайғы төшөп йәшендә,
Йәр эҙләүсе булмаһын.
Фиҙа ҡылып малдарын,
Ҡорбан ҡылып йәндәрен,
96 Барып һораң хәлдәрен,
Һүҙ һораусы булмаһын.
Төштә күргән йәребеҙ,
Уға ҡорбан барыбыҙ,
Көндөҙ-төндә зарыбыҙ,
Йәр эҙләүсе булмаһын.
Барып йөҙөн күрендәр,
Әҙәп һаҡлап тороңдар,
Бер аҙ ҡарап тороңдар,
Ил эҙләүсе булмаһын.
Барып хәбәр алыңдар,
Йөҙөн ҡарап күреңдәр,
Ҡайғы-моңон һораңдар,
Йәр эҙләүсе булмаһын.
Унан хәбәр алғанға,
Һөйөнсө хәбәр һалғанға
Алтын йөҙөк, гәүһәр таш
Һөйөнсөгә бирермен.

Хан ҡыҙы ғашиҡ йәрен белде, тине,
Ҡыҙҙарға йәрен әйтеп көлдө, [тине],

Ҡырҡ ҡыҙҙан ике ҡыҙ юлдаш алып,
Был егетте күргәле килде, [тине].

Күшәнән * ҡыҙҙар эҙләп тапмай ҡалды,
Был ғәрип * ул ерҙән китеп ҡалды.
Ҡыҙҙар килеп ҡараһа, дәнәмә * юҡ,
Һәр ерҙән ҡарап тороп әйләнәҙе.

Ханшаға ҡыҙҙар килеп хәбәр бирҙе,
Юлаусы икән, уларың киен * ҡайтты.
10а Хан ҡыҙы күп ҡыҙҙарға һүҙ әйтәҙе:
«Йәрем булһа, ул ниңә киен ҡайтты?»
Буҙйегет юлдашы мән кәңәшәҙе,
Һәр ерҙән муйын һоноп ҡарашаҙы.
Шәһәрҙән туны йыртыҡ ғәрип күрһә,
Ил-йортоноң мәнеһен һорашаҙы.

«Йәребеҙ бармы, юҡмы,— бер аңлале,
Айнаҡтан *, ҡыҙҙар белмәҫ, бер тыңлале;
Был шәһәрҙән йәребеҙ табылмаһа,
Юлаусының яптығын * уңдасале».

Был ғәрип хан ҡыҙын күңелгә алды,
«Йә алла»,— тип, үҙҙәрен юлға һалды.
Бер һарайҙың эсендә ут янаҙы,
Айнаҡтан былар килеп ҡолаҡ һалды.

Күп ҡыҙҙар өй эсендә һүҙләп ятыр,
Хан ҡыҙы, йәрен юҡтап, илап ятыр;
Ғашиҡ йәрем йөҙөн бер күрһәм тип,
Хоҙайҙан налиш * ҡылып, илап ятыр.

Ҡыҙҙың өй эсендә әйткән һүҙе:

Ете йылдан булдым зар,
Мин йөҙөңә интизар;
Ғашиҡ булған йәремә
Ҡушыр микән бер вә бар *.

Йәнең йәнгә ҡушылған,
Бер йөрөр көн булырмы?
Күкрәктәге күп ҡайғы
10б Ҡотолор көн булырмы?
Киләмен тип әйтеп инең,—
Вәғ(ә)ҙәләрең ялғандай.
[Күпме] һаҡлап килмәнең,
Бүтән йәрҙе алғандай.

Алла ҡушҡан йәр инең,
Йәреңәй вафа* ҡылманың.

Ете йылдан өйөңдән —
Һис урыныңдан торманың.

Хан ҡыҙы илай инде, йырын бүлде,
Егеттең күкрәгенә ҡайғы тулды,
Ғашиҡ йәре икәнен белгәндән һуң,
Йырын йырлап, айнаҡтан хәбәр һалды:

— Уай, йәрем, беҙ сығырбыҙ ғашиҡ йәрең,
Ете йылдан һаҡлаған интизарың.
Эҙләгәнең беҙ булһаҡ, ғашиҡ йәрем,
Һүҙемә ҡолаҡ һалың инде барың!

Дүрт йыл булды юлыңда йөр(ө)гән йәрең,
Вәғ(ә)ҙә ҡылып, төшөңдә күргән йәрең.
Эҙләгән ғашиҡ йәрең килеп тормин,
Ишек ас, ысын булһа интизарың.

Һеҙҙе бында яратты,
11a Беҙҙе унда яратты.
Бер аҙ зарлап йөрһөн тип,
Арала дарья яратты.
Сүлдә йөр(ө)нөм һыу тапмай,
[Һыуҙа йөҙҙөм юл тапмай] [11].
Күп ғәриплек күргәнмен,
Юл башлаусы бер тапмай.

Дүрт йыл булды юлыңда,
Хайран булып йөрөп мин;
Дарья кисеп, тау үтеп,
Күрмәгәнде күрҙем мин.

Табандарым уйылып,
Ҡулым тирем һуйылып,
Дәүләт бағым юйылып,
Зар сәргәрдан * булдым мин.

Атамды мин күрмәнем,
Анамды мин күрмәнем.
Өйҙә ғүмер һөрмәнем,
Бер һин өсөн йөр(ө)нөм мин.

Һине эҙләп йөр(ө)гәнмен,
Буйың төштә күргәнмен,
Йәнем ҡорбан ҡылғанмын,
Рәхим итһәң кәрәкте.

Зәғфрандай һулығанмын,
Өс йыл тоткон булғанмын.

Йөҙөң күрер көн булһа,
Ни булһам да булғанмын.

Миһман * булып килеп мин,
Хайран булып йөрөп мин,
Нурың төштә күреп мин,
Рәхим итһәң кәрәкте.

Атым минең — Буҙйегет,
Ҡашымда бар дуҫ егет,
Бер ҡайғылы ҡуш егет,
Рәхмәт әйтһәң кәрәкте.

Сын хәкиҡәт йәр булһаң,
Өйгә керһәм кәрәкте.
11б Йәнем һөйгән яныйым
Йөҙөң күрһәм кәрәкте.

Ҡыҙҙың яуабы:

Ысын микән, өтрөк * микән һүҙең һинең,
Танымаймын, ҡай ерлек һин, үҙең һинең?
Төшөмдә алла ҡушҡан йәрем булһаң,
Кил, айнаҡтан күрәйем йөҙөң һинең.

Буҙйегет тура айнаҡка килде, тине,
Ҡыҙ ҡарап, егет йөҙөн күрҙе, тине.
Битендәге пәрҙәһен асып ине,
Ханша ғашиҡ ярын инде белде, [тине].

Туныи кейеп, хан ҡыҙы ҡәҙәм * баҫты,
Югереп, ҡыҙҙар тороп ишек асты.
Услап алтын-көмөш ҡулына алып,
Мәрүәрид * мән мәрйендән сәсеү сәсте.
Ҡосаҡлашып күреште ғашиҡ йәре,
Ҡашында ҡырҡ ҡыҙ бар, хеҙмәткәре.
Ҡыҙҙар тороп, алдында яр-яр әйтеп,
Хан ҡыҙының табылды интизары.

Ҡыҙҙарҙың әйткән яр-яры:

Әлхәмде сүрә ҡөрьәндең башындалыр, яр-яр,
Пәйғәмбәрҙәр алланың ҡашындалыр, яр-яр.
Берең — мәрүәрид, берең — мәрйен, теҙелептер, яр-яр,
Берең — хандыр, берең — ханша, йәр булып һеҙ, яр-яр.
12а Берең — тутый, берең — былбыл, йәр булып һеҙ, яр-яр,
Берең — алтын, берең — көмөш, түш булып һеҙ, яр-яр.
Берең — гөл, берең — йофар, хуш булып һеҙ, яр-яр.
Берең — айҙыр, берең — көндөр, ҡай(ы)рылмағыҙ, яр-яр,
Заман ахыр булғансы, ай(ы)рылмағыҙ, яр-яр.

Берең — гәүһәр, берең — яҡут, ярашыптыр, яр-яр,
Берең — тутый, берең — былбыл, һайрашыптыр, яр-яр.
Берең — хур ҡыҙ, берең — нур егет, бер тороғоҙ, яр-яр,
Заман ахыр булғансы, бер йөрөгөҙ, яр-яр...
Терек донъя ярашыр күп мал менән, яр-яр,
Маллыға көн ярашыр һөйгән йәр мән, яр-яр.
Малы юҡтың йәне юҡ, түшәге юҡ, яр-яр,
Йәре юҡтың йәне юҡ, түшәге юҡ, яр-яр.
Яр-яр итмәк боронғо олгөбөҙ бар, яр-яр,
Терелектә бер аҙ көн көлкөбөҙ [12] бар, яр-яр.

Яр-яр әйтте ҡырҡ ҡыҙ, уйнап-көлөп,
Ҡолаҡ һалды хан көнөгө *, тыштан тороп.
12б Ҡыҙҙарҙың был уйынын ишеткән һуң,
Юнәлде ханға табан, хәбәр алып...
— Тәксир хан, ҡыҙығыҙғай барып килдем,
Бер шомлоҡ бар икән, тыңлап белдем.
Ҡырҡ ҡыҙ яр-яр әйтеп ятыр икән,
Ишеткән яманлыҡты әйтә килдем.

Был яр-ярын ишетеп ойгә керҙем,
Туйҙарын, ҡылған эшен ҡарап торҙом.
Күп ҡыҙҙар бер туй ҡылып ятыр икән,
Ике егет эсендә — шуны күрҙем.

Ҡыҙығыҙ мән бер егет муйындашып,
Ятыпты таҡ өҫтөндә ҡуйындашып.
Минең әйткән һүҙемә инанмаһаң,
Ҡарағыҙ, тәксир ханым, ишек асып.

Ишетеп, хан ҡылысын ҡулына алды,
Илеһә асыуланып хәбәр һалды.
Күшәлә күп һалдаттар йыйылышып,
Хан ҡыҙының таш өйөн ҡамап алды.

13а Хан тыштан асыу ҡылып аҡыраҙы,
Өйҙә яткан ҡыҙын саҡыраҙы.
«Өйҙә йөр(ө)гән дошманды үлтерең!»— тип,
Бейҙәре тышта тороп аҡыраҙы.

Һалдаттар өй эсеһә инеп килде,
Бисаралар тапманы ҡасар юлды.
Ғәрип йәндән төңөлөп, бисаралар
Алланың әмеренә муйын һондо.

Һалдаттар мән икеһе орош булды,
Бирмәне күп һалдаттар ҡасар юлды.
Бисаралар ишеккә ыштылғандай,
Аяғына йәбешәҙе һигеҙ ҡуллы.

«Йә алла!»— тип, ҡылысын ҡулына алды,
Алдына гиҙә килгәнде ҡырып һалды.
Бисаралар таш өйҙән сығып ине,
Тыштағы күп һалдаттар уртаға алды.

«Үлтерең!»— тип, хан тороп ярлыҡ ҡылды,
Тыштағы һалдаттар уртаға алды.
Бисаралар, атына менеп алып,
Йөҙ егерме кешеһен ҡырып һалды.

Буҙйегет юлдашы мән ҡасып китте,
Шәһәрҙең күршеһенән сабып үтте.
Хоҙай тәғәлә һаҡлаһа, бәлә булмаҫ,
Баяғы абыҙына аман етте.

Тота алмай хан инде ғажиз * булды,
Йөҙ егерме кешеһе үлеп ҡалды.
Аягының аҫтынан бәлә сығып,—
Хоҙайым был бәләне ҡайҙан һалды?

Х а н д ы ң ҡ ы ҙ ы н а ә й т к ә н һ ү ҙ е:

13б Уай, ҡыҙым, был ни тигән шомлоҡ?— тине,—
Атайыңды инде ҡылдың моңлоҡ,— тине.—
Ҡайҙан аҙып йөрогәнгә юлдаш булып,
Шәһәрҙә кеше юҡмы шундиҡ? * — тине.—
Уай, балам, иркәк тапмай шашҡаныңмы?
Ер йөҙөндә хандарҙың улы юҡмы?
Ҡолдар мән сының менән аҙғаныңмы?
Был ни тигән башыма бәлә һалдың?
Бындай өлкән оятҡа ҡайҙан ҡалдың?
Йортоңда шундиҡ хандар уғлы юҡмы?
Юлдан аҙып йөр(о)гәнгә ҡайҙан ҡалдың?

А т а һ ы н а ҡ ы ҙ ы н ы ң б и р г ә н я у а б ы:

Ҡолағым һаңғырау булғанда,
Әйтһәң, һүҙең уҡмайҙы *.
Ҡандай яҡшы тапһаң да,
Һис тә миңә яҡмайҙы.
Ғаҡлым баштан киткән һуң,
Ғаҡлыңды алмаҫмын;
Был бер килгән егеттең
Һис юлынан ҡалмаҫмын.
Әкә *, башымды алһаң да,
Зинданыңа, ай, һалһаң да,
Был йәремдән китмәҫмен,—
Йөҙөн күрмәй ҡалһам да.

Беҙҙән мәғҡул ҡыҙ табып,
Үҙ иркеңсә ҡылырһың,
Йорттан яҡшы таңлатып,
Һөйгәнеңдә бирерһең.
Был йәремдән башҡаның,
Үлһәм, йөҙөн күрмәҫмен.
Был егетте күрмәйен,
Дәрдемә * юҡ дарманым.
Йөҙөн күреп үлһәм мин,
Донъяла юҡ арманым *.

Ҡыҙына асыуланып, хан йортон йыйғаны

14а Асыуланып, хан инде йортон йыйҙы,
Ҡыҙына асыуланып, эсе көйҙө.
Дошмандар тағы бында килмәһен тип,
Һәр ерҙә күҙәтсене әҙер ҡуйҙы.

— Уай, йортом, ханығыҙҙың даны! — тимен, —
Шәһәрҙә дошманыбыҙ ятыр, — тимен, —
Ҡайҙан килеп ҡыҙымды аҙҙырыпты,
Тик имәс * был — бер килгән жаду *, тимен.—
Ғаҡылдашып, бейҙәрем, юл табығыҙ!
Шәһәрҙән бау мән еп, ҡол табығыҙ!
Ҡарылыҡта * башыма килгән бәлә,
Кисектермәй дошмандан кик * алығыҙ!
Дошмандың алып килең киҫеп башын,
Күҙенән ағыҙығыҙ ҡанлы йәшен.
Дошмандан кисектермәй кик алығыҙ!
Ҡуймағыҙ янындағы бар юлдашын!

Асыуланып хан шулай ярлыҡ ҡылды,
Күп ғәскәр дошманына бармаҡ булды.
Дошманыбыҙ осраһа ҡотолмаҫ тип,
Шәһәргә һалдат менән ғәскәр тулды.

Егеттәрҙең яуабы:

Бисаралар абыҙҙан ғаҡыл алды:
Хат биреп, юлдашынан хәбәр һалды,
Хат эсендә үҙенең атын һалды;
Юлдашы китте, үҙе өйҙә ҡалды.

Хат алып, йән юлдашы етеп килде,
Хат тотоп, хан алдына килеп инде;
[Хан был хатты тотоп уҡыған һуң] [13]
Дошманының юлдашы барын белде.

Ҡул ҡаушырып ханға был сәләм бирҙе.
Хатын биреп, ишектә ҡарап торҙо.

Хат эсендә «хан мин» тип яҙған икән.
Хатын уҡып, хан алып ергә орҙо.

— Уай, йортом, был жаду * ғуй шашкан икән,
Ҡол икән, батша мин, тип яҙған икән.
Юлдашын башсы ҡылып, башын алың!
Үҙенә-үҙе соҡор ҡаҙған икән.

Бисараны башсы ҡылып алып барҙы,
Ҡылыстарын ҡынына һалып барҙы.
Эҙләгән дошманыбыҙ гиз булды, тип,
Ҡалдырмай батырҙарын алып барҙы.

Өйҙән ҡарап, ханзада [14] белде, тине,
Үлтергәле дошмандар килде, тине.
Күп ғәскәрҙең тауышын ишеткән һуң,
Эйәрләп арғымағын менде, тине.
Йә алла! — тип дошманға ҡаршы йөр(ө)нө,
Йән юлдашын дошмандан йолоп алды.
15а Юлдашын күп ғәскәрҙән алып ине,
Күп ғәскәр бары инде уртаға алды.

Күп кеше, көн баткансы, орош булды,
Соҡор ерҙең бары ла ҡанға тулды.
Хоҙай тәғәлә һаҡлаһа, бәлә булмаç,
Йыкты, тине, атынан өс йөҙ ҡолдо...

Ҡалған ғәскәр ғажиз * булып ҡайтып килде,
Өс йөҙ кеше үлгәнен әйтеп килде.
Барған кеше дошманды тотканы юк,
Хан бер шомлоҡтоң булғанын инде белде.

Бейҙәре хан алдындай һүҙ әйтәҙе:
15б — Орошоп был дошманды беҙ ҡайтәле?
Саҡырып, кейәү ҡылып, туй туйлатып,
Үлтерһәк, әмәл ҡылып, беҙ ҡайтәле.

Бейҙәренең был һүҙенә бары күнде,
Күшәлә сауын әйтеп *, атка менде;
«Егет-ҡарың, был туйҙан ҡалмаң!» — тине,
Ханшабыҙҙың күңеле инде тынды.

Ханшаға һөйөнсөгә берәү килде:
«Ниңә айырһын хан һеҙҙе һөйгән йәрҙән?
Йәрегеҙгә, килһен тип, хәбәр һалың.
Туйығыҙға туйһын йорттоң ҡарыны.
Атка менеп, хан үҙе йөр(ө)мәк булды,
Туйығыҙҙың ҡыҙығына кермәк булды;

Ярлыҡ ҡылып, йортона сауын әйтеп,
Һөйгәненә ул һеҙҙе бирмәк булды».

Ҡыҙ фәҡир һүҙгә ышанаҙы,
Йәренә сәләм әйтеп һүҙ һалаҙы [15]...

[Егет саҡырғанда туйға килде, егеткә күп араҡы биреп мас ҡылдылар, юлдашы ҡыҙға хәбәр бирҙе.]

[Буҙйегет дуҫының Ҡарасәскә килеп әйткәне:]

16а ...Күп дошмандың эсендәй
Ҡайырып алыр йәре юҡ,
Һөйәмен тип торғанда,
Айырып алыр йәре юҡ...
Ғәрип башы киҫелһә,
Һеҙҙең өсөн киҫелер.
Кәүҙәнән баш өҙөлһә,
Һеҙҙең өсөн өҙөләр.
Әйтһә, һүҙе була ине,
Бер батшаның улы ине,
Мең-мең ғәскәр атланһа,
Бары уның ҡоло ине.
Донъя милке бар ине,
Бер үҙенә зар ине,
Шундай батша табылмаҫ
Күренгәндең йәре ине.
Ҡай ерлеген әйтәйем,
Ҡанша * әйтһәм дә, табылмаҫ;
Яңғыҙы ине бер хандың,
Һөйәген йортоң танымаҫ.
Мас булғанда ғәриптең
Хәлен һис кем һорамаҫ.
Күп эсендә нә ҡылһын?
Хаҡҡа муйын һонопто.
Муйып һонған егеттең
Үләр көнө булыпты.
Һеҙҙән сәбәп булмаһа,
16б Үләр көнө [яҡында] [16].
Өтрөк * йәрҙең дуҫты имәс *,
Мине тағы ҡустай * бар;
Беҙҙе бергә үлтерһең,
Атайың һүҙен ҡустай бар!
Ысын һөйгән йәр булһаң,
Өмөтөңдө өҙмәй бар;
Боронғо үткән дуҫтай бар,
Дуҫтың һүҙен ҡустай бар.
Сын күңел мән йәр булһаң,
Йәреңде тиҙ эҙләй бар,

Дәрд * быуынға төшмәй бар,
Ҡылыс башын киҫмәй бар [17].
Йәрҙә мәйлең бар булһа,
Өмөтөңдө өҙмәй бар,
Ҡорбанлығын йыҡмай бар,
Дошманыңдан буҡмай * бар.
Һуғымдарың һуймай бар,
Йәр ҡайғыһын уйлай бар;
Эш үткән һуң, файҙа юҡ,
Найҙаларын * һуҡмай бар!
Бөгөн иҫкә алмаһаң,
Үткәндән һуң [18] туйлай бар!
Дәрд быуынға төшкән һуң,
Ҡылыс башын киҫкән һуң,
Һеҙ йәрҙе мин нитәйен,
Кәүҙәнән баш өҙгән һуң?

## Ҡыҙҙың йортона барғаны

17а Ҡыҙ бахыр ишеткән һуң торҙо, тине,
Югереп туйға табан йорҙо, тине.
Үлһәм, йәрҙең юлында үләйем, тип,
Сәләм биреп, туй өйөнә керҙе, тине.

Ишектән кереп, күпкә сәләм бирҙе,
Күп ғәскәр тора килеп урын бирҙе.
Буҙйегет мас булыпты, иҫен белмәй,
Өтрөк туйҙың булғанын инде белде.

Атаһы түрҙә ултыра, түбән ҡарап,
Мас егеттең булмайҙы хәлен һорап.
Ике күҙе егеттә күп ғәскәрҙең,
Башаҡ мән ҡулына хәнйәр алып.

Буҙйегет, йәре килде, танымады,
Араҡы мән шарапҡа ҡарыны туйҙы.
Эше үткәнен бисара белеп алып,
Әйләнеп түңәрәккә бер ҡараны.

Ҡыҙ бахыр был шомлоҡто белде инде,
Атаһына зар иңерәп килде инде;
Йәр өсөн күп алдында теҙен бөгөп,
Башланы атаһына һүҙен инде.

Йәшен түгеп алдында ҡыҙ илайҙы,
Бер йәр өсөн ялынып зар иңрәйҙе,
Йәремдең яңғыҙ йәне ҡалады, тип,
Моң әйтеп, күп алдында йыр йырлайҙы.

Ҡыҙҙың илап әйткәне:

Сәләм бирҙек, аталар,
Ҡотло булһын туйығыҙ!
Күп халыҡты йыйып һеҙ,
Төҙөү [19] булһын уйығыҙ!

17б Сын күңел мән туй булһа,
Ҡуй-ҡуҙынан һуйығыҙ;
Дошман булһа арала,
Азат итеп ҡуйығыҙ!
Ғәҙел батша туй ҡылһа,
Алла өсөн уй ҡылһа,
Бай эсендә зарлыны
Азат ҡылһа кәрәк, ти.
Бөгөнгө көн — яҡшы көн,
Тотҡон әҙәм бар булһа,
Ҡотолорға зар булһа,
Аҙат итең, яҡшылар!
Боҙоҡ булһа туйығыҙ,
Ялған булһа уйығыҙ,
Азат ҡылып яңғыҙҙы,
Беҙ фәҡирҙе һуйығыҙ.
Боронғо, үткән донъяла
Кеше һуйып туй ҡылған
Ишетмәнем, күрмәнем,
Бындай яман уй ҡылған.
Һуғым кәрәк тиһәгеҙ,
Әҙәм итен ейһәгеҙ,
Был зарлыны ҡотҡарып,
Беҙ фәҡирҙе һуйығыҙ!
Күп эсендә был үҙе
Аҙҙай булған бер ғәрип *,
Алып йөр(ө)гән ҡашында
Юлдашы юҡ бер ғәрип,
Серен әйтеп моңлашыр
Юлдашы юҡ бер ғәрип,
18а Ил-йортонан ай(ы)рылған
Ярты йәнле бер ғәрип...
Мин илаймын, теләймен
Ата менән апанан,
Хан ҡаршында ултырған
Бейҙәр менән ағанан...
Аҡыллы туған хан әкәм
Ҡыҙының ҡәҙерен белерме?
Миһман * булып килгәнмен,
Ҡалағаным * бирерме?
Һөйгән йәрҙән айырмаç,
Улды атанан айырмаç,

Әй, йортомдоң яҡшылары,
Һеҙҙән һорап илаймын!
Был бер килгән егетте
Азат ит, тип теләймен.
Уны азат ҡылһағыҙ,
Бар малымды бирәйем;
Ҡулығыҙға һыу ҡойоп,
Көнөктәй хеҙмәт ҡылайым!

Ҡыҙ бахыр йәренән ай(ы)рылмайҙы,
Йәремде азат ит, тип күп йығлайҙы.
Хан үҙе түбән ҡарап, ерҙе соҡоп,
Ҡыҙының был һүҙенә ҡай(ы)рылмайҙы.

18б Ғаҡылһыҙҙың бары ла һаң(ғы)рау булды,
Ҡыҙ һүҙен ишетмәҫтәй миңрәү булды.
Атаһы мән йортонан ҡыҙ төңөлөп,
Күҙенән аҡҡан йәшкә алды тулды.

Илап-иңрәп, йәрендә ике күҙе,
Өй эсендә әйләнеп бер ҡарайҙы:
Ҡайҙа киткән быныӊ бар юлдашы,
Күп дошмандың эсендә йән юлдашы?..

Әйтеп-әйтеп булмаған һуң:

Ғаҡылһыҙға һүҙ әйтһәң,
Күкрәгенә ҡунмаҫ, ти.
Рәхимһеҙгә һүҙ әйтһәң,
Ни әйтһәң дә булмаҫ, ти.

Күҙҙәре юҡ хандарҙың
Һуҡыр булыр көн икән;
Ғаҡылы юҡ ҡарттарҙың
Һаң(ғы)рау булыр көн икән.

Заман ахыр булғансы
Асылмаһын күҙегеҙ!
19а Дошмандан яу булғанда,
Березмәһен һүҙегеҙ!

Көнөгөҙ былдай булғанда,
Хәйерһеҙгә гиз булың.
Зарлы көнгә ҡалһағыҙ,
Һаң(ғы)рау йортҡа гиз булың!

Малығыҙҙы алған юҡ,
Күңелегеҙ һис ҡалған юҡ,
Атағыҙҙы үлтереп,
Муйынына ҡылыс һалған юҡ.

Найза, ҡылыс янға алып,
Балта, бысаҡ ҡулға алып,
Атағыҙҙы үлтергән
Дошманығыҙ был имәс *.
Ғәйебе юҡ әҙәмдең
Ҡанын түгеү юл имәс.

Ҡыҙ бисара йортонан тоңолопто,
Йәренә яҡынырaҡ ул килепте.
Атаһы мән йортонан дарман тапмай,
Йә күҙенән ҡанлы йәше түгелепте.

Ҡыҙҙың егеткә әйткәне:

Әй, егет, ҡыуанма был уйынға:
Шайтан кергән ҡуйынға!
Аҡылыңды йыймаһаң,
Ҡылыс етәр муйынға.
Уай, егет, уай, мас егет!
Аҡылыңды йыймаҫ егет!
Йәң сығыуға етепте,
Күп әсендәй аҙ егет.
19б Буҙйегетем, күҙең ас,
Әүәлдән ҡушкан йәр килде,
Һикереп тороп ишек ас!
Ҡылыс сапмай башыңды,
Зарланып йәрең килгәндәй.
Илап килгән йәремдең
Йорто телен алмайҙы.
Ҡаты бауыр хан әкәм
Ҡыҙына күҙен һалмайҙы [20]...

Йәп юлдашы ишектә илап ултыр,
Хоҙайҙан, аман ҡыл, тип теләп ултыр.
Хан ҡыҙына рәхим буламы, тип,
Ҡыҙҙың һүҙен ишектә тыңлап ултыр.

Бисара белде инде булмағанын,
Атаһы ҡыҙының һүҙен алмағанын.
Дуҫтымдың йөҙөн күрәйем тип,
Өйгә керҙе, ҡорбан ҡылып йәнен.

Дуҫтының ҡашына яҡын килде,
Ҡыҙҙап дарман булмаҫын инде белде.
Үлһәм, бергә ерҙә үләйек тип,
Сын йәнен дуҫты өсөн ҡорбан ҡылды.

Мас булып, дуҫты бының ҡарамайҙы,
Һис ҡайһы бының хәлен һорамайҙы.
«Дуҫтымдың ҡолағына йыр йырлайым,
Тик ултырып сығыуым ярамайҙы».

20а Буҙйегеткә дуҫтының йырлап әйткәне:

Бер шәһәрҙең эсендә
Бер йөр(ө)гәнгә оҡшайһың.
Ҡай ерлек сән, уай, егет,
Бер күргәнгә оҡшайһың.
Мин илеңдә торғанмын,
Ата-анаңды күргәнмен.
Сән өйөңдә хан инең,
Һәр бер эшкә дан инең,
Үҙеңдәй булған ғәрипкә
Тыуғандан һуң дан инең.
Былбыл инең ереңдә,
Сыкмаҫ гүргә төшөп сән,
Ҡош ҡотҡармаҫ ҡарсыға,
Имен юлға китеп сән,
Теләп булмаҫ дошмандан
Был хурлыҡҡа төшөп сән,
Маңлайыңдин тир ағып,
Ҡай(ы)рылмаҫҡа төшөп сән.
Тирәнек ергә барып сән —
Тиҙ тороroң ҡыйын, ти;
Янған утҡа төшөп сән —
Һүндеререң ҡыйын, ти...

20б Аман булғыл, йән дуҫтым,
Инде ҡайҙа күрермен?
Бороңғолай береген,
Инде ҡайҙа торормон?
Ҡиәмәт көн булғанда,
Күрһәм шунда күрермен.

Ҡашында йән юлдашы йыр йырлайҙы,
Түрҙә ултырған хан ҡыҙы зар иңрәйҙе,
Буҙйегет, был йырҙы ишеткән һуң,
Күҙен асып дуҫтына бер ҡарайҙы.

Күҙен асып, Буҙйегет дуҫтын күрҙе,
Ҡасыуға ҡыҙ мән егет мәгкүл күрҙе.
Дошмандың ҡасд * ҡылырын белгән һуң,
Ишеккә йән тырмашып [был] югерҙе.
«Йә алла!»— тип, атына менеп алды,
Өйҙәге күп дошмандар тоймай ҡалды.
Дуҫты мән икеһе атҡа менеп,
Найза * мән ҡылыстарын ҡулына алды.

Хан ҡыҙы: «Аман-иҫән барың,— тине,—
Ун көндә әҙер булһын ярың»,— тине.

[Хан] быларҙың ҡасҡанын белгәндән һуң:
«Тиҙ барып, уның башын алың!»— тине.
Күп ғәскәр бер-беренә тығылаҙы,
«Беҙҙәрҙин ҡасып, ул ни ҡылаҙы?»
Өҙәңгенең уң яғын кейгән икән,
Менәмен тип атына — йығылаҙы! [21]

Буҙйегет юлдашы мән китеп ҡалды,
Артынан күп ғәскәр ҡыумаҡ булды.
21а Ҡанһыҙ ғәскәр атына менеп алып,
Артынан ҡыуып етеп, урға алды [22]...

Бар ирҙе бер батшаның улы, тине,
Күп ине алтын-көмөш поло *, тине.
Хан уған ҡыҙын бирмәк булған икән,
Араһы бер айлыҡ юл, тине.

Бер яйҙаҡлы килде лә хәбәр алды,
Күп ғәскәр йыйып торған, алып барҙы.
Мең кеше ҡашына юлдаш ҡылып
Килгәнен күргән әҙәм таңға ҡалды.

Хан алдына килде лә сәләм бирҙе,
Хан, килгәнен хуш күреп, ғәләйкәләне *.
«Кәрәк көндә гиз булдың, кейәүем»,— тип,
Үҙенең уң яғынан урын бирҙе.

21б Хан тороп: «Балам, инде ултыр,— тине,—
Ҡыҙымды вәғәҙә ҡылдым былтыр,— тине,—
Арабыҙҙа жаду * ғуй пәйҙа булды,
Башын киҫеп, һин мәғән килтер»,— тине.

— Тәксир хан, рохсәт бирһәң, мин барайым,
Башын киҫеп, һеҙгә мин килтерәйем.
Атына, рохсәт алып, менде, тине,
Күп ғәскәрҙең су ҡабығын [23] күрҙе, тине.
Ғәскәренән биш йөҙ кеше ҡайтҡан икән,
Алдында асыу ҡылып торҙо, тине.

Күп ғәскәр: «Беҙ орошҡа барҙыҡ,— тине,—
Мең кеше уртабыҙға алдыҡ,— тине.—
Яртыбыҙҙы ул беҙҙең ҡырып һалды,
Көсөбөҙ беҙҙең етмәй ҡалдыҡ,— тине.—
Алдына гиз килгәнде ҡырып һалды,
Үҙе — арттан, юлдашын алға һалды.
Көсөбөҙ етмәй, унан ҡасып киттек,
Дүрт йөҙ кеше беҙҙәрҙин ятып ҡалды».

Зәйтүндең[24] яуабы:

Хан ҡыҙын былтыр беҙгә вәғәҙә ҡылған,
Ике хан бер-беренә фәтә * ҡылған.
Бынса илен ҡырҙырып, ханың үҙе
Беҙҙе әүәлдә саҡырмай хата ҡылған.
Күрегеҙ, һеҙгә ҡыҙыҡ күрһәтәйем,
Уҡ менән башын уның өҙә атайым.
Икеһенең берләйен башын киҫеп,
Хансағыҙға апарып күрһәтәйем.

22а Күп ғәскәр бергә инде йөр(ө)нө, тине,
Ҡыраһын бисараның күрҙе, тине.
Буҙйегет ташҡа бер уҡ атҡан икән,
Ташҡа уҡ кизенән батты, тине.

Был да инде бер уҡ атты, тине,
Ташҡа уғы уртаһынан батты, тине.
Үҙ косонең кәм икәнен белгән һуң,
Йортона ярлыҡ әйтеп ҡайтты, тине.

«Беҙҙән ул ҡасты, инде килмәҫ,— тине,—
Был шәһәргә ул инде инмәҫ,— тине.—
Хансағыҙ беҙҙең берлән ҡушылған һуң,
Килһә лә эт ҡәҙәрле күрмәҫ,— тине.—

Хансаң яҡшы күрмәһә күргән сығыр.
Доға уҡып, башын уның борған сығыр.
Ханса беҙҙе күрһә, ҡорбан булыр,
Борон беҙҙе килмәҫ тип йөр(ө)гән сығыр!»

Күп ғәскәр теркерәшеп ҡасты, тине
Үлтерҙек, тип, хансаға әйтә килде.
Ҡыҙ, бахыр, терелектән өмөт өҙмәҫ,
Суйтсә дә * көндән-көнгә йөҙө һулды.

Буҙйегеттең хәле[25]

Бисаралар яралы булған икән,
Йән юлдашы йығылып ҡалған икән.
Күҙен асып ҡараһа, тауға килде,
Иҫе ауып ҡалғанын инде белде.
Бейек тауҙың ҡашына килеп ине,
Тауға бер аҙ төшөүгә күңел ҡылды[26].

Ат ялына ҡул ҡарышып ҡалған икән,
Дошмандар күп яраны салған икән.
22б Ҡашына ҡарап торһа, юлдашы юҡ,
Бисара бер ерҙә үлеп ҡалған икән.

«Йән юлдашым, бисара, үлгән икән,
Күп дошман эсендә ҡалған икән.
Тере булһа, ҡашымда йөр(ө)мәçме ине?
Күкрәгенә күп ҡайғы һалған икән».
Һәр ерҙә яраһы бар, ҡан ағаҙы,
«Был ерҙә үлһәм, мине кем бағаҙы?»
Күп яранан үлемде уйына алып,
Ике күҙҙән ҡанлы йәш инде ағаҙы.
Бер ергә атын бәйләп төштө, тине,
Ғәзиз йәндән өмөтөн өҙҙө, тине.
«Яңғыҙлыҡта янымда юлдашым юҡ»,—
Башланы дуçтын юҡтап һүҙҙе, тине.

Буҙйегеттең дуçтын юҡтап илағаны:

Туҙан баçты тунымды,
Тупраҡ баçты юлымды.
Ҡайғы баçты күңелемде,
Асылар көн булырмы?
Ғариплеккә төшкәндә,
Дуçтым минең килерме?
Иçемә алып юҡтаһам,
Минең хәлем белерме?
Яңғыҙлыҡҡа төшкәндә,
Бер күрер көн булырмы?..
23а Боронғолай берегеп,
Бер йөрөр көн булырмы?..
Әҙләйем тиһәм, дарман юҡ,
Һине ҡайҙан табайым?
Бергә үлһәк, арман юҡ,
Һине ҡайҙан табайым?
Дуçтын юҡтап, зар ҡылып, иңрәйҙе,
«Күрәменме дуçым?»— тип күп илайҙы.
Бейек тауҙың башында бер ҡарлуғас
Балаһына ем бирен аçырайҙы.
Ҡарлуғас ҡарлуғасҡа ем бирәҙе,
Ҡарындаш ҡарындашҡа дим бирәҙе.

«Яңғыҙлыҡҡа төштө ғәрип башым,
Минең буйтеп йөрөгәнем кем beләҙе?
Илағаным белмәйҙе атам минең,
Зарлығымды белмәйҙе анам минең.
Ғәриплеккә төшөптө ғәрип башым,
Һорарға һис кем юҡ хәлем минең...»

Ағастың башын киçһәң, төбө ҡала,
Икәүҙең бере үлһә, бере ҡала.
Яңғыҙҙың үҙе үлһә, нейһе ҡала?—
Менгән ат, кейгән тун ятҡа ҡала.

23б ... Был донъяның эсендә үлмәй ҡалған
Булырмы?— Уйлағандың барын алған.
Баһауиҙең башында ҡайғыһы бар,
Шуның өсөн был йырҙы табып алған.

Яҙҙым мин моңло күң(е)лем асылһын тип,
Һәр ергә был йыр һүҙем сәселһен тип;
Донъяла төрлө-төрлө әҙәм булыр,
Ҡайғылы әҙәм күңеле баҫылһын тип.

### Буҙйегеттең хоҙайға палиш* ҡылғаны

24а ... Бисара тәңреһенә палиш ҡылды,
Яратҡандан башҡаны алыҫ белде.
Бисара палиш әйтеп ултыра ине,
Ҡара сысҡан алдына ҡаршы килде.

Сысҡанды был бисара тотоп алды,
Үҙендәй һәр еренә яра һалды.
Боронғонан ишеткән һүҙ бар икән,
Дәрденә был сысҡанды даркар * ҡылды.

24б Сысҡанды ибас бәйләп [27] ҡуя бирҙе,
Сысҡан, әҙләп, һәр ерҙән сүпте ейҙе.
Һәр ерҙән сысҡан сүпте әҙләй-әҙләй,
Бер сүп ейеп, сысҡанға шифа булды...

Сысҡандың сарҡытын [28] табып алды,
Бер аҙ ейеп, яраға уҡып һалды.
Яраһының өҫтөнә һалып ине,
Яраһы һау кешеләй була ҡалды...

### Дуҫтының хәле

Бисара дуҫты бының ҡалған икән,
Уға ла күп яраны һалған икән.
Күп ғәскәрҙең эсенән дуҫтын тапмай,
Баяғы абыҙына барған икән.
Ете көн дуҫтын тапмай әҙләп йөрҙө,
Ҡыҙға, йәрен табалмай, хәбәр бирҙе.
Хан ҡыҙы мән икеһе ғаҡыллашып,
Инде килһә, ҡасыуҙы мәғҡүл күрҙе.

Ҡыҙ әйтәҙе: «Уны тапҡыл,— тиеп,—
Үлеме, тереме, уны апкил,— тиеп.—
Был шәһәрҙең эсендә бер кимпер * бар,
Йәшереп өйөнә уның апкил»,— тиеп.

Юлдашы батшаһып [29] әҙләй йөрҙө,
25а Күп күрепһә [30], атының башын борҙо.
Бер түбәнең башына килеп ине,
Йәп юлдашы киләҙе, уны күрҙе.

Атына мепеп, дуҫтына ҡаршы йөрҙө,
Бер-беренә йығлашып ҡулып бирҙе.
Береп-бере күрешеп күңел тынды,
Шәһәргә керәйек тип, атҡа менде.
Дуҫты ҡыҙ өйөнә йәйәү килеп:
«Аман йәрең килде»,— тип хәбәр бирҙе.

Ҡ ы ҙ:

— Һөйөпсөгә теләгәнең алғыл,— тине,—
Ҡулыңа алтып йөҙөк һалғыл!— тине.—
Кимпергә биш мең алтып бирмәк булдым,
Йәремде барып упан күрмәк булдым,
Кимпергә хәбәр биреп, вәғҙә ҡылдым,
Кистән барып, төпдә бергә тормаҡ булдым.

Хан ҡыҙы йәп дуҫтыпа хәбәр ҡылды:
— Кимперҙең өйөнә алып барғыл,— тине.—
Һәр ерҙән дошман беҙгә күҙ һалаҙы.
Түҙер инде, кимпер беҙҙең юлда!— тине.

Шәһәрҙән берәү быны күрҙе, тине:
«Баяғы ҡыҙҙың йәре килде!»— тине.
Бисаралар кимпергә килгәп икәп,
Күргәндәр ханға әйтәм тиеп китте.
[Ошаҡсы] хан алдыпа килде, тине,
Ни йомошка килгәнен әйтте, тине:
— Баяғы дошманығыҙ икс егет
Ул кимперҙең өйөнә килде,— тине.

Бейҙәре хан алдына килде, тине,
Ике егет килгәнен белде, тине,
«Был дошмандап беҙ ҡайтеп * ҡотолабыҙ?»—
Йортоп йыйып кәңәш ҡылды, тине.

Баяғы Зәйтүн батыр бергә килде,
Кейәү булып сыкмайҙы итергә [31], тине.
Хан ҡыҙып аламын тип ҡыуапаҙы,
Сәләм бирһә, алаҙы ҙурға, тине.

25б — Тәксир хан, рөхсәт бирһәң, мин барайым,
Әмәл ҡылып, уны [мин] үлтерәйем!
Ул кимпер өйөнәп тере тотһам,
Алдыңа һөйрәп [алып] килтерәйем!

— Уай, балам, уны үлтерһәң, ҡыҙ һинеке,
Буламын, дошман китһә, дуҫ һинеке!

Хандан рөхсәт алған һуң йөрҙө, тине,
Кимперҙең өйөнә был килде, тине.
Бер ҡуржынға тултырып алтын биреп,
Кимперҙе ахыр алдап орҙо [32], тине.
«Уай, кимпер, һиңә алтын мул бирәйем,
Үлгәнсе хеҙмәткәр ҡол бирәйем.
Уларҙы ыу бирһәңиҙә үлтер, кимпер,
Өмөрөң үтмәй тороп, юл бирәйем! [33]

Таң иртән үк тороп, кимпер, аш ҡылырһың,
Биһуш * тигән дарыу алдырырһың.
Хан һиңә, быны үлтерһәң, чин бирәҙе:
Бер ҡәүм * ҡатындарға баш булырһың».

Ахыр юлдан кимпер аҙҙы, тине,
Быларға инде соҡор ҡаҙҙы, тине.
Баҙарҙан биһуш тигән дарыу алып,
Таң иртән кимпер ҡылды эште, тине.

Бисара был дарыуҙы эсеп һалды,
Юлдашы, белмәй быны, тышта ҡалды.
«Юлдашы юҡ, берепә бирҙем дарыу,
Үлтерһен!»— тип, батшаға хәбәр һалды.

Баяғы Зәйтүн үҙе килде, тине,
Ғәриптән инде кикен * алды, тине.
Таң иртән баҙарҙа үлтерәм тип,
Зинданға тимерләп һалды, тине.

Һалдаттар батшаға хәбәр һалды,
Дошмандан хандың инде күңеле тынды.
26а Ҡыҙымды мин Зәйтүнгә бирәмен тип,
Йортона: «Туй ҡылың!»— тип хәбәр һалды.

Хан ҡыҙын алам тип Зәйтүн ҡыуанаҙы:
«Был ҡыҙҙы минән башҡа кем алаҙы?
Буҙйегетте зинданға һалғандан һуң,
Күңеле һыуынып хапса [пың]»,— тип уй ҡылаҙы.

Хан иртүк ярлыҡ ҡылды: «Үлтерең!— тип,—
Баҙарға алып барып үлтерең!— тип.—
Дошманымдың үлгәнен йортом белһен,
Дошман үлеп, дуҫ күңелен тындыр!»— тиеп.

Һалдаттар исел * ирҙе алып барҙы.
Баҙарға ил йыйылды ундан-һулдан.

Бисара мас булып, аҡылы юҡ,
Әжәл инде бында дусар булды.

Юлдашы хан ҡыҙынан ҡайтып килде,
Бер шомлоҡтоң булғанын инде белде.
Кимперҙең асыуланып йәнеп алды:
Дуҫтымдың ҡопон һинән алайым тип,
Башын сабып, киҫкеләп, эткә һалды.

Бисара дуҫтын юҡтан зар иңрәйҙе,
Гиз килеп күрепгәндән бер һорайҙы.
Һәр ерҙән һорай-һорай килеп ине,
Баҙарҙа йыйылып, ил шаулайҙы.

Бер ерҙә күп халайыҡ ҡарашыптур,
Һәр ерҙән аҫыусыны һорашыптур,
Үлтереүсе бер вәзирҙең ҡулындатур,
Аҫыусы, киҫеүсе мән талашыптур.

Берәүе, аҫамын тип, еп алыптур,
Берәүе алмас ҡылыс ҡулға алыптур,
Вәзир менән башҡаның бары:
«Әҙер ҡылайыҡ ярлыҡса»,— тип һөйләпептур.
Дуҫтына яҡын килеп ҡәҙәм баҫты,
Нә ҡыларын белмәйҙе, ҡаты шашты.
26б Илап-иңрәп, ҡашында тороп ине,
Бер замапда бисара күҙен асты.

Аяғына ҡыршау бәйләпеләр,
Үлтереүгә урынын һайланылар.
Түңәрәгенә ҡараһа, бары дошман,
Ғәрип йән сығыуға ҡыпанылар *...

Бисара үләрен инде белде,
Дуҫтына: «Бире кил»,— тип, бер ым ҡылды,
Дуҫтына ҡорбан инде йән юлдашы,
Ҡашына ул яҡынраҡ килеп торҙо.

Ауыҙын асып, дуҫтына сәләм әйтте:
«Терелек инде, дуҫтым, беҙҙән китте».
Ахыр йәндән бисара төңөлгән һуң,
Иле мән йортона сәләм әйтте.

Буҙйегеттең дуҫтына йырлағаны:

— Уай, йән дуҫтым, яҡын кил,
Арзым * һиңә әйтәйем.
Һинән башҡа дуҫтым юҡ,
Серем кемгә әйтәйем.

Ҡарсыға ҡоштоң ҡанаты
Ҡайырылыр көн булады.
Аманлашып дуҫтынан
Айырылыр көн булады.
Бер көн ҡалмаҫ дуҫтынан
Ҡайырылыр көн булады.
Һай, йән дуҫтым, яҡын кил,
Әжәл беҙгә етепте;
27а Күп дошмандың эсендә
Дарман беҙҙән китепте.
Был көндән һуң, йән дуҫтым,
Инде һеҙҙе күрмәк юҡ,
Боронғолай береген,
Инде бергә тормаҡ юҡ.

Был ерҙән һеҙ ҡайтығыҙ,
Йортҡа сәләм әйтегеҙ.
Моңло ҡалған атама,
Зарлы булған анама,
Яңғыҙыңдың һүҙе тип,
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.
Ҡарсыға ҡоштай ҡундырған,
Ҡашында һөйөп ултыртҡан,
Дидарыма * туймаған,
Яңғыҙым тип уйлаған,
Моңло ҡалған атама,
Зарлы булған анама —
Ата берлән анаға
Сәләмемде әйтә күр.
Бала ананан тыумаҡ бар,
Бойороҡ булһа, тормаҡ бар.
Әжәл етмәгән әҙәмгә
Артыҡ өмөр һөрмәк бар.
Ҡанатынан ҡайрылған,
Яңғыҙынан айрылған,
Ҡайғыһы күп анама,
Сабыр ҡыл, тип әйтә күр.
Кемде балам тиер ул?
Кемде мин тип һөйөр ул?
Беҙ иҫенә төшкәндә,
Янған утҡа көйөр ул.
27б Көйгәненә гиз булһаң,
Сабыр ҡыл, тип әйтә күр.

Башымдағы бүркемде
Моңло ҡалған атама,
Ҡулымдағы йөҙөктө
Зарлы булған анама

Үҙ ҡулыңдан биргәйһең,
Күңлең аулай йөргәйһең.
Башымдағы бүркемде
Кейһә лә, ул онотмаҫ.
Яңғыҙ уғлым килер, тип,
Ул беҙҙәрҙе көтмәһен.
Ҡулымдағы йөҙөктө
Дуҫ ҡулыңа һалғайһың,
Сәләме тип яңғыҙың,
Анама һин биргәйһең.
Яңғыҙым, тип илаһа,
Күңлең аулай йөргәйһең.

Беҙ икебеҙ пар ипек,
Һис айырылмаҫ йәр ипек.
Бер көң һине күрмәһәк,
Күрәйек тип зар ипек...
Беҙҙең өсөн, йән дуҫтым,
Күп рәнйеүҙе күрҙең һин;
Ата-анаңан айырылып,
Бер миң өсөн йөрҙөң һин.

28а Илеңә һин барырһың,
Ата-анамды күрерһең.
Беҙҙән хәбәр һораһа,
Арзың * әйтеп иларһың.

Барһаң, һине күргәйләр,
Ҡашыңа килеп торғайлар.
Йыйылған күп йәмәғәт
Беҙҙән хәбәр һораһа,
Күҙе күргән юлдаштар,
Бергә йөргән моңдаштар,
Беҙҙе иҫенә алғандар,
Беҙҙән мәхрүм ҡалғандар,
Беҙҙе күрмәй ҡалғандар
Беҙҙән хәбәр һораһа,
Сәләмемде әйтерһең.

Беҙҙән рәнйеү алғандар,
Беҙҙән күңел ҡалғандар
Күп эсендә бар булһа,
Рази булһын, әйтә күр [34]...

28б Д у ҫ т ы н ы ң  я у а б ы:

— Айрылырың белгәнмен,
Ҡурҡа-ҡурҡа йөргәнмен;
Алла әмеренә сара юҡ,
Муйын һонон торғанмын.

Аңа һөтөн имешкән,
Йәндән татлы һөйөшкән,
Заман ахыр булғансы
Айырылмайыҡ тиешкән,
Йәндән татлы йән дуҫтым,
Йәнем ҡорбан ҡылһам дә,
Ошо күптең алдында
Һеҙҙең өсөн үлһәм дәй [35]...

Күп дошмандың эсендә
Ҡотолмаҫтай көн булды,
Башҡа төшкән эшебеҙ
Онотолмаҫтай көн булды.

Йәндән татлы йән дуҫтым,
Күп көн бергә йөрмәнем.
Был көндән һуң ахыры
Инде һеҙҙе күрмәмен.

Һин үлһәң, мин ҡайтырмын,
Ғарзың ҡайтып әйтермен,
Атаң сыҡһа алдымдан,
Нә тип яуап әйтермен?

Аңаң сығып алдымдан,
29а Ҡана, тиһә, олоном,
Алдымда тороп зарланһа,
Нә тип яуап әйтермен? [36]...

Б у ҙ й е г е т т е ң ү л г ә н е р е

Бисаралар моңлашып күп торопто,
Ғарызлашып икәүе моңлашыпты.
Баҙарҙағы йыйылған күп йәмәғәт
Быларҙың һүҙен аңлап илашыпты.

Бер заманда вәзире килде, тине,
Бисаралар үләрен белде, тине.
Һалдаттар алдында хәҙер тороп,
«Ҡылыс менән сабың!»— тип ярлыҡ ҡылды.

Үлтерергә быны [инде] бәйләнеләр,
Ҡылысын үткер ҡылып ҡайранылар.
Һалдаттар ҡылыс менән сабып ине,—
Үтмәне ҡылыс, йәнде гене ҡыйнанылар.

Вәзире: «Үткер ҡылыс килтер!— тине,—
Кисектермәй быны тиҙ үлтер,— тине.—

Битендәге пәрҙәһен асып сабың!
Батшаның күңеле, сапһаң, тыныр»,— тине.

Битендән ҡыл пәрҙәһен һуйып алды,
Ялаңғас муйынына ҡылыс һалды.
29б Башында алтын айҙар толомо бар,
Күргән әҙәм быларҙы таңға ҡалды.

«Тик кеше имәс *, тип уйлай инек,
Күп кеше уртаға алып һөйләй инек.
Ҡайтайыҡ,— залим батша тел алманы,
Үлтермәй бисараны ҡуй, тип инек».

Шул ерҙә Зәйтүн батыр аҡыраҙы,
Һәр беренә: «Үлтерең!»— тип саҡыраҙы.
Хан ярлығын боҙоуға хәлең бармы?
Һалдаттарға: «Сабың!»— тип аҡыраҙы.

Һалдаттар башын өҙә сабалмайҙы,
Ғилажын * үлтереүгә табалмайҙы.
Үлтерәм тип ҡыйпапты ғәзиз йәнде,
Ҡылыс һалдаттар телен бер алмайҙы.

Б у ҙ й е г е т т е ң   я у а б ы:

— Эй, ғәскәр, беҙгә яман һөйләмәгеҙ,
Ҡылыс итем киҫер, тиеп уйламағыҙ.
Табанымдың аҫтында алмас ҡылыс,
Алып сабың, йәнемде ҡыйнамағыҙ!

Кәүҙәмде һис кем минең өҙмәҫ,— тимен,—
Үҙ ҡылысым булмаһа, киҫмәҫ,— тимен.—
Йәнемде алһағыҙ, ҡыйнамай ал,
Тәҡдир ҡылһа, тәңрем боҙмаҫ,— тимен.

Бисараның итеген сисеп алды,
Кәүҙәнән ғәрип башты өҙҙө, тине.
Алты бөкләп һалған алмас ҡылыс
Бер сапҡанда муйынын өҙҙө, тине.

30а Ғәзиз йәне ҡыйпалып ергә төштө,
Айҙай йөҙө ярҡырап * ергә төштө.
Ҡашында йәш юлдашы илап ултыр,
Дуҫтынан айырылып өмөт өҙҙө.

Зәйтүн батыр: «Алың башын,— тине,—
Дарға бәйләп, юғары аҫың!— тине.—
Йорт эсендә үлгәне мәғлүм булһын,
Хан, ханса күңелен баҫың!»— тине.

Ғәрип башты дарға аҫты, типе,
Йорт бары илап, упаң касты, типе.
Ханға, үлтерҙек, [тип] әйтеп килде,
«Ҡотолдоҡ, тип, дошмандан» [37], сачу сәсте.

«Туй ҡылың!»— тип, [хан] йортона ярлык ҡылды,
Батшаның үлгәнеп йорто белде [38].
Ҡыҙ бахыр был эштән иҫһеҙ ғафил *,
Мал һуйып, туйын инде ҡылды [39], типе.

Бисара ул шәһәрҙә үлеп ҡалды,
Дуҫтыһы үлгәнеп күреп ҡалды:
Дарға башты аҫканын күргәндән һуң,
Илай-илай бисара талып ҡалды.

Һай-һай донъя, һай донъя,
Кемгә вафа * ҡылдың һин?
Искәндәр [40] дик * батшаны
Үҙ ҡулыңа алдың һин...

Алып-алып туйғың юҡ,
Һис тә береп ҡуйғың юҡ.
30б Кисәге йөргән йәш дуҫтым
Бөгөн дағы алдың һин...

Ҡарасәс һылыуҙың һүҙе

Ҡыҙ һаҡлайҙы, юлдашы киләме, тип,
Килеп, беҙҙән бер хәбәр аламы, тип;
Ҡыҙ өйөнә юлдашы килмәгән һуң,
Ҡыҙ ҡурҡты, бер шомлоҡ буламы, тип.

Кимпергә хан ҡыҙы килде, типе,
Кимпер үлеп ятыр,— күрҙе, типе.
Өйөнә илай-илай ҡайтып килде,
Бер шомлоҡтоң булғанын [инде] белде.

Барын да ҡырҡ ҡыҙҙың ҡашына алып,
Шәһәрҙән йәрен эҙләп йөрмәк булды.
Тон эсеьдә ҡай ерҙә тауыш булһа,
Айнаҡтан * бары килеп ҡолаҡ һалды.

Бер ергә килһә, күп йорт туй туйлайҙы,
Ошонда ни бар, тип ҡыҙ уйлайҙы.
Һәр айнаҡтың төбөндә йыр йырлайҙы,
Йәрен юҡтап, бисәра зар иңрәйҙе.

Ҡарасәс һылыуҙың айнаҡтан йырлағаны:

— Төйә килеп буҙдайҙы,
Бутаһы уның юҡ микән?
Бута күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ микән?
Һыйыр килеп мөңрәйҙе,
Быҙауым тип илайҙы;
Бисараның быҙауы
Был уйында юҡ микән?

Ҡуйҙар килеп мөңрәйҙе,
Ҡузыһы [41] [өсөн иңрәйҙе;
Бисараның ҡузыһы
Был уйында юҡ микән?
Йылҡы килеп кешнәйҙе,
Ҡолоном тип эҙләйҙе;
Бисараның ҡолоно
Был уйында юҡ микән?

Былбыл ҡоштар һайрайҙы,
Ҡыҙыл гөлө юҡ микән?
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет
Был уйында юҡ микән?

Айнаҡтан бисара йыр йырлайҙы,
Өй эсендә йәмәғәт йыр тыңлайҙы.
Һис әҙәм хан ҡыҙы тип уйламайҙы,
Бисара һәр кемгә бер иңрәйҙе.

Күп эсендә бер әҙәм белде, тине,
Бисара хан ҡыҙы икәнен күрҙе, тине;
Бисара йәрен юҡтап йөргән икән,
Айнаҡтан йырын йырлап яуап бирҙе:

— Төйәләр килеп буҙдайҙы,
Бутаһы уның юҡ сығыр;
Бута күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр.

Йылҡы килеп кешнәһә,
Ҡолон уның юҡ сығыр;
Ҡолон күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр.
Һыйыр килеп мөңрәһә,
Быҙау уның юҡ сығыр;
Быҙау күҙле Буҙйегет
Был уйында юҡ сығыр.

Ҡуйҙар килеп мөңрәһә,
Ҡузыһы уның юк сығыр;
Ҡузы күҙле Буҙйегет
Был уйында юк сығыр.

Былбыл ҡоштар һайраһа,
Ҡыҙыл гөлө юк сығыр;
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет
Был уйында юк сығыр...

...Йәрендән хәбәр һораһаң,
Ҡайтмаç ергә киткән ул.

Ишетеп был һүҙҙе ҡыҙ илап килде,
Әкәһенән * ҡыҙ башын [42] һорап килде.
«Әкәм минең аң * аулай барған икән,
Сауға * бир, әкә»,— тип иңрәп килде.

— Ишетеп бән *, уай, әкә,
Аң аулай китеп сән *,
Бала шоңҡар атып сән,
Яҡшы күргән ҡыҙыңа
Бер сауғаны ҡыймаймы?

Тоҙаҡ ҡора ятып сән,
Бала кейек атып сән;
Атып алған аңыпан
Беҙгә сауға бирмәйме?
Яҡшы күргән ҡыҙына
Бер сауғаны ҡыймаймы?
Атҡа менеп сығып сән,
Дошманыңды йығып сән,
Донъя инде киң ҡалды.
Үлмәç хәбәр уғып сән,
Бер көп, әкә, иларһың,
Күп мән дошман булырһың.
Эш үткән һуң файҙа юк,
Әкәм дәрдле * булырһың.

Уйлағавың белдем мин,
Һинең төрлө уйың бар:
Берәүгә беҙҙе бирер уйың бар,
Йорт эсендә туйың бар.

Тимер алтын булмаç, ти,
Баҡыр көмөш булмаç, ти;
Иркем бар, тип эш ҡылма,
Ҡыҙың телен алмаç, ти.] [43].

31а Кейәү ҡылған Зәйтүнең,
Һыртын алтын ҡылһаң да,
Эсен гәүһәр ҡылһаң да,
Үҙ йәремдәй булмаҫ ул.

Алтынға йөпөп буяһаң,
Ҡарға шоңҡар булырмы?
Ҡанатына ҡап яҡһаң,
Шоңҡар ҡарға булырмы?
Яҡшы күргән кешеңде
Нурға ҡушып килтерһәң,
Тамам йортҡа белдерһәң,
Үҙ йәремдәй булырмы?
Кейәү һуйып туй ҡылдың,
Ҡыҙың телең алырмы?

Буҙйегеттең һөйәген
Мең Зәйтүнгә бирмәҫмен.
Үлгән йәрем улаһын *
Алтынлы өйгә бирмәҫмен.
Ундай йәрҙе тапһаң да,
Һис тә ҡабул күрмәҫмен.

Аҡылы юҡ әкәмдең
Ҡылған эшен ҡайтайын?
Үлгән йәрем күрмәһәм,
Тере йөрөп nитәйен?

Х̣ан[дың] ҡыҙына биргән яуабы:

— Илама, ҡыҙым, илама,
Ил эсендә яҡшы күп.
Илдән-илгә йөрөрмөн,
Һине уға бирермен.
Телем, балам, ҡайырмай,
Һөйгәнеңсә ҡылырмын:
Алтынлы утау * тектереп,
Хеҙмәтселәр ҡуйырмын.
Башымдағы тажымды,
Аҫтымдағы тағымды,
Ҡыҙым, сәған * бирермен.
Арғымаҡҡа менгеҙеп,
Мең ҡол, балам, бирермен.
Мең төйәге йөк артып,
Мең көң *, балам, бирермен.

Донъя йөҙө киң, балам,
Табып алып бер яҡшы.
Һөйгәнеңә бирермен.

Мал яҡшыһын алырһың,
Һөйгәнеңә бирерһең.
Боҙма, балам, уйыңды,
Хуп төҙорһөң буйыңды [44].

Хандарҙан хат киләҙе,
Бары һине һөйәҙе.
31б Тутый ҡоштай егеттәр,
Бары һине теләйҙе,
Һине алһам тип илайҙы.

Сакырып алып торғоҙоп,
Йөҙөп, балам, күргеҙеп,
Күп ҡайғырма, йән балам,
Һөйгәнеңә бирермен.

Ҡарасәс һылыуҙың һүҙе:

— Балаң күңеле ҡалғандыр,
Арбаһаң да, булмаç ул.
Нур егетен килтерһәң,
Уны ла ҡабул күрмәç ул.
Һөйәктәрем һынған һуң,
Һылаһаң да, булмаç ул.
Йөрәгем янып көл булды,
Һыу койһаң да, һүнмәç ул.
Башым ергә тейгән һуң,
Күтәрһәң дә, булмаç ул.
Күңел ҡоштай осҡан һуң,
Ҡайтып ҡулға ҡунмаç ул.
Һөйгән йәрем киткән һуң,
Нә ҡылһа ла, булмаç ул.
Эсем боҙға тулған һуң,
Йөрәгем таш булған һуң,
Күрекләһәң [дә], иремәç ул...

Арғымаҡҡа менгеҙгән
Мең ҡолоңдо нитәйен,
Ҡол хеҙмәте үткән һуң?
Көңгә хеҙмәт ҡалдырмай,
Үҙем аҡ исем ҡылырмын [45].
Алтынлы утау ҡылғансы
Ерҙән мула * ҡылырмын.

Башындағы тажыңды,
Аçтындағы тағыңды
Ҡулыма тотоп нитәйен? —
32а Таҡҡа ултырыр кешем юҡ;

Мал яҡшыһын нитәйен? —
Алып менер кешем юҡ.
Илдән-илде аралап
Тапҡан яҡшың нитәйен?
Үҙ тапҡаным киткән һуң,
Үҙгә йәрҙе нитәйен?
Беҙҙән һуңғы ҡыҙыңды,
Ҡыҫыр ҡалған бейәләй,
Ҡайырмаған төйәләй,
Илдән-илде аралап,
Илдән яҡшы күренһә,
Алып шуға бирерһең.

Бисара ҡыҙ илай-иңрәй һүҙе бөттө,
Атаһының ҡашынан зарлап китте.
Үлһәм, йәрем юлында үләйем тип,
Бер заманда шәһәргә яҡын етте.

Бер заман дарға аҫҡан башты күрҙе,
Бер күрһөнөн, иҫе ауып, ергә төштө,
Иҫен йыйып, ҡанлы башты ҡулға алып,
Ҡан аралаш ағыҙҙы күҙҙән йәште.

— Хайран башың, хан башың
Киҫелгәнгә оҡшайҙы,
Баһаһы юҡ кәүҙәнән
Өҙөлгәнгә оҡшайҙы.

Кәүҙәң ҡанға болғанып,
Аяҡ-ҡулың солғанып,
Кәфенең юҡ, гүрең юҡ,
Ерҙә ятыр ирмынең?

Ҡанға башың болғанып,
Буйтеп ятыр ирминең?
32б Ҡомға болған башыңды,
Күҙҙән аҡҡан йәшеңде
Ергә ағыҙыр ирминең?
Гәүһәр башың, хан башың,
Алтын динайың болғанып,
Дарға аҫылыр ирминең?

Йортоңда һин хан инең,
Һәр эшеңдә дан инең.
Дошмандарың ҡулында
Былдай булыр ирминең?

Ҡарағаттай күҙҙәрең,
Ҡыҙыл гөлдәй йөҙҙәрең,

Балдан татлы һүҙҙәрең
Бер күреүгә зар булдым.

Әйтһәм, һүҙем етмәçте,
Ҡайғың иçтән китмәçте,
Алыç юлға китеп һин,
Саҡырһам да, килмәç һин.
Оҙон юлға китеп һин,
Зар ҡылһам да, белмәç һин.

Һеҙҙән донъя үтепте,
Мин дә артыңдан үтермен.
Һин алдымда булмаһаң,
Был донъяны нитермен?

Күп дә илап йөргәнсе,
Ҡайғың китмәç үлгәнсе,
Был ҡайғыны күргәнсе,
Бергә булһам кәрәкте...[46]

33а ...Бисара ҡыҙ динайын ҡулына алды,
Торҡаға ҡаплы башты урап һалды.
Өйөнән алтын-көмөш ҡулына алып,
Ярына там * торғоҙоу уйына алды.

Ҡашына йөҙ егерме ҡолон алды,
Алтын менән көмөштән мула * һалды.
Ҡыҙының булмаçын [47] хан белгән һуң,
Йортона: «Йыйылың!»— тип хәбәр һалды.

Йортона: «Ҡыҙ ҡашына барың,— типе,—
Нәғып * йөрөй ҡыҙым минең, белең,— типе.—
Ҡыҙымдың бер аҙ көндә күңеле һыуыр,
Ҡыҙымдың ҡыл тигәнен ҡылың»,— типе.

Күп ғәскәр ҡыҙ ҡашына килде, типе,
Там торғоҙоп булыпты, күрҙе, типе.
Ҡыҙ быларҙың килгәнен яҡдырмайҙы,
Ғәскәренең бары ҡайтып йөрҙе, типе.

«Ҡыҙығыҙ там торғоҙоп булған икән,
Шәһәрҙән зәргәр * йыйып алған икән.
Был шәһәрҙә ундайын өй табылмаç,
Алтын менән көмөштән һалған икән».

Хан ҡыҙын күреүгә ойлаҙы,
Әсәһе, яңғыҙым, тип, зарланаҙы.
Ҡашына бер-ике әҙәм юлдаш алып,
Сыҙай алмай әсәһе бер бараҙы.

Ҡыҙына яҡын килеп, билеп быуҙы:
— Уай, балам, был көн һиңә ҡайҙан тыуҙы?
Хоҙай ҡушҡан йәрендән зар иңрәтеп,
Ғаҡлы юҡ әкәңә нә ҡан яуҙы?

Ғаҡлы юҡ әкәңә әйтһәм, тел алмайҙы,
Дошмандарҙың һүҙенән һис ҡалмайҙы.
«Ҡыҙыңды илатма!»— тип әйтеп инем,
Ҡанса әйтһәм дә, телемде тыңламайҙы.

33б Оялғандан ҡашыңа килалманым,
Атайыңдың аҡылын белалманым.
«Обалы * — әкәгә», тип зар иңрәйҙе,
Беҙҙе ойҙә, һеҙҙе бында уйламайҙы.

Ҡыҙының ҡашында йәшен түгеп,
Күкрәгендә уйлаған ғарзын * әйтте.
Ҡыҙына һөйләп, ханым моңон әйтте:
«Ҡылыпты әкәң һинең ҡорбан ғәйете» [48].

Балаһы әсәһенә ҡарамайҙы,
Оялып, әсәһе өйгә ҡайтты.

Ҡыҙ, инде там торғоҙоп, булды, типе,
Әсенән биклəгəндəй ҡылды, типе.
Ҡашында ҡырҡ ҡыҙ менән амандашып,
Күҙ йәшенә дала ер тулды, типе.

Ҡарасәс һылыуҙың ҡыҙҙарға илағаны:

— Яр-яр әйткән яр-ярым,
Аман булың, хуш булың!
Беҙгә үтер көн булды,
Һеҙҙән китер көн булды.

Аман инде, хуш булың,
Беҙгә үтер көн булды.
Йәр өсөн үлер көн булды,
Һеҙгә ҡалыр көн булды.

Беҙҙән рәнйеү алғандар,
Беҙҙән күңле ҡалғандар,
Уйығыҙға алғайһыҙ,
Риза булың, дуҫтарым!

Боронғолай булырһыҙ,
Һөйгән йәргә барырһыҙ.

Уйнап-көлөп йөрөрһөҙ,
Аман булың, дуҫтарым.
34а Турғайға ем табылыр,
Ауырыуға им табылыр.
Терегә йәр табылыр,
Үлгәнгә ер табылыр.
Минең өсөн иламаң,
Миндәй бер ҡыҙ табылыр...

Сын йәрелдән ҡалғым юҡ,
Ялған йәргә барғым юҡ,
Был донъяла ҡалғым юҡ,
Аман булың, дуҫтарым.

Ҡыҙҙарҙың Ҡарасәс һылыуға йырлағаны:

— Әүүәл, хаҡтан теләйбеҙ,
Икенсе һеҙҙән теләйбеҙ:
Бер аҙ сабыр ҡылығыҙ,
Ғарзыбыҙ * бар, һорайбыҙ.

34б Бер аҙ тере торогоҙ,
Бер аҙ дәүран * һөрөгөҙ.
Етем булмаҫ әсәңдең
Бер ҡат йөҙөн күрегеҙ.

Юлдаштарың артыңдай
Ҡуҙылай сыулап ҡалмаһын,
Ата-әсәң артыңдай
Төн-көн иңрәп ҡалмаһын.
Алтын биҙәк киң һорай
Ергә ҡолап ҡалмаһын.
Ҡырҡ ҡыҙҙың ҡанаты,
Һеҙ булырһыҙ санаты.
Ҡанатыбыҙ ҡайырма,
Үҙеңдән беҙҙе айырма.

Һеҙҙең өсөн ил-йортоң
Бутаҙай буздап ҡалмаһын.
Донъянан өмөт өҙмәгел,
Тыуғаныңды боҙмағыл.
Тыуғандағы йәрҙәрең
Зар сәргәрҙән * ҡалмаһын!

Алтынлы утау, гәүһәрең
Ят ҡулында ҡалмаһын.
Мәрүәрид * менән мәржанын *
Һәр кемгә улъя булмаһын.

35а Ҡайт, йәнебеҙ, ҡайтһана,
Ғарзың йортҡа әйтһәнә.
Беҙ фәҡирҙе зар ҡылмай,
Ҡайт, йәнебеҙ, ҡайтһана.

Ҡ а р а с ә с һ ы л ы у ҙ ы ң һ ү ҙ е:

— Берәүгә әжәл гиз килһә,
Ни ҡылһаң да булмаҫ ул.
Йән алыусы килгәндә,
Әйтһәң, телең алмаҫ ул.

Ҡапса йәшкә килһәң дә,
Донъяның бар дәүләте
Донъя эсендә ҡалыр ул.
Артындағы дәүләтең
Берәүгә улъя булыр ул.

Ата-анаң ҡашында
Зар иңрәп ҡалыр ул.
Йән алыусы килгәндә,
Кемдең телен алыр ул. [49]
Алтын биҙәк киң һарай
Берәүгә улъя булыр ул...

Ҡаты дәрдкә * юлыҡтым,
Дарыу эсһәм дә, терелмәм.
35б Бутасыҡтай булғанмын,
Ем бирһәң дә, илекмәм.

Инде әйтер һүҙем юҡ,
Һүҙем ҡалыр, үҙем юҡ.
Әжәл етһә, торғом юҡ,
Аман булың, дуҫтарым!

Ә л-ҡ и с с а Ҡ а р а с ә с һ ы л ы у Б у ҙ й е г е т т е ң к е й е м д ә р е н к ү р е п й ы р л а ғ а н ы:

— Алтын яға, кеш тундар,
Һеҙҙе кейер кешем юҡ.
Алтынлы эйәр, күк юрғам,
Һине менер кешем юҡ.

Алтын биҙәк, киң һарай,
Һеҙгә керер кешем юҡ,
Барығыҙҙы нитәйем? —
Бергә йөрөр кешем юҡ.

Әкәм һеҙҙе күп күрҙе,
Улъя иткәнен йөн күрҙе.

Йəребеҙҙəн айырып,
Тороуыбыҙҙы хуп күрҙе.

Айҙай улды тыуҙырып,
Көндəй ҡыҙҙы тыуҙырып,
Беҙҙəн ҡалған бөйөмдө *
Алып букча * ҡылһып ул.

Күрекле ҡыҙҙы тыуҙырып,
Һөйгəненə бирһен ул.
36а Яуҙан алған бөйөмөн
Алып букча ҡылһын ул.

Сəн йəремдəн ҡалғым юҡ,
Ялған йəргə барғым юҡ.
Бөйөмөмдө алмаςты
Алып улъя ҡылһын ул.

Əкəмə əйтең һүҙемде,
Ҡанлы йəш алды күҙемде.
Əкəмə донъя киң булһын,
Ҡорбан ҡылдым үҙемде...[50]

Бисара ҡыҙ илай-илай тамға керҙе,
Терелектəн үлгəнен яҡшы күрҙе.
Там ишеген эсенəн бикләгəн һуң,
Үҙ эсенə үҙе был хəнйəр орҙо.

Түшəгендə Буҙйегетте ҡосаҡлайҙы,
Үҙен-үҙе бысаҡ мəн бысаҡлайҙы.
Сыртында ҡырҡ ҡыҙ һаҡлап утур,
Хан ҡыҙы тышҡа сыҡмай оҙаҡ[лай]ҙы.

Хан ҡыҙы йəре мəн ҡушылыпты,
Ғəзиз йəне кəүҙəнəн өҙөлөпто.
Атаһына йорто хəбəр əйткəндəн һуң,
Ҡылғаны хан туйы боҙолопто.

36б Хан, ишетеп, йортонан илап килде,
Əсəһе битен йыртып иңрəп килде.
Тамам йорт был хəбəрҙе ишеткəн һуң,
Өлкəн кеше мулаға * бары килде.
Илаһа ла, эш үтеп ҡалған икəн,
Ике яңғыҙ донъянан киткəн икəн,
Ханым: «Бындай булырын белмəнем»,— тип,
Үҙ битен үҙе тырнап йырткан икəн.

Тышта тороп, хан ҡыҙын саҡыраҙы,
Йортона: «Ишек ас!»— тип аҡыраҙы.

Ханым асыуланып батшаһына:
«Эш үткән һуң, был инде нә ҡылаҙы?»

Күп ғәскәр там ишегеп боҙҙо, тине,
Битеп асып күрҙеләр ҡыҙҙы, тине.
Ҡосаҡлашып ятыпты ике яңғыҙ,
Күргән һуң, өмөттәрен өҙҙө, тине.

Хан ҡыҙының ҡашында зар иңрәйҙе,
Үҙ ҡулын үҙе тешләп йолҡколайҙы.
Ханым батшаһына асыуланып:
«Бар шомлоҡ үҙеңдән!»— тип ҡысҡыраҙы.

Хан фәҡир илай-иңрәй өйгә ҡайтты,
«Сыртынан там торғоҙ!» — тип ярлыҡ ҡылды.
«Сыҡылып * был баланың белмәнем»,— тип,
Йортоноң барып йыйып үпкә итте:

— Сумбатын * күргәндән һуң ҡайтманығыҙ,
Алтын айҙар толомон әйтмәнегеҙ.
Сумбатын күргәндән һуң шомлоҡ ҡылһам,
Шунда минең муйныма иридмәнегеҙ *.

Ханымы ханға: — Мәғкүл булдың,— тине,—
Яңғыҙыңды үлтереп тындың,— тине.—
37a Инде артыңда, ҡыу һаҡал, кем ҡалаҙы?
Үлә үлгәнсе ямапат алдың,— тине.—
Яңғыҙ ҡыҙың үлтереп тындың,— тине,—
Мулаға йәнен алып ҡуйҙың,— тине.—
Алдында ҡыуанысың кем булаҙы?
Терелектә тоҡомоң юйҙың,— тине.

Бисара хан әйтәҙе: — Белмәнем,— тип,—
Үлтерергә баҙарға кермәнем,— тип.
Һаҡалын йолоп батша күп илайҙы:
— Бисараның сумбатын күрмәнем,— тип...

Ике ғашиҡ берҙәйен үлеп ҡалды,
Атаһы йортон йыйып мула һалды.
Буҙйегеттең битен ҡосоп йәп дуҫты,
Дуҫты өсөн йәп дуҫты талып ҡалды.

Дуҫты өсон бисара күп илаҙы,
Хоҙайҙан, аман ҡыл, тип күп теләйҙе.
«Дуҫым миңә аманат бирен ине,
Тапшырмай үлһәм, ул үпкәләйҙе».

Егеттең йырлағаны:

— Мин ҡайтыуға уй ҡылдым,
Миһербаным әлүидағ! *

37б Кемдең берлә йөргәймен,
Кемде дуҫтым тигәймен?
Миһербаным әлүидағ,
Кемдең берлә йөргәймен?

Һин иҫемә төшкәндәй,
Киткем килмәҫ ҡашыңдан;
Илаһам да, файҙа юҡ
Күҙҙән аҡҡан йәшемдән.

Миңә һинһеҙ эскән аш
Ҡыҙыл ҡанға оҡшайҙы.
Ҡайтам тиһәм йортома,
Ҡайғың аяҡ тышайҙы.

Күп тубынан айырылған
Ҡаҙҙай булып ҡалдым мин.
Күп иленән айырылған
Аҙҙай булып ҡалдым мин.

Бутаһы үлгән төйәләй,
Инде буҙҙай ҡалдым мин.
Ҡолоно үлгән бейәләй,
Инде кешнәй ҡалдым мин.

Йәнең хаҡҡа [51] тапшырҙым,
Йәрең — бергә ҡашыңдай;
Яңғыҙлыҡҡа илаймын,
Күп ҡайғы бар башымдай.

Үләйем тип уйлаһам,
Аманатың бар ҡуйнымдай,
Йөрөйөм тип уйлаһам,
Яңғыҙлыҡ бар муйнымдай.

Аманатың тапшырып,
Тере булһам, килермен;
38а Йәндән татлы йән дуҫтым,
Юлыңда мин үлермен.

Ҡотолдоғоҙ донъянан
Икәү булып берләнеп;
Юлдашынан айырылып,
Дуҫтың ҡайтты зарланып.

Дуҫтының өйгә ҡайтҡаны:

Бисараның һүҙе инде бөттө, тине,
Йортоноң юнен һорай китте, тине.

Хаҡ һаҡлаһа, бәндәгә бәлә булмаҫ,
Аман-иҫән йортона барҙы, тине.
Алдында бер-ике әҙәм күрҙе, тине,
Еткән һуң, яҡын [килеп] сәләм бирҙе.
Ике әҙәм үҙ илецең кешеһе [52] икән,
Аманлашып, бергә инде йөрҙө, тине.
— Яңғыҙ егет, атыңды беҙ[ҙең] мән әйҙә,
Һинең беҙгә килгәнең булды файҙа:
Һеҙҙәрҙе эҙләп сыҡкан күп кеше инек,
Яңғыҙ йөрөйһөң, ҡашыңдай дуҫың ҡайҙа?

Егеттең яуабы:

— Хоҙайым яңғыҙлыкҡа һалды,— тине,—
Йән юлдашым илай-иңрәй ҡалды,— тине.—
Хоҙайым, тәҡдир етеп, алды,— тине,—
Хан дуҫымдан айырылып ҡалдым,— тине.

Икеһе был хәбәрҙе ишеткән һуң,
Шәһәргә алып быны йөрөнө, тине.
Яңғыҙ шәһәргә кергән[дән] һуң,
Йорт бары килеп быны күрҙе, тине.

Башланы егет күпкә һүҙен, тине,
Ағыҙып ике күҙҙән йәшен, тине.
38б Яңғыҙып хан ишетһә, үлер, тине,
Ханға барып әйтеүгә састы *, тине.

Йыйылып, күп бейҙәр кәңәшәҙе,
Яңғыҙы батшаның, тип моңдашаҙы.
Бер ахун бар икән йорт эсендәй,
Йыр менән белдереүгә уңдашаҙы.

Ахун мән йән дуҫын алып йөрөнө,
Күп бейҙәр сәләм биреп ханға килде,
Яңғыҙының йән дуҫын күреп ине,
Хан ханымы урынынан илап торҙо.

— Йән юлдашың, яңғыҙым, ҡайҙа? — тине.—
Көйөп, эсебеҙ ялҡып булды,— тине.
— Балағыҙ һөйгәне мән киен ҡалды,
Яңғыҙың һезгә беҙҙән хәбәр һалды.

Балағыҙ йәре мән киен ҡалды,
Туй булар өйҙөң эсен сайла *,— тине.
«Әкәбеҙ, беҙ барғансы, йортон йыйып,
Аямай һуйһын,— тине,— туйға малды».

Бисара ханымы инанады,
Мал һуйып, йыйылғанға туй ҡылаҙы.

Ҡары Ахун быларҙы алдына алып,
Йырлауға йырын инде уй ҡылаҙы.

Былары: «Ахун, йырың йырла,— тине,—
Яңғыҙы хандың килер, уйла,— тине.—
Был күңгөләй туй булмаҫ, хан ишетһен!
Яңғыҙының туйын йырлап туйла»,— тине.

Хан ханымы: «Йырла, Ахун, йырла!— тине,—
Ошондай бынан һуң ҡайҙа?» — тине.
Ҡолдарына: «Апкилеп ат мән сапан,
Ахунға арнап уны бәйлә!» — тине.

39а Хан алдында ҡары Ахун йыр йырлаҙы,
Әйткәнен ҡолаҡ һалып күп тыңлайҙы.
Йырсының һораһағыҙ исемен инде,
Ғәлә ғаҡлы * бар әҙәмдәр быны аңлайҙы.

Й ы р с ы н ы ң  й ы р ы:

— Күпте күргән ҡарыйың мин,
Бер аҙ йырҙы йырлайын.
Асмандағы турғайҙай,
Алдығыҙҙа ширләйен *.

Өй эсендә ултырған,
Ҡолаҡ һалың, яҡшылар.
Был ялғандан файҙа юҡ,
Тәҡуа * булың, яҡшылар,
Ҡарыйығыҙ һүҙенән
Ғибрәт алың, яҡшылар.

Ҡарыларҙың иҫке һүҙ —
Иҫкә алмай йөрмәгеҙ.
Ғалимдәрҙең күҙле һүҙ —
Күңелгә алмай йөрмәгеҙ...

Дәрдебеҙгә дарман юҡ,
Ҡайғыһыҙға арман юҡ.
Дәрдкә файҙа булмаһа,
Яратҡандан [53] фарман юҡ.

39б Елгән аттан ер ҡалыр,
Тапҡан ирҙән мал ҡалыр.
Ир башына ҡон тыуһа,
Һөйгән йәрҙән ул ҡалыр.
Батшаларҙан таҡ * ҡалыр,
Мәргәндәрҙән яҡ * ҡалыр.

Ир башына көн тыуһа,
Донъяның бары юҡ ҡалыр.
Ғалимдәрҙән хат ҡалыр,
Остаздарҙин яд * ҡалыр.
Тимерсеҙин дад * ҡалыр,
Йөргән ерҙә юл ҡалыр.
Уйлап торһаң, яҡшылар,
Был ялғандан кем ҡалыр?

Күргән ерҙә шул ҡалыр:
Ҡалғандарға улъя өсөн,
Байҙарынан пол * ҡалыр;
Хатын булһа, тол ҡалыр;
Тапҡан ирҙән мал ҡалыр,
Алтын, көмөш пол ҡалыр,—
Эттәй сыулап, талашып,
Кем күренгән, шул алыр;
Өйөң булһа, буш ҡалыр,
Уйнап йөргән дуҫ ҡалыр.

Был ергә килгәндә, йорт белде, тине,
Ҡарының ҡустар * һүҙе ары, тине.
Ҡары әйтәҙе: «Ашыҡмаң, йортом»,— тине,
Ҡарының ҡандай яҡшы һүҙе, тине.
Ҡары икенсе төргә төштө,
Ҡыҙарып, ике бите нурға төштө.
Хан алдында белмәгәнен аясама [54],
Кәмин [55] сисеп алып, сурға * төштө [56].

Тыуғанмын, тип ҡыуанма,
Тыуған үлер көн булыр.
40а Үлгән йәндең барынан
Һорау һорар көн [57] булыр.
Малым күп, тип ҡыуанма,
Малды күрмәҫ көн булыр.
Алтын менән ер тулһа,
Күҙең һалмаҫ көн булыр.
Бер үҙеңдән башҡаны
Күңелгә алмаҫ көн булыр. [58]
Телле мин, тип ҡыуанма,
Тел бәйләнер көн булыр.
Ҡылған эшең яҡмаһа,
Тамуҡ әйҙәр көн булыр.
Көсөм бар, тип уйлама,
Көсөң китер көн булыр...
Донъялағы ҡолдарың[а]
Күҙең һалмаҫ көн булыр.
Балам бар, тип ҡыуанма,
Бала ла ҡалыр көн булыр.

Ғалим мин, тип ҡыуанма,
Тиргәү [59] алыр көн булыр.
Ҡылғап эшең яҡмаһа,
«Залим һин!»— тир көн булыр.
Ҡыҙыл йөҙгә ҡыуанма,
Һуйылып ҡалыр көн булыр;
Ҡорт-ҡырмыҫҡа йыйылып,
Туйынып ҡалыр көн булыр.

40б Батша мин, тип уйлаһаң,
Искәндәр мән Сөләймән [60]—
Улар ҙа үткән донъянан;
Балам күп, тип уйлаһаң,
Йөҙ ҡырҡ бала атаһы —
Аҙәм [61] үткән донъянан;
Малым бар, тип уйлаһаң,
Малы һеҙҙән күп сығыр
Ҡарун [62] үткән донъянан;
Көсөм бар, тип уйлаһаң,
Ҡаһарман [63] мән ул Ғәли [64],
Улар ҙа үткән донъянан;
Сәсән мин, тип уйлаһаң,
Нисә-нисә сәсәндәр
Һөйләп үткән донъянан.
Нисә-нисә түрәләр,
Нисә-нисә яҡшылар
Илап үткән донъянан.

Хан алдында ҡары Ахун йыр йырлайҙы,
Һүҙенең төбөн ханға борҙо инде.
Йырлаусы был ергә килгәнендә,
Хан бер тороп, урынына бер ултырҙы.

— Ахуным, яҡшы икән йырың һинең,—
Үлем әйтеп сығаҙы кәрең һинең.
Йырыңдың өнө буйы үлем икән,
Беҙгә ҡарай тейәҙе кәрең һинең.

— Тәҡсир хан, үлемде әйтмәй ни әйтәйем,
Был ерҙә әжәл етһә, мин ҡайтәйеп?
41а Әҙәмдең ахыр һуңы — үлем, тигән.
Ысын әйтһәм, уны әйтмәй ни әйтәйеп?.. [65]

43а Ер йөҙөнә килгәндәр,
Мин-мин, тиеп йөргәндәр,
Мең йәш ғүмер һөргәндәр —
Бары ла үткән донъянан.
Хан да үткән донъянан,
Ҡары ла үткән донъянан;
Бай ҙа үткән донъянан,

Ярлы ла үткән донъянан,
Күп тә үткән донъянан,
Аҙ ҙа үткән донъянан,—
Яман-яҡшыны айырмай,
Бары ла үткән донъянан...

Ҡары Ахун был ергә килде, тине,
Хан шомлоҡтоң булғанын белде, [тине].
Терелектең һуңында — бары үлем,
Алла әмеренә хан муйын һондо, тине.

Әйтеп йырып, был ахун тура килде,
Һүҙенең төбөн ханға бора килде.
Яҡынлатып йырын бороп ине,
Бер һүҙ инде әйтеүгә тура килде.

— Яратҡандың бары лай,
Хан, киткәнгә оҡшайҙы.
43б Бөгөн күргән төшөмдә
Һеҙҙең дағы балаңыҙ —
Ул да үткәнгә оҡшайҙы.
Унан һуңғы беҙҙәргә
Дағы киҙәк * еткәнгә оҡшайҙы.

Балаҫа, хан, илама,
Беҙҙән борон үтте, тип,
Был донъянан китте, тип.
Улар китде атаға,
Ата берлән анаға;
Һеҙ ҙә бер көн барырһыҙ
Борон үткән балаға.

Әжәл етмәй үлмәк юҡ,
Алла әмеренән ҡалмаҡ юҡ,
Әжәл етеп үлгән һуң,
Һис кем ҡайтып килмәк юҡ.
Тәҡдир етһә, ҡалмаҡ юҡ,
Әжәл ҡуйып алмаҡ юҡ,
Әжәл етеп үлгән һуң,
Һис кем барып алмаҡ юҡ.
Байҙан ҡарыз * алмаҡ юҡ,
Орош-талаш ҡылмаҡ юҡ,
Ярлыға көс ҡылмаҡ юҡ,
Ананан бер туған һуң,
Һис кем үлмәй ҡалмаҡ юҡ.

Хан фәҡир, илаһа ла, сабыр ҡылды,
Яңғыҙының үлгәнен инде белде.

44а Хапым, уғлы үлгәнен ишеткән һуң,
Битен йыртып, зарланып, сәсен йолдо.

Күңелен аулай, ҡары Ахун йыр әйтәҙе:
— Бит йыртыуың, тәҡсир ханым, нә файҙаҙы?
Был үлем — боронғонан ҡалған үлем,
Үлмәһә барса йәндәр, ул ҡайҙаҙы?

...Һай-һай үлем, һай үлем,
Ата менән ананан,
Ҡарындаш берлә баланан
Кемде айырмаҫ был үлем?
Йортоңдағы бөйөмдән *
Уйыңдағы бөйөмдән,
Кемде айырмаҫ был үлем?

Төйә ҡалыр буздашып,
Йылҡы ҡалыр кешнәшеп;
Йән айырылып сығаҙы,
44б Тәне менән хушлашып...

45а ...Ғафил булдым, тимәгеҙ,
Ҡатын ҡалһа, ир табыр,
Улың ҡалһа, мал табыр,
Ҡыҙың ҡалһа, бай табыр. [66]
Йән үлемгә еткәндә,
Ғәрип башың нә табыр?

Менгән атың буш ҡалыр,
Кейгән туның ҡуш ҡалыр,
Уйнап йөргән дуҫ ҡалыр.
Менгән атың буш ҡалһа,
Менеүгә ир табылыр;
Кейгән тунын ҡуш ҡалһа,
Кейеүгә ир табылыр...

46а Ҡары инде йырын йырлап бөттө,
Өй эсенә йыйылып ҡатын тулды.
Ханымдың күңелен аулай килеп ине,
Балаһын юҡтап, ханым тауыш ҡылды.

Билен быуып, яңғыҙын юҡтап ине,
Ишеткәндең йөрәге талып ҡалды.
Яңғыҙын юҡтап, ханым зар иңрәйҙе,
Бисара ханым өсөн күп илайҙы.

Х а н ы м д ы ң  б а л а һ ы н  ю ҡ т а п
з а р л а н ғ а н ы:

— Бауырымдың параһы *,
Ике күҙем ҡараһы,

Йәпем һөйгән хан балам,
Һине ҡайҙа күргәймен?
Кемде балам тигәймен?
Һин иҫемә төшкәндә,
Нисек сыҙап йөргәймен?

Алыҫ юлға китеп сән,
Әйтмәй киттең сереңде,
Күрмәй ҡалдым йөҙөңдө.
Был ни хәсрәт, йән балам?
Һөймәй ҡалдым үҙеңде...

Яңғыҙ инең, бер инең,
Мең ҡайғыға йыр инең,
Инде ҡайтеп йөрөйөн?
Йөҙөң ҡайҙа күрәйен?
Кемдең берлә йөрөйөн?
Кемдең берлә торайын?
Һин иҫемә төшкәндә,
Ҡайте*п өмөр һөрәйен?
Асыкканға аш биргән,
Ғәриптәргә ҡаш биргән [67],
Дуҫты өсөн баш биргән,
Яҡшы берлә яманды
Ҡуйыр белгән [68] яңғыҙым,
Һине ҡайҙан табайын?
Моңло булған әкәңдең,
Зарлы булған анаңдың
Боҙоҡ булған күңелен [69]
Кем аулайҙы, шырағым *...

Арғымаҡ мән толпарың,
Ласын менән шоңкарың,
Ҡарсыға мән тойғоноң,
Эйәһе юҡ булғанда,
Кем тотор һуң, шырағым?..

Бута ҡалды төйәһеҙ,
Йортоң ҡалды эйәһеҙ,
Әкә-шәшәң бинаһыҙ,
Эҙләй ҡайҙан табайын?

Әүәлгелә киткәндә,
Сереңбеҙгә әйтмәнең,
Юлда каруан күргәндә,
Ҡайт тиһә лә, ҡайтманың.
Эҙләгәнең алдында
Йөрмәҫмине, яңғыҙым?
Мәккә барып, хаж ҡылып,
Теләп инем, яңғыҙым...

Ҡарылыҡта әкәндең
Иңрәр көнө булды инде;
Яңғыҙ ҡалып, анаңдың
Зарлар көнө булды инде.

Икәү булһаң, шырағым,
Ҡалмаҫмине, берәүең?
Кем ҡулында булһаң да,
Ҡылмаҫмине һорауың?
47б Хаҡ насибә һалманы [70],
Тоҡом беҙҙән ҡалманы;
Ҡары көндә хур булдыҡ,
Дәрдкә * дарман булманы.

Инде ҡайтеп йөрәйеп?
Йөҙөн ҡайҙа күрәйеп?
Яңғыҙ улдан айрылып,
Кем мән өмөр һөрәйеп?
Арҡала һис фәтә юҡ [71],
Алдым асыҡ, бала юҡ.
Күҙ алдымда бар булһаң,
Күрмәҫминем, олопом?!
Үлгән ерҙә бар булһам,
Үлмәҫминем, ҡолоном?!

Ят йорттарҙың эсендә
Ҡайтеп йөрнөң, шырағым?
Дошмандарың ҡулында
Ҡайтеп йөрнөң, шырағым?..
Шырағымды һүндерҙең,
Дошманыңды тындырҙың.
Зарлай өмөр үтһеп тип,
Әсәңде яңғыҙ ҡалдырҙың.
Был ни хәсрәт, ярандар?
Был ни ҡайғы, ярандар?
Күкрәктәге япған ут
Көндән-көнгә траңлар.

Күңлем инде тынмаҫты,
Һүнгән шыраҡ япмаҫты,
Яңғыҙымдың ҡәберен
Күрмәй күңлем тынмаҫты.

Йортом, инде атлайың,
Яңғыҙыма барайып,
Етем булмаҫ яңғыҙым,
Мулаһып бер күрәйеп.
Күрһәм, күңлем һыуныrмы?
Ҡашында аҙ көн торайып.

Етем булмаç, ярандар,
Йырлап күңлем асайын.
Өс-дүрт китап сығарып,
Моңлоларға сәсәйен.
48а Моңло әҙәм ишетһә,
Бер аҙ күңеле баçылыр.
Бисаралар булмаһа,
Был һүҙ ҡайҙан табылыр?!

Һәр намаҙ шәм ваҡытында
Ҡәләм алдым ҡулыма.
Был һүҙҙәрҙе яҙғапыма
Тәңрем һалды уйыма:
Моңло ғибрәт алһын тип,
Үлһәм, һүҙем ҡалһын тип,
Һүҙем уҡыған әҙәмдәр
Беҙгә фәтә * бирһен тип.

Моңһоҙ — бер хаҡтыр [72],
Һәр бәндәнең моңо бар.
Ғибрәт алмаҡ китаптан
Шәриғәттең юлы бар.

Дәлиле юҡ бер китап
Ғибрәт өсөп яҙылды.
Моңло әҙәм ишетһә,
Ҡайғылы күңле баçылды...[73]

## БУҘЙЕГЕТ

Борон-борон заманда бер Ғабдулла тигән кешенең Буҙйегет исемле улы була. Ул бик матур була, уны бер күргән кеше «тағы ла күрһәм ине» тип йөрөй. Буҙйегеттең Кәмәп исемле бик яҡын дуçы була. Бер көндө Буҙйегет бик матур ҡыҙҙы төшөндә күрә. Төшөндә ҡыҙ быға ошолай һөйләгән икән, ти:

Мин юлыңа интизар,
Ҡарай-ҡарай булдым зар.
Егет, буйға етеп һин,
Ҡалаларҙың былбылы,
Яҡшы ерҙең гөлдәре,
Йәнем йәнгә ҡушылып,
Бер йөрөр көн булырмы?

Ысып хәкикәт яр булһаң,
Бергә булһак беҙ икәү,
Диңгеҙ кисеп, тау үтеп,
Мине эҙлә һин, егет.
Толпар атҡа атланып,
Мине эҙлә һин, егет.

Шул ваҡыт Буҙйегет йоклап яткан еренән уянып китә. [Уянып китһә,] эргәһендә ҡыҙ юҡ, аптырап ҡала. Төш икәнен белгәс тә, ул һәр ваҡыт ошо ҡыҙ тураһында уйлап йөрөй.

Икенсе йылды Буҙйегеткә ун һигеҙ йәш тула. Ул ҡыҙҙы тағы төшөндә күрә, төшөндә уға ҡыҙ ошолай ти:

Дүрт йыл булды, һаҡлайым,
Киләме тип көтәмен;
Хәбәрең юҡ, үҙең юҡ,
Сәләмең юҡ, хатың юҡ,—

ти. Шул ваҡыт төштә Буҙйегет әйтә:

Бик матур бер ҡыҙ бит һин,
Төшләремә инәһең.
Эҙләп барһам, илең әйт,
Мин илеңде белмәйем,
Һине ҡайҙан табармын?
Быйыл керҙең төшөмә,
Һине ҡайҙан табам мин?
Күп ҡайғыға һалдың һин!

Төштә мыңа ҡаршы ҡыҙ:

Атың менеп сығарһың,
Мине ҡабул күрһәң һин,—

ти. Буҙйегет уянып китә, ҡыҙ янында булмай. Егет бик ҡайғыра, ашамай, эсмәй. Дуҫы Кәмән янына китә. Килә лә дуҫына әйтә, шулай төштә бер ҡыҙ күрҙем, ти. Һөйләй:

Төштә бер ҡыҙ күрәмен,
Хайран ҡалып йөрөймөн,
Ҡайғы төштө башыма,
Аҡыл тапмай йөрөймөн.
Ҡабул күрһәң, йән дуҫым,
Сәфәр сығыр уйым бар.
Һинән башҡа дуҫым юҡ,
Серҙе сисер кешем юҡ,
Уны эҙләп үлһәм дә,
Риза булам, йән дуҫым.

Дуҫы Кәмән был һүҙҙе ишеткәс:

Ҡабул күрәм, барабыҙ,
Ни күрһәк тә күрербеҙ.

Мин юлдашың булырмын,
Хеҙмәт итеп йөрөрмөн,
Һинән айырылып ҡалмам,
Икәү бергә булырбыҙ.
Мин бит һинең юлыңда
Ялғансы дуҫ булмамын,—

ти. Буҙйегет иптәшенән быңдай яҡшы һүҙҙәрҙе ишеткәс, бик шатлана. Былар, бик күп аҙыҡ алып, бер кемгә лә әйтмәйенсә, дөйәгә атланып, төштә күргән ҡыҙҙы эҙләргә сығып китәләр. Күп ерҙәрҙе үтеп бара торғас, дейеү пәрейҙәренең ауылына барып сығалар. Үтеп барғанда быларҙы дейеү пәрейҙәре тотоп ала. Өс йыл тотҡон булып яталар. Бер көндө былар ҡасып китәләр. Күп тә тормай, быларҙы тағы дейеү пәрейҙәре тота. Яңынан аяҡ-ҡулдарын сылбырлап, зинданға бикләйҙәр.

Буҙйегет бер көндө ошолай тип йырлап ултыра:

Бейек тауға тап булдыҡ,
Тимер өйгә һалындыҡ,
Сыҡмаҡ беҙгә ҡайҙа ул,
Ниндәй илгә тап булдыҡ,
Был бәләнән ҡотолоп
Юл йөрөр көн булырмы?
Атам менән инәмде
Бер күрер көн булырмы?

Был илдән дүрт йылдан һуң, бер диңгеҙ буйына төшөп, кәмә менән ҡасып китәләр. Күп көндәр баралар, быларға ҡаршы күп кәмәле кешеләр осрай. Былар, беҙҙе тағы тоторға киләләр икән, тип бик ҡурҡалар. Кәмәләре менән ҡара-ҡаршы килеп туҡтайҙар. Был кешеләр Буҙйегеттең ауылдаштары икән, сауҙа итеп йөрөйҙәр. Буҙйегет үҙенең ҡайҙа барғанын һөйләп бирә. Теге кешеләр: «Ҡайт, төштә күргән ҡыҙ артынан йөрөйһәрме ни?» — тип бик асыулапалар. Буҙйегет ризалашмағас, уға бик күп аҙыҡ бирәләр. Китер саҡта Буҙйегет былай ти:

Хуш инде һеҙ, каруандар,
Һау-сәләмәт ҡайтығыҙ;
Ата-инәмде күрһәгеҙ,
Беҙҙән сәләм әйтегеҙ.
Бер эш башҡа төшкәстен,
Йөрөмәй күңел түҙмәйҙер.
Күп ҡайғылар күрҙек беҙ,
Илап-илап йөрөнөк беҙ.
Ҡайтып каруан йөрһәгеҙ,
Ауылдарҙы күрһәгеҙ,
Ата-инәмде күрһәгеҙ,
Бик күп сәләм әйтегеҙ!

Күп көндәр баралар, бара торғас, былар ҡыҙ йәшәгән ергә барып етәләр. Был бик ҙур ҡала була. Иң остағы өйгә инеп сәләм бирәләр, үҙҙәренең башынан ниҙәр үткәнде өйҙәге бер ҡартҡа һөйләп бирәләр. Былар икәү был ҡалала ай ярым йөрөйҙәр, бер кешене лә танымайҙар. Буҙйегеттең эҙләгән ҡыҙы Сәхибъямал була. Шуға бер егет барып әйтә: «Мин бер бик матур егет күрҙем»,—ти. Был һүҙҙе ишеткәс, Сәхибъямал үҙенең ҡырҡ ҡыҙын эҙләргә ебәрә.

— Тиҙ артынан барығыҙ,
Беҙҙән сәләм һалығыҙ,
Ата-инәһенән айырылып,
Беҙҙе эҙләп йөрөмәһен, [74]
Барып йөҙөн күрегеҙ,
Ҡайҙағы? — тип һорағыҙ;
Әгәр уны тапһағыҙ,
Беҙгә алып килегеҙ,—

тип, ҡыҙҙарын сығарып ебәрә.

Буҙйегет был ҡалала күп йөрөй, ләкин таба алмай. Бер көндө иртәнсәк төш күреп уяна. Төшөндә быға бер ҡарт: «Сәхибъямал был ҡалала, һин табырһың»,— ти. Буҙйегет төшөн иптәше Кәмәнгә һөйләй. Былар тағы ла ҡыҙҙы эҙләргә китәләр. Шул ваҡыт теге ҡырҡ ҡыҙға тап булалар ҙа уларҙың артынан эйәрәләр. Ҡыҙҙар бер өйгә инеп китә, ә Буҙйегет тышта тороп ҡала. Ҡырҡ ҡыҙ инеп, Сәхибъямалға Буҙйегетте тапмағанлыҡтарын әйтә. Сәхибъямал тәҙрә янына килеп ултыра ла ошолай тип йырлай башлай:

— Ете йылдар булдым зар,
Илап-илап интизар.
Йәнем йәнгә ҡушылып,
Бер йөрөр көн булырмы?
Күкрәктәге ҡайғынан
Ҡотолор көн булырмы?
Киләм, тигән вәғҙәләр
Һинең булды бит ялған!
Бынан котоп килмәнең,
Бүтән ярҙы алдыңмы?

Буҙйегет урам яҡта Сәхибъямалдың әйткән һүҙҙәрен ишетеп тора. Был тауышҡа ҡаршы ул да тыштан тауыш бирә:

— Мин бит һиңә ҡараным. [75]
Һине күптән таба инем,
Диңгеҙҙәргә тап булдым,
Дошмандарға тап булдым.
Сүлдә йөрөнөм һыу тапмай,
Һыуҙа йөрөнөм юл тапмай.
Дүрт йыл тулды киткәнгә,
Хайран ҡалып йөрөнөм мин,

Күп хәсрәттәр күрҙем мин.
Ата-инәмдән айырылып
Һине эҙләп йөрөнөм мин.
Тауҙан-таштан үтеп мин,
Һине эҙләп килдем мин.
Йәрҙе күрер көн булһа,
Моратыма етермен.
Минең менән бергәләп
Ҡаршымда бар бер егет.
Ысын һөйгән йәр булһаң,
Мине өйгә кертерһең:
Йәндәй һөйгән йәремде,
Мин күрергә ашҡынам! —

ти. Шул ваҡыт Буҙйегетте өйгә алып инәләр. Сәхибъямал менән Буҙйегет бергә ҡауышалар. Бик шатланышалар. Буҙйегеттәр бында бик шатланып бер аҙна торалар. Гармундар тартып, музыкалар ҡысҡырталар. Шул ваҡыт: «Сәхибъямал янына егеттәр кергән»,— тип ҡыҙҙың атаһы Таймас ханға барып әйтәләр. Ул арала Буҙйегет тә сығып китә. Таймас хан бик күп кешеләр менән ҡыҙы янына килә, ҡыҙына бик асыулана: «Алай егеттәр индермә!»— ти. Сәхибъямал уның был һүҙенә ҡаршы:

— Ҡолағым һаңғырау булғандыр,
Әйткән һүҙҙе ишетмәй.
Башта аҡыл бар саҡта,
Һеҙҙән аҡыл һорамам;
Буҙйегеткә бармаһам,
Донъяла мин йөрөмәм! —

ти. Таймас хан ҡыҙын бик үгетләй, ләкин ҡыҙы бөтәһенә лә ҡаршы килә. Шул ваҡыт хан: «Был минең ҡыҙымды бик аҙҙырып бөткән икән, үлтерергә кәрәк уны!»— ти. Буҙйегет бер тау ҡырына барып ята ла дуҫы Кәмән артынан Таймас ханға хат ебәрә. «Таймас хан, мин һинең ҡыҙыңды күп йылдарҙан бирле алырға йөрөйөм, һин шуға ризамы?»— ти. Был хатты Кәмән ханға илтеп бирә, хан алып уҡый ҙа йыртып ташлай. «Хат килтереүсе был кешене хәҙер үк үлтерегеҙ!»— ти. Хандың бер иң яҡын туғаны була, ул: «Һин, хан, яңылышаһың,— ти.— Илсегә үлем юҡ, ул кеше эше артынан йөрөй,— ти.— Әгәр ҙә үлтерергә теләйһең икән, һин Буҙйегеттең үҙен үлтерт»,— ти. Шулай итеп, Кәмән ҡотолоп китә.

Хан Буҙйегеттең артынан биш мең баһадир, ун биш мең һалдат сығара. Былар Буҙйегет менән һуғышалар. Буҙйегет бер үҙе биш мең һалдатты үлтереп өйөп ҡуя. Был эшкә хан бик аптырай, нисек тә булһа, Буҙйегетте үлтерергә бер хәйлә ҡора. Бөтә ҡалаға ошондай һүҙ иғлан итә: «Мин ҡыҙымды Буҙйегеткә бирәм, туй була»,— ти. Ә хан үҙе, йөҙ баһадир йыйып, туйҙа Буҙйегетте иҫертеп үлтерергә була. Сәхибъямал [атаһының мәкерен белмәйенсә]

бик шатлана. Ул үҙенең өйөндә әҙерләнеп тора. Буҙйегет иптәше Кәмән менән туйға килә. Кәмән тышта ҡала. Буҙйегет туйҙа бик күп бал эсә, иҫерә. Кәмән өйгә инһә, Буҙйегеттең иҫереп иҙәндә ятҡанын күрә, ә өйҙәге кешеләрҙең бөтәһенең дә ҡулдарында хәнйәр була. Кәмән Сәхибъямал янына йүгерә. Килә лә:

— Хан туйынан килдем мин,
Хандың уйын белдем мин,
Боҙоҡтор уның уйы:
Ҡоралдары янында,
Ҡыуанышып торалар;
Өйгә дошман тулғандыр,
Күп эсендә бер яңғыҙ
Әжәл көтөп яталыр.
Вәғәҙәләрең бар булһа,
Буҙйегеткә йәр булһаң,
Бер ҡашыҡтай ҡаныңды
Ҡорбан итергә кәрәк.
Аралап алыр кеше юҡ,
Быны белергә кәрәк,—

ти. Сәхибъямал был һүҙҙе ишетеп, кейемдәрен дә кейенмәйенсә йүгерә. Туй булған ергә бара, бөтә халыҡ быға урын биреп тора. Шул ваҡыт Кәмән Сәхибъямалға әйтә:

Күп дошмандар эсендә
Хәлһеҙләнеп ятҡанын
Хәҙер үҙең күрәһең!

Сәхибъямал туйҙағы халыҡтарға ҡарап:

— Сәләм бирҙем, аталар,
Ҡотло булһын туйығыҙ,
Күп халыҡтарҙы йыйып
Дөрөҫ түгел уйығыҙ.
Дошман өсөн туй булһа,
Азат итеп ҡуйығыҙ.
Бар эсенән айырған,
Үҙ йортонан аҙашҡан,
Туйға булған ярлыны
Азат итеп ҡуйығыҙ.
Ата-инәнән айырған
Күҙе йәшле Буҙйегет —
Алып килгән ҡаршында
Юлдашы юҡ был ғәрип,
Һүҙҙәр әйтеп һөйләшергә
Иптәше юҡ был ғәрип.
Әйткән һүҙгә күнһәгеҙ,
Һорағанды бирһәгеҙ,

Кәңәш ҡылып халыҡҡа
Һүҙҙе ҡабул күрһәгеҙ,
Күп ишеткән аталар,
Апа менән ағалар,
Кәңәш ҡылып ҡарағыҙ,
Минең һүҙҙе тыңлағыҙ! —

ти. Туйға йыйналған халыҡ бер һүҙ өндәшмәй, ата-инәһе лә өндәшмәй. Сәхибъямал тағы ла әйтә башлай:

— Аҡылһыҙға һүҙ әйтһәң,
Күкрәгенә ҡунмайҙыр.
Ата-инәмә һүҙ әйттем,
Уны ла ҡабул күрмәйҙәр, —

ти. Ата-инәһе бер һүҙ ҙә әйтмәй. Иҫереп ятҡан Буҙйегет янына килә лә Сәхибъямал шулай ти:

— Хан туйҙары була, тип
Ҡыуанма һин был туйға,
Дошман кергән ҡуйынға,
Ҡылыс етәр муйынға!
Эй егет, һин, эй егет,
Күп эсендә бер егет!
Ай Буҙйегет, күҙеңде ас,
Һикереп тороп ишек ас!

Буҙйегетте Сәхибъямал алдында үлтерергә батырсылыҡ ҡыла алмайҙар, Сәхибъямал сығып китмәй. Тышта Кәмән был һүҙҙәрҙе ишетеп өйгә инә. Кәмәндең туйҙағы халыҡҡа бик асыуы килә. Ошолай тип һөйләй башлай:

— Атағыҙҙы үлтереп,
Инәгеҙҙе үлтереп,
Ҡатынығыҙҙы алған юҡ,
Малығыҙҙы алған юҡ.
Балта, бысаҡ ҡулығыҙҙа,
Нишләп бында тораһыҙ?
Дошман яуы килгәндә,
Берекмәһәң һүҙегеҙ!
Аҡылы юҡ хандарҙың,
Улар бөгөн тилергән! —

ти ҙә, Буҙйегет ятҡан ергә килеп, уға әйтә:

— Мин илемә ҡайтырмын,
Ата-инәмде күрермен.
Һин илеңдә сағыңда,
Икәү бергә йөрөнөк,
Һин илеңдә шән инең,
Һәр бер эшкә дан инең!
Игеҙ тыуған балалай,
Йөрөгән саҡтар бар ине;

Бер сәғәт тә ҡаршыңдан
Сыҡмаç көндәр бар ине.
Боронғолай дуçлашып
Инде ҡайҙа йөрөрмөн?

Шулай ти ҙә был тышҡа сыға. Буҙйегет ҡасһа, ҡыуырға әҙерләп ҡуйған аттарҙың өҙәңгеләрен ҡырҡып, Буҙйегеткә бер яҡшы атты әҙерләп ҡуя. Сәхибъямал Буҙйегеттең башына һалҡын һыу ҡоя, Буҙйегет күҙен аса. Сәхибъямал ишеккә табан күрһәтә. Буҙйегет тышҡа йүгереп сыға ла дуçы әҙерләп ҡуйған атты менеп ҡасып китә. Уның артынан ҡыуырға тип сыҡһалар, береһе лә атына менә алмай, йығылып төшөп тик торалар. Шунан былар аттарын яңынан эйәрләп, ҡыуа сығалар. Буҙйегет һуғыша башлай. Хандың өс мең баһадирен үлтерә, үҙе етмеш ерҙән яралана. Хан быға бик ҡурҡа, хәҙер тотоу менән үлтерергә булалар. Буҙйегет бер бик матур урман араһына барып ята. Үҙенең тыуған ауылы, һөйгән ҡыҙы Сәхибъямал һәм иптәше Кәмән иçенә төшә, бик ҡайғырып бер бәйет әйтә:

Яңғыҙлыҡҡа төштө минең башым,
Минең былай йөрөгәнемде кем белә?
Ҡайҙалыҡты белмәйҙер атам минең,
Ҙур ҡайғыға төшөп минең яңғыҙ башым.
Һорарға кешем юҡ хәлде минең.
Ағастың башын киçһәң, төбө ҡала;
Икәүҙең береһе үлһә, бере ҡала.
Яңғыҙҙың үҙе үлһә, кеме ҡала? —
Менгән аты, кейгән кейеме дауға ҡала.
Тыуған илем, атам-инәм иçкә төштө,
Ҡан аралаш аҡты инде күҙҙән йәшем.
Туҙан баçҡан юлымды,
Ҡайғы баçҡан күңелде,
Асылыр көн булырмы?
Яңғыҙлыҡҡа төшөп мин,
Дуçты күреп буламы?
Сәхибъямал менән икәү
Ҡауышыр көн булырмы?
Ҡайғы-хәсрәттән ҡотолоп,
Бер йөрөр көн булырмы?
Ҡаршы килгән дошмандарҙы
Бер ҡырыр көн булырмы?

Шулай итеп, ул был урманда ун көн ятып терелә лә, тағы ла ҡыҙҙың торған ҡалаһына китә. Буҙйегеттең дуçы Кәмән Сәхибъямал янына барып йөрөгән. Һөйләшкәндә, Сәхибъямал: «Буҙйегетте фәлән ҡарсыҡтың өйөнә алып барырһың да, өсәүләп ҡасырбыҙ», — тигән. Кәмән ҡалала Буҙйегетте барып таба, Сәхибъямал әйткән ҡарсыҡтың өйөнә алып бара, шунан ҡыҙҙы алып килә. Сәхибъямал көн һайын Буҙйегет янына килеп йөрөй башлаған. Быны бер кеше белеп ҡала ла ҡыҙҙың атаһына килеп әйтә.

— Ҡыҙың көп һайын фәлән ҡарсыҡтың өйөнә бара,— ти. Батша был ҡарсыҡты саҡыртып ала ла:

— Һинең өйөңдә Буҙйегет бармы?— ти. Ҡарсыҡ:

— Юҡ,— ти. Хан:

— Әгәр ҙә Буҙйегетте миңә тоттorһаң, һиңә бик күп мал бирәм,— ти.— Ошо ҡалалағы бөтә ҡарсыҡтарға башлыҡ итеп ҡуям,— ти. Ҡарсыҡ:

— Буҙйегет миндә,— ти. Хан бик күп баһадирҙәр ебәреп, ҡарсыҡтың өйөнән Буҙйегетте тоттора. Уны, аяҡ-ҡулдарын бәйләп, баҙар уртаһына алып баралар, шунда үлтерергә булалар.

Дуҫы Кәмән Буҙйегет янына бара, ул баҙар уртаһында аяҡ-ҡулы бәйле килеш ятҡан була. Буҙйегет иптәше Кәмәнде күреү менән уны саҡырып ала ла ошолай тип әйтә башлай:

— Әй, яҡын дуҫ, бире кил,
Һүҙҙе һиңә әйтәмен.
Әжәл килде башыма,
Мин ни хәлдәр итәйем!
Һинән башҡа дуҫым юҡ,
Һүҙҙе кемгә әйтәйем!
Әй яҡын дуҫ, яҡын дуҫ,
Был илдән һин ҡайтырһың.
Ҡайғыла ҡалған атама,
Зарҙа ҡалған апама,
Яңғыҙ балаң һүҙе, тип
Бик күп сәләм әйтерһең.
Ҡайғыла булған апама
Сәләмемде әйтә күр!
Ҡанатынан ҡайырылған,
Балаһынан айырылған,
Ҡайғыһы күп апама
Сәләмемде әйтә күр!
Башымдағы бүркемде
Һин атама бирә күр!
Яңғыҙ балам килә тип,
Атам мине көтмәһен.
Бармаҡтағы йөҙөктө
Апам ҡулына бирерһең.
Минең өсөн юлында
Күңелен аулап йөрөрһөң.
Ҡайғылы апамды күргәстен,
Сабыр ҡыл, тип әйтерһең.
Әй яҡын дуҫ, яҡын дуҫ,
Минең өсөн йөрөп һин,
Күп ҡайғылар күрҙең һин.
Ата-анаңдан айырылып,
Минең өсөн йөрөп һин,
Ҙур ҡайғыға төштөң һин.

Тыуған илгә ҡайтҡастын,
Ата-апамды күрерһең;
Балам юҡ, тип илаһа,
Сабыр ит, тип әйтерһең.
Ауылдаштар яныңа
Ҡайтыу менән килерҙәр,
Бөтә күргән халыҡҡа
Беҙҙән сәләм әйтерһең.
Беҙҙе күрмәй ҡалғандар
Беҙҙең өйгә барырҙар.
Ата-анамды күрерҙәр,
Беҙҙең өсөн иларҙар.
Айырылыуҙы мин белдем,
Ҡурҡа-ҡурҡа йөрөпөм.
Сәхибъямал йәр өсөн
Был нужаны мин күрҙем.
Хуш бул инде, хуш, дуҫым,
Минең аҡтыҡ һулышым!

Дуҫы Кәмән был һүҙгә ҡаршы ошолай ти:

— Әй Буҙйегет, Буҙйегет,
Беҙ кесенән дуҫ инек.
Инде айырылыу көн етте,
Хуш бул инде һин, егет.
Анаң сыҡһа ҡаршыма,
Ни тип яуап бирермен.
Әй яҡын дуҫ, яҡын дуҫ,
Һинең өсөн үлһәм дә,
Күп дошмандың эсенән
Ҡотолоп сығып булманы.
Йәндән татлы йән дуҫым,
Бик күп бергә йөрөнөк.
Тулы йөҙөңдө күрмәнем,
Былай булырын белмәнем.
Яуыз убыр ҡарсыҡтың
Былай булырын белмәнем,
Ҡулымдағы хәнйәр менән
Барып йәнен алманым.

Хандың бер кеше үлтереүсе кешеһе була. Шул килә лә, халыҡ уртаһында ятҡан Буҙйегеткә хәнйәре менән сәнсә. Буҙйегеттең бер ерен дә яраламай. Ошо рәүешле уға бик күп сәнсә, хәнйәр үтмәй. Буҙйегет: «Минең итек табанында алмас хәнйәрем бар, шуның менән үлтерегеҙ»,— ти. Олтанын аҡтарып, алмас хәнйәрен алып, шуның менән сәнсеп үлтерәләр. Халыҡ илай, Буҙйегеттең дуҫы Кәмән дә бик илай, шунан ошондай бер бәйет әйтә:

— Һай, һай, донъя, һай, донъя,
Кемгә вафа * ҡалдың һин?

Бик ҙур булған хандарҙы
Үҙ куй(ы)ныңа алдың һин.
Алып-алып туймайһың,
Кисә йөрөгән дуҫымды
Бөгөн айырып алдың һин!

Буҙйегеттең өҫтөндәге кейемен һалдырһалар, ул бик матур була. Үлтергәнгә халыҡ бик үкенә, ханды бик һүгәләр. Зәйтүн[76] халыҡты, үкенмәгеҙ, тип өндәп йөрөй.

Сәхибъямал Буҙйегетте эҙләп йөрөй, таба алмай, урамда бер егеттән һорай:

— Дөйә килеп бузлаһа,
Балаһы уның бар микән?
Дөйә кеүек[77] Буҙйегет
Был туйҙарҙа бар микән?
Ҡуйҙар килеп ҡысҡырһа,
Балаһы уның бар микән?
Былбыл килеп һайраһа,
Ҡыҙыл гөлдәр бар микән?
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет
Был илдәрҙә бар микән?

Егет уға яуап бирә:

— Былбыл килеп һайраһа,
Ҡыҙыл гөлдәр юҡ сығыр.
Ҡыҙыл йөҙлө Буҙйегет
Был илдәрҙә юҡ инде.
Ҡарағайлы ҡара урман,
Үтмәҫ ергә киткән ул.
Ғүмер буйы эҙләһәң дә,
Етмәҫ ергә киткән ул.

Сәхибъямал был һүҙҙе ишетеү менән, Буҙйегеттең үлгәнлеген белеп, бик илап, атаһы янына ҡайта. Атаһына ошолай ти:

— Ишеттем мин, әй ата,
Ау ауларға китеп һин,
Моратыңа етеп һин,
Ҡыҙыл ҡандар эсендә
Бала шоңкар аттың һин;
Беҙ ҡаршыңа килгәндә,
Беҙгә ҡаршы сыҡтың һин;
Тау башына менеп ятып,
Бала кейек аттың һин.
Донъя һиңә киң ҡалды,—
Бер көн, атам, иларһың,
Япраҡтай һулырһың.
Уйлағанды белдем мин,

Һинең уйың шул ине:
Буҙйегетте үлтертеп,
Эт Зәйтүнде килтертеп,
Тәхетеңә ултыртып,
Йорт эсендә туй ҡылып,
Мине бирмәк уй ине!
Һинең шундай уйыңды
Әллә ҡасап белдем мин,
Һинең һөйгән эт Зәйтүн,
Һыртын алтын итһәң дә,
Эсен баҡыр итһәң дә,—
Буҙйегеттәй булмаҫ ул!
Тотош алтын итһәң дә,
Зәйтүн кейәү булмаҫ ул.
Буҙйегеттең һөйәген
Мең Зәйтүнгә бирмәмен.
Буҙйегеттең аҡылын
Алтын өйгә бирмәмен.
Буҙйегетем булмағас,
Был донъяла йөрмәҫмен.

Х а н:

— Илама, балам, илама,
Илдә яҡшы табылыр.
Илдә яҡшы күп була,
Мин шуларға бирермен;
Башымдағы тажымды,
Ҡыҙым, һиңә бирермен;
Аҫтымдағы тәхетемде,
Ҡыҙым, һиңә бирермен;
Арғымаҡтай аттарҙы,
Ҡыҙым, һиңә бирермен;
Донъя йөҙө киң, балам,
Һөйгәнеңә бирермен.
Тутыйғоштай егеттәр
Бар ҙа һине теләйҙәр.

Сәхибъямал атаһына бик үпкәләп:

— Буҙйегетем үлгәстен,
Нишләһәң дә булмайҙыр:
Эсем боҙға тулғандыр,
Йөрәгем таштай булғандыр.
Башыңдағы тажыңды
Алып кейер кешем юҡ;
Аҫтыңдағы тәхетеңә
Менеп ултырыр кешем юҡ;
Ат яҡшыңды нишләтәйем? —
Алып менер кешем юҡ;

Туп яҡшыңды нишләтәйем?—
Алып кейер кешем юҡ.
Беҙҙән һуңғы ҡыҙыңды
Яратҡанға бирерһең.

Сәхибъямал Буҙйегетте эҙләп таба, уны дарға аҫып ҡуйған булалар. Уны күреп һамаҡлай-һамаҡлай илай:

— Һинең башың, эй башың,
Киҫелгәнгә оҡшайҙыр:
Кәүҙәң ята болғанып,
Аяҡ-ҡулың солғанып.
Ҡара ҡоштай күҙҙәрең,
Ҡыҙыл гөлдәй йөҙҙәрең
Һулығанға оҡшайҙыр.
Был ҡаланы һин, егет,
Бер күрергә зар булдың.
Был донъянан киттең һин,
Һеҙҙән донъя үтте инде.
Мин дә артыңдан китәмен,
Һин алдымда йөрмәгәс,
Мин дә ерҙә йөрмәймен,—

ти ҙә өйөнә ҡайта. Ҡайта ла егетте тотторған ҡарсыҡты саҡыртып ала: «Әйт әле һин, ни эшләп Буҙйегетте тотторҙоң?— ти.— Хәҙер үҙеңде үлтерәм»,— ти. Ҡарсыҡ бик ҡурҡа, ҡалтырай. Сәхибъямал: «Юҡ, мин һине үлтермәйем; әгәр ерҙә торһам, үлтерер инем,— ти.— Мин дә Буҙйегет артынан китәм»,— тип, ҡарсыҡты сығарып ебәрә.

Сәхибъямал Буҙйегеттең башын алып ҡайта ла бер бик яҡшы һарай һалдырта. Унда Буҙйегетте күмәләр. Сәхибъямал иптәштәрен саҡырып ала ла ошолай ти:

— Эй дуҫтарым, дуҫтарым,
Һеҙ хуш булып ҡалығыҙ!
Инде һеҙҙе күрмәмен,
Һау булығыҙ, дуҫтарым!

Шул ваҡыт бер ҡыҙ бының янына килә лә:

— Эй йән дуҫым, йән дуҫым,
Бер аҙ бергә йөрө инде.
Күп ҡыҙҙарҙы айырма,
Илай-илай ҡалмаһын.

Сәхибъямал:

Донъя һеҙгә ҡала инде,
Шатланышып йәшәгеҙ.
Тор, тиһәң дә, тормаймын,
Ҙур ҡайғыға төштөм мин,

Инде әйтер һүҙем юҡ,
Һүҙем ҡалыр, үҙем юҡ.
Хуш булығыҙ, дуҫтарым! —

ти ҙә, кейемдәре янына килеп, тағы ошолай тип әйтә:

Алтын яға, хуш, тупым,
Һеҙҙе кейер кеше юҡ.
Алтын эйәр, был юрға,
Һине менер кеше юҡ.
Алтын биҙәк, киң һарай,
Һиндә торор кеше юҡ.
Атам мине күп итте,
Теләгемде алманы.
Башҡа ҡыҙы булдымиһә,
Эт Зәйтүнгә бирһен ул!

Шул ваҡыт Кәмән бик ҡайғылы йөҙ менән килеп инеп, ошолай ти:

— Был ҡалала йөрөнөм мин,
Айырылырҙы белдем мин.
Күргән төшөм алдымда,
Дуҫым ҡалды артымда.
Хуш булығыҙ, дуҫтарым!

Сәхибъямал үҙенең барлыҡ кейемдәрен, нәмәләрен ҡалалағы ярлы халыҡҡа тарата. Халыҡты йыя ла ошолай ти:

— Беҙ донъянан китәбеҙ,
Һеҙ донъяла ҡалаһыҙ;
Беҙ, ямандар, үтәбеҙ,
Һеҙ, яҡшылар, ҡалаһыҙ.
Моратыңа етегеҙ!
Артта ҡалды һүҙҙәрем,
Хәсрәтләнде йөҙҙәрем.
Буҙйегеттең артынан
Инде мин дә китәмен, —

тип әйтә лә, Буҙйегеттең һарайына инеп, уны ҡосаҡлап, үҙен-үҙе үлтерә. Сәхибъямалдың үлеүен ишетеү менән, халыҡ бик ҙур ҡайғыға төшә, ханды бик әрләйҙәр. Ата-анаһы ла Сәхибъямал ҡайғыһынан үлә. Кәмән дә Буҙйегеттең ауылына хат яҙа. Кәмән Буҙйегет янына инеп, үҙен-үҙе үлтерә. Буҙйегеттең аталары килеп, улар ҙа улдарының ҡайғыһынан үләләр. Хикәйәт тә ошонда бөттө.

## ЙОСОФ МЕНӘН ЗӨЛӘЙХА

Бер батшаның ун бер улы була. Иң кесеһе, ун беренсеһе, Йософ исемле була. Был кинйә малайы арала иң аҡыллыһы була. Етмәһә, үҙе бик матур ҙа була. Аталары ла, ил халҡы ла күберәк шул кинйәне ярата төшәләр. Ағаларына был бер ҙә оҡшамай.

Берҙән-бер көндө был батшаның ун бер малайы йыйналышып һунарға сығып китәләр. Аталары әйтә: «Кинйәмде ҡалдырығыҙ», — ти. Оло малайҙары быны тыңламай. Йософтоң үҙенең дә бараһы килә. Шул көйө былар китәләр. Әй баралар былар, әй баралар. Бара торғас, Йософто аты менән алға уҡ төшөрөп ебәрәләр ҙә үҙҙәре хәйлә ҡорорға тотоналар. Ҡалай итеп был Йософтоң башын олаҡтырырға ла ҡалай итеп аталарына ҡайтып күренергә.

Шунан былар, бик күп баш ватҡандан һуң, Йософто үлтермәй генә тотоп тәрән ҡойоға һалалар. Үҙҙәре шунда уҡ бер бүре үлтереп, ауыҙын ҡанға буяйҙар ҙа аталарына алҡайтып күрһәтәләр.

— Йософ ҡайҙа? — тип һорауға, улар:

— Йософто ҡорт [1] ашаны,— тиҙәр.— Ышанмаһаң, бына үҙең ҡара, ул яуызды беҙ үлтереп алып ҡайттыҡ. Ауыҙы ҡан ғына...

Аталары бик ҡайғыға ҡала быларҙың. Илай-илай ауырып түшәккә ята.

Инде киләйек Йософ хәленә. Әй ята был ҡойо төбөндә, әй ята. Ҡараңғы ҡойо төбөндә ята торғас, бер тауыш ишетә был. Ҡараһа, ҡойо ауыҙынан биҙрә төшөп килә. Тын алмай ғына көтөп тора был. Төшөп еткәс, биҙрәгә инеп ултыра. Шунан тартып сығаралар быны. Сығарһалар, бер бик гүзәл егет. Былар ошо ерҙән үтеп барыусы юлсылар икән — аптырап ҡалалар. Шунан, ни, Йософто үҙҙәре менән илдәренә алып китәләр.

Йософто былар үҙҙәренең батшалары ҡулына тапшыралар. Шунда Йософ эшләй башлай, төрлө йомошҡа йөрөй, ни ҡушһалар, шуны эшләй, ни һораһалар, шуға яуап бирә. Быны бик яраталар.

Бер саҡ Йософто батшаның ҡыҙы Зөләйха[2] күреп ҡала. Күреп ҡала ла был ғашиҡ була. Йософ үҙе лә быны бик яратып ҡала. Былар йәшереп кенә осраша башлайҙар. Шулай ҙа бер көн килеп быларҙы тоталар, шунда уҡ Йософто батша ҡашына алып киләләр. Батша бик ҡаты була. Ул Йософто зинданға яптыртып та ҡуя.

Йософ зинданда ята-ята һарғайып бөтә. Бер кем бер ни ҙә ҡайғыртмай, уны бөтөнләй онотҡалар.

Берҙән-бер көндө батша төш күрә. Һанаттарын йыйып ала ла һөйләй:

> Бөгәсә мин төш күрҙем,
> Төшөмдә ҡыҙыл ут күрҙем,

Ут янында шеш күрҙем,
Шеш башында ит күрҙем,
Һимеҙ һыйыр бер күрҙем,
Һигеҙ һыйыр бер күрҙем,
Арыҡ һыйыр бер күрҙем,
Һигеҙ һыйыр бер күрҙем,—
Ул ни булыр, ярандар? [3]

Һарайҙағы бар халыҡты саҡыртып, был төштө юратып ҡарайҙар — белеүсе юҡ. Илгә хәбәр сығаралар. Илдән йыйылған халыҡтан берәм-берәм һорап сығалар — юраусы юҡ.

— Һорамаған кеше ҡалманымы?— ти батша ярандарына.

— Ҡалманы,— тиҙәр тегеләр.

Берәүһе әйтә:

— Анау зинданда ятҡан егет кенә ҡалды,—ти.

Батша әйтә:

— Килтерегеҙ шуны,— ти.

Йософто бығауҙары-ниҙәре менән батша ҡашына килтерәләр. Батша төшөн һөйләп бирә. Йософ шунан әҙерәк уйлап тора ла яуап бирә:

Төшөңдә ҡыҙыл ут күрһәң,
Шөһрәтең булыр, бадишам;
Ут янында шеш күрһәң,
Илең артыр, бадишам;
Шеш башында ит күрһәң,
Малың артыр, бадишам.
Һимеҙ һыйыр тигәнең —
Туҡлыҡ килер, бадишам;
Һигеҙ һыйыр тигәнең —
Һигеҙ йылға һуҙылыр.
Арыҡ һыйыр тигәнең —
Аслыҡ килер, бадишам;
Һигеҙ һыйыр тигәнең —
Һигеҙ йылға һуҙылыр.

Шунан батша был егеттең яуабына хайран ҡала. Йософто төрмәнән ҡотҡара ла ҡыҙы Зөләйханы бирә, үҙен илгә батша[4] итеп ҡуя.

Йософ әйткәнсә, илгә һигеҙ йыл тотош туҡлыҡ килә. Ошо форсаттан файҙаланып, батша бөтә илгә запас ҡалдырырға ҡуша. Шунан һигеҙ йыл аслыҡ килә. Башҡа илдәрҙә халыҡ асыға, ә был батшаның халҡы уйлап та бирмәй, Йософтоң зирәклеге арҡаһында туҡ йәшәйҙәр.

Тирә-яҡта аслыҡ булғас, был батшалыҡҡа ағыла башлайҙар. Бер саҡ шулай икмәк һорап, Йософтоң ағалары ла килеп сыға. Йософ уларға ашлыҡ бирә. Шунда үҙен таныта:

Ата ҡоштоң ояһындин
Ун бер бала осоп барҙы,

Упауы кире осоп ҡайтты,
Бере ҡырҙа ятып ҡалды.
Ағалары уны баҙға
Хөсөтлөк илә һалдылар.
Үтеп барған юлаусылар
Баланы төшөп алдылар.
Хоҙаның рәхмәте бик киң,
Юғалмаһы бала меҫкен,
Ризыҡ нәфҡәләре* булғас,
Сәләмәт йөрмәки мөмкин[5].

Ағалары быны танып алалар, аптырап ҡалалар. Йософтоң аяғына йығылалар. Йософ әйтә: «Атайымды алып килегеҙ»,— ти. Тегеләр вәғәҙә итәләр. Йософ әйтә: «Юҡ, мин ышанмайым. Вәғәҙәгеҙгә быны кесе ағайымды ҡалдырығыҙ»,— ти.

Ағалары риза була. Йософтан олораҡ туғандарын ҡалдырып китәләр ҙә ҡайтып аталарына хәбәр итәләр. Шунан икенсе әйләнеүҙә аталары ла килә. Йософ атаһын ҡосаҡлап күтәреп алып түргә ултырта ла ағаларын язалап үлтерә.

Гонаһлылар яза алды,
Гонаһһыҙҙар ҡарап ҡалды,
Халайыҡтар башын һалды,
Ғибрәт һәм һабаҡ алды.
Ҡатил* ағаларын тотоп,
Йософ бирде язаһыны,
Урып бирде, түшәк бирде,
Хөрмәт ҡылды атаһыны.
Гонаһтары ағыр булды,
Ҡатилдәр баш һалыр булды,
Шуның берлә тамам булды,
Зина ҡылыу харам булды.

Шуның берлә тамам булды,
Нури илә жиһан* тулды,
Тыңлағандар һабаҡ алды,
Һөйләгәнгә хәйер һалды.

## ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(Теләкәева Рәхилә варианты)*

Элекке заманда бер хан йәшәгән. Уның бер ҙә балаһы булмай. Быһың бер ышаныслы вәзире лә бар икән. Уныһының да балаһы юҡ икән.

Бер сак хан йортона үткенсе бер теләксе килә. Изге теләк теләп ала ла был әйтә:

— Хандың да, вәзирҙең дә балалары булыр. Хандыкы — ҡыҙ, вәзирҙеке малай булыр. Шул ҡыҙҙы ана шул вәзирҙең малайына бирерһегеҙ. Шулай итһәгеҙ, ул балалар бәхетле булыр,— ти.

Көн дә үтә, туғыҙ ай етә. Ике өйҙә ике бала донъяға килә — береһе ҡыҙ, береһе ир бала. Хандың ҡыҙына Зөһрә тип, ә вәзирҙең улына Таһир тип исем ҡушалар.

Балалар бергә үҫәләр, бергә йөрөйҙәр, бергә уйнайҙар. Шулай ун берҙәргә етәләр. Ун өскә сыҡҡанда, быларҙың, икеһенең дә күңелендә ғишыҡ уты тоҡанып китә. Таһир — Зөһрәне, Зөһрә Таһирҙе ярата башлай.

Вәзир улы — Таһирҙер,
Һәммә эшкә маһирҙер,
Бер күреүҙән Зөһрәне
Ғишыҡ илә янырҙыр.

Таһир әйтте Зөһрәгә:

Сәни сәүәм [27] үлгәнсе,
Ризыҡ бөтөп, тәҡдир етеп,
Ҡара гүргә кергәнсе.

Зөһрәдер хандың ҡыҙы,
Айҙай һылыуҙыр йөҙө.
Ғишыҡ уты берлә тулды
Таһиргә әйткән һүҙе.

Зөһрә әйтте Таһиргә:

Ғашиҡ булдым ғүмергә,
Насип булһын икебеҙгә
Гүргә бергә керергә.

Былар шулай бер-береһенә ғишыҡ тотоп йөрөгәндө хандың ҡоло Ҡара Ғәрәп күреп ҡала ла барып ошаҡлай. Хандың бойороғо менән Таһирҙе тотоп алалар ҙа, һандыҡҡа һалып, Шат йылғаһына ағыҙып ебәрәләр.

Һандыҡ ағып китә. Эй китә, эй китә, күп көндәр, айҙар үтә. Бер саҡ Гөлбатша еренә барып сыға. Гөлбатшаның ҡыҙҙары һыу буйына уйынға сыҡҡандар икән, һандыҡты күреп ҡалалар ҙа, туҡтатып, ярға сығаралар. Асып ҡараһалар, эсендә бик матур егет ята. Береһе әйтә — минеке, икенсеһе әйтә — минеке, өсөнсөһө әйтә — минеке, мин башлап күрҙем, ти. Шунан былар егеткә йыр менән һүҙ башлайҙар.

Ҡыҙҙарҙың әйткәне:

Шат һыуҙары тәрәнме икән,
Тәрән ере билдәнме икән,

Был ҡәҙәрле сибәр егет
Ҡайһы илдәрҙән килгән икән.

Шат һыуҙары ағын икән,
Ағын ере типһән икән,
Матур егет, сибәр егет,
Исемеңде әйтһәң икән.

Таһирҙең әйткәне:

Таһир булыр бәпем атым,
Вәзир булыр бәпем атам,
Яуыз хандың әмере илә
Һандыҡ төпләрендә ятам.
Яуыз хандың әмере илә,
Йәшләй михнәт сигеп йөргән,
Уны күргән, быны күргән,
Күп илдәрҙе гиҙеп йөргән
Таһир атлы егет булам,
Таһир атлы егет булам.

Ҡыҙҙарҙың әйткәне:

Йәшләй михнәт сигеп йөргән
Таһир атлы егет булһаң,
Уны күргән, быны күргән,
Күпте күргән егет булһаң —
Үҙ илеңә ҡайтма кире,
Әгәр беҙҙе яҡын күрһәң,
Беҙҙең илде матур күрһәң,
Һүҙебеҙҙе яҡын итһәң,
Үҙебеҙҙе яҡын итһәң.

Таһирҙең әйткәне:

Атам-әсәм ҡалды минең,
Тыуған ерем ҡалды минең,
Тыуған-үҫкән ерҙәремдә
Йән Зөһрәм ҡалды минең.
Ҡайтаһым бар илдәремә,
Уйнап үҫкән ерҙәремә,
Зөһрәмдең ғишҡы илә
Һары сыҡты йөҙҙәремә.

Ҡайтаһым бар илдәремә,
Тыуған-үҫкән ерҙәремә,
Зөһрәмде һөйөр өсөн
Ҡыҫып ҡесҡә билдәренән.

Шулай итеп, Таһир былар янында ҡалмай, үҙ иленә ҡайтып китә. Көтөүсе кейеме кейенеп, ул күҙ яҙҙырып ҡына Зөһрәне саҡыртып ала. Былар икәүләп ҡасырға булалар. Сығып китер сәғәттәре еткәндә генә әлеге Ҡара Ғәрәп күреп ҡала. Таһирҙе тапып алып тоттора ла тағы барып ошаҡлай. Таһирҙе ҡабат зинданға ябалар.

Хан Таһирғә хөкөмдө үҙе сығара:

— Майҙанға сығып, халыҡ алдында өс йыр йырлаһын. Йырында Зөһрәнең исемен әйтмәһә, ҡотолдорам; әгәр Зөһрәнең исеме әйтелһә, шунда уҡ башын сабып өҙҙөрәм,— ти.

Халыҡ йыйыла. Таһирҙе майҙанға алып сығалар. Таһир халыҡ алдында йырлай башлай. Берҙе йырлай, икене йырлай был, өсөнсөһөндә Зөһрәнең исемен ҡушмай булдыра алмай. Таһирҙең ауыҙынан «Зөһрә» тигән исем ишетелеүе була, килеп бының башын өҙөп тә ташлайҙар.

Таһир үлгәндән һуң, миңә донъя бөттө тип, Зөһрә лә үҙен сәнсеп үлтерә. Уларҙың икеһен йәнәшә күмәләр. Ҡәберҙәренән ике гөл ҡалҡып сыға, уралып-уралып үҫеп китә ул гөлдәр.

## ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(Булатов Зәкәриә варианты)*

Борон-борон заманда Үләрхан менән Үлмәҫхан исемле ике хан йәшәгән. Бик яҡын дуҫтар булғандар. Шулай көндәрҙән бер көн уңышһыҙ һунарҙан ҡайтып килгәндә, ҡыуаҡ артынан бер ҡуян сығып ҡасҡан. Һунарсылар һин ат та, мин ат тип торғансы, ҡуян күҙҙән дә юғалған, ти. Шунан Үләрхан:

— Ярай, атмағаныбыҙ хәйерле булһын. Өйҙә ҡатындарыбыҙ гөманлы ҡалғайны, ҡайтайыҡ,— тип ҡуйған, ти. Ҡайтһалар, Үләрхандың улы булып, Үлмәҫхандың ҡыҙы донъяға килеп торған. Малайға Таһир тип, ҡыҙға Зөһрә тип исем ҡушып, ҙур байрам яһап, буларҙан ҡолаҡ тешләттереп, шул турала ҡөрьән ситенә яҙып ҡуйғандар. Яҡшы, инде ҡоҙалар булышырбыҙ, тип йәшәп ятҡанда, Үләрхан үлгән дә киткән. Етем ҡалған Таһир Зөһрә менән мәҙрәсәгә йөрөй башлаған икән. Шулай бер ваҡыт ҡөрьән ситенән Таһир Зөһрәнең ҡолағын бәләкәй ваҡытында тешләүе тураһында белеп ҡалған. Шуны белгәс, был балалар бер-береһен яҡын күреп йөрөй башлағандар, ти. Дуҫлыҡтарын һиҙеп ҡалған уҡытыусы Үлмәҫханға барып:

— Ханым, Таһир теге серҙе белде бит,— тип әйткән, ти. Шунан Үлмәҫхан етем балаға, затһыҙ кешегә, ҡыҙын бирмәҫ өсөн яҡындары менән ултырып хәйлә ҡора башлаған. Уйлай торғас, хәйләне тапҡандар былар. Үлмәҫхан ҙур ғына һандыҡ эшләтеп, ике баланы ла саҡырып килтергән дә:

— Ҡыҙым, кереп ҡара әле, һыяһың микән? — тигән. Зөһрә кереп ҡараһа, һыя икән. Шунан хан:

— Улым Таһир, һин дә кереп ҡара инде, — ти икән. Таһир һандыҡҡа керһә, тегене сей тирегә төрөп, һандыҡты шап иттереп ябып та ҡуйғандар, ти. Ул да булмай, ихандың ҡушыуы буйынса, һандыҡты ағыҙып та ебәргәндәр. Һандыҡ эсенән Таһирҙең:

Һыуҙар аға аҡма менән,
Әйләнмәгә баҡма менән.
Мине һинән айырҙылар
Мәңге күрмәҫ ожмахҡа, —

тигән һүҙҙәре генә ишетелеп ҡалған, ти.

Был шулай ағып бара икән, яр буйында йәшәгән бер тегермәнсенең өс ҡыҙы йыраҡтан бер ҡараҫҡының ағып килгәнен күреп ҡалған. Күргәндәр ҙә югереп барып аталарына хәбәр иткәндәр. Тегермәнсе:

— Тышҡынаһы оло ҡыҙыма, уртаһы уртансы ҡыҙыма, эстәгеһе кесе ҡыҙыма, — тигән.

Һандыҡты тотоп алып, ярға тартып сығарһалар, оло ҡыҙына — һандыҡ, уртансыһына — сей тире, кесе ҡыҙына Таһир тейгән. Былар ни бик матур йәшәп алып киткәндәр, бер ҡыҙҙары ла донъяға килгән.

Тегендә, Таһир киткәндән башлап, Зөһрә, ай кибәһен көн кибеп, юҡҡа сығып барғанда, бер ҡарт:

— Йә, ҡыҙым, һөйлә һүҙеңде, Таһирҙе табышайым, ни тип әйтергә? — тигәс, Зөһрә:

— Бабай, Таһирҙең үҙен алып ҡайта алмаһаң, таҡыяһын булһа ла алып ҡайтырға тырыш. Юлда ошолай:

Елбер-елбер елән иҫә,
Елдәр менән еләк бешә.
Биктаһирҙең юҡлығына
Япзөһрә хайран иҫә, —

тип көйләп бар, тип оҙатып ҡалған.

Ҡарт, шулай һамаҡлап йөрөй торғас, бер ҡара урманда ҡырҡ ҡараҡҡа тап булған, ти.

— Инде, уландар, мине ебәрегеҙ, ҡайтып барышлай ҡырҡ беренсе юлдашығыҙ мин булырмын, — тигәс кенә ебәргәндәр, ти, быны.

Ҡарт, шулай һамаҡлап донъя гиҙеп йөрөй торғас, Таһир йәшәгән ерҙе килеп тапҡан. Таһирҙе тапҡан да Зөһрәнең һағынып һарғайыуын әйткән, бынан нисек ҡайтырға юлды өйрәткән:

— Улым, юлда ҡырҡ бер ҡараҡҡа осраһың, үҙең менән ҡырҡ бер сапан ал, ботәһен дә таратып бирерһең, мин алмам, мине шунан таныһың, — тигән дә ҡарт ҡайтыр юлына китеп тә барған.

Таһир, ҡайтып, бабаһы, ҡыҙы эргәһенә кереп:

Атым минең елмеш, имеш,
Ҡамсым һабы көмөш, имеш,
Янзөһрәнең хәбәре килмеш, имеш,—

тип хәбәр итеп, үҙенең ҡайтасағы тураһында әйткән. Шул ваҡытта ҡатыны ҡыҙына ниңәлер асыуланып һуҡҡан икән, Таһир:

Ҡыҙ балаға һуҡмағыҙ:
Ҡыҙ балаһың биле нәҙек.
Ҡыҙ баланы һурып үпһәң,
Ҡырҡ көплөк булыр аҙыҡ,—

тигән дә донъяһын ҡалдырып ҡайтып киткән.

Таһир, юлда ҡарт өйрәткәнсә эшләп, ҡараҡтарҙан ҡотолоп үтеп киткән. Зөһрә ҡырына ҡайтып кергәс, иркен тын алайым тип, башын тәҙрәнән сығарған икән, Үлмәҫхандың һаҡсылары тегенең башын сабып өҙгәндәр. Быны күреп ҡалған Зөһрә лә үҙен-үҙе үлтергән. Шулай итеп, былар ҡауышып донъя көтә алмағандар, ти.

Был донъяла ҡауыша алмаһалар ҙа, теге донъяла ҡауышҡандар: һәр яҙ һайын уларҙың ҡәберҙәрендә гөлдәр шытып сыҡҡан, шытып сыҡҡандар ҙа гел бергә үрелеп үҫкәндәр, ти.

## ТАҺИР МЕНӘН ЗӨҺРӘ

*(Ғарифуллин Сабирйән варианты)*

Борон, хандар-батшалар заманында, булған был ғибрәт фажиға.

Таһир менән Зөһрә исемле бер егет менән бер ҡыҙ йәшәгән. Зөһрә — батша ҡыҙы, Таһир етем үҫкән. Икеһе лә бик һылыу булған, ул ике йыл бергә уҡығандар бер китаптан. Бер-береһен бик яҡын күргәндәр, гел бергә булғандар. Таһир — Зөһрәне, Зөһрә Таһирҙе яратҡан. Тик ҡыҙҙың атаһы, батша булғас ни, риза түгел икән быға. Атаһынан бигерәк әсәһе ҡаршы.

— Бер йәтемәккә ҡыҙ биреү — үҙе оят!— тип кенә тора, ти, уныһы.

Шунан, ни, ни эшләһендәр былар, аптырайҙар инде. Таһирҙең апаһы булған икән, ул да әйтеп ҡарай:

— Эй энем, батша ҡыҙы шикелле бүтән ҡыҙ табылмаҫ тип беләһеңме ни һиңә. Ал күңелеңде шунан!— ти икән апаһы.

— Апай, унан башҡа бүтәнде аласаҡ түгелмен,— ти Таһир.

Таһирҙең һәр ваҡыт Зөһрәне күреп тораһы килә. Апаһының көлдәген кейә лә Зөһрә ҡырына китә. Зөһрәне ҡараусы ҡыҙҙар ҙа бар инде, шунда барып йөрөй. Бергәләп уйнайҙар, шиғыр әйтешәләр.

Шулай йөрөй торғас, батша һиҙеп ҡалғандыр инде, бер ваҡыт Таһирҙе үҙе янына саҡыртып ала ла:

— Өс шиғыр әйт, тик береһенә лә Зөһрәнең исемен ҡушма,— ти.

Таһир шиғыр әйтә, икеһендә ҡушмай, ә өсонсөһөндә ҡуша бит... Булдыра алмағандыр инде ҡушмайынса, ғашиҡ булғас ни.

Шунан батша, сей һыйыр тиреһенә урап, Шат һыуына ағыҙып ебәрергә ҡуша. Таһир, ҡурайым ҡалмаһын тип, үтенеп, ҡурайын һорап ала.

Шиғырҙар әйтеп, ҡурайын тартып ағып китә был хәҙер. Ағып бара, ағып бара, Гөл бадишаһына барып етә. Шул саҡ һыу ингән ике ҡыҙ ҡурай тауышын ишетеп ҡала. Әләң-йөләң ҡарана торғас, бер нәмә ағып килеүен күрәләр былар. Ни етте шулай, ярға тартып сығаралар. Һыуҙа шешенеп, өрөлөп киткән тиресе сисеп ебәрһәләр, ни күҙҙәре менән күрһендәр: һыу һөлөгө шикелле егет килеп сыға. Хәҙер ҡыҙҙар талаша. «Шыбаға тотошайыҡ»,— тип, ойгә алып ҡайталар.

Таһир бер ҡыҙға ла ҡарамай, тик ҡасыуҙы ғына уйлай. Батшаның һарайы бейек таш ҡойма менән уратып алынған. Таһир бер ҙур ғына ташты арҡан осона бәйләй ҙә ҡойма аша ырғыта, шунан арҡанға үрмәләп, икенсе яҡҡа үҙе сыға. Тая был бынан. Ҡараңғы төн, бер кем күрмәй. Шул китеүҙән китә лә китә. Бер күпергә барып етһә, ҡырҡ ҡараҡ баҫып тора. Ни эшләргә? Таһир быларға үҙенең ғишҡын һөйләй:

Ай миңә көндөҙҙөр,
Юл миңә төҙҙөр [28].
Ебәрегеҙ, ҡырыҡ ҡәрендәш,
Сәүгән йәрем яңғыҙҙыр.

Шунан тегеләрҙең утыҙ туғыҙы әйтә:

— Ашайыҡ быны,— ти. Берәүһе:

— Беҙгә бер ҡабым да теймәй бит унан, китһен үҙ юлына!— ти.

Ҡотола Таһир быларҙан. Ҡайтып етә лә апаһына ҡысҡыра:

— Эй, апай, һөйөнсө, мин ҡайттым!— ти.

— Шунда ғына ҡалғас ни була. — ти апаһы.

— Мин Зөһрәгә барам,— ти Таһир. Түҙмәй инде быныц йөрәге, Зөһрәгә ашҡына.

Зөһрә, Таһир киткәс, атаһына үпкәләп, ҡырҡ юл сатлығына йорт һалдырып, шунда йәшәй икән. Таһир шунда китә. Килһә, йорто харап бейек быныц, тәҙрә сиртеп кенә сакырырлыҡ түгел. Егет йырлай:

Мин килдем сәхәр ваҡытында,
Зөһрә ята сарҙағында.
Һөрәпләпем — уянмаһы,
Уяныр әле ваҡытында.

З ө һ р ә:

Бер һөрәнләнең, уяндым,
Уң яғыма таяндым.
Һин икәнде белмәпем,
Ҡарасопаҡтыр, тип уйланым [29].

Зөһрәне шул Ҡарасонаҡҡа бирергә итәләр икән.

Таһир дилбегәгә үрмәләп менә лә тәҙрә аша керә. Икеһе лә бик шатлана, уйнап-көлөп, бергә йәшәйҙәр.

Зөһрәгә ике ҡыҙ аш ташый икән. Әлек аш артып ҡалып, кире алып китер булғандар; хәҙер икәү булғас, ашап бөтәләр. Зөһрә таҙарып, һимереп китә. Кәйефе лә бик шәп. Таһир ҡурай тарта, Зөһрә бейей. Доңҡолдөгө сыға, икеһе илле кеше ҡәҙәре. Тауыштан ҡыҙҙары ла һиҙенә быныҡ. Таһир килгәндер, тип уйлайҙар. Ҡарасонаҡ та ишетеп ҡалып, батшаға барып әйтә. Кире килә һалып, ҡарауыллап тора. Батша ғәскәр ебәрә. Таһир һуғыша, әммә бер үҙе күпме ҡаршы тора алһын инде, тоталар быны. Таһиргә ҡылыс менән сабып ҡарайҙар, ҡылыс ҡырҡмай.

Шунан Таһир әйтә:

— Шулай, көн еткәс, бер нейәҫтә лә эшләп булмай. Мәгеҙ минең алмас ҡылысымды, ул үҙ ауырлығы менән генә киҫеп төшөрә,— ти.

Алмас ҡылысты алып, шуның менән башын сабып өҙәләр яуыздар...

Был хәлдән һуң Зөһрә ауырып китә. Төрлө сараһын күрәләр, табиптәр килтереп ҡарайҙар — һис нindәй дауа килешмәй быға. Аптырайҙар инде. Шунан ғалимдәр әйтә: «Әгәр Таһирҙең итен ашатмаһаң, Зөһрә юнәлмәй»,— тиҙәр. Таһирҙең бот итен ҡырҡып алып килтерәләр ҙә, ҡурып, Зөһрәгә еҫкәткәйнеләр, ҡыҙ күҙен асып, телгә килә:

> Даһыр-даһыр баҙарҙар,
> Даһырҙашып китерҙәр.
> Баҙарында ит бөтһә,
> Таһир итен бирерҙәр,—

ти [30].

Һикереп тороп ултыра ла:

— Юҡ, ашамайым Таһир итен!— ти.

Зөһрәгә иҫ керҙе, тип шатланырға ла өлгөрмәнеләр, ҡыҙ атаһының бысағын алды ла ботәһенең күҙ алдында үҙен-үҙе салды ла ташланы.

Ҡарасонаҡ:

— Зөһрә үлгәс, мин дә йәшәмәйем,— тип, иҙән ҡыра торған бысаҡ менән муйынын ышҡый башлаһа, бер ҙә ҡырҡа алмай икән. Шулай ике көн үләлмәйенсә ятҡан ул, юнһеҙ!

Батша Зөһрәне, Ҡарасонаҡ менән ҡушлап, Шат йылғаһының ярына күмдерткән. Ә Таһирҙе — икенсе яҡҡа. Таһир ҡәберенән дә, Зөһрә ҡәберенән дә ике тирәк үҫеп сыҡҡан. Ә Ҡарасонаҡ ҡәберендә ялбырҙап дегәнәк үҫкән.

Быны хикмәт: буйға зифа тирәктәр, әйтерһең, ҡушылырға теләп, йылға аша бер-береһенә үрелгәндәр. Ҡарасонаҡ, бында ла ирек бирмәйенсә, араларына дегәнәк булып баҫҡан...

Ана шулай үҙһүҙле батша, ярлыға бирмәйем тип, һөләк кеүек егетте лә, үҙенең берҙән-бер ҡыҙын да харап иткән.

## СӘЙФЕЛМӨЛӨК

Элекке замандарҙа бер батша булған. Аты — Рәбигелмөлөк [1]. Был батшаның балаһы булмаған, бик ҡайғырған. Батша нисә көндәр йығлап ғүмерен үткәргән. Ярандары быны күргәндәр ҙә:

— Эй, бадишаһыбыҙ, һин ғүмереңде былай заяға үткәрмә, күп ерҙәрҙән өгөт-нәсихәттәр ал, күп ғалимдәрҙе янына йый, бәлки, һиңә бер дарман бирерҙәр,— тигәндәр.

Батша уйлаған-уйлаған да, күп ғалимдәрҙе, күп ярандарҙы янына йыйып, өгөт-нәсихәт һораған. Ярандары әйткән:

— Эй, бадиша, һинән генә ҡалмаған бит, һин башҡа бер йәмәғәт ал, бәлки, балаң булыр,— тигәндәр.

Был батша икенсе бер батшаға [2] хат яҙған: «Эй бадишаһ,— тигән,— минең шундай-шундай үтенесем бар: һин миңә ҡыҙыңды асбаблап, мал менән ебәр. Мин өйләнергә уйлайым»,— тигән.

Теге батша хатты алып уҡығас: «Була!»— тигән. Ярандарын әҙерләп, ҡыҙын хөрмәтләп, күп мал менән был батшаға ебәргән.

Ул ҡыҙҙың исеме Йәмилә булған. Ярар, был батша никахлаған. Күп тә үтмәгән, был ҡатын бер ир бала килтергән донъяға. Батшаның бар ҡыуанысы шул балала булған. Хәҙер ул баланың исемен Сәйфелмөлөк ҡушҡандар.

Был батшаның янында бик ҙур вәзире булған. Шул вәзирҙең дә икенсе көндә бер ир балаһы тыуған. Аның атын Сәғит ҡушалар. Былар, Сәйфелмөлөк менән Сәғит икеһе бергә аяҡҡа баҫып, гел бергә уйнап, бергә үҫеп, иптәш-шәриктәш булалар. Былар күп һөнәрҙәргә өйрәнәләр, бергәләп һунарға йөрөйҙәр. Ярар, шулай үҫәләр былар. Хәҙер уп ете йәштәренә килеп етәләр. Батша быларға бер һарай һалып бирә, икеһенә. Һәр көн шул һарайҙа булалар.

Берҙән-бер көндө, батша тәхетендә ултырып йоҡоға ятҡас, быны бер ауаз менән саҡырып сығаралар. Батша сығып ҡараһа, ни күҙе менән күрһен — ике ҡара ҡол тора быныц ҡаршыһында. Береһе бер ат етәкләгән, береһе бер йөҙөк менән тун тотҡан. Батшаға әйтәләр:

— Һиңә бүләк килтерҙек,— тиҙәр.

— Ниндәй бүләк?

— Ниндәй бүләк икәнен үҙең белерһең,— тиҙәр ҙә икеһе лә шунда уҡ ғәйеп була. Батша атты кертеп һарайына бәйләй, тунды һандыҡҡа һала, йөҙөгөн бармағына кейә.

Ярар. Бер көн үтә, ике көн үтә. «Хәҙер быны мин,— ти,— ике балаға тапшырайым. Атты вәзирҙең улына бирәйем, минең улым атҡа мохтаж түгел. Тун менән йөҙөктө улыма бирәйем»,— ти. Хәҙер быларҙың икеһен дә саҡыртып, батша янына килтертә. Былар киләләр.

— Атай, ниңә саҡырҙың?— ти Сәйфелмөлөк.

— Бына, улым, мин төндә бер хәлгә тарыным. Төндә ике ҡара ҡол, таныманым, ҡараңғы ине, ат тотторҙолар ҡулыма, тун менән йөҙөк бирҙеләр,— ти.— Атты дуҫың Сәғиткә тапшырам. Ә һин тун менән йөҙөктө кей,— ти.

Былар, икеһе лә ҡыуанып, алып сығалар. Хәҙер, ярар, Сәғит ат менән бик хайран ҡала. Йөҙөк бик матур була, ҡашында Сөләймән батшаның [3] исеме яҙылған. Хәҙер, ярар, тунды егет алып кейә, аны-мыны ҡарамай. Бер көндө йөрөп ҡайтып, тунды элеп ҡуйһа, ни күҙе менән күрһен, тундың ең төбөндә бер һүрәт бар. Шул ҡәҙәре матур ҡыҙ һүрәте. Тәҡәтһеҙ матур ҡыҙ теге. Иҫе китә Сәйфелмөлөктөң. «Был ниндәй хәл?!»— ти.

Ә һүрәттең аҫтына ошондай ғына яҙыу яҙылған. «Аты — Бәҙиғолъямал бинте Шаһбал, мәҡамы — Ирәм бағы». Был ҡыҙҙың исеме — Бәҙиғолъямал, атаһы — Шаһбал батша, ә йәшәгән ере — Ирәм бағы [4] тигән ҡала, тип яҙылған. Башҡа бер һүҙ ҙә юҡ.

Сәйфелмөлөк ашауҙан яҙа, эсеүҙән ҡала. Көндән-көн һарғая, кибә. Хәҙер Сәғит менән уйнарға ла күңеле төшмәй. Көн илай, төн илай, ҡаплanып ятып илай. Батша аптырай:

— Был балаға ниндәй рәнйеү тейҙе икән, ниндәй хәл булды икән? — ти. Күп ғалимдәрҙе йыйып, улына дауа һорай.

Ҡараусылар әйтәләр:

— Быға һис бер ерҙә дауа юҡ, бының күңеленә ғишыҡ эҫәре кергән,— тиҙәр.

— Ҡайҙан икән ул ғишыҡ? — тип һорап ҡарай, бирәү ҙә белмәй. Хәҙер Сәғитте саҡырта.

— Һин ысын иптәше, дуҫы бит, барып һора, ниндәй ғишыҡ икән, шуны белеп кил!— ти.

Сәғит, килеп, шул ҡәҙәре һорап ҡарай, юҡ, әйтмәй Сәйфелмөлөк. Ҡайғырыуын белә. Һары кәбеҫтә булып һарғая Сәйфелмөлөк. Һүрәт ҡыҙҙы эҙләргә бының күңеле абҙаҡ була.

Шунан бер көндө Сәғит хәнйәрен ала ла һарайға Сәйфелмөлөк янына барып керә:

— Һин минең иптәшем, сереңде әйт. Әгәр әйтмәһәң, ошо ерҙә мин һине сәнсәм!— ти.

Сәйфелмөлөк бик ҡурҡыуға ҡала. «Ай-һай, был эште ҡыла күрмәһен»,— тип уйлай. Шунан Сәйфелмөлөк һандыҡтан тунды ала ла теге һүрәтте күрһәтә.

— Ошо һүрәттәге ҡыҙҙы табып күрмәһәм, мин донъяла йәшәмәйем,— ти.

— Ай-һай, бик ауыр хәлгә юлыҡҡанһың. Быны Рәбиғелмөлөк батшаға һөйләмәй хәлем юҡ,— ти Сәғит.

Сәғит иртән тора, батшаның ҡаршыһына бара.

— Йә, бадиша, мин был хәлдең дусарын белдем,— ти.

— Йә, һөйлә!— ти батша.

— Һин биргән тунда бер ҡыҙ һүрәте бар икән. Сәйфелмөлөк дуҫтым шул һүрәтте күреп ғашиҡ булған. Тәҡәт тоторға дарманы юҡ,— ти Сәғит.

Хәҙер батша ғәжәпкә ҡала. Күп кешеләрҙе йыйҙыра. Улар әйтә:

— Һин ҙур батша бит. Күп итеп кәмә яһат, һыу менән торло яҡтарға кешеләр ебәр. Ул батшаның ҡайҙа икәнен белеп ҡайтырҙар,— тиҙәр.

Батша күп оҫталар йыя. Күп кәмәләр яһата. Йөҙ кешене саҡырып, кәмәләргә беркетә. Ашамлыҡтар, эсемлектәр ҡуя.

— Һеҙ бер ай юл йөрөп ҡайтығыҙ. — тип теге яҙыуҙы тоттора.

Һәр береће, һүрәт аҫтына яҙылған яҙыуҙы тотоп, Ирәм бағын эҙләп китәләр кәмә менән. Былар бик күп вилайәттәргә баралар. Күп батшаларға юлығалар. Батшалар: «Юҡ, был хәбәрҙе беҙ бер ерҙән дә ишеткәнебеҙ юҡ»,— тиҙәр. Ҡайҙа ғына барһалар ҙа, хәбәр тапмайҙар. Быларҙың ҡайһылары бер ай самаһы, ике ай самаһы, ҡайһылары өс ай самаһы йөрөп ҡайталар. Берећенән бер хәбәр юҡ. Хәҙер яңынан Сәйфелмөлөк биһуш * була. Тәҡәт торорға аҡылы ҡалмай.

— Әй, атайым, рөхсәт ит, миңә күп халыҡтар бир, күп карантар яһат. Сәғит дуҫтымды эйәртеп, мин үҙем эҙләргә сығам,— ти. Батша риза булмай:

— Мин ғүмеремдә күргән бер баламдан яҙыр хәлем юҡ,— ти.

— Юҡ, рөхсәтеңде бир, атай. Бирмәһәң, мин ашамайым да, эсмәйем дә, йәшәмәйем дә,— ти Сәйфелмөлөк, пыҡыша.

Шунан Сәйфелмөлөк тупды ҡулына ала, йөҙөктө кейә. Батша ни эшләһен инде, күп караптар яһатып, ос йөҙләп кеше менән улын сығарып ебәрә. Бик ҙур карапҡа ултырып, Сәйфелмөлөк менән Сәғит алдан китә. Күп диңгеҙҙәр үтәләр, күп ерҙәрҙе йөрөйҙәр. Быларҙың аҙыҡтары ла әҙәйә хәҙер.

Бер заман, ни күҙең менән күрәһең, дауыл сыға. Караптар, кәмәләр берәм-берәм һыу төбөнә китәләр. Күп халыҡ һыуға бата. Сәйфелмөлөк менән Сәғит бер унлап кеше менән генә кәмәләрҙә тороп ҡала. Хәҙер быларҙы һыу әйләндерә. Шул ҡәҙәре әйләндерә, шул ҡәҙәре әйләндерә дарья! Былар, тәҡәтһеҙ, нисә көндәр һыу өҫтөндә әйләнәләр. Әйләнә торғас, Сәйфелмөлөк, бик арып, йоҡоға тала. Йоҡоһонда бер бабай килә — төшөнә керә бының.

— Әй, улым, һинең ҡулыңда Сөләймән йөҙөгө бар бит,— ти.— Ул йөҙөк булғас, һин һыуҙа батмайһың. Шул йөҙөгөңдө һин һыуға тыҡ,— ти.

Сәйфелмөлөк кинәт кенә уянып китә йоҡоһонан. Ҡулындағы йөҙөгөн һыуға тыҡҡайны, һыу борғоп-борғоп, кәмәләрҙе өйрөлтөп-өйрөлтөп, диңгеҙ ситенә илтеп сығара.

Былар — ун кеше, Сәйфелмөлөк, Сәғит — юл менән китәләр. Кәмәләрен ташлайҙар хәҙер. Теге ҡыҙҙы эҙләйҙәр. Юҡ бер урында ла, күпме һорашып ҡараһалар ҙа — һис кем белмәй.

— Беҙ быңдай хәлде күргәнебеҙ юҡ, ундай батшаны белмәйбеҙ,— тиҙәр.

Тағы китәләр былар. Китәләр, китәләр, бара торғас, быларҙы йәнкеләр [5] тотоп ала. Тотоп алып китәләр быларҙы. Әй-й-й, көслө булалар был йәнкеләр. Ун икећен дә елкәләрендә һалып алып китәләр. Быларҙы алып барып батшаларына бирәләр. Батшалары әҙәм ите ашаусы була. Быларҙы һимертергә һала. Ун кешене — бер ергә, Сәғит менән Сәйфелмөлөк бик күркәм була, уларҙы йәлләп, икећен бер төрмәгә яба. Теге ун кешегә емеште илтеп түгәләр, ас булғас, тегеләр ашай. Уныһы ла һимерә. Быларҙың һәр көндө берећен һуйып, батша вәзирҙәре менән ашай.

Хәҙер был уп кеше тамам бөттө. Сәғит менән Сәйфелмөлөк кенә ҡалды. Батшаның быларға ҡулы бармай бер ҙә. Ҡулы барыр ине, Сәйфелмөлөктөң ҡулында йөҙөгө бар. Сәйфелмөлөк шул ҡәҙәре һорашып ҡарай батшанан, шундай хәл юҡмы, тип. Сәйфелмөлөктәр, беҙ шундай эш менән йөрөйбөҙ, беҙҙе ҡотҡарһана, тип үтенеп һорайҙар. Батша ҡотҡармай.

Икеһе бер бүлмәлә бик күп илағандан һуң, аллаһы тәғәләгә күп хикәйәттәр уҡый [6] Сәйфелмөлөк. Шунан бер ҡатып һүрәтендә бер әҙәм пәйҙа булып, ишекте аса. Тегенең ишекте асыуы була, былар сығалар. Батша һарайының эргәһендә ҙур ғына кәмә була. Былар шул кәмәгә ултырып, кәмә менән китәләр. Төрмәлә бирелгән тәғәмдәрҙе үҙҙәре менән алалар. Бик оҙаҡ баралар, гел һыу менән баралар. Шунан диңгеҙ ситенә етеп, ҡоро ергә сығалар. Бара торғас, быларға маймылдар осрай. Маймылдар икеһеп дә тоталар. Ул маймылдар шул ҡәҙәре ҡеүәтле булалар, быларҙың икеһеп дә күтәреп алып китәләр. Илтеп батшаларына тапшыралар. Батшалары быларҙың әҙәмдән булған. Алар һәр ваҡыт батшалары үлһә, әҙәм нәҫеленән ҡуялар икән. Әҙәм нәҫеленән ҡуйған был маймылдар батшаһы быларҙы күреп илай.

— Ах, былар ҙа минең кеүек әсирлеккә төшкән икән,— ти. Батша илай-илай ҙа Сәйфелмөлөктән хәл-әхүәлдәреп һораша, Сәйфелмөлөк һөйләй:

— Бына шулай күп малдарҙан яҙып, күп кешеләрем харап булып, бына шулай йөрөйом,— ти.

Батша әйтә:

— Минең янда ҡалығыҙ,— ти.— Иптәшең вәзир булыр, үҙең минең ҡыҙымды никахларһың,—ти. Шулай булһа ғына, был маймылдарҙан ҡотолаһың; улай итмәһәң, һине барыбер иҫән ҡалдырмайҙар,— ти батша.

Хәҙер ул ҡыҙҙы нисек алһын. Ул ҡыҙҙы күрһәң, шул тиклем йәмһеҙ: башы эт, аяҡтары әҙәм бының. Батшаның ҡатыны шундай булғас, ҡыҙы ла шуға оҡшап тыуған. Ә батша үҙе әҙәм нәҫеленән. Нишләһен инде. Никахлап, батша быны ҡыҙы менән ябырға була. Инде был ҡыҙ, мин һиңә әйтәйем:

Ҡалын кирбес менән йөҙөн ағарта,
Ҡыҙыл кирбес менән йөҙон ағарта.

Был ҡыҙ, миңә ҡараһын тип, кирбесте аҡбурға буяп йөҙөнә ышҡый. Шул ҡәҙәре йәмһеҙ. Сәйфелмөлөк быны күргән көйгә, эттән ҡасҡан ҡуян кеүек, һикереп ҡаса. Ҡыҙ атаһына хәбәр итә: «Мине тиңһенмәй, быны тот, һуй, аша»,— ти.

Батша вәзирҙәр ебәрә. Ни эшләһен инде, Сәйфелмөлөк риза була. Һаман тороп яталар. Сәйфелмөлөк бик күп мөнәжәттәр уҡый, бик илай. Сәғит бының янында юҡ хәҙер. Уның ҡайҙа булғанын да белмәй. Батша быға бик асыулана, ҡыҙына яҡын килмәгәс. Бер ай самаһы был ҡыҙ менән яфа сигеп торғандан һуң, Сәйфелмөлөк, үҙ башын үҙе ҡотҡарып, бер төндө диңгеҙгә төшөп китә. Сәғит тороп ҡала, күрмәй ҡайҙа икәнен.

Китте хәҙер. Ҡулында йөҙөк булғас, һыуға ла батмай, аҫҡа ла үлмәй, бер ере лә интекмәй. Күп мәртәбә һыуҙар менән китеп, быны таба алмайҙар, тота алмайҙар хәҙер. Был бер утрауға барып сыға кәмәһе менән. Ул утрауҙа емештәр. Ул ҡоштар һайрай. Шул ҡәҙәре оло утрау, яҡшы ер. Бындағы емештәр донъяла бер ерҙә лә үҫмәгән була. Утрауҙа ул бер ай ята, хәл керә. Хәҙер көсәйә.

Шунан кәмәһе менән утрауҙың икенсе яғына китә. Күп бара торғастан, бер ерҙән дә сығырға урын юҡ, бер ерҙән дә хәбәр алырға юл юҡ, диңгеҙ бик киң, бик күп ерҙәрҙе алған була. Күп бара торғас, диңгеҙ уртаһында бер ҙу-у-у-р ағас үҫкәнде күрә был. Кәмәһен бороп, шул ағас төбөнә бара. Шул ағас төбөнә кәмәһен бәйләп, үҙе ағастың башына менеп ултыра. Ултыра, бер ерҙән бер шәһәр күрмәй, фәҡәт диңгеҙ, ап-аҡ һыу. Ағас башында күп ултыра, тупын өҫтөнән һаман һалмай, үҙе менән йөрөй һүрәт, ә йөҙөк — бармаҡта.

Күп ултыра торғас, бер төн уртаһында ағастың башына би-и-к ҙур бер ҡош килеп ҡуна. Ғәләмәт ҙур. Боттары әҙәм бото йыуанлығы. Был әйтә: «Ни булһа ла булыр, был ҡоштоң ике ботона тотонайым,—ти. — Был ҡәҙәре ҡеүәтле ҡош, бәлки, мине күтәрер»,— ти. Ҡош йоҡлай ҡунаҡлаған көйөнсә. Сәйфелмөлөк ҡоштоң аяғына сырмалып тотона. Ҡош был тотонған көйөнә ҡурҡып уянып осоп китә, мин һиңә әйтәйем. Әй-й, Сәйфелмөлөк һалынып бара, төшмәй. Төшөр ине, йоҙоҡ төшөрмәй. Хәҙер был ҡош бер һыу ситендәге ағасҡа ҡуна. Бер ағасҡа ҡунғандан һуң, Сәйфелмөлөк ҡоштан ысҡынып, ағасҡа тотоноп, түбән төшөп, яр ҡырына ултыра. Ҡош яңынан осоп китә. Хәҙер был ярҙан менергә бер ҙә, бер ҙә аҡыл юҡ. Шул ҡәҙәре бейек яр, әҙәм менерлек түгел. Ун бармағының тырнағы төшөп бөтә, ҡыҙыл иткә ҡала. Тештәренә быының, ауыҙына балсыҡ, ҡом тула. Нисек тә тырмашып, теге ярҙың өҫтөнә менә. Менеп ҡараһа, ни күҙе менән күрһен,— шул ҡәҙәре тигеҙлек, шул ҡәҙәре ҙур ялан. Бик асыға был хәҙер. Шунан ҡарап тора-тора ла:

> Ҡош та осмаҫ,
> Ҡол да йөрөмәҫ
> Был йыһанда, —

ти.

Хәҙер бер аҙ ял итеп ултыра ла китә. Китһә, быға бер юлбарыҫ ҡаршы килә. Шул ҡәҙәре оло, быны ашарға-йоторға килә.

> Бар ине бер тәбер* теше биләндә,
> Төшөргән ине йәнкиҙәр иләндә.
> Тәбер, тешене алып, үрә торҙо,
> Ҡылыс менән уның башына орҙо, —

ти. Ҡинәттән ҡылысын алып был юлбарыҫҡа ынтылып сапҡайны, юлбарыҫтың башы өҙөлдө лә төштө, ти.

Хәҙер, ярар, был юлбарыҫтың тиреһен тунаны. Ите бик һимеҙ булды бының. Быны бешереп, ҡурып, бер аҙ тамаҡланды. Әҙерәк ит киҫәктәре лә алды, ризыҡҡа тип.

Китте тағы. Инде бара — гел тигеҙлек тә тигеҙлек. Бер ерҙә бер тау юҡ. Бер урман юҡ. Бер йорт юҡ. Бер шәһәр юҡ. Бик күп ерҙәр барғандан һуң, ҡараһа, бер ялтырап торған йорт күрә. Япа-яңғыҙ.

— Ах!— ти.— Ни күрһәм дә күрәйем, быға барайым,— ти.

Бара был йортҡа. Шул ҡәҙәре биҙәгән йорт. Уҡапан да алтындан ҡойолған йорт был. «Был — дейеү йорто»,— тип яҙылған. Йоҙаҡ менән йоҙаҡлағандар ишекте. Бер ерҙән дә керергә урын юҡ. Хәҙер теге ҡылысы менән йоҙаҡты бәреп вата. Өйгә керә. Керһә, был яҡта алтын, был яҡта көмөш, йәнеңә нәстә кәрәк! Был йорттоң эсендә лә, тышында ла бер әҙәм юҡ. Эй йөрөй был, эй йөрөй. Бүлмәләрҙә күп йөрөй торғас, бер бүлмәгә барып керә, оло йорттоң бүлмәһенә. Ә унда бер бишек аҫылынып тора. Уҡапан ҡоролоп ҡуйылған. Кинәттән һикереп, был бишекте шартлатып өҙөп ала ла оҫтөрәп тышҡа алып сыға. Бер ерендә кеше сығыр урын юҡ, мисәтләнгән була бишек. Сығара ла дейеүҙең ишек төбөнә ҡуя. Шунан был бишек эсенән бер тауыш килә.

— Ниндәй зат һин, әҙәмдәнме, бәрейҙәнме? Ниңә миңә ҡағылаһың?— ти.

Эсен асып ҡараһа, бер матур ҡыҙ. Был ҡыҙҙың исеме беләгенә яҙылып ҡуйылған. Быныц исеме Мәликә була. Бәҙиғолъямал булмай — теге һүрәт түгел. Шул ҡәҙәре матур ҡыҙ! Хәҙер был ҡыҙ тороп ултыра, Сәйфелмөлөк баҫып тора. Былар бер аҙ һуш йыйғандан һуң, ҡыҙ быға өндәшә.

— Ниндәй зат һин?— ти.— Ниндәй әҙәм? Был дейеүҙең йортона ни башың менән килеп керҙең?— ти.— Һин кем, әҙәмдәнме, бәрейҙәнме, дейеүҙәнме?— ти.

Сәйфелмөлөк быны, үҙ телендә булғас, иҫе китеп, һушы китеп йығыла, был ҡыҙҙы күреп.

Әҙерәк ятҡандан һуң тора был. Хәҙер Мәликә тигән ҡыҙ ҙа тороп ултыра. Был да янына ултыра. Былар һөйләшәләр. Сәйфелмөлөк башынан үткән бөтә хәлдәрҙе был ҡыҙға һөйләй. Ҡыҙ тыңлай. Хәҙер Мәликә әйтә:

— Эй-й әҙәм заты,— ти,— бына мин дейеү ҡулына дусар булдым,— ти.— Был дейеү әле бер көн йөрөнө,— ти.— Өс көн, өс төн йөрөгәс, минең яныма ҡайтып, мине тәрбиәләй,— ти.

> Тәнемдән тотмай ул, ҡулдәктән үргә.
> Ҡулымдан тотмайҙыр һәм еңдән үргә.

Иллә миңә теймәй, — ти. — Был дейеү ҡулына тошкәнемә бына ун бер йыл, — ти. — Ун бер йәшемдә килгән инем. Хәҙер мин егерме ике йәштә,— ти.

Шунан былар һөйләшәләр, илашалар. Сәйфелмөлөк әйтә:

— Һин аҫылыңды һөйлә инде,— ти.— Ҡайҙан килдең? Ниҙәр күрҙең? Мин һиңә һөйләп бөттөм, һин дә һөйлә,— ти.

Мәликә һөйләй:

— Хәҙер минең аҫылымды һөйләһәм, бик оҙаҡ,— ти.— Дейеү ҡайтып етмәһен, ҡайтһа, икебеҙҙе лә харап итә,— ти.— Хәҙер бер генә көн ҡалды,— ти.

Сәйфелмөлөк әйтә:

— Ҡыҫҡа ғына булһа ла, тиҙ һөйлә миңә,— ти.— Ҡайҙа тыуҙың? Ҡайҙа үҫтең? Ниҙәр күрҙең? Нисек дейеүгә килеп төшкәндәреңде тиҙ генә һөйлә,— ти.

Мәликә ҡыҙ башлай:

— Мин,— ти,— бер батшаның ҡыҙы,— ти.— Мин бер генә бала булғанмын. Инәйем мине баҡсала тыуҙырған. Шул тыуҙырған көндө өйөрмә менән бер бәрей ҡатыны инәйем янына килеп төшкән,— ти.— Тәхет менән,— ти.— Инәйем мине табып, имеҙеп ултыра икән, был бәрей ҡатыны, бер ағас төбөнә барып, бер ҡыҙ бала тыуҙырған. Шунан, балаһын тыуҙырғандан һуң, балаһын күтәреп, минең инәйем янына килгән. Инәйемә әйткән:

— Эй әҙәми зат ҡатын, мин—бәрей ҡатыны, мин дә бер ҡыҙ бала тыуҙырҙым. Һинең балаң кем? — тип һораған.

Инәйем әйткән:

— Минең дә балам ҡыҙ бала,— тип әйткән, ти.

— Алай булғас,— тип әйткән бәрей ҡатыны,— мин Ирән бағы еренән туйға китеп бара инем. Балам тыуыр ваҡыт еткәс, мине ошо ағас төбөнә төшөрөп киттеләр. Мине ҡайтышлай алып китәләр, улар туйға китте,— тип әйткән, ти.— Ҡайҙа әле, һинең ҡыҙың нисдәй? Бына минең ҡыҙым,— тип, үҙенең ҡыҙын күрһәткән. Ҡыҙының йөҙөнән нур балҡып торған, ти. Ә мин дә бик кәм булмағанмын бит. Шунан инәйемә әйткән:

— Эй ҡатын, минең баламды һин имеҙ. Һинең балаңды мин имеҙәйем. Былар имсәктәш булһындар. Былар бергә үҫһендәр. Бергә йөрөһөндәр. Мин ҡыҙымды һәр ваҡыт һинең ҡыҙың янына тәхет менән осороп алып килеп торормон. Мин — бәрей батшаһының ҡатыны,— тигән.

Инәйем ғәжәпкә ҡалған. Ҡурҡып та ҡуйған, ҡурҡмаған да был ҡатынды күреп,— ти ҡыҙ.— Хәҙер, ярай, былар вәғәҙәләшкәндәр. Инәйем хайран булып, был ҡатынға күп тәрбиәләр ҡылған. Былар икеһе лә беҙҙе һөйөп, беҙҙе имеҙешкәндәр берәм-берәм. Хәҙер күп тә үтмәгән, бәрей батшаһы, әйләнеп килеп, йәмәғәтен был баҡсанан алып киткән.

Мәликә һөйләй, Сәйфелмөлөк аҡылдан яҙып тыңлай.

Ә Мәликә әйтә Сәйфелмөлөккә:

— Күп һөйләштек, тиҙ бөтөрөргә тейешбеҙ, хәҙер дейеү ҡайта,— ти. Ярар, шулай ти ҙә Мәликә дауам итә:— Өс йәшебеҙ тулыуға, теге бәрей ҡатыны беҙгә ҡыҙын алып килгән. Инәйем әйткән ҡатынға:

— Мин ҡыҙыма «Мәликә» ҡуштым, ә һин ҡыҙыңа ни исемле ҡуштың, дуҫым?— тип һораған.

— Минең ҡыҙымдың исеме Бәҙиғолъямал,— тип әйткән теге ҡатын.

Хәҙер беҙ өс йәшебеҙҙә, теҙҙәребеҙҙе терәп, бер-беребеҙ менән ҡурсаҡлы уйнаған кеүек ултырғанбыҙ. Бәрей батшаһының ҡатыны ҡызын, бер тәүлек тотҡандан һуң, тағы алып ҡайтып киткән, мин яңғыҙ ҡалғанмын. Хәҙер теге баланы мин инәйемдән таптырам икән:

— Инәй, минең иптәшем ҡайҙа? — тип һорайым, ти.

Ә теге ҡатын әйтеп киткән. «Ике йылдан һуң алып килеп күрһәтермен» тип.

Хәҙер был ике йылды инәйем тәҡәтһеҙ көтөп торған. Мин дә онотмайым, ти. Хәҙер тағы инәһе ҡыҙын алып килде, ти. Шул ҡәҙәре матур, ти. Беҙ икәү тағы уйнайбыҙ, ти. Биш йәшкә еткәс, арыу ғына уйнағанбыҙ инде. Инәйҙәр өйҙә хайран ҡылалар, ти. Беҙгә ҡарап туймайҙар. Инде ҡыуанышалар, «ҡыҙҙарыбыҙ үҫә» тип. Шунан инәйемә әйтә, ти:

— Мин хәҙер тағы биш йылһыҙ килә алмам,— тип әйтә, ти.— Былар ун йәшкә еткәндә, быларҙы тағы ҡауыштырып, уйнатырбыҙ,— тип әйтә, ти.

Инәйем риза булып ҡала. Мин ғашиҡ булып, тәҡәтһеҙ көтәм, ти, дуҫымды.

Биш йыл үтеп тә китте, ти. Мин ун йәшкә еттем. Ә Бәҙиғолъямалдың инәһе дауыл менән, тәхет менән килеп төшөп, беҙҙе тағы уйнарға ҡуйҙылар. Өйҙә үҙҙәре хайран ҡалып, ҡунаҡтар менән тәғәм ейеп ултыралар. Ә беҙ тышта уйнайбыҙ. Хәҙер беҙ уйнаған ваҡытта, ни күҙең менән күрәһең, бер ҡаты өйөрмә сыҡты. Бәҙиғолъямал бәрей ҡыҙы булғас, теше батмаған, дейеү мине осороп алып китте. Инәйҙәр, аһ-вах килеп, ҡулдарын тотоп тороп ҡалдылар.

Дейеү мине ошо өйгә алып килеп, беркетеп ҡуйғанға бына ун бер йыл инде. Мин ун бер йәшемдә бында килеп төштөм. Хәҙер дейеү ҡулында дусар булып ятам. Ә үҙе шул ҡәҙәре мине тәрбиәләй — нәҫтә өсөн аҫыраған ын белмәйем. Дейеүҙең телен өйрәндем хәҙер. Һөйләй, ҡайтҡас, мине наҙлай, ашата-эсерә, кейендерә.

— Ниндәй тәғәмдәр кәрәк? — тип һорай.— Ниндәй кейемдәр кейәһең килә?— тип һорай.

Өс көн йөрөп ҡайтҡас, шулай итеп һорай ҙа, киткәндә тағы ла шунда элеп, сығып китә.

— Хәҙер дейеүҙең ҡайтырға ваҡыты етте,— ти Мәликә.— Йә, әҙәм заты, һин ғәйеп бул, юғиһә һине бер минут тотмаҫ,— ти.

Ә Сәйфелмөлөк әйтә:

— Туҡта, минең бер әйтәһе һүҙем бар. Һин саҡ ҡына тыңла,— ти.— Әҙәмдәрҙең йәнен ғазраил ала бит, дейеүҙәрҙең йәнен кем ала икән?— ти. Ҡыҙ:

— Улар бик ҡеүәтле. Уларҙың бит нисә башы бар!— ти.

Хәҙер ҡыҙ менән егет һәйбәтләп һөйләшәләр. Сәйфелмөлөк бишекте урынына элә. Элеккесә итеп бер ерен дә белгертмәй, әүәлгесә ҡуя. Ә икенсе бер алтын йоҙаҡты аҫтан тартып алып ишекте әүәлгесә бикләй. Аҫҡысын, кем белһен, хоҙа белһен, ҡая ҡуйғанын. Хәҙер Сәйфелмөлөк би-и-к йыраҡҡа китә.

Дейеү ҡайтып килә, мин һиңә әйтәйем, ер тетрәтеп, дауыл уйнатып, яман, әй! Дейеү ишекте аса. Бер ҙә йоҙаҡты абайламай. Хәҙер дейеү Мәликә янына үтә лә әйтә:

— Ах, бында бит әҙәм еҫе килә!— ти.

— Әй-й-й, — ти Мәликә,— һуң үҙең әҙәмдәр ашап ҡайтаһың да, шул ит тәнеңә һеңә бит, — ти.— Бында ниндәй әҙәм килһен инде Үҙең әйтәһең бит: «Бында ҡош та осмай, ҡол да йөрөмәй»,—

тип.— Мин бит һинең ҡулыңда уп бер йыл дусар булып ятам. Берәй әҙәм заты күргәпең бармы? Нәстә һөйләйһең һин?— ти.— Кит, һөйләмә!— ти Мәликә.

Хәҙер, ярар, Мәликәпе ашата, эсерә, кейендерә. Мәликә бының менән, үҙенең мораты булмаҫмы тип, бик ихлас һөйләшә. Дейеүгә әйтә:

— Эй-й, мине ҡараған иптәшем!— ти.— Һинән бер соаль * һорамаҡсы булам,— ти.

Дейеү әйтә:

— Бығаса һораманың, ни эшләп бөгөн һорайһың? — ти.

Был дейеү әҙерәк шикләнеп тә ҡуя. Мәликә ҡыҙ:

Әҙәмдәрҙең йәнен ғазраил ала,
Дейеүҙәрҙең йәнен, белмим, кем ала?—

тип, дейеүгә көй менән әйтеп күрһәтә. Дейеүҙең бик асыуы килә. Хатта муйын тамырҙары ҡабара.

— Ниндәй һорау был, ниндәй һорау был?— ти.— Быны ни ятҡап һорапың? — ти.

— Эй-й-й,— ти Мәликә,— үҙем һорайым инде,— ти.— «Беҙҙең йәндәрҙе ғазраил ала»,— тип атайым, инәйем әйтә торғайны. Уп йәштә булғас, аңлайым бит инде. Уҡыным да. Әле һинең янында торғас, нисек икәнен беләһем килә,— ти.

— Һи-и-и-и,— ти, дейеү әйтә,— минең йәнемә бер кемдең дә көсө етмәй!

Сөләймән үлде, дейеүҙәр ҡотолдо,
Уның алдында күп Ғоссә* йотолдо.
Сөләймән үлгәс, иркенлек тыуҙы.
Уның йөҙөгө, беҙҙе күп ҡырҙы,—

ти. Соләймәндән һуң, беҙ иркенләп киттек. Беҙҙең йәнде бер кеше лә алалмай хәҙер,— ти.— Минең йәнем — опо йорттоң ҡырындағы диңгеҙ төбөндә, ҡыҙыл һандыҡ эсендә бер күгәрсен,— ти.— Һандыҡ тегермән ташы менән баҫтырып ҡуйылған. Ә мин үҙем — дейеүҙәрҙең батшаһы,— ти.— Миңә бер кемдең дә көсө етмәй,— ти.

Ул һандыҡты кем тапһын,
Ул күгәрсенде кем салһын?!

Мәликә ҡыҙ бик бойоға. Шатлыҡтары эсенә һыймағайны, ҡайғылары хәҙер башына сыҡты.

— Ярар, улай икән,— ти.—Һорайым инде соаль итеп. Рәхмәт һөйләүеңә,— ти.

Дейеү тағы ла эшенә китә, өс көнгә.

Хәҙер, ярар, сығып китә был, бишекте беркетеп. Сәйфелмөлөк йөрөп килеп, тағы Мәликә янына инә.

— И-и-и!— Мәликә әйтә,— һорапым,— ти.— Ҡайҙа миңә бынан ҡотолорға! Минең башым ошонда серей инде,— ти.— Мин һиңә хәҙер һөйләнем инде хәл-әхүәлде. Һин Бәҙиғолъямалды табырһың, ти. Минең әхирәтем ул, ти. Минең атайыма барып юлыҡ-

һаң, һин Бәҙиғолъямалды табырһың. Минең атайыма ғына юлык, һин йөрө, һин эҙлә. Ә мин дейеү ҡулынан ҡотола алмам,— ти.

Хәҙер былар ултырып илашалар. Илашалар ҙа Сәйфелмөлөк Мәликәгә әйтә:

— Туҡта әле, дуҫым, мин һиңә бер яҡшы һүҙ әйтәйем әле.

Сөләймән йөҙөгө миндә хәҙер ирүр,
Ғинайәт* ҡилғусы бер ҡадир* ирүр.

Сөләймән батшаның йөҙөгө минең бармағымда бит,— ти.— Һис ҡайғырма, мин һине дейеүҙән ҡотҡарам. Иллә һин минең хәжәтемде үтәрһең ҡайтҡас,—ти.— Ҡайталһаҡ,— ти.— Мин һине дейеүҙән алып китәм,— ти.

Мәликәнең иҫе китә:

— Ай-һай, икебеҙ ҙә дусар булабыҙ дейеүгә, беҙ юғалабыҙ хәҙер дейеү ҡулында,— ти.— Һин юҡ уйҙарҙы уйлама. Минең әйткән һүҙҙәремдә тотоп, минең атайыма кит,— ти.

— Юҡ, һине бында ҡалдырмайым,— ти Сәйфелмөлөк.

Хәҙер торғоҙа Мәликәне, алып сыға тышҡа. Алтын-көмөшөн байтаҡ ҡына тултыралар былар дейеүҙең. Ашамлыҡтар ҙа күп алалар. Былар өй ҡырындағы диңгеҙ ярына баралар. Сәйфелмөлөк бармағындағы йөҙөктө һалып, тиҙ генә һыуға тыҡҡайны, ғобор-ғобор тегермән ташы төшөп ҡалып, һандыҡ килеп тә сыҡты өҫкә. Ҡыҙыл һандыҡ йоҙаҡлы. Йоҙаҡты бәреп ватты. Тиҙ генә күгәрсенде, ҡулын тығып, тотоп алып, кеҫәһендәге бәкеһе менән күгәрсенде салып та ебәрҙе, күктән ҡандар яуа ла башланы! Дейеү ҡайтып килеп етә икән, йәне ҡуҙғалғас. Өйөнән йыраҡ та түгел, дейеү доп итеп йығылып төштө күктән. Былар кәмәгә ултырып, һыу менән киттеләр. Шунда яр буйында дейеүҙең кәмәһе лә булған инде. Киттеләр-киттеләр, күп шөкөрҙәр иттеләр, күп мөнәжәттәр уҡыны Сәйфелмөлөк. Киттеләр былар, дейеүҙең йорто ҡалды. Дейеү йығылып, үлеп ҡалды.

Хәҙер Сәйфелмөлөк, бик арыған булғас, бик ҡурҡыуҙан ҡотолған булғас, йоҡоға китте кәмә эсендә. Мәликә һаман ултырып килә. Ҡараһа, ни күҙе менән күрһен, һыуҙан бер нәмә килә. Ауыҙы бының ой кереп китерлек йәнлек. Ебәрә, әй, һыуҙы сәсеп, әллә ҡайҙан һыу кәмәгә килеп бәрелә. Тулҡын бәрелә.

Ҡотолдоҡ дейеүҙән — был ни бәләләр?
Уянды йәнә ул шаһ баһадир.

Мәликә әйтә:

— Әй ярарым, тор әле. Бына бер йәнлек килә, беҙҙе хәҙер кәмәбеҙ менән йота бит!— ти.

Тәбер тешене алып үрә торҙо,
Ҡылыс менән уның башына орҙо.
Киҫелде башы, шидрин топкә төштө,
Уның тәлбиде мәгәр күккә осто.

Йәғни башы һыу төбөнә китте, йәне һауаға осто ул йәнлектең.

Ҡотолдолар былар, киттеләр. Баралар, китеп баралар, күү-ү-п ерҙәр баралар былар. Быларҙың ашамлыҡтары янарында

етерлек, алтын-көмөш тә күп яндарында. Хәҙер былар бара торғас, кү-үп караптар килгәнен күрҙеләр йыраҡтан. Һыу менән кү-ү-н пароходтар килә. Сәйфелмөлөк:

— Ни эшләйбеҙ? — ти. Күп мөнәжәттәр әйтте, тегеләр килеп етмәҫтән борон. Былар кәмәләрен һыу ситенәрәк табан сығарып, тегеләрҙе көтәләр хәҙер. Ергә төштөләр. Ергә төшөп, диңгеҙ ҡырында караптарҙы көтөп торалар.

Килеп еттеләр былар. Былар барыһы ла — әҙәмдәр, әҙәм заттары. Хәҙер һөйләштеләр, һораштылар. Мәликәнең аталарын һорайҙар, шулай-шулай. Былар арттағы кәмәләр килеп еткәнен өндәшмәй генә көтәләр. Килеп етһәләр — Мәликәнең ауылынан килгән кешеләр. Эй-й-й-й-й, былар, һыуҙан сығып, Мәликәне ҡосаҡлап, илашып-илашып:

— Беҙ бик күп килдек һыу менән, — тиҙәр. — Һеҙ әкренләп беҙҙең арттан ҡайтығыҙ, беҙ Мәликәнең атаһынан һөйөнсөгә алдан китәбеҙ.

Хәҙер былар арттан баралар, тегеләр алдан батшаға китәләр. Был батшаның исеме Тажылмөлөк була. Хәҙер былар ҡайталар, әйтәләр. Батша менән ҡатыны быны ишеткәстән, югерә-югерә барып әүмәләнеп-әүмәләнеп тәгәрәп, һушһыҙ булалар. Һыу һибеп һуштарына килтерәләр.

Арттан кәмәләр ҡайта. Хәҙер Мәликә менән Сәйфелмөлөк тә килеп етә. Кәмәнән сығалар. Эй-й-й, Мәликәнең йөҙө ҡояш кеүек. Ул Сәйфелмөлөк шул ҡәҙәре матур! Батшаның бөтә халҡы хайран булып, һушһыҙ булып, быларҙы ҡаршылай. Хәҙер батшаға килеп, Сәйфелмөлөк Мәликәне атаһына тапшыра. Мәликә һөйләй барыһын да. Йыйын йыя батша. Сәйфелмөлөк үҙ хәлен һөйләй. Мәликә, һөйләп бөткәндән һуң, шуны әйтә:

Тәкәббер ҡылмағыҙлар —
Һөттән аҡмын.
Тассаувр ҡылмағыҙлар —
Һыуҙан пакмын,—

ти. Ун бер йыл дейеү ҡырында торһам да, мин һөттән аҡ, һыуҙан пак, ҡыҙ хөкөмөндәмен һаман.

Үҙ-үҙем — үҙемдә,
Үҙ фекерем — үҙемдә,—

ти. Шул ҡәҙәре дейеү мине яҡланы, — ти.

Халыҡтар ике көн, өс көн тыңлайҙар быларҙы. Сәйфелмөлөк тә үҙ хәлен һөйләй быларға. Сәғитте, бүтән иптәштәрен һөйләп илай быларға.

Хәҙер, ярар, батша быға тәхетен бирә. Сәйфелмөлөк тәхеткә менеп ултыра.

Хәҙер Мәликә инәһенә әйтә:

— Инәй, Бәҙиғолъямал әхирәтем киләме? — ти.

— Килә, балам, йыл һайын килеп, хәлеңде һорашып, бер-ике тәүлек тороп китә. Инәһе лә килә, — ти.

Эй-й-й, Сәйфелмәләктәң иҫе китте, һушы бөттө хәҙер. Мәликә әйтә:

— Килер көнө етәме, инәй? — ти.

— Етә, балам, вәғәҙә көнө күп ҡалманы,— ти.— Һине килеп тикшереп, «Берәй ерҙән хәбәр юҡмы?» — тип һорап тора. Уның атаһы — батша, шул ҡәҙәре бәрейҙәрҙән эҙләтеп ҡарай, ти, юҡ, бер ерҙән дә һинең еҫеңде һиҙмәйҙәр, тапмайҙар, ти.

Хәҙер, ярар, Бәҙиғолъямалдың килер көнө етте. Туҙан-тупраҡ менән осоп, тәхет менән Бәҙиғолъямал килеп төштө. Мәликә күренмәй тора. Инәһе быны ҡаршы ала. Һәйбәтләп тәрбиәләй. Бәҙиғолъямалдың инәһе әйтә:

— Берәй тәүлек торһон ҡыҙым,— ти — Һинең күңелеңде әүрәтһен, минең ҡыҙым менән һинең ҡайғыларың баҫылһын,— тип ҡалдырып китә. —Ҡыҙым, бына шул көн килеп еткәс, килеп алырмын,— тип, ҡыҙына вәғәҙә ҡуйып китә. Бәҙиғолъямал Мәликәнең инәһе янында ултырып ҡала. Инде илашалар, инде һөйләшәләр. Бәҙиғолъямалға Мәликә күренергә ҡурҡа, һушһыҙ булыр ҙа, бер-бер хәл булыр тип.

— Мәликәнең хәбәре бар бит әле,— ти инәһе әйтә,—бер яҡтан ишетеп торабыҙ,— ти.— Бәлки, ҡайтмаҫмы...— ти. Бәҙиғолъямал әйтә:

— Ниндәй хәбәр ул?— ти.

— Һөйләмәй торам әле. Әҙерәк хәл йый, әҙерәк аҡыл ал,— ти.

Хәҙер былар йоҡларға яталар. Мәликә әкрен генә Бәҙиғолъямал янына кереп, ҡуйынына инеп ҡосаҡлап, Бәҙиғолъямалды уята төндә. Көндөҙ күҙе менән күрһә, бәлки, һушынан яҙыр, тип ҡурҡа. Бәҙиғолъямал һиҫкәнеп уянып китә, һикереп тороп китә.

— Был ниндәй хәл? Минең яныма кем килде?— тип ҡысҡырып ебәрә. Мәликә әйтә:

— Эй, дуҫым, мин ҡайттым. Хафаланма, мин, Мәликәң!— ти.

Эй-й-й-й, төндә ҡараңғыла былар һушһыҙ тәгәрәп, һарайҙың иҙәнен бер итеп әйләнәләр. Ҡосаҡлашалар, көлөшәләр, зыҡ ҡубалар.

— Ниндәй хәлдәр менән ҡайтҡаныңды ҡасан һөйләйһең?— ти Бәҙиғолъямал. Мәликә әйтә:

— Ашыҡма!— ти.— Саҡ ҡына рәтләнәйек, бер-беребеҙҙе көндөҙ күрәйек. Мин һиңә нисек ҡайтҡанымды берәм-берәм һөйләрмен. Һин тыңлап ҡына торорһоң,— ти.— Тик һин минең һөйләгән һүҙемде ҡабул итерһеңме? — ти. Бәҙиғолъямал әйтә:

— Ҡабул итерҙәй булһа, итермен; итмәҫтәй булһа, мин әле алдан вәғәҙә ҡуймайым,— ти.

Ярар, таң ата. Былар хәҙер көндөҙ күрешәләр. Былар тағы һушһыҙ булып тәгәрәйҙәр. Мәликәнең инәһе күп итеп аштар әҙерләй. Сәйфелмәләк — тәхеттә. Уға әкрен генә хәбәр бирәләр. Бәҙиғолъямалдың килеүен әйтәләр. Ул сабыр ҡыла.

Ашағап-эскәндән һуң, Бәҙиғолъямал әйтә:

— Миңә бөтә хәлеңде аңлат хәҙер. Нисек ҡайттың, нисек төштоң дейеүгә — барыһын да һөйлә, мин тыңлайым,— ти.

Хәҙер былар бер аулаҡ бүлмәгә инеп ултыралар. Мәликә әйтә:

— Әй, дуҫым, минең хәлемде, минең түҙемде мәғбут * күрһәң, мин һинең өсөн йәнем фида, һөйләйем,— ти. Бәҙиғолъямал әйтә:

— Минең дә йәнем фида. Мин һине күрмәгәнгә нисә йыл бит хәҙер. Һағынҙым, әрнейем, илайым, төштәремдә һине күрәм, ҡауышам,— ти.— Әллә, бәлки, ҡауышырмын, тип ҙур өмөттә булдым,— ти. Мәликә һөйләй:

— Бына шулай,— ти,— дейеү ҡулында ун беренсе йылға сыҡтым. Дейеү мине шул ҡәҙәре тәрбиәләне. Шәлемдән, күлдәктән башҡа тәнемә ҡулын тейҙермәне, ҡулымдан бына ошо еңемдән башҡа тотманы. Шул ҡәҙәре мине наҙлап тәрбиәләне. Миңә ҡарап көлөргә лә ояла ине. Берҙән-бер көндө ята инем, бер әҙәм заты килеп керҙе. Килеп керҙе лә минең әлеп ҡуйған тәхет бишегемде шартлатып өҙөп алып, тышҡа алып сыҡты. Минең йөрәк ҡупты. «Әй!— тимен,— миңә дейеү зыян килтермәгәйне, миңә зыян килер көн ошо икән!»— тим.

Сығарып ҡуйҙы, миңә тауыш бирҙе. Мин гәжәпкә ҡалдым: минең һүҙемсә—бының һүҙе! Әйе, шау минең телемсә!

Аптыраным. Пәрҙәмде асып ебәрһәм, бер хуп егет янымда баҫып тора. Һушым, ғаҡылым китеп, күп заман һушһыҙ булып торҙом. Ул миңә һаман бағып торҙо. Мине һәйбәтләп тәрбиәләп ятҡан еремдән торғоҙоп ултыртты ла:

— Ҡурҡма, мин әҙәм заты,— тине.— Һис ҡурҡма. Хәл-әхүәлдәрҙе һорашайыҡ, бәлешәйек,— тип әйтте.

Мин аҡылымды йыя алмайым, ни өсөн йыя алмайым? Ун бер йыл буйына мин бит әҙәм заты күрмәгән, аҡылым башыма килмәй, бер аҙ ултырҙым. Хәҙер мин әйттем:

— Һин әхүәлеңде иң тәү һөйлә, унан мин һөйләйем,— тинем.

Ул тыуғандан алып минең янға килгәнсе бөтә күргәндәрен һөйләне. Мин тыңланым. Шунан мин һөйләнем: нисек-нисек мин тыуғанмын, нисек-нисек һинең менән имсәктәш булғанбыҙ. Нисек шул баҡсала бергә йөрөгәнбеҙ. Ун йәштәребеҙгә хәтлем дуҫ булып йөрөгәнбеҙ, уйнағанбыҙ, көлгәнбеҙ. Нисек һин торон ҡалып, мине дейеү осороп алып киткәнен — барыһын да һөйләнем. Фәҡәт һинең исемеңде һораны ул, һүҙҙе бүлдереп. Мин әйттем. Ул һушһыҙ булып тәгәрәне. Мин торам ҡурҡып, дейеү ҡайтыр тип. Бер аҙ ятҡандан һуң, мин уға йомшаҡ ҡулдарым менән нисек тә булһа хәл кертергә тырыштым, ултырттым. Ултырҙы. Бер аҙ ултырҙы ла, унан һушына килгәс, һикереп баҫты. Шул егет мине алып ҡайтып, атайыма тапшырҙы. Уның исеме Сәйфелмолок, Рәбиғелмолок батшаның улы. Минең атайым, мине алып ҡайтҡан өсөн, уға тәхетен бирҙе, әле ул тәхеттә ултыра. — Әгәр ҙә мөмкин булһа, әхирәтем-дуҫым, һин уны күрер инең,— ти Мәликә.

— Юҡ, мин ни эшләп әҙәм затын күрәйем? Мин — бәрей ҡыҙы бит,— тип Бәҙиғолъямал әйтә.— Мин күрмәйем уны, миңә уны һөйләмә. Миңә ул егетте һөйләмә, үҙеңдең ни хәтлегеңде һөйлә! Миңә ул егеттең төшөн дә аңғартма. Мин уны күреп, тегеләй-бы-

лай булһам, миңә ауыл ҡыҙҙары: «Те-фф-е-ү!» — тип көләрҙәр. Юҡ, уны һөйләмә, — ти.

Хәҙер был бер ҙә яҡын килмәй. Һөйләтмәй Сәйфелмөлөктө. Тик үҙе турында, Мәликәнең нисек йөрөүе турында һөйләргә ҡуша. Хәҙер Мәликәнең инәһе бик ҡайғыра:

— Ай-һай, ни эшләйбеҙ хәҙер? Ул яҡын килмәһә, күрмәһә, ул егет ни эшләр инде? — ти. Хәҙер Мәликәнең инәһе Бәҙиғолъямалды өгөтләй:

— Эй, ҡыҙым, — ти, — минең ҡыҙыма юлдаш булып ҡайтҡан егетте һин бер генә күр әле күҙең менән. Уға бөтә ауыл халҡы зар-моң ғашиҡ, ти.

— Ниңә күрәйем мин уны? Һөйләмәгеҙ миңә уны, әҙәм затын! — ти.

Бәрейҙәргә бәшәр * лайыҡ буламы,
Осар ҡошҡа кеше ғашиҡ буламы, —

ти. Мин бит бәрей, мин — осар ҡош. Ә ул — әҙәми зат. Беҙ уттан яратылған, улар — тупраҡтан. Һөйләмәгеҙ миңә ул кешене, — ти.

Мәликә менән инәһе бик ҡайғыға ҡала. Хәҙер Бәҙиғолъямалға һүҙ ҡушырға былар бик ҡурҡалар. Ярар, хәҙер өс көн үтте. Инәһенең килер вәғәҙәһе лә етеп килә Бәҙиғолъямалдың.

Мәликә би-и-и-ик илай, бик илай. Бының күҙ йәшен күреп, Бәҙиғолъямалдың эсе көйә. Ни өсөн көйә? Теге егеткә күренмәгән өсөн Мәликәнең илағанын һиҙә. Бер көндө былар бер хилүәттә * ҡуналар Мәликә менән. Бәҙиғолъямал әйтә: «Туҡта әле, — ти, — был йоҡланы, инәһе йоҡланы, халыҡтар йоҡланы. Батша булған булһа, ул егет, бәлки, йоҡламағандыр. Мин уны сығып күҙәтәйем әле», — ти. Бәҙиғолъямалдың күңеленә ошо уй төшә. Хәҙер был әкрен генә тора, тышҡа сыға. Сәйфелмөлөк күп ярандар йыйып, кәңәш үткәргән ваҡыты була тәхетендә. Халыҡтары тарала, Сәйфелмөлөк ҡала, тәхетендә ултыра, йоҡламай. Йоҡлар ине, уның йөрәгендә ут. Кү-ү-ү-п назымдар уҡып ултыра Сәйфелмөлөк тәхетендә. Бәҙиғолъямал сыға ла әкрен генә бының ултырған тәхетенең пәрҙәһенән ҡарай. Күрә быны. Был бик матур, матур булһа ла, быны һаман оҡшатмай.

— Был бит әҙәм, быны ҡарап, мин бит бәрей, — ти. — Был ниндәй уй уйлаған, был ниндәй әҙәм? — ти. Шулай тип уйлап торғанда, бының күңелендә әҙерәк ғишыҡ әҫәре тыуа. Хәҙер был китмәй, һарай янында ултыра. «Туҡта, бәлки, был тышҡа сыҡмаҫмы? — ти. — Быңарҙан бер мәсьәлә, соаль алышып ҡарармын», — ти. Хәҙер был ишек төбөндә ултыра. Сәйфелмөлөк, күп мөнәжәттәр уҡығандан һуң, тышҡа сыға. Сыҡһа, өй ҡырында бер әҙәм. Хәҙер Сәйфелмөлөк:

— Был кем? Ни эшләйһең бында? Ни эш менән килдең? Нәҫтәң бар бында? — ти.

Батша булғас, тикшерергә кәрәк бит инде. Өндәшмәгәс, барып ҡулын һуҙғайны, был ут булып сәселде. Сәйфелмөлөк ғәжәпкә ҡалды! Был ниндәй хәл! Тора, тора баҫып һаман. Ут, бер аҙ торғас, тағы әҙәмгә әүерелде.

Сәйфелмөлөк әкрен генә, йыраҡтан ғына, ипләп кенә хәл-әхүәлде һорай. Шунан Бәҙиғолъямал:

— Һин, әҙәм заты, һин ниндәй уйҙа? — ти.— Һин ниндәй хәлгә дусар булдың, нәҫтә уйланың һин? Беҙ бит бәрей, ә һин — әҙәм заты! Ни эшләп һин былай мине юллап йөрөйһөң! Мин һиңә тиң түгел, ҡул түгел. Һин был уйҙан ҡайт. Һинең үҙ фекерең үҙеңдә булһын — минең үҙ фекерем үҙемдә булһын. Һин миңә теймә, миңә ҡағылма,— ти.

Хәҙер Сәйфелмөлөктөң һүҙҙәре бының йөрәгенә кереп урынлаша. Бәҙиғолъямал Сәйфелмөлөккә яҡын килә. Былар күрешәләр, ҡул тотошоп. Ҡыҙ әйтә:

— Ярай, күрештек, мин Мәликә янына керәм. Һин үҙ тәхетеңә мен, айырылышайыҡ әлегә,— ти. Бәҙиғолъямал инеп, Мәликәнең янына ята.

Сәйфелмөлөк ул төндө, ҡайҙа йоҡо, йоҡламай. Таң аттыра алмай. Хәҙер Мәликә уянып китә.

— У-у-ф-ф!—ти. Ни өсөн уф, ти? Бәҙиғолъямал Сәйфелмөлөктө күрмәгәнгә ҡайғыра.

Хәҙер Бәҙиғолъямал, Мәликә янына инеп ятҡас, бер ҙә йоҡламай. Йоҡлай алмай: бының күңелендә бик оло ҡайғы урынлашты. Бик ҡыйынлыҡҡа төштө был. «Эй-й-й-й, ниндәй хәл был! Инәйем килһә, ни йөҙөм менән күренермен, ни тип әйтермен»,— ти. Хәҙер былар — Мәликә лә уяна, Мәликәнең инәһе лә уяна. Аш кертә былар янына. Мәликә әйтә:

— Минең йоҡом йоҡо түгел инде, дуҫым. Минең бит әйткән һүҙемде һин тыңламайһың,— ти.— Минең йөрәктә ут бит минең,— ти.— Ни эшләп һин бер аҙ вәғәҙә ҡуйып, бер аҙ күренмәйһең минең апҡайтҡан юлдашыма? Күренеп кенә ҡара һин, — ти.

Бәҙиғолъямал артҡа ғына ҡарап ултыра, төнгө хәлдәрен Мәликәгә белгертмәй. Хәҙер ашайҙар, эсәләр. Бәҙиғолъямал иҙәнгә төшөп баҫа ла:

— Эй, дуҫым, алып ҡайтҡан дуҫыңды килтер әле, булмаһа, күреп ҡалайым,— ти.

Мәликә һушһыҙ була, тәгәрәп китә был һүҙҙе ишетеп. Мәликәнең инәһенең ҡулындағы сынаяғы төшөп китә. Былар икеһе лә һушһыҙ булып, был һүҙгә би-и-к шатланалар! Хәҙер былар бер аҙҙан хәл йыйып, Мәликә хәбәр ебәрә Сәйфелмөлөккә. Бәҙиғолъямал һәйбәтләнеп биҙәнә, кейенә. Тәндәрен, баштарын, күлдәктәрен һыныrғылап әҙерләнә. Хәҙер Сәйфелмөлөк килеп керә. Өйҙөң эсе нур кеүек яҡтыра, мин һиңә әйтәйем. Бәҙиғолъямал быға ҡарап ғашиҡ була. Яңынан ғишҡы арта. Былар күрешәләр. Мәликә тағы ла һушы китеп тәгәрәй, был хәлде күреп. Былар хәҙер табын әҙерләп, Мәликәнең инәһе, быларҙың өсөһөн бер өҫтәлгә ултыртып, тәғәмлектәр килтерә. Былар ашайҙар-эсәләр. Сәйфелмөлөк Бәҙиғолъямалдан күҙен алмай, Бәҙиғолъямал Сәйфелмөлөктән күҙен алмай. Бәҙиғолъямал әйтә:

— Ярар, минең күңелем һиңә беркетелде. Һин Мәликәне ҡайтарған хаҡҡа мин һиңә ғашиҡ булдым,— ти.— Мин һинең менән

булам, ҡайғырма,— ти. Сәйфелмөлөктөң барып арҡаһынан һыпыра.— Бар, эшеңә тотон, сыҡ,— ти.

Сәйфелмөлөк сығып китә. Белмәйем, ҡайҙа баҫып баралыр, ҡайҙа баҫып барғанын белмәй. Барып эшенә тотона. Бәҙиғолъямал Мәликә менән тороп ҡала.

Хәҙер Бәҙиғолъямалдың инәһенең алырға килер көнө етте. Бәҙиғолъямал әйтә:

— Инәйемә ни йөҙ менән был һүҙҙе әйтәйем, ни йөҙ менән күренәйем инде?— ти.— Инәйемдән оло атайымдың әсәһе бар унда. Шәһәрбануу,— ти.— Уға инәйем нисек һүҙ тишер, ни йөҙ менән күренербеҙ ҡайтҡас,— ти. Мәликә әйтә:

— Хафаланма. Һис бер һинең һүҙеңдән улар сыҡмаҫтар,— ти.

Хәҙер дауыл-тәхет менән Бәҙиғолъямалдың инәһе килеп төшә. Бәҙиғолъямалды ауыр бер хәлдә күрә был.

— Йә, ҡыҙым, әллә ауырыу тейҙеме һиңә? Бүтәнсәләнгәнһең,— ти.

— Юҡ, инәй, бер ауырыу ҙа теймәне. Мәликәне күргән нейемдән күп уйҙар уйлап, күп ҡыуаныстарҙан ошолай булдым,— ти.

Ярар, хәҙер аш килтерә Мәликәнең инәһе. Ашайҙар-эсәләр. Бәҙиғолъямал, нисек һүҙ тишергә, ғәжәпкә ҡала. Ҡайтып китәһе килмәй иленә. Сәйфелмөлөк янынан китәһе килмәй.

— Әй, инәй, һин килгәс тә минең хәлемде белдең,— ти.— Мин бер хәлгә уғраштым * бит,— ти.

— Әй, бәпкәйем, ниндәй хәл ул?

— Бына, инәйем, Мәликәне килтергән юлдашы, — ти, — миңә ун алты йәшемдән минең һүрәтемде күреп ғашиҡ булған, ти. Ул мине эҙләп, к-ү-ү-ү-п кешеләрҙең башын харап иткән, ти, күп кәмәләр менән. Бер батшаның улы булған. Күп ҡыйынлыҡтарға осраған. Күп шәһәрҙәр кискән, мине эҙләгән, һораған, минең исемемде бер ерҙән дә ишетмәгән. Күп йөрөй торғас, дейеү алып киткән Мәликәнең һарайына барып юлыҡҡан. Һарайға кереп, Мәликәне тапҡан. Мәликә минең хәлемде уға һөйләгән. Ул, шул хәҙәре уҫал дейеүҙең башына етеп, Мәликәне дейеүҙән ҡотҡарып, атаһына килтереп тапшырған. Атаһы уға тәхетен биргән, бөгөнгө көндә ул егет тәхеттә, инәй,— ти.— Мин уға ғашиҡ булдым, минең һис сарам юҡ. Минең менән шул Сәйфелмөлөк тигән егетте алып ҡайтһаң ғына ҡайтам, юғиһә мин уның янынан китмәйем,— ти. Инәһе хайранға ҡала. Ҡапҡан тәғәмен йотмай.

— Әй, балам, ниндәй уйҙарға баттың, ниндәй хәлдәргә мине төшөрҙөң?— ти.— Беҙ оләсәйеңә нисек күренербеҙ? Нисек атайыңа был һүҙҙе тишербеҙ? Йә, ни эшләйбеҙ хәҙер?— ти.

— Инәй, ҡайғырма. Бында бер хикмәт бар. Беҙ бер ваҡытта ла юғалмабыҙ. Әйҙә, Сәйфелмөлөктө ҡалдырмайыҡ. Иң тәүҙә ҡартинәйгә күрһәтәйек. Ул күргән көйгә һушы китер. Унан ҡартинәй әкрен генә атайыма һөйләр,— ти.— Шулай итеп, беҙҙең эш койләнер, инәй, ҡайғырма,— ти.

Былар, Сәйфелмөлөктө алып, хәҙер осалар Ирәм баҡсаһына. Ҡайтып төшәләр Ирәмбаҡ шәһәренә. Батша тәхеттә була, Бәҙиғолъямалдың атаһы. Быларҙың баҡсалары бик ҙур. Коштар һайрап,

алмалар-емештәр бешеп ултырған була. Инәһе әйтә Бәҙиғолъямалға барып:

— Әй, балам, был кешене ошонда ғына ҡуйып торайыҡ. Кинәттән алып кермәйек,— ти.— Ҡартинәйең дә күрһә был кеше менән ҡайтып кергәнебеҙҙе, бер ҙә күңеленә һыйҙырмаç. Әкренләп кенә ҡартинәйеңә иң тәү һөйләрбеҙ. Унан атайыңа ул әйтер,— ти.— Был әлегә бында ҡалып торһон, баҡсала,— ти.

Сәйфелмөлөктө баҡсаға ҡуйып, Бәҙиғолъямал менән инәһе Шәһәрбаныу ҡарсыҡ янына керәләр. Икәүләп теге әбейгә аңлаталар. Әбей:

— Бик хуш,— ти.— Ваҡыт еткәс, алма бер өҙөлөп төшә ул, ваҡыт еткәндер балаға,— ти.— Һис ҡайғырма. Мин барып, әкренләп улыма аңлатайым,— тип, ҡарсыҡ Шаһбал батшаның тәхетенә китә.

Ә былар Сәйфелмөлөктөң янына тип сыҡһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр — Сәйфелмөлөк юҡ. Тегеләй ҙә югерәләр, былай ҙа югерәләр, баҡсаны бер итеп йөҙәләр, Сәйфелмөлөк юҡ баҡсала. Бәҙиғолъямал һушһыҙ булып тәгәрәй.

Шәһәрбаныу әбей Шаһбал батшаға был һүҙҙәрҙе һөйләй. Шаһбал батша тыңлай. Бик күңеленә хуш килә, инәһе һөйләгәс. «Ярар, алып ҡайтҡан кешеһен күреп ҡарайыҡ әле»,— ти Шаһбал батша, тәхетенән төшә. Шәһәрбаныу әбей менән былар баҡсаға киләләр. Баҡсаға килһәләр, Бәҙиғолъямал һушһыҙ тәгәрәп ята, инәһе янында ултыра.

— Был ни хәл?— ти Шаһбал батша.

— Бына шулай,— ти.— Алып килгән кешебеҙҙе кинәттән күрһәтмәйек, бәлкем, ҡурҡыу булыр, бәлкем, асыуың килер, тип ҡалдырып кергәйнек бына шунда. Инде сыҡһаҡ — юҡ ул әҙәм!— ти.— Ул Мәликәне алып ҡайтҡан, дейеүҙән ҡотҡарған. Тәхетен биргән Мәликәнең атаһы. Әле тәхеттән ҡуптарып алып, һиңә күрһәтергә алып ҡайтҡайныҡ. Ни эшләйбеҙ? Беҙҙең ҡыҙ ғашиҡ уға. Беҙҙең ҡыҙыбыҙҙы эҙләп, ун йыл йөрөгән,— ти. Шаһбал батша әйтә:

— Ах һеҙ! Ах һеҙ!— ти.— Ни эшләп ундай кешене бында ҡуйып керҙегеҙ? Ул бит дейеүҙәрҙе харап итеп алып ҡайтҡан, уны бөгөнгө көндә эҙләйҙәр, был әҙәмде,— ти.— Мин уларҙың эҙләгәнен һиҙҙем, ә һеҙ уны ҡалдырып кергәнһегеҙ. Уны дейеүҙәр алып киткән. Уны хәҙер тапмайбыҙ, йә, ни эшләйбеҙ хәҙер?— ти. Шаһбал батша баçып торған еренән хайран була.

Хәҙер күп халыҡтарҙы янына саҡыртып йыя. Сәйфелмөлөктө эҙләргә күп ерҙәргә бәрейҙәр сығара. Былар эҙләйҙәр-эҙләйҙәр — бер ерҙән дә бер нәçтә еç һиҙмәйҙәр.

Ә бер бәрей бер дейеүҙе күрә. Бер ағас төбөндә бер дейеү ята ауырып. Шуның янына килә Шаһбал батшаның илсеһе:

— Һин кем?— ти.

— Мин дейеү,— ти.

— Ни эшләп ятаһың?

— Бына беҙҙе Әсүәт батша сығарып ебәрҙе. Әсүәт батшаның бер вәзирен бер әҙәм заты үлтереп, Мәликә ҡыҙҙы алып ҡасҡан.

Шул кешене эҙләйбеҙ. Ул кешенең тиреһен таҫма-таҫма телергә беҙгә хәнйәр бирҙе. Бүтәндәр эҙләй, минең эсем ауыртып, был ағас төбөнә төшөп ултырҙым,— ти.— Быпа шул хәбәр минән һиңә,— ти.

Был хәбәрҙе ишеткәс, Шаһбал батшаға теге бәрей ҡайтып әйтә, һөйләй. Сәйфелмөлөктө Әсүәт батшаның оло вәзире килеп таба баҡсанан.

Беҙҙең Әсүәтте үлтергән быға оҡшаш,
Мәликә ҡыҙҙы килтергән быға оҡшаш,—

тип, Сәйфелмөлөктө күтәреп алып китә, батшаһына илтеп бирә.

Сәйфелмөлөктө, бер һандыҡҡа тын сығарлыҡ ҡына урын ҡуйып, һыу кермәҫлек кенә итеп, дарья төбөнә һалалар. Өҫтөнән таш менән баҫтырып ҡуялар.

Сәйфелмөлөк тотҡонға төштө хәҙер. Батша хәҙер: «Быны, ҡырҡ көн һыу төбөндә торһон, зәғфран булһын, унан алып сығып салырбыҙ»,— тип вәғәҙә ҡуя.

Шаһбал батша был хәбәрҙе ишеткәс, бөтә шәһәр халҡын йыя, һуғышҡа барырға был дейеүгә, һуғыш асырға. Теге ауырыу дейеүҙе нисек тә тергеҙеп, рәтләп, батшаһына хәбәр ебәрә. Дейеү ҡайтҡас әйтә:

— Беҙгә яу килә хәҙер,— ти.—Алып ҡайтҡан кешебеҙҙе алырға,— ти.

Батша әҙерләнә, дейеү батшаһы. Ҡү-ү-ү-п халыҡтар, бәрей халыҡтары, быларға ҡаршы торалар. Былар һуғышалар, ҡан дарьялары аға. Дарьялар ҡыҙыл ҡан була. Шул ҡәҙәре һуғышалар, был яҡтан да ҡырыла, теге яҡтан да ҡырыла. Батша ғәжәпкә ҡала. Хәҙер Шаһбал батша үҙе шунда була.

— Бирегеҙ кешебеҙҙе!— тип ҡарай. Юҡ, өндәшмәй теге батша. Шунан Шаһбал батша әйтә:

— Тотоп килтерегеҙ дейеү батшаһын! Хәҙер тиреһен таҫма-таҫма телеп әйттерәм!— ти.

Хәҙер быпың бәрейҙәре барып, емереп, шәһәренә инәләр, тәхетенә етәләр. Дейеү батшаһын оҫторәп төшөрөп, Шаһбал батшаның ҡаршыһына килтерәләр. Теге дейеү батшаһы былай ти:

Сығарып бирәм инде кешегеҙҙе,
Алығыҙ минән ошбу эшегеҙҙе,—

ти. Сабыр итегеҙ, миңә теймәгеҙ, кешегеҙҙе бирәм хәҙер,— ти.— Дарья төбөндә ул,— ти.

Хәҙер дарьянан алалар быны. Сәйфелмөлөк би-и-и-к һарғайған була, ҡырҡ көн ятҡан, бик ауыр хәлдә була. Хәҙер дейеү батшаһы әйтә:

— Саҡ ҡына сабыр итегеҙ, кешегеҙгә хәл керһен,— ти. Сәйфелмөлөктө алып сығып тәрбиәләй, ашата, эсерә, йыуындыра, яҡшы кейемдәр кейендерә. Яҡшы итеп кейендереп, Сәйфелмөлөктө Шаһбал батшаның ҡулына илтеп тоттора. Хәҙер былар вәғәҙәләшеп-берләшеп, батша менән дуҫлашып, Сәйфелмөлөктө алып ҡайтып китәләр.

Шулай итеп, ике арала һуғыш булып, Сәйфелмөлөктө эҙләп табып, Шаһбал батша алып ҡайта. Бәҙиғолъямал ҡаршы сыға. Ҡыуанышалар, күрешәләр. Икенсе көндө үк Шаһбал батша тәхете менән осоп барып, тегендәге Мәликәне, атаһын-инәһен туйға алып килергә булалар. Бер-ике аҙна ял иткәндән һуң шул уйҙа булалар. Хәҙер Сәйфелмөлөккә әйтә:

— Һин әҙерәк йөрөп кер, тирә-яҡты йөрөп күр,— ти.— Хәҙер ҡотолдоң, һиңә берәү ҙә теймәç,— ти.

Сәйфелмөлөк бер көндө ауға сығып китә. Ауға бик оçта була. Ауҙа йөрөп ята ине, бер ерҙә бер әҙәмде бәрей оçтөрәп алып килә. Үҙҙәре һөйләнәләр:

Ғәриптән* күңеле һыныҡ донъяла юҡ,
Йыһан эсендә ғәриптән ғәмдала юҡ.

Сәйфелмөлөк был ғәрипте ҡотҡарырға бара.

— Кем был? — тип һорай.

— Быпа бер ҡасҡын,— тиҙәр.

Ҡара әҙәм була был әҙәм. Йөҙө-бите күренмәй бының, кейемдәре йыртылған була. Сәйфелмөлөк әйтә теге кешеләргә:

— Бер ергә ҡуйып тороғоҙ. Мин ауға барам, ҡайтҡанда кереп ҡарармын,— ти.— Ниндәй тотҡон икән ул?— ти.

Хәҙер ауға китә. Бер аҙ ҡош-ҡорт ата ла ҡайта. Тегенең янына килә. Был кешене алып сығып ҡараһа, ни күҙе менән күрһен — Сәғит дуçы! Сәйфелмөлөктән айырылып ҡалған көйгә ку-у-у-п яфалар күреп, ошо бәрейҙәрҙең ҡулына эләккән икән. Сәйфелмөлөк менән Сәғит икеһе лә һушһыҙ булалар. Йыуындыра, кейендерә быны. Шаһбал батшаға алып ҡайта.

— Минең дә дуçым табылды,— ти.

Шаһбал батша менән быны тәрбиәләйҙәр, кейендерәләр, йыуындыралар. Инде тәрбиәләйҙәр. Шулай бер аҙна ғүмер үтә. Хәҙер Мәликәнең аталарына хәбәр китә, туйға килергә. Тегенән Мәликәнең атаһы, инәһе, Мәликә туйға киләләр. Шаһбал батша күп итеп туйҙар үткәрә хәҙер, халыҡтарҙы тәрбиәләй. Һуғышта ҡалғандарҙың балаларына пенсиялар тәғәйенләй, аталары үлгәндәренә ку-у-у-п хөрмәттәр күрһәтә [8]. Шулай итә торғас, Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямалдың ҡауышаһы көп етә. Сәйфелмөлөк Мәликәнең атаһына әйтә:

— Миндә бер тәҡдим бар,— ти.— Һин был тәҡдимде ҡабул итерһеңме икән? — ти.

Батша әйтә:

— Һөйлә, ниндәй һүҙҙер бит,— ти.

— Мәликәне минең Сәғит дуçыма бирәһеңме? Улар ҙа ишлеҡушлы булһындар икеһе,— ти.— Беҙҙең Бәҙиғолъямал менән күрешергә бер көп генә ҡалған. Һин дә Сәғитте алып ҡайтып китеп, Мәликә менән ҡауыштыр,— ти.

Мәликә шат риза була, Сәғит тә риза була. Сәғит бик матурланып китә. Матур була. Хәҙер Мәликәнең инәһе, атаһы, Мәликә, Сәғит ҡайтып китәләр. Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямал күрешеп ҡалалар. Ике ғашиҡ күрешәләр. Күктә ай менән ҡояш

уйнаша, шул хәҙәре былар ҡыуаналар! Хәҙер, ярар, ҡайтып, тегендә Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямалдың килгәнен көтөп туй яһамай көтөп тора Тажылмөлөк батша. Ҡыҙ никахланырға риза була. Сәғитте алып ҡайтып бер хилүәт ергә ҡуя. Би-и-и-и-к яҡшы кейемдәр кейҙерә. Яҡшы тәғәмдәр бирҙерә, кейәү итергә була. Мәликәгә күренмәй әле. Шулай итеп көтәләр. Бәҙиғолъямал менән Сәйфелмөлөк, ҡатыны менән Шаһбал батша — былар дүртеһе бергә дауыл-тәхет менән килеп төшәләр. Мәликәгә туй үткәрәләр. Хәҙер Шаһбал батша, ҡатыны, Сәйфелмөлөк, Бәҙиғолъямал тағы Ирәнбағ шәһәренә ҡайтҡас, бер көндө Шаһбал батша Бәҙиғолъямал менән Сәйфелмөлөктө янына саҡыра ла:

— Һеҙгә бер һүҙем бар, балалар, һеҙ ҡабул күрегеҙ минең һүҙемде,— ти.

— Атай, һөйлә,— тиҙәр.

— Мин һеҙгә бына ризалыҡ бирәм, һин, кейәү, минең ҡыҙымды алдың. Бәлки, атаң иҫәндер, ун йыл эсендә, ғүмере бөтмәһә, атайың-инәйең үлмәгәндер,— ти.— Минең еңел тәхетемә ултырып, минең ҡыҙым менән атайыңа ҡайтаһың. Минең шундай уйым,— ти.— Һин миңә ул түгел, ә һин, кейәү, — атаңа ул, иҫән сағында, атаңды ҡайтып күр. Минең ҡыҙымды алып ҡайт,— ти.— Минең ҡыҙым уға олтораҡ булһын. Мин ризамын, хатта ҡыҙым итәге менән иҙән һеперһен. Бына минән рөхсәт шулай,— ти.

Былар быны хуш күрәләр: Бәҙиғолъямал да риза була, Сәйфелмөлөк тә.

— Сәғит менән Мәликәне лә алып китәбеҙ. Уның атаһы — атайымдың вәзире, бәлки, иҫәндәрҙер. Беҙ дүртебеҙ ҙә китәйек,— ти.

Хәҙер Шаһбал батша тәхет әҙерләй. Быларҙың дүртеһен дә — икеһен бер тәхеткә, икеһен бер тәхеткә ултыртып — осора. Былар аталарының шәһәренә барып төшәләр. Быларға ҡанат ҡуйыла. Былар бер ергә, самолет төшкән кеүекме инде, барып төшәләр. Ҡара болот булып — өйөрмә булып барып төшкәндәрен ауыл халҡы күреп, Рәбиғелмөлөк батшаға хәбәр бирәләр:

— Илебеҙгә бер афәт төштө, нindәй хәл икән?— тиҙәр.

Батша бөтә халыҡты йыйып, тегеләр янына бара. Барһалар, ни күҙҙәре менән күрһендәр, Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямал, Сәғит менән Мәликә баҫып торалар — дүрт әҙәм. Тәхет кире осоп ҡайтып китә. Быларҙы күреү менән, шәһәр халҡы, Рәбиғелмөлөк үҙе, ҡатыны — барыһы ла ергә йығылалар. «Был нindәй хәл?..» Аптырайҙар. Сәйфелмөлөктөң атаһы-инәһе, Сәғиттең атаһы-инәһе быларҙы барып ҡосаҡлайҙар. Сәйфелмөлөк менән Бәҙиғолъямалдың шул ҡәҙәре нурҙар уйнай йөҙҙәрендә!

Ҡайтҡас, батша тәхетенә үҙенең улын ултырта. Бәҙиғолъямал уларға шул ҡәҙәре хеҙмәт итә. Һәр ваҡыт Шаһбал батша килеп быларҙың хәлен белеп тора. Мәликә Сәғиткә шул ҡәҙәре яҡшы иптәш була. Вәзирҙең ҡатыны, батшаның вәзире Мәликә менән Сәғитте, ҡаршыларында берҙән-бер улдарын күреп һөйөнөп бөтә алмайҙар.

Һәр береһе ғашиҡ-ғашиҡттә ғүмерҙәрен үткәреп, былар донъяла йәшәп ҡалалар.

## АҢЛАТМАЛАР

Башта китаптағы текстҡа ҡағылған мәғлүмәттәр (әҫәрҙең ҡасан, ҡайҙа, кем тарафынан яҙып алыныуы, тәү башлап ҡайҙа баҫылыуы һ. б.) бирелә. Унан һуң, әгәр булһа, бүтән варианттары хаҡында әйтелә; айырым мотивтәргә, күренештәргә, деталдәргә ҡарата иҫкәрмәләр яһала; һәр варианттың идея-эстетик һәм поэтик үҙенсәлектәрен тикшереүселәргә еткереү маҡсатында, текстологик сағыштырыуҙар үткәрелә, айырымлыҡтары күрһәтелә.

Әҫәрҙәрҙе яҙып алыусыларҙың текстҡа ҡағылышлы иҫкәрмәләрен һаҡлау әһәмиәтле һаналып, улар ҙа бында бирелде. Варианттарҙа осрағандары шул биттә юл аҫтына төшөрөлдө. Яҙып алыусы тарафынан айырым һүҙҙәргә бирелгән аңлатмалар һүҙлеккә күсерелде. Томды төҙөүсенең аңлатмаларынан принципиаль айырылған йәки оригиналь төйөлгән осраҡтарҙа, ул һүҙ аңлатмаһының авторы йәйә эсендә күрһәтелде.

Шартлы ҡыҫҡартыуҙар:

*БДУ БӘК фф* — Башҡорт дәүләт университеты башҡорт әҙәбиәте кафедраһының фольклор фонды.

*БХИ*, I, 1954 — Башҡорт халыҡ ижады, I-се том, төҙөүсеһе, редакция, кереш мәҡәлә һәм аңлатмалар биреүсеһе Ә. И. Харисов, Өфө, 1954.

*БХИ*. Риүәйәттәр, легендалар — Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Төҙөүсеһе, инеш мәҡәлә һәм аңлатмалар авторы Фәнүзә Надршина, Өфө, 1980.

Ғилми архив — СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Ғилми архивы.

ТТӘИ — СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты.

### БАТЫРҘАР ҺӘМ МӘШҺҮР ШӘХЕСТӘР ТУРАҺЫНДА ҠОБАЙЫРҘАР, ХИКӘЙӘТТӘР

**Иҙел йорт.** «Иҙел йорт йәки Иҙелгә яу буһҡанда» тигән исем менән Хәйбулла Ғәбитовтың «Халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр» мәҡәләһендә ҡобайырҙарға беренсе миҫал итеп килтерелгән.— «Яңы юл» журналы, 1923, № 2—3. Аҙаҡта: «Ҡаҙаҡтар сабыуыл яһағанда, тау башҡорттары Иҙелгә ҡасҡандар. Шуның айҡаны менән әйтелгән йыр»,— тип иҫкәрмә яһалған.

Әҫәр ҙур бер эпик сюжеттең драматик эпизодтарын ғына сағылдыра. Шунлыҡтан эпизодтар шартлы рәүештә бүлеккә айырылып, тәртип номеры һуғылды. Беренсе бүлек әҫәрҙең экспозицияһы булһа, икенсеһе — баҫҡынсы яу алдынан ил-йортҡа сәсән (аҡһаҡал, ҡорбаш йәки ырыу башлығы) һүҙе, дошманға ҡаршы яуға саҡырып оран һалыуы (сюжет төйөнө) кеүек; өсөнсө бүлек ир-атһыҙ ҡалған йортта әсә менән ҡыҙ диалогын сағылдырһа, ҡалған бүлектәрҙә сюжеттең көсөргәнешле тоҫ алыуы һәм фажиғәле тамамланыуы аңлашыла.

Икенсе бер варианты «Иҙел йорт» исемендә 1922 йылда татар фольклорсыһы Хужа Бәдиғ тарафынан, үҙенең әйтеүенсә, «башҡорт эсенән» яҙып алынған һәм «Әҙәби ярҙәм мәжмуғәсе» тигән йыйынтыҡтың икенсе китабында баҫылған (Ҡазан, 1922). Текста башҡорт теленең үҙенсәлектәре тулыһынса һаҡланмаған. Айырмаһы иҫкәрмәләрҙә күрһәтелде.

[1] *Ҡустән ҡалһам, ҡурған йорт* — башҡаларҙан айырылып ҡалһам, ышыҡ булып һаҡлар (ҡурсыр) йорт. Х. Бәдиғ вариантында был юл юҡ. Шул уҡ ваҡытта унда һәр юл бындағыса ҡабатланмай.

[2] Был бүлек һәр ике вариантта ла һуңынан килә. Ҡобайырҙың йөкмәткеһенә ҡарағанда, уның урыны ошонда булырға тейеш.

[3] Бәдиғ вариантында был юл — *Ҡуҡанда ғына ҡуй нерләшә.*

[4] *Йорон* — тун итәгенең йыртылып һәлберәп төшкән киҫәге. Был урында ир кешенең ағзаһына кинәйә (*Х. Ғәбитов иҫкәрмәһе*).

[5] Х. Бәдиғ яҙмаһында строфа *Әйҙә, Иҙелгә ҡайтайыҡ* тип башлана.

[6] *Тераү һалып...* — дошманды тотҡарлап тороу өсөн, артҡа ғәскәр ҡалдырып сигенеү.

[7] Бәдиғ вариантында — *Яйыҡ сығып ятайыҡ.*

Эпоста, ғәҙәттә, йылға дошман юлында ҙур һәм ышаныслы кәртә булып һүрәтләнә.

[8] Баштың имәнеслелеген тасуирлаған юлдар Бәдиғ яҙмаһында юҡ. Унда төштә ут, ут яғалай шеш, шеш башында ит күреү тепә хәбәр ителә. Яуабында ла шулай.

[9] Бәдиғ яҙмаһында яуаптың һуңғы юлы — *Үҙ башыңа ҡарт обмә.*

[10] *Әлемтәй менән Ҡолмтай* — быларҙы Бәдиғ «Ҡалмыҡ исемдәре» тип, ә Ғәбитов «Ҡаҙаҡ исемдәре» тип аңлата.

**Мамай хан хикәйәте.** 1970 йылда Силәбе өлкәһе Миәс ҡалаһында йәшәүсе 69 йәшлек Хәҙисә Ҡусабаевапан Әхнәф Харисов яҙып алған һәм 1972 йылда «Ағиҙел» журналының 5-се һанында баҫтырған. (Ғилми архив, ф. 3, оп.63/13, 19—20-се биттәр.)

[11] *Муса хан* — XVI быуатта Нуғай Урҙаһының ханы.

[12] *Урак* — М. Османов тарафынан төҙөлгән «Ногайская хрестоматия» тигән йыйынтыҡҡа (СПб., 1883) ингән «Мирза Мамайҙың хикәйәте»ндә Муса хандың Әлшағир исемле улының улы тип күрһәтелә һәм, атаһынан йәшләй етем ҡалғас, Мамай тәрбиәһендә үҫеүе әйтелә.

[13] *Ҡаф иле* — хәҙерге Феодосия ҡалаһы. 1266 йылда Алтын Урҙа ханы Менгу-Тимур был ҡаланы биләү хоҡуғын Генуэ сауҙагәрҙәренә бирә, Феодосия Ҡаф исемендә уларҙың сауҙа колонияһына әйләнә. 1768—1774 йылдарҙағы рус-төрөк һуғышында Россия тарафынан яулап алынғандан һуң, ҡалаға элекке Феодосия исеме ҡайтарыла.

[14] *Ҡыҙыл* — Урал йылғаһының һул яҡ ҡушылдығы; *Өйсүк* — Белорет районындағы йылға; *Биштамаҡ* — урын исеме.— ...

[15] Строфа М. Османов баҫтырған вариант менән һүҙмә-һүҙ тура килә. Айырма тик Ирәмәл тау исемен *Ирәмән*, Өйсүк йылғаһын *Өйшүк* тип, ә ҡалған һүҙҙәрҙе нуғайса яҙыуҙа ғына.

**Мәргән менән Маянһылыу.** Башҡортостандың Күйөргәҙе районы Бабалар ауылында Ғиниәт Бикмурҙиндән 1917 йылда М. Буранғолов яҙып алған. Тәү тапҡыр 1943 йыл Өфөлә Башҡортостан китап нәшриәте сығарған «Батырҙар тураһында эпос» тигән йыйынтыҡта баҫылған. (Төҙөүсеһе М. Буранголов.) Ҡулъяҙмаһы һаҡланмаған. Машинкала баҫтырылған бер нөсхәһе — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/226— «Башҡорт халыҡ батырҙары тураһында ҡобайырҙар», 2—22-се биттәр.

[16] Һүҙ XV быуаттың 1-се яртыһында берҙәмлеге тамам ҡаҡшаған Алтын Урҙа биләмәләрендә барлыҡҡа килгән үҙаллы ханлыҡтарҙың береһе — Нуғай ханлығы (Нуғай урҙаһы) тураһында бара. Әҫәрҙә ошо урҙаның ханы үҙенең исеме менән түгел, ә Нуғай хан, йәки Нуғай ханы тип кенә атала.

[17] *Ирәмәл* — Көньяҡ Уралда (Башҡортостандың Белорет районының төньяҡ сигендә) ятҡан тау.

[18] *Шүлгән, Мәсем, Һәүбән* — «Аҡбуҙат» эпосындағы персонаждар.

[19] *Иҙел менән Яйыҡ* — «Урал батыр» эпосында Уралдың улдары.

[20] *Бабсаҡ, Күсәк бей* — «Бабсаҡ менән Күсәк» эпосындағы геройҙар.
[21] *Алпамыша* — шул исемдәге эпос геройы.
[22] *Барсын* (*Барсынһылыу*) — «Алпамыша» эпосында һүрәтләнгән ҡыҙ.
[23] *Нәркәс* — «Аҡбуҙат» эпосында Шүлгән батшаның ҡыҙы. Ул Һәүбәнгә Яйыҡ батырҙы көрәшеп йығыуын һөйләй.
[24] *Айыры тояҡ биш котоу* — һыйыр, һарыҡ малынан биш көтөү.
[25] *Туҡтамыш* — 1380—1395 йылдарҙа Алтын Урҙа ханы.
[26] *Батый хан* — Көнсығыш Европаны баҫып алып, Алтын Урҙа дәүләтен башлап ебәргән монгол ханы, Сыңғыҙ хандың ейәне.

**Тарғын батыр.** 1938 йылда Башҡортостандың Баймаҡ районы Икепсе Этҡол ауылында 60 йәшлек Ғәтиәт Хисамовтан «Башҡорт халыҡ әкиәте» тип Ғәйнан Әмири яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 10/38, 153—157-се биттәр. Хикәйәт төп геройҙың исеме менән аталды.
[27] *Исемле* — ҡулъяҙмала «именнәй» (русса «именной» һүҙенән).
[28] *Имгәнгән* — ҡулъяҙмала «ранин булған».
[29] *Башҡарыусы* сәсән әйтеп еткермәгәнме әллә яҙып алыусы яҙырға өлгөрә алмай ҡалғанмы,— ҡыҙҙың йырында тамамланмағанлыҡ һиҙелә.
[30] *Ғәрлеге килеп* — ҡулъяҙмала «досат итеп».
[31] Хикәйәттә башҡарыусы «Масы» исеменә «Яйыҡтан ары масы татары бар. Троицк ҡалаһына яҡын ауыл» тип аңлатма биргән.

**Тарғын менән Ҡужаҡ.** 1959 йылда Курган өлкәһе Әлмән районы Аҫҡар ауылында Рәхимьян Саттаров менән Муллағәли Бәшировтан (икеһенең дә йәше әйтелмәгән) К. Мәргән яҙып алған. Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/1, 21—26-сы биттәр. Китапҡа Саттаров варианты алынды.
[32] Башҡорт тарихендә *Аҡсахан* тигән хандың булғаны билдәле түгел. Хикәйәттең «Ир Тарғын» исемендәге ҡаҙаҡса варианттарында Аҡсахан (ҡаҙаҡса *Аҡшахан*) Ҡырымдағы ҡырҡ хандың олкәне тип күрһәтелә.
[33] М. Бәширов һөйләүенсә, Аҡйондоҙ был һүҙҙәрен Ҡужаҡҡа туй мәжлесендә, уны ағыулы бал эсереп үлтерер алдынан әйтә. Мәғәнәһе бер үк, тик шиғырҙың алтынсы һәм һуңғы ике юлы юҡ.
[34] М. Бәширов вариантында батырҙар араһында «һатыулашыу» диалогы юҡ. Шиғри әйтештәренән һуң уҡ улар алыша башлайҙар. Ҡужаҡ еңә. Шунан көрәшәләр, Ҡужаҡ йығып һала. Уҡ менән атышалар, быныһында ла Ҡужаҡ батыр өҫтөн сыға. Шунан ҡыҙҙы Тарғын ҡулынан тартып алып, Ҡужаҡ ҡайтып китә.
[35] М. Бәширов яҙҙырған текста Аҡйондоҙ туйҙа бер аҙ ҡыҙып алған Ҡужаҡты ағыулы бал эсереп үлтерә. Шунан атаһы янына килә лә: «Минең башыма һин еттең»,— тип шул ерҙә үҙе лә ятып үлә.
[36] Бындай бөтөм ҡобайыр һәм хикәйәттәр осон түгел, ә әкиәт жанры өсөн хас. М. Бәшировтың да сюжет тамамланғас, һамаҡлап:

Иртәгем бөттө иртәрәк,
Тағын бер-ике кәрәк!
Ишеткәнде һөйләп ебәр,
Һөйләгәндә көйләп ебәр,—

тип ослап ҡуйыуы — был, күрәһең, бер тирәләге әкиәт («Иртәк» ҡаҙаҡтарҙа, шулай уҡ төрки халыҡтарҙың күпселегендә *әкиәт* тигәнде аңлата) традицияларында тыуған өҫтәлмә, сюжет ахыры менән бәйләнмәгән бөтөм булып тора. Эпик әҫәрҙе өҫтәлмә рәүештә әкиәт алымы менән тамамлап ҡуйыу хәҙерге заманда йыш ҡына осрай.

**Ек Мәргән.** Башҡорт халыҡ ижадында был хикәйәт әҙәбиләштерелгән варианты аша билдәле. Тәү тапҡыр 1916 йылда Ҡазанда, «Аң» журналының 14-се һанында «халыҡ хикәйәһе» тигән иҫкәрмә менән баҫыла. 1918 йылда Ҡазанда «Иҙел буйы әҙәбиәте» серияһында сыҡҡан «Фәйзи хикәйәләре» тигән кескәй йыйынтыҡҡа индерелә. Аҙаҡ СССР Фәндәр академияһының Ҡазан филиалы Тел, әҙәбиәт һәм тарих институты сығарған «Борынгы татар әдәбияты» (Ҡазан, 1963) китабында «халыҡ хикәйәһе» тигән иҫкәрмә менән баҫыла.
Хикәйәттең донъяға сығыуы башҡорт яҙыусыһы Фәйзи Вәлиевтең (1892—1941) ижади эҙләнеүҙәренә бәйләнгән. Ф. Вәлиев (Башҡортостандың хәҙерге

Кушнаренко районында 1892 йылда тыуып-үҫкән, 1940 йылда үлгән) хикәйәтте ҡасан, кемдән ишетеү тураһында бер ниндәй ҙә мәғлүмәт бирмәһә лә, әҫәрҙең көнбайыш башҡорттарының ижад емеше булыуы тураһында шик юҡ. Быны, бөтәһенән дә элек, хикәйәттә ваҡиғаларҙың Башҡортостан ерендә барыуы, сюжеттә, образдар бирелешендә башҡорт эпик традицияларының тотороҡло һаҡланыуы күрһәтеп тора.

[37] *Сулман* — Кама йылғаһы.

[38] *Дан* — дань (русса), яһаҡ.

[39] Элек ҡаҙаҡтар ҙа «ҡырғыҙ» исемендә йөрөтөлгән.

[40] *Аталары янына ҡайтып китте* — үлеп, аталары янына «теге донъяға» китте.

**Ҡыпсаҡ егете менән башҡорт ҡыҙы.** Башҡортостандың Саҡмағош районы Имәнлекүл ауылында тыуып-үҫкән, хәҙер Өфөлә йәшәгән пенсионер Назим Моратовтан (1906 йылғы) 1974 йылда Ғайса Хөсәйенов яҙып алған. «Был — миңә йәш ваҡытымда Латифа ҡарт инәйем һөйләгәндәрҙән хәтерҙә ҡалғаны ғына»,— тип иҫкәрткән Моратов.

[41] *Таныл һыуы* — Ағиҙелдең Борай, Ҡалтасы райондары аша аҡҡан ҡушылдығы.

**Мораҙым менән Буһҡын.** Хәбибулла Ғәбитов тарафынан яҙып алынып, уның 1923 йылда «Яңы юл» журналының 2—3-сө һанында баҫылған «Халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр» тигән мәҡәләһендә ҡобайырҙарға икенсе миҫал итеп килтерелгән (63—64-се биттәр).

[42] *Донъяла мал сару даһинан нәрҫә601 бармы?*— журналда шулай. Контекстан «донъяла мал аҫырауҙан да әһәмиәтлерәк (ҡыҙыҡлыраҡ, файҙалыраҡ) эш бармы?» тигән һорау аңлашыла.

[43] Малды уя йәки бер нисә кәртәгә тултырып теүәлләү — күплекте күрһәтеүҙә ҡулланылған традицион гипербола, батырҙар тураһында әкиәттәрҙән килгән уртаҡ мотив. *Ҡәҙермәт уяһына* ҡарата Х. Ғәбитов: «Ирәндек тауы буйында әйләнәһе ун һигеҙ саҡрым уйпат ер»,— тип иҫкәрмә яһаған.

[44] *Асталалы ҡаҙан* — доға-фатиха төшкән бәрәкәтле ҡаҙан (*Х. Ғәбитов иҫкәрмәһе*).

[45] *Тиленең* — контекстың мәғәнәһенә ҡарағанда, *тилеттең* (йәғни имеҙҙең) булырға тейеш.

[46] *Көмөш сабыу* — зиннәтләү, нағышлау.

[47] *Ҡау иттең* — зарыҡтырып йопоп ҡойҙороу, толәтеү.

[48] *Донъя яптыҡ* — донъя яптығы, йәғни донъя кәрәк-ярағы.

**Сура батыр.** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Люксембург районы Ҡолман (Ҡаръян) ауылында Мөхәммәт Агишевтән Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 172-се бит.

Варианттары: 1923 йылда «Яңы юл» журналының берләштерелгән 2—3-сө һанында Х. Ғәбитовтың «Халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр» тигән мәҡәләһендә ҡобайырҙарға өсөнсө миҫал итеп килтерелгән (64—65-се биттәр. Кемдән алыныуы әйтелмәгән).

«Сура батыр йыры» исемендә 1939 йә 1940 йылда Сибай ҡалаһында ҡурайсы Бикбулатов Сәйфулланан Х. Хамматов яҙып алған. Вариант бары биш юллыҡ шиғри өҙөктән тора.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/207, 31-се бит.

«Сура батыр» эпосының ҡаҙаҡ, нуғай варианттарында урын алған ҡайһы бер мотивтәр (мәҫәлән, арыҫландың бүре яралаған бейәне ашамауы) тамъянкатай башҡорттарының бер шәжәрәһендә сағыла.— Көнсығышты өйрәнеү институтының Ленинград бүлеге ҡулъяҙмалар фонды, В 2622.

**Сүкем батыр.** 1936 йылда «Яңы юл» колхозы ағзаһы Янмурзин Әскәр бабайҙан яҙып алынған. Ләкин бабайҙың йәшәгән районы, ауылы, йәше әйтелмәгән, яҙып алыусыһы ла билдәле түгел. Әҫәрҙең сығанағы тураһында шундай мәғлүмәт бирелгән: «Ул (йәғни Янмурзин Әскәр.— *Н. З.*) быны Ҡоломбәт ауылының тарихсеһе Барый тигән кешенән отоп алған. Барый ул миңең яҡын ҡоҙа кеше. Унда 1600 йылда яҙылған ҡулъяҙма китап һаҡлана, тиҙәр. Ул китап ҡарындыҡтан яһалған булған, һәм һәр нәҫелдә йәшәгән аңлыраҡ кеше үҙе йәшәгән осорҙа ни нәмәләр булған, шул турала түкмәй-сәсмәй яҙып барған, тиҙәр. Унда Башҡортостандың бер оҙон тарихе яҙылған. «Сүкем батыр тураһын-

да ҡобайыр» ҙа шул яҡта китаптан алынған. Барый Свердловскиҙа йәшәй». Текст латин шрифле машинкала баҫтырылып, «Төрлө характерҙәге әкиәттәр» тигән папкаға тупланған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 73/24, 1—3-сө биттәр.

Текст ахырында Сүкем батыр тураһында шундай риүәйәт хәбәр ителгән: «Сүкем батырҙы Россия менән Польша һуғышы ваҡытында йәшәгән, тип һөйләйҙәр. Долмат, Ҡайырҙы һәм Миәс буйына килеп (Силәбе өлкәһе), Күсем хандың яуҙары Һалйот башҡорттарының ерҙәрен, малдарын талағандар. Башҡорт халҡынан үҙҙәре теләгәнсә көлгәндәр, үлтергәндәр. Бындай хәлгә түҙә алмаған, башҡорттар дошман сафтарына ҡаршы восстание яһағандар. Уның менән Сүкем етәкселек иткән. (Сүкем — Гөлөк батыр менән бер туған, игеҙ). Восстание өс йылға тартылған. Башҡорт уҡсылары дошман һалдаттарын өс йыл буйына ҡыйратҡандар. Долматов крепосен ватҡандар.Һуңынан Сүкемдең армияһы тарҡаулана башлаған. Һәм бер үҙе Миәс буйында һуғышҡанда үлтерелгән.

Сүкемдең тыуған ауылы — Тәрһән (бәлки, Силәбе өлкәһендәге Тәһрәнкүл ауылы? — *Н. З.*), «Яңы юл» колхозынан дүрт километр йыраҡлыҡта хәҙер Чкалов исемендәге колхоз.

«Сүкән батыр» исемендәге варианты 1962 йылда Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Нуркин ауылында Сәфәрғәле Солтанбәковтан (1905 йылғы) Салауат Галин яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3. оп. 21/8, 1-се том, 53-сө бит. Вариант батырға эпик клише — традицион характеристиканан ғына тора (ике строфа, 12 юл).

**Баязит батыр.** 1961 йылда Куйбышев өлкәһе, Оло-Черниговск районы Таллы ауылында 69 йәшлек Ғатаулла Заһидуллиндән Кирәй Мәргән «Баяс батыр» тип яҙып алған. Ләкин текста Баяс исеме бер ҙә телгә алынмайынса, Баязит тигән батыр тураһында һүҙ бара.— Ғилми архив, ф. 3. оп. 21/6, 52—53-сө биттәр.

**Аҡшам батыр.** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Юлтый ауылында 93 йәшлек Аллабирҙе Юлтыевтан Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 169-сы бит.

[49] *Аҡ балтыр һәм уймаҡтай ауыҙ* — ир-батырҙар һынына хас түгел. Был портрет һыҙаттары бында, күрәһең, батырҙың йәш булыуын аңлатыу өсөн алынған.

**Көбәк батыр.** «Башҡорт ауыҙынан» тигән исем менән Х. Ғәбитов яҙып алған һәм «Яңы юл» журналының 1923 йылғы 2—3-сө һанында «Халыҡ әҙәбиәтенән ҡыҫҡаса үрнәктәр» тигән мәҡәләһендә ҡобайырҙарға дүртенсе миҫал итеп баҫтырған. Ҡобайырҙың көйө 1920 йылда фонографҡа яҙып алыныуы тураһында хәбәр ителгән, әммә кемдән яҙып алыныуы хаҡында әйтелмәгән.

[50] Журналда шулай, һүҙ төшөрөп ҡалдырылған.

**Түлгән батыр.** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Ҡолман ауылында Мөхәммәт Агишевтән Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 171-се бит.

**Старшина Мәсәгүт.** Башҡортостандың Баймаҡ районында беҙҙең көндәргәсә яҡшы һаҡланған ҡобайыр. 1973 йылда Баймаҡ районы Таһир ауылында Хәйбуллин Барый Мәгсүм улының көйләп һөйләүе буйынса музыка белгесе Фәрит Камаев магнитофон таҫмаһына яҙып алған. (Таҫма Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының музыка фондында һаҡлана.) Китапҡа ошо текст алынды.

Варианттың 30-сы йылдар башында Барый Хәйбуллиндең атаһы Мәгсүм Әнтрәзаҡ улы Хәйбуллиндән шул уҡ Таһир ауылында яҙып алынған тексы ла һаҡланған. М. Хәйбуллиндең колхозсы булыуы, уҡый-яҙа белеүе әйтелгән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 32—33-сө биттәр.

Текстарҙы сағыштырыу шуны күрһәтә: М. Хәйбуллин «Старшина Мәсәғүт» ҡобайырынан һуң «Маҡтаныу» («Әтәлге ҡоштар маҡтанһа...»), «Аллаһың ҡөҙрәте шундайҙыр...» һәм «Арыны әйт тә бирене әйт...» тигән әйтемдәрҙе һәм «Урал» бәйетен яҙҙырған. Был репертуарҙы атаһы писек һөйләгән булһа, Барый Хәйбуллин дә, асылда, шул составта һөйләгән. Айырма шунда ғына: ҡобайырҙы ул старшина Мәсәғүттең халыҡҡа мөрәжәғәте менән түгел, ә урындарын алмаштырып, икенсе строфаһы менән башлаған.

Ҡобайырҙың йәнә и к е в а р и а н т ы билдәле:

Беренсеһен 20-се йылдарҙа Ғ. Вилданов Тамъян-Катай кантоны (хәҙерге Әбйәлил районы) Әбүлғази ауылында яҙып алған һәм 1927 йылда «Башҡорт аймағы» журналының 4-се һанында баҫылған «Ҡобайырҙар башҡортса» тигән мәҡәләһендә «6-сы ҡобайыр» тип килтергән.

Икенсеһен 1952 йылда шул уҡ Әбйәлил районында Рәми Ғарипов яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/237, 81-се бит.

1754 йылда башҡорттар батшаға яһаҡ түләүҙән «ҡотҡарыла». Ләкин бының өсөн улар тоҙҙо урындағы ятҡылыҡтарҙан бөтөнләй файҙаланмайынса, ҡаҙнанан ботон 35 тингә һатып алырға тейеш булалар. Ҡобайырҙа батша хөкүмәтенең ошо (1754 йыл 16 март) Указына халыҡтың ҡаршылыҡлы мөнәсәбәте сағыла.

[51] *Атанан тоҙ алырға, батшалыҡҡа ҡалырға* — был ике юл варианттарҙың бөтәһендә лә үҙәктә тора, ләкин мәғәнәһе торлөсә. Р. Ғарипов яҙмаһында ла бындағыса әйтелгән беренсе юлды (*Атанан тоҙ алырға*) ата тоҙ, йәғни ҙур киҫәк-киҫәк таҙа тоҙ, тип аңларға кәрәк. Шулай булғас, Хәйбуллиндарҙың һөйләүендә Указдан тоҙҙо яһаҡ рәүешендә батшалыҡҡа тапшырырға бойороу мәғәнәһе килеп сыға. Р. Ғарипов яҙмаһында икенсе юл — Батшалыҡҡа ҡалырға. Тимәк, был вариантта тоҙ алыу мотиве Рус дәүләтенән айырылмаҫҡа саҡырыу идеяһы менән тоташа, мәғәнә бермә-бер ҙурая.

Ғ. Вилданов яҙмаһында был ике юл өс юлдан тора:

Батшалыҡҡа алырға,
Унан барып тоҙ алырға,
Аҡ ҡалпаҡҡа һалырға.

[52] Строфаның һуңғы биш юлында старшина Мәсәғүттең Указға мөнәсәбәте сағыла. Әммә Ғ. Вилданов менән Р. Ғарипов яҙмаларында ул юҡ. Строфа хәҙергә мәғәнәһе асылмаған «Гемһәләй, гемһәләй, һәллеүүәләйт, һәллеүүәләйт (Р. Ғарипов яҙмаһында — *кем һәләй һәллеүәләй.*) тигән юлдар менән ослана. Ымлыҡҡа ҡоролған бындай юлдар Әбйәлил районында башлыса Ғ. Вилданов яҙып алған ҡайһы бер әйтемдәрҙә лә осрай. Музыкаль оҡшаш ондәрҙән ойошҡан бындай ымлыҡ юлдар, беренсенән, бер фекерҙең (йәки строфаның) тамамланыуын белдереү өсөн ҡулланылһа, икенсенән, башҡарыусы сәсән (йәки һөйләүсе-импровизатор) өсөн пауза хеҙмәтен үтәй.

[53] *Хеҙмәт иткән хур булмаҫ* — Ғ. Вилданов яҙмаһында «Байға торған хур булмаҫ» тип алынған.

[54] *Ҡазыйлы илдәй ил булмаҫ* — бер хужалы, бер хөкөмлө илдең өҫтөнлөгөн аңлата.

**Ҡарас менән Аҡша.**— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/307, 50—56-сы биттәр. Латинсә шрифтле машинкала баҫылған текст, паспорты юҡ.

Варианттары:

1) «Ҡарас сәсән» исемендә М. Буранғоловтың «Фольклор ижадсылары» тигән ҡулъяҙма хеҙмәтендә килтерелә.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 17—22-се биттәр. Кемдән, ҡасан алыныуы әйтелмәгән. Бында баҫылған варианттан әллә ни айырылмай, тик легенда өлөшө ҡыҫҡараҡ.

2) «Башҡорт ҡапҡалары» исемендә Башҡортостандың Учалы районы Науруз ауылында Әхмәтша Солтановтың Ғәли Байғизиндә һаҡланған иҫке ҡулъяҙмаһынан алып, Ғ. Вилданов 1925 йылда «Башҡорт аймағы» журналының 1-се һанында (78—86-сы биттәр) «Башҡорт ҡапҡалары» тигән исем менән баҫтырған. Күрәһең, ҡулъяҙманың үҙендә булғандыр, хикәйәттә сағылған ваҡиғаларға ҡарата түбәндәгесә тарихи мәғлүмәттәр бирелгән (бында бер аҙ ҡыҫҡартып баҫыла).

«Хәҙерге Тамъян-Катай кантоны Науруз ауылы башҡорттарының төп аталары Айбағыш, Көнбағыш исемле ике туған булған. Айбағыштан Килдеш исемле атҡыс-мәргән тыуып, заманында тиңһеҙ булған. Көнбағыштан Ҡушкилде тыуып, ул да атҡыс булған. Ҡушкилденән Ҡарас исемендә бер улан ҡалған. Ҡарас та атаһы һымаҡ уҡ-һаҙаҡҡа бирелеп, йәштән батырлыҡ, атҡыслыҡ исемен алып, һәр ваҡыт Килдеш батыр менән бергә яу ҡайтарып, яу сабып йөрөгән... Атҡыстар йыйылышып майҙан тотҡандар. Килдеш менән Ҡарастан алда һис кем булмаған. Ул ваҡыттарҙа хәҙерге Тамъян-Катай кантонындағы

Килмәк ауылы булған, Верхнеурал ҡалаһы ла булған. Тик ул урында бер нисә генә өй булып, пост өсөн ел тирмәне рәүешендә кәҫтән өйгән бер сасавай[1] булған. Хәҙерге ундағы Буғаҙаҡ, Сабаҡлы күлдәре башҡорт йәйләүҙәре урыны булған. Иҫле күлдән көнбайыш яҡта Урал арҡаһына сығыуға, урман ҡалын, ағас күплектән, мөмкин булмаған. Иҫле күле ҡаҙаҡтар яғынан башҡорт йәйләүенең сиге булған... Әгәр ҙә башҡорттарға ҡаҙаҡ, ҡалмыҡ йәки урыҫтар яғынан ҡыйынсылыҡ килһә, башҡорт ҡашҡалары*, батырҙары менән ҡаршы тороп, яу ҡайтарғандар. Ул ваҡыттарҙа яу ҡайтарыуҙа Барын ырыуынан Ҡалманай батыр, Тамъян ырыуынан Япай батыр, Тиләү ырыуынан Килдеш, Ҡарас батырҙар булған. Ошо батырҙарҙың исемдәре күңел тарихендә һаҡланып килеп, улар һәм уларҙың миҙгелдәре әле лә булһа халыҡ телендә йөрөй. Улар тураһында һамаҡтар, йырҙар йырлана, ҡурайҙарҙа тарталар.

Ул заманда барымта, ҡарымта заманы булған. Һәр милләт көсө еткәнен талап, тартып алып китә биргән. Башҡорттар менән ҡаҙаҡтар ҙа тыныс тора алмағандар. Бер-береһенең малын тартып алып китеүҙә ҙур уңъя күргәндәр. Иленә мал алып ҡайтһалар, ҙур шөһрәт тапҡандар. Малдың киткәне тиҙлектә беленеп, ҡыуғын төшһә, арала ҡанлы һуғыштар, күп ҡырылыштар булған. Бына шул йөмләнән ҡаҙаҡ ҡашҡалары менән башҡорттарҙың Ҡарас ҡашҡаһы араһында булған яу һалышыуҙы бында яҙып үтәбеҙ». («Башҡорт аймағы», 1925, 1, 78—79-сы биттәр.)

Аҙаҡ, ҡобайыр тексынан һуң, Ғ. Вилданов әҫәргә ҡарата үҙенең ҡайһы бер фекерҙәрен яҙып үтә. Шуларҙан түбәндәге иҫкәрмәһе, Ә. Солтанов ҡулъяҙмаһының тарихенә ҡағылғанлыҡтан, иғтибарға лайыҡ:

«Ҡарас батыр тураһында юғарылағы һүҙҙәр Әхмәтша Солтанов, Ғәбделғәзиз Наурузовтың һөйләүенән яҙып алған Ғүмәр Күкбурин тигән кешенең «Башҡорт мәргәндәре» исемендә бер тарихи әҫәре булып, Ҡарас батыр тураһындағы мәғлүмәт шунан алынған булыуы аңлашыла. «Башҡорт мәргәндәре» тигән әҫәр хәҙер ҙә һаҡланыу-һаҡланмауы билдәһеҙ...» (Шунда уҡ, 85-се бит.)

Был вариантта ҡаҙаҡ батырының һүҙҙәрен ҡаҙаҡса бирергә тырышҡандар.

3) «Ҡарас батыр» исемендә фольклорсы Әхмәт Сөләймәнов тарафынан Өфөлә Ишмөхәммәт Ғәләүетдиновтан 1969 йылда яҙып алынған.— БДУ фонды.

Башлыса сәсмә телдә һөйләнгән был вариантта шундай үҙенсәлектәр бар:

а) Ҡаҙаҡ сапҡынсыларының малды ҡыуып алып китеүҙәре Ҡарас батырҙың һунарҙа йөрөгән сағында була. Был, йәғни төп герой өйҙә юҡ саҡта илде дошман килеп баҫыу,— эпик иждатта традицион күренеш.

б) Барымтасылар артынан Ҡарас бер үҙе ҡыуа сыға.

в) Батырҙарҙың үҙ-ара танышыуы ябай формала. Ҡарастың «Кем һеҙҙең башлығығыҙ, шул сыҡһын әле! Нисдәй атлы батырһың? Ниңә килдең башҡорт еренә?» тигән һорауына ҡаҙаҡ батыры: «Аҡса атлы батырмын, йөҙ ҡаҙаҡҡа бәлемен»[2],—тип яуап бирә. Ҡарас, ҡан түкмәйенсә, малдарҙы ҡалдырып китеүҙе һорағас, Аҡса батыр, (вариантта исеме шулай) маһайып, шулай яуаплай:

Йорт алдында хур ҡалырға,
Ҡыуғып малды ҡалдырырға,
Бер истәккә * баш эйергә,
Ҡыҙыл яулыҡ ябынған
Еңгәң бармы ни бында?!

г) Батырҙарҙың уҡтарын ырымлап атышыуҙары тулы һаҡланмаған. Ҡарас батыр беренсе атҡанда Аҡса батырҙың эйәр ҡашына ата; тегенең уғын тотоп алып, уртаға һындыра.

д) Хикәйәт, беренсе варианттағы һымаҡ, урын атамаларын ошо атышта үлеп ҡалған ҡаҙаҡ батырҙары исеменә килтереп бәйләй.

---

[1] Сасавай — часовой, һаҡсылар торған урын.

[2] Бәлемен — баһалымын, тиңмен.

[55] М. Буранғоловтың «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәтендә Ҡарас батырҙың нәҫел ебе Ҡобағош сәсәнгә барып тоташа: «Айбағыш менән Көнбағыш тигән ике бер туған булған. Айбағыштың улы — Килдеш, Көнбағыштың улы — Ҡушкилде, уның улы Ҡарас булған. Ә Ҡобағош легендаһында «Ҡобағоштоң Көнбағыш менән Айбағыш исемле ике улы булған» тип әйтелә. Тимәк, XV быуат аҙағында — XVI быуат баштарында йәшәгән Ҡобағош Ҡарастың олатаһы булһа, Ҡарас XVI—XVII быуат араһында йәшәгән була». (Ғилми архив, ф. 3. оп. 12/445, 2-се бит.)

Ҡарас батырҙың, Ҡобағош һымаҡ, заманында атаҡлы сәсән булыуы хаҡында ла легендалар һаҡланған. Мәҫәлән: «Ҡарас менән Ҡараһаҡал».— Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар, № 188.

[56] *Алға сапҡан барасымын* — М. Буранғолов вариантында «алға сабырбарыһымын».

[57] *Туғын* (М. Буранғоловта: *тулғын*) — тығыҙ, тығыҙлап тултырылған.

[58] *Ҡыуғыға* — малды ҡыуып алып китеүсегә.

[59] *Аблай* (*Абылай*) — Урта Ҡырғыҙ (дөрөҫө — ҡаҙаҡ) — Ҡайсаҡ урҙаһының ханы (1710—1781).

[60] *Бер киҙәктән юйылһаң* — атып та тейҙерә алмаһаң.

[61] *Хурлыҡ* — М. Буранғоловта *намыҫ*.

[62] *Серкеп* — М. Буранғоловта *өҙөләп*.

[63] М. Буранғоловта бынан һуң тағы ла ике юл бар:

Ҡаҙаҡҡа мәргәнлекте белдерәйем,
Ҡаҙағым, һынар өсөн торҙоң алыҫ.

[64] Әүәле яуҙа үлгән батырҙарҙың ҡәберенә уҡ-һаҙаҡ ҡаҙап китер булғандар. Был — уларҙың батырлығын хөрмәт итеү билдәһе булып һаналған. Н. Рычков 1771 йылда Ырымбурҙан Ҡаҙағстанға сәйәхәтендә уҡ-һаҙаҡ, һөңгө ҡаҙалған зыяраттарға осрауын яҙа. Шундай зыяраттарҙың береһен ул Ырғыҙ йылғаһы буйында осрата. — «Дневные записки путешествия капитана Николая Рычкова в Киргис-Кайсацкую степь в 1771 году», СПб., 1772, стр. 16.

**Билал менән Дүсән.** 1925 йылда Ғ. Вилданов Тамъян-Ҡатай кантоны Тунғатар ауылында 75 йәшлек башҡорт Аккужин Хәлилдән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 22-се бит. 1927 йылда «Башҡорт аймағы»ның 4-се һанында Вилдановтың мәҡәләһендә «Беренсе ҡобайыр» тип баҫылған.

**Ерәнсә сәсән.** 1911 йылда Ырымбур губернаһы Ҡайыпҡол ауылында Миңлебай Мәмбәт улы Сәйетовтан М. Буранғолов яҙып алған һәм «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәтендә Ерәнсә сәсән хаҡындағы күләмәстәрҙән һуң килтергән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 162—165-се биттәр.

[65] *Абулхайыр* — XVIII быуаттың беренсе яртыһында ҡаҙаҡ ханы.

[66] *Аҡмәмбәт* — тарихселәр тарафынан *Аҡсаҡ Көлөмбәт* (*Аҡсаҡ Килембәт*), Миңле ырыуының шәжәрәһендә *Аҡсаҡ Килмәт* тип күрһәтелгән нуғай мырҙаһы.

[67] *Әтәс* — Магнитогорск ҡалаһы янындағы тау исеме. Халыҡ телендәге ысын исеме — *Аташ* йәки *Отас*. «Ут ташы» (ҡаҙаҡса «от тасы») һүҙҙәренән яһалған.

[68] *Һәм* башҡорт халыҡ ижадында осрамай тип әйтерлек. Был урында боронғо төрки (сығтай) телендәгесә *дә* теркәүесе хеҙмәтен үтәп килгән.

[69] *Һеҙҙең күҙгә ҡарамын* — һеҙгә генә ҡара, ҡәҙерһеҙ кеше булып күренәмен.

[70] XV быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән үзбәк ханы *Абул-Хайр* күҙ уңында тотола булһа кәрәк.

[71] *Ибраҡ* — XV быуаттың икенсе яртыһында Себер ханы Ибраһим (тарих китаптарында — *Ибаҡ*) күҙ уңында тотола.

[72] *Күсендә* — үҙ күсепең (халҡының) эсендә.

[73] *Күсем* — XVI быуаттың икенсе яртыһында ҡырҡ йыл буйы хакимлек иткән Себер ханы (русса *Кучум-хан*).

[74] *Аблай* — XVII быуатта Себер ханы.

**Байыҡ Айҙар сәсән.** 1920 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында осрашҡанда Ғәбит ҡурайсынан М. Буранғолов яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 41 — 54-се биттәр (тәүге өс бүлек һәм 177 — 192-се биттәр) тулы текст 1970

йылда Нур Зариповтың «Халык ижадының асыл өлгөһө» тигән инеш һүҙе менән «Ағиҙел» журналының 9-сы һанында баҫылды.

М. Бурангуловтың әйтеүенә ҡарағанда, был ҡобайырҙы Ғәбит сәсән (1856—1922) 20 йәшлек сағында (тимәк, 1876 йылда) ҡурайсы Ишмөхәммәт Мырҙаҡаевтан (1781—1878) отоп алған (әйтелгән архив сығанағы, 192-се бит). Йокмәткеһенә таяныу, һәр бүлеккә исем бирелде.

[75] *Әй* — Ҡариҙел йылғаһының ҡушылдығы.

[76] *Ҡаҙаҡ сәсәндәре* — Бурангуловтың аңлатмаһында Абылай хандың аҡыны Бохар исеме әйтелә. Күренекле ҡаҙаҡ аҡыны Бохар Ҡалҡаман улы (1693—1787) үҙенең күп ғүмерен Абылай солтан (1710—1781) һарайында үткәрә, дәүләт эштәрендә ҡатнаша. Күбеһенсә дидактик йөкмәткеле өләңдәр сығара. Шуға ла әҫәрҙәре халыҡ араһында киң таралған. Ханға хеҙмәт иткән аҡындың ижад ҡаршылығын күрһәтеү яғынан «Ханға яуап бирмәһәм» тип башланған бер өләңе ҡыҙыҡлы:

> Ханға жауап бирмесем,
> Ханның көңеле ҡайтады;
> Ҡайтара жауап сөйлесем,
> Халҡым не деп айтады.
> Хан Абылай, Абылай,
> Мондай суыҡ хабарды
> Сорамасаң, не етеде?
> Сораған сон — айтпасам,
> Кеселегем кетеде.
> Енди айтайын, тыңдасаң,
> Маған ҡаһар ҡылмасаң...

(Ҡазаҡ әдебиетепең тарихы, II том, XVIII—XIX ғасырлардағы ҡазаҡ әдебиете, беренше китап, Алматы, 1961.)

Был өләң башҡорттар араһында ла таралған. Мәҫәлән, 1961 йылда Куйбышев өлкәһе Таллы ауылында 69 йәшлек башҡорт Ғатаулла Заһидуллиндән Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/6, 54—55-се биттәр.

[77] *Ҡуш Алаш* — Ҡуш Урҙа.

[78] *Бар* — ҡулъяҙмала һәр урында «булған». Әммә ижек һаны артыу сәбәпле һәм строфала борон булған ғына түгел, дауам иткән күренештәр һаналғанлыҡтан, «бар» һүҙе менән алмаштырыу кәрәкле табылды.

[79] *Тәфкиләү* — 1735—1740 йылдарҙағы башҡорт восстаниеһен баҫтырыуҙа айырата уҫаллыҡ күрһәткән полковник мырҙа Ҡотломөхәммәт Тевкелев. Исеме йырҙарҙа ла (мәҫәлән «Тәфтиләү» йырында) ҡәһәрләнгән был батша ялсыһы, массовый яҙалау саралары ҡулланыу менән бергә башҡорт ауылдарын бөтә төбәге менән тотош яндырған.

[80] *Шәгәле* — Салауат Юлаевтың нәҫел ебендә был исемле олатаһы билдәле түгел. Бында, күрәһең, Аҙналының бер ҡәрҙәше Шағанай Бурчаков (Бурчанов) күҙ уңында тотола.

[81] *Балалай түгел, ир һымаҡ*, йәғни һүҙегеҙ тойоно — бәләкәй түгел, ирегеттәр хәл итерлек ҙур мәсьәлә.

[82] Төрки халыҡтарында, шул иҫәптән башҡорттарҙа ла, борондан килгән йола буйынса, туй-һый мәжлестәрендә баш ите иң хөрмәтле кешегә тотторола.

[83] *Яманаттан бүтәнем*, йәғни яҡшы даным, изгелектәрем.

[84] *Сыңғыҙ* — XIII быуат башында Урта Азияла һәм Көнсығыш Рәсәйлә монголдар золомона юл ярған яманатлы Сыңғыҙ хан.

[85] *Ил таланып таҙ ҡалды* — йолҡошланып ҡалды; бөтөрөндө, бөлдө тигән мәғәнәлә.

**Юлай менән Салауат.** М. Бурангулов Ғәбит сәсәндән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 268-се бит. Ҡулъяҙмаһы һаҡланмаған, 1939 йылда машинкала баҫтырылған беренсе нөсхәһе.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/226, 98—162-се биттәр. Бер аҙ ҡыҫҡартылып, 1943 йылда «Батырҙар тураһында эпос» тигән йыйынтыҡта баҫылған (Өфө, Башгосиздат, төҙөүсеһе М. Бурангулов). Томға Ғилми архивта һаҡланған текст бер аҙ ҡыҫҡартып алынды.

[86] *Күҡыр буға тоҡомо* — «Күҡыр буға» эпосында һүрәтләнгән һыйыр малы күҙ уңында тотола.

[87] Бында 1756—1762 йылдарҙағы Россия менән Пруссия һуғышы («Семилетняя война») күҙ уңында тотола. Был һуғышта Юлай Аҙналин башҡорттарҙың бер отряде менән командалыҡ итә, күрһәткән батырлыҡтары өсөн миҙал менән наградлана; ҡайтҡас, яңынан Шайтан-Күҙәй волосе старшинаһы булып һайлана.

Эпизодтың башында анахронизм һиҙелә: Салауат Юлаев 1552 йылда тыуған, ә әйтелгән һуғыш дүрт йылға һуҙылаҡ башланған. Тимәк, эпоста Салауаттың исем туйын үткәргән саҡ менән батшаның башҡорттарҙан ярҙам һорау ваҡыты дөрөҫлөккә тура килмәй.

[88] Шулай уҡ анахронизм күренеше. Юлай әйтелгән һуғыштан 1762 йылда, һуғыш тамамланғас ҡына, ҡайта. Тимәк, был ваҡыт Салауат ярым-ярты һаҡаулап һөйләшә башлаған бала түгел, ә ун йәше тулған малай була.

[89] Бында көтмәгәндә килеп сыҡҡан ҡарт образында һәм уның Салауатҡа әйткәндәрендә «Байыҡ Айҙар сәсән» ҡобайыры менән уртаҡлыҡ сағыла.

[90] *Сәргәйев* — Александр Сергеев. Армияға кеше, ат йыйыу маҡсатында Ҡазандан Башҡортостанға ебәрелеп, бында халыҡты ҡурҡытыу өсөн ауылдарҙы тупка тотҡан һәм ошо яуызлығы менән башҡорттарҙың 1705—1711 йылдарҙағы восстаниеһенең сәбәпсеһе булған комиссар.

[91] Сығанаҡтарҙың икеһендә лә был ике юл түбәндәгесә:

Быуат-быуат бер юлдан
Яуға сабып йөрөгән юл.

Артабанғы строфала һөйләмдең эйәһе юҡ, шуға юл өҫтәлде.

[92] *Сәйет батыр* — 1681—1683 йылдарҙағы восстание етәксеһе.

[93] *Күсем батыр* — 1705—1711 йылдарҙағы восстание етәкселәренең береһе.

[94] *Аҡай* — старшина Аҡай Күсемов 1735—1740 йылдарҙағы восстаниенең тәүге етәкселәренән береһе.

[95] *Ҡараһаҡал* — 1735—1740 йылдарҙағы восстаниенең һуңғы этабында төп етәксе.

[96] *Батырша* (мулла Абдулла Әлиев, Батырша Әлиев) —1755 йылғы восстаниенең идеологы.

[97] Төп сығанаҡта был ике юл юҡ. Китап баҫмаһында:

Салауат һүҙгә башлап,
Былай тигән шул ерҙә.

[98] *Сом* — Эҫем (Сим) йылғаһы.

[99] Халыҡ һөйләүенсә, Салауаттың беренсе бисәһе Әминә тәүҙә уның ағаһының ҡатыны булған. (*М. Буранғолов иҫкәрмәһе.*)

[100] Сығанаҡтарҙа тәүге юл (һөйләмдең эйәһе) юҡ,строфа шулай башлана:

Тәрән уйҙар һөйләшеп,
Бергә уйнап көлөшөп,—

артабан бындағыса.

[101] *Ике телле* — ике йөҙлө.

[102] «Ишетегеҙ, белегеҙ» тигән өҫтәмә юлдан һуңғы һөйләм төп нөсхәлә 50, китап баҫмаһында 49 юлға һуҙылған.

[103] Сығанаҡтарҙа шиғри өс (китапта дүрт) юлға бүленгән был һөйләмдән һуң Салауаттың һүҙенә бөтә ярлы-ябағайҙың «бөтә ҡайғы боткәндәй» шатланыуы, баярҙарҙың «бошоноуы» тураһында төп нөсхәлә 17, китапта 13 юллыҡ шиғыр бар.

[104] Бындағы һуңғы ике һөйләм сығанаҡтарҙа 8 юлға теҙеп бирелгән.

[105] 87-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ.

[106] Сығанаҡтарҙа строфа түбәндәгесә:

Балам, ҡайт һин был уйҙан,
Аҡылын тотма һин улай
Килгән-киткән берәүҙең,
Йәндәй күргән атыңды
Тағы һайлап менгәнһең,

Инде боҙмаҡ буламһың
Янаралдың алдында
Миҙал биргән батшама
Минең биргәп антымды?

Күренеүенсә, строфала логик эҙмә-эҙлеклелек, мәғәнә асыҡлығы етешмәй.

[107] *Йәмәлкә, Бугәс, Бүгәсәү* — Емельян Пугачев.

[108] Строфаның был өлөшө (Салауаттың яуға китеүе) сығанаҡтарҙа шиғри яҡтан төҙөк түгел, мәғәнә асыҡлығы ла етешмәй.

[109] *Юшатыр* — Башҡортостандың Күмертау районында башланған йылға.

[110] Был юлдар сығанаҡтарҙа — теҙмә формала, әммә шиғри төҙөклөк етешмәй.

[111] Был һөйләм сығанаҡтарҙа теҙмә формала биш юлдан тора, әммә шиғри төҙөклөк юҡ.

**Салауат батыр.**— БХИ, I, 1954. Күп йыйынтыҡтарҙа баҫылған.

**Тәүеш мәргән.** 20-се йылдарҙа Ғ. Вилданов «Тунғатар йорто Ташҡая ауылы башҡорто 70 йәшәр ҡарт ауыҙынан» яҙып алған, «Ҡобайырҙар башҡортса» тигән мәҡәләһендә 2-се ҡобайыр итеп килтергән. — «Башҡорт аймағы», 1927, № 4.

**Буранғол ҡашҡа.** «Кәңәш урынында» тигән дидактик ҡобайырҙар составында яҙып алынған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 20—21-се биттәр.

**Әсәнән тыуған ир-егет.** Кирәй Мәргән тарафынан төҙөлгән «Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре» йыйынтығында (Өфө, 1960) «Батырлыҡ тураһындағы әйтемдәр» тип баҫылған (253—254-се биттәр).

**Ялп-йолп иткән яңғыҙ ябалаҡ.** 1970 йылда Силәбе өлкәһе Миәс ҡалаһында йәшәүсе Хәҙисә Ҡусабаеванан (1902 йылғы) Әхнәф Харисов яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3 оп. 63/13, 16—17-се биттәр; «Ағиҙел» журналының 1971 йыл 4-се һанында баҫылған.

**Перовский йәйләүе.** 1884 йылда Башҡортостан буйлап сәйәхәт итеп йөрөгәнендә башҡорт ҡурайсыларынан рус яҙыусыһы Ф. Д. Нефедов яҙып алған һәм «Башкирская старина» тигән очерегендә сәсмә телдә биргән. Әҫәргә һәм уның геройына ҡарата Нефедов шундай иҫкәрмә яһаған:

«...Самым популярным генерал-губернатором является Перовский... Вы можете услышать от курайчев былины об этом, поистине, герое народного трепета и ужаса... Для него ровно ничего не стоило повесить человека, закопать живым в землю целое семейство муллы и затем самого муллу... Приведу одну былину о Перовском. Это — былина о некоем, своего рода, изобретенном самим Перовским телеграфе из живых людей. Перовский имел обыкновение каждое лето уезжать на дачу в Башкирию, за 120 верст от Оренбурга; до сих пор место дачной жизни башкирского героя из русских чиновников называется «кочевкою Перовского». Артабан әҫәр тексы сәсмә телдә.— «Башкирия в русской литературе» в пяти томах, том первый. Составление, предисловие, биографические справки, комментарии и библиография М. Г. Рахимкулова. Уфа, Башкнигоиздат, 1964, стр. 172—173.

Руссанан башҡортсаға Вафа Әхмәдиев ҡайтарҙы.

## ӘЙТЕШТӘР

**Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне.** 1917 йылда Орск өйәҙе Үҫәргән волосе Һабыр ауылы (Башҡортостандың хәҙерге Йылайыр районы) Әфләтүн ахундан яҙып алынып, М. Буранғолов тарафынан төҙөлгән «Фольклор ижадсылары» («Башҡорт халыҡ поэзияһы») тигән ҡулъяҙма йыйынтыҡҡа индерелгән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 5—14-се биттәр (беренсе дана), 120—129-сы биттәр (икенсе дана). Шиғри бер киҫәге «Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне» исемендә бер аҙ редакцияланып баҫылған. БХИ, I, 1954.

Сәсәндәрҙең икеһе тураһында ла биографик мәғлүмәттәр хәҙергә табылғаны юҡ. Әҫәрҙең йөкмәткеһенән Аҡмырҙа сәсәндең хан-бейҙәргә хеҙмәт ит-

кәне, ә Ҡобағоштоң халыҡ сәсәне булғаны аңлашыла. Шуға ла һуңғыһының даны башҡорттар араһында ғына түгел, ә күрше ҡаҙаҡтар араһында ла таралған булған. Ошо хаҡта, мәҫәлән, әле әйтелгән йыйынтыҡта 1907 йылда хәҙерге Аҡтүбә өлкәһе Табантал буйындағы Бишенсе ауыл тип йөрөтөлгән ауылда Алсынбай тигән ҡаҙаҡ аҡынынан М. Буранғолов яҙып алған шундай бер өләң* килтергән:

Жайыҡтан ассаң, ҡашыҡ[1] бер жир икән,
Истәк диген безгә тамыр бер ил икән.
Жиде суны айналдырып биләйтен,
Сул илдең басында бер хан икән.
Ул хан диген ҡодайдай бер жан икән,
Үзе белмәс, ҡодай белер күп малды икән.
Өйер жылҡы әйдәй-әйдәй әйел[2] жиған,
Бынаға[3] әйел биреүдән иле туйған.
Әйелдәре берутала бары тол булған,
Бала күрмәй, жаңғыз басы тик ҡыу торған.
Жайыҡ асып, ил аралап, ары Илектән[4],
Ҡобда[5] буйлап бара бирен тап жыраҡтан,
Ҡазаҡтың бер ҡызына күзен салған,
Күп ҡарасып[6] түгә бирен, ҡызын алған.
Ҡазаҡ ҡызын туйлаймын дип хан уйлаған,
Жар-жолдасын барын саҡырып хан жиnаған.
Туйға өндәп, бер көнө хан ат жибәргән:
«Ҡобда буйы бере ҡалмай барсын»,— дип.
Ҡазаҡ диген, туй дисәң, ҡодай салсын!
Бары киткән берутала, кеме ҡалсын?
Жарыҡтығыз Бисәнбайың ҡаламытын,
Ай-һай салып чиртәмен дип домбрасын!
Ҡара хан дип айтатыны тап сул икән,
Жайыҡ асып баратын күп жир икән.
Ауыл дисәм, ауыл түгел, бер үзе икән,
Утызлаған өй тектергән, жалғыз икән.
Ҡара хандың туй дигене сул ғой икән:
Илле жылҡы, жүздеген ҡуй-суғымы икән;
Барын да илдән жыйып, жейдерәтен,
Ханымдың дан* салатын жыйымы икән.
Туй дигене ханыңдың уnсы ҡоросон,
Бисәнбайҙың айтатыны алда торсон.
Алтпыска житкәнендә Бисәнбайың
Ул туйда ни күргәндер, ҡода белсен!
Алтпысҡа житкәнем сул көн икән,
Туй көнөндә күретенем ҡус төн икән:
Ай-һай салған Бисәнбай жарыҡтыҡтың
Жағасынан ҡодай тотор сул көн икән.
Жасымнан майдан дидем, бер ҡуймадым,
Домбра чиртеп, өләң әйтеп бер туймадым,
Алдыма басҡан бер аҡынды сарсатмайтын,
Домбрамды алга салып бер ҡуймадым.
Алтпысҡа житкәнемдә сул туйымда,
Аҡын булып дан алатын бар уйымда,
Истәк аҡыны Ҡобағосҡа жулығыппын,
Кисер булдым[7] айтысҡан сул уйында.

---

[1] Ҡ а ш ы ҡ — алыҫ.
[2] Ә й е л — ҡатын.
[3] Б ы н а ғ а — быға.
[4] И л е к — йылға.
[5] Ҡ о б д а — йылға.
[6] Ҡ а р а с ы н — малын.
[7] К и с е р б у л ы у — уңышһыҙлыҡҡа осрау.

Жауға бардым, басым жарылды, ул уңалды,
Асау жығып, ҡулым сынды, ул төҙәлде.
Яғамнан ажал устап, ул жибәрде.
Ҡодайдан бер вабал[1] күргәнем жоҡ,
Ҡобағыстай алға басҡан бер вабалды.
Ҡурайын бер гөжләтеп орап салды,
Ай-һайлап, өләңен жарып салды.
Айтысҡанда Бисәнбайың сарсап ҡалды,
Өне тығылып, Ҡобағостап үлеп ҡалды.

(Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 2—5-се биттәр.)

Өләңдән ҡаҙаҡ аҡыны Бисәнбайҙың Ҡобағошто тәрән ихтирам итеүе, юғары баһалауы аңлашыла.

Әйтештә һәм Бисәнбайҙың өләңендә сағылған тарихи шәхестәргә ҡарап, Ҡобағош сәсәндең XV быуаттың аҙағында XVI быуаттың башында йәшәгәнлеген аңларға мөмкин.

120 *Торатау* — Иҫке Өфө ҡалаһы һалынған тау.

121 *Ҡараголомбәт* — XVI быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән нуғай мырҙаһы, Ҡазан ханы Мөхәммәт Әмин тарафынан Өфө кенәзе итеп тәғәйенләнгән. (А. Н. Усманов. Присоединение Башкирии к Русскому государству. Уфа, 1960, с. 52, 54, 96.) Шәжәрәләрҙә лә сағыла. (Башкирские шежере. Уфа, 1960, с. 108, 116, 117, 207, 209.)

122 *Ҡатай яғы* — хәҙерге Белорет районы.

123 *Бикбау* — Үҫәргән ырыуының бейе. Бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән, тамъян ырыуҙарының шәжәрәһендә *Бикбау кенәз* тип күрһәтелә. («Башкирские шежере», 71-се бит.)

124 Аҡмырҙаның артабанғы өс йомағы һәм уға Ҡобағоштоң яуабы 1954 йылғы томда шаҡтай үҙгәртеп баҫылған.

125 Йомаҡтың һорау юлдары 1954 йылғы баҫманан алынды. Ҡулъяҙмала улар төшөп ҡалып, был йомаҡ алдағыһы менән ҡушылған, буталсыҡ килеп сыҡҡан.

126 Йомаҡтың бынһы 1954 йылғы томда түбәндәгесә:

Булаттан үткер — яу ҡыйыр,
Булаттан үткер — яу һуйыр,
Илгә ҡаршы — хан тиеп,
Ханға ҡаршы — дан тиеп,
Хандан ҡурҡмаҫ бар микән?
Бейҙән өркмәҫ бар микән?
Яманлыҡты яҡламаҫ,
Дошман хәтерен һаҡламаҫ —
Кем икән ул, әйт шуны.

Йомаҡ варианттарының икеһендә лә котолгән яуап — сәсән. Әммә уларҙың йөкмәтке биреләшендә мөһим айырма бар: хан-бейҙәргә хеҙмәт иткән Аҡмырҙаның йомағында тормошта сәсәндәр ролен үҙенсә аңлауы, уларҙың характерҙәрен дан-шөһрәт күҙләгенән боҙоп күрһәтеүе сағыла; 1954 йылғы баҫма вариантта иһә, киреһенсә, халыҡ сәсәненә хас сифаттар һанала.

127 1954 йылғы баҫмала:

Ағын һыу аҡмаҫ булырмы,
Тулҡын ҡаҡмаҫ булырмы?
Юлына саң ҡундырмаҫ,
Дошманға дан булдырмаҫ,
Атанан күреп уҡ юнған,
Михнәт күреп ир булған,
Толпар менеп ил күргән,
Иҙел кисеп күп йөрогән,—
Хандан ғәййәр кем булыр?
Бейҙән тайяр кем булыр?

---

[1] Вабал (*ғәр.*) — бәлә-ҡаза; зыян, зарар.

Аңлашылыуынса, йомаҡтың был вариантында халыҡ батырҙарына хас һыҙаттар һанала. Ул һыҙаттар Ҡобағоштоң яуабында тағы ла асыҡлана төшөп, хандан гәййәр көстөң уҙ иленә таянған ир-егеттәр, халыҡ булыуы әйтелә. Ә ҡулъяҙма вариантта Аҡмырҙа, хандарҙы баяғы кеүек үҙенсә ҡылыҡһырлап, донъяла уларҙан да гәййәр кеше юҡ тимәксе. Һәр хәлдә ул шундайыраҡ яуап көтә.

[128] Яуапта квадрат йәйәләр эсендәге юлдар 1954 йылғы баҫманан. Уларҙа халыҡсан сәсәндәрҙең характер үҙенсәлеге һыҙатлана. Яуаптың һуңғы алты юлы урынына ҡулъяҙмала идея мәғәнәһе бик үк асыҡ булмаған шундай юлдар бар:

Бауыры бөтон донъяла,
Бауыры бөтон донъяла
Хоҙай менән дан булыр.]
Илдә уға һан булыр,
Ханға унан ҡан булыр.

[129] Яуаптың был өлөшө (ике строфаға бүленгән 11 юл) 1954 йылғы баҫмала өс кенә юлдан тора:

Саң да ҡунмаҫ ерекмәҫ юл
Батыр сапҡан юл булыр,
Дан тотҡан юл шул булыр.

[130] *Түрә түгел, ҡарамын* — башҡорт эпосында үҙәк геройҙың гәҙәттәге үҙ характеристикаһы, уртаҡ һыҙат. «Ябай халыҡтанмын» тигәнде аңлата.

**Мәхмүт сәсәндең йомағы, уға үҙенең яуабы.** 1912 йылда Башҡортостандың хәҙерге Зианчура районы Иҫәнғол ауылында Миңлемырҙа Сәйетовтан М. Буранғолов яҙып алған һәм «Мәхмүт сәсән» исемендә «Фольклор ижадсылары» тигән йыйынтығына индергән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 37—40-сы һәм 165—168-се биттәр. Шиғыр өлөшө өс томлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады»ның 1-се томында «Йомаҡ» исемендә баҫылған.

Мәхмүт сәсән хаҡында тарихи материалдар һаҡланмаған. Халыҡ ижадында уның исеменә бәйле легендаларға ҡарағанда, Мәхмүт сәсәндең XVIII быуатта йәшәгәнлеген шәйләргә мөмкин.

Халыҡ ижадында Мәхмүт сәсәндең шәхси характер үҙенсәлеген билдәләйторған бер деталь бар: «Аты-тупы булһа ла, ул ат менән йөрөмәгән: йәйен йәйәү, ҡышын саңғы менән йөрөр булған. Шуға күрә уға «Йәйәүле Мәхмүт» ҡушаматы ҡушҡандар, ти». (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 40-сы бит.)

**Ҡобайыр менән йомаҡ әйтешеү.** 1925 йылда Тамъян-Ҡатай кантонында (хәҙерге Белорет районы) Риза Ғәйсиндән яҙып алынған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 17-се бит. Ҡулына ҡарағанда, Ғ. Вилданов яҙмаһына оҡшай. Китапҡа ошо текст алынды.

Икенсе бер вариантын 1952 йылда Рәми Ғарипов яҙып алған (ҡайҙа һәм кемдән алыныуы әйтелмәгән) һәм 1952 йылдың йәйендә Күгәрсен, Зианчура, Баймаҡ, Әбйәлил һәм Бөрйән райондарында йыйған фольклор материалдары менән бергә тапшырған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/237, 84-се бит. Нигеҙҙә, Ғ. Вилданов вариантына тура килә. Айырмаһы шунда ғына: Баҡшан таҙ исеме бер урында «сәсәнем», икенсе урында «серҙәшем» тип әйтелгән.

**Ике сәсән.**— БХИ, I, 1954 һәм Кирәй Мәргән менән Фәнүзә Надршина төҙөгән «Башҡорт халыҡ йомаҡтары» йыйынтығында (Өфө, 1968) «Әйтеш йомаҡтар» составында баҫылған.

**Әйтеш йомаҡтар.**— «Башҡорт халыҡ йомаҡтары», Өфө, 1968.

**Бер тигәс тә ни яман?** Башҡорт фольклорында киң таралып, халыҡ телендә әле лә йәшәгән үҙенсәлекле әйтеш. Һорау ниндәй өн менән башланһа, яуаптың да шул өн менән башланырға тейешлеге (төп шарт) күп вариантлылыҡты тыуҙыра.

Китапта яуаптары оригиналерәк, идея йәһәтенән әһәмиәтлерәк булған өс варианты бирелә. Варианттар һорау-яуаптарҙың һанына ҡарап теҙелде һәм рим цифрҙары менән айырылды.

I вариант. «Кәңәш урынында» тигән әйтемдәр (был китапта «Тоғро һүҙ» исеме менән берелделәр) составында яҙып алынған. Текст латинсә шрифле машинкала баҫылған. М. Буранғолов тарафынан ҡаралып, ҡайһы бер хаталары төҙәтелгән, иҫкәрмәләр яһалған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 21—23-сө биттәр. Ҡайһы бер яуаптары бер аҙ редакторланып баҫылған.— БХИ, I, 1954, 61—62-се биттәр.

131 1954 йылғы баҫма текстағыса ҡалдырылды. Төп сығанаҡта: *Аптыраған ил яман* (әйтештең шарты боҙолған).

132 Яуаптың т өнө менән башланыуы «дүрт» һанының элегерәк боронғо төркисә *турт* тип әйтелеүенә бәйләнгән. «Түрәһеҙ» төшөнсәһен бында *хужаһыҙ, етәксеһеҙ* тип аңларға кәрәк. 1954 йылғы баҫмала «дәртһеҙ булһаң» тип үҙгәртелгән.

133 1954 йылғы баҫмала:

Атылып барған атың абынһа,— шул яман.

134 1954 йылғы баҫмала яуаптың беренсе юлы ташланған.

135 Ун беренсе, ун икенсе, ун өсөнсө яуаптар —1954 йылғы баҫманан. Төп сығанаҡта әйтештең шарты үтәлмәгән:

Яуға сапҡан батырҙың
Аты йығылып-һөрөнөп,
Бите ҡанға һөртөнөп,
Яуҙан ҡалһа,— шул яман (*ун беренсе яуап*)
Ун икенсеһе: Атанан ун бер-ун ике тыуып,
Етем ҡалһа,— шул яман.
Ун өсөнсөһә: Датһыҙ йыйған мал яман.

«Датһыҙ» һүҙенә М. Буранғолов тарафынан «ҡаршы бүләк бирмәй тик кешенән бүләк йыйыу» тип иҫкәрмә яһалған.

136 1954 йылғы баҫмала:

Ун дүрт йәшлек һылыуҙы
Ҡартҡа бирһәң, шул яман.

II вариант. М. Буранғоловтың «Фольклор ижадсылары» тигән хеҙмәтендә («Йомаҡ» бүлегендә) килтерелгән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 114—115-се биттәр. 4—5-се һорауҙары юҡ. Вариант, башҡаларынан айырмалы рәүештә, һуңғы (ун беренсе) яуапта әйтеште мәғәнәүи яҡтан йомғаҡлап, ослап ҡуйыуы менән әһәмиәтле.

III вариант. 1976 йылда Әлшәй районы Сураҡай ауылынан Сәһеръяр Муллабаев (1899—1977) хатҡа яҙып һалған. Быны ул үҙе бәләкәй саҡта, Ғәбделгәлим тигән бабаһынан отоп алған.— ТТӘИ ҡулъяҙмалар бүлеге, В. И. Әхмәҙиев, Алтынсы археографик экспедицияның ғилми отчеты, 1976, 120—121-се биттәр.

Бүтән варианттары:

1) «Башҡорт аймағы», 1925, № 1, 45—46-сы биттәр. Х. Ғәбитов яҙмаһы. Ҡасан, кемдән алыныуы әйтелмәгән. Ун һорауға ун яуап, беренсе, икенсе яуаптарҙа дини ҡараш сағыла.

2) «Башҡорт аймағы», 1927, № 4, 45—46-сы биттәр. Ғ. Вилданов яҙмаһы. Биш һорауға биш яуап. Башҡортостандың хәҙерге Әбйәлил районы Ҡаҙмаш ауылында яҙып алынған. Икенсе һорауға яуап әһәмиәтле: *Илһеҙ үҫкән ир яман.*

3) Баймаҡ районы Баймырҙа ауылы уҡытыусыһы К. Улъябаев яҙмаһы (1940 й.). — Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 5—6-сы биттәр. Х. Ғәбитов яҙмаһына тап килә.

4) 1960 йылда Бөрйән районы Шүлгән ауылында Хәбибулла Байегетовтан (1913 йылғы) Н. Шоңҡаров яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 23/7, 80-се бит. Вариант ете һорауға ете яуаптан тороп, башлыса Х. Ғәбитов вариантына тап килә.

**Һары балды кем эсер?** М. Буранғоловтың «Фольклор ижадсылары» тигән йыйынтығынан.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/445, 115-се бит.

**Һары бал.** Ике варианты бирелә: беренсеһе — БХИ, I, 1954, 70-се бит; икенсеһе — Ғ. Вилданов яҙмаһы.— «Башҡорт аймағы», 1927, № 5, 46—47-се биттәр.

Ҡалған варианттары:

1) Х. Ғәбитов яҙмаһы, туғыҙ юллыҡ бер строфанан тора.— «Башҡорт аймағы», 1925, 1-се һан, 45-се бит.

2) 1960 йылда Бөрйән районы Шүлгән ауылында Хәбибулла Ғәтиәтулла улы Байегетовтан Н. Шоңҡаров яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 23/7, 80-се бит.

137 Х. Ғәбитов баҫмаһында:

Теле һутлы — шул эсер,
Күҙе утлы — шул эсер;
Барын әйт тә берен әйт:
БыҒау бороз ҡайраған,
Уһаҡлы ағас һайлаған,
Битендә биҙәл яйнаған
Ир-аҙамат — шул эсер.

Н. Шоңҡаров яҙмаһында:

Теле һотло,
Йөҙө яҡты — шул эсер;
— Имән ағас һайлаған,
Бағау, бөрөз ҡайраған — шул эсер.

138 Был строфа Ғәбитов менән Шоңҡаров яҙып алған текстарҙа юҡ.

139 Строфа башҡа варианттарҙа юҡ.

## ТЫУҒАН ИЛ ТУРАҺЫНДАҒЫ ҠОБАЙЫРҘАР.

**Ете ырыу.** 1920 йылда Ғәбит ҡурайсынан М. Буранғолов «Семьрод — ете ырыу» исемендә яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/219, 17—21-се биттәр; «Башҡорт халыҡ йырҙарының тарихе (легендалар)» М.Буранғолов тарафынан әҙерләнгән, ләкин баҫтырып сығарылмай ҡалған йыйынтыҡтың типография наборы, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының ғилми китапханаһы, инв. № 2512, 12—16-сы биттәр.

Ҡобайырҙың легенда өлөшөндә (унда тарих дөрөҫ сағыла, тип булмай) ялан башҡорттары менән тау башҡорттары араһында үҙенсәлекле бәхәс бара, ырыуҙарҙы берләштереү идеяһы үткәрелә. Шуныһы характерле, башҡорттар әле бер ил булып берләшмәгән, һәр ырыу тик үҙ йортон (үҙ тобәген) хуп күргән заманда, һәр ике яҡтың йырсылары Уралға ҡарата үҙ йырҙарын йырлайҙар (улары йырҙар томына индерелде), сәсәндәре ҡобайырҙар әйтәләр. Уларҙа ҡараштар айырымлығы, халыҡ ижадында һуңынан тыуған ил төшөнсәһен кәүҙәләндергән Урал тауға ҡарата мөнәсәбәттең әле бер булмауы сағыла.

140 *Тарауыл аҡланы* — Бөрйән районында шул исемдә аҡлан бар.

141 Көньяҡ Уралда урта быуаттарҙа башҡорттарҙын Ете ырыу берекмәһе йәшәгәнлеге билдәле. Бында шул берекмә төҙөлгәнгә саҡлы әре биш ырыуҙың (бөрйән, тамъян, тәңгәүер, үҫәргән, ҡыпсаҡ) үҙ-ара тартҡылашып йәшәүҙәре телгә алына.

142 *Йөнө менән өй теккән* — строфала һүҙ һарыҡ тураһында бара.

143 *Заятүләк менән Һыуһылыу* — шул исемдәге эпос геройҙары.

144 *Аслы (Асылы) күл* — Башҡортостандың Дәүләкән районындағы күл. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында һүрәтләнеүенсә, «сысҡан һыртлы ҡола мал» (ат) шул күлдән сыҡҡан, имеш.

**Ай Уралым, Уралым.** Ҡасан, кемдән яҙып алыныуы билдәле түгел. Бер нисә тапҡыр төрлө йыйынтыҡтарҙа, мәктәп хрестоматияларында баҫылған.— «Башҡорт поэзияһы», антология, Өфө, 1953; яңы баҫмаһы — Өфө, 1971; БХИ, I, 1954 һ. б.

Икенсе бер вариантын 30-сы йылдарҙа Ғәйнан Әмири яҙып алған. Әммә вариант 9 юллыҡ бер строфанан ғына тора:

Әй Уралтау, Уралтау,
Һарналары йөрәктәй,

Көшөләре беләктәй.
Айпан-айпан атлаған
Айыу һөйгән Уралтау.
Бүлә-бүлә югергән
Бүре йөрөгән Уралтау.
Ҡупшы ҡыҙҙай биҙәнгән
Толкоһо күп Уралтау.

(Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 16-сы бит.)

**Иҙел ер.** 1979 йылда Бөрйән районы Һарағы (Килдегол) ауылында Көмөшева Ғәйшә Фәйзулла ҡыҙынан (1908 йылғы) Ғайса Хөсәйенов яҙып алған.— ТТӘИ ҡулъяҙмалар бүлеге, Ғ. Б. Хөсәйенов. Ун беренсе археографик экспедиция, 1979, 102—103-сө биттәр.

**Урал тигән илем бар.**— БХИ, I, 1954, 58-се бит.

**Уралып ятҡан Уралда.**— БХИ, I, 1954, 66-сы бит.

**Ай Уралтау, Уралтау.** Башҡортостандың Баймаҡ районы Иҙрис ауылында Ғәбит ҡурайсынан 1907 йылда М. Буранголов яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/226, 39—41-се һәм 48—50-се биттәр.

[145] *БыҒаса уңмаҫ яуҙарҙы...* XVII һәм XVIII быуаттарҙа милли һәм социаль иҙелеүгә ҡаршы башҡорттарҙың күп тапҡырҙар баш күтәреүе һәм һәр күтәрелештең аяуһыҙ баҫтырылыуы күҙ уңында тотола.

[146] *Ҡуңыр буға юлы* — «Ҡуңыр буға» хикәйәтендә Ҡуңыр буғаның Урал һырты буйлап тыуған иленә ҡасып ҡайтҡан юлы.

**Ил тигәндең кеме юҡ.**— БХИ, I, 1954, 58—59-сы биттәр.

## ДИДАКТИК ҠОБАЙЫРҘАР (ӘЙТЕМДӘР)

Был бүлектәге әҫәрҙәр, ғәҙәттә, һәр береһе айырым рәүештә йә бер писәһе бер традицион инеш һүҙ аҫтында бергә туплапып, исемһеҙ яҙып алынған. Уларҙы хронологик яҡтан да, тематик яҡтан да төркөмләү ифрат ауыр. Шуға күрә бында башта традицион инеш һүҙ аҫтында бер башҡарыусы ауыҙынан яҙып алынған әйтемдәр, аҙаҡ айырым рәүештә яҙып алынған әйтемдәр ябай бер теҙмә рәүешендә урынлаштырылды. Һәр осраҡта исем йокмәткенән сығып йә тәүге юлынан алып аталды. Башҡарыусы сәсәндәрҙең дидактик репертуар үҙенсәлектәрен өйрәнеүҙә мөһимлеген күҙ уңында тотоп, ҡабатланған строфалар, поэтик юлдар тексттың үҙендә һаҡлапды йәки айырым осраҡтарҙа аңлатмалар бүлегенә күсерелде.

**Ишет бына ҡартыңдан** — БХИ, I, 1954, 55-се бит. Үҙаллы әҫәр булыуҙан бигерәк, ғәҙәттә, ҙурыраҡ темалы ҡобайырҙарға «инеш һүҙ» (бағышлау) вазифаһында йөрөгән әйтем.

**Бейек тауҙың үлгәне...**— БХИ, I, 1954, 59—60-сы биттәр; «Башҡорт поэзияһы», антология, Өфө, 1953, яңы баҫмаһы —1971. Шулай уҡ урта мәктәп осоп әҙәбиәт хрестоматияларында баҫылған. Ҡулъяҙмаһы һаҡланмаған. Беренсе, икенсе һәм дүртенсе строфалары бындағыса инеш һүҙ менән «Ҡурғаусылыҡ» исемендә яҙып алынған әйтемдәр составында (Ғилми архив, ф. 3, оп.12/301, 1—6-сы биттәр) осрай. Шуға таянып, был китапта шул инеш һүҙ менән бергә традицияға ярашлы табылды.

[147] Ике юл 301-се сығанаҡтағы текст буйынса. Юғарыла һаналған баҫмаларҙа «Ҡоҙа-ҡоҙа булам тип» тигән бер юлдан тора.

[148] Строфаның һуңғы юлы — шулай уҡ 301-се сығанаҡтан. Теге баҫмаларҙа: «Һылыуыңды яуыз зат алыр». Уның ҡарауы, 301-се сығанаҡта ҡыҙҙың (йәрҙең, һылыуҙың) матурлығын тасуирлаған традицион эпитеттәр юҡ.

**Ил ҡәҙере — ир ҡәҙере.** «Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре», Өфө, 1960, 254—255-се биттәр. Йөкмәткеһенә таяныш, яңы исем бирелде.

**Был донъяла тиңлек юҡ.** Ҡасан, кемдән яҙып алыныуы билдәле түгел. «Байлыҡ, фәҡирлек тураһында» тигән тематик исем менән латинсә машинкала баҫылған бер нөсхәһе.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 15—18-се биттәр. Беренсе (инеш) строфаһы алмаштырылып, икенсе, дүртенсе һәм бишенсе стро-

фалары «Әйт, тиһәгеҙ, әйтәйем» тигән исем менән, һигеҙенсе строфаһы «Байҙың күрке» тигән исем менән айырып алынып, «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығының 1954 йылғы 1-се томында баҫылған. Бында архивта һаҡланған текст тулы көйгә баҫыла, исеме йөкмәткене йомғаҡлаусы һуңғы юлдарынан алынды.

[149] Строфаның һуңғы биш юлы 1954 йылғы баҫмала 13 юлға һуҙылып, башҡа мәғәнә алған:

Ҡолонсаҡтай бай балаһы
Ярлы булмаҫ тимәгеҙ;
Ҡара ҡаҙандан һыу эскән —
Ул аш еймәҫ тимәгеҙ;
Ат күрмәгән ат күрһә,
Сабып үлтерер тимәгеҙ;
Тун киймәгән тун кейһә,
Ҡағып бөтөрөр тимәгеҙ.
Ярлы ла ярлы тимәгеҙ,
Ярлы хаҡын йыймағыҙ.
Ярлы хаҡын йыйһағыҙ,
Яҡты донъя йөҙөндә
Тыныс торам тимәгеҙ.

Шиғри төҙөклөгө һәм мәғәнә аныҡлығы менән быны уҙаллы әйтем тип ҡарарға нигеҙ бар.

[150] *Рәхәт көндәр булмаҫмы тип, ...баҫып йөрөр ҡайғыһын* — дүрт юл 1954 йылғы томдан (БХИ, I, 67-се бит) алынды. Төп сығанаҡта халыҡ ижадына бөтөнләй ят мәғәнәле ике юлдан тора:

...Ярлы нисек байыһын?
Яҡшы менән яманды
Ул кеше нисек тапыһын?

**Йырау һүҙе.** Х. Ғәбитов тарафынан яҙып алынған һәм уның «Халыҡ поэзияһы тураһында» мәҡәләһендә исемһеҙ килтерелгән.— «Башҡорт аймағы», 1925, № 1, 36—41-се биттәр.

Күпселек әйтемдәр ғилми архивта «Үгет урынында» тигән әйтемдәр составында ҡабатлана — ф. 3, оп. 12/301, 10—12-се биттәр.

Икенсе бер варианты М. Ғафури исемендәге Тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты сотруднигы Сәлим Дауытов тарафынан 1940 йылда Баймаҡ районы Баймырҙа ауылы уҡытыусыһы Ҡотлоюл Улъябаевтан яҙып алынған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 9—12-се биттәр. Вариант, асылда, Х. Ғәбитов яҙмаһына тура килә, әммә төшөп ҡалған йә урындары буталған юлдары байтаҡ. Шуға күрә Улъябаев: «Был ҡобайыр күп булырға тейеш, ләкин хәтеремдән сыҡҡан, яттан әйтеп еткерә алмайым»,— тип иҫкәртергә мәжбүр булған.

[151] Был әйтем, ҡыҫҡартылып, «Башҡорт халыҡ ижады» йыйынтығының 1954 йылғы I-се томында «Үҙән күрке тал булыр...» исемендә баҫылған.

[152] *Бер йылмағай* — 301-се сығанаҡта һәм 1954 йылғы томда *ял-ялангас*.

[153] Әйтемдең был ос юлы К. Улъябаев башҡарыуында «Әҙәмде әҙәм итеп ҡотайтҡан дүрт аяҡлы мал булыр» тип үҙенсәлекле төҫ алған.

[154] Был дүрт юл 1954 йылғы томда ике генә юлдан тора:

Батыр ҙа күрке дан булыр,
Дан булыр, ау, дан булыр.

301-се сығанаҡта тәүге ике юлы бындағыса. Һуңғы икеһе:

Байман* тапҡан ирҙәрҙең
Ултырғаны таҡ* булыр.

[155] 301-се сығанаҡта көнкүреш философияһына тартым тамамлана:

Хан тәхеттән төшкән һуң,
Менгәне яйҙаҡ ат булыр,
Өҫтөнән күп хат булыр,
Бөтөн йортҡа ят булыр,
Ят булыр, ау, ят булыр.

1954 йылгы томда тамамланыш социаль яктан анықланған:

Ир-егеттең эсендә
Юғәнләгән ат булыр;
Сәсән дә булған егеттең
Күкрәгендә хат булыр;
Бейҙең билен быуған ир
Үҙ илендә ят булыр,
Ят булыр, ау, ят булыр.

[156] Был әйтемдең һуңғы һигеҙ юлы 301-се сығанакта түбәндәгесә яҙып алынған:

Батырҙа ғәйрәт бөткән һуң,
Яуға һөңгө һуҙалмаç.
Елберҙәге булмаһа,
Балыҡ үргә йөҙалмаç:
Ҡулда ғәйрәт булмаһа,
Батыр ҙа яуға сабалмаç.

[157] Әйтемдең быныһы 301-се сығанактағы вариантта юҡ. Һуңғы алты юлы 1954 йылгы томда (БХИ, I) «Яман яҡшы булалмаç» исемле әйтемдәр төркөмөнә индерелгән.

[158] Әйтемдең быныһы 301-се сығанакта «Кәңәш урынында» тигән әйтемдәр составында ҡабатлана. 1954 йылгы томда (БХИ, I) «Берәү ҙә берәгәй...» исемендә баçылған. Ғәбитов яҙмаһында тәүге дүрт юлы юҡ, 301-се сығанактан алып өçтәлде.

Уның ҡарыуы 301-се сығанактағы вариантта строфаның икенсе өлөшө юҡ,

«Атапап алтау тыуғансы
Берәү ҙә берәгәй тыуһа ине,
Ил ағаһы булһа ине,
Ил башында торһа ине,
Иле уға иркәләп,
Байман* табып торһа ине»,—

тип тамамланған.

[159] Артабан —быныһына бәйләнмәгән, «Алты ла айҙы йәй иткән, алты ла айҙы ҡыш иткән» юлдары менән дини йөкмәткеле әйтем. «Алланың ҡөҙрәте шундайҙыр» тигән тулыраҡ вариантта ҡабатлана.

[160] Әйтемдең икенсе варианты 301-се сығапактағы «Үгет урынында» тигән әйтемдәр составында осрай. Ләкин унда йөкмәткә һәм форма төҙөклөгө етешмәй.

[161] Строфа бер репертуарҙа башҡарылған әйтемдәрҙе тамамлау, йомғаҡлап ҡуйыу ролендә йөрөй. 301-се сығанактағы «Үгет урынында» тигән әйтемдәр ҙә тап бындағыса ослана. Мәсғүт Хәйбуллиндән яҙып алынған репертуар башҡасараҡ осланыуы менән иғтибарға лайыҡ. Унда:

Арыны әйт, бирене әйт,
Арыны әйт, бирене әйт.
Гүр ҡараңғы булғанда,
Гүр сырағы иманды әйт;
Атан* тапкан дөйәне әйт;
Арғымаҡ тапкан бейәне әйт;
Батыр тапкан инәне әйт;
Хәтимдәттәй йомартты әйт;
Ерәнсәләй сәсәнде әйт...

(Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 34-се бит).

**Уҙамандар, ағалар!** Х. Ғәбитов яҙып алған. «Халыҡ поэзияһы тураһында» тигән мәҡәләһендә килтергән: «Башҡорт аймағы», 1925, 1-се һан, 41—43-сө биттәр.

[162] Строфа традицион инеш һүҙ урынында ғына килмәгән, үҙенә башҡа этик мәғәнәһе лә бар. Төрлө вариацияларҙа осрай:

Әй, аҙамат, ололар,
Уҙамандар, ағалар,
Камил тыуған даналар!
Ҡолаҡлыға һүҙ әйтһәң,—
Ҡолағының эсенән;
Ҡолаҡһыҙға һүҙ әйтһәң,—
Ҡолағының тышынан.
Дөрөҫ һүҙҙең яты юҡ,
Аҫыл һүҙҙең аты юҡ.

(Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 10-сы бит)

К. Улъябаев башҡарыуында:

Аҙаматтар, суралар *,
Аҫыл да тыуған мырҙалар,
Кәңәшеңде ары һал,
Ҡолағыңды бире һал.
Ҡолаҡлыға һүҙ әйтһән,—
Ҡолағының эсенән;
Ҡолаҡһыҙға һүҙ әйтһәң,—
Ҡолағының тышынан;
Әйтеп-әйтмәй ни файҙа,—
Ҡолағын мамыҡ менән тыҡҡанғау!..

(Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 13-сө бит)

163 *Туп* — был урында йыйылған халыҡ мәғәнәһендә.

164 *Ҡош тешләгән* — ауыҙы менән ҡош тотҡан, йәғни бик уңған тигән мәғәнәлә.

**Тогро һүҙ.** Юғарыла телгә алынған «Кәңәш урынында» тигән әйтемдәр төркөмө.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 19—20-се биттәр.

165 Был әйтем «Маҡтаныу» исемендә баҫылған.— БХИ, I, 1954, 68-се бит. Бынан тыш өс варианты билдәле:

Береһе Ғ. Вилдановтың юғарыла күрһәтелгән мәҡәләһендә «5-се ҡобайыр» составында килтерелгән («Башҡорт аймағы», 1927, 4-се һан, 43-сө бит). Айырмаһы:

1) Яҡшы кеше тураһындағы һуңғы юлдар юҡ;

2) Яман кешенең маҡтаныуы тураһындағы юлдар ҙа юҡ, уның урынына, мәғәнәһе бик үк асыҡ булмаған рәүештә, түбәндәгесә әйтелгән:

Берәүҙең яңғыҙ улы,
Ишектән инеп килгән саҡта,
Һин яманның ғәйебен таптым, тир,
Һин яманның ғәйебен таптым, тир;
Тундан яман яптым, тир,
Тундан яман яптым, тир,
Гемһәләй, гемһәләй,
Һәллеүүәләйт!..

Икенсеһе 30-сы йылдарҙа Баймаҡ районы Таһир ауылында 63 йәшлек Мәғсүм Әптрәзаҡ улы Хәйбуллиндән һәм 1973 йылда уның улы Барый Хәйбуллиндән «Старшина Мәсәғүт» ҡобайыры һәм башҡа әйтемдәр менән бергә яҙып алынған. Вариант, асылда, Ғ. Вилдановтыҡына тура килә. Һуңғы юлдарына асыҡлыҡ индерә:

Берәүҙең яман улы маҡтанһа,
Берәүҙе инеп килгәндә
Битенән эттәй ҡаптым, тир,
Һин яманның ғәйебен
Әллеүәләй таптым, тир,
Әллеүәләй таптым, тир,
Тундан да былай яптым, тир,
Кемһәләй һәллеүәләй.

(Барый Хәйбуллин башҡарыуында магнитофон таҫмаһына яҙылған текст.— Институттың музыка фонды; Мәғсүм Хәйбуллин тексы.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 33-сө бит.)

Өсөнсөһө К. Ульябаевтың 1940 йыл тапшырған яҙмаһында урын алған.

[166] Бынан һуң, күрәһең, шул уҡ башҡарыусынан «Буранғол ҡапҡа» тигән ҡобайыр, «Йырау һүҙе» составындағы «Яҡшы аға ил котһә» тип башланған әйтем һәм «Бер тигәс тә ни яман?» тигән әйтеш яҙып алынған.

**Яҡшы аҙамат менән кире аҙамат.** Башҡортостандың Йомағужа (хәҙерге Күгәрсен) районы Йомағужа ауылының һәүәҫкәр фольклорсыһы Әхмәт Һибәт улы Исламғолов 1929 йылда Бөрйән районы Алаҡуян тамағы (Иҫке Собханғол) ауылында Хәсән ҡарттан «Һары балды кем эсер?» әйтеше менән бергә яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 38—41-се биттәр. Әйтемдәрҙең беренсеһе «Яҡшы аҙамат менән кире аҙамат» исемендә баҫылған.— БХИ, I, 1954, 69-сы бит.

[167] Әйтемдең был дүрт юлы айырым рәүештә XIX быуат аҙаҡтарында М. Өмөтбаев тарафынан да яҙып алынған. Уның яҙмаһында шулай:

> Яҡшы аға йорт котсә, йорт кирәген үтепер,
> Яман аға йорт котсә, ерен сатыб бетерер.
> Гәүерләр *ерещне алса, агачыңны тобләб йығыб бетерер,
> Агач кискән ирәнләр сары балны кайдан алыб эчәрләр әй!

(М. Өмөтбаев. Ядкәр. Казан, 1897, 84-се бит).

[168] Һуңғы ике юл 1954 йылғы томға (БХИ, I) индерелмәгән.

[169] *Ил йөҙөнә* —1954 йылғы томдан. Төп сығанаҡта — туптың йөҙөнә.

[170] Һуңғы ике юлы — шулай уҡ 1954 йылғы баҫманан (БХИ, I). Төп сығанаҡта:

> Туп төкөрһә ғәрләнеп,
> Туптың төкөрөгө күл булыр һәләй.

[171] Элекке замандарҙа мал-тыуарҙың ишәйеүен теләп, «ҡот» өсөн аҙбар бағанаһына йәки, ғөмүмән, ихата кәртәһенә йылҡы башының һөйәген элеп ҡуйыр булғандар. Бында ана шул боронғо ышаныу сағыла.

**Яҡшы әҙәм менән яман әҙәм.** «Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре», Өфө, 1960, 257—258-се биттәр.

**Батыр егеттәргә атай-олатайҙар һүҙе.** 1950 йылда Вәлиулла сәсән Ҡоломбәтов (1881—1964, Ғафури районы Яҡты күл ауылы) яҙып алып тапшырған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/261, 20, 22-се биттәр.

**Арғымаҡтың яҡшыһы.** 1979 йылда Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылында яҙып алынған.— ТТӘИ ҡулъяҙмалар бүлеге. Ғ. Б. Хөсәйенов. Ун беренсе археографик экспедиция, 1979, 205-се бит.

**Яман яҡшы буталмаҫ.**— БХИ, I, 1954, 60—61-се биттәр.

**Ир даны—ил даны. Был донъянан кем ҡалыр? Ҡараса тыумай көҙ булмаҫ...**— «Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре». 254, 255, 259-сы биттәр.

**Йырсы ла булған йырсының...** М. Буранғолов тарафынан яҙып алынып, «Батырша» поэмаһына индерелгән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/226, 91-се бит.

**Тыуған-үҫкән ерҙәр буҙ булыр... Ҡыштырҙаҡ япраҡ һары уҫаҡ..., Арғымаҡ арыҡ булды тип...**—1970 йылда Силәбе өлкәһе Миәс ҡалаһында Хәҙисә Оморҙаҡ ҡыҙы Ҡусабаеванан Әхнәф Харисов яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 63/13, 18—22-се биттәр; «Ағиҙел», 1971, № 4, 121-се бит.

**Ял-ҡойроғо матур тип..., Атың йөрөшлө булһа..., Нимәнән нимә артыҡ?**— «Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре», Өфө, 1960, 256—257-се биттәр.

**Ни менән нимә була? Мал ни өсөн кәрәк?** 1961 йылда Куйбышев өлкәһе Таллы ауылында Ғатаулла Заһидуллиндән Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/6, 254, 256-сы биттәр.

**Кем ҡәҙерен кем белә?** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Егәнлек ауылында 80 йәшлек Байназар Күсәевтән Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 325-се бит.

**Яңғыҙ әҙәм ғәрип булыр...** «Бер әйтем» тигән дөйөм исем менән 1961 йылда Куйбышев өлкәһе Дицгеҙбай ауылында Йомағужа Айтугановтан (йәше әйтелмәгән) Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/6, 253-сө бит.

**Ҡурҡаҡ ирҙән ни сығыр?** — БХИ, I, 1954, 70-се бит.

**Һөнәрле менән һөнәрһеҙ.** 20-се йылдарҙа Ғ. Вилданов «Тамъян кантоны Тунғатар йорто башҡортонан» (исеме әйтелмәгән) яҙып алған һәм «Ҡобайырҙар башҡортса» тигән мәҡәләһендә 4-се ҡобайыр итеп килтергән.— «Башҡорт аймағы», 1927, 4-се һан, 42—43-сө биттәр.

**Үлгән менән бөлгән.** — БХИ, I, 1954, 69-сы бит.

Йәнә ике баҫма тексы билдәле: М. Өмөтбаев. «Ядкәр», Казан, 1897— «Борынгы башкортларның өләңләре» тигән дөйөм баш аҫтында башҡа ҡобайыр өҙөктәре менән бергә баҫылған; Фазыл Туйкин. «Нардуған», Өфө, 1915.

[172] Бынан һуң Өмөтбаев яҙмаһында «үҙе белеб үҙе киткән сығыр солтан» тигән юл бар.

[173] Бынан һуң Өмөтбаев яҙмаһында:

Күк үләндәү ернең сутылыр, ҡыуырса утҡа етөлер.

Туйкин яҙмаһында:

Күк үләндә ернең соте мул
Ҡыуырсаң утҡа өтелер.

[174] Өмөтбаев менән Туйкин яҙмаларында бынан һуң индивидуалистик ҡараштарҙы сағылдырған юл бар:

Күп белән эшең тошмәсен, күп эшеңне чүкерер.

[175] Өмөтбаев менән Туйкин яҙмаларында был дүрт юл юҡ.

[176] Әйтем Өмөтбаевта: «Һөнәрсез сине күрә алмас, үзе мәгәнә бирә алмас»,— тип, Туйкиндә:

«Һөнәрсез сине күрә алмас,
Илдән-илгә елеп үк үтсәң дә,
Бу донъялар сиңа да ҡалмас.
И . . . . . . . . . .» — тип тамамлана.

**Бур байыҡмаҫ...** — БХИ, I, 1954, 61-се бит.

**Яманлыҡҡа бармағыҙ!** Х. Ғәбитов тарафынан яҙып алынып, уның «Халыҡ поэзияһы тураһында» тигән мәҡәләһендә килтерелгән.— «Башҡорт аймағы», 1925, 1-се һан, 32-се бит.

Варианты М. Буранғолов тарафынан яҙып алынып, «Батырша» исемле поэмаға индерелгән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/226, 92-се бит.

[177] *Ауаҙалы* — М. Буранғолов вариантында *моңло.*

[178] Был ике юлда башҡорттарҙың боронғо көнкүреш мөнәсәбәте сағыла: малсылыҡ менән көн иткән халыҡ өсөн ҡыштың аҙ ҡарлы булыуы — уңышлы, сөнки мал тибенлектә йөрөй; яҙҙың ҡарлы-боҙлауыҡлы булыуы — уңышһыҙ, сөнки ҡыш буйы тибенлектә йөрөп ябыҡҡан мал быны күтәрә алмай, ҡырыла.

[179] Бынан һуң М. Буранғолов яҙмаһында ике юл бар:

Яуызға ҡарай бар һүҙем,
Яуыздың асыр бар эшен.

[180] Был ике юл Буранғолов яҙмаһында дүрт юлдан тора:

Өҫтө-башы бәҫле, тип
Яуызға яҡын бармағыҙ:
Коләс, сөсө телле, тип
Эйәреп боҙоҡ ҡылмағыҙ.

[181] М. Буранғолов яҙмаһында һуңғы ике юлы юҡ.

Әйтем үҙаллы дидактик йөкмәткегә эйә булыу өҫтөнә башҡа ҡобайырҙарға инеш һүҙ вазифаһында ла килергә мөмкин. 1940 йыл К. Улъябаев яҙып тапшырған материалдарҙа ул тап шул ролдә алынған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 2-се бит. Был саҡта һуңғы ике юл «ололарҙан (боронғоларҙан) ҡалған һүҙҙе тыңлағыҙ» тигәнде аңлата.

**Әсә йөрәге.** 1962 йылда Башҡортостандың Әлшәй районы Ташлы ауылында үҙенең әсәһе Батталова Нәсихәнән (1913 йылда тыуған) Ниғмәт Шоңҡаров яҙып алған һәм 1969 йылда «Башҡортостан ҡыҙы» журналының 3-сө һанында баҫтырып сығарған. Нәсиха апай был ҡобайырҙы үҙенең әсәһе Хафаза Батталованан (1880—1934) 1920 йылдарҙа отоп алған.

**Яҡшы ҡатын менән яман ҡатын.** Ике вариантта баҫыла. Беренсеһе Хәбибулла Ғәбитов тарафынан яҙып алынған һәм уның «Халыҡ поэзияһы тураһында» тигән мәҡәләһендә килтерелгән. — «Башҡорт аймағы», 1925, 1-се һан, 43—44-се биттәр. Исеме йөкмәткеһенән сығып аталды.

Икенсеһе 1920 йылдарҙа Ғ. Вилданов тарафынан яҙып алынып, 1927 йыл «Башҡорт аймағы»ның 4-се һанында баҫылған «Ҡобайырҙар башҡортса» тигән мәҡәләһендә «8-се ҡобайыр» тип килтерелгән.

**Һә-лә-ләй...** Шишмә районы Әлбәй ауылында 84 йәшлек Сәфәрғәли бабайҙан студенттәр яҙып алған.— БДУ БӘК фф. 46, т. 5, 20—21-се биттәр. Асылда, был — «Яҡшы ҡатын менән яман ҡатын» тураһындағы әйтемдең йәнә бер варианты.

**Биҙәрләнгән бай сәсәк...** Хәбибулла Ғәбитов тарафынан яҙып алынған һәм «Халыҡ поэзияһы тураһында» тигән мәҡәләһендә килтерелгән.— «Башҡорт аймағы», 1925, 1-се һан, 44-се бит.

Йәнә өс варианты билдәле:

Береһе Ғ. Вилдановтың юғарыла әйтелгән мәҡәләһендә «Тамъян-Ҡатай Тамъян-Тангауыр йорто» Әбулғази ауылында яҙып алынған «5-се ҡобайыр» составында башҡа әйтемдәр менән бергә килтерелгән («Башҡорт аймағы», 1927, 4-се һан, 44-се бит). Айырма юлдарҙың башҡаса сиратлашыуында һәм ҡайһы бер исемдәргә икенсе төрлө эпитеттәр тағылыуында ғына.

Икенсеһе 30 йылдарҙа Баймаҡ районы Таһир ауылы Мәғсүм Хәйбуллиндән яҙып алынған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 34-се бит. Аҙаҡ, 1973 йылда, М. Хәйбуллин улы Барый Хәйбуллиндән (1919 йыл тыуған) музыка белгесе Ф. Камаев яҙып алған. Томдағы варианттан айырмаһы ҡайһы бер һүҙҙәрҙә генә.

Өсөнсөһө 1940 йылдың 5 февралендә К. Улъябаев тапшырған әйтемдәр составында килтерелгән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 4-се бит. Вариант Ғәбитов яҙмаһынан айырылмай.

**Заманға заман уралған...** «Үгет урынында» тигән әйтемдәр составында («Йырау һүҙе»нә ҡарата иҫкәрмәләрҙе ҡарағыҙ) һуңғыһы итеп килтерелгән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 12-се бит. Беренсе юлы исем итеп алынған.— БХИ, I, 1954, 64-се бит.

[182] *Алалғандың йөҙө ағарған.* Һүҙ бында берәүҙең бәхетен икенселәр алыуы тураһында ғына түгел, ә, ғөмүмән, синфи йәмғиәттә бәхет таба алыу-алмау хаҡында, бәхет тип һаналған нәмәнең дә ваҡытлы булыуы хаҡында бара.

[183] *Ҡалғандың* — «алалмай ҡалғандың» тип аңларға кәрәк. 1954 йылғы баҫмала «алмағандың» тип үҙгәртелгән.

[184] Йомғаҡлаусы строфа — 1954 йылғы (БХИ, I) томдан. Төп сығанаҡтағы тамамланышы «Йырау һүҙе»ндәге осланышҡа тура килә (161-се иҫкәрмәне ҡарағыҙ).

**Алланың ҡөҙрәте шундайҙыр...** 30 йылдар башында Баймаҡ районы Таһир ауылында М. Хәйбуллиндән (ғилми архив, ф. 3, оп. 12/301, 33—34-се биттәр), икенсе тапҡыр 1973 йылда уның улы Барыйҙан Ф. Камаев яҙып алған.

**Мулла тураһында.** 1961 йылда Куйбышев өлкәһе Моратша ауылында Жанбаев Хәлиулланан (1904 йылғы) Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/6, 255-се бит.

**Бай менән ярлы.**— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/218— М. Буранғолов. Башҡорттарҙың иҫке йола һәм йырҙары тарихенән. I киҫәк, 1938, 5—7-се биттәр.

**Ир-егеттең ғүмере.** Халыҡ аңында быуаттар буйы күҙәтеүҙәрҙең поэтик йомғағы рәүешендә, кеше (башлыса ир кешенең) ғүмере, йәш үҙенсәлектәре хаҡында махсус ҡобайыр-әйтемдәр тыуған, байтағы беҙҙең көндәргәсә килеп еткән. Уларҙа үҙ заманының этик һәм әхлаҡи нормалары менән бергә социаль мотивтәр ҙә, ир-егеттең йәшенә ҡарата эстетик мөнәсәбәт тә асыҡ сағылған. Кеше ғүмере тураһында уйланыу тора-бара традицион темаға әйләнеп, уға XIX—XX быуат сәсәндәре лә бик ҡыҙыҡлы оригиналь әҫәрҙәр оҫтәгәндәр. Мәҫәлән, Шафиҡ Әминевтең (1858—1936) «Кеше ғүмере» тигән шиғырҙар циклы (Сабыйлыҡ ваҡыты, Егетлек хәле, Утыҙ йәшлек хәле, Ҡырҡ йәшлек хәле, Илле йәшлек хәле).— «Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре»,

Н. Т. Зарипов менән Ғ. Б. Хөсәйенов редакцияһында, Өфө, 1979, 32—37-се биттәр; Ғатаулла Ғәлиевтең (1879—1939) «Сабыйлык хәле», «Йәшлек хәле», «Картлык хәле» тигән шиғырҙары.— Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ҡулъяҙмалар бүлеге, 1-А30, 88—95-се биттәр.

Был китапта халыҡ теленән яҙып алынған варианттар ғына бирелде. Улар дөйөм баш аҫтында рим цифрҙары менән айырылды.

I вариант 20-се йылдарҙа Ғ. Вилданов тарафынан Тамъян-Танғауыр йорто Ҡаҙмаш һәм Әбделғази ауылдарында яҙып алынған (Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 23—24-се биттәр), «Ҡобайырҙар башҡортса» тигән мәҡәләһендә килтерелгән.— «Башҡорт аймағы», 1927, 4-се һан, 48—49-сы биттәр. Әҫәрҙең исеме юҡ, башына «Ҡобайыр (йәки бәйет)» тип ҡуйылған. Һәр строфа рим цифрҙары менән айырылып, әҫәргә ҡарата яҙып алыусы тарафынан шундай иҫкәртеү яһалған:

«Был ҡобайыр ғади ҡобайырҙар үлсәүенән башҡаса, ләкин халыҡ ауыҙынан ҡобайыр тип һөйләнде. Был ҡобайырҙы 130 йыл элек Ҡаҙмаш ауылы Дәүләкән тигән башҡорт ҡарты сығарған. Ул, үҙе шагир булып, уҡый-яҙа белмәгән. Бының, беҙҙең фекерсә, әҙәби һәм ғилми яҡтан әһәмиәте бар. Ул башҡорт теле — яҙма әҙәбиәтенә үрнәк, башҡорттарҙың рухи хәленә дәлил була ала. Ғ. В.»

II вариантта Ғ. Вилданов тарафынан яҙып алынып, шул уҡ мәҡәләһендә килтерелгән.— «Башҡорт аймағы», 1927, 4-се һан, 50-се бит. Башында «Ҡобайыр» тигәндән һуң йәйәләр эсендә «йәки сәсән һүҙе» тип, ә йәйә тышында «Ерәнсә сәсән әйткән» тип ҡуйылған.

III вариантты Силәбе өлкәһе Верхне-Урал районы Аҡташ ауылында Теләүхан тигән кешенән Исмәғил Рәхмәтуллин күсереп алған. Әҫәр «Иргеттең ғүмере турында боронғоларҙан ҡалған ҡобайыр йыры» тип исемләнгән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 20-се бит.

IV вариантты шул уҡ И. Рәхмәтуллин Айтуған Бурапбай улының һөйләүе буйынса яҙып алган.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 21-се бит.

V вариантты И. Рәхмәтуллин Троицк ҡалаһында «Жанбай ҡаҙаҡтан» күсереп алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 12/302, 21-се биттең икенсе яғы.

VI вариантты «Әҙәмдең ғүмере» исеме менән 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Егәнлек ауылында 80 йәшлек Байназар Күсәйевтән Кирәй Мәргән, Байғужа ауылында 70 йәшлек Ғатаулла Муллаян улы Күсәйевтән Нигмәт Шоңҡаров яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 326, 327-се биттәр. Китапҡа К. Мәргән яҙмаһы алынды.

Шиғри тоҙолошо менән башҡаларҙан айырылған VII вариант «Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре» китабында баҫылған (Өфө, 1960, 258-259-сы биттәр).

VIII вариантты 1976 йылда Әлшәй районы Сураҡай ауылынан Сәһеръяр Муллабаев хатҡа яҙып ебәргән. Быны ул бәләкәй сағында Ғәбделғәлләм тигән бабаһынан отоп алған.— В. И. Әхмәҙиев. Алтынсы археографик экспедиция. 1976, 121—122-се биттәр.

IX вариантты 1970 йылда Баймаҡ районы Ғәҙелбай ауылында Әхмәтов Заһретдин Сөләймән улынан (1895—1971) Салауат Галин яҙып алған.— Стәрлетамаҡ педагогия институтының Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты, инв. № 20.

Быларҙан тыш өҙөк-йолҡо ғына һөйләнгән тағы ике вариант бар: 1) Бары етмеш йәштәге хәлде тупаҫыраҡ сағылдырған ете юллыҡ өҙөк. Китапта бирелгән II вариант менән бергә Ғ. Вилданов яҙып алған.— «Башҡорт аймағы», 1927, 4-се һан, 50-се бит;

2) Ҡырҡ, илле, алтмыш, етмеш, һикһән, туҡһан йәшкә ҡарата алты юллыҡ ҡына өҙөк. 1960 йылда Бөрйән районы Ҡотан ауылында Сәхипъямал Хәмзә ҡыҙы Байтимеровала Н. Шоңҡаров яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 23/7, 81-се бит.

[185] *Үтәнем сөн* — үтәгәнем (башҡарғаным) өсөн.

[186] *Кейҙем кейем* — хәрби кейем ҡүҙ уңында тотола.

[187] *Чыдыр* — текстың үҙендә «тышау» тип аңлатылған.

[188] *Телеңде алмас,* йәғни һүҙеңә ҡолаҡ һалмаҫ.

[189] *Ҙәм* — текстың үҙендә «адәм» тип аңлатылған.

**Әл-ҡисса Буҙйегет.** 1842 йылда Өфөлә яҙылған. Был хаҡта поэмаға шиғри инеш һүҙҙән һуң, ҡулъяҙманың 3-сө битендә, түбәндәгесә хәбәр ителә:

«Өфө шәһәренә барғанда Бус йекет китабыны бер ҡатар күруб идем. Фарсы теле берлә язылмыш иде. Йыры күб юҡ иде, сүзе моңлы ирде. Йекетнең аты Бус йекет иде, ҡызның аты Ҡарачәч ирде. Бус йекетнең дусының аты билкесез ирди. Бер кәмин * диб языб идек. Бу ғәләт * иде. Йәнә шәһәренең аты юҡ иде. Без Нәфсиай [1] диб языб ирдүк. Үземезнең күңлемез ҡайғылы көндә Бус йекет китабыны ҡайғымыз түкин бер хилүәт * ердә мең дә сикез йөз ҡырҡ иkенче йылында языб ирдүк. Уфа илендә Ғәбделғәлләм дикән йекетнең ханәсендә. Инде безнең бу йырлаб чыҡарған китабымыз һәр ергә йәйелебдүр. Әүүәле язғанда әл-ҡисса диб языб идек. Сүзүн языб-йырлаб идүк. Шәкертләремез Бус йекет китабына барча ан берлә язылса [2] дикән сәбәбле, барча сүзен ан берлә яздуҡ. Безнең моңлуғ адәмләрнең күңле ачулсын диб. Китабны ан берлә язмаҡға рүхсәт бардур...

Арасында ғибрәт сүзин яздуҡ».

Ҡулъяҙма Ленинградта, СССР Фәндәр академияһының Көнсығышты өйрәнеү институтының ҡулъяҙмалар бүлегендә һаҡлана; шифры — А 1547. Фото күсермәһе.— Ғилми архив, ф. 7, оп. 1/8.

Көнсығышты өйрәнеү институтында был ҡулъяҙманың ҡайҙан, нисек табылыуы хаҡында мәғлүмәттәр юҡ. Шуныһы ғына билдәле: ул Азия музейендә иҫәпкә алынмай ятҡан материалдар араһынан араланып, 1939 йылда ғына инвентаризацияға индерелгән (инв. 1939, 2894). Бүлек мөдире М. П. Волкованың әйтеүенә ҡарағанда, ҡулъяҙма революциянан һуң (әммә 1930 йылдан да һуң түгел) килеп ингән булырға тейеш.

«Буҙъегет» ҡиссаһының был версияһы татар, башҡорт, ҡаҙаҡ лексик һәм грамматик формалары ныҡ аралашҡан иҫке төрки телендә яҙылған. Күсеректә күп кенә хаталар ебәрелгән [3].

Матбуғатта тәүбашлап, оло юлдарҙың авторы тарафынан хәҙерге графикаға күсерелеп һәм ҡыҫҡартылып, «Ағиҙел» журналының 1979 йыл 12-се һанында баҫтырылды.

«Башҡорт халыҡ ижады» күп томлығы башлыса киң ҡатлам уҡыусыларға төбәлгәнлектән, «Буҙйегет» ҡиссаһы байтаҡ ҡыҫҡартылып (авторҙың дини ҡараштарын сағылдырған инеш бүлек, сюжет ағышына ҡарата бирелгән «ғибрәт һүҙҙәре» һәм Ҡары Ахундың дини вәғәздәре, шулай уҡ кәрәкһеҙгә ҡабатланған строфалар ташланып), текст фонетик яҡтан хәҙерге башҡорт яҙма теленә күсерелде. Әммә лексик һәм стилистик үҙенсәлектәрен мөмкин тиклем һаҡларға тырышылды.

Тексттың һул яғына ҡуйыла барған һандар (*1а, 1б, ... 49б, 50а*) ҡулъяҙма биттәрен аңлата.

[1] *Һәм табиб даркарҙар ғилаж тапманы* — врачтар ҙа кәрәкле дарыу-дауа тапманы.

[2] *Сытарма зарлап аның* — зарланып моң түкмә, йөҙөңдө һытма.

[3] *Зөләйха менән Йосыф* — «Йосыф-Зөләйха» ҡиссаһының төп геройҙары.

[4] *Ләйлә менән Мәжнүн* — Низамиҙең һәм башҡа күп кенә Көнсығыш шағирҙарының шул исемдәге мөхәббәт поэмаларының төп геройҙары.

[5] *Шәһәрс бостан Румдан* — Рум иленең (Балҡан ярымутрауы) баҡса кеүек ҡалаһынан.

[6] *Сирай* — ҡулъяҙмала шулай. Мәғәнәһе аңлашылмай, күрәһең, хата яҙылған. Радловта — *сарай*. Ҡурмашп вариантында — *сәйран*: күңел асып, тамаша ҡылып йөрөү.

---

[1] Нәфсиай — ҡулъяҙмала шулай. Дөрөҫө «Нәфисә» булһа кәрәк.

[2] Ан берлә язылса — көйләп уҡыу өсөн шиғыр менән яҙылһа.

[3] Быға бәйләнешле мәғлүмәттәрҙе «беҙҙең «Буҙйегет» ҡиссаһының Өфө варианты» тигән мәҡәләнән алырға мөмкин.— «Ағиҙел», 1979, № 12, 96—100-сө биттәр; «Башҡорт әҙәбиәтенең текстологияһы мәсьәләләре», Н. Т. Зарипов менән Ғ. Б. Хөсәйенов редакцияһында, Өфө, 1979, 106—118-се биттәр.

[7] *Сәған тоҙоү йөрмәһәм* — һиңә тоҙ (дөрөҫ, тура) йөромәһәм (бармаһам).

[8] *Ғалы-гәле, калы-кәле* — боронғо төрки телендә маҡсатты белдереүсе хәл ҡылым формаһы. *Киткәле* — китер өсөн; *еткәле* — етер өсөн.

[9] *Дарья мән кәмә ҡылып* — һыу (йылға, диңгеҙ) буйлап, кәмәгә ултырып.

[10] *Дам инде* — һөйләшеү бөттө, теүәлләнде тигән мәғәнәлә.

[11] *Һыуҙа йөҙҙөм юл тапмай* — ҡулъяҙмала был юл төшоп ҡалған. Радловта ла юҡ. Строфаның тулылығы өсөн, Ҡормаши вариантынан алынды.

[12] *Колкөбөҙ* — был урында көсөл асыу мәғәнәһендә.

[13] Ҡулъяҙмала юл төшөп ҡалған. Радлов баҫмаһы буйынса тултырылды.

[14] *Ханзада* — Буҙйегет.

[15] Ошо юл менән ҡулъяҙманың 15-се бите тамамлана. Артабан, күрәһең, бер бит төшоп ҡалған. Был өҙөклөк Радловта түбәндәгесә тултырылған:

Тойымызға Бос жигит килсен жыбдан
Күйеү ҡылып тойлатып сине шаҡырады.

(Жигит шаҡырғанда тойға килде, жигиткә коп араҡ бирен мас ҡылдылар, аны үлтерергә, аҡыл соҡҡанда жолдасы ҡызға ҡабар бирде) [1].

[16] *Яҡында* — ҡулъяҙмала *йызайыҡды* (?). Радловта *жуҡту* (?).

[17] *Ҡылыс башын киҫмәй бар*, йәғни егетеңдең башын сабып өҙгәнсе барып ҡал.

[18] *Үткәндән һуң* — үлгәндән һуң.

[19] *Тоҙоу* — тоҙоҡ, мәкерһеҙ. Радловта — *ҡотто*.

[20] Ошонан һуң араға авторҙың мистик ҡарашын сағылдырған строфа индерелгән:

Ҡолчылыҡ ҡыл, Баһауи,
Донъяда һич кем ҡалмайды.
Вафасы юҡ ҡара ер
Теренең барын ялмайды.

В. В. Радлов баҫмаһында был строфа юҡ.

[21] Ат, әлбиттә, һул яҡтан менелә. Ләкин бында Буҙйегеттең юлдашы алдап тегеләрҙең аттарының һул яҡ оҙәңгеләрен киҫеп сыҡҡанлығы, шуға күрә аттарын уң яҡтан менергә маташыуҙары аңлашыла.

[22] *Урға алды* — уратып алды мәғәнәһендә. Радловта был юл — *артынан житәлмәй торып ҡалды*.

Был строфанан һуң ҡулъяҙмала артабанғы ваҡиғаларҙа йәнә бер герой ҡатнашыуына ҡарата түбәндәгесә автор аңлатмаһы бирелгән:

«Әл-ҡисса, бер бадша бар ирде, бер уғлы бар ирде, аты Зәйтүн ирде. Хикәйәт китабы Зәйтүн диәр ирде. Турҡан иртакеләрендә аты Зәйтүн диәрләр. Әммә китабдағы доростдүр. Хан ҡызын борон суңа бирәмен диб йөргән икән. Зәйтүн ҡызға ғашиҡ икән. Ҡызның хәбәре юҡ икән. Был хәбәрне ишетеб, мең кеше мән Зәйтүн килгән икән. Мәғлүм булсын».

Был аңлатма Радлов баҫмаһында төшөрөп ҡалдырылған.

[23] *Су ҡабығын* — мәғәнәһе аңлашылмай; Радловта — *ҡырылғанын*.

[24] *Зәйтүндең* — ҡулъяҙмала — хан баласының.

[25] Ҡулъяҙмала: Егетләрнең сүзе.

[26] *Тауға бер аҙ төшөүгә күңел ҡылды*.— Бында, күрәһең, яралы геройҙың тауҙың бер аҙ кесерәйеүен, тәбәшәкләнеүен үтенеүе сағыла. Эпоста ундай хәл — тәбиғәт күренештәренә мөрәжәғәт итеү — традицион күренеш.

[27] *Ибас бәйләп*...— кире тартып алыу ниәте менән сысҡанға еп тағып ебәреү аңлашыла. Радловта — *жепкә бәйләп*.

[28] *Сарҡытын* — сысҡандан ҡалғанды, йәғни сысҡап ашаған үләнде йәки үлән тамырын. Радловта — *жигән шөбүн* (ашаған сүбен).

[29] *Батшаһын* — Буҙйегетте.

[30] *Күп күренһә* — йыйылған халыҡ күренһә.

[31] *Саҡмайҙы итергә* — ҡулъяҙмала шулай. Радловта *шыҡмайды ҡандан* (хандан) тип үҙгәртелгән. Нисек кенә булмаһын, бында Буҙйегеттең ханға кейәү булмаясағына Зәйтүндең шатланыуы аңлашыла.

---

[1] В. В. Радлов. Образцы народной литературы тюркских племен..., часть III, стр. 370. Проза өлөшө йәйә эсенә алынған.

[32] *Алдап орҙо* — алтын менән алдаштырып, үҙ яғына ауҙарҙы.
[33] *Өмерең үтмәй тороп, юл бирәйен!* — ғүмерең буйына үҙеңде ҙурлармын, хөрмәт итермен тигән мәғәнәлә.
[34] Артабан яҙыусының мистик ҡараштарын сағылдырған дини вәғәзе өҫтәлгән. Ул шулай тамамлана:

28б
Фаҡирана Баһауи,
Үлмәй торып ҡоллыҡ ҡыл,
Син дә үтәрсең донъядин.

[35] Строфа тамамланмаған.
[36] Артабан яҙыусы тарафынан ҡыҫтырылған «Шиғырға шаирнең сүзе» исемендә йәнә бер «ғибрәт һүҙе» бар:

Ата менән анадан,
Малың берлә баладан
Кемде айырмас бу үлем?
Ай бичара Баһауи,
Мәдәт телә алладан,
Сиңа дә килер бу үлем.

В. В. Радлов баҫмаһында Баһауи исеме «достум» һүҙе менән алмаштырылып, строфа тотош Ҡәмин һүҙҙәренә ялғанған.
[37] *«Ҡотолдоҡ дошмандан»* — батша һүҙе, шатлығын белдерә; *сачу сәсте* (ҡулъяҙмала *сачды*) — батша бүләк (аҡса йәки башҡа нәмә) һипте.
[38] *Батшаның үлгәнен йорто белде*. Башындағы алтын айҙар толомона ҡарап, Буҙйегеттең ябай кешенән түгел, ә батша улы булыуы беленгәйне. Ошонан сығып, бында батша улы үлтерелеүе хаҡындағы хәбәрҙең илгә таралыуы аңлашыла.
[39] *Мал һуйып, туйын инде ҡылды* — бында ҡыҙҙың, егете үлтерелеүен әле белмәйенсә, уның табылыу шатлығын байрам итеүе аңлашыла.
[40] *Искәндәр* — Александр Македонский. Беҙҙең эраға саҡлы 356—323 йылдарҙа йәшәгән.
[41] Ошонда 30б бите тамамлана. Артабан ҙур өҙөклөк. Радлов баҫмаһы буйынса тултырылды.
[42] *Башын* — Буҙйегеттең киҫелгән башын.
[43] В. В. Радлов. Образцы..., часть III, с. 403—405.
[44] *Хуп төҙәрһәң буйыңды* — буй-һыныңды матурларһың.
[45] *Үҙем аҡ исем ҡылырмын* — бөтә эште үҙем эшләп, яҡшы исем (дан) алырмын. Радловта *үзем эшемде ҡылармын*.
[46] Бынан һуң араға «Шиғырчының сүзе» тигән исем менән йәнә вәғәз индерелгән:

*33а*
Боронғылар үтепде,
Үлмәйсе ҡайда китепде.
Бу үлемне, Баһауи,
Уйыңа алсаң кирәкте.

[47] *Булмаҫын* — тыңламаясағын. Радловта *барғанын*.
[48] *Ҡылыпты әкәң һинең ҡорбан ғәйете* — ирония; егетте үлтереп, атаң ҡорбан ғәйете үткәрҙе инде.
[49] Теге донъяла ата-әсә бала осон дә яуап бирә, имеш. Бында ана шул дини ҡараш сағыла.
[50] Бынан һуң йәнә авторҙың мистик ҡараштарын сағылдырған һүҙе бирелгән:

Донъяны син сөйәрсең,
Алтын-көмөш йыярсың.
Әжәл бер көн гиз килсә,
Барын ҡуйып китәрсең.
Бу ялғаннан файда юҡ,
Әжәл-үлем ҡайда юҡ?

Үлем килсә, файҙа юҡ,
Ҡолсылыҡ ҡыл, Баһаун.

[51] *Хаҡҡа* — аллаға. Радловта *аҡҡа*.

[52] *Кешеһе* — ҡулъяҙмала *батшасы*.

[53] *Яратҡандан* — алланан.

[54] *Аясама* — ҡулъяҙмала шулай. Бәлки, асма, асмай тор?

[55] *Кәмин* — ҡулъяҙмала шулай. Дөрөҫө *кимәнен* (кафтанын) булырға тейеш.

[56] *Кәмин сисеп алып, сурға төштө* — кафтанын һалып, башҡаса көйләүгә күсте. Радловта был ике строфа юҡ.

[57] *Һорау һорар көн* — ҡиәмәт көнө, йәғни, ислам дине буйынса, донъя бөтөп, һәр кемдән яуап алыныр көн.

[58] Ҡиәмәт көнөндә, йәнәһе, һәр кем үҙен генә ҡайғырта. Бында ана шул дини ҡараш сағыла.

[59] *Тиргәү* — боронғо төрки телендә тикшереү тигәнде аңлата. Бында һорау алыу мәғәнәһендә. Шуға ла Радловта сорау тип алмаштырылған.

[60] *Сөләймән* — дини легендаларҙа һүрәтләнгән батша — пәйғәмбәр.

[61] Дини легендаларҙа һөйләнеүенсә, Аҙәм пәйғәмбәрҙең 140 улы булған. Улардан төрлө халыҡ барлыҡҡа килгән, имеш.

[62] *Ҡарун* — ғәрәп әкиәттәрендә һәм дини китаптарҙа сағылған ғәҙәттән тыш бай, әммә үтә һаран кеше. Һаранлығы арҡаһында уны бөтә байлығы менән бергә ер йотҡан, ти.

[63] *Ҡаһарман* — фарсы легендаларында һүрәтләнгән бик көслө, һис еңелмәҫ батыр. Уның хаҡында төрки халыҡтарында әкиәттәр ҙә бар. Мәҫәлән, «Ҡаһарман батыр».— БХИ, Әкиәттәр, өсөнсө китап, 1978, № 36, Хәҙерге әҙәби телдә герой төшөнсәһендә йөрөй.

[64] *Ғәли* — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙән һуң дүртенсе хәлифә, Мөхәммәттең кейәүе. Дини хикәйәләрҙә Ғәли батыр булып һүрәтләнә.

[65] Бынан һуң (43-сө биткә тиклем) был донъянан киткән әллә күпме пәйғәмбәрҙәр, батшалар, уларҙың ҡылған эштәре һанала.

[66] *Бай табыр* — ир табыр.

[67] *Ғәриптәргә ҡаш биргән* — ситтән килгән кешеләргә яҡты йөҙ күрһәткән (үҙ ҡашына алған).

[68] *Ҡуйыр белгән* — яҡшы менән яманды айыра белгән. Радловта *тигез белгән*.

[69] *Боҙоҡ булған күңелен* — боҙолған, йәғни ҡайғылы күңелен.

[70] *Хаҡ насибә һалманы* — алла насип итмәне (өлөш сығарманы).

[71] *Арҡала һис фәтә юҡ* — артымда доға ҡылыусым юҡ.

[72] *Моңһоҙ — бер хаҡтыр* — ҡайғы-зары булмаған — тик аллалыр.

[73] Артабан Буҙйегеттең атаһы менән әсәһенең уның зыяратына килеүҙәре, Ҡарасәстең атаһының, быларға ҡаршы сығып, үҙ ғәйебен таныуы һәм ғәфү үтенеүе, ханымдың Буҙйегет мулаһы янында һамаҡлап илауы һүрәтләнә. Аҙаҡ, ҡулъяҙманың 50-се «а» битендә, «Ханымдың илап ҡайтҡаны» тигән бүлексә исеме менән текст туҡталып ҡала.

Ҡормаши тексына ҡарағанда, Буҙйегеттең ата-әсәһе илдәренә ҡайтҡас, улдарының ҡайғыһынан үләләр. Кәмән уларҙан айырылып ҡалып, Буҙйегеттең тамына инеп, үҙен-үҙе үлтерә.

**Буҙйегет.** «Бузикет» исемендә 30-сы йылдар ахырында — 40 йылдар башында Башҡортостандың Федоровка районы Батыр ауылында Хәнифә Хәлитованан Ғибай Хәлитов яҙып алған. Ҡулъяҙмаһы һаҡланмаған. Машинкала баҫтырылған беренсе нөсхәһе «Башҡорт халыҡ әкиәттәре» тигән папкаға тупләнгән.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 10/39, 9—27-се биттәр.

Вариант Ҡормаши баҫтырған китап тексына яҡын. Хатта исеменең дә ғәрәпсә яҙылыш формаһында булыуы шул китаптан килә булһа кәрәк. Вариант поэманың халыҡ хәтеренә нисек һеңеп ҡалыуын һәм телдән һөйләү процесендә ниндәй үҙгәрештәр кисереүен өйрәнеү өсөн әһәмиәтле.

**Телдән яҙып алынған башҡа (әһәмиәтлерәк) варианттары:**

1. «Буҙйегет» исемендә 1959 йылда Курган өлкәһе, Әлмән районы Асҡар ауылы Рәхимйән Саттаровтан Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/1, 15—20-се биттәр. Йөкмәткеһе нигеҙҙә уртаҡ эпизодтарҙан тора.

Егет атаһының кем булыуы әйтелмәй. Ҡыҙҙың исеме — Сәхибъямал, Мысыр батшаһының ҡыҙы. Дуҫы телгә алынмай.

Бында Буҙйегет төшөндә бер генә ҡыҙҙы түгел, ә ҡырҡ ҡыҙ күрә, шуларҙың береһенә ғашиҡ булып, уны эҙләп табырға бер үҙе сығып китә. Буҙйегетте иҫертеп үлтереү маҡсатында уҙғарылған ялған туйҙа егетте Сәхибъямал үҙе иҫкәртә. Буҙйегет мәйете өсөн алтындан там * эшләтеү эпизодтары юҡ. Егет үлтерелгәндән һуң, ҡыҙ ауырыуға һабыша. Бер көндө үҙенең ҡырҡ иптәш ҡыҙын саҡырып алып:

Күҙ-башымды ҡан алды,
Донъя атама киң ҡалды,
Хәсрәт алды йөҙөмдө,
Ҡорбан ҡылдым үҙемде.
Сын ярымдан ҡалғым юҡ,
Бүтән ярға булғым юҡ,
Был уйымдан ҡалғым юҡ,
Йәнем алғыл бер хоҙай,—

ти ҙә, Буҙйегеттең мәйетен ҡосаҡлап, үҙен-үҙе сәнсеп үлтерә.

Ошонан һуң һөйләүсе «шулай итеп был ике мәхлүҡ йән, ғишыҡ тотоп ҡауыша алмай, үлеп китәләр» ти ҙә үлемдең ҡотолғоһоҙ булыуы тураһында вәғәз менән һүҙҙе тамамлай.

2. «Батша улы» исемендә 1959 йылда Башҡортостандың Ғафури районы Юлыҡ ауылында Сәйфетдин Дәүләтбаевтан (1889 йылда тыуған) Мөхтәр Сәғитов яҙып алған. Күләме машинкала өс бит, йөкмәткене һөйләп биреүҙән тора, БДУ фольклор фондында һаҡлана. Айырмаһы: Буҙйегеттең дуҫы — Камал исемле. Ялған туйҙан һуңғы һуғышта Буҙйегет батшаның етмеш һалдатын яралай, етмешен үлтерә. «Урман араһында ос кон, өс төн яраһын тоҙәтеп ята». Буҙйегет менән Сәхибъямал йәшерен ҡауышып, бер әбейҙә фатирҙә торалар. Шунда бер аҙна буйы Сәхибъямал Буҙйегетте «көндөҙ һандыҡҡа һалып бикләп, өҫтөнә кейем өйөп йәшерен йәшәтә». Әммә хужа ҡарсыҡ ханға ошаҡлай. Буҙйегет үлтерелгәс, Сәхибъямал алтмыш ҡаланан алтмыш оҫта килтереп, ҙур һарай эшләтә, шунда «бысағының һабын Буҙйегеттең түшенә, осло яғын үҙ түшенә терәп, ҡосаҡлап, сәнселеп үлә».

3. «Буҙйегет» исемендә 1960 йылда Ырымбур өлкәһенең Александр районы Аҡтип ауылында 54 йәшлек Фазулла Сафаргәрәй улы Агишевтән Н. Шоңҡаров яҙып алған.—Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 166—167-се биттәр. Күләме ике бит. Әкиәт стилендә һөйләнгән, сюжет тулы түгел. Дүрт юллыҡ строфанан торған шиғыры бар. «Әле булһа ла Буҙйегет менән теге ҡыҙҙың зыяраты өҫтөндә сәскә үҫеп ултыра, ти»,— тигән һөйләм менән тамамлана.

4. «Бузикет» исемендә 1961 йылда Силәбе өлкәһе Ҡоншаҡ районы Зәбир ауылында Мәүлиҙә Ибраһимованан (1910 йылғы) Һәҙиә Ҡаһарманова яҙып алған: БДУ фонды, 1961 йылда М. Минһажетдинов етәкселегендә үткәрелгән фольклор экспедицияһы материалдары, 10—13-сө биттәр. Текст проза ҡатыш шиғырҙан тора.

Вариант Ҡормаши китабына бик яҡын. Буҙйегет — Багдад ҡалаһының Ғабдулла исемле хан улы; дуҫы — Каман; Сәхибъямал — Маһатыя (Ҡормашиҙәге яҙылышы Меллатыяһ) ҡалаһының батшаһы Тазмыз (Ҡормашиҙә Таһмас) ҡыҙы; Зәйтүн — Тазмыздың вәзире.

Тәүге ярты биттә Буҙйегетте үлтереүгә тиклем булған ваҡиғалар һөйләнеп бөтә. Артабан — шиғыр менән ҡыҙ-ата диалогы.

5. «Буҙйегет» исемендә 1965 йылда Башҡортостандың Баймаҡ районы Ярай ауылында Мәликә Дәүләтбаеванан Ильяс Дәүләтбаев яҙып алған: БДУ фонды, 1965 йылғы фольклор экспедицияһы материалдары, I киҫәк, 146—150-се биттәр. Проза ҡатыш шиғырҙан тора.

Бында Буҙйегет — Ҡасим тигән батшаның улы, Сәхибъямал — Шаһибәк батша ҡыҙы, ә Буҙйегеттең дуҫы — вәзир улы, Дәминдәр исемле.

Юлда күргән яфаларын һөйләүҙә шундай үҙенсәлек бар:

«...Диңгеҙҙе сыккас, улар бер шәһәргә инәләр. Ул шәһәрҙең батшаһы Буҙйегет менән Дәминдәрҙе, ҡасҡын тип, тотоп алып яфалаған, эшкә ҡушҡан. Көндөҙ уларҙан утын ҡырҡтырып, йөкмәтеп ташытҡан, кис менән ҡорсой ат-

тың арҡаһын тырната икән. Бер йыл ваҡыт үткәс, ошо батшалыҡтағы ҡол ҡыҙы быларға ҡасырға ярҙам иткән».

Буҙйегеттең үлеүен ата-әсәһенә, Ҡормашиҙәге һымаҡ, Ҡари баба (вариантта *йырсы* Ҡари баба) белдерә.

«Был йырҙы тыңлағандан һуң, Буҙйегеттең атаһы менән әсәһе улының үлгәнен белгәндәр. Сәхибъямалдың ата-әсәһе лә ҡыҙының ҡайғыһынан һарғайып үлгәндәр» тигән һүҙҙәре менән тамамлана.

6. «Буҙйегет» исемендә (йәйә эсендә «хикәйәт» тип) Башҡортостандың Хәйбулла районы Зиргән ауылында (1892 йылда тыуған) Камалетдин Таһировтан Дания Кәримова менән Гөлфирә Ҡотломөхәмәтова яҙып алған.— БДУ фонды, айырым дәфтәр.

Текст күбеһенсә сәсмә формала, ҡайһы бер сюжет деталдәре әкиәт стиленә ябайлаштырып һөйләнә. Сәхибъямалды эҙләп барғанда Буҙйегет иптәше менән (исеме ике төрлө: «Дуҫтыкәмин» һәм «Дуҫтокәмән») «Һыйыр аяҡ, Эт баш еренә әсир төшә». Сәхибъямал янында ултырғанда батша ғәскәре уратып алғас, Буҙйегет «ете кешене үлтерен, үҙе етмеш ерҙән йәрәхәтләнеп» ҡасып китә. Йәнә ябайлаштырылған үҙенсәлекле бер деталь — Сәхибъямалдың туйға әҙерләнеп көтөп ултырыуы шулай һүрәтләнә: «Буҙйегеткә бирәм тигәс, сәсен майлап тараған ине, ти. Береһен (толомон) әле үрмәгәйне, ти. Был һүҙҙе ишеткәс (йәғни Буҙйегеттең иптәше түйҙың яуыз уй менән үткәрелеүен килеп әйткәс.— *Н. З.*), хөлләә тунының бер еңен кейҙе, береһен кеймәне— сығып йүгерҙе, ти».

Яҙма варианттарҙа булып та, телдән һөйләнгән варианттарҙа иҫкә алынмаған деталдәр осрай. Мәҫәлән, етмеш ерҙән яраланған Буҙйегеттең иисек һауығыуы тап Баһаун ҡулъяҙмаһындағы кеүек һүрәтләнә: «Шунда мағарала (ышыҡланып ятҡан ерендә.— *Н. З.*) ултырғанда бер сысҡан килеп сыға. Тотоп ала. Үҙендә нисә яра булһа, шунса яраны сысҡанға һалды, ти. Сысҡандың аяғына еп бәйләп, осопан тотто ла ебәрҙе, ти. Сысҡан тәҡәт итә алмай, бер тамыр тапты. Шул тамырҙың яртыһын ашап, яртыһын ҡалдырҙы. Бөтөн ағзаһы сағ-сәләмәт булды. Буҙйегет: «Был да бер мәхлүҡ, инде шәбәйҙе. Мин дә шәбәйермен әле»,— тип тамырҙы сәйнәп йотто, ти. Шунан ул да сағ-сәләмәт булды, иҫән-аман ҡыҙҙың шәһәренә килде, ти».

Вариант шулай уҡ үҙенсәлекле тамамлана: «...Сәхибъямал ҡәберҙе 15 көндә эшләтеп ботто. Бөтәһен әҙерләп, ҡулына бысаҡ тотоп килде лә: «Ай Буҙйегет, Буҙйегет, ишек асып, мин дә эргәңә ятам»,— тип әйтте, ти. Шул саҡ алтындан эшләнгән ҡәбер асылды. Сәхибъямал инеп китте. Ул ингәс, күк күкрәне, ер һелкенде, ҡәбер ишеге ябылды, ти».

7. «Буҙйегет» исемендә Башҡортостандың Бөрйән районы «Агиҙел» поселогында Йыһангир Сәлиховтан (1900 йылда тыуған) 1971 йылда Н. Шоңҡаров яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 65/7, 22—24-се биттәр. Шау сәсмә телдә.

Буҙйегет — Бағдад ҡалаһында Ғабдулла хандың улы; Буҙйегеттең дуҫы Камал исемле, ул — Ғабдулла хандың вәзире Ғабдрахмандың улы; ҡыҙ Сәхибъямал исемле, Таймас хандың ҡыҙы. Маймылдар шәһәренән ҡасҡас, юлда Бағдад ҡалаһынан бер сауҙагәр ҡартҡа осрап, алтын-көмөштән саҙаҡа бирен китәләр. Ҡыҙ шәһәренә килеп еткәс, Буҙйегеткә төшөндә бер әбей бынан нитмәҫкә ҡуша, ҡыҙҙың һарайҙа йәшәүен әйтә. Ҡыҙға беренсе килеүендә үк һаҡсылар батшаға хәбәр итәләр. Ҡалған эпизодтарҙы һөйләүҙә әһәмиәтле үҙенсәлектәр юҡ. Тик бөтөмө башҡасараҡ: Буҙйегетте күрергә атаһы ҡырҡ көнлөк юлды гел йәйәү, ә әсәһе йүгерек ат менеп дүрт көндә үткән. Килгәс, Буҙйегеттең әсәһе: «Ғәскәр йыйып, был илде бөтөрөргә кәрәк»,— ти. Ғабдулла хан Таймас ханға һуғыш асып, ҡаланың остән ике өлөшөн һәм бәһлеүәндәрен ҡырып бөтөрә.

8. «Бузикет» исемендә Саратов өлкәһе Перелюб районы Бөрйән-Ҡунаҡбай ауылында Бүләкбикә Бишеванан (1890 йылда тыуған, уҡый-яҙа белмәй) 1971 йылда Әнүр Вахитов яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 65/8, 1—16-сы биттәр. Текст машинкала 16 бит, шиғыр ҡатыш прозанан тора.

Йокмәткеһе башлыса Ҡормаши баҫмаһына тура килә.

Сәхибъямал — Мөләтийә (Меллатыяһ) шәһәрендә Таһылмас (Таһмас) хандың ҡыҙы. Буҙйегет — Бағдад шәһәрендә Абдулла хан улы; дуҫы — вәзир улы, Гуман исемле. Улар икеһе бер көндә, бер сәғәттә тыуғандар, бергә уйнап, бергә үҫәләр; икеһе лә — «мыҡты кәүҙәле, төҫкә матур, батыр».

Төштә Буҙйегет менән Сәхибъямалдың шиғри диалогы Ҡормаши тексына тура килә.

Егеттәрҙең Маймыл шәһәрендә тотҡонлоҡта йәшәүҙәрендә шундай үҙенсәлек бар: Маймыл халыҡтары кеше ашаған булалар. Шуның өсөн Гуман менән Бузикетте һимертеп һуйырға яҡшы ашаталар. Тотолған бер кешене Бузикет менән Гуман алдында һуйып ашайҙар. Маймылдар башлығының ҡыҙы тотолған бер кешене үҙенә кейәүлеккә ҡарап торған. Был ҡыҙҙың күҙе Бузикеткә төшә, шуның өсөн дә уларҙы һуймай торалар. Бер ай торғас, егеттәр ҡаса.

Артабанғы хәлдәрҙе һөйләүҙә шундай үҙенсәлектәр бар:

1) Ялған туйҙа ир-егеттәрҙе бер яҡҡа, ҡатын-ҡыҙҙарҙы икенсе яҡҡа ултырталар.

2) Буҙйегетте һис ниндәй ҡылыс-бысаҡ менән үлтереп булмауҙың сәбәбе итеп Йософ пәйғәмбәрҙең доғаһын уҡып йөрөүе әйтелә.

3) Буҙйегет иҫереп иҙәнгә ауғас, уны, үлде, тип уйлайҙар; рәхәтләнеп колошоп, ашарға ултыралар.

4) Сәхибъямалға Буҙйегеттең үлеүен «бер егет» хәбәр итә.

5) Сәхибъямал туй мәжлесенә килеп инә һәм, иҙәндә ятҡан Буҙйегетте күреп, атаһына шулай ти:

> Белдем, атай, уйыңды,
> Уйың һинең шул икән:
> Бузикетте үлтереп,
> Буҙҙай туңды килтереп,
> Майҙан аяҡ йыйҙырып,
> Һиндәй яман уй ҡылған,
> Ниндәй яҡшы көндәрҙә
> Кеше һуйып, туй ҡылған —
> Ишетмәнем, белмәнем
> Бындай яман уй ҡылған.

Ошо һүҙҙәрҙе әйткәс, бер стакан һыу алып, Бузикеттең битенә бөркә һәм былай ти:

> Әй, Бузикет, күҙеңде ас,
> Һикереп тороп ишек ас.
> Алла ҡушҡан йәреңде,
> Ҡылыс сапмаҫ муйыныңды.
> Әй, Бузикет, Бузикет,
> Күп эсендә аҙ егет,
> Йән сығырға еткәндәй,
> Аҡылың юҡ, мас егет,
> Шайтан керһә ҡуйыныңа,
> Ҡылыс етәр муйыныңа.

Сәхибъямал өс тапҡыр һыу һипкәс кенә, Буҙйегет тороп тышҡа сыға һәм, Гуман әҙерләп ҡуйған аттарҙы менеп, дуҫы менән бынан ҡасалар.

6) Егеттәрҙе ҡыуа сыҡҡан Зәйтүн үҙенең Буҙйегеттән көсһеҙерәк булыуын күргәс (уғы яртылаш ҡына ерга инә), һуғышмайынса кире ҡайтып китә.

7) Буҙйегеттең тәнендәге яраларын уңалдырыу ысулы түбәндәгесә: «Ҡырҡ ерҙән яраланған сысҡан ерҙән ҡара тупраҡ ҡаҙып алып, уға ятып аунаҡлай ҙа ҡойолган имән япраҡтарын йыйып алып өҫтөнә яба, ете көн, ете төн ята. Һигеҙенсе көн сысҡан ырғып тора, яраланған урынын ялай ҙа үҙ юлына китә. Быны ҡарап ултырған Бузикет ерҙең ҡара тупрагын сығарып яраһына һала ла имән япраҡтарын өҫтөнә яба. Шунан сысҡан кеүек ете көн, ете төн ятҡандан һуң терелә».

8) Терелеп яңынан килгәс, Буҙйегет Сәхибъямал менән үҙ иленә ҡасып китмәкселәр. Шулай әҙерләнеп йөрөгәндә, быларҙың уйын бер вәзир һиҙеп ҡалып, батшаға әйтә.

9) Сәхибъямал Буҙйегеттең кәүҙәһен «быяла ситлек менән ураттыра һәм баш осондағы ташына ни өсөн үлгәнен яҙҙыра».

10) Сәхибъямал үлгәс, уның дуҫ ҡыҙҙары ла үҙҙәрен үҙҙәре үлтерәләр. Хикәйәт шулай ослана:

«Бузикет ҡәбере янында хушлашып торғанда Гуман, дуҫым булмағас, яҡты донъяла йәшәүҙең бер йәме юҡ, тип үҙен-үҙе үлтерә. Шул урында Гуманды ла Бузикет янына ҡуйып, ҡайтып китәләр. Шулай итеп, бер Бузикет үлгән өсөн, Гуман дуҫы, Сәхибъямал һәм уның ҡырҡ иптәше үҙ-үҙҙәрен үлтерәләр, ти».

[74] Шиғыр юлы боҙолған. Дөрөҫө: *Беҙҙе әҙләгән булмаһын.*

[75] Строфа боҙолоп, бер генә юлға ҡалған. Дөрөҫө (Ҡормашиҙән):

Һине бында яратты,
Мине унда яратты;
Һине миңә ҡаратты,
Мине һиңә ҡаратты.

[76] *Зәйтүн* — был ҡарата һөйләүсе Хәнифә Хәлитова «хан үҙенең ҡыҙын ошо Зәйтүнгә бирергә йөрөгән, ә ҡыҙы уны яратмай» тип аңлатма биргән.

[77] *Дөйә кеүек* — төп вариантта һәм Ҡормашиҙә *бута кузле.*

**Йософ менән Зөләйха.** 1960 йылда Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеевка районы Ғәбдрәфиҡ ауылында Зиннәтулла Вәхитовтан Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 161—165-се биттәр.

Телдән яҙып алынған б а ш ҡ а  в а р и а н т т а р ы:

1. Йософ менән Зөләйха. 60-сы йылдар башында Силәбе өлкәһе Ҡорман ауылында 61 йәштәге Заһир Закировтан Гөлнур Аҡкилдина яҙып алған.— БДУ БӘК фф.

Башҡаларҙан айырмалы буларак, был вариант Зөләйханың тошо менән башлана, сюжеттең шаҡтай тулы бирелеүе, эпизодтарҙың үҙенсәлекле хикәйәләнеүе менән әһәмиәтле.

2. «Кинйә әкиәте» исемендә 1962 йылда Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе Кәримә Мостафинанан (йәше әйтелмәгән) Тәфтиз Усманов яҙып алған.— БДУ БӘК фф.

Башланып китеүе лә, бөтөмө лә башҡорт халыҡ әкиәттәре традицияһынса: «Борон-борон заманда исемһеҙ бер ауылда Яҡуп исемле ҡарт ете баһадир үҫтергән. Ә һуңынан ҡарсығы уға тағы ла бер кинйә ул бүләк иткән. Йософ тип исем ҡушҡандар төпсөккә. Кинйә булғас, атаһы Йософто бик иркәләткән, ҡулынан төшөрмәгән. Малай ҙа ағаларына ҡарағанда күп тапҡырға зиһенлерәк булып үҫә икән. Ә һылыулығы менән был тирәләге бөтә кешене таң ҡалдырған...»

Бөтөмө: «Бер нисә көндән һуң мәсеттә аҙан әйтеп, Йософ менән Зөләйханың туйын үткәрәләр. Ә һуңғараҡ Йософтоң ете ағаһы ла ошо батшалыҡта ете туй яһай. Һигеҙ туған хәҙер ҙә донъя көтөп, йөн тетеп, татыу ғүмер итәләр, ти».

Эпизодтар бирелешендәге айырымлыҡтар һәм хикәйәләүҙәге үҙенсәлектәр иҫкәрмәләрҙә күрһәтелде.

3. 1963 йылда Ырымбур өлкәһе Ново-Сергеевка районы Ғүмәр ауылында уҡытыусы-пенсионер Ғайсин Бәхтегәрәй Сәйфулла улынан (1888 йылда тыуған) яҙып алынған.— БДУ БӘК фф.

Вариант башлыса сюжет йөкмәткеһен ҡыҫҡаса һөйләп сығыуҙан тора (машинкала өс бит).

4. 1968 йылда Башҡортостандың Хәйбулла районы Ҙур Әбеш ауылында Нәфисә Илимбетованан (1905 йылда тыуған) Зәкиә Хисамова яҙып алған.— БДУ БӘК фф.

Эпизодтарҙы хикәйәләүҙә әкиәт стиле, традицион алым һәм деталдәр күренә.

5. 1972 йылда Башҡортостандың Зианчура районы Дубняк ауылында Хажегәле бабай Ғайсиндән (йәше әйтелмәгән, һуҡыр) китапханасы Зөлфиә Мусина яҙып алған һәм Ғайса Хөсәйеновҡа тапшырған. Ледерин тышлы ҡалын дәфтәр, ике яғына яҙылған, 128 бит.

Вариант пәйғәмбәрҙәр тураһындағы дини легендалар стилендә һөйләнә. (Әһәмиәтлерәк моменттәре иҫкәрмәләрҙә күрһәтелде.)

[1] *Ҡорт* — бороноғо төрки телендә бүре. Яҙма ҡиссаларҙа «ҡорт» тип әйтелә. Телдән яҙып алынған варианттарҙа күбеһенсә «бүре» тип һөйләнелә.

[2] *Батшаның ҡыҙы Зөләйха* — яҙма ҡиссаларҙа һәм телдән һөйләнгән башҡа варианттарҙа Зөләйха — Мысыр батшаһының ҡатыны.

[3] Яҙма ҡиссаларҙа Мысыр батшаһы төшөндә һигеҙ түгел, ә ете һимеҙ һыйыр, ете арыҡ һыйыр, ете туҡ башаҡ, ете короган башаҡ күрә. Ете арыҡ һыйыр ете һимеҙ һыйырҙы ашай. Нәфисә Илимбетова вариантында һыйырҙарҙың һаны бындағыса — һигеҙ. Ләкин төш — сәсмә телдә хәбәр итеү формаһында ғына.

[4] *Үзен илгә батша итеп ҡуя* — Кәримә Мостафина һөйләгән «Кинйә экиәте»ндә батша Йософҡа игеп йыйыу эшенә етәкселек итеүҙе тапшыра.

[5] Ағаларына Йософтоң үҙен танытыуы яҙма ҡиссаларҙа һәм телдән яҙып алған ҡайһы бер варианттарҙа башҡаса. Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» тигән әҫәрендә, мәҫәлән, Йософ ағаларын ҡунаҡ итеү өсөн ҡырҡ аршын оҙонлоғонда махсус һарай һалдыра, стеналарын атаһы Яҡуптың һүрәте һәм ағалары ҡылған яуызлыҡтар тураһындағы һүрәттәр менән биҙәтә. «Кинйә экиәте»ндә лә ағалары килеүгә Йософтоң һүрәттәр яһатып элеп ҡуйыуы хәбәр ителә.

**Таһир менән Зөһрә.** Ос варианты баҫыла.

Тәүгеһен Ырымбур өлкәһе Ҡотос ауылында Рәхилә Теләкәеванан 1960 йылда Кирәй Мәргән яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/3, 157—160-сы биттәр.

Икенсеһен Ырымбур өлкәһе Күрпәс ауылында Булатов Зәкәриә Алламорат улынан (1927 йылда тыуған) 1960 йылда Ниғмәт Шоңҡаров яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 21/5, 13—15-се биттәр.

Өсөнсөһөн Башҡортостандың Ишембай районы Әтҡол ауылында Сабирйән Ғарифуллиндән (1892 йылда тыуған) 1968 йылда Ниғмәт Шоңҡаров менән Нур Зарипов яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 65/3, 4—7-се биттәр.

Телдән яҙып алынған б ү т ә н в а р и а н т т а р ы:

1. «Янзөһрә менән Янтаһир» исемендә Башҡортостандың Архангель районы Абзан ауылында Үлмәҫбикә әбейҙән (фамилияһы, тыуған йылы күрһәтелмәгән) 1966 йылда Рауил Бикбаев яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 61/2, 31—32-се биттәр.

Текстың күләме машинкала бер биттән аҙ ғына артығыраҡ, сюжет тулы түгел. Янзөһрә — бай ҡыҙы, Янтаһир — ярлы егете. Шуға күрә Янзөһрәне атаһы Янтаһирға бирергә теләмәй, ә Ҡарасонәк исемле бай урыҫ егетенә бирмәксе. Артабан Янтаһир менән Янзөһрәнең бары бер шиғри диалогы әйтелә (29-сы иҫкәрмәне ҡарағыҙ).

2. «Таһир менән Зөһрә» исемендә Башҡортостандың Ишембай районы Әптек ауылында Мәрфуға Хәлилованан (1885 йылда тыуған, иҫкесә уҡый-яҙа белә) 1968 йылда Роза Нафиҡова яҙып алған.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 65/3, 1—3-сө биттәр.

Мәрфуға инәй йәш сағында «Таһир — Зөһрә ҡиссаһын» яҡшы белеүен әйткән, әммә хәҙер онотҡан, теҙеп һөйләй алмаған, шиғри диалогтарҙан ҡайһы бер фрагменттәр генә яҙҙырған. Шуларҙан Зөһрәнең атаһына әсәһенең һүҙе иғтибарға алырлыҡ:

Вәзир затҡа ҡыҙ биргәнде
Ишетмәнем, күрмәнем.
Вәзир затҡа ҡыҙ биреп,
Ханым булып йөргәнен.
Шаһзадалар килмәйме,
Нур егеттәр килмәйме?
Ете ожмах хурындай,
Хуш егеттәр килмәйме?
Ишеткән йән ҡолаҡтан
Бар ҙа гишыҡ тота, ти.
Һинең ғәйрәтеңдән ҡурҡып,
Серен эстә тота, ти.

[27] *Сәни сәүәм* — һине һөйәм.

[28] *Юл миңә тоҙҙәр* — йөрөгән юлым хаҡ, дөрөҫтөр.

[29] Рауил Бикбаев яҙып алган вариантта шио шиғри диалог ҡына килтерелә. Айырмаһы: а) Янтаһир бер үк куплетте өс тапҡыр йырлай; б) Ҡарасонаҡ — бында Ҡарасонәк исемендә.

[30] Ҡыҙыҡлы деталь: Зөһрәгә Таһирҙың итеп ашатырға маташыу Ә. Уразаев-Ҡормаши яҙмаһында ла бар. Унда Зөһрә түбәндәгесә һамаҡлай:

> Эй татар сез, татар сез,
> Бер-берегезгә уҡ атарсыз;
> Базарда ит беткәнме?
> Таһир итен сатарсыз.

(М. Гайнуллин. Татар әдәбияты, XIX йөз, 301-се бит).

**Сәйфелмөлөк.** 1976 йылда Стәрлебаш районы Тәтер-Арслан ауылы Рысаева Миңзифа Шаһиғәскәр ҡыҙынан (1899 йылда тыуған) Ниғмәт Шоңҡаров магнитофон таҫмаһына яҙып алган.— ТТӘИ музыка фонды. Таҫманан күсермә тексы.— Ғилми архив, ф. 3, оп. 73/63, 48—109-сы биттәр.

Төрки халыҡтарында был — шулай уҡ киң таралған ҡисса. Тәү тапҡыр Ҡазан университете типографияһында 1807 йылда, унан һуң Октябрь революцияһына тиклем күп тапҡыр баҫылган. Ҡаҙаҡса бер версияһы 1976 йылда Алма-Атала сыҡҡан «Ғашыҡ-наме» китабына ингән.

Беҙҙең китапҡа алынған вариант шиғри ҡиссаның халыҡ телендә тотош проза формаһына күсеп, әкиәт стилендә һөйләнеүе, әммә сюжеттең тулы һаҡланыуы менән әһәмиәтле. Сюжете ныҡ ҡыҫҡарып, ҡайһы бер мотив һәм эпизодтары ла үҙгәргән, бөтөнләй әкиәтләшкән ике варианты әкиәттәр томында баҫылды.— БХИ, Әкиәттәр, I, № 56, һәм 2, № 14.

[1] *Рәбиғелмөлөк* — баҫма варианттарҙа Мысыр батшаһы, исеме — Ғасим йәки Ғасим ибн Сафуан.

[2] Баҫма варианттарҙа — Йемен батшаһына.

[3] *Сөләймән батша* — «Буҙйегет» ҡиссаһына бирелгән 60-сы иҫкәрмәне ҡарағыҙ.

[4] *Йрән бағы* (йәки *Иранбаҡ, Ирәмбаг, Ирәм бағы)* — фольклорҙа бик йәмле бай урын, ҡала, ил.

[5] *Йәнкеләр* — баҫма варианттарҙа *зәңгеләр, зәнкиҙәр*, йәғни негрҙар, ҡара тәнле кешеләр.

[6] *Аллаһы тәғәләгә күп хикәйәттәр уҡый* — дөрөҫө «мөнәжәттәр» булырға тейеш. Ҡазаға ҡалған геройҙың тылсым эйәһенә йәки аллаға ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүе — фольклорҙа традицион күренеш.

[7] Бында эпизодтар тәртибе һәм ҡайһы бер деталдәр буталган. Ҡыҙ биреү эпизоды ҡиссаның баҫма варианттарында зәнкиҙәр батшалығында була. Үҙенең ҡыҙына кейәү итер өсөн зәнкиҙәр батшаһы Сәйфелмөлөк менән Сәғитте һуйҙыртмай. Ә эт башлы ҡыҙ (телдән һөйләнгән ҡайһы бер варианттарҙа *эт башлы, һыйыр аяҡлы* — БХИ, Әкиәттәр 2) — ҡиссала маймылдар тарафынан үҙҙәренең әҙәми зат батшаларына ҡатынлыҡҡа Этбаш ҡалаһынан алып бирелгән ҡыҙ. Зәңгиҙәр батшаһының ҡыҙы — шулай уҡ ғәҙәттән тыш йәмһеҙ: буйыһыны «манаралай», күҙҙәре «өҙәңгеләй», ә танауы юҡ: соҡор һымаҡ ике тишек кенә; Сәйфелмөлөккә матур күренер өсөн, йәнәһе, үҙенсә биҙәнгән була: сәс толомдарын арҡан менән үрә, ҡаш-күҙенә күмер менән һөрмә тарта, ҡап-ҡара биттәрен кирбес менән ышҡып ағарта һ. б. Әммә ҡиссаны телдән һөйләүсе был портретте тулы тасуирләй алмаған, фольклорға хас булғанса, дөйөм эпитет, риторик хөкөмдәр менән сикләнгән.

[8] Һуғышта үлгәндәрҙең балаларына пенсия түләү, хөрмәт күрһәтеү — боронғо хикәйәткә хәҙерге заман төшөнсәләренең килеп инеүен күрһәтеү яғынан бик ҡыҙыҡлы деталь.

# ҺҮҘЛЕК

**Бор. т.** — боронғо төркисә.
**Ғ.** — ғәрәпсә.
**Диал.** — диалект.
**Ҡаҙ.** — ҡаҙаҡса.
**Ҡыр.** — ҡырғыҙса.
**Монг.** — монголса.
**Т.** — торкисә.
**Төрк.** — төрөксә
**Ф.** — фарсыса
**Хәр.** — хәрби.

**Абау** — ҡартайыуҙан йәмһеҙләнгән йөҙ. М. Буранғолов менән Х. Ғәбитов был һүҙҙе «битте йыйырсыҡ баҫыу» тип аңлата. К. Улъябаев «теш төшөү» ти.
**Абыҙ** *ғ.*— белемле, уҡымышлы кеше.
**Ағыз** *бор. т.* — ауыҙ.
**Аҙыр** *ҡаҙ.*— ҡалҡыулыҡтарҙан торған ер.
**Аҙыра** *ҡаҙ.* — хужаһыҙ, етемһерән ҡалыу.
**Айҙа** — айбалта.
**Айеб** *т.* — ғәйеб.
**Айнаҡ, айнә** *ф.*— көҙгө; контекста тәҙрә аңлашыла.
**Аҡта** *ҡаҙ.* **аҡта ат** — бескән ат.
**Алас, алаш** *бор. т.* — Бында Урҙа мәғәнәһендә.
**Алатау** — теҙмә тау.
**Аң** *бор. т.* — йәнлек, йыртҡыс хайуан.
**Арҙа** — ике-өс йәшенә саҡлы эсәһен талап имеп йөрөгән тай йәки башмаҡ.
**Арман** *ф.* — 1. Теләк, ынтылыш; 2. Үкенеү, ҡайғырыу. 3. Изге хыял.
**Арманым юҡ** — үкенесем юҡ, үкенмәйәсәкмен.
**Армыт-армыт** — тармаҡ-тармаҡ.
**Арыз** *ғ.* — теләк, ынтылыш.
**Атан** *ҡаҙ.* — бестерелгән дөйә (контекста — айғыр дөйә).
**Ауа** *ҡаҙ.* — һауа.
**Аял** *ҡаҙ.* (*әйел*) — ҡатын.
**Аяулы** — ҡәҙерле.

**Бабһыҙ** — тәрбиәһеҙ, тәрбиәләнмәгән.
**Байман** — иркенлек, рәхәтлек; бәхет.
**Баҡсы** *ҡаҙ.* — сихырсы, им-том менән дауалаусы.
**Барас** — һунарсы эте, бурҙай.
**Бер вә бар** — алла.
**Бер кәмин** — исеме билдәһеҙ бер кеше.
**Берек** *т.* — ныҡ.
**Бихисап** *ғ.* — һанһыҙ, бик күп.
**Биһуш** *ф.* — һушһыҙ.
**Бостан** *ғ.* — баҡса.
**Бойөм** *ҡыр.* — иң кәрәкле нәмә.
**Буғыу** *ҡаҙ.*— йәшеренеү.
**Буйтеп** *т.* — былай (шулай) итеп.
**Буҡча** *т.* — муҡса.
**Булһыйы** *диал.* — булһа ине.
**Булъяу** *ҡаҙ.* — самалау, байҡау; әҙерләү.
**Буҫыу** — өркөү,ҡасыу,боҫоп ҡалыу.
**Бәлдеү** — йәйәне кирелә бирел тартыу.
**Бәпләп үҫтереү** — иркәләп, тәрбиәләп үҫтереү.
**Бәшәр** *ғ.*— кеше.

**Вафа** *ғ.* — һүҙҙә тороу, тоғролоҡ күрһәтеү.

**Геүаһ** *г.* — таныҡ, шаһит.
**Гидай** *ф.* **гәдай** — теләнсе, хәйерсе.
**Гәүер** — кафыр, башҡа дин кешеһе.

**Ғарыз** *г.* — Бер эш йәки хәл тураһында телдән йәки яҙып тейешле урынға еткереү; теләкте белдереү.
**Ғафил** *г.* — белмәй (һиҙмәй, абайламай) ҡалыу.
**Ғаян** *г.* — күренеп торған, ап-асыҡ.
**Ғил** *г.* — йәшерен башҡарылған эш, сер.
**Ғилаж** *г.* — әмәл, сара; дарыу, дауа.
**Ғинайәт** *г.* — ҡайғыртыусанлыҡ.
**Ғосса** *г.* **ғоссә** — ҡайғы-хәсрәт.
**Ғәжиз** *г.* — көс етмәйенсә аптырап ҡалыу.
**Ғәлә ғаҡлы** — бөйөк, зирәк аҡыллы.
**Ғәләйкәләү** — сәләмгә ҡаршы сәләм биреү.
**Ғәләт** *г.* — яңылыш, хата.
**Ғәрип** *г.* — 1. Тыуған-үҫкән илдән айырылып сittә йәшәүсе; 2. Ят, сит, таныш булмаған кеше.
**Ғәһет** *г.* **ғәһед** — 1. Йөкләмә; килешеү. 2. Өҫкә алған бурыс; вәғәҙә ителгән эш йәки әйбер. 3. Ант.
**Дад** *ф.* — 1. Туралыҡ, ғәҙеллек; 2. Ярҙам һорап саҡырыу; 3. Зар.
**Дарайлыҡ** — томбойоҡ һымаҡ үлән (һыу төбөндә үҫә).
**Даркар** *ф.* — кәрәкле.
**Дидар** *ф.* — йөҙ, бит, сырай **Дидарыма туймаған** — йөҙөмә ҡарап туймаған.
**Дик** *бор. т.* — кеүек, һымаҡ, шикелле.
**Дихайға** — бушҡа.
**Дияр** *г.* — «дар» (урын, ер, ил) һүҙенең күплек формаһы. **Был диярҙа**, йәғни был яҡта.
**Дәнәмә** *ҡаҙ.*— һис кем, һис нәмә.
**Дәрд** *ф.* — сир, ғазап.
**Дәүран** *ф.* — 1. Әйләнеш; 2. Эра, эпоха. **Дәүран һөрөү** — ғүмер итеү.
**Ейегеү** — серёп тарҡала башлау.
**Ейеү** — ашау.
**Емет** — ашамлыҡ.
**Еҫер** — етем, әсир, тотҡон.
**Жаду** *ф.* — сихырсы, күрәҙәсе.
**Жиһан** *ф.* — йыһан, донъя.
**Заң** *бор. т.* — закон, ғөрөф-ғәҙәт, йола.
**Зәкят** *г.* — ислам дине буйынса сауҙагәрҙәргә йыллыҡ кеременең 40-тан бере күләмендә һалынған йыллыҡ һалым.
**Зәргәр** *ф.*— Алтын-көмөштән төрлө нәмә эшләгән оҫта.
**Изен** *г.* — рөхсәт.
**Имәс** *т.* — түгел.
**Праҙа** *г.* — теләк, ынтылыш.
**Придеү** *ҡаҙ.* — салыу, киҫеү. **Муйыныма иридмәнегеҙ** — муйынымды салманығыҙ.
**Исел** *ҡаҙ.*— ҡыҙғаныс.
**Истәк** — башҡорт.

**Йөҙ башы** *хәр.* — йөҙ батырҙың етәксеһе, хәҙергесә —командире (сотник).
**Йөмлә** *г.* — бөтә, барлыҡ, һәммә.
**Йөрөк** *диал.* — йөрөүгә шәп, арымай торған.
**Йыйырып** — бер ҡәбиләнең ҡыҙҙатыпына фәрд (бер, бер бөртөк; яңғыҙ; айырым зат, шәхес, берәү) булған, шуның бер ағзаһы иҫәпләнгән ҡатын.
**Йылғыйлау** — ҡауырһындың һауала ҡыйғаслап, тибрәнеп төшөүе.

**Киҙәк** — сират.
**Киен** *т.* — «һуң», «буйынса», «арт» ярҙамсы һүҙҙәре урынында килә.
**Киен ҡайтты** — кире ҡайтып китте.
**Кик** *ҡаҙ.* — үс.
**Килтә** — зарар; **килтәсе** — зарар килтереүсе.
**Кимпер** *ҡаҙ.* — ҡортҡа, ҡарсыҡ.
**Келт** *ҡаҙ.* — асҡыс.
**Көң** *бор. т.* — ҡол.
**Көнөк** *бор. т.* — ҡатын ҡол, хеҙмәтсе.
**Көңрәү** *диал.* — көслө, моңло тауыш сығарыу.
**Күлек** *бор. т.* — артмаҡлы мал: ат, дөйә.
**Күсәм** *ҡаҙ.* **көсем** — юл башлаусы, юлбашсы.
**Күс** *бор. т.* — ырыу, халыҡ.
**Күс ярағы** — күсенеү кәстәрлеге.
**Күшә** *ф.* — урам.
**Кәр** *ф.* — ҡара эш, хеҙмәт.
**Кәүер** — гәүер, кафыр (ислам динендә булмаған кешеләр шулай аталған).
**Ҡадир** *г.* — көслө, һәр нәмәгә көсө етеүсе, булдыра алыусы.
**Ҡазый** *г.* — хөкөм итеүсе, судья.
**Ҡайтәйен** *бор. т.* — ҡайһылай (нисек) итәйем.
**Ҡайтеп** *бор. т.* — ҡайһылай (нисек) итеп.

**Ҡалау** *ҡаҙ.* — һайлау. **Ҡалағанымды бирерме?** — һайлағанымды, йәғни күңелемә оҡшағанды, теләгәнемде бирерме?
**Ҡалта** — бил ҡайышына (ҡаптырғаға) тағылған күн муҡса.
**Ҡамҡа** — ҡара ебәктән тышланып, ең остары һәм итәге ҡама менән уратылған тун.
**Ҡанша** *ҡаҙ.* — нисек, күпме.
**Ҡара** — мал; **йөҙ ҡараһын** — йөҙ баш малын.
**Ҡараҡ** *ҡаҙ.* **ҡарағым** — ҡәҙерлем, күҙ ҡарам.

**Ҡарсаҡ** — ҡарһаҡ, дала толкоһо.
**Ҡары** *бор. т.* — ҡарт, **ҡарылыҡ** — ҡартлыҡ.
**Ҡарыз** *ғ.* — үтескә алыу.
**Ҡатил** *ғ.* — үлтереүсе, һәләк итеүсе.
**Ҡасд** *ғ.* — яуыз ниәт.
**Ҡашҡа** — көсө һәм һүҙе менән абруй ҡаҙанған, алдын йөрөгән ир, батыр.
**Ҡисса** *ғ.* — ғибрәтле хикәйәт.
**Ҡоллау** — ҡолға әйләндереү.
**Ҡолмаҡ** *диал.* — ҡомалаҡ.
**Ҡолья** — архар тәкәһе.
**Ҡонандау** *диал.* — ҡонандай.
**Ҡор башы** (*ҡорбаш*) *хәр.* — ғәскәр башлығы, полководец.
**Ҡулдыйы** *диал.* — ҡулда ине.
**Ҡураҡ** *диал.* — өйөр айғыры.
**Ҡурат** *диал.* — нуҡта кейҙерелмәгән (өйрәтелмәгән) йылҡы.
**Ҡусҡар** — һарыҡ тәкәһе.
**Ҡустар** *ҡара:* ҡустау.
**Ҡустау** *ҡаҙ.* — хуплау, яҡлау.
**Ҡыҙау** — тубал.
**Ҡынау** *ҡаҙ.* — ҡыҫып бәйләү.

**Ҡыуға** — оҙон үҫкән нәҙек ағас.
**Ҡәҙәм** *ғ.* — аяҡ. **Ҡәҙәм баҫыу** — аяғүрә баҫыу.
**Ҡәүм** *ғ.* — 1. Ырыу, нәҫел ҡәбилә, халыҡ. 2. Төркөм.
**Лаҡ** *диал.* — ылаҡ, кәзә бәрәсе.
**Маҡһынмау** *диал.* — һанға һуҡмау.
**Маша алла** *ғ.* — алла теләһә.
**Мең башы (меңбаш)** *хәр.* — мең батырҙың етәксеһе, хәҙергесә командире (тысячник).
**Миҙә** *ф.* — тәм, тат, ләззәт.
**Миһман** *ф.* — ҡунаҡ.
**Моҙ йәки моз** *диал.* — боҙ.
**Монаят** — мал-тыуар, бөтә милек.
**Мула** *ҡаҙ.* — ҡәбер.
**Мәған** *ҡаҙ.* — миңә.
**Мәғбут** *ғ.* — бәхетле; башҡаларҙы ҡыҙыҡтырған хәл.

**Мәғдән** *ғ.* — ер аҫты байлыҡтары.
**Мәғриб** *ғ.* — көнбайыш.
**Мәзмүн** *ф.* — йөкмәткә.
**Мәканлы мәканына** *ғ.* — (һәр нәмәне) үҙ урынына.
**Мәлик** *ғ.* — батша, солтан.
**Мәне** *т.* — асылы.
**Мәржан** *ғ.* — ваҡ ынйы, мәрйен.
**Мәртәбә** *ғ.* — юғары дәрәжә, чин.
**Мәрүәрид** *ф.* — ынйы.
**Мәс йәки мас** — иҫерек. **Мәс ҡылыу** — иҫертеү.
**Мәсләк** *ғ.* — донъяға ҡараш, тотҡан юл, принцип.

**Надир** *ғ.* — һирәк осрай торған, ғәҙәттән тыш.
**Найза** *ф.* **нәйзә** — һөңгө.
**Налиш** *ф.* — ыңғырашыу, үкһеү, үтенеп илау.
**Намә** *ф.* — хат, китап.
**Нан** *т.* — икмәк.
**Нар** *ҡаҙ.* — бер өркәсле дөйә.
**Наһыр** *диал.* — теләк, һорау, өмөт.
**Нигмәт** *ғ.* — байлыҡ, муллыҡ.
**Нитәйен** *бор. т.* — ни эшләтәйем.
**Нөгөр, нөгәр,** *монг.* **нөхәр, нүкәр** — хандың, батырҙың (нойондоң) көрәштәш юлдашы; ҡорҙашы (дружинник), хеҙмәтсеһе.
**Нырҙашыу** — ҡуй-һарыҡтарҙың бөтөн көтөүе менән ҡурҡып баҡырыуы.
**Нәғып, нәҡып** — ни ҡылып.
**Нәмирә** — ейәнсәрҙең балаһы.
**Нәпә** *диал.* — нәпәй, оләсәй.
**Нәркәс** *ф.* — аҫыл гөл. «Аҡбуҙат» поэмаһында Шүлгән батшаһының ҡыҙы.
**Нәфҡә (нәфәҡә,** *ғ.*) — етемдәргә бирелгән аҡса, риҙыҡ.

**Обал** *бор. т.* — гонаһ.
**Орыс** *бор. т.* — һуғыш.
**Остат** *ғ.* — остаз, уҡытыусы.

**Өләң** *ҡаҙ.* — йыр, шиғыр.
**Өммәт** — бер пәйғәмбәрҙең дингә өндәгән халҡы. **Мөхәммәт өммәте** — Мөхәммәтте танып, ислам динен ҡабул иткән кеше.
**Өмор** *ҡаҙ.* — ғүмер.
**Өрөм-урпаҡ** *бор. т.* — кейем-һалым.
**Өтрөк** *ҡаҙ.* — ялған.

**Пара-пара** *ф.* — киҫәк-киҫәк.
**Пол** *ф.* **пул** — аҡса. Бында табыш, килем мәғәнәһендә.
**Пулисеҙ** — аҡсаһыҙ, бушҡа (һатыр).

**Саилсы** *ғ.* — һораныусы, теләнсе.
**Сай** *бор. т.* — ҡороған йылға үҙәне.

**Сайман** *ҡаҙ.* — тимер кейем. Сайманды батыр — тимер кейемле (кейгән) батыр.
**Сайыл** *диал.* — күңел асып йөрөү.
**Сайлау** *диал.* — биҙәү, матурлау.
**Сасу** *ҡаҙ.* — аптырап ҡалыу.
**Сауға** *ҡаҙ.* — һунарҙан алып ҡайтып, бүләк итеп бирелгән йәнлек.
**Сауын әйтеү** *т.* — туй булаһын алдан хәбәр итеү.
**Сахаба** *г.* — Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең үҙен күргән замандаштары.
**Серт** *ҡаҙ.* — нәҙер, әйткән һүҙ, уй-теләк.
**Сирт** *ҡаҙ.* — намыҫ.
**Солтанат** *г.* — 1. Солтанлыҡ, батшалыҡ; 2. Мөһабәтлек, олпатлыҡ.
**Сор** *ҡаҙ.* — аҡ йөҙлө.
**Сөаль** *г.* — һорау.
**Сөс (ө)** *диал.* — силсә, сифилис.
**Сумбат** *бор. т.* — һомғоллоҡ, матурлыҡ.
**Сур** *г.* — борғо, сигнал.
**Сура** — ир кеше.
**Сурлы** — ҡарғалған, хур күрелгән.
**Сүйтсә дә** *ҡаҙ.* — шулай итһә лә.
**Сыҡыл** *бор. т.* — рухи йәберләнеү; әхлаҡи тартыныу, оялыу.
**Сәған** *бор. т.* — һиңә.
**Сәләмнамә** — сәләм хаты.
**Сән** *бор. т.* — һин.
**Сәргәрдан** *ф.* — аптырап йөрөүсе, башы әйләнгән.
**Сәхиб ямал** *г.* **сәхиб** — эйә, хужа; **ямал (жәмал)** — матурлыҡ, гүзәллек.

**Табиб** *г.* — врач, доктор.
**Тағ** *бор. т.* — тау, ҡалҡыулыҡ; тәхет.
**Там** *т.* — ҡәбер өҫтөнә эшләнгән ҡоролма (надгробие).
**Тернәксел** — тормошто юнләргә шәп, юнсел кеше.
**Тик (тикле)** — затлы.
**Тикһеҙ** — затһыҙ.
**Тикә** *ф.* — бер ҡабым, бер һыныҡ.
**Тимер һауыт** — торҡа.
**Тимә бер** — теләһә кем.
**Торомтай** — тоҫо-һыны ҡарсығаға оҡшаған, әммә унан бәләкәйерәк йыртҡыс ҡош. Турғайҙан башҡаны тибә алмай.
**Торон** — баланың балаһы, ейән.
**Тоҫоу** *диал.* — ҡамау, дошман юлына кәртә һалыу (заграждение ҡороу).
**Төйә**, тәүә, *диал.* — дөйә.
**Туп (туб)** — төркөм.
**Түркенсәк** — ҡәрәкһә лә, кәрәкмәһә лә үҙенең тыуған ауылына, атаһы йортона йыш ҡайтҡан ҡатынға әйтелә.
**Түш булыу** — түшкә түш, йәғни пар килеү.
**Тышҡан** *ҡаҙ.* — сысҡан. **Ҡара тышҡан** — һуҡыр сысҡан.
**Тәбер** *ф.* — боронғо ҡорал: оҙон һаплы балта.
**Тәбәрәк (дөрөҫө — тәбәррек)** *г.* — хуплау.
**Тәдбир** *г.* — тейешле сара.
**Тәкбир** *г* — ололау.
**Тәҡуа** *г.* — дин ҡушҡанды ғына эшләү диндар булыу.

**Уған** *бор. т.* — уға, шуға табан.
**Уграшыу** *төрк.* — осрау
**Уҡмау** *т.* — ишетмәү. **Һүҙең уҡмайҙы** — һүҙең ҡолағыма йоҡмай.
**Уп-туп килеү** — баш-баштаҡланыу.
**Устау** *ҡаҙ.* — тотоу.
**Ут** *бор. т.* — үлән.
**Утау** *ҡаҙ.* — яңы айырылып сыҡҡан ғаилә (ул менән килен) өсөн ҡоролған тирмә.

**Үнгән** — батырлыҡ.
**Үңәр** — кейәү егете.

**Фидә** — фиҙа, ҡорбан булыу.
**Фәтә** *г.* — фатиха (доға ҡылыу, ризалыҡ биреү) һүҙенең ҡыҫҡартып әйтелеше.
**Фәхри** *г.* — маҡтаулы, хөрмәтле.

**Хазир** *г.* — күҙ алдында тороусы.
**Хаҡ тәғәлә** *г.* — алла.
**Хилүәт** *г.* — аулаҡ, тыныс.
**Хитап** *г.* — берәүгә төбәп һөйләү, өндәшеү, мөрәжәғәт итеү.
**Ходая** *г.* — эй хоҙай!
**Хәлил** *г.* — дуҫ.

**Һарағи** — һарына.
**Һауыр** — оса ите.
**Һеүлек** *диал.* — һөлөк.
**Һоңғау** *диал.* — самалап, ҡул һелтәп күрһәтеү.
**Һәмтерәү** — илдән айырылып ихтыяжда ҡалыу, зар-интизар булыу.

**Чар** *г.* — дүрт.

**Ширләү** *ҡаҙ.*: **шир** — ҡайғы, **ширләйен** — ҡайғырайым (ҡайғы йырын йырлайым).
**Шундиҡ** *бор. т.* — шундай уҡ.
**Шыраҡ** *ҡаҙ.* — яҡтылыҡ биреүсе (ҡояш), яҡтылыҡ. **Шырағым** — иркәләп әйтә торған һүҙ.

**Шәңгәл** *ҡаҙ.* — йыртҡыс ҡош тырнағы, типкеһе.
**Шәһир** *ғ.* — атаҡлы, мәшһүр.

**Ыу** — ағыу. **Илдең ыуы** — илдең ҡороуы, бөтөүе.

**Эргә** — нигә, нигеҙ.
**Әбна (ибн-әбна)** *ғ.* — балалар.
**Әкә-шәшә** *ҡаҙ.*— ата-әсә.
**Әлүидағ** *ғ.* — хуш, һау бул!
**Яд** *ф.* — иҫтәлек.
**Яҡ** *бор. т.* — ян.
**Ядин** *т.* — ялҡын.
**Ямал (Жәмал** *ғ.*) — матур, гүзәл.
**Яптыҡ** *бор. т.* — кәрәк-яраҡ.
**Ярҡырау** *т.* — ялтырау.
**Ярлыҡ** *т.* — приказ; указ.
**Яса** *бор. т.* — яс: зыян (күреү); траур (кисереү).
**Яу башы** — яу (ғәскәр) башлығы.
**Яу күсе** — күс һымаҡ ябырылып килгән дошман ғәскәре; **не** боронго телдә төшөм килеш ялғауы.

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


| | |
|---|---|
| Төҙөүсенән | 5 |
| Башҡорт халыҡ эпосына бер ҡараш | 6 |


### Батырҙар һәм мәшһүр шәхестәр тураһында ҡобайырҙар, хикәйәттәр


| | Текст | Аңлатмалар |
|---|---|---|
| Иҙел йорт | 41 | 300 |
| Мамай хан хикәйәте | 44 | 301 |
| Мәргән менән Маянһылыу | 45 | 301 |
| Тарғын батыр | 57 | 302 |
| Тарғын менән Ҡужаҡ | 60 | 302 |
| Ек Мәргән | 63 | 302 |
| Ҡыпсаҡ егете менән башҡорт ҡыҙы | 66 | 303 |
| Мораҙым менән Буһҡын | 67 | 303 |
| Сура батыр | 69 | 303 |
| Сүкем батыр | 70 | 303 |
| Баязит батыр | 71 | 304 |
| Аҡшам батыр | 72 | 304 |
| Көбәк батыр | 73 | 304 |
| Түлгән батыр | 74 | 304 |
| Старшина Мәсәғүт | 74 | 304 |
| Ҡарас менән Аҡша | 75 | 305 |
| Билал менән Дүсән | 78 | 307 |
| Ерәнсә сәсән | 80 | 307 |
| Байыҡ Айҙар сәсән | 82 | 307 |
| Юлай менән Салауат | 92 | 308 |
| Салауат батыр | 124 | 310 |
| Тәүеш Мәргән | 124 | 310 |
| Бурангол ҡашҡа | 125 | 310 |
| Әсәнән тыуған ир-егет | 126 | 310 |
| Ялп-йолп иткән яңғыҙ ябалаҡ | 127 | 310 |
| Перовский йәйләүе | 127 | 310 |

## Әйтештәр


| | | |
|---|---|---|
| Аҡмырҙа сәсән менән Ҡобағош сәсәндең әйтешкәне | 131 | 310 |
| Мәхмүт сәсәндең йомағы, уға үҙенең яуабы . . . | 137 | 313 |
| Ҡобайыр менән йомаҡ әйтешеү . . . . . . . . | 139 | 313 |
| Ике сәсән . . . . . . . . . . . . . . | 140 | 313 |
| Әйтеш йомаҡтар . . . . . . . . . . . . | 141 | 313 |
| Бер тигәс тә ни яман? . . . . . . . . . . | 142 | 313 |
| I вариант . . . . . . . . . . . . | 142 | 314 |
| II вариант . . . . . . . . . . . . | 143 | 314 |
| III вариант . . . . . . . . . . . . | 144 | 314 |
| Һары балды кем эсер? . . . . . . . . . . | 145 | 314 |
| Һары бал . . . . . . . . . . . . . . | 145 | 314 |
| Һары бал (икенсе вариант) . . . . . . . . | 146 | 315 |


## Тыуған ил тураһындағы ҡобайырҙар


| | | |
|---|---|---|
| Ете ырыу . . . . . . . . . . . . . . | 149 | 315 |
| Ай Уралым, Уралым . . . . . . . . . . | 153 | 315 |
| Иҙел ер . . . . . . . . . . . . . . | 156 | 316 |
| Урал тигән илем бар . . . . . . . . . . | 157 | 316 |
| Уралын ятҡан Уралда . . . . . . . . . . | 158 | 316 |
| Ай Уралтау, Уралтау . . . . . . . . . . | 159 | 316 |
| Ил тигәндең кеме юҡ . . . . . . . . . . | 162 | 316 |


## Дидактик ҡобайырҙар (әйтемдәр)


| | | |
|---|---|---|
| Ишет быны ҡартыңдан . . . . . . . . . . | 164 | 316 |
| Бейек тауҙың үлгәне... . . . . . . . . . | 164 | 316 |
| Ил ҡәҙере — ир ҡәҙере . . . . . . . . . | 166 | 316 |
| Был донъяла тиңлек юҡ . . . . . . . . . | 167 | 316 |
| Йыраү һүҙе . . . . . . . . . . . . | 169 | 317 |
| Үҙән күрке тал булыр . . . . . . . . | 169 | 317 |
| Атҡыҙай йөрөк уҡ булмаҫ . . . . . . . | 170 | 318 |
| Өрөм-урпағын һорамай . . . . . . . . | 170 | 318 |
| Яҡшы аға ил көтһә . . . . . . . . . | 171 | 318 |
| Елберҙәге булмаһа . . . . . . . . . | 171 | 318 |
| Аҙыр ҙа аҙыр алатау . . . . . . . . | 171 | 318 |
| Уҙамандар, ағалар! . . . . . . . . . . | 172 | 318 |
| Миңһеҙ ҡара ҡуйҙар бар . . . . . . . | 172 | 319 |
| Айҙы беленер көндән һуң . . . . . . . | 172 | 319 |
| Туп эсендә телмәрҙе . . . . . . . . . | 173 | 319 |
| Тоғро һүҙ . . . . . . . . . . . . . | 173 | 319 |
| Әтәлге ҡош маҡтанһа . . . . . . . . | 173 | 319 |
| Халыҡ гәмен кем йыйыр? . . . . . . . | 174 | 319 |
| Яҡшы аҙамат менән кире аҙамат . . . . . . | 174 | 320 |
| Яңғыҙ иргә ял булмаҫ . . . . . . . . | 175 | 320 |
| Ағай-энеле алтау . . . . . . . . . . | 175 | 320 |
| Эй Иҙел йорт, Иҙел йорт . . . . . . . . | 175 | 320 |

| | | |
|---|---|---|
| Ярлы ла ярлы тимәгеҙ | 175 | 320 |
| Ат ҡәҙере белмәгән | 176 | 320 |
| Яҡшы әҙәм менән яман әҙәм | 176 | 320 |
| Ололарҙы ололау | 176 | 320 |
| Батыр егеттәргә атай-олатайҙар һүҙе | 177 | 320 |
| Ирмеп тигән ир-батыр | 177 | 320 |
| Арғымаҡтың яҡшыһы | 177 | 320 |
| Яман яҡшы булалмаҫ | 178 | 320 |
| Ир даны — ил даны | 179 | 320 |
| Был донъяпан кем ҡалыр? | 179 | 320 |
| Ҡараса тыумай көҙ булмаҫ... | 179 | 320 |
| Йырсы ла булган йырсының... | 180 | 320 |
| Тыуган-үҫкән ерҙәр буҙ булыр... | 180 | 320 |
| Ҡыштырҙаҡ япраҡ һары уҫаҡ... | 181 | 320 |
| Арғымаҡ арыҡ булды тип... | 181 | 320 |
| Ял-ҡойроғо матур тип... | 181 | 320 |
| Атың йөрөшлә булһа... | 182 | 320 |
| Нимәнән нимә артыҡ? | 182 | 320 |
| Ни менән нимә була? | 183 | 320 |
| Мал ни өсөн кәрәк? | 183 | 320 |
| Кем ҡәҙерен кем белә? | 184 | 320 |
| Яңғыҙ әҙәм ғәрип булыр... | 184 | 320 |
| Ҡурҡаҡ ирҙән ни сыгыр? | 185 | 320 |
| Һөнәрле менән һөнәрһеҙ | 186 | 321 |
| Үлгән менән бөлгән | 186 | 321 |
| Бур байыҡмаҫ... | 187 | 321 |
| Ямаплыҡҡа бармагыҙ! | 187 | 321 |
| Әсә йөрәге | 188 | 321 |
| Яҡшы ҡатын менән яман ҡатын | 190 | 322 |
| Беренсе вариант | 190 | 322 |
| Икенсе вариант | 190 | 322 |
| Һә-лә-ләй... | 191 | 322 |
| Биҙәрләнгән бай сәсәк... | 191 | 322 |
| Заманга заман уралган... | 192 | 322 |
| Алланың ҡөҙрәте шундайҙыр... | 192 | 322 |
| Мулла тураһында | 193 | 322 |
| Бай менән ярлы | 193 | 322 |
| Ир-егеттең ғүмере | 194 | 322 |
| I вариант | 194 | 323 |
| II вариант | 195 | 323 |
| III вариант | 195 | 323 |
| IV вариант | 196 | 323 |
| V вариант | 197 | 323 |
| VI вариант | 197 | 323 |
| VII вариант | 197 | 323 |
| VIII вариант | 198 | 323 |
| IX вариант | 198 | 323 |

Мөхәббәт тураһында хикәйәттәр, ҡиссалар


| | | |
|---|---|---|
| Әл-ҡисса Буҙйегет . . . . . . . . . . . . . . | 201 | 324 |
| Буҙйегет . . . . . . . . . . . . . . . | 256 | 327 |
| Йософ менән Зөләйха . . . . . . . . . . . . | 270 | 331 |
| Таһир менән Зөһрә (Теләкәева Рәхилә варианты) . . | 272 | 332 |
| Таһир менән Зөһрә (Булатов Зәкәриә варианты) . . | 275 | 322 |
| Таһир менән Зөһрә (Ғарифуллин Сабирйән варианты) | 277 | 332 |
| Сәйфелмөлөк . . . . . . . . . . . . . . | 280 | 333 |
| Аңлатмалар . . . . . . . . . . . . . . | 300 | 300 |
| Һүҙлек . . . . . . . . . . . . . . . | 334 | 334 |

**БАШКИРСКОЕ НАРОДНОЕ ТВОРЧЕСТВО**

**ЭПОС**

*(на башкирском языке)*

Редакторы М. С. Игебаева
Рәссамы В. Д. Дианов
Тышлыҡ рәссамы А. А. Холопов
Художество редакторы В. П. Ковалев
Техник редакторы Г. К. Зигангирова
Корректоры Н. Ә Улъябаева

ИБ № 1719

Наборға бирелде 6. 10. 81. Баҫырға ҡул ҡуйылды 15. 02. 82. Ҡағыҙ форматы $60\times90^1/_{16}$. Ябай яңы гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды. Тип. ҡағыҙы № 2. Шартлы баҫма таб. 21,5. Учет.-изд таб. 21,88. Шартлы буяу отт. 21,75. Тиражы 5000 экз. П06401. Заказ № 305.
Хаҡы 2 һум 10 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18.
Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул. Советская, 18.
Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетенең Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекте, 2.

*Башҡорт халыҡ ижады йыйынтығы СССГ Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙерләнде һәм институттың ғилми советe тарафынан баҫырға раҫланды.*